**Зигат Султанов**
**Йыһат Солтанов**

# СОЧИНЕНИЯ
# В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

# ӘҪӘРҘӘР
# УН БИШ ТОМДА

# ТОМ
# I

# ГОДЫ -- ВСПЛЕСКИ ДУШИ
# ЙЫЛДАРЫМ ҺӘМ МОҢДАРЫМ

***Стихи***
***Шиғырҙар***

Издательство
“КИТАП”
имени Зайнаб Биишевой
УФА -- 2012

Зәйнәб Биишева
исемендәге
“КИТАП”
нәшриәте
ӨФӨ -- 2012



## Солтанов Й.Ә.

Әҫәрҙәр ун биш томда, том I. Йылдарым һәм моңдарым. Шиғырҙар. — Өфө: Китап.— 527 бит.

Шағирҙың төрлө йылдарҙа төрлө кисерештәр менән һуғарылған һәм күбеһе хәҙер тәүбашлап донъя күрәсәк әҫәрҙәре уларҙың яҙылыу даталарына бәйле хронологик тәртиптә теҙеп бирелде. Дәһшәтле һәм ҡатмарлы егерменсе быуаттың шағир йөрәген ярып үткән аһәңдәре төрлө быуын уҡыусыларының да күңелен тибрәндерерлек зауыҡлы ла, һағышлы ла һәм шулай уҡ фәһемле лә моңдар булып ағыла.

Китапты балалар өсөн яҙылған «Тәнәйҙәргә «мәмәй»ҙәр тигән бүлек ослай.

## *1951*

*************************




### Ерем

Тыуған ерҙең йылы иңендә
Ең һыҙғанып эшләү бәхетен
Биргән яулап беҙгә атайҙар,
Йыға һуғып батша тәхетен.

Беҙҙең өсөн улар ҡан ҡойған.
Шуға ла шул бөгөн сәскәләр
Иҫке окоптарҙың йөйөндә
Ҡыҙыл ҡанға ҡанап үҫәләр.

Беҙҙең өсөн, ҡайҙа барһаҡ та,
Ғәзизерәк ер юҡ был ерҙән.
Сөнки ғәзиз ата-бабаның
Кендек ҡаны бында түгелгән.

Тыуҙыҡ алып ошо ер кәрен.
Ошо ерҙең имдек имсәген.
Уландарҙың ҡанлы кендеген
Ошо ергә бәйләп китәбеҙ.

1951.

### Эш

Күнектем мин иртә йәштән үк
Түгеп хәләл күкрәк көсөмдө.

Үпһәм ерҙе, ҙурлап, эштән һуң,
Ерем һөйҙө нурлап йөҙөмдө.

Супыр-супыр тирем аҡҡандыр
Маңлайымдан эш ҡыҙыуында...
Йөрәк әммә дәртле ҡаҡҡандыр,
Ләззәт иткәндер ыҙаһын да.

Эште һөйҙөм, эштән биҙмәнем, —
Ҡалъя өмөт итмәнем елдән.
Көрәшемдең ғәҙел бизмәне
Эш тауҙарын йөкмәтте көн дә.

Үтте шатлыҡ күпме елкетеп,
Көтә шатлыҡ күпме алдымда!
Илем ҡушһа, изге йөк итеп,
Күтәрермен Урал тауын да!

1951.

## Бойҙайым

Бойҙай сәстем баҫыу тултырып,
Уңыр микән минең бойҙайым?
Башаҡ диңгеҙендә тулҡынып
Көлтәләрмен микән көҙ айын?

Һаҡмар еле, һирпеп тиремде,
Урышырмы алтын биләмде?
Их, был юлы бойҙай ҡырыма
Килә алмам, килалмам инде!..

Йөрәк тоя: тиҙҙән китәсәк
Йәш башҡайым алыҫ, сит ергә.
Ә теләк ҙур, шундай теләк ҙур
Уңышымды урып китергә!

Ҡала ҡырым, ҡала йырҙарым —
Олаға баш хәтәр яҡтарға:
Мылтыҡ тотоп, көн-төн ут йотоп
Ил сиктәрен кәрәк һаҡларға...

Ә шулай ҙа ҡала күңелем,
Күңелемә һыйған киң илем.
Дауылдарҙа башым эйелмәҫ,

Һәм бөгөлмәҫ тура-төҙ билем!

Юҡтап мине иҫһен таң еле,
Тулҡынланһын алтын бойҙайым.
Уны имен урып алырға
Насип итһен илгә Хоҙайым!

Айырылам тыуған еремдән,
Ағай-эне, бәхил булығыҙ.
Аҡ теләктәр теләп үҫтергән
Бойҙайымды минең урығыҙ.

1951.

## Ер улы

Ер улы мин!
Ата-бабаларым
Ошо ерҙә тыуып үҫкәндәр.
Йөрөһөн, тип, йөкмәп, --
Ер яҙмышын
Кендегемә бөрөп киткәндәр.

Ер улы мин.
Ерҙән һулыш алып,
Тарттым көнгә тере баҫыуҙы.
Талып, алйып донъя йоҡлағанда
Иркәләп мин тупраҡ услағанда,
Һөйөнөп ер, йылы яҙ тыуҙы.

Ерҙәй ҡара хәләл икмәгемде
Тиргә мансып ашай инем мин.
Кис ултырып тоноҡ Ай аҫтында,
Өҙөк мисәүҙәрҙе, еп моронлап,
Ялғай инем, төрән ҡайрай инем,
Сабатамды ямай инем мин...

Үтте осор...
Илай-илай йылдар
Бураҙнаға ҡолап ҡалдылар.
Тупрағыма һеңгән тирем, ҡаным,
Йәшнәр яҙға, күҙҙәремдән шытып,
Ҡусҡыл ужым булып ҡалҡтылар!

Тик
Ер тертләй,
Ерҙән хәүеф китмәй —
Баш ҡалҡыта иблес ҡолдары.
“Фюрер” шәүләһенә доға ҡылып,
Ужымдарҙы ерҙән ҡыймаҡ булып,
Бураҙнама һона ҡулдарын.

Бураҙнаға
Бойҙай урынына
Бомба яуа ҡайһы яҡтарҙа.
Ер улына
Ерен кешелектең
Ҡуша заман бөгөн яҡларға!

Фаш иттертеп
Фашист фетнәләрен,
Күкрәгемдән күкрәй Ер дауы.
Ер улының
                утә йөрәгенән
Ҡитғаларҙың һулҡып һыҙлауы.

Беҙҙең йөрәк
                бөгөн Ергә терәк —
Яу барғанда шартлап ярылмаç.
Фашизмдың шаҡшы албаçтыһын
Бырғытыр Ер, һелкеп яурындан!

Ер улы мин —
Йәшел бишегемә
Өҙәремһеҙ һаҡҡа ҡуйылған.
Планетаны йолор өсөн уттан,
Һул ҡулымда һабан һабын тотам,
Ҡыйғыр ҡылыс ялтлай уңында!

30 — 31.07.1951.

## Өндәшәм

Йыһан арбап аҡкан нурға ҡарап,
Йондоҙҙарҙан шашып көнләшәм.
Күңелдәргә ап-аҡ нур тулһын, тип,
Кешеләрем, һеҙгә өндәшәм.

Ташып барған ярһыу хистәремде
Алтын ижау менән өләшәм.
Аҡ күгеңде ап-аҡ көн йыуһын, тип,
Тыуған илем, һиңә өндәшәм.

Ватанымдың яҡлап яҡты көнөн,
Ҡыйғыр ҡылыс менән тиңләшәм.
Урталыҡҡа Хаҡлыҡ ҡуйылһын, тип,
Алты ҡитғам, һеҙгә өндәшәм.

Ҡуш усыма һалып Ҡояшымды,
Дүрт офоҡҡа орлоҡ-йыр сәсәм.
Сәскәнеңде имен урып ал, тип,
Ғәзиз Ерем, һиңә өндәшәм.

1951.

1953

************************




## Беҙҙең әсәйҙәр

Һуғыш өсөн тулғап тапмайҙыр
Балаларын ғәзиз әсәләр.
Әсә йәненән бит донъяла
Тормош гөлө генә йәшәрә.

Изге нәфрәт атып тетрәйҙәр,
Һуғыш уты сыҡһа, әсәйҙәр.
Сөнки улар ерҙә тыныслыҡ
Сәскә атҺын өсөн йәшәйҙәр.

Уландарын ләкин оҙата
Һалдат итеп беҙҙең әсәйҙәр.
Шул һалдаттар ғәзиз еркәйҙе
Афәттәрҙән сөнки арсайҙар.

1953.

## Диңгеҙҙән хат

Таң елдәре туған тауҙарҙан
Талғын иҫеп хәбәр килтерә.

Уралымдың күреп һынҡайын,
Төштәремдә йәнем тилерә.

Һалҡын диңгеҙ һыуы баҫалмай
Йөрәгемдең янып ярһыуын.
Үҙәккәйем өҙөлөп һағынам
Ауылымдың боҫло баҫыуын.

Шаулап тиҙҙән йәмле яҙ килер,
Япраҡ ярыр йырлап ағастар.
Шул саҡ йәнем яҙғы һабанға
Һеҙҙең менән сығыр, яҡташтар!

Һеҙҙең менән услап сәсермен
Тос бөртөгөн алтын бойҙайҙың.
Ә кистәрен ҡушылып йырлармын
Шат йырына туған ҡыҙҙарҙың.

Һеҙҙең менән бергә, мин бергә,
Диңгеҙҙәрҙә гиҙеп йөрөһәм дә.
Сөнки йөрәк хисен еремдең
Йөрөтәмен йөрәк эргәмдә.

1953.

## Пүлә

*(аҡ шиғыр)*

Хаҡлыҡ көбәгенән сорғолған
пүләмен мин! Шуға белмәйем
ҡыңғырлыҡты, яҙа ярыуҙы.
Осраған һәр ҡаршы-ҡараны
үтәм тишеп... Төндәр, бурандар
түгел кәртә! Тура юлыма
торһа ҡарғып ҡай саҡ дуҫтарым,
уларға ла һалам һәләкәт...
пүләмен шул... Эстән йөрәгем
илаһа ла ғәфү ялбарып...

Осоп барып ауған пүләләй
хәлһеҙләнеп бер мәл ауырмын
көнөм еткәс... Шунда кешеләр
бирер баһа ярған юлыма:

бик йыш унда әгәр тап булһа
дошман һөлдәләре — маҡтарҙар,
дуҫтарҙыҡы ятһа күберәк —
ләғнәтләрҙәр... Әгәр булмаһа
дуҫ заты ла, дошман заты ла, —
бушлығына күктең атылған
бушлыҡ итеп мине һанарҙар,
ҡалырмын тик ҡурғаш хаҡына...

1953.

## Хәрби моряктар

Алһыу таңдар һыҙылып атҡанда,
Тулҡындарын диңгеҙ ҡаҡҡанда

Походҡа сығалар моряктар.
Моңайып алалар йөрәктәр...

Хәтерләйҙәр тыуған яҡтарын,
Һөйгәндәрен, бала саҡтарын,

Баҫыуҙарҙа һабан һөргәнде,
Ике норма көн дә биргәнде.

Уралдағы шөңгөр йылғалар,
Украинала бешкән алмалар

Һәм шифалы Ҡырым һауаһы,
Киң Себерҙең ҡуйы тайгаһы

Беҙҙең менән Балтик буйында
Күсеп йөрөгәндәй тойола...

Ҡояш байыймы, таң атамы,
Олой дауыл, ямғыр яуамы,

Ҡаҡмай керпек, зәңгәр диңгеҙҙә
Беҙҙең менән бөтөн ил гиҙә...

Ярып төндө балҡый маяҡтар.
Күҙ йоммайҙар хәрби моряктар.

18.11.1953.

## Матрос хәтерләүе

Бер гүзәл көн күҙем алдында:
*Уның* менән Һаҡмар буйында
Гиҙҙек етәкләшеп... Шул ваҡыт
Елкендерҙе сикһеҙ сер-шатлыҡ —
Донъя-Ғаләм тик икебеҙгә
Баға төҫлө тойолдо беҙгә…
Аҡты Һаҡмар, алҡып һыуҙарын,
Тирҙе былбыл “сут-сут” йырҙарын...

Тәүге йәнде тәүге ҡат үптем
Күкрәгемә ҡыҫып мин был көн
Һәм һөйгәнем, ҡарап күҙемә,
Әйтте: “Көтәм! Әйлән тиҙ генә”...

Нишләй икән инде Гөлйөҙөм,
Онотманы микән шул һүҙен?
Иңдәренә әллә яттарҙы
Таяндыртып, борҙо Һаҡмарҙы?..

Мин — флотта, янам гел утта...
Гөлйөҙөмөм дәме ут йота?..

Көт, Һаҡмарым, көтһәң — ҡайтырмын,
Һыуҡайыңдың тәмен татырмын.
Түҙ, гүзәлем, түҙ — ҡауышырбыҙ,
Йәйғорланыр ут-һағышыбыҙ...

15.10.1953. Таллинн.

## Тыныслыҡтың торам һағында

Малай саҡта, ауыл яңғыратып,
“Һуғыш уйын” уйнай торғайныҡ.
“Их, беҙҙең дә ысын мылтыҡ булһа!” —
Тип бик сәмле уйлай торғайныҡ.

Пугач-көбәк көйләп, шырпы сөйләп
Ҡоймаларға ата инек беҙ.

Баҡсаларҙы һөжүм итеп баҫа,
Кәртәләрҙе вата инек беҙ.

Менелмәгән лапаҫ ҡалдырманы
Сепейләнгән беҙҙең тәпәйҙәр.
“Сәсрәп киткер һуғыш суҡмарҙары!” —
Тиҙәр ине ҡай саҡ әбейҙәр...

Бына бөгөн хәрби флотта мин,
Автоматы илдең — ҡулымда.
Малай саҡтың дары мөхәббәте
Әллә ниңә юҡсы уйымда...

Бер кемгә лә килмәй һис атаһым,
Һис нәмәне килмәй ватаһым.
Һағынамын көллө ер йөҙөнә
Дуҫлыҡ ҡояшының ҡалҡаһын...

Кәрәк түгел кеше ере беҙгә, —
Үҙ еремдең торам һағында.
Дошман әммә булһын минән абай:
Атасаҡмын, илгә ҡағылһа!

18.11.1953. Таллинн.

## Моряк һүҙе

Ҡай берәүҙәр әйтә: “Һеҙ — моряктар,
Диңгеҙҙәрҙә үтә көнөгөҙ.
Ҡоро ер тип китмәй һис иҫегеҙ,
Ярҙа йәшәү һеҙгә күңелһеҙ!”

Юҡ, ҡоро ер бик ҡәҙерле беҙгә, —
Туған булған өсөн һөйәбеҙ.
Ғәзиз булған өсөн уны һаҡлап,
Шашҡын диңгеҙҙәрҙә гиҙәбеҙ.

1953. Таллинн.

# 1954

************************

## Беҙҙең кандидат

Ун һигеҙе тулыр-тулмаҫтан
Билгә быуып әрме ҡайышын,
Туғандарын, өйөн ҡалдырҙы,
Иле менән бәйләп яҙмышын.

Ҡорал ҡармап, ҡанлы алышта
Ватанының иркен яҡланы.
Күкрәк менән ҡаплап һүндерҙе
Ялҡындарҙың илгә ҡапҡанын.

Дошман өңөнә иң беренсе
Колоннала бәреп инде ул.
Рейхстагтың һәр бер баҫҡысын
Ҡаны менән йыуып менде ул.

Күкрәгендә йондоҙ балҡытып
Ҡайтты илгә аҫыл егете.
Нисек итеп бөгөн депутат
Яһамаҫһың уның кеүекте!

Кандидаттар беҙҙең аҫылдар —
Терәк булып илгә еткәндәр.
Ауыр һынауҙарҙы, яуҙарҙы
Ватан менән бергә үткәндәр.

Тороп таңдан, ысын йөрәктән
Уларға беҙ тауыш бирәбеҙ.
Бирелгән һәр тауыш — һил тормош,
Бәхет килтергәнен беләбеҙ.

21.02.1954. Таллинн.

* * *

Йөрөйөм дә шашҡын диңгеҙҙәрҙә,
Ошо уйҙарымды уйлайым:
“Ватан өсөн йәнен биргәндәрҙең
Араһындалыр мин, моғайын...

Теремен дә! Гиҙеп йөрөймөн дә!
Ә шулай ҙа әҙер һәр хәлгә.
Беҙ шартлатҡан фашист миналары –
Минең, һинең “өлөш” икән дә...

Тере ҡалһын өсөн Ватаныбыҙ,
Моряк тейеш уяу булырға.
Әжәл ҡырҙарында бейегәндә
Тыуған иле булһын уйында!

21.03.1954.

## 1956

************************



### Ҡайтыу

Оҙаҡ йылдар йөрөп, ҡайтамын
Тыуып-үҫкән ғәзиз илемә.
Йәшлек юлым ситтә һүтелде,
Патронташ аҫып билемә.

Дүрт йыл буйы ғилем өйрәндем —
Тыуған илде һөйөү ғилемен.
Ватан өсөн дошман боғаҙын
Боғаҙларға әҙер инем мин!

Йәнем менән янып йөрөнөм
Илем өсөн, тиеп, бар көсөм!
Шуның өсөн янмай йәшәһә,
Егет тыуа ергә ни өсөн?!.

...Тимер юлы ҡалды артымда,
Ауыл юлы тарта алдымда.
Аяҡтарым талмай йүгерә --
Йәнкәйемә йылы ял бында!

Ҡаршы ала, боҫрап, баҫыуҙар,
Дүрт йыл көткәс, еткәс ир булып...
Күңелкәйем сыңрап түгелә
Бураҙнама, сабый йыр булып...

Япраҡтарҙың серле сырлауы

Итә икән тиле һаман да!
Әле булһа тулғып ҡыуанам
Ҡыяҡтарҙа ысыҡ янғанда.

Әле лә мин һыҙлап илайым,
Әле лә мин буҙлап көләмен.
Йәшәүемдең ябай байманын
Илкәйемә алып киләмен.

1956.

## Ҡайтҡас

Туфлиҙәрҙе һалып ырғытып,
Ялан аяҡланып йөрөйөм.
Табандарым тойоп һөйөнә
Йылылығын атай еренең.

Туҙғыта ел ҡалын сәсемде —
Уйнай бирһен, эшем юҡ унда!
Күктәр күкрәп йәшен атһа ла,
Уяталмаҫ хыял-йоҡомдан.

Бабаларҙың баллы был ере
Атамды һәм мине туйҙырған.
Йылғалары, хәтфә ҡырҙары
Һөйөү тойғоларын тойҙорған.

Ошо ерҙең Айлы төнөндә
Төндәй күҙҙе тәү ҡат үпкәнмен.
Быҫҡаҡ ямғыр яуған көнөндә
Өйҙән "мәңге" сығып киткәнмен...

Ялан аяҡланып йөрөйөм,
Бураҙнаның татып тылсымын.
Йөрәгемә үтә йылыһы,
Ҡолаҡтарым тоя йыр сыңын.

Ҡусҡылланып ҡалҡҡан ҡыяҡҡа
Табанымды терәп ултырам.
Бойҙайҙарҙың шыртлап шытыуын
Йәнкәйемә көйләп тултырам.

1956.

## **Көндәлек дәфтәренән**

*(аҡ шиғыр)*

Башҡорт балаһы мин, тирмәлә
тыуып үҫмәһәм дә! Халҡымдың
ярһыу ҡаны тамырҙарымда
ҡайнай... Урал тәбиғәтенең
гүзәллеге, күңел нескәртеп,
шиғриәткә дәртләндерһә лә,
йөрәгемдең ҡапма-яртыһы
оло күкрәү көтөп ҡыҫыла
һәм күҙ төҫмөр итә эйәрле
толпарҙарҙың кешнәп сабыуын...

Ватанымды һаҡлау бурысы
алыҫтарға мине оҙатҡас,
диңгеҙҙәрҙең томан артынан
Урал ҡаяларын күрҙем мин.
Мине улар өндәп торҙолар
ныҡлыҡҡа. Ә йөрәк һыҡтаған
минуттарҙа Урал елдәре
елеп үтеп ят ҡыр, болондар
иңе аша, туған әсәләй
шифалап һәм наҙлап һыпырҙы
йәш әсеһен талған күҙҙәрҙән...

Ил ҡандарын йыйған хөр Әләм —
ҡыҙыл бөркөт — мачта осонда
уттай янып, беҙҙең карапты
миллдәр аша ҡыйыу осорҙо.
Ҡорос иҙән табан аҫтында
аунаҡланы, ләкин тубыҡҡа
сүкмәнек беҙ! Әсәй-Ватанды,
Ватан билен быуған Уралды
күреп торҙоҡ дауыл-яуындар
көбө үтә байраҡ йөҙөнән...

Кордон артындағы бәндәләр
миңә ҡарап: “Кем һин? Ҡырғыҙмы,
ҡытайһыңмы әллә?” — тиһәләр,
“Башҡортмон мин! Эйе, ирекле
башҡортмон мин!” — тип әйтә инем,
белһендәр, тип, ят яҡтарҙа ла,

башҡорт тигән титан барлығын...

Ризығымды ҡырҙа бөтөрөп,
ҡыуғас яҙмыш тыуған йортома,
хыялымда мең ҡат көйләнгән
Өфө ҡалаһына килдем мин...

Танышым юҡ ине. Урамдар,
биналар миңә ят инеләр.
“Китапхана” тигән йорт ҡына,
ымлап йәнде, үҙенә саҡырҙы.
Мин индем һәм бер ҙур китапты
асып ебәрҙем... Был хитапта
тупланғайны туған халҡымдың
күңел ынйылары... Уҡығас,
сикһеҙ донъя минең ҡаршымда
асылды, һәм һалҡын биналар
туған булып киттеләр... Шунан
йәшен уты сыйҙы маңлайҙы:
“Юҡ! Тарихһыҙ түгел башҡортом!
Халҡым бөйөк! Тәрән тамырлы!” –
Тип беркеттем утлы күңелгә.
Шиғырҙарҙы минең тикшергән
сал сәсле бер уйсан ағайға
үҙемдең шул саф хистәремде
ҡыуанып һәм оялып һөйләнем...

Февраль, 1956. Өфө.

## Яңғыҙлыҡ

Ниңә, ниңә һынап ҡарайһың
Ҡыҙҙар араһынан һин генә?
Күрһәм һине, ҡалам телемдән —
Ҡарамасы һынап гел генә!

Күҙҙәремдең утын йомған моң
Һине, бәлки, албырғаталыр?
Маңлайымдың һанап һырҙарын,
“Ҡартайған” тип йәнең ҡаталыр?..

Йәш әле мин һинең кеүек үк,
Татырға тик тура килде күп

Әсе-сөсөләрен донъяның —
Уйлымын да шуға моңломон...

Кисеп диңгеҙ, тәүге сәскәһен
Яңғыҙлыкта атты йәшлегем.
Көйөн табалмаған кейекмен,
Шуның өсөн бойоҡ-бойоҡмон...

Уйҡайҙарың ихлас булмаһа,
Теләккәйең ашып тулмаһа,
Үтенәмен — һынап ҡарама!
Тоҙ һалмасы ҡанау ярама!

Ҡарамаһаң, ҡаушап уйламам,
Иңкәйеңде тиңләп иңемә:
“Ҡарай ул, — тип, — һынап ник миңә?..
Йөрөһәмсе ҡанап тик кенә!..”

25.02.1956.

## Хеҙмәткә саҡырыу

Уян, иптәш, ваҡыт торорға! —
Геүләй Көнөң зәңгәр түбәлә.
Күр: ҡара тау унын яҡтыһын
Тора ҡаплап — күҙгә күләгә.

Көн дә Көндө көләс күрмәһәк,
Йәнҡарайтыр ҡара тау беҙҙе.
Ә теләк ҙур: йырға һалырға
Йырлап аҡ Көн тыуған миҙгелде!

Һыҙғанып ең, кәйлә алайыҡ,
Үрмәләйек тауҙың башына.
Сәсрәткәнсе осҡон, һуғайыҡ
Ҡаралыҡтың ҡара ташына!

1956.

## Буксир-теплоход № 11

Ҡаршылайым йәмле яҙымды
Беренсе ҡат башҡорт ерендә.

Барған һайын көндәр яғымлы,
Күтәрелә күңел минең дә!

Ағиҙелкәй әле һалмаған
Һыртындағы аҡһылт еләнен.
Ә мин иртә һайын ҡаланан
Ҡырыйына һыуҙың киләмен.

Көтөп тора кәмә-теплоход,
Ашҡындыртып юлға көн-иртән.
Ашығырға ваҡыт, бик ваҡыт —
Боҙ өҫтөнән шәре-һыу киткән!

Күнегелгән аҙым, көй менән
Палубаға күтәреләмен.
Нисәнсе ҡат мотор өҫтөнән
Юҡ туҙанды һөртөп-өрәмен.

Һәм хисләнәм: "Боҙҙар сатнарҙар,
Йүнәлербеҙ йүнсел юлдарға.
Баржала беҙ илткән тауарҙар
Етер барып ипле ҡулдарға.

Ағиҙелдең йәмле буйҙарын
Яңғыратыр борғо тауышы.
Ил түренә мин дә уҙырмын,
Тыныс тормош менән ҡауышып.

Ҡалыр ләкин хәрби хеҙмәттә
Үҙ ителгән тәртип, йыйнаҡлыҡ"...
...Әллә ниңә, үҙем һиҙмәҫтән,
Торам икән шаран йылмайып...

Тәңкә ҡарҙар ебшеп яуғылай, —
Тик оҙаҡҡа түгел, юҡ, улар!
Ҡотороп һыу ташыр һәм, малай,
Алыр тартып беҙҙе хаҡ юлдар!

8.03.1956.

## Һалсы һылыу

Аҡыҡ тулҡындарҙа тулҡынып,
Ағиҙелдә алтын һал аға.

Балауыҙҙай һары сағандар,
Аҡ һөрмәле һомғол ҡайындар,
Ҡарағайҙар — аҫыл мал аға.

Ҡайҙа шытып, ҡайҙа үҫкәндер
Был шыршылар, донъя йәмләтеп?
Кемдәр тотоп, кемдәр киҫкәндер
Күк таңдарҙа, урман шаулатып?..

Уйнай тулҡын иҙел өҫтөндә,
Уйнай сабаҡ иҙел төбөндә.
Алтын һалға баҫып килә ҡыҙ
Аҡыҡ һыртлы яҙғы тулҡында.

“Әйтсе, һылыу, ҡайҙан алдың юл,
Ҡайҙа үҫә быңдай ҡайындар?
Йырлы юлдан йырлы яҡтарға
Барып сығырға бер яйым бар!

Шыршыларҙың йәшел иленә
Үҙең, бәлки, алып китерһең?
Һин һулаған сихри һауаны
Һуларға, тим, рөхсәт итерһең?

Күк юлыңдан күккә үрмәләп,
Менер инем тауҙар башына.
Исемеңде, менһәк бергәләп,
Яҙыр инем сағыл ташына!”

Яуап итеп йырлай һылыуым:
“Тыуған илем минең Йүрүҙән.
Ғүмерлеккә ғашиҡ булырһың,
Саф ярҙарын тик бер күреүҙән.

Һыуҡайҙарын уның татыһаң,
Онотorһоң шәрбәт татыһын.
Тауҙарыма таймай ҡалҡынһаң,
Ерҙең күрерһең ҡап-яртыһын.

Йүрүҙәндә һылыу ҡыҙҙар күп,
Мин — арала бары уртансы.
Исемемде ташҡа яҙғансы,
Йөрәгеңә генә уйһаңсы!”

3.06.1956.

## Яҙғы ямғыр
*(аҡ шиғыр)*

Яҙғы ямғыр уҙҙы иҙел өҫтөнән,
яр ҡомдарын еүеш тыны сылатып.
Нәҙек талдар толомдарын болғаны,
тамсы-сулпыларын елгә сыңлатып.

Озон бөркөп яҡкау ғына тирбәлде
еләҫ һауа. Йыртығынан болоттоң
алтын һаҡал һоноп көлдө ал Ҡояш,
һаҡал-нурын һирпелдереп ауылға;
Ҡалҡты йәйғор көмөрәйтеп арҡаһын,
ут-һаҡалға батырылған тараҡтай...

Балауыҙ һал килә бөгәл артынан,
һыуға йәйелгән келәмдәй талғынып.
Ямғыр сыбыртҡылап сәпәгән усаҡ
хәлһеҙ төтөн менән көйрәй һыҙланып
һал башында... Ҡайнарға өлгөрмәгән
ыҫлы сәйгүн тора ойоп тағанда.
Баҫалҡы һәм яҙҙай шат көләү генә
аңҡып китә ҡапыл йылға өҫтөнә
һалдағы күк ылыҫ япҡан ҡыуыштан...

Ҡарт ишкәксе тора һал ҡойроғонда.
Текләп һыуға, сумған тәрән уйҙарға...
Күшеккән ул, ләкин таҡыр, сал башын
Ҡапламаған. Һыуҙың ялтыр көҙгөһөн
шаҙралаған көҙгө ямғыр шикелле,
йөҙөн хистәр хөкөмө быжырлаған:
ағыла был ҡарттың (талғын — нәҡ томан)
үткән оҙон ғүмере күҙ алдынан...

“Күп ҡалманы инде миңә ишергә
был ишкәкте яҡты Ҡояш аҫтында...
Был һал, эйе, бәлки, һуңғы һалымдыр,
яҙ ямғыры — һуңғы ләйсән-ямғырҙыр...

Ауырмын да мәңге-мәңге уянмаҫ
йоҡо менән талырмын... Һөйәктәрем
ял табырҙар һутлы ҡара тупраҡта.

Икенсе — йәш, көслө берәү ҡалҡыныр
был урынға. Уның үткер күҙҙәре
мин ҡараған сағыу яр һыҙаттарын —
муйыллыҡтар донъяһын уҙыр бағып
һәм йылы йәй ямғырҙары уның да
ҡуйы муйыл сәстәрен сыландырыр.
Минең табандарым тапап яҫыртҡан
һуҡмаҡ буйлап менер ярға йүгереп,
анау ауыл ҡыҙҙарына аулаҡҡа...

Һәм ул һуҙыр шул уҡ мин һөйгән йырҙы
иртәләрен, яр яҡаһын яңратып,
мәңге тере Ағиҙелкәй турында.
Иҫләмәҫ тик бары үҙе кеүек үк
заманында йәш, мыҡты, матур булған,
ә һуңынан ҡара гүрҙә онотолған
ирҙе — һөйгән йырҙарының атаһын...”

Уйлай шуны, моңһоуланып, ишкәксе
үлеп барған яҙғы ямғыр аҫтында.
Ә һал аға түбән... Унда быҫҡыған
усаҡ ҡабат дөрләп китеп тоҡана.
Күк ылыҫтан өйгән ҡыуыш күркендә
бәхетле йәш көлөү сыңрап эркелә...

4.06.1956.

## Өфө урамдары

Өфө урамдары,
Өфө урамдары,
Үтте минең алтын бала саҡ,
Үтте минең ялҡын үҫмер саҡ
Һеҙҙе уйлап, һеҙҙе һағынып!
“Өфөкәйем!” — тиеп табынып!..

Зарығыпҡай ситтә йөрөнөм,
Илкәйемә ҡайта алмайса.
Ҡурҙы тынды һағыш һөрөмө
Һәм бешерҙе, күренеп янмайса...

Хыялыма бына ирештем! —
Өфөмдөң мин нәҡ үҙәгендә!

Күҙгә ҡарап һәр йорт, һәр кеше
Йөрәк һүҙкәйен теҙә генә!

Алтаҡталар:
“Ит”!
“Һөт”!
“Китап магазины”! — тиеп,
Әсә телемдә өндәшә һәр йорто.
Ләззәтләнеп үҙем уйлайым:
“Бына бит ул ере башҡорттоң!”

Мәшһүр Туҡай ошо урамға
Күтәрелгән бер саҡ был тауҙан.
Һытҡан йөҙөн, арба, һикертеп,
Сирле үпкәһен йолҡколауҙан...

Килсе, тороп гүрҙән, һин, шағир,
Заман Өфөһөнә тағы ла! —
“Зим”мы, “Зил”мы, әллә трамваймы
Илтер ине “Китап” яғына!

Күрер инең, рәхәт кинәнеп,
Яңырған хөр милләт үҙәген.
Башҡорт операһын тыңлар ҙа
Күҙләр инең халҡым биҙәген

Биналарҙан... (Башым эйәмен
Шағир яҡты рухы ҡаршында!)
Ҙур хыялдар туплап килгәнмен,
Туған Өфөм, — йылы ҡаршыла!

Типмә ситкә уйсан улыңды,
Бир көс ныҡлап аяҡ баҫырға!
Оҙаҡ йылдар йыйнап йөрөгән
Хистәремде илгә асырға!

Ҡайтарырмын, тимен, унлата,
Итһәң әгәр тик бер илтифат.
Бик һағынып ҡайттым диңгеҙҙән,
Булайымсы улың мин, Йыһат!..

Таштарыңды үбәм ҡосаҡлап,
Тоймаммы, тип, әсәм һөйөүен,
Тоймаммы, тип, атам һөйөүен...

Хәйерлегә булһын килеүем...

21.11.1956.

## Ш. Хоҙайбирҙин, М. Ғафури

Торҙом оҙаҡ, түбән эйеп башымды,
Сикһеҙ яҡын ике ҡәбер ҡаршында.
Уйып яҙылған утлы ядкәрҙәрҙе
Йөрәкһенеп уҡыным гүр ташында.

Сикәм буйлап аҡты әсе йәштәрем,
Йөрәккәйем ярылып һыҙлауынан.
Ғорурландым, баһадир ошо икәү
Туған халҡым улдары булғанына.

Урал, эйе, баһадирҙар тыуҙырған
Быуаттарға һуҙылған көрәшендә.
Дошман ҡанына тупрағын туйҙырған...
Еңеү тантанаһын да,
күҙ йәшен дә

Еңелеүҙең — ҡат-ҡат ул татып белгән...
Күрмештәрҙән салланған зирәк башы.
Әммә уға икәүҙе тыуҙырырға
Насип иткәндер Октябрь ҡояшы!

Йәшен һымаҡ, йәшәгәндәр улар аҙ —
Ҡара төндә күкте ярып һүнгәндәр.
Ләкин илдең күҙен асыр шәмсыраҡ
Мәңгелеккә ҡабыҙып өлгөргәндәр.

Бере ирек илсеһе, икенсеһе
Милли мәҙәниәт атаһы булып,
Йәшнәп йәшәүҙәр өсөн уятҡандар
Туған халҡымды, тумбығыуҙан йолоп.

Тыныс йоҡлағыҙ, данлы баһадирҙар —
Көслө ҡулдарҙа нурлы факелығыҙ!
Хеҙмәт йылдары арҡылы беҙ илде
Ысын ожмах таңына әпкилербеҙ!

1956.

## Йәйге таң

*(аҡ шиғыр)*

Бармы һинең ҡаршы алғаның
июнь таңын йылға өҫтөндә,
Урал тауҙары һикеһендә?

Ултырғаның бармы тыңлап яй
аҡҡан һалда — саф тау һыуының
ҡаяларҙы ҡағып һулҡыуын?

Һәм күҙ текәп офоҡ ситенә
оҙон уйҙар уйлағаның, йә
хыялдарға бармы сумғаның?..

Ә бит төн-ҡара һәм таң-аҡлыҡ
төкәлешеп, итһә әгәр хакимлыҡ
сыңрау миҙгелендә сихри тәүлектең,
ҡарт Тәбиғәт-бабай, тыңлап, ҡала тын...

Талдар талпынмай был сулала,
олпат имән саҡ-саҡ тын ала,
саҡырмайҙар дәртле кәкүктәр.
Айыуҙары ағас һындырып
йөрөмәйҙәр урман ҡыҙырып,
аҡ ҡормандар, ҡарпып ваҡытһыҙ,
һыу йөҙкәйен үтмәй һыҙырып.

Талғый барыһы тиң... Ер-әсә
ҡосағында — тәрән моң ғына.
Һәм мин — әҙәм — нурлы таң менән
киләм етәкләшеп, шым ғына...

1956.

## Ғаләмдәрҙең йыры

Ултырамын иҙел ярында,
Уйланамын *Уның* турында...
Тәпәш күге диңгеҙ иленең,
Күҙ алдыма килә гел минең —

Балтиканың һарғылт ҡом яры,
Ҡурғаш төҫлө туҡ тулҡындары...

Тулҡындарҙа кәмә сайҡала —
Аҡ эшләпә кейгән ҡыҙ бала
Уйнаҡлата шаян ҡайыҡты.
Етте ярға, — һыуы һайыҡты, —
Алдым тотоп шаян балыҡты!..

Күҙҙәремә ҡыйып ҡараны —
Зәңгәр күге мени даланың!
Керпектәре — иҙел ҡамышы,
Толомдары — арыш һаламы, —
Ҡосағыма һалдым “бала”ны...

Туптай тығыҙ ҡалҡыу күкрәге,
Лөп-лөп тибә ярһыу йөрәге,
Муйынымда — ике беләге...
Эстонса тик ике-өс һүҙ әйтте:
“Һөйәм тельняшкалы егетте!..”

Ер менән күк бергә ҡапланды,
Араһына диңгеҙ ташланды,
Убылдылар ирен-ҡомһоҙҙар,
Атылдылар утлы йондоҙҙар, —
Ғаләмдәрҙең йыры башланды...

1956.

## Юғалтыу

*(эшсе дуҫ үкенесе)*

**1**

Их Нәфисәм, ҡайҙа, ҡайҙа һин,
Йөрәк иткәйем, йән һыҙлауым!
Белһәң ине, һине юғалтҡас
Ғүмеркәйем зая уҙғанын!..

Юл буйында ятҡан суйырҙай,
Яңғыҙмын мин, һөйөүсеһеҙмен.
Уҙа һәр кем мине ситләтеп —
“Йыуатайыҡ” тиеүсеһеҙмен.

Уҙа һәр көн мине миктәтеп,
Ҡалдырмай тик һары һағышым.

Ҡыуаламай елдәр аңымдан
Хәтирәнең хәтәр ағышын...

**2**

Килмәнең, их! — көткән урынға —
Көттөм һине, көттөм бик оҙаҡ...
Күҙҙәремдә — һағыш, йөрәктә
Ҡабынды шик — йәнгә шом-тоҙаҡ...

Һипкән һымаҡ утҡа кәрәсин,
Бер иптәшем систе "сер генә":
"Көтмә уны! Һөйгән Нәфисәң
Типтерә бит сержант-ир менән!"

Киҫте көнләү ҡыҫып боғаҙҙан,
Күҙ алдарым кинәт төн булды.
Йыға яҙғас һуғып, хәбәрсем
Көлә-көлә күҙҙән юйылды...

Түҙә алмай, утты баҫырға
Киоскыға барып ураным.
Ҡайғынан, тип, ҡымтып "ярты"ны,
Бағанаға арҡа терәнем...

**3**

Ауа-түнә ҡалғып торғанда,
Нәфисәм, һеҙ килеп сыҡтығыҙ!
Ҡултыҡлашып сержант-фырт менән,
Такси ҡырына юл тоттоғоҙ...

Айный яҙып ике секундта,
"Нәфисәм!" — тип ярһып йүгерҙем.
Һыҙғас такси саңын борҡотоп,
Аунап ятып ерҙә, илерҙем...

**4**

Иртәгәһен, башым төҙәтеп,
Сығыуыңды көттөм эшеңдән.
"Подлюга!" — тип нәфрәт аттым да
Баш ҡайырҙым һөйгән кешемдән...

...Станогың инде цехыңда
Әүәлгеләй йырлап тормаған.
Норма үтәү процентың да

Бүтәндәргә үрнәк булмаған.

Теккән кейемеңде бракка
Сығарғандар шул көн тәү тапҡыр.
Фабриканан өйгә ҡайтҡанһың
Төптән киҫелгәндәй һин, бахыр...

**5**

Телефоным, оҙаҡ шылтырап,
Йәнгә тейеп бына уятты...
Йәнле йәмем — туған тауышың
Иркәләне тонған ҡолаҡты.

Өҙөк-өҙөк һинең һүҙҙәрҙән
Ҡайғы, һорау, яфа түгелде.
Йөрәгемдең ябып ишеген,
Ҡаҡтым кире... Көнөм һүрелде...

Һинән килгән һуңғы хатты ла,
Уҡымайса, кире оҙаттым.
"Һинең ишеләрҙең меңәүен
Табырмын!" — тип күңел ҡуҙлаттым.

Тештәремде ҡыҫып асыуҙан,
"Таныманым", килһәң ҡаршыма.
Ғишыҡ тирәгенең терәген
Саптым үҙем... еттем башына...

Их Нәфисәм, изге Нәфисәм!
Кисер мине, ғәфү ит мине!
Беләһең бит, ул кис башымды
Алйыткайны хәмер "зиһен"е...

Сержантыңдың аслан кемлеген
Шуға күрә ул саҡ белмәнем.
Һине — йәштән һөйгән йәремде
Туған ағайыңдан көнләнем...

1956.

## Ағиҙел матросына күренгән ҡурҡыныс төш

(Фельетон)

**1**

Аҡ ҡанатлы пароходта мин, имеш,
"Өфө-II"-нән барам Муллаҡайға.

Ажғырып ҡыйнай Ҡариҙел ҡайыҡты,
Әйтерһең дә, килмәй һис тә ыңғайға...

Тымыҡ океанда ҡупҡан валмы ни! —
Күк тулҡындар палубаға ишелә.
Түңкәрелә биреп ҡалған саҡтарҙа
Үсекләүе балыҡтарҙың ишетелә:

“Беҙ ҙә хатта тәртип һаҡлап йөҙәбеҙ —
Причалдар бар беҙҙең кәрәк урында!
Күрәрегеҙ һеҙҙең әле алдараҡ —
Киҫәтәбеҙ бына шуның турында!”

2

Ни әхүәл был! — шөрләйем ҡапыл, шылам
Өсөнсө синыфҡа — йәғни түбәнгә.
Күрәйем ни күҙем менән: буфеттың
Яғымлы ишеге морон эргәмдә!

Бына ҡайҙа икән минең причал! —
Ҡойҙортам йөҙ иллене — “аҡ башлы”ны.
Һәм тағы бер илле, тағы бер илле...
Селедканың ҡойроғомо, башымы

Эләккәс ни, яңырам күҙ алдында:
“Балыҡ — ахмаҡ! Көлөргә мин теләйем!”
Ҡабырғамды баҫҡыстарҙан һанатып,
Өҫкө палубаға саҡ-саҡ менәмен.

Пароходым барып шул мәл туҡтала
Егерме аҙым аралыҡта ярҙан.
Хәрефтәрҙе көскә йыйып уҡыйым:
Пристандең исеме икән “Мәғдән”.

Пассажирҙар ярға ярһып эркелә,
Ҡариҙелдең һыуҙарын ярып билдән.
Ҡайҙа трап ?! Причалһыҙ пристангә,
Резинкәләй, яр ник һуҙылмай икән?!.

Бала-саға илау... Иҙел өҫтөндә
Йәшел эшләпәләр моңло йөҙөүе...
Матрос күкрәгемде шулар тулатты,
Әсе күҙ йәш сылатты ал йөҙөмдө...

“Туҡтағыҙсы! Якорҙе төшөрәйек,
Берәр ай, тим, ултырайыҡ ошонда.
Ҡайтҡас ташҡын, ҡайыҡ ярҙа ҡаласаҡ —
Ҡороға туп-тура сығырбыҙ шунда!”

Тельняшкам булмаһа, шпиондыр тип,
Тотоп ябыр ине мине капитан:
“Ғауғалай кем?! Унһыҙ ҙа бит һуңлайбыҙ,
Дүрт сәғәткә сигеп көн дә графиктан!”

Илайҙар, эй, пассажирҙар илайҙар...
Ҡушылып мин уларға һулҡылдайым:
Ауылым, тим, торһасы тап ошонда,
Булһасы, их! — менеп һыу кисер тайым!..

3

Милләт зарын ишетеп, яр башынан
Елдерҙе бер йәш баһадир иҙелгә:
“Бына һеҙгә, — тине, — көслө арғымаҡ!
Өйрәнгән ул иҙелдәрҙе йөҙөргә!

Пристандәргә причалдар һалынғансы,
Ташыр һеҙҙе дөл-дөл был пароходтан!” —
Тине лә ул кинәт кенә юҡ булды.
Пассажирҙар, бейей-бейей шатлыҡтан,

Артылдылар “арғымаҡ” арҡаһына.
Тик мин генә торҙом ҡатып ҡайғынан.
Сөнки “арғымаҡ”тан пароходлыҡтың
Нәҡ башлығын — Кибальникты танының

(Сихыр менән әүерелтеп “дөл-дөл”гә,
Күндәм менге иткән уны һәр кемгә)...

Ҡарсыҡтарҙы уның йөкмәп ташыуҙан
Күбекләнгән елкә, ҡаҡ башын күреп,
Түҙә алмай, башлығымды бәләнән
Ҡотҡарырға, тиеп барҙым йүгереп.

Тик ҡармаған ғына инем теҙгендән,
Сыҡты килеп йәнә теге баһадир.
Әйләндерҙе атҡа ҡапыл мине лә,
Менеп алды мине лә дүрт пассажир...

Башлыҡҡайым менән бергә, икәүләп,
Пристань һайын пассажирҙар ташыйбыҙ:
Мәғдәндә лә,
Ҡариҙелдә лә,
Бумазыла ла,
Муллаҡайҙа ла —
Ниҙәр генә күрмәй дөл-дөл башыбыҙ!..

“Ҡариҙелкәй буйында пристандәр күп,
Күбеһендә уларҙың причалдар юҡ.
Яңы быуатҡаса улар һалынмаç,
Беҙҙең башҡайҙарҙан йүгән алынмаç!..” —

Тип һыҡтандым... Атом еккән быуатта
Күтәрә алманым былдай мыçҡылды —
Сағыл түбәһенән түбән ташландым...

Бүлдем шулай ауыр төшлө йоҡомдо...

1956.

## Туғыҙтамаҡ

Кем ул, кем ул, һыймай буфетҡа,
Әҙәмдәрҙең башын ҡатыра?!
Болғап-болғап эскәс шешәһен,
Бер үҙенә хөрмәт таптыра?

“Бүтилкә”һен ата (буфетсы
Эйелеп саҡ ҡала бәләнән).
Туғыҙ ҡырлы әрләү яуҙырып,
Тәмәкеһен ҡаба биленән...

Итектәре менән, иҙгеләп,
Бәрхәт диван түрен туҙҙыра.
Хырылдауы хайран ҡалырлыҡ —
Репродукторҙан да уҙҙыра!..

Киçәтергә итһәң, әйтәләр:
“Теймә, иптәш, зинһар, сабыр ит!
Сиртә күрмә туғыҙ ҡылына —
Туғыҙтамаҡ Таймый-батыр бит!..”

“Сүп үләнде яҡшы баҡсасы
Түтәлдәрҙән утап ҡорота.
Яҡшы булмаҫмы, тим, аранан
Бындайҙарҙы йолҡоп ырғытһаҡ?!”

“Ырғытмайыҡ... Әйҙә, йөрөһөн...
Аҡырмаһын ғына тик, бер үк.
Ни ҡылырһың әгәр һүгенһә
Туғыҙ тамағынан үкереп?..”

Шулай тиҙәр, шөрләп, кешеләр —
Тирә-яғын бөткән өркөтөп.
Ҡолаҡ кителерлек ҡылымдар
Ауыҙынан дөрә бер көтөү...

Әшәке һәм оят йырынан
Һыҡтай урам, йорттар һелкенә.
Ҡолас киреп бөтә төбәккә,
Туғыҙтамаҡ Таймый, һәй, килә!

Керә тибеп клуб ишеген,
Билетсыны ситкә этәреп.
“Аяҡ араһында уралған”
Ултырғысты тибә түңкәреп.

Кино ҡарап бөтмәй таялар —
Туғыҙтамаҡ ҡала бер үҙе.
Әйтерһең дә, уға буйһона
Клуб түгел — бөтә ер йөҙө...

1956.

## Яуа, яуа...

Яуа, яуа эсте бошороп,
Көн буйына яуа, тик яуа...
Лыс һыу булды бахыр кейемем,
Түҙә-түҙә бөттө түҙемем, —
Ҡара болот аға ла аға,
Серек ямғыр яуа ла яуа,
Табанғаса һалҡын юлағы
Арҡам буйлап аға ла аға...

Тымыр микән, тымыр микән бер
Хоҙай алғыр ҡара был ямғыр?
Башы барҙың ахыр барындай,
Унын да бит һуңы бер барҙыр?!. —
Һөйәк үтеп керә еле лә,
"Лырҡ-лырҡ" килеп көлә юлы ла.
Буш яланда яңғыҙ бер үҙем,
Елгә еләй әйткән һәр һүҙем...

Елгә еләй әйткән һәр һүҙем,
Эсем боша, башым ауырта.
Уйҙар тегәнәге, тегелеп,
Йөрәк яраларын яңырта.
Иҫтәремде иҙә үткәнем,
Үкенесле, үкһеҙ төш булып.
Биттәремде йыуа йәштәрем,
Болот йәштәренә ҡушылып...

Серек ямғыр яуа ла яуа...

1956.

## Диплом

Флот буҫтауына төрөнөп
Ялға ғына ҡайтҡан сағымда,
Ауылдаштар һырғып-өйөрөлөп
Йөрөнөләр ылғый янымда.

"Кем һин унда? Кемдәр ҡулыңда?
Капитанмы үҙең әллә?" — тип
Йөҙәткәстәр, бирҙем яуабын:
"Минең эштәр унда — *ләл-лә*! — тип. —

Моторсы мин! Вахтам осланғас,
"Әл-хитап"сы — китап мин бирәм.
Швабрамды ҡәләм ҡылам да
Палубаға һабаҡ һеңдерәм.

Дуҫтарым, мин, эйе, — командир
Намыҫыма һәм уйҙарыма.
Алынғанмын шуға күрә лә

Балтик диңгеҙе буйҙарына!

Бына минең хөрмәт дипломым!" —
Тип ҡараттым шунан уларҙы
Мазут ҡарайтҡан ҙур ҡулдарҙы...

...Үтте йылдар. Ҡайттым хеҙмәттән.
Еҥ һыҙғанып эшкә тотондом.
Һәм осраттым бер көн урамда
Фыртый ғына йәшлек дуҫымды.

Яҡшы костюм. Йәшел эшләпә.
Бүртек портфель ҡулы осонда.
Ҡартлас ҡына буҫтау салбарым —
Меҫкен һалдат — король ҡаршында!

Ҡосаҡлашып һаулыҡ һораштыҡ.
Тамаҡ ҡырҙыҡ. Һүҙҙән һүҙ китте.
"Ҡайҙа эшләйһең? — тип, кәкре
Һүҙ ағымын дуҫым төҙ итте. —

Уҡымышҡа бик шәп инең бит
(Баш сүлмәгең ҡайнай ине ныҡ.)
*Урын* биргәндәрҙер, һиндәйҙәр
Мүк аҫтында ятмай тымығып!

Яҙа инең, буғай, шиғыр ҙа —
Китап ҡылып баҫтыраһыңдыр.
Ҡыл ҡымшатмай, өҫтәл артында
Аҡса һуғып ултыраһыңдыр".

"Яңлышаһың! — тинем ҡорҙашҡа,
Эстән көлөп. — Ныҡ яңлышаһың!"
"Шағирҙарға башлыҡһыңдыр йә?"
"Юғарыраҡ!"
"Ҡайһы постаһың?!"

"Посым минең шундай юғары —
Минең хаҡта китап яҙалар
Ҙур шағирҙар! Өфө уттары
Минең хаҡҡа балҡып яналар!"

Үпкәләне ихлас яҡташым:
"Шаяртыуға сама, такт бар!

Бала түгел дә мин уйнарға!
Эш муйындан. Хуш бул, ваҡыт тар”.

(Салғыйынан ҡалдым саҡ тотоп.)
“Туҡта, йәнем, белмәй китмә әле
Иҫке дуҫыңдың кем икәнен:
Поммеханик! Баржа йөрөтәмен,

Ышанмаһаң, бына дипломым!” —
Тип күрһәттем тутлы ҡулымды.
Иптәшемдең төҫө ниңәлер
Ҡурғашланып, ҡара ҡойолдо...

Ҡатманы һүҙ артыҡ арҙаҡлым,
Һытып йөҙөн, ситкә атланы.
Миндәй “баржа” менән һөйләшеп
Ултырырға ваҡыт тапманы...

Булһын, әйҙә, дуҫым инженер,
Доктор булһын, йәки яҙыусы!
Йә — водород атомдарының
Сикһеҙ серен эҙләп табыусы!

Иң ябай сер ләкин бер генә:
Теләй һәр кем ерҙә йәшәргә.
Ерҙе кейендергән, ашатҡан
Ҡулдар барын кем һуң йәшерә!

Тиң дәрәжә тотоп, табынға
Ултырамын барлыҡ ил менән.
Дәрәжәмде түбән төшөрөп:
“Түрә бит ул, ә мин... мин...” — тимәм.

Һәм ғүмергә уңмаҫ-йыуылмаҫ
Мазут һеңгән ҙур ҡулдарымды
Оялмамын һуҙған сағымда
Тәбрикләргә сын дуҫтарымды.

Киреһенсә, ғорур бағырмын
Ап-аҡ ҡуллы аҡ йөҙҙәренә.
Алмаштырмам был “диплом”ымды
Ҡағыҙ дипломдың йөҙләбенә!

1956.

## Кирбес һуғам

Тубығымдан батып ҡара лайға,
Кирбес һуғам Ҡаçмарт ярында.
Ике бөртөк түрәм ҡарап тора,
Фыртый портфель тотоп янымда.

Ҡасандыр бит улар менән бергә
Ыштанһыҙ ҙа сабып йөрөгәйнем.
Тәмәкегә өйрәнергә көçәп,
Атҡолағын ыуып төргәйнем.

Бер төç инек зәңгәр төтөн кеүек,
Әллә ниңә Хоҙай айырҙы.
Төрлөбөҙҙө төрлө “торомбаш”ҡа
Әйләндереп, ситкә ҡайырҙы.

Килешмәне миңә бүртек портфель —
“Түрә”легем йылға ярында.
Ике бөртөк түрәм ҡарап тора
Аяҡ киреп кенә янымда...

Улармы, тим, минме — кем даланлы? —
Күнектем шул кирбес һуғырға.
Кирбестәрҙән, тимен, өлгәшермен
Бәхет һарайҙары ҡорорға.

Илем менән инәм ләм-балсыҡҡа,
Бураҙналар ярып йөрөйөм.
Үрккән һәр йорт, үçкән һәр башаҡтың
Ҡулдарымда тоям көрлөгөн.

Ике түрә, күрәм, ҡулын бирә —
Гөрләй эшем, шуға ҡыуанам.
Кирбестәрем ҡитға ҡиблаһында
Биналанып балҡыр бер заман!

1956.

## Өйәңке

(аҡ шиғыр)

Юл сатында яңғыҙ өйәңке

һағыштарға талып ултыра...
Ҡунып ҡоштар һайраһалар ҙа
йәшел бөҙрәләре башында,
ятып йәштәр йырлаһалар ҙа
еләç күләгәле аçтында,
һелкенмәй ул. Дауылдарҙа тик
керешә шауларға, иларға
иçләп үткәндәрен...
...Бер заман
ер тетрәй, күк яна ине,
яраларҙан ҡан аға ине
ямғырҙай мул ҡойоп... Атлылар
өйәңкенең ығып янына,
тәрән окоп ҡаҙып яттылар,
тоçҡап унан мылтыҡ аттылар
офоҡтағы уба яғына...

Яҙ сихәте дары ыçынан
ағыуланды шомло ул төндә.
Йөрәк йыртып әжәл асыһы,
ыңғырашып һыҙлау салынды
ике яҡтан... Дөм кис ҡараһын
һүреп яныр ауыл уттары
ул кис ҡабынманы, ни бары
асҡаҡ көбәк томшоҡтарынан
зәһәр ләүкем көлдө мыçҡыллап,
төрлө тоштан таңды йыртҡыслап...

Ә иртәһен теҙем-экадрон
ҡанлы юлға ҡабат ҡуҙғалды,
елберләтеп ҡанлы байрағын,
уба аръяғына юл алды.
Кешнәүе тик ярһыу аттарҙың,
бәрелеүе прикладтарҙың
эйәрҙәргә — килде йыраҡтан.
Офоҡ ябып туҙан болото
күтәрелде һәр бер тояҡтан.
Һағышланып төнгө суланан
ур ҡалды ла яңғыҙ гүр ҡалды...

Ҡыҙыл йондоҙло йәш һуғышсы
айырылды шул саҡ ғәскәрҙән,
өйәңкенең күләгәһенә
төрттө атын, төшөп эйәрҙән.

Һәм таянып сутыр-олонға,
оҙаҡ, оҙаҡ талды уй-моңға --
көттө, түҙмәй, кемдер килеүен,
әле уфтап, әле йылмайып
көйөндөрҙө йөрәк киҙеүен...

Арғымағы, кешнәп, тибенеп,
ашыҡтырҙы уны елергә,
егет ләкин күҙен алманы
ауыл яғындағы юл-ерҙән.
Килмәне тик өҙөлөп көткәне,
минут һайын минут үтһә лә,
биттәренә һаран күҙ йәше
әле тамып, әле кипһә лә
килмәне *Ул*...

Уфтап уҙаман
алды ҡулын телһеҙ олондан,
ҡайырыһын уның ҡайырып
яҙҙы: “Һөйәм! Һөйәм! Онотмам!”
Ҡумтаһынан һурып патрон,
яҙыу менән ҡуша төрнәне
ал яулыҡҡа. Ҡарт өйәңкенең
ҡыуышына уны ерләне...

“Хуш бул, хуш бул, хуш бул, бәғерем!” —
өйәңкенең үпте ҡыяғын;
атланды ла сапты атына,
осондортоп юрға тояғын,
яуҙаштары киткән тарафҡа.
Сүкеүенән тимер дағаның
сүгеп-уфтап торҙо юл-арҡа...

Шунан биреле яңғыҙ өйәңке
һағыштарҙан һыҡтай буҫлығып,
ауыл юлы тартҡан тапҡырҙан
әллә кемде көтә һағынып.
Тәрән олон ҡыуышлығында
уҡылмаған изге хис ята,
атылмаған ҡурғаш-үс ята
ал яулыҡта көйрәп... Тап шуға
ойой олон бөтмәҫ зар-моңға...

1956.

## Ауыр һәм еңел

Әрәсәйҙә бер заман
Көсөн эшсе күрһәткән:
Тәхетлене тәхетһеҙ
Ултырырға өйрәткән:

Николайҙың — “шарт!” бауыр… —
Ух, ауыр был, бик ауыр!

Йыйылғандар буржуйҙар:
“Ауҙы тәхет, нишләргә?
Керенский әфәнде
Терәк беҙҙең ишеләргә!”

Һуҡҡас халыҡ, тинтерәп
Ауған тағы был терәк.

Деникиндар, Колчактар
Һурған ҡындан ҡылысын:
“Бәйләп һалһаҡ мужикты,
Булырбыҙ сын ыласын!”

Турғай булған колчактар,
Сын ыласын — мужиктар.

Аптыраған Антанта:
“Һалған ҡулым ҡайта буш.
Ҡыҙыл ярҙа — ҡыҙылдар
Тора сөйөп ҙур ҡуҡыш…”

Антанта ла булғас хур,
Бик ауыр шул, бик ауыр!..

Эшсән халыҡ бил яҙып,
Алған Сүкеш-Урағын:
“Ярһыу Ерҙең биленә
Ҡыҙыл билбау урармын!” –

Ҡыҙыуланған Ер шары –
Ҡыҙыл билбау ҡомары!

Эштәр ҡайнай, көр күңел —
Һай, бик еңел, бик еңел!
Халыҡ еңһен шулай гел!
Хаҡлыҡ килһен шулай гел!

1956.

## 1957

***********************



### Яныу

Халҡымдың мин аҫыл моңдарын
Күкрәгемә көрмәп йөрөйөм.
Эс кенәйем тулы моң булғас,
Моңһоуланып үтте ғүмерем...

Көлһөндәр ҙә!.. Әммә белһендәр:
Иретәсәк ташты һулышым!
Йөрәгемде йолоп күкрәктән,
Осорамын илгә моң ҡошон...

Ҡайҙа мине был заң килтерер? —
Йә йәшнәтер. Йә бер бөтөрөр...
Илем бөтмәҫ ләкин — моң бөтмәҫ!
Хаҡ көндәргә хаҡ моң еткерер!

...Бүтәгәләр көмөш уҡала —
Ҡылғандары, сыңрап, йыр тиртә.
Сирғып күктән йондоҙ бер өтһә,
Һандуғасы сазын бер сиртә.

Буламын эҫеле-һыуыҡлы...
Ил һөйөүем ләкин һыуынмаҫ!

Ҡанмаç күреп көндө күҙҙәрем,
Һулап моңон йәнем тыйылмаç.

1957.

## Дәғүә

Төкөрәм мин һил тормошома,
Халҡыма ул файҙаһыҙ булғас.
Ҡайҙа алыш, ҡайҙа һәләкәт —
Ырғылайым, кереп киң ҡолас!

Уттан алып, һыуға һалайым
Ғүмеремде хаҡ юлым өсөн.
Килмәç шунһыҙ йәнгә тыныслыҡ,
Ҡанмаç шунһыҙ ҡанғыһыҙ үсем!

Ҡаршылармын, беләм, данымды
Ҡара гүрҙә — ни зыян унан?
Донъяға мин, түгел дан өсөн, —
Илем өсөн иләреп тыуған!

1957.

## Антым бар

Дау күтәрһә әгәр сысҡандар,
Баçтырырға уны бесәй бар.
Шау күтәрһә әгәр сабыйҙар,
Тынысландырырға әсәй бар.

Яу ябыртһа әгәр дошмандар,
Ҡайтарырға яугир халҡым бар.
“Халҡым өсөн яуҙа еңермен,
Йә үлермен!” — тигән антым бар.

1957.

## Теләк

Уҙған һайын зират янынан,
Килеп төшә бер ғәм иçемә:

“Беҙҙең һуңғы барыр йортобоҙ...”
Шом йүгерә шул саҡ эсемә.

Юҡ, дуҫтарым, кәүҙәм китһә лә,
Ҡарышырмын унда “барырға”.
Егелдем бит ерем йөгөнә,
Мәңге-мәңге бергә ҡалырға!

1957.

## Ҡоштар киткәндә

Һауаларҙа осҡан ҡоштарҙың
Ҡаңғылдашып үтеп китеүе
Хәтерләтә йәшлек таңымдың
Илкәйемдән ситтә үтеүен.

Сығып китеп, ҡайтып индем мин
Еркәйемә иҫән-сәләмәт.
Ғәзиз генә бәғзе дуҫтарым
Ятып ҡалды ләкин тәгәрәп...

Яҙҙар һайын ҡарап моңаям
Ҡаңғылдашып үткән ҡоштарҙы.
Ҡаҙҙар ҡайта, әммә ҡайтмаҫҡа
Оҙатҡайным шул мин дуҫтарҙы...

1957.

## Ер еләккәй

Ер еләккәй бешкән алланып
Дегәнәк аҫтында, өҙөлмәй.
Әрекмәнгә ҡалғас ҡапланып,
Еләкселәр уҙған эйелмәй...

Күреп торған ерһеү еләккәй
Еләклеккә егет килгәнен.
Ҡайын еләккәйе, мәлйерәп,
Егет ауыҙына ингәнен.

Ҡыҙыл ҡандай ҡалған яңғыҙы,
Ҡайғыларҙан ергә сүгәләп.
Ер еләккәй илап бойоға...
Тора ҡаплап һаман дегәнәк...

1957.

## Кем нисек...

Көндөң көнөн кем һуң өнәмәй!
Төрлө кемең ләкин төрлөсә
Ҡабул ҡыла уның шат нурын.
Ҡай бер бәндә ҡарпый — тик уның
Имеп наҙын, мәлйеп ятырға.
Ҡайһы ирҙәр ярһый — Ҡояштай
Ялҡынланып илгә балҡырға.

1957.

## Ҡайынҡайым, аҡ моңом

Аҡлыҡ атты ап-аҡ ҡайыным,
Күңелемә тәҙрәм төбөндә.
Йырлай-йырлай япраҡ ярҙы ул
Сыуаҡ майҙың ыуыҙ көнөндә.

Икәүләшеп икһеҙ һөйөндөк, --
Йылы елдәр йәнгә түгелде!
Һары былбыл ҡунып һайраһа,
Һары һағыш төпкә төңөлдө.

Мәңгелеккә төҫлө хозурлыҡ! --
Төштәр күреп йомдом күҙемде.
Асһам – ауа һары япраҡтар...
Һарылатты шауы йөҙөмдө...

Төштө инде ҡара ҡырауҙар,
Йәшем туңды, быуып юлаҡты...
Аҡ кәфенле ап-аҡ ҡайынға
Ишерелеп аҡтыҡ моң ятты...

Һыҙлай, һыҙлай һыҙғар елдәрҙән
Күҙем ағы — ғәзиз ҡайыным.
Ҡара илгә мине илтергә
Тәҙрә сиртә ҡара ҡайығым...

1957.

## Бәхет Ҡояшы

Ҡалҡа, тиҙәр, бәхет Ҡояшы
Ғүмерендә көллө бәндәнең.
Оҙаҡ йылдар, күҙем талдырып,
Бәхетемде күктән шәйләнем.

Ҡалҡмай, ҡалҡмай, һаман ҡалҡмай ул —
Үткәрҙемме йоҡлап таңымды?!
Күҙҙе әллә күктән ҡайырып,
Көс еткеһеҙ йөктәр тағылды?..

Алып барам, һалмай, йөгөмдө...
Юлым ауыр, тайғаҡ һәм текә.
Ҡояшымды, тимен, табырмын,
Ҙур йөк илтеп, иң ҙур бейектә.

1957.

## Ысыҡ тураһында

Ҡояш сыҡҡан саҡта йымылдай
Мең-мең ысыҡ ысын ынйылай.
Мең-мең төҫлө мең-мең күбәләк
“Ынйы”ларҙы үбеп йылпылдай.

Ҡалҡһа Ҡояш ҡайнар төшләккә,
“Ынйы”ларҙы эҫе өшкөтә.
Күбәләктәр ҡала бойоғоп:
Һәр береһен ҡара кис көтә...

Мөхәббәттә лә, тим, бәғзеләр
Нәҡ күбәләк — асы ымһына.
Бәхет — түгел йылтыр тамсыла,
Бәхет — фәҡәт ысын ынйыла.

1957.

## Дөрләү

Дөрөлдәүек йөрәк утымды
Ялпылдатып янып йөрөйөм.
Халҡым рухын, тиеп, йәнемдең
Йәшлек ялҡынына төрәйем!

Юҡ күреүсе... Дөрләү Ҡояшты
Һәр көн янһа ла бит күрмәйҙәр.
Йә күрмәйҙәр, йә: “Ҡыҙҙыра!” — тип
Әрләйҙәр...

Күрмәгәндең күҙен баҡтырам,
Әрләгәнгә әрем ҡаптырам.
Йөрәгемде төртөп дөмдәргә,
Ҡаралығын көндөң яндырам!

1957.

## Ни өсөн?

Алһыу таңдар һыҙып атҡанда,
Аҡ томандар тулғып аҡҡанда
Ап-аҡ ҡайындарҙы ҡосаҡлап
Һулҡып-һулҡып килә илағым...

Ни өсөн һуң килә илағым,
Дан табалмай талған өсөнмө?
Әллә юҡһа алтын-көмөшкә
Тейеналмай ҡалған өсөнмө?

Юҡ, дуҫтарым, килә илағым
Күкрәк тулы гәүһәр барлыҡҡа.
Шул гәүһәрҙе илгә һибәләп
Бирер өсөн ғүмер тарлыҡҡа.

1957.

## Ябайлыҡ

Ябайланыу өсөн берәүҙәр
Ябай кейем алып кейәләр.
Мин һуң нисек ябайланайым,
Ябай кейенеп гел йөрөгәс?

Ябайланыу өсөн берәүҙәр
Ауырыраҡ эшкә күсәләр.
Мин һуң нисек ябайланайым,
Бер ҙә еңел эш эшләмәгәс?

Ябайланыу өсөн берәүҙәр:
"Халҡым өсөн йән фиҙа!" — тиҙәр.
Мин һуң нисек ябайланайым,
Халҡым ни күрһә — шуны күргәс?!

1957.

## Ҡырыҫйән

Ҡырыҫйән һин, тиҙәр. Кешегә
Ылыҡмайһың, тиҙәр иптәштәр.
Нисек шыма ебәкләнәйем,
Киндерләнеп үҫкәс бик йәштән.

Самородка ла бит тышынан
Таш һәм балсыҡтарға ҡаплана.
Эсендәге ләкин саф алтын
Таҙа килеш мәңге һаҡлана.

1957.

## Һәйкәл

Хыялыйҙар хыялланалар
Үҙҙәренә һәйкәл һалырға.
Бронза йәки баҙыҡ гранит
Буҙарына улар аңында...

Теләр инем мин тик сабыйға
Күсерергә күҙ ҡарашымды.
Туҙан ғына булып осһам да,
Түкмәҫ инем шунан йәшемде.

Сабый, саңҡып, әйтһә: “Ҡанбаба,
Күҙең үтә бағам донъяға!
Илкәйемә булам ҡот-даға!” --
Булыр ине һәйкәл шул миңә.

1957.

## Кем үлһә...

Себен үлһә, сереп юғала,
Бүре үлһә, бурһып ыуала.
Ысын кеше үлһә, көрәшеп
Үткән юлында нур-эҙ ҡала.

1957.

## Хафа

“Олатай, һин ниңә киноға
Йөрөмәйһең? Унда атҡанын
“Аврора”ның бит күрһәтәләр,
Батырлыҡҡа ныҡ өйрәтәләр.
Күрмәгәс һин уны, -- юҡ дарман! --
Булалмаҫһың, тимен, ҡаһарман...”

“Хафаланма юҡҡа һин, балам:
Ул пушканы тоҫкап атыусы
Мин инем бит... Хәҙер көтөргә
Ҡала миңә һинең ҡалҡҡанды.
Ҡаһарманлыҡ ҡылып, Ватанды
Ҡалҡанлаһаң, бәлки, йөрөрмөн
Киноға мин, һине күрергә...”

1957.

## Нисек ?

Үлеү ғәйеп түгел, еңелеп
Үлеү ғәйеплерәк! Көрәшкә
Нисек итеп әҙерләнергә?
Сигенеүҙе ҡалай белмәҫкә?!

Быһың өсөн батыр ирҙәрҙән

Һабаҡ алыу микән ҡулайлы?
Әллә хәләл маңлай тирҙәрең
Түгеү үҙе һабаҡ буламы?..

1957.

## Ниңә?

Көн көләсен тойоп үҫәләр
Болот аҫтында ла сәскәләр.
Сабыйҙарҙы, һыйпап башынан,
Үҫтерәләр көләс әсәләр.

Сәскә генә улар булһасы
Илем баҡсаһында!
Тик тағы
Ниңә ҡай саҡ сәскә сәскәндә
Шыта икән шайтан таяғы?!.

1957.

## Булһам йәшен

Күктәр күкрәп, ерҙәр тетрәгәндә
Ҡарайым да йәшен утына:
"Йәшнәп-йәшнәп йәшәһәң ине!" — тип,
Болоҡһорға йәнем тотона.

Булһам йәшен, үтер инем йәшнәп
Туң йәндәрҙең йөрәк итенән.
Күкрәр инем, тонйор тойғоларҙы
Сафландырып озон килтерһәм.

Булһам йәшен, йәшнәп иртә-кисен,
Гиҙер инем тынсыу илдәрҙе.
Нур-ҡылыслап ярып асыр инем
Асылмаған ҡара төндәрҙе.

Һүнер иһәм — һүнер инем ҡапыл,
Сәсрәү яныып, тетрәү ҡабынып.
Йомоҡ күҙен тертләп асҡан донъя
Иҫләр ине мәңге һағынып.

1957.

## Дуҫлыҡ

Була, була шундай минуттар —
Үкһеп-үкһеп илә илағы.
Күҙ йәштәрен көллө донъяның
Ағыҙғандай йәнең улағы.

Һәм көтәһең шунда дуҫтарҙың
Бер йылы һүҙ әйтеп үтеүен.
Ҡараңғыла ҡалып һарғайған
Гөл көткәндәй Көндөң етеүен.

Томандарҙы таңғы ел ҡыуа,
Ҡайғыларҙы йылы һүҙ йыуа.

Иң ҙур байлыҡ — дуҫлыҡ, туғандар!
Һағынмаҫ кем яҡын дуҫтарын!
Дуҫ уртаҡлай дуҫтың шатлығын,
Ауырлыҡтарын һәм моң-зарын.

Дуҫың торһа йөрәк төбөңдә,
Тауҙай йөгөң еңел тойола.
Күкрәгеңде һырған һағыштар
Һарыланып һыртҡа ҡойола.

Йөҙ һум аҡса юҡтап ҡайғырма,
Йөҙ дуҫ ҡайғырт юҡтан табырға.

1957.

## Ҡурҡыу

Үҙемде мин хәтәр эштәргә
Тайяр ҡылып тәрбиәләнем.
Халҡым өсөн хаҡлыҡ һоралһа,
Йәнемде лә һис йәлләмәнем.

Әммә ҡыңғырлыҡта ҡыймылдап
Ҡылыс аҫманым мин билемә.
Биштән быуып эшсән билемде,
Хәләл хеҙмәт ҡылдым илемә.

“Бысраҡ был!” — тип ситкә тайманым,
Эшләй бирҙем шул бысраҡта ла.
Ҡара эшкә эшсән ерегеп,
Күндем ташҡа, тупраҡка ла.

Ҡайырынан кейеп сабата,
Ыҙандарҙың уҙҙым буйынан.
Тау аҡтарҙым, урман ауҙарҙым,
Ҡыуҙым һалдар Иҙел һыуынан.

Туғыҙ баллы штормдарҙа
Хәрби караптарҙы йөрөттөм.
Бөтәһе лә үтте башымдан...
Хәҙер инде бына ир еттем.

Инде бына хозур ир еттем,
Йөрәгем тик семтеп шом һала:
Һис арына ғына алмайым
Һыҙлатҡыс бер хистән донъяла:

Ҡурҡам, дуҫтар, ҡурҡам, ҡурҡам мин
Ғәмһеҙлектән, ялған ҡояштан...
Йөрәгемде ҡая ярырлыҡ
Ҡойғайным бит ҡаты алмастан!..

1957.

## Мөхәббәт

Көрәш ятты көйрәп алдымда,
Хиссиәткә форсат булманы.
Мөхәббәтем миңә офоҡтан
Ал яулығын алйып болғаны.

Һалды хәүеф йәнгә, саҡырҙы,
Өйҙө алға гәүһәр тауҙарын.
Ә мин уға ныҡыш ҡарыштым,
Гәүһәрҙәрен ғорур ауҙарып.

Йөрөмәһен, тинем, йән үртәп –
Өҫтөнөрәк ҡуйҙым үҙемде.
Аяҡ салмаһын ул эшемә!
Тилелеккә йәнем түҙемле!

Һүттем йылдар... Тиле-тилекәй
Офоғомдо тамам ташланы.
Тынды йәнем, тинем... Көндәрҙе
Олпатлығыма бағышланым.

Ҡылдым ҡарар: сабырлығыма
Саф алтындан һәйкәл һалырға!
Тик ни күрәм! -- Офоҡ артынан
Алһыу ялҡын тора ҡабырға! –

Баяғым шул ҡайтҡан әйләнеп!..
Дуҫтарым, аһ! — ни хәл итергә?!
Уттай бер ҡыҙ һалыр, тиеп, ҡуҙ,
Килмәгәйне олпат фекергә!

Ята эштәр янда ярылып,
Тора көтөп көйрәү көрәшем.
Тилелекте нисек тыйырға?!.
Тама, тама татлы күҙ йәшем...

1957.

## Йырсы теләге

Һыҙылып-һыҙылып таңдар атҡанда,
Һандуғастар ҡанат ҡаҡҡанда,
Шишмәләрҙең шалтыр һағышын --
Тулҡындарын ярға ҡағышын
Ултырып кем тыңлағаны бар?
Һулығып кем илағаны бар
Көмөш йырлы инеш ярында?..

Ерем кәүҫәрҙәре ҡырында
Кәүҫәрләнеп тыуһын йырым да!
Ҡағылһа бер — йырлатһын ине,
Яғылһа бер — илатһын ине.
Сылтыр сыңы суҡраҡ йәндәрҙе
Сыңратһын да тулатһын ине!

1957.

## Иш иттем

Мин, иҫ белеп тәпәй баҫкандан,
Ныҡышландым алға атларға.
Һуғып биткә ләкин ыҙғар ел
Тәкмәстерҙе ҡайһы саҡтарҙа...

Йыҡҡан һайын ҡырҡмыш ҡалҡындым,
Ҡыҫтым теште — булдым бик сыҙам.
Ә ел киҫте, киҫте туҡтамай,
Бәрҙе биткә ҡарлы саң-туҙан.

Һүттем йылдар... Әммә ҡаршы ел
Иҫте, иҫте, — киҫте, тынманы.
Сыныҡтым мин ҡаршы киршәлеп
Һәм иш иттем киршәү донъяны!

1957.

## Араҡыны яҡлау

*(иҫерек ауыҙынан)*

Араҡыны бик күп эстем мин,
Зыянын тик уның күрмәнем.
Була мыни зыян — урамда
Суҫка кеүек аунап йөрөгәнем?

Араҡыны бик күп эстем мин,
Фәҡирлек тик унан сикмәнем.
Фәҡирлекме — сит тупһаларҙа
Теләнселәп, сеңләп үткәнем?

Араҡыны бик күп эстем мин,
Ауырыу тик унан белмәнем.
Ауырыуmы — дер-дер ҡалтырап,
Ҡыу япраҡтай ғүмер һөргәнем?..

1957.

## Араҡы ҡолдарының йыры

Ожмах, тиҙәр, ожмах, тиҙәр, —

Ожмах шешәлә, тиҙәр.
Аҡсаһы күп бәндә генә
Унда төшә ала, тиҙәр.

Ә мин, кеҫәм һай булһа ла,
Төшәм көн дә ожмахҡа.
Эләкмәһәм ярар ине
Һуңынан бер тоҙаҡҡа...
Тамуҡлы бер аҙапҡа...

1957.

## Әсегән сөгөлдөр, сөсөгән бригадир

*(колхоз таҡмағы)*

Яҙын беҙҙең сос бригадир:
“Сөгөлдөр сәстек!” — тине.
Матайында мут маһайып,
Баҫыу буйынан елде.

Шытып сыҡҡас сөгөлдөрҙәр:
“Кәрәк утарға!” — тине.
Утағас, һирәкләтергә
Елле кәңәштәр бирҙе.

Бүкәнләнгәс “татлы тамыр”:
“Уңыш мул була!” — тине. —
Татлы силос — мал һыйҙары
Ямдарға тула!” — тине.

Сығарғанда: “Гектарынан
Фәләнсә бирә! — тине. —
Хужалыҡҡа сөгөлдөрҙән
Төгәнсә килә!” — тине.

Һалған саҡта ямға “һый”ҙы,
Һай, бригадир килмәне.
Ярым-йорто мут тракторист
Күмдерткәнен белмәне...

Елде түрәм машинаһы,
Тейәп рапорт ҡурҙарын —

“Гектарынан фәләнсәне
Һалдыҡ!” тигән йырҙарын...

...Барһаҡ ҡышын ям асырға,
Күмәкләшеп бер заман,
Йыйын халыҡ, аҡырышып,
Батты ямға бик яман...

Һөйрәкләргә батҡаҡлыҡтан
Трактор килгән ине,
Тракторисы менән ҡуша
Сумды ла китте, тиле...

Дырылдағы ҡалды батып,
Тракторсыһын сығарҙыҡ:
Әсеткенән иҫергән ир...
Үҙебеҙ ҙә боларҙыҡ...

Баҡһаң, баллы сөгөлдөрҙән
Хасил булған апара.
Танауға бер бәрелеүҙән,
Аяҡтан да ауҙара...

Айнып саҡ-саҡ, бригадирҙы
Килтерҙек һөйрәп ямға:
“Әсеткәнһең балтамырҙы,
Рапорт-ҡур болғап алдан!

Уңыш ҙур, тип, ваҡытынан
Элек иҫергән инең.
Ямда ҡыржып әсегән бал
Похмелең була һинең!..”

1957.

## Атым менән һөйләшеү

Ҡыуан, атым, ҡыуан, ҡанатым:
Алда беҙҙең — иген баҫыуы.
Байман ғына байҡап барайыҡ
Буталланып башаҡ балҡыуын.

“Ҡорос ат”та һөрҙөк был ерҙе...

Ә бит борон атай-бабайҙар
Ағас һуҡаларға бөгөлөп
Бураҙнаны саҡ-саҡ ярғандар.

Баҫҡан һағыш улар маңлайын:
Һиҙенгәндәр йот ҡыш килерен.
Шәйләгәндәр, йәнде тетрәтеп,
Кемдәр — ҡалыр, кемдәр үлерен...

Һинең менән миңә нимә ул! —
Яҙмышыбыҙ — көләс заманда.
Алтын диңгеҙ, елгә тулҡынып,
Бирә сәләм иркен яланда.

Башын баҫҡас баҙыҡ башаҡтар,
Комбай көйләп урып алырбыҙ.
Нужа-бабай ҡартты бәхилләп,
“Хуш бул!” — тип ҡул болғап ҡалырбыҙ.

1957.

## Мүскә

Ҡара төндө ярып үттем мин
Яҡтылыҡҡа табан... Көрәштең
Әсе утын, дәртен татыным,
Еңеү шатлығына өлгәштем.

Мүскә ләкин, еҫкәп түбәндән
Табаныма ҡатҡан батҡаҡты,
“Бысраҡ” тигән ярлыҡ-йәп таҡты...

1957.

## Шағир ҡайғыһы

Ат тулаһа өҙөлә үләндәр,
Ел тулаһа бөгөлә ҡайындар.
Ә мин ниңә былай бөгөлдөм,
Бөгөлөргә ниндәй ҡайғым бар?

Бөгөлдөрҙө кем һуң көнөмдө,
Ниңә былай бойоҡ, бойоҡ мин?

Ҡайғырамын әллә ҡайғынан,
Әллә тынын уның тойопмо?..

...Килде был хәл миңә йәштән үк:
Өйрәндем мин шиғыр яҙырға.
Өн етмәй тик илем күңелен
Өнәтерлек һүҙҙе табырға.

Шуға күрә бойоҡ, бойоҡ мин,
Баҫты шуға ауыр ҡайғылар.
Шағир өсөн бынан ҡатыраҡ
Ауырыу бар ниндәй, ҡайғы бар?..

1957.

## Өлгөрөү

Өлгөрҙөм мин! Муслы беләктә
Тимер өҙгөс көс бар — белегеҙ.
Күрерһегеҙ кемде хеҙмәттә —
Тау ҙурлыҡ эш миңә бирегеҙ!

Ҡаға йөрәк, ҡарғып бөркөттәй,
Кирәм ҡанат ярһып — күрегеҙ.
Ваҡлыҡтарҙан мине аралап,
Тау ҙурлыҡ эш миңә бирегеҙ!

Сәмем тарта — тауҙар аҡтарта,
Көтә ирлек Тыуған илебеҙ.
Ҡыйғырларға ҡыйыу үрҙәргә,
Тау ҙурлыҡ эш миңә бирегеҙ!

Ил йән өрҙө — егет еткерҙе,
“Егелергә ваҡыт!” тиегеҙ.
Күсерермен хатта шар-Ерҙе —
Тау ҙурлыҡ эш миңә бирегеҙ!

1957.

## Ысын шағир һәм мин

Алһыу таңдар алҡып атҡанда
Ысын шағир сыға сәхрәгә,

Тәбиғәттең сихри ҡылдарын
Сиртә-сиртә илһам эҙләргә.

Офоҡ өҫтөн ҡанға мансылтып
Ҡалҡыу мәлен Көндөң аулай ул,
Сыйнап үлән үреү шатлығын,
Ҡолаҡ һалып ергә, тыңлай ул.

Нәзәкәтлек илә нескәлек
Ала тиреп — йәнгә һеңдереп.
Һәм йәбешә илһам ялына,
Пегас-тайын йылғыр елдереп.

Йәшәй шулай ысын шағирҙар...
Булһам да мин көн-төн ҡырҙарҙа,
Пегасымды таба алмайым,
Сихриәтле йырҙар йырларға.

Шағирәнә күрә белмәйем
Көндөң төндән балҡып сыҡҡанын.
Сөнки ул саҡ кәбән ҡоям мин,
Күҙҙәремә тоҙло "сыҡ" тамып...

Ҡыштырҙауын ҡурпы-үләндең
Ишетәм тик уны сапҡанда;
Ос һәнәге менән осортоп,
Күбәләрҙе күккә атҡанда...

Торналары, сыңрап торһа ла,
Бирә алмай шиғри отошто.
Һөйәлдәре һымаҡ усымдың,
Йырҙарым шул ылғый ҡытыршы...

Үҙем төҫлө ябай кешеләр
Аңлар, тимен, ябай моңдарҙы.
Төҫһөҙ думбырамдың төбөнән
Сыңратам бит төпкөл ҡылдарҙы.

1957.

## Шиғыр яҙам

Шиғыр яҙам, ләкин күңелем
Баҫылыр, тип, ул, һис ышанмай.

Уңышһыҙлыҡ булғас юлдашым,
Эс бошонҡо, ҡулға эш бармай.
(Күкрәгемә монар-моң һалған
Йылғалар һәм күлдәр, саф гөлдәр:
“Баҫылыр ул, баҫылыр”, — тиҙәр.)

“Шиғыр яҙыу — арыу эш түгел,
Яҙып-һыҙып үтер ғүмерең.
Яңғырамаҫ — һүнер өн-кәрең...” —
Тип һыҙлана, илай йәш күңел.
(Йәшләй мине ләкин моң-йырға
Дәртләндергән үлән, ағастар
Шыбырлайҙар: “Онота алмаҫтар!”)

“Һалып ҡармаҡ, сабаҡ сиртмәгәс,
Суртаны ла сыҡмаҫ... — ти шуҡ ел. —
Яҙмышың бит һинең бик аҙмыш...
Өлөшөңдән көмөш сиртә бел!”
(Ләкин сәсеп үҙем үҫтергән
Алтын мыйыҡлы туҡ игендәр:
“Һин бит шағир! Шиғыр яҙ!” — тиҙәр.)

1957.

# 1958
**********************

## МӘҪӘЛДӘР ҺӘМ МИҪАЛДАР

### Селәүсен һәм себештәр

Тиреҫлектә тирләп ҡаҙынмыш
Ике себеш күрҙе ҡояшҡа
Төләп ятмыш ҙур селәүсенде.
Суҡышлының йоро һөйләнде:
“Ҡара-ҡара бынау иблесте —
Ята биләп беҙҙең тиреҫте!
Үҙе оҙон, үҙе хәшәрәт!
Ташла алып — китһен сәсрәп!
Суҡыш һинең шуға килешле!”

“Юҡ! — тип бүкҫә кирә туғаны, —
Бөгөргә һин тейеш дуғаны!
Томшоҡ һинең сөнки ослораҡ —
Минекенән биш ҡат мөслөрәк!”
Бәхәсләшеп торғас тиктәҫкә,
Китте улар атай-әтәскә,
Бер-берeһен әрләп, кәңәшкә.

Әтәс иһә тыңлап быларҙы,
Сыҙамайса сыйнап боларҙы:
“Эй ахмаҡтар! Бәлә -- башҡа һеҙ!
Селәүсен ул! Тотоп ашағыҙ —
Һеҙҙең бит ул татлы ашығыҙ!
Юҡ күргәнем һеҙҙәй йүләрҙе!” —
Тулап үҙе әтәс йүгерҙе.
Тиреҫлеккә ләкин барғанда
Елдәр иҫә табыш урынында...

Фәһем:

Өйрәтмәгәс йәштән себеште,
Үҫтерергә ниңә суҡышты?..

1.02.1958.

## Төш

Фәйзи ағай күрә төшөндә
(Әллә төштә, әллә өнөндә?..)
Бер ғәжәп ил: унда йылғалар
Ысын араҡынан ағалар.
Һәм "закускы" төрлө урында,
Һатыусы йә һаҡсы юҡ унда
(Йылғаны кем эсеп бөтөрһөн!) —
Теләһә кем килһен, һемерһен!

Фәйзи ағай сума ашығып
(Алып тормай хатта ҡашығын!..)
Араҡының урғыл тошона.
Кинәнә ир... Әммә бошона
Уйлап бер уй: "Их-ма! — булһасы
Бер күҙәтсе йылға ярында,
Яуыз бисәм килгән сағында
Хәбәр ҡылып миңә торһасы!"

2.02.1958.

## Комсомолка Һәҙиә

Комсомолка Һәҙиә
Гүзәл сифатҡа эйә:
Тыңлаулы ул, егәрле,
Күңеле көр, эш һөйә.

Колхоз ҡайҙа ҡушһа ла,
"Эһ!" тимәй был ҡыҙ бала.
Сөнки ҡайнар йөрәге
Иле өсөн һыҙлана.

Өлгө унан алығыҙ,
Алғы сафта барығыҙ.
Һәҙиәләй булырға
Тырышһын һәр берегеҙ!

3.02.1958.

## Айыу — етәксе

Урман ҡоро — кейек-януарҙар
Йыйылдылар кисен бер ергә
Айыу-етәксенең хисабын
Тыңларға һәм баһа бирергә.

Төп өҫтөнә һалып табанын,
Айыу хисап бирә башланы:
“Йыл башынан кемдер ашаны
Ун ҡуянды... Кемдер егерме
Тауыҡ халҡын йолҡоп өлгөрҙө...
Ун бишләп күс яҙҙы балынан
Һәм һуйылды мышы, өс болан... —
Был хәлгә йән, йөрәк түҙерме?!
Нәфрәтемдән дөрләп мин янам!”

Һәм йыйылыш күсте һөйләргә:
“Бында һыҡтау, илау, ғәм кәрәк!
Айыу ағай теҙгән телмәргә
Түҙә алмай һыҙлай йән, йөрәк!” —
Тине Бүре. Төлкө: “Бик дөрөҫ
Әйтте беҙҙең Айыу-ағабыҙ,
Айыу-ағаның һәр һүҙенә
Ике ҡуллап тамға һалабыҙ!” —
Елле тәҡдим шунан индерҙе,
Туҡтатырға ваҡыт, тип, һүҙҙе.
Бар йыйылыш хуплап баш эйҙе.

Әммә әсе Ҡуян тауышы
Телде ҡапыл тынлыҡ ағышын:
“Ағай-эне, зинһар, тыңлағыҙ!
Баҫып башты, төплө уйлағыҙ!
Ҡандай оятһыҙлыҡ!.. Ҡуяндар
Бүре-бурҙан бит мур булғандар,
Тауыҡтарҙы Төлкө ашаны,
Ә бал ҡорттарын һәм мышыны
Айыу-ағай үҙе... Ил күрҙе!..”

Шул урында Айыу Ҡуянға:
“Яласы йән!” — тиеп аҡырҙы
Һәм сәсрәтте Суҡмар бахырҙы...

Фәһем:

Айыу-аға түрә булғанда
Хөкөм һөрөр Суҡмар урманда.

14.02.1958.

## Талант һәм талап

Бик талантлы Мышы йәшәгән,
Ул бик оҫта һүрәт эшләгән.

Таң ҡалғандар кейек-януарҙар
Унын бумалаһы көсөнә:
Кәбеҫтә йә кишер төшөрһә,
Йүгерешә икән кәзәләр
"Йәшелсә"һен умырып "ашарға".
Ул яһаған һүрәт-ояға
Ябырыла ҡош-ҡорт "йәшәргә"...

Баплап бер йыл тирен ағыҙғас
Пейзаж полотноһы өҫтөндә,
Килтергән, ти, шуны хөкөмгә
Күргәҙмәсе башлыҡ Бурһыҡҡа.
"Бик талантлы әҫәр! Бөгөн үк
Күргәҙмәгә элеп ҡуйырлыҡ,
Тик бер "йөй" бар: шалы бик йоҡа". —
Тигән Бурһыҡ...
Мышы ҡыш буйы
Полотноһын ипләп төҙәткән,
Ә яҙ еткәс илтеп күрһәткән.
"Яҡшы! — тигән Бурһыҡ. — Бөгөн үк
Күргәҙмәгә элеп ҡуйырлыҡ,
Тик эс боша яҡты тон ныҡҡа".

Йәй оҙоно Мышы эшләгән,
Яҡты тонды тоноҡ иттертеп.
Ҡара болот яһап ҡуйыртҡан,
Көләс Көндөң нурын киҫтертеп.
Алыр өсөн буяу, ыштанын
Сығарып ул һатҡан толчокка.
Бисәһенең кейеп юбкаһын,
Полотноһын илткән Бурһыҡҡа.

“Яҡшы! — тигән Бурһыҡ. — Бөгөн үк
Күргәҙмәгә элеп ҡуйырлыҡ,
Тик шуныһы...”

Мышы был юлы
Тыңламаған Бурһыҡ хөкөмөн —
Ҡасҡан сығып... Һәм бер сусҡаға
Картуф ҡаҙышырға ялланған,
Алыр өсөн ыштан баҙарҙан...

Фәһем: маҡтап талантты бик аҙҙырма,
Һуңғы ыштанынан ләкин яҙҙырма.

15.02.1958.

## Ҡунаҡсаһын ҡайғыртҡан

Дәү кетәктә торған тауыҡтар...
Кетәк ҡарауылы Аҡылҡарт
Сама белеп кенә ашатҡан,
Етһен, тип, ем яңы башаҡҡа.
Ҡупҡан фетнә, ләкин бер көндө
(Аҡылҡарт аҙ бирә, тип, емде)
Көр Әтәсле бер ҡунаҡсала
(Башҡа ҡунаҡсалар шым ҡала.)

Сибәр тауыҡ ханымдар һүҙен,
Сеңләшеүен йәш себештәрҙең
Тыңлай-тыңлай Әтәс алйыған,
Ем келәте яғын аңдыған,
Тапҡан юлын еңел туҡлыҡтың,
Мутлыҡтың... —
Ҡунаҡсаһын артҡы төндөктән
Келәт бураһына йөрөткән...

Шунан һуң, ти, мул йәшәгәндәр:
Тапап-тапап ем ашағандар,
Яҫтыҡ яһап ем түшәгәндәр —
Мохтажлыҡты улар оноҡан,
Мут ҡунаҡса, йырлай туҡлыҡтан!
Башҡа ҡунаҡсалар, ти, бөлә
(Емле келәттә бит ел елә...).

Февраль бурандары ҡоторғас,
Тәпәйҙәрҙе ҡуша туңдырғас,
Ауған ҡатып арыҡ тауыҡтар.
Күрҙәрен дә аслыҡ алйытҡан...

Келәт төбө таҡыр... Аҡылҡарт
Үҙ ҡайғыһын ахыр ҡайғыртҡан:
Харам үлтермәҫкә ҡоштарын,
Берәм-берәм киҫкән баштарын
Һәм оҙатҡан "Ҡаҙан-баҙар»ға.
Әтәс төшкән башлап ҡаҙанға...

Фәһем:

Тик үҙенең ҡунаҡсаһын ҡайғыртҡан —
Бар кетәктең халҡын баштан яҙҙыртҡан.

10.02.1958.

## Ҡуян — бригадир

Урман янғас, кейек-януарҙар
Урман үҫтерергә булғандар.
Имән туйралары йыйырға,
Һәм ултыртып көҙөн ҡуйырға
Беркеткәс һүҙ, итеп бригадир
Һайланған, ти, ҡылый Ҡуян-ир.

Киткән Ҡуян эшкә әйтергә.
Кергән килеп Керпе-фәҡиргә:
"Ҡоҙа, әйҙә, туйра йолҡайыҡ!"
"Уй ҡоҙаҡай, минән толҡа юҡ! —
Тигән Керпе. — Биҙгәк тота ныҡ"...

Ҡуян меҫкен баҙнат итмәгән
"Ауырыу"ҙы эшкә ҡыуырға,
Сирткән тәҙрә, килеп Һыуырға:
"Ҡустыҡайым, эшкә сыҡҺаңсы,
Бергәләшеп туйра йолҡҺаңсы!"
(Был мәл Һыуыр шешә бушатҡан,
Бәшмәк ҡабып, саҡ тел ҡымшатҡан:)
"Һәй ҡылый күҙ, юғал күҙемдән!
Урмансыны эҙлә үҙеңдән!"

Башы ҡатып, киткән Бүрегә
Ҡуян (ҡурҡҡан ләкин керергә).
Өң ситенән генә ҡысҡырған:
“Урман кәрәк һиңә бик, туған.
Киттек, әйҙә, туйра йыйырға!”
Ыржайтҡан теш Бүре бахырға:
“Кил-кил, ҡустым, тик бер ҡабайым!
Эшкә шунан йырлап сығайым!”

Ишеткәстен Бүре бойороғон,
Ҡыҫҡан Ҡуян сонтор ҡойроғон,
Юртаҡлаған Айыу яғына.
Тайыш табан уны һағына —
Аҫҡан ҡаҙан, бысаҡ ҡайраған...
Юйған эҙен Ҡуян артабан...

Фәһем:

Эш башына ҡуйһаң ҡуянды,
Тарҡалыр эш, һүтеп донъяңды.

5.03.1958.

## Әптерәй

Аяҙ, аяҙ көндәрҙә
Йоҡлап торҙо Әптерәй.
Ямғыр, ямғыр көндәрҙә
Бойҙай урҙы Әптерәй.

Иген һалыр миҙгелдә
Хәмер һалды Әптерәй.
Ашлыҡ янғас көшөлдә,
Көрәк алды Әптерәй.

Ҡарлы көҙҙә туңға ер
Һөрә барҙы Әптерәй.
Һабанына йәбешеп,
Туңып ҡалды Әптерәй...

1958.

## Бер өйәңке һәм имән

Күрше булып, ҡорҙаш булып аҡланда
Бер өйәңке менән имән үҫтеләр.
Япраҡтарын ярып, таңдар атҡанда
Ботаҡ һайын һары былбыл көттөләр...

Һутлы йәшлек һүнде һары ҡойолоп —
Олпат олон инде хәҙер ағастар.
Һәм имәнгә әйтте өйәңке көлөп:
“Бауыр баҫтың, туған, баш-күҙ алғас та!

Кәрәк ниңә улай тоҡом фәстереү —
Һәр тамырың һайын шытҡан биш бала.
Мөмкинме һуң уларға һут еткереү!
Һурһа улар, үҙең өсөн ни ҡала?!

Алһаң ине минән, дуҫҡай өлгөнө:
Балам да юҡ, сағам да юҡ янымда.
Һурған берем — үҙемдеке, билгеле.
Ғүмер итәм бөгөлмәй ҙә талғынмай!”

...Бер көн ҡапыл көслө дауыл ҡубынды —
Өйәңкебеҙ биле һынып йығылды.
Ә имәнгә терәк – туйра-улдары.
Бирешмәне -- һелкенде тик ни бары.

5.03.1958.

# 1959

***********************




## Тормош юлы

Тормош юлы — ормош юл шул ул,
Уйын түгел уны үтеүе.
Дуҫ-иштәрең күмәк булмаһа,
Ҡыйын икән донъя көтөүе.

Дуҫ-иштәргә таян — таймаҫтар,
Кирһәң күкрәк ҡаршы елдәргә.
Яңғыҙ-ялпы, йәнен бирһә лә,
Ирешалмай ниәт тигәнгә.

Ярты юлда янып ҡала ул,
Ныҡ ҡыуылып ауған юрғалай.
Ғүмер буйы зарлы күкрәген
Әсе һағыш ҡорто йырғалай...

1959.

## Хәтәр хәл

Һары һағыш, монар-моңдарҙы
Йылдар буйы ҡымтып йөрөнөм.

Бүлеп бирер кемем булманы,
Янып-көйҙөм бары бер үҙем.

Ҡайтыр әле, ҡайтыр, тинем мин,
Һөйгән йәрем алыҫ илдәрҙән.
Йөрәгемде бүлеп бирермен,
Айныр йәнем ауыр йөктәрҙән...

Ҡайтты-ҡайтты бына яныма,
Ҡойоп нурын, көләс Ҡояштай!
Ҡосоп үптем ҡыҫып... Моңома
Ҡапты ялҡын ҡайнар Ҡояштан.

Күсте күлгә һары һағышым,
Китте төнгә монар-моңдарым.
Ҡалды йөрәк моңһоҙ, һағышһыҙ...
Талды ҡатып сыңрау ҡылдарым...

1959.

## Күҙ нурымды

Берҙән-берем, күҙ нурым бит ул —
Нахаҡ һүҙҙәр әйтә күрмәгеҙ.
Йөрәге саф, наҙлы хискә мул —
Ғәйбәт һатып йәнен һүрмәгеҙ.

Һеҙ хур һалған һайын, ҡәҙерле
Була бара ул минең өсөн.
Болара, тип, болот-йәберле,
Кәметмәҫ Көн йылытыу көсөн!

Шуны ғына һеҙҙән һорайым:
Арабыҙға, зинһар, кермәгеҙ.
Үҙем ҡыуарһам-ҡыуарайым,
Күҙ нурымды өҙөндөрмәгеҙ.

1959.

## Гөлбәҙәр

Һағынып, һағынып барып ингәйнем,

Сәләмеңде хатта бирмәнең.
Ялҡынланһын йөрәк, тигәйнем,
Боҙ һыуығың менән көрмәнең.

Ғинуарҙа селлә зәһәре
Туңдырманы тынды был ҡәҙәр...
Һулышың бик йәнгә ҡәһәрле —
Ҡайҙа гөлөң, гөлһөҙ Гөлбәҙәр?!.

1959.

## Кем ул?

Дөмфи тиҙәр ине мырҙаны,
Ялҡаулығы, бурлығы өсөн.
Байыҡҡайны, Дөмфиулла тип
Беркеттеләр хөрмәтле исем.

Ябылғайны бер мәл төрмәгә,
Дөмпөш тинеләр был кешене.
Уйлап, уйлап аңым көрмәлә —
Кем һуң уның ысын исеме?

1959.

## Балта

Шыма һаплы һалҡын балтаны
Күтәрәм дә кире төшөрәм.
Ҡарағайҙың һары ҡатламын
Ҡайырғансы, һағаҡ сөңөрәм.

Сәсеп сатҡы, шартлап осалар
Ҡалын таптар тирә-яғыма.
Йәйпеһенә ерҙе ҡосаҡлап,
Ауа олон, ауа яй ғына...

Уфтап ҡуя урман, бошоноп...
Аҡ ҡайындар һығылып илайҙар.
Һуйҙан уҫаҡ, мәғрур шыршылар
Минән, сүгеп, шәфҡәт һорайҙар...

Белмәй шәфҡәт ләкин йот-балта —
Ҡырҡыр өсөн балта ҡойолған.
(Кешеләрҙе турай ҡай саҡта,
Эш итһә ул иблес ҡулынан...)

“Ярай әле, — тиеп йыуанам, —
Ипле ҡулда уйнай был ҡорос...”
Ә төндәрен илап уянам
Аҡ ҡайынды ҡосоп... Ҡурҡыныс...

29.11.1959.

## Хөкөм

Тиң күрмәнең мине үҙеңә —
“Әрпешбикә һин!” тип хурланың.
Ҡол ҡатындай ҡаты иҙелдем,
Ул хаҡта тик уйлап торманым.

“Һинең менән йөҙөм ҡыҙара,
Томшайған!” — тип ата инең кәр.
Ләкин ҡатҡан итектәреңде
Йыуғанымда итә инең йәр...

Күренергә бергә оялдың,
Тиңһенмәнең “тупаҫ”ты, беләм.
Һыйланы кем ҡунаҡтарыңды?! —
“Тупая”ның ҡулдары гелән!

“Культураһыҙ”, “тупаҫ” усаҡта
Ғаилә утың янды ялланып.
Ҡыҙырҙың һин әммә урамда,
Ҡараҡ бесәй кеүек яланып...

Мәңгелеккә биргән вәғәҙәң
Мең көнгә лә барып етмәне.
Һөйөү эҙләп яңы сибәрҙән,
Сығып киттең өйҙән, йөкмәнеп.

Ул сағыңда “яман” инем мин,
Мин ғәйепле инем барыһына...
Ас бесәйҙәй инде тилмереп
Ултырғанһың ҡайтып ҡаршыма.

Тубаларға тәүбә әҙерһең,
Тубыҡланып һәм һорап яза.
Бәғеремдән киткәс ҡәҙерең,
Айнығыуҙан инде ни файҙа!

Ят бәндә һин миңә, балаңа! —
Тоҡсайыңды тот та сығып кит.
Табылмаһа фатир — ҡуныр кит,
Өмөтөңдө мәңге йығып кит!

5.12.1959.

## Тәбиғәт тауышы

Киң яландарҙа,
Тар үҙәндәрҙә
Хәтфәләй йәшел
Үләндәр үҫә.
Ҡояш нурҙары
Алһыу һәм һары,
Зәңгәр һәм һоро
Гөлдәргә төшә.

Эсә нурҙарҙы
Аҫыл гөлдәрем
Каса тултырып,
Һурып-йотлоғоп.
Сәскә-таждары —
Йылҡылдай бары,
Көләс Ҡояшҡа
Үркеп-ынтылып.

Сөңгөрҙәшәләр
Гөлдәр үҙ-ара,
Алһыу иренгә
Ирен ҡуйышып:
— Ҡояш ҡандай шат!
— Һауа ниндәй пак!
— Ниндәй тыныслыҡ!
— Ниндәй тыныслыҡ!

Елгә елпенеп

Алалар гөлдәр:
— Иҫһен саф елдәр!
— Иҫһен саф елдәр!
Дағалы аттар
Иҙмәһен беҙҙе,
Ҡан буямаһын
Аҡ йөҙөбөҙҙө
Мәңге лә! — тиҙәр.

Ҡушыла уға
Урман тауышы,
Елдең ҡурайы,
Һыуҙың ағышы;
Баллы болондар,
Яллы баҫыуҙар!
Уйнаҡлай ҡолон,
Хисе ташыуҙан!

Ҡая өҫтөнән
Ел елеп үтә,
Ҡая аҫтынан
Һыу һүлеп үтә —
Ил буйлап улар
Саф теләк илтә:
— Иҫһен пак елдәр,
Үҫһен аҡ гөлдәр,
Ер булһын тыныс,
Күк булһын тыныс,
Бөтһөн ҡурҡыныс!
Бөтһөн ҡурҡыныс!

29.11.1959.

# 1960

***********************

## Яҙ шатлығы

Яҙ һулышын тойоп кем туламай,
Типһә әгәр типсеп йөрәге?!
Көн битен беҙ боçлап ятҡан ҡара
Баçыу тупрағында күрәбеҙ.

Дәртләнәбеҙ, бағып ер-әсәгә,
Табан тойоп йәнле йылыһын.
Шыттырабыҙ, татлы хыялланып,
Башаҡтарҙың шаулы, ҡуйыһын.

Гөрләй-гөрләй гиҙә комбайндар,
Туҡлыҡ шауын шаңда ыратып.
Йырлай-йырлай елә машиналар,
Арбаһында алтын нурлатып.

Һәм шатланып сыңрай бөйөк Ватан
Сәхрә сирткән сихәт көйөнә...
Күрһәм яҙын боçлап ятҡан ерҙе,
Йөрәккәйем күккә сөйөлә.

1960.

## Беҙҙең менән

“Ленин үлде...”
Кем һуң ышаныр
Был хәбәргә?!
Табут... мавзолей...
Траурлы ҡара таçмалар —
Ленин һуңы булала мыни?!

“Үлем” һүҙе менән аталған
Есемдәрҙең әүерелеше

Мәңге тере Ильич исеменә
Булһын икән ҡалай килешле?!.

Ғинуар еткән һайын, йөрәктә
Әсетһә лә яра, ҡан һауып,
Ильичтың беҙ мыҡты яурынына
Яурын терәп алға атланыҡ.

Еңеүҙәрҙә, төңөүҙәрҙә лә
Булды бергә гел беҙҙең менән.
Ҡырҡ өс йыллыҡ данлы-шанлы юл
Ленин менән бергә үтелгән.

Атайҙарға Ильич исеме
Электрик утын килтерһә,
Инде йыһан тәрәнлегенә
Ракеталар булып һикерә.

Ленин йөрөй гиҙеп Ер шарын,
Ҡыҙыл әләм һәм икмәк тотоп.
Михнәт сиккән ярлы өйҙәргә
Тоҡандыра ул өмөт уты.

Бишектәге һәр бер сабыйҙы
Һөйә йылы ҡулдары менән:
“Күрерһең һин бәхет нурҙарын,
Бәпәй генәм, бәләкәс кенәм!”

Ленин йәшәй!
Ленин — халыҡтар
Йөрәгенең ҡан тибеше ул!
Яңы быуын һайын яңынан
Тыуа торған бөйөк кеше ул!

Һәм беҙ һаман, һаман тойорбоҙ
Көрәштәрҙә Ильич яурынын.
Һуңғы ғаләмдәрҙе яуларбыҙ
Ленин менән ҡуша ябырылып.

22.04.1960.

## Һалҡын елдәрҙә

Һалҡын елдәр елгән көндәрҙә

Ике йөрәк дөрләп көрештек:
Шашҡын хистәр ялҡын дөргәнгә,
Утты утҡа яғып үбештек.

Был дөрләү тик күпкә барманы —
Тартты һине, тартты эштәрең...
Үтте йылдар... Тормош бураны
Китте күмеп утлы эҙҙәрең...

Ә мин янам... Янғын-йәнеңде
Көтәм, көтәм һалҡын елдәрҙә.
Һүндермәйсә яғып шәмемде,
Төндәремдә илтәм көндәргә...

Ҡалғый-ҡалғый тыңлап ултырам
Талғын елдең һалҡын һағышын.
Ҡағып тәҙрә, талғын йоҡомдан
Тертләт, тертләт, утлы яҙмышым!

1960.

## Юғалған моңдар

Һалҡынса кис. Тымыҡ. Ағастар
Ауырайып, һәленеп торалар.
Һаҡмар аръяғында, күкелдәп,
Кәкүктәр күк туйын ҡоралар.

Ауыл ауҡан... Торам яңғыҙым
Уйсан-моңсан ҡапҡам төбөндә.
Булған аҙмы бындай ҡапҡалар,
Моңло-зарлы миндәй күңелдәр!

Һеңгән ҡайҙа ҡапҡа йырҙары?
Сумған ҡайҙа йөрәк моңдары?..
Мин тейешмен йырға һалырға,
Быуаттарҙан йолоп шуларҙы!

1960.

# 1961

**********************

## Кәбәсе хыялы

Кәбән ҡоям зәңгәр таңда елкенеп,
Күккә күбә менеп китә елпенеп.

Минут һайын үҫә бесән-тау, үҫә.
Тирҙәремде һөртөп таңғы ел иҫә.

Шыбырлашып серләшә ағастары,
Сутылдашып һайрай һандуғастары.

Ҡоям кәбән, һәм үҙем хыялланам:
Киләһе йыл тир аҡмаҫ былай яман.

Болонлоҡҡа килер көслө машина,
Күбәләре сорғор өйкөм башына —

Күҙ йомғансы тауҙай эҫкерт ул ҡойор,
Күҙ асҡансы ослап башын һәм ҡуйыр.

Мин нишләрмен? Их, уҡырға китермен!
Шул егәрле “һәнәк”те эшләтермен.

Был хыялым, бәлки, ҡоро хыялдыр?..
Ә шулай ҙа күңел күгем уяуҙыр...

1961.

## Шишмә

Тау шишмәһен күргәнем бер бар ине,
Үҙәнкәйе уның иллә тар ине.

Һыуҡайы ла наҡыҫҡай ине инде...
Ҡолаҡ баҫып ләкин ҡасаһым килде,

Сыҙай алмай ул шарлаған тауышҡа...
Аҡты шаулап, аҡты Ҡояш байышҡа.

Төштө шашып ташлы бейек тауынан,
Киң далаға йәйрәне-китте унан.

Инеш инде уға уңдан, һулдан да —
Күрәйҙе һыу, инешле һыу булғанға.

Һүрәнләнде ҡолаҡ ярғыс тауышы,
Олоғайҙы, ҡоласланды ағышы —

Инде хәҙер үҙәне киңәйҙе шул,
Илгә һөйләр һүҙҙәре күбәйҙе шул...

1961.

## Был ҡулдар

Күргәнем бар завод цехтарында
Йәшен кеүек йәшнәр ҡулдарҙы.
Үрнәк итеп аҫыл эшселәргә
Йөрөтәләр маҡтап уларҙы.

Күргәнем бар иркен баҫыуҙарҙа
Иген иккән ипле ҡулдарҙы.
“Ошо ҡулдар илде бөтәйтә”, — тип
Бик ҙурлайҙар гелән уларҙы.

Һәм күрҙем гел бишек тирбәткәнен,
Көйҙәр көйләп, мең-мең ҡулдарҙың.
Йөрәк йылыларын түшәгәнен
Аҡ юлына ҡыҙ һәм улдарҙың.

Күрҙем йәнә ошо һаҡ, пак ҡулдар
Йот яуына ҡорос һалыуын.
Ғүмерҙәрҙе әжәл тырнағынан,
Йәнен биреп, йолоп алыуын...

Кем ҡулдары ине һуң был ҡулдар —
Бик эшлекле, тилбер, һәләтле?
Улар ине ҡатын-ҡыҙ ҡулдары!
Ҡотайтыусы илде, милләтте!

Шуға ла шул ошо хаҡ ҡулдарҙы
Һаҡсыһы, тип, йәндең, данлайбыҙ.
Бәхеттәрҙең изге башланғысы
Ҡотайтҡысы итеп һанайбыҙ.

Еңгән улар ауыр афәттәрҙе,
Еңгән улар аслыҡ бәләһен.
Заманында шулар күтәргәндәр
Биш йыллыҡтың иң ҙур кәйләһен!

Һәм уҙғандар шанлы йылдар аша,
Изгелеккә тура юл ярып.
Фашизмдың ҡара урҙаларын,
Аҡ күңеле менән ауҙарып.

Дан йырлайыҡ мәңге был ҡулдарға, —
Көндәй көләс әсә ҡулдары!
Шул шәфҡәтле устар йылыһында
Ҡусҡыллана гүзәл Ер шары!

7.03.1961.

## 1962

************************




### Халҡым рухы

Халҡымдың мин тыңлайым да йырҙарын,
Дәүерҙәрҙе ашып-артҡан моңдарын,
Ҡалам уйға: ниндәй бөйөк был халыҡ!
Илдәр ауған — ҡалмаған ул юғалып.

Килһә ҡайғы — ҡайғырған да үткәргән,
Ауырлығын "эһ" тә итмәй күтәргән.
Иңрәгәндә һыҡтап күңел ҡылдары,
Дәртләндергән уны туған моңдары.

Ул рухлана белгән хәтәр саҡта ла,
Беләктәрен быуау-йылан саҡһа ла.
Сал тарихын яҙған халҡым йыр менән,
Быуаттарҙың күҙен асыр нур менән.

Шатлығы ла, һағышы ла күр булып
Килеп еткән саф йылғалай урғылып.
...Итәктәрен Уралымдың йыр йыуа,
Башҡорт рухын һындыртмаҫлыҡ ир тыуа.

1962.

## Күк күкрәүе һәм бала

Ята бала, ҡуйып башын теҙемә,
Йоҡо фәрештәһе ҡунған йөҙөнә...
Күкрәй ҙә Күк, балҡый йыһан уттары.
Ата мәллә, тим, "Катюша" туптары?..

Һиҫкәнәм ер дер-һелкенгән саҡтарҙа.
Бала иһә тыныс "эш"ен башҡара:
Йоҡлай бирә тәмле-татлы төш күреп,
Күк күкрәүен ябай ғына эш күреп.

Белмәй әле сөнки ул туп тауышын,
Белмәй ҡанлы, әжәлле көнбайышын...
Белмәһенсе, белмәһен ул уларҙы:
Шартлау уның өсөн булһын ни бары

Күк күкрәүе, йәки мәғдән аҡтарыу,
Тормош өсөн тыныс хеҙмәт башҡарыу...
Йоҡлай, йоҡлай һалып башын теҙемә...
Йоҡо фәрештәһе ҡуна үҙемә...

4.09.1962.

## Ямғыр

Ҡойма ямғыр ҡойҙо ауылға —
Илай ғына һалам түбәләр!
Әйтерһең, күк күлен һауанан
Күнәк-күнәк һоҫоп түгәләр.

Ә минең өй, меҫкен, ҡыйшайып
Ултыра саҡ яуын аҫтында.
Иләк тирһең — серек түшәмдән
"Сып-сып" тама һары тамсылар.

Тама улар "шып-шып" өҫтөмә,
Яҙып һалған ҡағыҙ-ҡараға.
Ебемәй тик күңел, бойоҡмай,
Әйтмәйем һис: "Яума! Ярамай!"

Яу-яу, ямғыр, ҡойоп яу, ямғыр!

Ҡусҡылланһын баҡса, игендәр.
Уңыш урғас, һүтеп, өйөмдө
Күтәртермен әле, тим, мин дә!

Ҡалай менән башын ҡаплатып,
Ҡарағайҙан түшәм теҙермен.
“Дың-дың” типкән тамсы тайҙарын
Төштәремдә тотоп менермен!

4.09.1962.

## Ҡар бөртөгө

Ҡар бөртөгө ҡунды усҡайыма,
Терт-терт тибә үҙе, тереләй.
Шундай наҙлы — иртә яҙ башында
Асылырға торған бөрөләй.

Йым-йым иткән йондоҙ мыйыҡтары
Һәрмәй, мызлап, тәнем йылыһын.
Ҡаш аҫынан көлгән Көндөң уғы
Ала ҡырҡып ҡарҙың мыйығын...

Тыбырсына ҡарҡай... Ҡапыл-ғара
Ҡала ireп, -- мөлдөр һыу-тамсы.
Ҡалыр икән минән нимә, тиеп,
Киҫә йәнде ҡапыл уй-ҡамсы...

22.10.1962.

## Юлдар, юлдар...

Юлдар, юлдар, йөпләп йөрөттөгөҙ
Йөкмәп мине йүнһеҙ саҡтарҙа.
Имен китеп, имен ҡайта килдем,
Илтһәгеҙ ҙә дөрләү яҡтарға.

Данһыҙ доноп, һеҙҙә дан ҡаҙандым,
Малһыҙ елеп, малға иш булдым.
Юлдар, юлдар, тик бер мораҙыма
Ирешалмай йөрәк ышҡылды...

Үркеү ине хыял Көн тауына,
Алып ҡайтыу Көндө, ҡосаҡлап!
Һәр күҙенән илдең көлһә Ҡояш,
Тыныр ине йәнем шул саҡта...

1962.

## Кеше булыу

Бүре араһында — бүремен, тип,
Бүреләнеп, кешем, олома.
Сөнки кеше — кеше килеш ҡала,
Таш яуһа ла йөрөр юлына.

Һәм теҙ сүгеп яһил ҡаршыһында,
Яһилланып кинәт олоһаң,
Үкен, бәндә, үкен тыуғаныңа —
Ҡотолмаҫһың бүре булыуҙан...

Кеше була кеше — бил бөкләмәй
Ғорур үтһә генә донъяла.
Бүрелеккә башын борған ирҙәр
Бүре өйөрөндә юғала.

3.11.1962.

## Моңло булыу

Моңло булыу — зарлы булыу түгел.
Айыра бел зарҙы моңдарҙан.
Зарлы бахыр күҙ йәшен ағыҙһа,
Моңло батыр йырҙар сығарған.

Йырһыҙ йәшәү — сүбек көйшәү, тиҙәр,
Йәшәп булмай моңһоҙ бөтөнләй.
Ҡая ғына һаҡлай хисһеҙ тынлыҡ,
Ҡая ғына тора һелкенмәй.

Кешелектең хисе — моң кисереү.
Тыуа шағир моңдар эсенән.
Изгелек һис көтмә был донъяла
Моңон юйған йүнһеҙ кешенән!

Моңдар, моңдар, тормош һуҡмағымда
Үткәрҙем күп һеҙҙе йөрәктән.
Булдығыҙ һеҙ мине кешелеккә,
Хислелеккә, йырға өйрәткән.

30.11.1962.

## Һағыш

Бурандарҙа сығам урамдарға,
Тыңлай-тыңлай елдең ағышын.
Аһ, был шомлоҡ!.. Тәҙрә сиртә-сиртә
Йөрөй мәллә Ерем һағышы?!.

Шул мосафир өйөм тирәһендә
Тапанғандай, йәнде уратып.
Йөрәккәйем аяҡ баҫымынан
Һыҙлай, һыҙлай күҙем сылатып.

Ниңә былай? Ниңә тик мин ҡулай
Һеҙҙең көйгә, бөтмәҫ һағыштар?
Шатлыҡ ҡына тейәп килтерһәсе
Бурандарҙа ҡупҡан тауыштар!

Аҙмы ни ул бәхет, аҙмы ни наҙ!
Һуңлай ниңә минең өлөшөм?
Бурандарҙа сумып моң-ғәмдәргә,
Һыҙланамын яңғыҙ ни өсөн?..

Бар шатлығын Ерҙең, ҡайғыларын
Үткәрәмен йөрәк хисемдән.
Күп ҡалһын, тип, шатлыҡ бүтәндәргә,
Һағыштарын үҙем кисерәм.

30.11.1962.

## Шәүәли

“Урам буйын йәйәүли”,
Таң-иртәнән, Шәүәли.
Өйҙән-өйгә керә лә

Һыға йәшен әүәле:

“Ас йөрөйөм бына, — ти, —
Миктәтә ҡатын мине.
Иллә шулай интекһәм,
Күтәртеп ятам инде”.

Инә йәнә бер өйгә,
Уфтана: “Ай-һай, заман!
Ҡәйнә ҡайма ҡатаһын
Баҫты елкәгә тамам!”

Ә өсөнсө тупһала:
“Кисә беҙ талаштыҡ, — ти, —
Фәҡәт бала хаҡына
Бер юлға яраштыҡ”, — ти.

Дөрләй өйҙә дүртенсе:
“Ҡалманы түҙем, мырҙам!
Саҡыртам да депутат,
Хәләл никахты боҙам!”

Йөрөй шулай Шәүәли
Йорт һайын... Бөтәһенә
Киҫәтә ул: “Быны мин
Һөйләйем һиңә генә!

Йоҙаҡлай күр серемде,
Сыға күрмәһен илгә!”
...Урамдарҙы ураулап,
Ҡайта Шәүәли өйгә.

Тәмәкеһен төрә лә
Зарлана ҡатынына:
“Халыҡ беҙҙе ғәйбәтләй,
Торһаҡ та татыу ғына...”

10.12.1962.

## Ике себен

Ике себен осрашҡан,
Иҫән-һаулыҡ һорашҡан.

“Ҡоҙағый, абай бул,
Йәбешкәктән һағай бул, —
Тип береһе сер асҡан. —
Себен ҡырырға әҙәм
Йәбешкәк уйлап тапҡан!..
Елемдән — беҙгә ҡапҡан!..”

“Эйе, эйе, хаҡ хәбәр!
Ул елемгә ҡатҡандар
Әйләнеп тә ҡайтмайҙар...” —
Һүҙгә һүҙ тоташҡан,
Имеш-мимеш уҡмашҡан:

Ни үткән, ти, баштан,
Кем бүккән, ти, аштан,
Кем кисә ярҙан осҡан,
Кем кемгә иргә сыҡҡан,
Кемде тәлмәрйен йотҡан,
Кемде үрмәксе йыҡҡан —
Бары, барыһы ташҡан,
Ташҡан һәм хәттин ашҡан...

Телгә әүрәп ике ҡоҙағый
Бара торғас көлөп сый ҙа сый,
Ала алмаç булған аяҡтарын,
Елпей һалмаç булған ҡанаттарын,
Һәм теҙалмаç һорау-яуаптарын:
Бик мауығып ғәйбәт-ғилемгә,
Ултырғандар улар елемгә...
Үлемгә...

1962.

## Ҡотос булған космонат

Һөрән һөрә һары таңда
Был остан теге оска:
“Кис юғалған Ҡотособоҙ
Бөгөн, тиҙәр, космоста!”

“Ҡосам, -- тиеп, -- планета
Венераны!” – киткән, ти.
Күктә арбаһы боҙолоп,

Алйып йөрөй икән, ти...

Мәхәлләнән — мәхәлләгә
Телә йөрәк был хәбәр:
“Төшә алмайса, космоста
Ҡалған, ти, таңға ҡәҙәр...”

“Милиция, пожарниктар
Ҡаршыларға әҙер, ти.
Мәйет булып ҡайта ҡалһа,
Әҙер хатта ҡәбер, ти...”

Бисәһе лә илап уҙҙы,
Эйәртеп өс балаһын:
Космостарҙа булһа һәләк,
Атай ҡайҙан алаһың?..

Күрше-күлән, уфтанышып,
Ул бахырҙы ҡыҙғана:
“Космонатҡа сәсен бәйләп,
Харап булды ҡыҙ бала...”

“Ҡотос ағай — космонат!” — тип
Зыҡ-ҡубалар малайҙар.
Әлһерәгән әбекәйҙәр,
Сығып, йыһан барлайҙар.

Ә ҡаланың үҙәгендә
Милиция ҡайнаша:
Бикле торған ресторанды
Төтөн басҡан — тамаша!

Өҫкө ҡаттың тәҙрәһенән
Кемдер әсе ҡысҡыра.
“Тәмәкенән ут ҡапты!” — тип,
Түҙә алмай ҡотора...

Пожарниктар ҡуйып басҡыс,
Менеп киткәс тәҙрәгә --
Ике милиционер һәм
Һүндереүсе Гәрәбә,

Улар менән, башын эйеп,
Килеп төштө Ҡотос та:

Ғәфү итегеҙ, зинһар, тип,
Ҡунып ҡалғанмын бикар, тип,
Ресторан “Космос”та...

1962.

## Һунар билеты

Ғәйнетдин дә Ғәйфетдин
Аҙна һайын осраша.
Ҡырын һалып кәлпәкте,
Һунар хәлен һораша:

— Минең тотҡан суртанды
Күрһәң ине, Ғәйфетдин!
Тартҡан саҡта ҡармаҡты,
Ауып, һыуға “шап!” иттем.

Йөкмәп өйгә апҡайтҡас,
Ҡалды бисә хафаға:
Кәмә буйы түшкәне
Ҡайҙа элеп ҡаҡларға?!

— Ҡайғың — бала ҡайғыһы
Икән һинең, Ғәйнетдин.
Вәт, мин кисә һунарға
Барып ифрат шәп иттеим:

Бер атыуҙа төшөрҙөм
Ике төркөм өйрәкте.
Яҫауҙағы һәр йәҙрә
Өс өйрәккә эләкте!

— Ә мин алған ҡуяндан
Алтмыш ҡаҙаҡ май сыҡты!
— Мин аҡ айыу апкайтып
Шаҡ ҡатырҙым ҡарсыҡты!

...Ҡыҙып борсаҡ бүрттерә
Тилбер телле атайҙар.
Ситтән тороп, тын ҡалып,
Һабаҡ ала малайҙар.

Булһа ине беҙҙә лә,
Тиҙәр, һунар билеты.
“Алдайһың!” — тип ҡолаҡтан
Бормаҫ ине кем етте!..

1962.

## Туҡран

“Йонсотһа уҡраң,
Үгеҙбай, рәхим ит,
Арҡаңа ултырам”, —
Тигән, ти Туҡран.
Менеп тә ултырған.
Суҡырға тотонған.

Тиҙҙән, ти, ул төшкән,
Кинәнеп өләштән.
Ә үгеҙ? —
Шыр-һөлдә
Ҡалған, ти, был “эш”тән...

Фәһем:

Ишет үгеҙ: сүпләткәндә уҡраңды,
Буйыңа бик буйлатма, тим, Туҡранды.

1962.

## “Инсафлы” Кәзә

Кәбеҫтә ҡарауларға
Ҡуйған хужа Кәзәне.
“Кәзәм, — тиеп, — инсафлы”,
Шәйләмәгән ҡазаны...

Хужа киткән.
Эш бөткән...
Ҡайтҡас эштән талсығып,
Ишеткән ул – баҡсала
Сиселгән һүҙ ҡапсығы:

Һайрай Кәзә:
— Мин тыйнаҡ —
Нәфсемде тыя беләм.
Хужам тыйған аштарҙы
Ситләтеп үтәм гелән.

Минең өсөн һуҡыр тин —
Балы, майы, ит, балыҡ,
Сыр, йомортка — бөтәһе
Китмәгәйе ҡаҙалып!

Тауыҡ шунда:
-- Һин нәҫтә? Ә кәбеҫтә?..
— Кәбеҫтә?!.
Була ул... ниндәй төҫтә?..
— Күрәм: ул һинең эстә! —
Әйткән быны ҡарап торған Сыйырсыҡ,
Кәбеҫтәнән ҡалмаған һис ҡыйырсыҡ.

Ә Хужаһы, ҡолаҡ ҡаҡкас ризыҡтан...
"Һин йоттоң!" — тип таптыртҡан, ти, Тауыҡтан...

Фәһем:

Нәфсеһеҙгә япмаҫ өсөн ҡазаны,
Кәбеҫтәнән ҡурсалағыҙ Кәзәне.

1962.

## Ҡаһарманлыҡ ҡиссаһы

Һыуыҡ ҡорал сүкеп, Мәргән
Хәнйәр көйләп ебәргән.
"Мышы булыр нашеныҡы! —
Тип бүреген ул бәргән. —

Егерь мышнар. Ҡорал эшләр.
Төшөр түшкә келәткә.
Тренеровка үткәрәйек
Мәргәнлеккә, беләккә!"

Кергән дә келәткә Мәргән,
Буяу-бумала бәргән:

Мышы һүрәтләп ишеккә,
“Мишень” көйләп ебәргән.

“Ярты”ны йыҡҡас бик мәргән,
Хәнйәрен сәпкә бәргән.
“Мышы” башына теймәгәс:
“Әсәй, һыу!” — тип ебәргән.

Ишектән кергән әсәһе
Мышы булып күренгән.
Мәргән мәрәйгә хәнйәрҙе
Атҡан келәт түренән...

Шуның менән бәхилләнә
Ҡаһарманлыҡ ҡиссаһы.
Әсәһенә табут юна
Һыуыҡ ҡорал оҫтаһы...

1962.

## Мажаралы Ғәпкәләй

“Завсклад” Ғәпкәләйҙе
Балдыҙҙары төрткөләй.
“Туғанлыҡты онотма!” — тип,
Бажалары һелккеләй.

Төрткөләнһә, һелккеләнһә,
Ҡуйындары асыла.
Балдыҙҙарға, бажаларға
Ҡалъялары сәселә.

Ҙур келәттән шыуа малдар —
Балдыҙҙары шат тора.
Коньяк ҡойоп, бажаларҙың
Кәйефтәрен арттыра!

Һөйә бисә, төйә ҡәйнә,
Ағай-эне гөр-килә.
Һөйгән һайын, төйгән һайын,
Донъя малы эркелә.

...Бер көн шәйләп ҡалып шуны
Ревизорҙар — шайтандар,

Ғәпкәләйҙе һөйҙөртмәҫлек
Ергә алып ҡайтҡандар.

Шау-тимерҙән ишек-тәҙрә —
Ҡурсалайҙар шул хәтле!
Мылтыҡлы ағайҙар тора --
Саманан тыш шәфҡәтле!

Көнө-төнө тик ултыра
Һелкенмәйсә — мажара!
Ғәпкәй өсөн һелкенәләр
Бисә, балдыҙ, бажалар.

Күстәнәстәр килгән һайын,
Ғәпкәләй нығ бойоға.
Һелкетмәй үк һигеҙ йылды
Бирәсәктәр, ти, уға...

1962.

## Егеткә

“Иртә тыуҙым, һуңлап өлгөрҙөм,
Эш күрһәтә алманым елеп.
Үҙгәртеүе ҡыйын ғүмерҙе...” —
Тип уфтаннма, уфтанма, егет.

Иңдәреңә һағыш һарылһа,
Бөгөлмәй ҡал, рухыңды егеп.
Ләйсән-ямғыр көтөп, ҡар алһаң —
Уфтанма һин, уфтанма, егет.

Йырҙарыңды йылдар урлаһа,
Йыр йырлауҙан туҡталма, егет.
Ҡараланып Көнөң бурланһа —
Уфтанма һин, уфтанма, егет.

Булһаң илаҡ, ҡуйсы, йөрөмәсе
Был донъяла йөк булып, егет.
Егетлегең илең йөгөнә
Егелһен тос йоҡ булып, егет!

1962.

## Күҙ

Күл йөҙөндә йөҙә күҙгө моңдар,
Күк талдарҙан моңһоу өҙөлөп.
Һыу төбөнә сумған Ай, йондоҙҙар
Тыныс ҡына йоҡлай күҙ элеп.

Һәм күл үҙе — тәрән моңло йөҙө —
Йәш тулышҡан уйсан күҙ кеүек.
“Лып-лып” ауа, ауа ҡыу япраҡтар,
Йөҙөн йөҙләп һары еҙ кеүек.

Тулҡынып Ай-ҡайыҡ йөҙә һыуҙа
Һәм үбешә япраҡ-еҙ менән.
Кем генә тик ҡушыр, үбештерер
Үткән күҙҙе яңы күҙ менән?..

1962.

## Баһадир

Ауҙы юлға имән йәҙрәһе,
Тыуған ботағынан өҙөлөп.
Төрттө морон ергә ҡөҙрәтле,
Әсә йәнен шунда һиҙенеп.

Үтте арба юлдан... Йәҙрәне
Тупраҡҡа ул күмеп тапаны.
Оҙаҡ тормай, кескәй ҡәберҙе
Ҡырсын ташы, асфальт ҡапланы.

Бөттө ғүмер... Тик, тик бер заман
Һынды шартлап асфальт шул тоштан.
Төртөп сыҡты имән ирлеге --
Йәшел бөрө ҡәбер-ҡыуыштан.

1962.

## Бурыс

*Фәрит Иҫәнголовка*

Ҡул ҡыҫыштым бөгөн, ғүмерлеккә
Дуҫ булырға, ҡәләмдәш менән.
Хеҙмәт юлым, түккән моңом, тиһәк,
Мин әле бик бәләкәс кенә.

Ҙур йөрәген бирҙе дуҫым миңә,
Сыҡ һин, тине, еңеп көрәштән.
Шул нур-йөрәк менән минең йөрәк
Күкрәгемдә хәҙер берләшкән.

Үҙ йөрәгем бер мәл олоғайып,
Ҡайтарырмын дуҫҡа бүләген.
Ай арҡылы нурын ҙур Ҡояштың
Алмайҙыр Ер бушҡа төндәрен.

1962.

## Хәтәр хәл

Эсмәҫ инем хәмер ыуҙарын,
Мәңгелеккә килгән ир булһам.
Эсмәҫ инем хәмер ыуҙарын,
Бөгөн тыуып, бөгөн ер булһам.

Эсәм шуға хәмер ыуҙарын —
Бар булмышым хәтәр арала:
Йәшәү, Әжәл ике яғымдан
Ҡултыҡлашып алып баралар...

1962.

## 1963

************************




### Нурланыу

Сағыу нурҙар уйнай минең күңелдә:
Күргәнем юҡ быңдай мәлде ғүмерҙә!
Йәнем-тәнем тулыш нур менән минең —
Үтә унан Ҡояш, Ай юлы, тирһең!
Донъяға был сыҡһа сыйылып әгәр,
Сағыуланыр кеүек ерем шул ҡәҙәр!

Нимәнән был, нимәнән был яҡтылыҡ?
Тулып-ташып ятҡанғамы яҡшылыҡ?
Әллә ғүмер гөлкәйем атты микән,
Шул сәскәнән сағыулыҡ артты микән?!.

Яҡшығалыр, яҡшығалыр был яҡты,
Һиҙәм сөнки үҙемдә көс шул саҡлы!
Кирелер ҙә Еремде күтәрермен,
Тилерер ҙә йәнемдән үткәрермен.
Нурҙарымда уйнар бөтөн Ер шары,
Күңелдәрҙе туйлар йәнем уттары!

1963.

### Дуҫтарҙы күмәк тойоу

Үҙһенмәнем был донъяның

Ҡараһын, ваҡлыҡтарын.
Ҡара йәндәр араһында
Йөрөнөм хаҡлыҡ ярып.

Үтә алманым күҙ йомоп
Ғәҙелһеҙ ҡылыҡтарға.
Рәнйетелгәнде яҡланым,
Янһам да, ҡылып ярҙам.

Хупламаны хужаларым
Турылығын юлымдың.
Аҙым һайын ҡаҙанылар
Ыулы уғын золомдоң.

Мең-мең ғазап сикте йәнем,
Ә юлым ауыр ине.
Аяҡ сала аяуһыҙҙар,
Менәһе үр ҙур ине.

Әйттем үҙемә: "Түҙ генә,
Һин әле яңғыҙ түгел!
Дуҫтарың ҡарай күҙеңә,
Дошманың һанһыҙ түгел.

Инсан иңенә таянып,
Күктәргә ашып була.
Дуҫтарға барһаң ялғанып,
Донъялар ғашиҡ була!"

Һәм ғәжәп хәл: ҡапыл, ҡапыл,
Ян-яғым нурға сумды.
Әйтерһең, мең Ҡояш балҡып,
Күк ҡабағым асылды!

Таралды талғыр тамуғым,
Талпынды йөрәк ҡыйыу.
Донъяға ҡабат тыуыу ул
Дуҫтарҙы күмәк тойоу!

25.03.1963.

## Әйтмә

Әйтмә, дуҫкай, әйтмә “арыным” тип,
Арманһыҙ — хөрт, юлға тағылһа.
Таңдан тороп сәфәр сыҡҡандарҙың
Йәне тарта хеҙмәт тауына!

Ил иңендә тиләҫ таң атҡанда
Эштән дә ҙур бәхет булырмы?
Ирмен генә тигән ир-егеттәр
Арырмы ла ятып тынырмы!

Нимә өсөн йәшәй ир донъяла,
Устарында һөйәл янмаһа;
Атайҙарҙан тамған тир ҡотона
Маңлайынан тирҙәр таммаһа?

Нимә өсөн йәшәй ир донъяла,
Киреп күкрәк алдан бармаһа;
Йөрәгенән дөргән ялҡындары
Йөрәктәрҙе ялмап алмаһа?!

Әйтмә, иптәш, әйтмә “арыным” тип —
Эшләргә мин ялһыҙ һәләтле.
Икәүләтәм был бер ғүмеремде,
Илем өсөн булһа кәрәкле!

19.10.1963.




## Ила, балам

*Сабит улыма.*

Ила, балам, ила бишегеңдә —
Илар сағың һинең яңы әле.
Мамыҡ юрған төрөмөңдә кескәй

Ҡуҙ kиçәге булып ян әле.

Тормош тигән нәмә бик ҡатмарлы:
Илай унда ҡай саҡ ҙурҙар ҙа.
Ә һин, балам, бөтә күҙ йәшеңде
Илап бөтөр ошо юрғанда.

Бел һин: атаң, башы кәйелһә лә,
Баш эймәгән тормош еленә.
Ғорур егет, батыр егет итеп
Күрергә ул теләй һине лә.

Ила, балам, илар саҡтарыңда
Күҙ йәштәрен йомоу йүн түгел.
Илама тик ир еткәс һин, улым,
Илаҡ ирҙәр илгә тиң түгел!

19.10.1963.

## Төнгө хәбәр

Тәҙрә сиртеп, төнгө юлсыларҙан
Хәбәр инде өйөм эсенә.
Арынығыҙ минән тәмле төштәр —
Тормошома ҡабат күсенәм!

Бысағыма китһен төш донъяһы!
Ҡайҙа минең, ҡайҙа итегем?
Таңға, тибеп, асып ебәрәйем
Дөмәләнгән өйөм ишеген!

Ниңә был бик, ниңә ҡалын ишек,
Сикһеҙ донъя тулап ятҡанда.
Ниңә йоҡо, ниңә наҙлы тынлыҡ,
Юлаусылар тәҙрә ҡаҡҡанда!

Инһен улар, инһен юлаусылар,
Күмәк-күмәк булып, эркелеп.
Һәр береһе шаулап хәл һорашһын,
Йә тынлыҡты боҙһон йүткереп.

Шығыр-шығыр ишек йыр йырлаһын,

Туҡылдаһын “туҡ-туҡ!” иҙәндәр.
Ниндәй шатлыҡ — йоҡо боғаҙына
Иҙә баҫып тормош ингәндә!

Һулармын саф төнгө дала еҫен,
Ишетермен күсер йырҙарын.
Билкәйемде, бәлки, биштән быуып,
Ҡыҙырырмын йыһан юлдарын.

Ниңә был бик, ниңә ҡалын ишек,
Сикһеҙ донъя тулап ятҡанда.
Ниңә йоҡо, ниңә наҙлы тынлыҡ,
Юлаусылар тәҙрә ҡаҡҡанда!

21.10.1963.

## “Хәжәтле” хитап

Бахыр, бикләнеп мунсала,
Тирләп һамаҡтар яҙҙы.
Ҡамырҙай ҡалын әүмәләп,
Китап итеп сығарҙы.

Авторын әҫәр еткерҙе
Әҙәбиәт ҡырына.
Ә уҡыусыһын килтерҙе...
Хәжәтле бер урынға –
Китабын ҡулланырға...

5.11.1963.

## Көҙгө төндә уйланыу

“Сип-сип!” яуа, яуа ҡара ямғыр —
Көҙгө ямғыр ҡара төндәрҙә.
Йәш ағыҙа күҙе тәҙрәләрҙең,
Йәшен һыға, илап, елдәр ҙә.

Һулҡый төҫлө, һыктап, донъя үҙе —
Шундай ауыр, шундай күңелһеҙ.
Был оҙон төн — ниңә бер үҙемә,
Был оҙон уй — ниңә өҙлөкһөҙ!

Ерҙең әллә үкһеҙ улымы мин:
“Ерем”, тиеп көн-төн янырға.
Яҙмышымдан әсе ситнәтелеп,
Эш эшләп тә һанһыҙ ҡалырға?

Ҡайҙа, ҡой, дуҫ, тултыр туҫтағымды —
Уйҙарымды, эсеп, йыуайым.
Йөрәгемдең утын һүрелдертеп,
Уйламаусан бүкән булайым!

Туҫтаҡ тулы, эстә йөрәк утлы,
Илай тәҙрә, һыҡтап елдәрҙән...
Эсмәйек, ҡуй, дуҫҡай, был хәмерҙе,
Тартынмайыҡ ауыр көндәрҙән!

“Ерем”, тиеп янһын әле йөрәк,
“Илем”, тиеп уйҙар ағылһын.
Һуҡмаһалар һанға аҡ күңелде,
Уғата пак ғәйрәт ҡабынһын.

Яумаҫ бит ул көн-төн ҡара ямғыр,
Булыр уның яҡты сыуағы.
Йәш ағыҙмай күҙҙән, шул яҡтыға
Кәрәк ине ярып сығаһы!

Эсмәйек, юҡ, дуҫҡай, был туҫтаҡты,
Һуҙайыҡ йыр дәртле ауаздан.
Ыҙғар һайын ыҡһаҡ һәм һыҡтаһаҡ —
Йырсы хаҡы ҡалыр бик арзан!

Көҙгө төндә яҙғы май Ҡояшын
Ҡыштар аша тойоп йырлайыҡ.
Ялҡын йолоп йөрәк янғынынан,
Туңғандарҙың рухын нурлайыҡ!

Ауһаҡ алып асы яҙмыш уғын,
Һәм күмелһәк йылдар ҡомонда,
Ҡалһын янып һүнмәҫ йөрәгебеҙ
Хәҡиҡәттең талмаҫ юлында!

16.11.1963.

## Мал ҡолона

Бәғзеләрҙең бурлыҡ бураһына
БаҒаһың да йәнде иҙәһең:
“Бәндә байый, бәндә мал ырата,
Ә һин һаман... шып-шыр сөйҙәйһең!”

Бәғзеләрҙең бәҫле хөлләһенә
БаҒаһың да йөрәк теләһең:
“Кеше төҫлө кеше — өҫтө ишле,
Ә һин... һәлберәгән келәһең!”

Бәғзеләрҙең затлы йорт-йыһазын
Күрәһең дә — көҙгө төндәй һин:
“Улар таба — ҡалай түбә яба,
Түбәң тишек — һуҡыр тиндәйһең!”

Бәғзеләрҙең көләс сырайына
Ҡарайһың да төнөн туҙаһың:
“Белһәм ине, элек белһәм ине
Кем янында ғүмер уҙаһын!”

Хаҡлыһыңдыр... Булған бар байлығым —
Аҡ ҡағыҙым, осло ҡәләмем.
Ҡара ҡатып үҙем, төнгә батып,
Яҡтыртамын йәндәр ғаләмен.

Һиндәй һулап, донъя малы юллап,
Белһәм уның Алла икәнен,
Аҡ ер асып пак йыр сәсмәҫ инем —
Йөрәктәрҙә һулҡ-һулҡ типкәнен.

Атыр инем моңло өҫтәлемде,
Өркмәҫ инем рухи бушлыҡта;
Ҡомһоҙланып аҡса ҡармағанда
Бошмаҫ инем йөрәк юҡлыҡҡа.

Һандығыма бығау йоҙаҡ аҫып
Һаҡлар инем тапҡан затымды;
Муйыныңа элһәм шул аҫҡысын,
Сәсер инең сырай яҡтыңды...

Доға ҡылып ләкин аңламаным
Донъя малы — Аллам икәнен.

Тойҙом, тойҙом ҡанлы күкрәгемдә
Йөрәккәйем һулҡ-һулҡ типкәнен.

Баҫырманым унын һыҙлағанын, --
Халҡым өсөн, тиеп, нишләргә?!
Бер ғүмерҙе икәү итә-итә,
Егелдем гел малһыҙ эштәргә.

Наҙламаным төрөп ебәктәргә
Ебәктәрҙән ебәк тәнеңде.
Ғәйеплемен: урлап алып һинән,
Илем өсөн бирәм йәнемде...

16.11.1963.

## Ер ауазы

Күк урманда йәшлегемдә
Йөрөгәнем бар.
Тиреп моңон былбылдарҙың,
Тилергәнем бар.

Тиҫбеһенән һәр тирәктең
Яуҙы йыр миңә.
Яуҙырмай йыр, һынарға бер,
Ятты ер генә...

Башын болғап, тулап-тулап
Урман шауланы.
Йөрәгемә бөрөләрҙең
Серен бауланы.

Күмелеп көн серҙәренә,
Тамам тилерҙем.
Тирәктәрҙең сәпәкәйләп
Бейеүен күрҙем.

Бейене ҡусҡыл үләндәр,
Билдәрен бөгөп,
Көр имән сыңланы сихри
Сыңдарын түгеп.

Ер генә тик йырламаны,

Тик ята birҙе...
Серле ауазын еремдең
Тыңлағым килде.

Мендем көр-бейек имәндең
Уҡлы осона:
Алтын тубырсыҡҡай унда
Бейеп осона.

Ялтырай йөҙө Ҡояшҡа --
Ҡойона нурға.
Һандуғас ҡаҡ маңлайында
Сайҡалып тора.

Талпынды сыңрап былбылым,
Имән шауланы.
Ерем генә өнләмәгәс,
Түҙем ҡалманы...

Өҙҙөм үрелеп алтынды —
Шат тубырсыҡты.
Шыуыштым аҫҡа — олондо
Ҡаҡ тубыҡ ҡыҫты.

Төштөм дә үттем аҡландың
Аҫыл түренә.
Тубырсыҡты күмдем ҙурлап
Өнһөҙ еремә.

Ярып сығып, шул урында
Дәү имән үҫте.
Сутылдатып былбылдарын,
Тубырсыҡ беште...

Килдем бер заман имәнгә,
Һөйәнем таяҡ.
Суҡ ботаҡтарҙан сыңылдап
Моң ҡойолған саҡ.

Яңы олондан яңы йыр
Тилертте мине.
Сихырлы ауазы ерҙең —
Ошолор инде!..

16.11.1963.

## Дәрт, моң

Тормош — дәрт ул, тине аҡылым.
Тормош — моң ул, тине күңелем.
Ә йырланы миңә йырауҙар
Тормоштоң һис дәрт-моң түгелен...

Дәрт булһа — моң булһын, тинем мин.
Моң булһа — дәрт тыуһын, тинем мин.
Ә йырауҙар тине: "Булмай ул.
Моңло булыу — дәрткә ҡуймай юл!"

Дәртләнде бер ярһыу күңелем,
Моңланды бер тарһыу күңелем.
Дәртләнһәм дә — яҡты йыр тыуҙы.
Моңланһам да — яҡшы йыр тыуҙы.

Икеһе тиң аҡты йөрәктән —
Икеһен тиң илем өйрәткән!
Икеһен тиң илем тыңлаған,
Икеһен тиң йәнем йырлаған!

Булмаһа моң — йәшәү еңелме?
Булмаһа дәрт — еңел үлемме? —
Йырауҙарҙан шуны һораным.
Яуапһыҙ тик ҡалды һорауым...

Булмаһа моң — түгел мин кеше,
Булмаһа дәрт — түгел мин тере.
Фаниҙа ла, баҡыйҙа ла, тим,
Дәрте, моңо бергә килгере!

"Дәрт ул — тормош!" — тимен берсә мин,
"Моң ул — яҙмыш!" — тимен берсә мин.
Икеһе лә миңә ҡуш килә,
Йырҙарымдан дәрт-моң ишелә.

19.11.1963.

## Ҡайғылы шатлыҡ

“Үлде шағир!” — тине бәндә,
Ярһып көлдө.
Ҡара тупраҡҡа шағирҙы
Тапап күмде.

Биш төкөрҙө һул яурыны
Аша ҡарап:
“Тыумаһын бындай дәғүәсел
Ергә ҡабат!”

Шатланды... тик иҫләмәне
Шуны, бахыр:
Дәғүәсел ир, тыуып күптән,
Үҫеп ятыр,

Шағирҙың һалып китабын
Баш аҫтына.
Күмеүсенең улылыр был...
Баш ват бына!

19.11.1963.

## Таң нурҙары

Таң нурҙары Көндән хасилдыр,
Таң йырҙары беҙҙән насиптыр.
Күрсе, дуҫым: балҡып таң ата,
Айбарланып ергә нур ҡалҡа!

Үрләй, үрләй нурҙар һауаға,
Күк көмбәҙе буйлап нур аға.
Ир күңелен туйлап моң аға,
Ир ғүмере буйлап йыр аға.

Күрсе, күрсе: ҡалай яҡтылар
Буҙарынған нурлы саҡкылар!
Тейештер беҙ нурға сумырға,
Тейештер беҙ дәртле булырға!

Нур артынан яңы нур тыуа,
Йыр артынан яңы йыр тыуа.
Түгелә нур хәләл ҡөҙрәттән,
Теҙелә йыр дәртле йөрәктән.

Ағылыр нур, өмөт һүнмәһә,
Табылыр йыр, йөрәк үлмәһә.
Таң нурҙары Көндән хасилдыр,
Таң йырҙары беҙҙән насиптыр!

25.11.1963.

## Аҡыҡ ҡар

Ай буйына яуҙы ямғыры,
Тыйылманы, Хоҙай алғыры!
Көн яуҙы ла һаман төн яуҙы,
Һағыҙ итте һанһыҙ юлдарҙы.

Күркәм генә, күркәм урамдар
Йырғысланды мең төр ылауҙан.
Тәгәрмәстәр батҡаҡ болғатты,
Батҡаҡлыҡта, ойоп, моң ятты.

Ауыр ине, ауыр был саҡта!..
Иҫте елдәр бына көньяҡтан.
Ишерелеп килде болоттар,
Ябынды ер аҡтан толоп-ҡар.

Яҙға тиклем ҡалды тымып ер —
Һыҙланмай ул, алһа туңып бер.
Күңел генә туңмай, йоҡламай,
Яралары әрней туҡтамай...

Еҙ үксәле тупаҫ бәндәләр
Йөрәк итен иҙеп китһәләр,
Дуҫ-иш халҡы ҡанлы тамырға
Тырышалыр аҡ ҡар ябырға,
Аҡ ҡарҙай аҡ марля табырға...

Әйтә һалам әрнеп тик шунда:
"Яуа аҡ ҡар, ҡалып бик һуңға.
Һаҡлаһағыҙ әүәл итектән —
Булмаҫ инем былай интеккән!.."

Емерелгәс йөрәк тупһаһы,
Баҫа мыни аҡ ҡар шифаһы...

25.11.1963.

## Ғүмер

Бала сағым, баллы саҡ ҡынам,
Өҙөлөп-өҙөлөп һине һағынам!
Әллә инде иҫәр булғанмын:
Һыҙғаныңды һиҙмәй ҡалғанмын —
“Хуш бул!” — тип тә әйтә алманым...

Йәшлек сағым, йәшен саҡ ҡынам,
Тойоп ҡалдым һине саҡ ҡына!
Күк йәшендәй күкрәп балҡының,
Йөрәгемдә янды ялҡының.
Булдым берсә сикһеҙ иҫерек,
Елдем берсә ипһеҙ тилереп.
Китеүеңде көтмәй ҡалғанмын:
“Хуш бул!” — тип тә әйтә алманым...

Ҡартлыҡ сағым, ҡамыл саҡ ҡынам,
“Килмәй тор!” — тип һинән тартынам...
Килерһең тик... Ҡыймай ҡалырмын —
Ғүмер ғәмен көҙәп алырһың.
Белдертерһең бәхил көндө лә...
Өлгөрмәм тик белеп һине лә...

Кемдер әйтер һыҡтап: “Хуш инде!..”
Кемдер әйтер: “Яҙмыш ошо инде!..”
Ятып салҡан “хуш” ҡайығына,
Шыуышырмын “мәрт яйығы”на...
Илар елдәр: “Ир ҙә юҡ инде!..”
Шаулар һыуҙар: “Ерҙә юҡ инде!..”

“Юҡ!..” — тип бөгөлөрҙәр имәндәр,
“Юҡ!” — тип өҙөлөрҙәр үләндәр,
“Юҡ!..” — тип “юҡ”лар хатта бар донъя.
Тап шул саҡта тик бер, яй ғына,
Тыныс ҡына ауаз ишетелер:
“Был ир әле, дуҫтар, терелер,
Был ир — бөлмәй торған бөрөлөр!”

Бызлар быны беҙҙәй бал ҡорто:
“Биҙәнек беҙ бергә ил-йортто!”

28.11.1963.

## Мәңгелек сере

Их, йәшәге килә, туғандар,
Күп йәшәге килә, туғандар!
Оҙаҡ, оҙаҡ ҡына йылдарҙы,
Оҙон, оҙон ғына юлдарҙы
Үтәһе лә ине, туғандар,
Һүтәһе лә ине, туғандар!

Аға һыуҙар нисек туҡтамай,
Әйләнә Ер нисек йоҡламай —
Бына шулай булһаң ине ул,
Мәңгелекте ҡыуһаң ине ул,
Үлмәҫ өсөн тыуһаң ине ул,
Үлмәҫ өсөн тыуһаң ине ул!

Мин моңломон, моңло, туғандар,
Мин уйлымын, уйлы, туғандар.
Шатлыҡтарын йөрәк тоймай ҙа —
Киләсәген көйрәп уйлай ҙа:
Килә, тиҙәр, килем бер көндө,
Телә, тиҙәр, телем һәр кемде...

Көслө, тиҙәр, көслө был ғилем,
Үсле, тиҙәр, үсле был килем:
Салғы алһа — сала ҡыйғансы,
Ауыҙ асһа — ялмай туйғансы, —
Ҡомһоҙҙарҙан — ҡомһоҙ-ҡомһоҙҙор,
Йән алыусы уҫал дуңғыҙҙыр...

Ауыр миңә, ауыр был хәбәр...
Һыҙлай йөрәк әрнеп шул ҡәҙәр!..
Аҡҡан һыуҙар мәңге туҡтамай,
Әйләнгән Ер мәңге йоҡламай,
Шуны ғына миңә әйтегеҙ:
Ғүмер бармы иргә бөткөһөҙ?!

Һәм бер ауаз ауҡан ишеттем:
"Һәр кемгә лә быны иш иттем!
Булмайымсы, тиһәң, үлмәксе —
Илеңә бул эшсән үрмәксе.
Ҡалһа кәрең керһеҙ илеңдә,

Мәңгелегең булыр һинең дә!”

7.12.1963.

## Бала һаҡлау

*Илмирә ҡыҙыма.*

Бөгөн төндә мин йән һаҡланым,
Төнө буйы керпек ҡаҡманым.
Аҡ бишеген ҡосоп сабыйҙың,
Үткән минуттарҙан һан йыйҙым.

Оҙон икән был төн, бик оҙон,
Үлем ҡаҡһа ҡанат нәҡ ҡоҙғон,
Бала ятһа асып ауыҙын, —
Оҙон икән был төн, бик оҙон...

Әжәл менән сабый алышты,
Береһенә бере ҡарышты.
Ҡылыс һынды тейеп ҡылысҡа.
Ултырҙым мин ҡымып йән уска...

Килде шундай һалҡын минуттар:
Бала йөҙө туңды булып ҡар.
Күтәреп мин уны йөрөттөм,
Тыным менән туңын иреттем.

Булды шундай ялҡын минуттар:
Бала тәнен алды мең уттар.
Ҡосағымда уны тирбәттем,
Тыным менән тәнен елләттем.

Бер йығылдым утлы тамуҡҡа,
Бер убылдым һалҡын боҙлоҡҡа.
Ғазап сиктем мең ҡат бер төндә —
Хаҡ яҙмаһын быны бер кемгә!

Алһыуланып атҡас таң ғына,
Ҡасты үлем килгән яғына...
Килһәң инде, миңә кил, үлем:
Йән бирәйем фәкәт бер үҙем.

16.12.1963.

## Дуҫым

*Ҡорҙашым Рәми Ғариповҡа.*

Табын тирәләй гел тирәм
Хуплау-йөпләүҙәр хорын:
“Һин — талант эйәһе! — тиҙәр, —
Күр, саф яңғырай йырың!”

Бокалдарға шарап аға,
Ә миңә ҡотлау яуа.
Әүерелдемме даһиға
Әллә мин — ябай бала?!

Өнәмәй бер дуҫым ғына —
Һүҙгә һаранлыҡ ире.
Һыта йөҙөн маҡтаһалар,
Тостарҙы ҡаға кире.

Таралғас табын, әйтте ул:
— Төшөнмәйһең һуң ниңә?
Ҡомлап ышҡыу урынына
Бал яға дуҫтар һиңә.

Бал-балауыҙға буялып,
Балҡыған гәүһәр ҡасан?!.
Сырмалыр тик себен, сүп-сар,
Ҡом ышҡыуынан ҡасһаң!

1963.



## Ишеттем мин...

*Ҡорҙашым Рафаэль Сафинга.*

Ишеттем мин: үләбеҙ икән
Изге инсан үлеме менән.
Күтәрәйек йәмле бокалды,
Үлмәҫ өсөн йәмһеҙ үлемдән!

Был донъяла дөрләп ҡабынғас,
Тура килһен гөрләп һүнергә.
Китһәк, әйҙә, йырлап китәйек,
Еңел булһын илгә күмергә!

Ямғыр яуһа — яуһын, ҡар яуһын,
Ҡара ләғнәт өҫкә аумаһын.
“Гөнаһ шомлоғо, — тип, — атайҙар”, —
Бала-саға илап ҡалмаһын!

Тапланмаһын яман исемгә
Беҙҙе белгән йыр һәм ер йәме.
Беҙҙән һуң да йәнде тилертһен
Беҙ татыған икмәк, тоҙ тәме!

1963.

## 1964

************************

### Уйҙар

Юлдарымда күпме емерҙем
Диуарҙарҙың хәтәр олоһон.
Ҡаршы ҡуя миңә уларҙы
Әллә яҙмыш, әллә гөнаһым?

Йырлар булһам, йөрәк хистәрем,
Ергә төшмәй, елгә остолар.
Гәүһәр орлоҡтарым, ситнәлеп,
Ер ситендә генә шыттылар.

Һағалаймы һуҡыр һәләкәт?..
Талант юҡмы әллә, көс юҡмы?
Ниҙәр менән генә баҫайым
Күкрәктәге ҡурғаш-шомлоҡто?

Бер йыуаныс: шомлоҡ төбөндә
Турғай тиклем генә өмөт бар.
Ҡоҙоғома батҡан Ҡояшты
Ҡалҡындыртыр тилбер ҡанаттар.

1964.

### Буранлы юлда

*Атауылла ҡорҙашыма.*

Һыҙғыра ел, олой бураны,
Санатабан юл һыҙа йылдам.
Мыйығына урап ҡырауҙы,
Бара егет буранлы юлдан.

Төпкөлөнә дөмә даланың
Тракторы тарта уҡталып.
Ҡар аҫтында бойҙай һаламы

Аҡ төштәрен күрә, һоҡланып:

Дала, имеш, түгел буранлы,
Имеш, ҡыҙыу көҙ айы икән.
Егет мыйығының ҡырауы —
Тоҙло тирҙең туҙаны икән.

Имеш, егет, уттай тоҡанып,
Ырҙындарҙа тир түгә икән.
Күтәрһә ул бойҙай тоҡтарын,
Баҫымынан ер сүгә икән.

Имеш, егет һәнәк уйнатһа,
Алтын эҫкерт ныҡ арта икән.
Эҫе эҙе баҫыу буйлап та,
Ил буйлап та күп ята икән...

Ә далала, йырып буранды,
Сана эҙе һыҙыла йылдам.
Мыйығына урап ҡырауҙы,
Килә егет тынғыһыҙ юлдан.

“Тынманым мин тыуа-тыуғандан —
Таҡырланым юлын борандың.
Йонсой ҡалһам өшөп-туңғандан,
Дәртем менән йылы урандым.

Аҡ ҡәлғәләр ҡалҡты ян-яндан,
Уҙған һайын йырып көрттәрҙе.
Йырлы ҡулы менән ал таңдан
Далам гелән алға этәрҙе.

Шуға күрә кәрле йырамын
Дауылдарын тормош юлының.
Буран йырып йырҙар йырлармын —
Ошо ерҙең отҡор улымын.

Һыҙғыр, далам, һыҙғыр йырыңды —
Йыраулап та йылғыр буранлап.
Ырыҫлатып ҡарлы юлыңды,
Минең быуын килә Ер яулап!..”

Һуҙып ергә йырлы урамды,
Елә егет ғаләм ҡырынан.

Мыйығына урап буранды,
Килтерә ул яҙҙы турынан.

1964.

## Мостай Кәримгә

Ғорур имән мәғрур сатыр киргән —
Алмаҡсы ул Ерҙе күтәреп:
"Яҡтыртаһы ине, яҡтыртаһы
Был донъяны, үрҙән үткәреп!"

Ун бармаҡтай тарғыу тамырҙары
Ер шарын күр күрмәп алғанда,
Ябалдашта йәшен ялтлар ине,
Сатҡы ярып ғаләм-аҡланға...

Йәштән бер ғәм имән кәрен биргән:
Ҡара төн бар — Көндө урларға...
Нисек итеп шуны — ҡаралыҡты
Кире ҡағып, илде нурларға?..

Һәм дәү имән Ерҙе, күрмәп билдән,
Хыялында елә күтәреп:
"Ағартаһы ине, ағартаһы
Был донъяны, нурҙан үткәреп!"

1964.

## Әгәр

Әгәр мин шат көлә белмәһәм,
Күҙҙәремә йәш тулмаҫ ине.
Йөҙҙө һырған һағыш һөрөмөн
Буй-буй ярып нур йыумаҫ ине.

Үкһеп әгәр илай белмәһәм,
Мөхәббәтем саф булмаҫ ине.
Аҡ сәскәләй һирпеп керпеген,
Тойғоларым асылмаҫ ине.

Тыйма ошо ике сифаттан,

О юл ҡото, айыҡ аҡылым!
Тыйыр булһаң, был ҡарт донъяла
Тағы ла бер бүкән артыр ул.

1964.

## Милиция иптәшкә өндәшеү

*(плакат)*

**I**

Милиция иптәш,
кисер мине,
Һаҡлайһың сос ҡанун талабын!
“Дөмбәҫләргә нилзә” һис бер кемде —
Киләһең дә еңдән алаһың...

Һиңә ҡалһа, кеше туҡмау — бәлә,
Сиртһәң дә тик еңел ҡул менән.
Ә кастетты гөнаһ һөйләргә лә... —
Ҡыйын йәшәй беҙҙә хулиган!

Белмәйем,
мин, бәлки, хулигандыр,
Төйөп йөрөп йоҙроҡ кеҫәгә:
Ҡайһы ваҡыт
Ҡанун һәм ҡанунды
Һаҡлаусылар тейә теңкәгә...

Ниңә инде шунса һаҡ теүәллек,
Пункттарҙы үтәү тулайым?
Рөхсәт итсе, иптәш, тик бер тәүлек
Милиция үҙем булайым!

Ҡаҡшамаҫ бит донъя,
мин власты
Саҡ-саҡ ҡына иркен ҡулланһам.
Йәйеңкерәп бына был ҡоласты,
Бәғзеләрҙең көлөн ҡоя алһам!

Юғиһә бит
шыта шайтан таяҡ
Беҙ саф гөлдәр сәскән урында.
Гөманлыҡҡа беҙҙең арҡа таяп,
Аҙым һайын билсән моронлай!..

**II**

Әнә килә бер тип:
шыма егет —
Һыйыр ялап гүйә ҡатырған.
Уны гүйә
кемдер,
үгеҙ егеп,
Шешә боғаҙынан тарттырған:

Осло маңлай,
һәленке яу(ы)рын,
"джинси"ҙа —
боттар жирҙалай...
Әммә танау,
суҡ мыйыҡлы ирен
Бик юғары мырлай мырҙала.

Рокфеллер, тим,
гүйә ер күкрәген
Килә иҙеп, ҡанын сығартып.
Суҡлы ирен ҡалҡа ла өтрәйеп,
Төкөрөгөн ата шыйлатып...

Атлай мырҙа...
Күҙе күрмәй ерҙе,
Һыҡҡан лимон —
һытыҡ сырайы.
Һәр кешенән эҙләй мыҫкыл еге,
Һәр йорт уға — "суҫка һарайы".

Атлай мырҙа...
Түҙмәй иҙеү йырта:
"Меҫкен урам!
Меҫкен кешеләр!
Йөрөү өсөн төнгө Нью-Йоркта,
Барыр инем шыуып түш менән!

Тирә-йүнгә тексәй,
күҙ әйләндер:
Ҡайҙа күпҡат Айҙы һөҙөрлөк?!
Небоскребҡа ғына тик менһәм бер,
Табыр инем бәхет йөҙ төрлө!"

**III**

Баға ергә мырҙа:
аҡ йондоҙҙар
Көҙгө иткән дымлы асфальтты.
“Кока-кола”,
“Һағыҙ” тип неондар
Бейемәгәс,
йәмһеҙ был яҡты!”

Витринала бал, май, ит ҡалъяһы —
Ураҙаһын мөфтөй өҙөрлөк.
“Тегеләрҙәй булыу, һәй, ҡайҙа һуң!” —
Витринаға ҡуна төкөрөк...

Йырлай ҡыҙҙар — эшкә шат баралар —
Тыңлай донъя наҙлы тауышты.
Мырҙа иһә:
“Бродвей ҡараулап
Үткәрһәмсе ғүмер-яҙмышты!”

**IV**

Атлай мырҙа...
Йөрәге ҡабара,
Таша асыу дәртле урамға:
“Булһын ине ошонда кабаре
Һәм коктейль һалам тырпайған!”

Лозунгылар йорттарҙы уятҡан:
“Коммунизм өсөн көрәшкә!”
Мырҙа иһә:
“Тыңлармын,
ҡыйыҡтан
Бушлай әгәр костюм өләшһәң!”

Атлай мырҙа...
Һәлпәндәп арығас,
Боша эсе:
“Күңел асайым”.
Керә магазинға:
“Һәй, ҡарлуғас,
Бирегеҙ сәй! Мин сәй ашайым!

Сәй ашайым, ә мин ашамайым
Һеҙ килтерткән ҡара икмәкте.
Шул сәбәптән
бәҙрәф байҡамайым —
Бына ниҙә уның хикмәте!"

V

Көлә мырҙа...
Күҙен йәш томалай...
Тора бер саҡ майҙан тошонда.
Йәшермәйбеҙ:
ҡасандыр,
Аллалай,
Торған баҫып таш һын ошонда.

Фельдмаршалмы, монарх өтөгөмө —
Балбал баҡҡан урам сатынан.
Мундирының һалдат итегенең
Һалҡынлығын донъя татыған...

Ҡыу һулышы ҡырау булып ҡырғас,
Ҡыуған уны заман хаҡлығы:
Беркеткәндәр һынды тракторға,
Мыйығынан трос тарттырып...

Ауҙарылған балбал балсығына
Баҫа мырҙа, ҡырйып кәйефе:
"Ҡайҙа Мыйыҡ?!
Мин уны һағынам!
Нимә өсөн балбал ғәйепле?!"

(Ә дөрөҫө:
һәйкәл-мәйкәлең дә
Бер тин уға.
Һәм сүп — бар донъя.
Тыпырсына мырҙа
күкрәгендә
себен-йәне сереп-бурһыуҙан...)

Милиция иптәш, күрәһеңме,
Һытыҡ мырҙа, һыҡтап, туҙына!
Рөхсәт итһәң,

төйнәп,
бирәһемде
Бирер инем төклө ауыҙына!

Юғиһә бит, беҙ бик тыныс ҡанлы —
Инсафлыны ғына тыябыҙ.
Инсафһыҙға тейер йоҙроҡтарҙы
Кеҫәләргә тығып ҡуябыҙ...

Әнә шунан шыта мырҙалар ҙа —
Кәшкәй танау һәм суҡ мыйыҡлы.
Табына ул ауған "алла"ларға,
Үҙе менән ослап ҡыйыҡты.

Ил тойғоһон, сүптәй күреп, мырҙа
Тапай, һалып аяҡ аҫтына.
Әҙер, буғай, тартып торғоҙорға
Иблесте лә туҙан аҫтынан...

**VI**

Дәү халыҡ беҙ. Эйе.
Һәм гөманлы.
Иркенлектәр игә илебеҙ.
Шашып ләкин иркен был донъяны
Аша ҡарай ҡайһы беребеҙ...

Океан артындағы алтын сөйгә
Тоноп күҙе, бәндә кикерә.
Тыуған ерен тиңләп "джинси"ға,
Ашлы табағына төкөрә...

"Джинси"ҙан, ҡарабаш-көйәләй,
Төртә морон ошбу "диссидент".
Лаф ора ул:
"Демократияла
Йәшәйбеҙ һуң нимә өсөн тип?!"

Беҙ түҙәбеҙ...
Эйе, демократтар
Булған өсөн быға түҙәбеҙ.
Бик йыш ҡына түҙемебеҙ шартлар
Хәлгә етеүен дә һиҙәбеҙ...

Милиция иптәш, һаҡ теүәллек
Кәрәк инде ниңә тулайым?
Рөхсәт итсе миңә, тик бер тәүлек
Милиция үҙем булайым!

Ҡаҡшамаҫ бит донъя,
мин власты
Саҡ-саҡ ҡына иркен ҡулланһам?
Йәйеңкерәп суҡмарлы ҡоласты,
Шүрлегенә аҡыл ҡоя алһам?..

**VII**

Тоям, иптәш,
мине ғәйепләйһең,
Тапшырмайһың миңә наганды.
Әйҙә,
эште бүтәнсә көйләйек:
Дөкәмитен тикшер нахалдың!

Күрәм, күрәм:
паспорты бар икән.
Нимә тиһең?
Минең йылдашым?!
Ышанмайым!
Мин унан ваз кисәм!
Түгел был тип минең ҡорҙашым!

Ышанмайым!
Һөмһөҙ өрәктер ул,
Тыуғандыр ул башҡа заманда.
Аяҡты беҙ ергә терәп тороп,
Тәүге бураҙнаны ярғанда
Булманы ул беҙҙең менән!

Кәйлә менән соҡоп беҙ туң ерҙе,
Тәүге домна төбөн һалғанда
Туңманы ул беҙҙең менән!

Айҡау өсөн беҙ күк тәрәнлеген,
Япып, утлы суйын ҡойғанда
Ҡойманы ул беҙҙең менән!

Данлау өсөн беҙ ил батырҙарын,
Ярһып, дәртле йырҙы һуҙғанда
Һуҙманы ул беҙҙең менән!

Ышанмайым, иптәш!
Төптән ҡара,
Тикшер уның ҡасан тыуғанын.
Йә булмаһа ҡайҙа көн атҡарып,
Көнсө булып кемдә торғанын.

Ниңә хас та ысын хамелеон
Күренә ул миңә яҡтыла?
Ниңә саф хулиган башы менән
Ул демократ булып лаф ора?!.

**VIII**

...Шул арала,
Тайып ҡул аҫтынан,
Кәшкәй танау ситкә ысҡынды.
Сирғып китеп,
йөклө бер ҡатындың
Итәгенә барып тотондо...

Йөклө ҡатын йығылырҙай иткәс,
Ауҙы тоғо аяҡ аҫтына.
Ҡояш кеүек түп-түңәрәк икмәк
Тәгәрләне асфальт ташына...

Турайҙы ла “джинси”лы аяҡ
Шул ҡаласҡа тибеп ебәрҙе.
Торманы һис ил хәтерен аяп —
Футбол тубы итеп елгәрҙе...

Типкән өсөн икмәк — ыстатъя юҡ, —
Милициям, һине аңлайым.
Көс ҡулланмай ҡара һин туҡтатып! —
Мырҙаға тик тибә алмайым...

Көлә-көлә “футбол” тибә мырҙа...
Тибеүҙәре дәртле, хикмәтле!..
Бар булмышын аса бер тапҡырҙа,
Футбол итеп тибеп икмәкте...

Түгел ғәзиз уға әсә, ата —
Үҙе — алла, үҙе ни бары!
Табан терәр түмгәк тапһа, хатта
Осорор ул тибеп Ер шарын!..

IX

Милициям, ник ҡыҙарҙың тағы?!. —
Сабырлығың әлә таямы?..
(Торам күреп:
демократияны
Боҙмаҫ өсөн генә аяның!..)

Ҡыҙарҙыңмы әллә минең өсөн —
Ватансы мин ебеп ҡалғанға?..
Егә алмай ватансылыҡ хисен,
Үҙ йөҙөм бит янып аллана...

Эйе, иптәш!
Киң күңелде беҙҙең
Типкеләй был “демос” киҫәге.
Булыр нисек,
ҡулды сисеп, үҙем...
Һытыҡ йөҙҙөң... һытһам һемәген?!.

Кәшкәй танау менән суҡ мыйыҡты
Тәкмәстерһәм аҫҡа фырт ҡына?
Демократиялы был минутта
Хаҡ демократ булһам ныҡ ҡына?!

17.01.1964.

## Химия һәм игенсе

*(плакат)*

I

Ашамаһаң,
тиҙәр,
йәшәп булмай,
Ә үҫәм, тип,
һүҙ ҙә башлама!
Кешеләргә
бешкән икмәк ҡулай,
Баҫыуҙарға —

химик ашлама.

Үткән инде
илдең иләҫ сағы:
“Күм дә орлоҡ
һүт ең”, тиерлек.
Иген игеү —
шул уҡ бала бағыу,
Ҡыйыныраҡ хатта,
тирлерәк.

Тир генә тик
әле нигеҙ түгел
Өс йөҙ ботлоҡ
уңыш алырға.
Бының өсөн кәрәк
зиһен түгеү,
Кәрәк
профессор булырға!

Ерҙең тынын
һәм йөрәк ҡағышын
ишетмәһәң,
һинме игенсе!
Кеше тота ҡулында
яҙмышын
Тупраҡтың һәм
килер ил көсөн.

Кеше көслө
белем алһа ғына,
Бер урында ҡатһа —
көлкө ул.
Белемлеләр —
ут булып ҡабына,
белемһеҙҙәр —
һалҡын көл кеүек.

Етте ваҡыт
берҙәм тулыҡһырға
Химияның
алып
ғибрәтен.
Сөнки һорай

шуны беҙҙән ҡырҙар,
талап итә
Ватан ҡөҙрәте!

### II

Тупраҡ —
шул уҡ кулинар ҡаҙаны
Ҡайнатыусы
һурпа
ил өсөн.
Эштә булһа
ашнаҡсы аҙаулы,
Бешерәсәк
ашты
плюслы!

Ә ашнаҡсы
онотһа һалырға
тоҙҙо йәки
борос-маҙарын,
клиенты
юлыҡмаҫ табынға,
йә ауҙарыр,
тибеп,
ҡаҙанын...

Ләкин иген —
аяҡһыҙ клиент
Ер-ҡаҙанға
таҫлап тағылған.
Итә уны ашнаҡсы
шәп егет,
йә хәлһеҙ ҡарт —
ергә йығылған...

### III

Тупраҡ —
шул уҡ кулинар ҡаҙаны
Ҡайнатыусы
һурпа
игенгә.
Азот,
фосфор

йә микро-мағарҙы
төшөрмәһәң,
башаҡ бирелмәҫ.

Хөрт ашнаҡсы
табынды бөлдөрә,
ил бөлдөрә
наҙан игенсе.
Уҡымайса
ҡатып ҡалған түрә —
зыянлы йөк
бөгөн ил өсөн!

Етте ваҡыт
"сиҙәм" аҡтарырға,
Химияның
һөрөп томдарын.
Паганини булып
яңратырға
Башаҡ йырлы баҫыу ҡылдарын!

19.01.1964.

## Далам юлында

Алһыу шәфәҡ уйнағанда далала
Барам, имеш, ат атлатып, арбала.
Наҙлы гөлдәр ер иңен япҡан, имеш,
Көллөһөнә алһыулыҡ яҡкан, имеш.
Юл туҙаны — ул да ап-алһыу икән,
Күктең йөҙө — ҡан төҫлө ҡанһыу икән...

Күренде һәм миңә шул саҡ күренеш:
Ҡан-дарьянан барам кәмәлә, имеш,
Далам ситендәге алыҫ офоҡҡа —
Бәндәләрҙән, ҡандан халас бушлыҡҡа...

Тертләнем дә, туҡтаным да әйттем мин:
"Кешеһеҙ ул бушлыҡта мин — йәтиммен.
Ҡанлы, — ләкин ҡалайымсы еремдә,
Ҡан ҡойғоһоҙ заман яулап бирергә!"

28.01.1964.

## Йәремә

Дошмандарым, эйе, бар минең,
Көймә, йәрем, һин бының өсөн.
Көй һин шуға: дөрөҫ барыуын
Һаҡлай алһын яратҡан кешең.

Тик көслөләр генә булдыра
Был донъяла яһилын йәһәт.
Ҡайғыр, йәрем, тормош тыуҙырһа
Һөйгәнеңә дуҫтарҙы фәҡәт...

Яҡшы аттан дуға зыңылдар,
Яҡшы ирҙән нам ашыр йыраҡ.
Дуҫтар маҡтар, дошман сығынлар —
Донъя шулай ҡоролған, брат.

Ирмен тигән — уҡлы керешен
Ҡаты тартып һүтәлер ғүмер.
Уғың һыныр, яның бирешер,
Тура юлдан тайпылһаң һин бер...

Ҡырҡ быуынлы борғаҡ йылан да
Осратмайса әжәлен ҡалмай.
Егет булғас, йәрем, юлымда
Ҡырҡ бәләләр мине лә аулай.

Йыланланып ләкин боролмам,
Уҡ булырмын, үтермен тишеп.
Еңел-елпе генә ҡоролһам,
Түгелмен мин бөтөнләй кеше!..

Дошмандары, тиеп, бар уның,
Көймә, йәрем, һин минең өсөн.
Көй һин шуға: дөрөҫ барыуын
Үҙгәртмәһен яратҡан кешең!

29.01.1964.

## Ышаныс

Яҙмыш мине иркәләмәне,
Тормош мине типкеләмәне —

Ил күргәнде күреп үҫтем мин,
Ил эскәнде өрөп эстем мин.

Шағир булыуҙан да бигерәк,
Эшсе булдым илгә күберәк —
Алғас илем йөкмәп эш тауын,
Шағир булып ҡына кем ҡалһын?

Эшем өсөн йондоҙ көтмәнем,
“Мин эшсе!” — тип аяҡ типмәнем.
Шиғыр өсөн данға баҡманым,
“Мин шағир!” — тип күкрәк ҡаҡманым.

Тороп торһон дан да, йондоҙ ҙа —
Мин кеше бит әле унһыҙ ҙа.
Йырым ғына ташлап китмәһен,
Йөрәк кенә яйлап типмәһен!

Ҡарҙы тишеп һалҡын яҙ көнө
Балҡығандай аҡһыл наҙ гөлө,
Билдәһеҙлек, тынлыҡ аҫтынан
Көн яҡтыһын йырым ҡаршылар.

Һәм ҡалмаҫ ил уға вайымһыҙ:
Шатлыҡһыҙ йә тәрән ҡайғыһыҙ.
Онотолған гүрем ҡырында
Гүрһенмәгән йырым моронлар.

29.03.1964.

## Ҡайберәүҙәр...

### 1. Түрә булмаҫы борон

Ҡайберәүҙәр күҙлек кейә,
Күҙгә күренер өсөн.
Мәғәнәле һүҙҙе һөйә,
Түргә үрелер өсөн.

Алһаң һалдырып күҙлеген,
Ҡала бер танау ғына.
Асһа ауыҙын, юҡ теле —
Иренле канау ғына...

**2. Түрә булғас**

Ҡайберәүҙәр түрә булһа,
Түренән фарман бирә.
Ҡайберәүҙәр әйткән берен
Теркәтеп дарман тирә.

Ҡайберәүҙәр “беҙ” тигәнде
Ишетмәй һаңрау ҡала,
Ҡайберәүҙәр “мин” тигәнен
“Алла” тип аңлап ала.

Ҡайберәүҙәр аяҡ тибеп
“Зам”, “пом”ына екерә,
Ҡайберәүҙәр “сам” алдында
Сиңерткәләй һикерә.

Ҡайберәүҙәр бисәһенең
Туфли аҫтына инә,
Ҡайберәүҙәр әсәһенең
Динен ҡурҡытып “еңә”.

Ҡайберәүҙәр “һул” кеҫәһен
Ил салғыйынан таба,
Ҡайберәүҙәр, кеҫә һәрмәп,
Кеҫәлдән ҡолаҡ ҡаға.

Ҡайберәүҙәр буш портмонет
Йомолған ҡулын бирә,
Ҡайберәүҙәр портмонетты
Тултырыу юлын бирә.

Ҡайберәүҙәр, ни күрһә лә,
“Зам” менән бергә күрә,
Ҡайберәүҙәр таш ҡапсыҡҡа
“Зам”ынан башҡа керә...

9.04.1964.

## Бик кәрәгер ине...

Дуҫтар, миңә гөл баҡсалары ла,
Былбылдарҙың бәллүр йырҙары ла,
Сәскәләрҙең аңҡыш саңдары ла,
Бал ҡортоноң татлы балдары ла —
Береһе лә кәрәкмәҫ ине.

Дуҫтар, миңә йәмле май айы ла,
Сихриәтле, серле йәй таңы ла,
Йылғаларҙың ҡөҙрәтле шауы ла,
Диңгеҙҙәрҙең дәү тулҡын тауы ла —
Береһе лә кәрәкмәҫ ине.

Дуҫтар, миңә зәңгәр күк түбә лә,
Болоттарҙың аҡһыл күбеге лә,
Йондоҙҙарҙың ынйы йөҙлөгө лә,
Көмөш Айҙың көлмөш йөҙөгө лә —
Береһе лә кәрәкмәҫ ине.

Дуҫтар, миңә йөрәк ярһыуы ла,
Күкрәгемдән шатлыҡ ҡарпыуы ла,
Йырсы даны Көндәй балҡыуы ла,
Икеләтә ғүмер артыуы ла —
Береһе лә кәрәкмәҫ ине.

Ләкин
Ҡайындар күк бөрө ярғанда,
Туҙҙы йырып һуттар аҡҡанда,
Күҙҙәремә бағып бик нескә,
Ҡыйғас ҡашын һылыу һикертһә,
"Һөйәм һине, йырсым!" — тип әйтһә —
Бик кәрәгер ине шул миңә!..

10.04.1964.

## Был әҙәм...

*(маосыларга)*

"Ҡалһа ла халҡым ыштанһыҙ,
Бомбам булһын! — ти бераү. —
Бәхет йортона донъяла
Һуғыш — иң яҡшы тераү".

Әҙәм балалары уға
Себендер — үлә бирһен!

Мәйет ашлап, ерҙең йөҙөн
Бағ  ҡылыу — уйы ирҙең...

Әжәл нурҙарынан әллә
Алғанмы мур был әҙәм?
Яралғанмы икән әллә
Нурһыҙ ҡара гүрҙәрҙән?..

11.04.1964.

## Яҙғы уйланыуҙар

Йәш йырғанаҡ һөҙә мөгөҙҙәй,
Ҡар быҒауын тош-тош иретеп.
Алыҫ диңгеҙгә ул юл эҙләй,
Алҡындарын алға көр этеп.

Боҙ тигән ныҡ, һалҡын ҡоймаға
Йырғанағым төрттө мөгөҙҙө:
Ҡайҙа инде ҡойоу йылғаға,
Ҡайҙа инде тиртеү диңгеҙҙе!..

Алдым һөймән, ярһып, ҡулыма,
Ҡыҫып еште, боҙға һелтәндем.
Ағыл, ағыл, йәш һыу, юлыңа,
Һине унда ғаләм көтәлер!

...Кешене лә, иртә йәштән үк,
Үҙ диңгеҙе ымлай алыҫта.
Тотһаң һөймән, торма кәшкәйеп —
Юл ярырға уға бул оҫта!

Аҡланма һин, талант яра, тип,
Боҙ ҡатламын үҙе, теш менән.
Ҙур диңгеҙен тапһын яратып,
Талантлы ла, ябай кеше лә.

11.04.1964.

## Ҡаҫмарт һыуы

Ҡаҫмарт һыуы —ябай һыу шул ул,

Йырлап тормай унының ярҙары.
Йәйен дә юҡ унда, йоморсай,
Ҡорман, суртан ҡарпый ни бары.

Дәү тулҡындар тулап оломай,
Болоттарға атып күбекте:
Әүешһә тал, осон ялмалап,
Битен генә һыта һыу өҫтө.

Килмәй унда бөйөк шағирҙар,
Маҡтау өсөн һыуын шиғырҙа.
Сәйгүн генә шиғыр сығара,
Боҫ борлатһа ҡапҡас, тығырҙап.

Ябай ғына башҡорт һыуы ул,
Һөйләшеүсе ябай тел менән.
Буйҙарына уҫаҡ, өйәңке,
Ҡарамалар ғына теҙелгән.

Уралынан ыҡҡан моңдарҙан
Ята алйып суйыр ҡырсыны.
Тын төндәрҙә, йөрәк сыңратып,
Йондоҙҙарға сирғый йыр-сыңы.

12.04.1964.

## З...ҙең ҡәбер ташына

Наҡыҫ нарыҡланмыш бәндә булғас,
Ҡылыҡтары бик “нескә” ине:
Һаулап өргән эттәр араһында
Сәңкелдәүек бер мүскә ине...

28.04.1964.

## Фатҡулла

Агент булып йөрөгән Фатҡулла,
Ҡойроҡ ҡуйһаң, ҡойто ат була.
Һайлап ҡуйһаң, һатыусы була —
Кеҫә майлап ятыусы була.
Намыҫ ҡуйһаң ғына Фатҡулла
Була алмай намыҫлы мулла...

28.04.1964.

## Ҡара күҙҙәр

Ҡара күҙҙәр нурлы була, тиҙәр,
Ҡара күҙҙәр моңло була, тиҙәр.
Убылдым шул ҡара күҙҙәргә —
Яна йөрәк — ҡалай түҙергә?
Нурын, моңон иңләп йөҙөргә!

1.05.1964.

## Беҙҙең быуын

Беҙҙең быуын ҡалҡты ҡарланып,
Наҙ сәскәһе булып тыуһа ла.
Йылдар ыҙғарында туңһа ла,
Үçмәне ул ләкин зарланып.

Беҙ күргәнде әгәр күрһәтһәң
Аҡ нур ғына имгән быуынға,
Килер ине, ай-һай, ҡыйынға,
Беҙ күтәргән йөктө күтәртһәң!..

Икмәк һорап илар заманда
“Эш!” тинек беҙ сабый тел менән.
Гиҙер саҡта ғишыҡ иленән,
Һөрҙөк һабан, тирләп, яланда.

Абындырһа, шыңшып йөрөмәнек —
Иңебеҙгә алдыҡ ғәйепте.
Ғәйрәт менән көрмәп бәй-епте,
Сағылдарға үҙебеҙ үрләнек.

Әйтмәһендәр: “Уңыш түренә
Менеп алған, майлап табанын”.
Айҡап йөрөп көрәш яланын,
Ҡалҡындыҡ беҙ әрһеҙ Ер менән!

27.07.1964.

## “ПОРТРЕТТАР” ШӘЛКЕМЕНӘН

### 1. Кәримәкәй һылыу

**I**

Кәримәкәй һылыу, толомоң
Бөртөктәрен һанап, ел иҫә.
Ҡыҫып бәйләгән аҡ яулығың,
Маңлайыңа төшөп, тир эҫә.

Һәнәк һабын мыҡты ҡулдарың,
Ирҙәр кеүек, етеҙ уйната.
Күбә тауы кәбән башына
Шашына ла шаулап, тын ята.

Күҙләй Ҡояш һине һоҡланып
Нур биләүле зәңгәр күгенән.
Күрәһеңме, Көндөң ҡулдары
Ҡосоу өсөн һине үрелгән!

Кәримәкәй һылыу, былай шәп
Өйрәндең һин ҡайҙа эшләргә?
Һорайымсы... Утлы замандар
Һалды бит үрт беҙҙең иштәргә...

**II**

Һинең менән беҙ бит замандаш --
Ыҙандарҙы аҙмы ҡыҙырҙыҡ!
Сабый тирен ашлап тупраҡҡа,
Фронттарҙы аҙмы туйҙырҙыҡ!

Әле лә бит ята ҡырҙарҙа
Беҙ аҡтарған тәрән ыҙандар.
Улар баҫыуҙағы фронтта
Утлы окоп ине, туғандар!

Һинең менән бергә-бергәләп
Һалманыҡмы ҡурмас тоҡсайға!
Һалдаттарҙай тотоп повестка,
Китмәнекме сығып Рәсәйгә!

ФЗУ-ла аҙ-маҙ өйрәнеп
Станокты көйләү әмәлен,
Ҡойманыҡмы йәҙрә фронтҡа,
Текмәнекме Еңеү әләмен!..

Шаһит илем: ул саҡ оноттоң
Цехтарҙа һин кесе йәшеңде.
Ололарҙың алып урынын,
Байраҡ итеп сөйҙөң эшеңде!

Кәримәкәй һылыу, ҡалалар
Ауҙы һинең ҡойған йәҙрәнән.
Туған ерҙә йөйҙәр ҡалдырып
Һүнде һуңғы шартлау... Тәҙрәле

Поезд илтте һине алыҫҡа,
Харабалар күп көн байышҡа...
Ауған ҡалаларҙы торғоҙоу
Төштө тағы һинең яҙмышҡа...

**III**

Кәримәкәй һылыу, тупрағын
Тыуған ерҙең ҡайттың һағынып.
Ҡара ана: көләс Ҡояшың
Күҙләй һине, уттай ҡабынып.

Хәтәр йылдарҙа ла йәшлекте
Ошо Көн бит ине йылытҡан!
Бөтәбеҙҙе ләкин бәхеттә
Тиң ҡылырға, ахыры, оноҭкан...

Йылдар инде теге түгелдәр:
Өс балам бар йылы ҡуйынымда.
Кәримәкәй һылыу, һин яңғыҙ
Әүәлгеләй... Нимә уйыңда?..

Кәримәкәй һылыу, теҙ сүгеп,
Үбәйемсе маһир ҡулыңды:
Үлем тырнағынан кешелек
Ошо ҡулдар менән йолондо!

Ошо ҡулдар илде ҡурсаны
Дәһшәт яуы сапҡан йылдарҙа.
Кемдәр генә йәшәү алмаған

Һинең егәр, изге ҡулдарҙан!

Билен бөгөп, һыҡтап Ер шары
Әжәлдәрҙән ғазап сиккәндә,
Ҡулың һинең уны, күтәреп,
Алып сыҡты тыныс сиктәргә.

Кәримәкәй һылыу, хаҡың бар
Донъялағы иң ҙур бәхеткә!
Алды лаһа һинән йәшәүен
Ерҙә булған бөтә бәхеттәр...

16.09.1964.

## 2. Ирәндек

*Ырыҫкол ауылының айбарлы улы Ырыҫколов*
*Ирәндеккә ихтирам һәм хөрмәт менән арнайым.*

**I**

Ирәндеккәй тауы — оло тау,
Даның баштан ашҡан моңло тау,
Булып шаһит, халыҡ ғүмерен
Ҡараулаған тәрән уйлы тау,
Күргәнһеңдер оҙаҡ йылдарҙа:
Аҡҡандыр күп йылғыр һыуҙар ҙа,
Үтелгәндер оҙон юлдар ҙа;
Халҡым табанына эләгеп,
Ҡубынғандыр һанһыҙ ҡомдар ҙа,
Түгелгәндер һағыш-моңдар ҙа
Халҡым үткән ауыр юлдарҙа...

Үктәбергә тиклем өйрәндек
Моңло йырҙар көйләп, Ирәндек.
Үктәберҙән һуң беҙ кинәндек
Дәртле йырҙар йырлап, Ирәндек.
Тыуғас илдә шәп ир — Ирәндек,
Эш-хеҙмәткә батыр Ирәндек,
Йырлайыҡсы бер йыр кинәнеп,
Шул егетте маҡтап, Ирәндек,
Аҙашыңды ҙурлап, Ирәндек,
Тауҙарға тау, бейек Ирәндек1

**II**

Ҡаҫмартҡайҙың йәмле буйында
Донъя күргән егет ине ул.
Атаһының алтын ҡаҙығы —
Ырыуына елек ине ул,
Таҙалыҡта — һөләк ине ул.

Китте атай ҡанлы һуғышҡа,
Ҡалды әсәй, батты һағышҡа:
"Бергәлектә йәшәп өйрәндек —
Ҡыйын булыр беҙгә, Ирәндек,
Ҡайғы ҡуныр йөҙгә, Ирәндек..."

"Булмаҫ! — тине уға Ирәндек. —
Йәшәмәбеҙ ерҙә иңрәнеп!
Етер буйға, әсәй, улың да
Төшөр эшең бер саҡ ҡулыңдан —
Бөгөлмәй төҙ атла юлыңдан!"

III

Һәләк булды атай яу йөрөп,
Ҡан һауҙырҙы әсә бәгерен:
"Һүнде донъя, ҡалдыҡ етем беҙ,
Ҡалай ҡылып донъя көтөрбөҙ,
Йот йылдарҙы нисек үтербеҙ?.."

"Булмаҫ етем һис кем — ил барҙа!
Тымыр күңел, илар-илар ҙа...
Булыр хеҙмәт иң ҙур берәмек
Беҙҙең өсөн!" — тине Ирәндек.
Китаптарын ҡуйҙы Ирәндек,
Сабатаһын кейҙе Ирәндек, —
Китте ташлап өйҙө Ирәндек...

Көттө көтөү йәйен яланда,
Ҡараны мал ҡышын һаман да.
Үҫә биргәс булды һабанда:
"Хәйер һорап, илап йөрөмәм,
Ете йәштән етем ҡалһам да,
Ялан аяҡ яҙмыш ярһам да!" –
Шулай тине егет Ирәндек.

IV

Үтте йылдар... Сирле әсәһе

Улы өсөн генә йәшәне.
Төйөп табан, тауҙан таш ярҙы —
Кеше итеп улын сығарҙы,
Эшсе итеп улын сығарҙы!

Бына бөгөн иркен далала
Комбайнсы егет дан ала.
Ике норма көн дә бирә был,
Батыр булып йыл да килә был,
Ал Ҡояш та, Ай ҙа, йондоҙ ҙа
Күҙләй уны, янып, йәш ҡыҙҙай:
"Эштәреңде күреп кинәндек,
Рәхмәт һиңә, рәхмәт, Ирәндек!"

Эшсән халыҡ, һалдат, колхозсы
Торһа иртән, бөркөп аҡ боҫон,
Өҫтәленә ята карауай.
Бороп мыйыҡ, әйтә һәр ағай:
"Икмәгеңде ашап кинәндек,
Рәхмәт һиңә, рәхмәт Ирәндек!"

**V**

Булды бер саҡ илдә ҙур бәйге —
Бөтә Ватан батыр ебәрҙе.
Эшкә уңған, мыҡты егеттәр
Ҡырҡты һарыҡ йөнө, тиҙлектә.
Елде ҡулдар етеҙ юрғалай,
Секундтарҙы уҙып бер талай.
Секундомер алйып йөрөнө:
Һәр бәйгесе — аҫыл ир ине...
"Еңер һуң кем?
Кем һуң, кем?!" — тигәс,
Сыҡты еңеп егет — бик-бик йәш.
Әйтте иле шунда егеткә:
"Беҙәй халҡын һинең кеүектәр!
Еңдертеп гел һинән өйрәндек —
Бында ла һин еңдең, Ирәндек!
Исемеңә яулап тиң урын,
Бүләктәрҙең алдың иң ҙурын!
Күк Ирәндек тауҙай ҡалҡынып,
Ватаныңа Айҙай балҡының!
Ҡояш булып нурлан бер заман,
Тип теләйбеҙ һиңә, уҙаман!"

Белһен өсөн иле батрыҙы,
Яҙҙым мин дә ошо хаҡ йырҙы!
Ирәндеккәй тауы көр, бейек,
Шул тауҙай көр, бейек — Ирәндек!
Уны күреп, Урал-тау ана
Еңмеш улы өсөн ҡыуана:
“Ирәндеккәй тауы шатланһын,
Ир-егеткәй намы маҡталһын!”

16.09.1964.

## 3. *Ленька — Лүңке*

*Ауылдашым Алексей Мостряковка*

**I**

Ауыр ине йылдар... Йәйәүләп
Юлдар һүтте икәү — алыҫтан.
Ғәрип әсә сабый малайын
Етәк алып, усын ныҡ ҡыҫҡан.

Төшлөк йөҙөн мансып һарыға,
Ғәмһеҙ Ҡояш ергә шат ҡарай.
Бер ят ауыл офоҡ һыртынан
Бормас-бормас төтөн атҡара.

“Атла, улым, атла, етәйек:
Алдыбыҙҙа -- башҡорт ауылы.
Башҡорттар ул ҡатыҡ бирәләр,
Йә эремсек ашап алырһың.

Төтөндәре шыйыҡ күренә —
Былар ҙа бик йот, ас, ахыры.
Ни булһа ла, барып етәйек,
Бәлки, бер ус ҡурмас табырбыҙ”.

Әсә тына... Зәңгәр күҙҙәре
Офоҡ өҫтөн һәрмәп елһенгән.
Ирендәре, ал ҡан һарҡытып,
Шырауланған дала еленән.

Малай ғына хушһыҙ, эскәйен
Тырнаһа ла ашау хәсрәте.
Табандары менән туҙанды
Һөрөп бара, саңын сәсрәтеп.

“Атла, улым, атла, етәйек...” —
Бөттө хәле меҫкен әсәнең.
Ойоп үҫкән моңло ҡайынды
Ҡосаҡлаған килеш сәсәне...

Ҡалды оҙаҡ, оҙаҡ ҡуҙғалмай...
Ә саң һөрөп малай уйнаны.
“Әсәй, әсәй, әйҙә, китәйек!” —
Әсәгә тик һүҙҙәр һуңланы...

**II**

Ҡарт көтөүсе улды, етәкләп,
Ҡайтты алып кисен өйөнә.
Ейәненең киндер күлдәген
Бирҙе йолоп шүрлек сөйөнән.

“Исемең кем һинең, балаҡай?”
“Ленька”, — тине үкһеҙ, көрһөнөп.
“Лотфой икән, булһын хәйерле”... —
Һөрттө ҡарсыҡ дымлы керпеген.

Ялап бөтөп малай ҡатығын,
Сыҡты тышҡа, тотоп эремсек.
“Лүнке, Лүнке!” — тине малайҙар, —
Тотлоҡманы телдәр бер нисек...

“Лүнке, Лүнке”, — тине кешеләр,
Үҫә бирҙе яйлап Лүнкебеҙ...
...Ир ҡорона кереп, ауылдың
Уҙаманы булды ул бөгөн.

Ә шулай ҙа һаман “Лүнке” тип
Йөрөтәбеҙ ауыл ырыҫын.
Үҙе комбайнер һәм тракторист –
Эйәрләне заман ҡоросон.

Ул үҫтергән алтын игендәр
Ҡоса һәр йыл яңғыҙ ҡайынды.
Комбайны гөрләп уҙғанда
Күрсе, әсә, балаҡайыңды!

Тыңла, әсә, йөрәк ҡағышын

“Үкһеҙ ҡалған” Ленька улыңдың.
Офоҡтағы йылы төтөнгә
Дөрөҫ тотҡанһың һин юлыңды!

### III

Иген шаулай... Байман баҫыуҙан
Килә ылау, тейәп байлыҡты.
Шатлан, әсә, ғәзиз улҡайың
Ил батыры булып ҡалҡты!

“Урал”ҡайҙы Лүңке йырлаһа,
Һаҡмар, Ҡаҫмарт тыңлай, тын ҡалып:
Туғанлыҡтың тере шишмәһен
Ҡәҙерләй ҙә икән, тип, халыҡ...

“Лүңке, Лүңке”, — тиҙәр кешеләр,
Туған итеп улды, үҙ итеп.
Был дуҫлыҡты халҡым тыуҙырған
Ҡаш аҫтында ғәзиз күҙ итеп!

17.09.1964.

## Ҡара йөрәктәргә

Һыуыҡ түгел миңә көн һыуығы,
Һырғаҡ түгел һырғаҡ бурандар.
Йыһан иретерлек ипкенем бар, --
Туңмам һеҙҙең һалҡын урамда!

Тынғы белмәй тибә янар йөрәк,
Һүрелгеһеҙ ҡуҙы -- гел тандыр.
Илаһынан дөрләп кергән утты
Һүндерерлек түгел ел-ямғыр.

Боҙло ҡотобоғоҙ боҫланасаҡ,
Дусар булып минең усаҡҡа!
Ҡарыуығыҙ дөрләп ҡабынасаҡ,
Донъяғыҙҙы үртәп ут саҡһам!

Һөйәм, эйе, илем, телемде!
Килмешәккә бирмәм еремде!
Шуның өсөн йәшләй йәнселеп
Үҫеп еттем – беҙҙәр ир инде!

Һулы буранығыҙ буралaрын
Көл итергә әҙер әле беҙ!
Ҡара йөрәгегеҙ ҡоромонда
Сәсәй-сәсәй яныр йәнегеҙ.

27.09.1964.

## Үтә һиҙгер

Үтә һиҙгер, үтә тойғор ине
Сабый саҡтан сыңлы күңелем:
Шатланғанда шашып ныҡ шатландым,
Һыҡтанғанда — көндән төңөлөп.

Ил моңона ҡапҡам асыҡ ҡалды...
Кереп шунан әллә, дошмандар
Аҙым һайын аҙмы аяҡ салды,
Аяуһыҙҙан аҡты йыш ҡандар.

Яраларҙы һанһыҙ ала-ала
Бирсәләнде йәп-йәш йөрәгем.
Йәнде ләкин ҡутыр ҡатырманы --
Алыр әле яһил кәрәген!

27.09.1964.

## Һөйөр булһаң

Милләтеңде әгәр һөйөр булһаң,
“Милләт, милләт!” — тиеп лаф орма.
Ҡарға һымаҡ, “Ҡарррға, ҡарррға!” — тиеп,
Ҡарҡылдап гел башты ҡатырма.

Милләтеңде әгәр һөйөр булһаң,
Теште ҡыҫып, ҡой нур эшеңдән.
Булырһың ир, Айҙай көҙгөләнеп,
Көндөң йөҙөн илгә төшөрһәң.

27.09.1964.

## Оялма һин

Оялма һин, моңһоу күҙҙәреңә
Бәғереңдән көлкөп йәш тулһа.
Ҡайнар йәштәр йыуған күңел генә
Ҡартайыуҙы белмәй — йәш була.

Аҡһын, әйҙә, йәнде әсеттереп:
Йәшлек йәше саф та, татлы ла.
Ғәйеп түгел илау, әгәр йәнең
Аҡлыҡ теләп янһа халҡына!

Аҡлыҡ теләп әгәр йөрәк һыҙһа,
Оялма һин йәшлек йәшенән.
Оял, әгәр, таштай ҡатып, йәнең
Халҡың ҡайғыһынан йәшенһә.

Илама һин фәҡәт илау өсөн —
Татып күҙ йәш, рухың көсәйһен.
Хаҡлыҡ һөйөп янған йәнкәйеңә
Ҡылыс ҡыйғырлығы өҫтәлһен.

27.09.1964.

## Мин дә тыуҙым...

Мин дә тыуҙым бүтәндәр шикелле,
Мин дә үҫтем бүтәндәр шикелле.
Ҡолас ташлап, утын да, һыуын да
Мин дә үттем бүтәндәр шикелле.

Мин дә һөйҙөм бүтәндәр шикелле,
Мин дә көйҙөм бүтәндәр шикелле.
Һәм әйтерҙәр, гүргә күмгәс мине:
“Был да үлде бүтәндәр шикелле...”

Бөтәһе лә бүтәндәр шикелле,
Сөнки илде мин һөйҙөм шикелле...
Ерҙә эшләр эштәремде ләкин
Эшләнем мин тик үҙем шикелле!

27.09.1964.

## Күңелем

Бөркөт булып ос һин, күңелем,
Ҡыйғыр булып ос һин, күңелем.
Бөркөт, ҡыйғыр булып остиһәң,
Донъяларҙы өҫтән күрерһең.

Бөркөт булма, ҡыйғыр булма ла,
Моң-йыр булып ос һин, күңелем.
Моң-йыр булып илгә остиһәң,
Йөрәктәрҙе иңләп йөрөрһөң.

28.09.1964.

## Сәскәләрҙе һөйһәң

Сәскәләрҙе һөйһәң, баҙығын һөй —
Баш эймәһен елгә, ямғырға.
Тыуған тупрағының тойоп татын,
Тиртһен төпкә тәрән тамырҙар.

Матурлығы булһын тотанаҡлы —
Үтә сибәрҙәр бит тиҙ уңа.
Көн ыҙаһын сабыр биҙәй белһә,
Һөйөүеңде тапшыр һин уға.

28.09.1964.

## Сәсеүсе

Бәп-бәләкәс саҡтан муйыныма
Орлоҡ тулы тоҡсай элделәр.
Ҡара бураҙнаның ярығына,
Бөртөктәрҙе һиптем мин, йүләр.

Эйе, йүләр... Сөнки белмәнем шул
Орлоҡтарҙа бар, тип, ҙур яҙмыш.
Ҡара ыҙанымды көн-балҡытып
Сәскә атты бер саҡ көнбағыш.

Мең-мең ҡояш ялтлап янды ерҙә
Сабый сәскән сихри орлоҡтан.

Әле лә мин сабый: орлоҡтарҙы
Күңелдәргә услап ырғытам.

28.09.1964.

## Төңөлмәгеҙ

Төңөлмәгеҙ, изге күңелдәр,
Йомолмағыҙ, нурлы саф күҙҙәр, —
Тәбрик итеп күтөп алығыҙ
Ғүмеркәйҙең һәр бер аҡ көнөн.
Һүндермәгеҙ йөрәк ялҡынын,
Туңдырмағыҙ намыҫ алҡынын, —
Алғыр беләктәрҙән ҡот ҡойоп
Ҡотайтайыҡ көндөң балҡыуын.

Дошмандарҙы һағыш сырмаһын,
Дуҫ-иштәрҙе шатлыҡ йүрмәһен, —
Ҡаралыҡтан сөнки аҡлыҡ күп,
Ҡыңғырлыҡтан сөнки хаҡлыҡ күп,
Ерҙә сөнки төндән көн оҙон:
Оҙайтаһың уны һин үҙең!

28.04.1964.

## Өмөт

Ҡырыҫ һырлап ырыҫ ыҙанын,
Сәстек йырлап тормош орлоғон.
Тишеп ерҙе, ҡусҡыл ҡыяҡтар
Яҡынайтты Күктең өрлөгөн.

Күҙәнәк һәр — ғүмер тыуҙырҙы,
Ғүмерҙән һәр — ташты яҙғы йыр.
Мин дә, ҡатҡан көрәк ҡулымды
Ҡуйып ергә, алйып яттым бер.

Күҙҙәремде йоҡо алманы,
Ҡолағымда ерем сыңланы...
Фирүз баҫыу, ҡымыҙ таштырған
Туҫтаҡ һымаҡ, йәндә ҡызланы...

28.09.1964.

## Мең хаҡым бар

Йәшәр өсөн тыуған тоҡоммон мин —
Мең хаҡым бар йәшәп-йәшнәргә!
Кем ул унда, — яһил балта ҡулда, —
Офоғомдо аҫка әүшәрә?

Быуаттарҙың шаҡшы шауҡымында
Ҡамғаҡтарҙай күсеп килдегеҙ.
Уҫлабығыҙ ҡомһоҙ -- Уралымды
Уртлап алып китер инегеҙ!

Уртлап булмағанға еребеҙҙе,
Аҫабаһын йотмаҡ ботарлап.
Баға әммә Хоҙай ярлыҡауы,
Башҡортона йорт һәм ҡот арбап.

Һеҙ, яһилдар! Беләм, күҙҙәрегеҙ
Ҡыҙышҡанға — сикһеҙ нәфсегеҙ.
Уралымдан ғына түгел, мине
Ер шарынан тибеү — дәртегеҙ...

Айҡамағыҙ яһил балтағыҙҙы —
Офоғомдо һеҙҙән уйҙыртмам.
Уралымды, мине Ер шарына
Күсәр итеп Хоҙай ҡуйҙыртҡан!

6.11.1964.

## Рәмиҙән

Еңел түгел, беләм, йәрем, һиңә
Һөйөүемде түҙеп күтәреү.
Әллә ниңә һиҙгер күңелеңә
Әмәлһеҙҙән илтәм күп әрнеү.

Янғы килә оло йөрәк менән
Һәм хистәшлек ҙурҙан табаһы.
Шуға ла шул һәр бер ваҡ кәмселек
Итә мине уйсан, яманһыу.

Ауыр һиңә, ауыр шағир менән...
Шиғыр түгел уның көндәре.
Ҡара янып, тирен, ҡанын яғып
Үҫтерә ул шиғри гөлдәрен.

Һәм ул гөлдәр бер саҡ гөлдәмәлә
Күҙҙәреңдең һүреп нурҙарын,
Ятыр, бәлки, шағир ҡәберенә,
Ҡосаҡлаған кеүек Ер шарын...

7.11.1964.

## Һөҙөмтә

Көндәр аға, һырҙар битте яба,
Ә үткәнем — шундай маҙаһыҙ.
“Герой”лыҡ та йәйғор йәймәй унда,
Йыраулыҡ та сәсмәй сафаһын...

Ябайҙарҙан ябай ялсы булып,
Һикәлтәле һуҡмаҡ һүтелгән.
Ҡаҙып ҡоҙоҡ — тамсы һыу табылған,
Һөҙөп диңгеҙ — сабаҡ тотолған.

Илем, тиеп, даръя, сүл кискәнмен,
Илем, тиеп, утҡа ингәнмен.
Тауҙай табыш биреү урынына
Йәнде генә фиҙа иткәнмен...

Шау-шоу һалмай таштар аҡтарһам да,
Тоҙҙай иреп илем эсендә,
Иңбашымдан илгә, башым түгел,
Ҡалҡынмаған хатта исем дә...

Һәм үҙемде ғәрле ғүмер буйы
Һанағанмын ялһыҙ бал ҡорто.
Ташығанмын шәрбәт көнө-төнө,
Ҡотайтырға итеп был йортто.

Ғүмеркәйем һыуҙай киткән һыҙып —
Ҡалғанмын тик алһыҙ һәм ялһыҙ.
Йөрәккәйем һулҡ-һулҡ тибә һаман,
“Халҡым, халҡым!” тиеп туҡтауһыҙ...

Ҡаға йөрәк “халҡым, халҡым!” тиеп,
Ҡағыуҙары сыға саманан:
Энә менән йәнә ҡойо ҡаҙам,
Ишәм арҡан ҡомдан мин һаман...

8.11.1964.

## Хаҡлыҡ юлы

Халҡын һөйгән — хаҡлыҡ һөйгән, тиҙәр, —
Һөйҙөммө һуң мин ул хаҡлыҡты?
Хаҡлыҡ әллә, ҡыя сыйған уҡтай,
Есемемдән ситкә ҡаҡлыҡты?..

Әйталмайым... Әммә тормошома
Тере шаһит — маңлай һыҙыҡтар.
Йөрәктәге дошман атҡан уҡтар,
Сәскә сыҡҡан аҡһыл “тоҙлоҡ”тар.

Әйталмайым, алынған, тип, былар
Келәм йәйгән шыма һуҡмаҡта.
Хаҡлыҡ юлы шундай булһа әгәр,
Минеке ул мең-мең осраҡта!

8.11.1964.

## Ут

Шырпы һымаҡ яна минуттар,
Йөрәгемә минең сыйылһа:
Янар юлдарға гел юлыҡҡас,
Янғын йоғо хәтһеҙ йыйылған.

Ут итермен кеүек донъяны,
Дыуамалдан дулап эҙ һуҡһам.
Ҡояш үҙе битен бешерер
Баҙрауыҡлы минең нур, уттан.

Кешеләрем! Һаҡлап, ҡәҙерләп
Тотонһағыҙ ине был утты!
Туңғаҡ һыуыҡтарҙа туңғандың
Күңелен ул үртәп йылытыр.

1.12.1964.

## Ләшә

Ағастарҙы ләшә[1] һырыған —
Йоҡлайҙар тын улар, салланып.
Әсе еле ҡылын ныҡ тартһа,
Ҡайберҙәре ҡуя зарланып.

Йәнә тынлыҡ... Бында, биғәйни,
Тилерткес туй — яҙҙар булмаған,
Йәш япраҡтар йәшел серҙәрен
Шыбыр-шыбыр һөйләп тормаған.

Һығып билен, нескә аҡтирәк
Үбешмәгән ҡайын-ҡыҙ менән,
Һаран ғына саф йәш аҡмаған
Ҡаялағы имән күҙенән...

...Ботаҡтарҙан ләшә ҡойолоп,
Ҡылауыҡҡа күмә башымды.
Ҡырау атҡан ҡасан сикәмә, —
Һорамаған нисә йәшемде...

Ләшәм арта, йәнде аларта...
Аҡ ҡарҙарҙан билем һығылыр.
Зәһәр ҡылын яҙмыш ныҡ тартһа,
Аҡ ҡарҙарға кемдәр йығылыр?..

Шырпы янып ҡына һүнгәнсе
Көйрәп ҡалыр ирҙәр икәнбеҙ.
Ләшә булып ергә төшәбеҙ,
Рәшә булып ерҙән китәбеҙ...

Ә шулай ҙа, дуҫтар, был донъя
Беҙҙәйҙәрҙе белгән юҡ әле!
Беҙ киткәндән, моңһоу иткәндән
Ер ҙә булыр сап-сал сикәле.

1.12.1964.

## Нурҙар менән моңдар

[1] *Ләшә* -- ҡышҡы ҡылауыҡ.

Нурҙар менән моңдар берләшһә,
Уйлама: “Был — хилаф көрәшкә!”
Һанама: “Моң — болот күкрәккә!” —
Асыуыңды уға күкрәтмә.

Нурҙар менән моңдар берләшһә,
Моңдарыңды быуып көрәшмә:
Моңһоҙ нурҙар — ҡара нур була.
Моңло нурҙар — балҡып урғыла.

Нурҙар менән моңдар берләшһә,
Ырыҫыңды урып мең йәшә!
Кешеләрҙе кеше иткән — шул.
Булмаһа шул — таш йә бүкән бул.

Нурҙар менән моңдар берләшһә,
Уйлама һин: “Көнөм төнләшә”.
Моңло нурҙар тиртеп таң ата,
Ҡояшты моң сиртеп уята!

3.12.1964.

## Сабыйлыҡ

Ғәйеп итмә инде, бер үк, мине,
Иҫереүем уҙып айнығас.
Сабыйлығың сыҡты, тип әрләмә —
Ҡыйын булыр миңә аң йыйғас.

Иҫертеп тик ҡайтып күренмәһә
Сабый саҡтың кескәй киҫәге,
Ҡайтыр ҡасан?! Күрсе, һаман, һаман
Тарих тарағына күсәбеҙ...

Алыр тарап беҙҙе, һис йәлләмәҫ...
Алынғандай ата-бабалар...
Шуға күрә мине тилертергә
Сабыйлығым килә ҡабалан...

Ҡыума, ҡыума, иркәм, шат дуҫымды,
Иҫертеп бик, иҫәр килһә лә.
Иҫермәгән, иҫкермәгән аҡыл

Бауыр ташы булып төйнәлә.

6.12.1964.

## Яҙһын яҙмыш

Яҙһын яҙмыш яһил яҙыуын,
Елгә ҡаршы ә мин төкөрәм.
“Ауҙарамын һине юлдан!” — тип,
Этлегенә этлек килтерәм.

Хаҡ ҡәләмем әле ҡулымда —
Буйһонайым кемгә, ни өсөн?!
Үҙ ҡулымдан яҙып өйрәндем
Яҙмышымдың ярһыу өлөшөн.

Яҙмаҡ булһа яҙмыш маңлайға,
Мин Күк ҡабағына ут һыҙам!
Йыһан йырын ергә сыңратыр
Ҡәләм осом сыйған ҡот-ыҙан.

08.12.1964.

## Моң сиртмәгеҙ...

*Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатовҡа*

Моң сиртмәнеҙ, мине тилертмәгеҙ,
Еҙ бөркәнгән шөңгөр турғайҙар!
Бала саҡтан өҙә үҙәгемде
Бабаларҙан ҡалған туғайҙар.

Ҡырҡһам талын — ағыр төҫлө ҡаны,
Өҙһәм еләк — әсе күҙ йәше.
Сайпылһа һыу — сыңлай кеүек ҡылыс, —
Ғазраилдың уҫал тиңдәше.

Һары турғай, наҙлы еҙ турғайҙар,
Ниңә-ниңә туғай бик уйлы?
Мүк ҡаплаған өнһөҙ таштарының
Тарихтарын әллә уҡыймы?

...Бабаларҙың эшен эш итеүҙе
Ята көтөп сабыр туғайҙар...

Айҡап ҡылыс, ярһыу арғымаҡта
Сабыуымды сурлай турғайҙар.

Еҙ моңдарҙың талғын ағылыуы
Күңелемә һеңде бик иртә.
“Китәһегеҙ — һеҙҙән ни ҡалыр?” — тип,
Туғайҙарҙа турғай моң сиртә.

8.12.1964.

## Аҫыллығын тойоп...

Аҫыллығын тойоп донъяның,
Йәш балалай ойоп уйнаным.
Бер мендем дә тауға, бер төштөм,
Аҡ таштарҙы түбән мин иштем.

Баҫһам менеп тауҙың башына,
Йыһан түре килде ҡаршыма.
Баҡһам төшөп тауҙың аҫтына,
Төбәлде күҙ туған халҡыма.

Булмай етеп йыһан түренә,
Халҡымдың киң күңел күге лә.
Янһа унда миллион йондоҙҙар,
Янда бында — миллион моң-йыр бар.

Булһаҡ иҫән, йыһан гиҙербеҙ,
Йондоҙҙарҙан ҡәмәр теҙербеҙ.
Булһаҡ эшсән, моң-йыр һөйөрбөҙ,
Йыйып алып, илгә һибербеҙ.

22.12.1964.

## Күренештәр

*

Сыҡтым яҙға асып ҡыш ишеген —
Тылсым тулы ҡусҡыл донъялар!
Ҡайындарҙың бүртек бөрөләре
Йәшел ҡуҙҙай баҙлап яналар.
Ҡарҙай ҡатып, ҡусҡыл араһында

Ҡалған тоғро (ҡышҡа) — туҙ ғына.
Ап-аҡ туҙҙа мөлдөр ҡояшапай
Бора мыйыҡ — ҡыҙыл ҡуҙ ғына!

*

Турғай беләː муйыл тәлгәшенә
Сәңгелдәген элеп бәүелә.
Бәүелгәндә бәүел тирәгенән
Тирәһенә йыры түгелә.
Әллә йыр был, әллә аңҡыу муйыл —
Хушбуйынан донъя иҫерек.
Уйнай турғай, бәү-бәү йырын йырлай,
Ә мин — иҫәр -- торам кисереп...

*

Таң ата ла тағы Ҡояш ҡалҡа,
Былбылдарын күккә сөйөрөлтөп.
Ер күсәрен нурлы буҙтурғайҙар
Йыры менән тора өйөрөлтөп.
Үләндәрҙе тарта нур ептәре,
Ҡыяҡ артлы ҡыяҡ ярҙырып.
Йәшел ҡыяҡ һайын ҡояшлы аҡ —
Ысыҡланып тама таң йыры...

*

Эй был туғай, былбыл-турғай --
Ерҙең шөңгөр аҙашы!
Йыйҙы икән ҡай ерҙәрҙән
Сут-сут тирер яҙ ашын!
Йыймаған, юҡ! Нурға мансып
Биргән уны Ер-әсәй.
Ҡусҡыл ҡыяҡ һайын, сыңлап,
Йырын йырлап Көн йәшәй!

*

Тын ҡалығыҙ. Туҡталығыҙ.
Ҡыҫҡан донъя һулышын:
Ишетәмен ер төбөнән
Сабый бала тауышын!
Сеңләй-сеңләй сыҡты ана,
Үркеп Ҡояш ялына:
Сабый ҡуллы йәшел ҡыяҡ
Терһәк сәнсеп ҡалҡына!..

*

Ер битендә һап-һары ҡуҙ
Һары нурын балҡытты:
Бәпесенән бәпембәнең
Алдыҡ тәүге ялҡынды!
Аҡтары ла, күктәре лә
Атыр күкрәп ҡуҙҙарҙың.
Тик был һары — көн ҡомары, —
Башлап үпте Ер шарын!..

*

Оса-оса һары япраҡ
Ҡусҡыл ҡашлы сәхрәнән.
Әйтә алмай өҙөлгәнен
Ҡайһы олон-әсәнән.
Әйтә алмай кем өҙгәнен,
Һабышҡан ул һарыға.
Ҡасан ярыр ҡусҡыл япраҡ
Унан ҡалған яраға?..

1964.

## **Үлеү менән Ҡалыу араһы**

*(диңгеҙсе хикәйәте)*

Үлеү менән Ҡалыу араһын
Ҡулым менән һәрмәп ҡараным...

Киреп түшен, кәмә һыу ярҙы,
Тибеп тулҡын, диңгеҙ буҙарҙы,
“И-раз! И-раз!” — тигән команда
Ҡабатланды ишкәк һалғанда.
Моронда мин, төрөп еңемде,
Алҡымларға барҙым Үлемде...

Сәләмләштек... Бына ул яҡын:
Мина ята көтөп, саҡ ҡалҡып.
Суйын тәнле, тырпай мөгөҙлө,
Һөҙә мөгөҙ уҫал диңгеҙҙе,
Ылымыҡтар ҡатҡан һыртына —
Себен тейһә, ғүмер ҡырҡыла...

Киҫкен минут... Тоттом мөгөҙҙән —
Ҡаҡ Үлемгә усты тейгеҙәм!

Ҡуйҙы йөрәк тертләп шул ваҡыт,
Алдым кинәт ҡулды мин тартып.
Өнһөҙ кәмә киҫкен сайҡалды:
Һаҡ кәмәгә мөгөҙ айҡалды...

“Ах!” тип ҡуйҙы арттан иптәштәр,
Үрә торҙо тирҙән лыс сәстәр.
Ләкин бына, ҡыҫып тешемде,
Теүәлләнем күндәм эшемде:

Һурҙым мөгөҙҙәрҙе, алмай тын —
Ҡыл өҫтөндә аҙым яйлаттым...
Туҡаллағас ҡына Үлемде,
Төрөпкәгә ҡулым үрелде...

Йомғаҡлайыҡ (йүн юҡ күп һүҙҙән):
Тере сығам тиһәң диңгеҙҙән,
Үҙ хужаһы булып көнөңдөң,
Мөгөҙөнән ал һин Үлемдең!

1964.

## Ашламалы фашлама

*(колхоз стена гәзитенән)*

**1**

Таң алдынан берәү сеңләп илай —
Персиҙәтел улы Ишбулды:
Сикәһенә уның, өҙөп-ялай,
Атаһының ҡулы ышҡылды...

Персиҙәтел ярһый, ул ут йотҡан,
Йөрәк ҡабы тоҡтай ҡабарған:
Малайы бит тиреҫте утлыҡтан
Картуф баҡсаһына ауҙарған!

Тәртипһеҙлек ниндәй! Әрһеҙ сүптән
Күмелдергән сәсеү майҙанын.
“Таҙа тотмай, йөкләп тиреҫ түкһәң,
Таҙа картуф алыу ҡайҙа ул!..”

Һәм малайын ҡыҙыу ҡул аҫтына
Эләктереп түрә енләнә:
“Тиреҫ-миреҫ шылһын күл өҫтөнә!” --

Тип әйттемме елгә мин әллә?!

Юғарынан төшкән оло фарман
Химияны дөрә майҙанға.
Суперфосфат, азот, калий – дарман!
Тиреҫ түгел беҙҙең файҙаға!

“Атай, атай, уны өйөп ҡуйып
Сереткәндә сүбе юғала!”
“Ни тылҡыйһың?! Ҡайҙа шыйыҡ сыбыҡ!
Осаң ҡысыймәллә, шуҡ бала!

Күпме һүттем: “Илтеп ярҙан ауҙар,
Боҙға һалып ағыҙ хиресте!”
Ә һин өй артында, ҡороп баҙар,
Таулатаһың сүптән ер өҫтөн!”

**2**

“Тиреҫ бит ул — ергә ашлама!” — тип
Уҡытҡандар улды мәктәптә...
Ахмаҡйәндәр!..
“Пред” , башы ҡатып,
Бульдозерға бурыс йөкмәтә:

Ышыртырға күҙҙән тиреҫ тауын,
Мәшәҡәте яҙға ҡалмаһын!
Баҫыуҙарға уны түккән һайын
Сүп үрсеүен эт тә аңлаһын!

“Йүнһеҙ” улы компост итеп өйгән
Ашламаны сөйөп мөгөҙгә,
Персиҙәтел китә сығып өйҙән,
Биреү өсөн наряд көндөҙгә.

**3**

Урам буйлап ҡарҙы ел һепертә,
Талғый Ҡояш, ҡыҫып ҡолағын.
“Булыр нисек мең гектар һикертһәм,
Ҡар тотоуҙың һипләп планын?

Хоҙай бабай үҙе үтәр әле:
Алһа бынан — һалыр тегендә!

Нисәмә йыл шул ҡарт күтәрәлер
Агроэштең бөтөн йөгөн дә...

Һәм органик тиреҫ-ашламаны
Сығарҙыҡ, тип, күптән ҡырҙарға,
Рапорт биҙәр район башҡарманы —
Йыйылышта йөҙөм ҡыҙармаҫ.

“Химияға йөҙҙө борорға!” тип
Партияның биргән фарманын
Теүәл үтәп, фосфат алырға тип,
Тимер юлға йөҙҙө борамын!..

Йүкә епләп теккән түгел ағаң —
Тоя елдең ҡайҙан иҫеүен:
Ғилемде лә эйәләтеп алған,
Ғилемдән дә тайған иҫле ул!”

**4**

Керә персиҙәтел конторына
(Контор, тиһәк, булмаҫ — кабинет!)
Иҙәндәге келәм — ялтыр-шыма!
Буҫтау япма — бес тә костюм ит!

Түр мөйөштә аңдый телевизор:
Талдырһа эш, кил дә кино баҡ.
Йөҙ саҡ(ы)рым ергә телен һуҙыр
Хужаһының “телеф.-автомат”.

Һәм уң ҡулда ҙур китап шкафы —
Кәштәләрҙә алтын тышлыҡтар.
Докучаев, Вильямс, эш ҡарты
Мичуриндар баға йышлыҡтан.

Бына ниндәй ғилем кендектәре
Серҙәш имеш беҙҙең түрәгә!
Был колхозға иҫмәҫ ел тиҫкәре,
Баҫыуҙарын япмаҫ күләгә!

**5**

Егерменсе йөҙҙөң йоғо тулы,
Ғилем йөгө тулы конторҙа

Мәрмәр приборға һалып ҡулын,
Персиҙәтел ғәмле уй ҡора.

Секретарша көтә унан фарман,
Бригадирҙар — фарман ҡағыҙы.
Машинканы шыҡылдата бармаҡ
Аҡ ҡағыҙға яҙыу ағыҙып:

“Бойорамын күрһәтмә күтөргә
Юғарынан уңыш турында.
Шуға тиклем йылғаға этергә
Тиреҫтәрҙе һәр бер урындан!..

Химиклашыу — бөгөн нигеҙ бурыс,
Юғарынан шундай күрһәтмә!
Хим. ашлама һорап гел һүҙ ҡороу
Мөһим беҙгә ошо мөҙҙәттә!

Юллаусылар китһен юғарыға
Этеү өсөн ошо вопросты.
Химияға ҡыйыу юл ярырға,
Таран ҡылып булған бар көстө!”

Ян бүлмәлә машинка шыҡылдай,
Мәрмәрташта һолло ҡул ята.
Ә шкафта, туйлап, — ух, шыҡылһыҙ! —
Ике себен туҙан уйната...

**6**

Күҙен йома “пред” моңайып:
“Үтә ғүмер шулай эш менән.
Кәрәк ине, табып уңайын,
Һелтәнергә Сочи өҫтөнә!..”

Көлә Ҡояш күлкеп тәҙрәнән:
Ваҡыт ашҡа, түрә, төш етте!
“Эштәр, эштәр! Һеҙҙе йәҙрәләп,
Ҡылам ҡорбан һәр көн обедты...”

Ыстансыға ысҡына түрәбеҙ,
Килһә, тип, тук[2] , майҙан яйларға.
Сиртә шатлыҡ эстән йөрәген:

[2] Тук – фосфорлы химик ашлама.

"Бирәм ҡорбан химик файҙаға!"

Рельстәргә аяҡ төкәлгәс,
Баҫа менеп бер "тау" башына.
Бына бәхет: һирәк төклө сәс —
"Начстанса"[3] килә ҡаршына.

"Сәләм, "товнач"[4] !
"Сәләм, "товпред"[5] !
"Миңә, күрәм, уңыш үрмәләй!
Кәрәк ине миңә наперед
Тук ауҙарыу өсөн урын, әй!"

"Начстанса" өтөк бөҙрәһен
Этмәк булып усын күтәрҙе:
"Һин! Саллатып мине көйҙөрәһең,
Йолҡаһың был һуңғы төктәрҙе!

Баҫып торған ошо "тау"ыңдай,
Арттырҙың бит миңә ҡайғыны.
Был "тау" аҫтында бит — вагондар!
Был "тау" аҫтында — ил байлығы!.."

"Ҡуй, шаяртма, иптәш!"
"Һуйылып
Үлергә мин әҙер был көндө!
Фосфатты һәм мине бер юлы
"Хим. тау" аҫтына бит һин күмдең!

Нисәмә йыл бында ауҙарттың
Ашламаны вагон-вагонлап.
Ҡайҙа уны хәҙер таҙартыу —
Көс етмәҫлек оло тау булған!"

Персиҙәтел үтә аҙымлап
"Тау" түбәһен:
"Ғилем хаҡына
Беҙ әҙербеҙ бындай тауҙы ла,
Ҙур тауҙы ла өйөп ҡалҡырға.

Даешь беҙгә яңы майҙанды!

[3] "Начстанса" – станция башлығы.
[4] "Товнач" (товарищ начальник) – башлыҡ иптәш.
[5] "Товпред" (товарищ председатель) – рәйес (председатель) иптәш.

Бирмәһәгеҙ — киттем Обкомға!..”
Ҡатылығы “нач”тың аҙайҙы:
“Сабыр итсе, иптәш, саҡ ҡына!

Пакхауҙды байҡап ҡайтайым —
Сығыр урын шунан һиңә лә.
Мин сигертеү һиңә яһайым —
Һиңә генә! — шуны бел йәнә!..”

“Товнач” менән беҙҙең “товпред”
Ике яҡҡа берҙәм ынтылды.
Алды береһе яңы тук ере,
Шикәйәттән береһе ҡотолдо...

**7**

Персиҙәтел төштө йылғаға,
Дизель йырын ҡырҙан ишетеп...
Ҡорос бульдозерҙан тир аға,
Тиреҫтәрҙе боҙға ишертеп.

Тиреҫе лә тиреҫ! Буталлы
Һандыҡтарҙа ғына һаҡларлыҡ!
Бер һоҫҡоһон һипһәң — бот алып,
Ырҙындарҙы иген ҡапларлыҡ.

Шул байлыҡты — йәҙрә алтынды
Боҙ өҫтөнә дизель һипләткән...
Рәйес, рәйес, туған халҡыңды
Мәхрүм ҡылыу бит был икмәктән!

Дегет keүек майлы тиреҫкә
Баҫып тора “пред” ҡәнәғәт:
“Сантаҙартыу үтте”, тип, кискә
Теҙеп булыр телмәр, йәмәғәт!”

**8**

Күрә ирең хыял ҡаршында:
Тиреҫтәрҙән ауыл таҙарған.
Һәм тауыҡтар, тырнаҡ ҡашырға,
Алдырта, ти, уны баҙарҙан...

Ә һыйырҙар, кинәт аңланып,

Йөрөйҙәр, ти, боҙға — бәҙрәфкә.
“Бәҙрәф”тәге нәмә... йәнләнеп
Ағыла, ти, Йылға-хәҙрәткә.

Өйөүгә лә уны талап юҡ,
Ташырға ла ылау кәрәкмәй.
Үткәр ғүмер мыйыҡ таралтып,
Мыйыҡһыҙҙар — ҡыуып серәкәй...

**9**

“Персиҙәтел иптәш!” — Хыялдың
Уртаһында сылбыр өҙөлдө.
Фронт яһап башлыҡ-ир алдын,
Бригадирҙар килеп теҙелде:

“Персиҙәтел иптәш, ҡушҡайның
Фосфат өсөн урын табырға.
Эҙләү тейеш уны тыштанмы?”
“Ҙур келәткә кәрәк һалырға!”

“Ҙур келәттә биш йыл тупланған
Фосфат тауы ҡата, һыу үтеп...”
“Бушатығыҙ!”
“Таштай тосланған...”
“Ваттыртығыҙ дизель йөрөтөп!”

“Ватҡас... ҡайҙа уны ҡуябыҙ?”
“Ышыртығыҙ йылға боҙона!..” —
Бригадирҙар, тотоп “ҡыяғыҙ”,
Бульдозерға шыла ҡыҙыулап...

Ҡалды персиҙәтел маһайып:
“Шәп егеттәр минең ирҙәрем!
Химик кампания яфаһын
Былар менән еңел иңләрмен”.

Ни тиерһең былдай “пред”ҡа:
Химияны ҡыҙыу “индерә”!
Тиреҫте лә оҫта “иретә”,
Фосфатты ла оҫта “һеңдерә”...

Алынаһы тау-тау бойҙайҙар
“Сүп-сар” булып һыуға ағалар.
Химияны ла бит “тоҙлайҙар”,

Тау-тау өйөп, бындай ағайҙар...

Ә иҙелдә балыҡ болара,
Меңәрләбе ҡапыл ҡыуара.
Әле генә тере инеләр,
Ағыуланды һыуҙар ни ара?..

Юғарынан быны күрмәйҙәр,
Күрһәләр ҙә, “өгөп” йөрөмәйҙәр...
Председатель – эштә алдынғы,
Хатта эттәр һаулап өрмәйҙәр...

Үҙ башынан күпме “ҙур эш”те
Осорған был шулай, шау һалып.
Химияны инде кереште
Шаулатырға ҡыу эш шакалы!..

Үкһеп илай хатта ер өҫтө,
Булһа “пред” -- йәнле бүрәнә...
Миңә ҡалһа, ҡара тиреҫте
Алмаштырмам ҡарға-түрәгә!

1964.

# 1965

****************************

## Далам ҡылғаны

*Таңнуры ҡыҙыма*

Күсеп килдем мин ҡалаға
Ырымбур далаһынан,
Ҡорғаҡ елдәр иҫкән яҡтан, —
Ҡылғандар араһынан.

Ҡуйын тулып килде шатлыҡ —
Туп кеүек балаларым.
Оноттом кеүек ҡылғанлы
Ырымбур далаларын.

Яҡын иттем йөрәгемә
Ҡарағай, имәндәрҙе,
Һутлы ерҙә йәйрәп үҫкән
Ҡыуаҡ һәм үләндәрҙе.

Ҡылғанлы дала яғында
Көн ҡырыҫ булған икән.
"Бында йәннәт, бында хур!" тип,
Кинәнеп донъя көтәм.

...Сыҡҡайным бына баҡсаға,
Һандуғас көмөш тирҙе.
Көтмәгәндә бер көмөшө
Йөрәккә килеп тейҙе.

"Аһ ауылым, аһ яланым,
Ҡылғанлы далаларым!.."
Ә янымда, өйөрөлөп,
Йөрөйҙәр балаларым.

Етәкләй улым ҡулымдан,
Ҡыҙҙарым — салғыйымдан.
"Сабыйҙарым, сабыйҙарым,

Яҙамын аҡылымдан!

Һары һандуғастар беҙҙә
Әремгә ҡуна ине.
Әрем әселе донъяға
Татлы йыр тула ине.

Һабан турғайы һауала
Ҡыңғырау ҡаға ине.
Ыржыҡ йомраны убала
Һыҙғырып ала ине...”

Кесе ҡыҙым шунда ҡулға,
Иркәләп, морон төрттө.
Ус аҫтымда ҡылғандай аҡ
Сәсе йылтырап китте...

Балаҡайым, һағыныуҙың
Дауаһын ҡайҙан белгән!
Йылтыр Ырымбур ҡылғанын
Башында алып килгән!

...Көндәр уҙа, ҡыҙҡайымдың
Сәстәре ҡаралана.
Үҙ башымда ҡылған күреп,
Йөрәгем яралана...

1965.

## Ҡайтам!

Һаумы, һаумы, иркен яланым!
Юҡтап һине, ҡайтып барамын.
Киткәнемә әле ай ғына,
Йәнем — өйрәнмәгән тай ғына,
Киткәнемә бары ай ғына...

Ҡуйҙы ҡанат ҡала уттары:
“Башыңды тот, — тине, — юғары!”
Ялан яҡты, тиеп, юҡһынма,
Ҡар өйөрҙө буран юлыма.

Бирҙе Ҡояш битен салт ҡына:
“Үтһен көнөң, улым, шат ҡына!”

(Буран икән бында шулай уҡ
Яландағы һымаҡ шыуа шуҡ,
Ҡояшы ла икән яғымлы.
Тик... һағындым тыуған яғымды...)

Йәмле, йәмле йырҙар ҡалаһы!
Һөйә, һөйә, моңло балаһын!
Бирә икән изге фатиха:
“Йырҙарыңды арна шатлыҡҡа.
Яҡты һуҡмағыңа баҫаһың —
Асманыңдың биген асаһың.
Түңкәрерһең юлдар яфаһын.
Күҙҙәреңде һағыш япмаһын —
Табаныңды тайғыш тартмаһын!
Йәшнәр юлың — йәшлек һуҡмағың.
Һуҡмаҡ ҡына, тимә, аппағым!” --

Күңелемде арбай баш ҡала,
Күңелкәйем ләкин башҡала...
Теләккәйем тулып-ташһа ла,
Төштәремдә гелән сал дала...
Йән-ҡайығым шунда сайҡала.
Ҡәләм осом шунда тирбәлә --
Ата-бабам тыуған тирәлә!

Көтә мине ялан яҡтарым,
Йәйрәп аҡҡан Ҡаҫмарт, Һаҡмарым.
Һағынғандыр билле Биләнтау,
Ҡайғырғандыр йөйлө Йылантау.
Әйтә улар: “Илең улы һин,
Тупрағыңдың тойҙоң йылыһын.
Һыуҙарыңдың эстең моңлоһон --
Беҙҙән алған хискә тулыһын!

Һалды эҙен бында Салауат:
Кисте Ҡаҫмарт — ҡалды унан ат.
Үтте Бабич Һаҡмар боҙонан —
Йөрәктәргә эҙе һыҙылған...
Ҡупты беҙҙә утлы өйөрмә:
Атаң-ағаң ятты был ерҙә,
Тамсы-тамсы түгеп ҡандарын —
Ҡырҙы улар ҡырғын яуҙарын...

Бәйнә-бәйнә һөйлә барыһын да,

Күңел ҡылын көйлә, тарһынма.
Илең даны ерҙә ятмаһын —
Моң-йыр булып йыһан айҡаһын!
Ата-бабаң тыуған тирәләр
Бөтмәç илһам һиңә бирәләр,
Ереҥ моҥон һиндә күрәләр
Ата-бабаң тыуған тирәләр”...

Ҡайтам, ҡайтам, тыуған яҡтарым,
Эскән һыуым — Ҡаçмарт, Һаҡмарым!
Гиҙгән ерем – болон, тауҙарым!
Ҡайтамын мин, эйе, ҡайтамын,
Йөрәк башын терәп ятамын
Ауылымдың асып ҡапҡаһын!
Йөрәгемде ерем тапаһын!
Ҡайтамын шул, эйе, ҡайтамын!

16.01.1965.

## Каруанһарай

Каруанһарай баҡсаһында
Һуҡмаҡтар, юлдар гиҙҙем.
Уйлы йүкәләр уйынан
Буйланым, уйҙа йөҙҙөм.

Сут-сут иткән былбыл йырын
Тыңланым, моңдар теҙҙем.
Күңелемдең еҙ ҡурайҙай
Сыңлауын шунда һиҙҙем.

Халҡым йөҙөнән балҡыған
Алтындай нурҙа йөҙҙөм.
Тәнем бында, йәнем унда —
Алыçта, ҡырҙа гиҙҙем.

Бәхетемдең аҡ диңгеҙҙәй
Тулҡын ҡағыуын һиҙҙем.
Бер йырланым, бер иланым --
Күңелем ҡылына тейҙем…

* * *

Каруанһарай, башы ҡалай,
Килдем һиңә бына мин — малай.
Килгән һайын, күңел ҡылдарымды
Моңло-моңло уйҙар ялмалай.

Каруанһарай, башы ҡалай,
Баҡсаһында йүкә йыр һайлай:
“Ир башҡайы менән ат башынан
Был донъяла, дуҫтар, ни ҡалмай...”

Каруанһарай, башы ҡалай,
Ил ғәмдәрен йыйҙың бер талай.
Ташҡын һыуҙар ҡалҡты, йылдар аҡты,
Һәйкәл булып ҡалдың уртала(й).

Каруанһарай, башы ҡалай,
Манараһын елдәр сайҡалай.
Манараһын сайҡар елдәрҙә лә
Торған икән халыҡ ҡаялай!..

17.01.1965.

## Манара

Тау башында таштан шына --
Манара.
Шына осонда аҡ Айы
Алара.

Теләгән ил бағырға Күк
Төбөнә.
Тартҡан аҙан ләкин мәсет
Көбөнә...

Алда мәзин, артта һалдат
Ныҡ торған.
Телле телһә, тел осонан
Ҡыҫтырған.

Ҡыҫтырған да еҙ ҡаҙыҡҡа
Ултыртҡан...
Ултыртмаһа, телер телен
Йолҡторҡан.

Дарға аҫып, күҙен соҡоп
Бынан тыш,
Ҡанат ҡаҡҡан ике башлы
Сәмреғош...

Ынтылғандар бәндәләр сөм
Күгенә,
Йығылғандар манараның
Төбөнә...

...Шаулай донъя, йыһан яулар
Яу бара...
Булһын икән халыҡ үҙе
Манара...

1965.

## Һағыныу

Һағыныуға дауа түгел икән
Емшән үләненең еҫе лә...
Тыуған далам — Ырымбур далаһын
Төштәремдә күреп киҫеләм!..

Уйлағайным: “Өфөм яҡтарында
Тәбиғәте ысын башҡорттоң —
Мәғрур тауҙар, урман һәм туғайҙар...
Улар ҙа тик тиҙҙән ялҡытты...

Дала елеп күнгән күңелемә
Тарлау икән тауҙар, туғайҙар.
Ҡыйғырлаған шоңҡар саңҡылдауын
Тыңлай алмай йөрәк һыҙлайҙыр...

Аңҡытһа ла йомарт хуш еҫтәрен
Шат Өфөмдөң хозур төйәге,
Тарта икән, тарта башҡортомдо
Ҡом еленә күнгән һөйәге...

Күк Уралым, аҡыҡ Ағиҙелем —
Бала саҡтан баллы тылсымдар,
Үпкәләмәгеҙ һеҙ бының өсөн, —

Яҡын миңә шоңҡар, ыласындар...

Оса улар, оса далам иңләп,
Мең быуаттар осҡан юлынан.
Әле булһа кейек ҡыуа башҡорт,
Шоңҡар сөйөп көслө ҡулынан...

Әле булһа, осҡон сүкеп ерҙән,
Уҙа елде ярһыу тояҡтар...
Далам, далам! Туҙан бураныңды
Йотоуы ла ләззәт ҡай саҡта!..

Уйлаһаң бер, үҙе алйотлоҡтор —
Тау-ожмахтан дала һағыныу...
Бәндә — бәндә инде: ғүмеренә
Оноталмаҫ тыуған яғын ул!

Һөйә, берсә, шаулы урмандарҙы,
Уға, берсә, дала — Ер йәбе.
Бөтөн донъя һыя күңеленә,
Шуға ла бай башҡорт йөрәге.

1965.

## Елдерт, поезд!

Елдерт, поезд, болғап ялдарыңды,
Елдәр ҡыуып беҙҙе етмәһен!
Далам, әнә, етен таҫтамалға
Һалып тотҡан Ҡояш-икмәген.

Толом һелкеп елә көмөш ҡылған,
Көнөм көлә, ҡотлап, тәҙрәнән.
Алып сыҡҡан һыуыр ҡыҙыл улын,
Ҡурҡмайынса шоңҡар-йәҙрәнән.

Күҙен улар миңә төбәй төҫлө,
“Ҡайтаһыңмы? Ҡайт, ҡайт!” ти кеүек.
Ыржыҡ танау йомранҡайы хатта
Күңелемдең ҡаға ишеген...

Төштәремә керҙе таш ҡалала
Еҙ тояҡлы йылғыр юртаҡтар...

Далам, далам! Ҡомло бураныңды
Йотоуы ла танһыҡ ят яҡта!

Быуат-быуат тарих ипкен һирпә,
Ҡылғанлыҡтан һинең, ҡуҙ сәсеп.
Ал таңдарҙа ысыҡ урынына
Ығылғандай ҡанлы күҙ йәше...

Мүкле таштар ҡалған һәм убалар
Ҡылыс сыҡ-сыҡ иткән замандан.
Һыныҡ булаттарҙы йола ерҙән,
Сиҙәм аҡтарғанда, һабандар...

Халҡым шулай ҡырыҫ һөйгән һине,
Аҡ еләнле иркен, киң дала!
Елдән түгел — тыным өргән өндән
Ҡылғандарың һинең сайҡала!

Һағынып шул ҡылған ҡыштырҙауын,
Ҡайтам алйып алыҫ яҡтарҙан...
Тау булайым сүгеп еркәйемә,
Түбәм торһон балҡып сал ҡарҙан...

1965.

## Тирмән

Билдән батып, он-саң борлатып,
Тынмаҫ тирмән тартып ултыра.
Көнө-төнө һыуҙар ағыла.
Көнө-төнө таштар ҡалтырай.

Ағын һыуҙар һымаҡ алҡынып,
Йыуып ташты, ондар ағыла.
Тормош тирмәнендә, онталып,
Аҙналар һәм айҙар ағыла.

Аға ҡуша йылдар, быуындар
Тирмән аша... Китә байырға...
Йылдар — ондар. Ә беҙ — тирмәнсе, —
Бына шунда бөтә айырма.

24.01.1965.

## Ҡояш-солтан һәм көтөүсе

*(Этюд)*

**1**

Йылтыр уҡа – көмөш ҡылғандар
Тулҡынлана далам өҫтөндә.
Ҡыуан елдең әрем әсеһен
Татый-татый ирен өтөлә.

Һырт ҡайырып ҡаса Ҡояштан
Кәлтә ҡойроҡ — йылғыр, һаҡ ҡуян.
Тонсоҡторғос томра һауаға
Ҡала ҡалҡып һорғолт, ваҡ туҙан.

Сиңерткәләр, сарсап, туҡтата
Сүкеп көмөш, даға бөгөүен.
Тешләп телен, өнһөҙ йығыла
Йәшел башлы ҡомһоҙ күгәүен.

Ҡояш-солтан менеп ултыра,
Бөкләп аяҡ, тәхет түренә.
Утлы ҡараш ташлай бейектән
Тынып ҡалмыш биләм-еренә.

Баҙнат ҡына ҡылһын болот-яу —
Йоҡмаҫ ергә -- туҙғыр ғәскәре!
Уйлап шуны солтан ҡыҙғайны,
Уғата нығ артты зәһәре...

**2**

Дала өнөн быуған тынлыҡты
Кинәт кенә боҙҙо бер ағай:
Шаңғыртып Көн-солтан биләмен,
Ҡурай буйлап дәртле йыр аға!

Моңо менән серле сихырлап,
Әсир итмеш ағай болотто!
Был ни әхүәл?! Ниңә ул болот
Ҡурайына уның ылыҡты?!

Дала ябып күсә тос болот,
Үлән төбөн типсеп саң ялай.

“Һанламайса мине, Ҡояшты,
Үҙ белдеген егә ник былай?!.” —

Төшә солтан, ярһып, тәхеттән,
Елә генә көмбәҙ-юл буйлап:
“Йәһәт-йәһәт барып етергә,
Яһиллыҡҡа кем ул юл ҡуйған?!”

Ҡуна Ҡояш офоҡ ҡылына,
Ҡала ҡатып шунда, оялып:
Болот түгел бит был — даланы
Килә ябып һимеҙ ҡуй-һарыҡ!

Көлөп тора Көнгә көтөүсе:
Тотҡан ҡурай, таяҡ таянған.
Көн һайын ул илгә, тылсымлап,
Тере болот әйҙәй даланан.

24.01.1965.

## Йылантау

Йылантау был — ингән тарихҡа:
Быуат элек уның итәге
Мәшһүр Игнатьевты һанлаған,
Ҡылғанына ҡосоп итеген.

Торған ҡарап урыҫ ғалимы
Ҡуңырланып ятҡан текәне.
Салт тойған ул бында башҡорттоң
Сал йөрәге сарсап типкәнен.

Яуыз йылан затын ләғнәтләп
Йыр аҡҡанын ғалим ишеткән.
Һәр ир бала, йылан ҡыям, тип,
Бысаҡ ҡайрап ятҡан бишектән...

Иткән ғашиҡ ирҙе йыр моңо,
Ирек һөйгән күҙҙәр ялҡыны.
Әйткән ғалим: “Йылан тауында
Балҡыр Ҡояш, тиҙҙән балҡыр ул!”

...Йыланланып, тауҙың биленә

Тик исеме инде уралған.
Сөнки йылан ятыр урынды
Биләм итеп яңы йыр алған.

24.01.1965.

## Юҡ, мин түгел тамсы

Юҡ, мин түгел тамсы океандан —
Океандың мин бөтөн есеме.
Шаулаһа ла, тынһа ла ул булмай
Минән башҡа — шуға көслөмөн!

Тамсы булырмын мин хәлдән тайһам,
Дауылдарҙан ҡурҡып баш эйһәм.
Әлегә мин — сере мәңгелектең,
Әлегә мин — даулы океан!

25.01.1965.

## Тимерлектә

Тимерсе дуç, утлы рифмаларҙан
Төҙөйһөң йыр, сүкеп, көн дә шәп.
Иртә һайын, йырың баçыуҙарға
Сыға гөрләп — шуға көнләшәм.

Рөхсәт итсе, иптәш, йөрәгемде
Һандалыңа йолоп һалайым.
Йән сирәмен дөрөп йыр сәсергә
Утлы дөрән сүкеп алайым!

25.01.1965.

## Болоттар

Болоттар, болоттар урала
Уй уйлап ойоған Уралға.
Сал түбә моңайып йәш түгә —
Итәккә йәш яуа, йәш ауа.

Әйтмәгеҙ уйлап тик: “Илаҡ!” — тип

Болоттар уралған ҙур тауға:
Итәктә йәшнәгән йәшелгә
Күҙ йәше бик дауа, бик дауа.

26.01.1965.

## Болондарым, ҡырҙарым

Болондарым минең, ҡырҙарым,
Шыта һеҙҙә йырлар йырҙарым.
Елкенеп бер, елеп үтергә
Иңегеҙҙе — изге уйҙарым.

Һабанымды ҡуйҙым үткерләп,
Сабатамды кейҙем мистарлап.
Тракторым күптән тырылдай,
Сығыуымды минең ҡыҫтаҡлап.

Болондарым минең, ҡырҙарым,
Бураҙналап һеҙҙе һырлармын.
Алыр өсөн һеҙҙән йырҙарым,
Тама һеҙгә ҡайнар тирҙәрем.

26.01.1965.

## Дуҫлыҡ

Ылаш-ҡарҙан биле һығылып,
Һына яҙҙы һомғол аҡтирәк.
Тотоп торҙо һуңғы һулышта
Йәш өйәңке, иңгә-иң терәп.

Ыңғырашып түҙҙе олондар,
Ян-яҡҡа тик тайып китмәне.
Ҡосаҡтарын бәйләп ҡосаҡҡа,
Еткерҙеләр яҙғы көн йәмен.

Аҡты иреп иңдән ауыр йөк,
Ярҙы бөрө, бүртеп, ботаҡтар.
Ҡарт аҡтирәк йәп-йәш серҙәшен
Илай-илай ҡыҫты ҡосаҡҡа.

26.01.1965.

## Селләлә

Хурламағыҙ февраль селләһен:
“Көнө һыуыҡ, тыны — болот”, — тип.
Минең өсөн февраль бураны
Тылсымлы бер мәлен тулатты.

Күҙ йомғансы, ярһыу яҙ бирҙе,
Күҙ асҡансы, йәйғор-йәй бирҙе.
Күк көмбәҙен мансып зәңгәргә,
Йондоҙҙарҙан сәскә тергеҙҙе.

Етәкләшеп, йәшел сәхрәлә
Аҡ томандар кисеп йөрөнөк.
Ҡаптыҡ өҙөп ҡусҡыл болоттан
Ысыҡ ҡунған бәбәк-бөрөнө.

Өнһөҙ көлгән Айҙың янында
Тымыҡ нурға сумып ултырҙыҡ.
Йырға сарсап ятҡан сахраны
Ике йөрәк йыры тултырҙы...

Килде күкрәп, эйе, май айы —
Ҡар-буранлы, ҡырыҫ был мәлдә!
Туңыр саҡта -- мәлйеп-иренем,
Иренемә ирен тейгәндә!

Аһ! — селләһен белмәй февралдең,
Күрешеү мин көткәс көн һайын,
Һөйгән йәрем алһыу иренгә
Ҡымтып килгән ҡайнар май айын!

27.01.1965.

## Ҡауын телеме

Егет булып еткәндә
Ҙурланы атай мине:
“Ун биш йәшең тулыуын
Байрам итәбеҙ!” — тине.

Әсәй ҡоймаҡ майланы,
Ҡуйҙы табынға буйтлап.
Керҙе күрше-күләндәр,
Тыуған көнөмдө ҡотлап.

“Егет булып еттең!” — тип
Күккә сөйөүҙәр китте.
Һәр береһе аҡ ынйы
Сәскәһе бүләк итте.

Аҡ сәскәгә төрөнөп
Ултырам балҡып түрҙә.
Алһыу сәскә юҡҺынып,
Йөрәгем ләкин бөрә...

Тик бер генә ал сәскә
Шәлкемгә инһә ине! —
Янымдағы ултырғыс
Ҡунағы килһә ине!..

Сыҡтым тышҡа йүгереп,
Ҡалды шығырлап ҡапҡа.
Күршеләге баҡсала
Мәктәр ал сәскә ата.

Мәктәр аша үрелеп,
Тәҙрәһен генә ҡаҡтым.
Ситән аша һикереп,
Өйөмә ҡарай саптым...

...Шау-гөр килә көр табын,
Ҡунаҡтар ҡоймаҡ ашай.
Йөрәгемде өҙҙөрөп
Мәк ҡыҙы ишек аса(й)!

Ҡайҙа һуң ал сәскәһе —
Ҡойғанмы сәскә мәктәр?!.
Алһыу бите, ирене —
Торғаны алһыу ядкәр!

Ҡылыс кеүек кәк(е)ре
Ҡауын телеме тотҡан:
“Атай бөгөн баҙарҙан
Елле ҡауын апҡайтҡан!

Керҙем алып һиңә лә —
Бик тәмле, Зариф, аша!”
Ҡабам тиһәм ҡауынын,
Бар табын көлөп-шаша...

Тамағыма тығылып,
Йолҡтом телдән телемен,
Шаран-асыҡ тәҙрәнән
Төн төбөнә елләнем...

Ҡалды ҡаушап алһыу ҡыҙ,
Йүгерҙе сығып өйҙән...
Мин, төн буйы йоҡламай,
Хыял күгендә йөҙәм:

Ал сәскәле мәктәрҙән
Гөлдәмә кейгән килеш,
Ҡауын тотҡан һылыуым
Эргәмдә килә, имеш...

Ауғас арып яҫтыҡҡа,
Тәҙрәгә текләп яттым.
Таң-һарыла офоҡҡа
Ҡауын телеме ҡалҡты.

Китте ағып ҡауын-Ай,
Туҡталмай, талғын ғына...
...Сәскә ҡойҙо күршелә
Мәктәр ҙә аҡһыл ғына...

Көтөп ала алманым
Күрше ҡыҙҙың килеүен:
Күрше ауыл егете
Ҡапҡан ҡауын телемен...

29.01.1965.

## Дала һылыу

Ағылалар ап-аҡ болоттар
Алыҫ-алыҫ Урал яғына.
Сөйөп күккә Ҡояш-йомғағын,

Дала-һылыу эшкә бағына.

Һәр аҡ болот — таҙа ҡулъяулыҡ —
Һыра буй-буй сағыу биҙәктәр:
Дала-һылыу Урал-егеткә
Булып ғашиҡ, сигә бүләктәр.

Көмбәҙ буйлап аға ҡулъяулыҡ —
Тотолмаған, һис кер ҡунмаған.
Дала-һылыу Урал-егетен
Төштәрендә күреп туймаған...

31.01.1965.

## Ҡайғым

Юҡ, мин түгел меҫкен! Йәлләмәгеҙ!
Ҡайғым менән мин бик ғорурмын.
Йөҙ йәбергә ҡаршы торҙом яңғыҙ,
Меңәүенә йәнә torormon.

Нимә һуң ул ҡайғы? — Йәш ағыҙыу?
Услап йөрәк, илгә “аһ!” ороу?..
Ә, бәлки, мин шатланамдыр илап,
Ҡайғырамдыр, бәлки, яҡтырып?!

Күргәндәрем — Хоҙай биргәндәрем:
Һабаҡ һаплар ғына мәлдәрем.
Илем генә торһон имен, тиеп,
Сығып ҡына бара йәндәрем.

Күкрәк тулы моң һәм аҫыл гәүһәр,
Беләк тулы ҡайнар көс барҙа,
Егелеүҙе көҫәп ҙур хеҙмәткә,
Килә ҡайғы ҡайһы саҡтарҙа...

1.03.1965.

## Юл-билғауыр

Юлым ауыр. Ләкин юл-билғауыр
Яҡынайта мине бәхеткә.

Бары йырым бәхет минең өсөн,
Төкөрәмен тажға, тәхеткә!

Үткән юлым — янып һүткән моңом.
Барыр ерем — йырлы килерем.
Шуның өсөн фиҙа йөрәк серем,
Шуның өсөн ғүмер бирермен.

Бешһә лимон, төшһә -- һығып һутын,
Эсеп уны сабый кинәнә.
Лимон һымаҡ һығылып, моңдарымды
Бирәйемсе яҡын-тирәмә!

Юлым ауыр, һыҙлап баҫа бауыр,
Йырға унан ләкин ни зыян?!
Юл ауырын еңеләйткән моңдар
Булыр минең илгә фидиям.

1.03.1965.

## Апрель йыры

*(Апрель исемле егет ауыҙынан)*

Апрель тигән иҫәр (ул мин инем!)
Ҡарай миңә алыҫ ярҙарҙан...
Апрель айҙарының сихырҙарын
Тоям яҙғы ярһыу йырҙарҙан.

...Комсомолдың бюро ағзаһы һәм
Группорг инем ул саҡта.
Апрель айы еткәс, Сара һылыу
«Пассивланды актив усаҡта».

Клубҡа ла һирәк йөрөй, тиеп,
Йыйылышта дуҫтар таптылар.
Тәрбиәләп ҡыҙҙы, "актив"латыу
Йөкләмәһен миңә таҡтылар.

"Атаһы бик уҫал –- сығармайҙыр,
Аҡыл менән ең һин туң ҡартты!
Ишек асмай, этен ебәреп ул
Күбебеҙҙең юлын ҡыҫҡартты..."

Булдым риза, янаһа ла ҡаза...

Киттем юллап кисен ул ҡыҙҙы.
Тәҙрәһенән тик бер генә ҡарап,
Сара миңә “ҡуҡыш” тамыҙҙы...

Шығыр-шығыр иҙҙем яҙ ҡарҙарын
Аҡ пәрҙәле тәҙрә төбөндә.
Үҙешмәкәр драмтүңәрәккә
Бара алмай ҡалдым шул төндә...

Иртәгәһен ҡыҙыу комсоргым
Елле шелтә миңә сәпәне:
“Тиҙ күр сара, актив булһын Сара!” —
Тип “мөгөҙҙән алды тәкәне”.

Ырҙын яһап йәнә тәҙрә төбөн,
Ҡара төндә аҡ ҡар тапайым...
Һарғайғас таң, күрҙем аҡ шаршауҙың
Күбәләктәй ҡанат ҡаҡҡанын...

Асты тәҙрә... Әйтте:
“Ах Апрель,
Таң йоҡомдо ниңә ҡасырҙың?!.” —
Башын эйҙе Сара, тулҡын сәсен
Иңдәремә минең япҡырҙы...

Дарҫлап ҡаҡҡан ҡайнар йөрәгемә
Ике ҡуллап тарттым мин ҡыҙҙы:
“Ишет, Сара, ҡәтғи күрәм сара —
Һине миңә комсорг тапшырҙы!”

“Шулаймы ни? Ҡәтғи минеме ни?!
Апрель тигән аңыш һинме ни?!” —
Сараһыҙҙан көлдө, буғай, Сара...
Ә мин әйттем: “Комсорг үҙе... ни...”

Эҫе һулышынан беште йәнем:
“Ҡарышырға, — тине, — юҡ сара.
Тик бел шуны: актив Апрель генә
Пассивлыҡтан мине ҡотҡара”...

Тәүге тапҡыр шунда яҙ күкрәүен
Күкрәгемдә аныҡ ишеттем.
Актив бул, тип әйтер өсөн килеп,
Апрель активлығын хис иттем...

Өҙә алмай ирендәрҙән ирен,
Тынды ҡыҫып, шашып тик торҙоҡ.
Ә арҡаға тамсы “тыпыр-тыпыр” —
Сыбыртҡыһын һыулыҡ сыптырҙы...

Йылға ярып табан аҫтарында,
Ошо төндә һуңғы ҡар һыҙҙы.
Тәҙрәһенән тартып алып киттем
ЗАГС бюроһына мин ҡыҙҙы...

Елле булды ошо һуңғы сара —
Активланды пассив ҡыҙ Сара:
Йыл аралаш тапҡан биш балабыҙ
Комсомолға әүҙем юл яра!

1965.

## Тере тупраҡ

Тупраҡ менән ҡуша тулай күкрәк:
Миндә, унда — шундай берҙәмлек!
Ашау өсөн түгел — йәшәү өсөн
Бөрөләрҙе бергә бөргәнбеҙ.

Һулҡ-һулҡ тибә ерем табаныма,
Һулҡ-һулҡ тибә минең йөрәгем.
Булһа терәк ерем йөрәгемә,
Еремдең мин — маңлай терәге.

Һәр һулышын уның тоямын мин —
Һәр бөртөгөн тере тупраҡтың!
Ятмай унда яуҙар ҡаны ғына, —
Ята көрлөк, китмәҫ-ултыраҡлы.

Ҡулың сумырт ерем тупрағына,
Ҡара тыңлап уның һулышын:
“Тыҡһаң тәртә — үҫер арба”, — тигән
Мөғжизәле мөхит булыр шул!

Атайҙарҙан беҙгә ҡандар ғына,
Уҡтар ғына фәҡәт ҡалмаған:
Йәшәү көсө, шашып йәшнәү хисе

Еребеҙҙе, йәнде ялмаған!

2.06.1965.

## Көлмә, бәндә!

Көнө-төнө егелгән был эшкә,
Белмәй хатта әжәл киләһен.
Күҙе батҡан, һырҙар йөҙөн япҡан —
Йәнле мәйет! — тиеп көләһең.

Ҡосоп алмай фани ләззәттәрен —
Ҡуйған элеп ишек keләһен.
Тинлек эшен аттай күрә кешең —
Алйот, алйот был! — тип көләһең.

Көл-көл! Әммә "тинлек эш" тигәнең,
Аттай булыр, булыр бер заман!
Атҡа менеп, үтһәм бер елдереп,
Таныр донъя: "Был бит уҙаман!"

Иленә һин ғүмер аҙағында
Һыуынған көл бүләк итерһең.
Ә мин түргә ҙур һабан егелгән
Эш атымды ҡуйып китермен.

3.06.1965.

## Ҡанаған алмағас

Сәскә атты, ҡарҙай ағарып,
Баҡсамдағы һөйгән йәш алмам.
"Алһам, унан шатлыҡ алырмын,
Әммә ҡайғы, әрнеү-йәш алмам!"

"Аҡ гүзәллек!" — тине кешеләр,
Аҡ сәскәлек янлап үткәндә.
"Алһыу алма бында өлгөрөр,
Янып уттай!" — тине бүтәндәр.

Һыу ҡойҙом йыш һомғол һылыуға,
Төп тупрағын ҡаҙҙым ҡәҙерләп.

Баҫһа иңен, терәк булыр, тип,
Таяуҙарын ҡуйҙым әҙерләп.

Төндәр һыуыҡ — ҡырау төшә ныҡ —
Төтөнләктәр һалдым таң менән.
Өс көн буйы шулай ҡурсалап,
Киҙеүләнем яңы-яңынан.

Ҡотҡарҙым, тип, ҡотло алманы,
Дүртенсе төн ятып йоҡланым...
Шаҡырайтҡан ҡырау таң-иртән, —
Ә мин тороп тышҡа сыҡманым...

Ҡояш менән бергә иртәгәһен,
Серләшергә килдем алмаға.
Аһ, ни күрәм! — ап-аҡ сәскәләре
Ҡан-ҡыҙарған... Ағас ҡанаған...

Туңған түлле, ҡанлы алмағасым
Кәрә минең бик йыш төшөмә.
Етмәй ҡала йөрәк йылылығы
Ҡырауҙарҙа яҡын кешеңә...

3.06.1965.

## Оҙон тирәктәр

Елдәр, елдәр шаулап иҫәләр,
Һыҡтай, һиңкеп, серек төпҫәләр.
Илай улар: "Ҡасан был тымыр,
Бындай елдән һөлдә йолҡонор..."

"Бындай елдәр беҙгә кәрәктәр!" —
Тип тирбәлә оҙон тирәктәр.

Елдәр, елдәр шаулап иҫәләр,
Ҡыу ҡамғаҡтар ҡубып күсәләр:
"Бөттөк, бөттөк, киттек, әшнәләр,
Елдәр беҙҙе һәләк итәләр!"

"Бындай елдәр беҙгә кәрәктәр!" —
Тип йырлайҙар оҙон тирәктәр.

Елдәр, елдәр шаулап иҫәләр,
Тау һырттарын яллап киҫәләр,
Ҡаяларҙы улар китәләр.
Олой тауҙар: "Харап итәләр!"

"Быңдай елдәр беҙгә кәрәктәр!" —
Тип гөрләйҙәр оҙон тирәктәр.

Елдәр, елдәр шаулап иҫәләр,
Диңгеҙҙәрҙә күбек бешәләр.
Сал тулҡындар, сыйнап, әйтәләр:
"Беҙҙең башҡа елдәр етәләр!"

"Быңдай елдәр беҙгә кәрәктәр! —
Тип шатлана оҙон тирәктәр. —
Орлоҡтарҙан беҙҙең шытасаҡ
Елле ерҙә һомғол терәктәр!"

3.06.1965.

## Әлфиә

Тауҙа бешкән ал сейә, —
Сейә тирә Әлфиә.
Һелкенә күнәккәйе,
Елкенә йөрәккәйе, —
Сейә тирә Әлфиә.

Уңған икән ал сейә,
Булған икән Әлфиә:
Өйөлә күнәккәйе,
Һығыла беләккәйе, —
Сейә тирә Әлфиә.

Эй матур ҡыҙ Әлфиә,
Ауыр икән ал сейә.
Алайым күнәккәйең,
Баҫайым йөрәккәйең,
Ауыр икән ал сейә.

Ауыр түгел ал сейә,
Һиңә түгел Әлфиә.
Һуңланың, егеткәйем,

Уңманың, егеткәйем,
Һиңә түгел Әлфиә!

3.06.1965.

### Егетем

Сыҫҡандар аҡ ромашканан
Ҡаса, тиҙәр, йән атып.
Сәсрәһенсе сыҫҡандары, —
Яндым егет яратып!

Аҡ ромашка сәскәләрен
Йыйҙым да күмәк итеп,
Тапшырырға егетемә
Йүнәлдем, бүләк итеп.

“Егеттәргә, тиерһегеҙ,
Сәскә килтермәй ҡыҙҙар!”
Ә мин булдым килтерергә —
Ни уйлаһа ла уйлар!

Ҡыҫып тотоп йөрәгемә
Аҡ ромашка гөлкәйен,
Алдым көтөп һөйгәнемде:
“Йәнем ҡушып бирәйем!”

Егеткәйем, ебеккәйем
Йөрәк эргәмә килде.
Төртөп морон гөлдәмәмә,
Еҫкәргә, тип, эйелде.

Аһ! — ни күрәм! — Сүкте лә теҙ,
“Тәкмәс атты” егетем!
Китмәйенсә баш осонан,
Киҙеүләнем ете төн...

“Аллергия...” – тине доктор,
“Йәлләргия...” – тинем мин.
Йәлләй-йәлләй хәлдең серен
Көскә генә белдем мин:

Егет тигән елбәҙәгем —

Сысҡан булған бит ябай.
Ромашка мин еҫкәтмәһәм,
Йөрөр ине ҡомағай!..

3.06.1965.

## Бәйгесе

“Дөп-дөп!” саба аттар бәйгелә,
Бөгә билен, уфтап, йәшел ер...
Елеп үткәндәрҙең артынан
Ҡала текләп ярһыу йәш-үҫмер.

Өйрәтелгән тоғро арғымаҡ
Бирелмәгән әле үҫмергә.
Сығып бара ярһыу йөрәге,
Бәйге ҡырын ярып үтергә!

Дөнә-дөнә бәйге ирҙәре!
Арғымаҡтар — бәйһеҙ ел кеүек!
“Ә мин ҡуша ниңә елмәйем,
Торам ҡатып — ҡорҙан кимтелеп?!” --

Илай яҙып китә майҙандан:
“Бәхетлеләр, минһеҙ сабығыҙ!
И Илаһым! Килә илайһым! --
Миңә лә бер яйҙаҡ табығыҙ!”

Яланаяҡ, яңғыҙ, яланбаш, —
Ялан ҡырға үҫмер ташланды.
Осҡон сәсеп баҡты күҙҙәре
Өйөр-өйөр йылҡы сапҡанды:

Елә, ярһып, аҙау-айғыры,
Йыртып күкте, уҫал бышҡыра.
Тотона ла үҫмер ялына,
Ырғып менә -- осҡор ҡош була!

Айғыр дөнә, айғыр йомола,
Түңәрләп тә барған туп кеүек.
Ысҡындырмай ялды йәш-үҫмер,
Яндырһа ла елдәр, ут кеүек.

Сума аҙау сөмгөл упҡынға,
Менә аҙау, ярһып, ярҙарға.
Ғәрлек ҡатыш ғәйрәт төйнәлгән,
Ҡуш усланып, шәлкем ялдарға!

Тибә "дөп-дөп!" аҫау йөрәге,
Тибә "дөп-дөп!" утлы дүрт тояҡ.
Бәйге ҡыры алда, ниһәйәт, —
Яйҙаҡ йөрәгенә үрт ҡоя...

Уйламағыҙ,сирғып ҡалыр, тип,
Ялдан алған әрһеҙ был һыбай.
Бар булмышы уның — алдында,
Осҡон сәсер утлы юл ымлай.

4.06.1965.

## Ирлек

Алда алыш — еңеү йә ҡыйралыш.
Ҡолаҡ ярып елдәр һыҙғыра.
Алға! Алға! Түгел мин ҡупшыҡ ҡыу,
Туҙанланып елгә туҙғырға!

Ирҙең башын, һөйһә көнөн шашып,
Көрәш-күрек өргән ел урай.
Ярһыу атын типсеп, барыр осоп,
Булһа егет әгәр булырҙай.

Иле өсөн һалмай ғәйрәт-көсөн,
Тымыҡ күлгә нисек ир ҡаһын?!
Итһә лә ял, һуңлап ҡына ятыр,
Күкрәк киреп юлдар ярғастын.

Һәм һерәймәҫ һис тә: "Мин-мин!" — тимәҫ,
Маҡтау көҫәп, бүкҫә ҡалҡытмаҫ.
Ялағайлыҡ булғас ҡан дошманы,
Таҫма һуҙмаҫ — йотор ҡан, йотһа!

Ирлек — ябай, уға ерлек ябай...
Ябай түгел ләкин ир булыу.
Бының өсөн кәрәк Ҡояш булыу.
Бының өсөн кәрәк Ер булыу.

“Кендек — мин! — тип, —
Тотҡа — мин, тик мин!” — тип
Ҡасан Ҡояш, ҡасан Ер әйткән?
Ҡояш һәм Ер ҡасан орбитаһын
Таҫма телдәр таҫлап киңәйткән?!

Бар ул, бар ул аҫыл ир-егеттәр:
Ҡояш һәм Ер кеүек халҡына!
Янһам ине, дөрләп барһам ине,
Улар кеүек булыу хаҡына!

Көн-төн яныу, көнөм нурын һалыу
Кешем тигән гүзәл гөлдәргә —
Ил көткәндән изге сифат икән,
Ирмен, тигән аҫыл ирҙәргә.

8.06.1965.

## Их, күңелле!

Их, күңелле тыуған еркәйемдә:
Һауалары — һаумал шундай шәп!
Шыбыр-шыбыр серләй тирәктәре,
Йылғалары йырлап һөйләшә.

Болонона инһәң, ҡоса билдән
Бәүелеп тә үҫкән үләне.
Суҡыш сиртә, сорғоп, аяғыңа
Мыжғып ятмыш тартай-фәләне.

Ҡыҙылҡайҙар күреп сүкһәң ергә —
Турғай башы ҙурлыҡ еләктәр!
“Дыж-дыж” өрөп тарта ҡурайҙарын
Еләк төптәрендә бөжәктәр.

Ҡояш ҡалҡынғанда, һомғол талда
Һандуғасҡай һайрап сәс үрә.
Кис булдиһә, тымыҡ күк йөҙөнә
Көмөш йөҙөк Аллам кейҙерә...

Айлы төндә, арҡа терәп ергә,
Күк ҡашмауын ҡармап ятаһың.

Быҙ-быҙ килгән тере йондоҙҙарҙы
Усың менән һәрмәп тотаһың.

Күңелле шул, эйе, бик күңелле
Тыуып үҫкән ғәзиз еремдә.
Ҡулым тейә, һабан һөрөп ҡайтҡас,
Күк йөҙөнән йондоҙ тирергә!

14.07.1965.

## Кәбәнсе йыры

Шыпла, ағай, шыпла кәбәнеңде —
Араһынан елдәр үтмәһен.
Күрәһең бит: ҡандай ир-егеттәр
Күбәләрҙең тетә тетмәһен!

Ҡаҙаһа бер — аттай күбә ҡубыр,
Күтәрһә бер — өйҙәй күтәрә.
Төшөү өсөн үрҙән, булып күркәм,
Юл оҙонлоҡ арҡан-еп кәрәк!

Ҡарама һин беҙҙән тир аҡҡанға,
Кәбәнеңде шыплап һала бир.
Түбәң менән күкте дөрһәң генә
Булырбыҙ беҙ бөгөн баһадир!

Ҙурлама ла беҙҙе, хурлама ла —
Был эштәргә күптән күнеккән.
Әйт тик шуны: ҡайтҡас, төндәр буйы
Тән ауырта икән нилектән?..

Һәй боронғо ирҙәр, арыҫландар, —
Талмай ине, тип тә һөйләмә.
Уларҙың да таш түгел бит йәне —
Теләгәндер һалҡын күләгә.

Ос һәнәген сәнсеп атҡарғанда
Уларҙың да тире аҡҡандыр.
Ҡымыҙҙан йә балдан шифа табып,
Һыҙлай-һыҙлай кисен ятҡандыр.

Юҡ, маҡтама, ағай, маҡтама һин —

Беләбеҙ бит иҫке заманды:
Тирләп байға кәбән ҡойған яйҙа
Һинең дә бик билең талғандыр.

Шуныһы тик: ниңә, ниңә һаман
Бөгә билде ҡартлас-һәнәктәр?
Музей кәштәһендә, шаһит булып,
Ятһын ине үткән “йәннәт”тә.

Ялға ҡайтҡан ҡалайәндәр генә
Ҡайғырырҙар ине был эшкә.
Тик улайһа, гантель урынына
Эйәрләргә һәнәк тейештәр...

Күрше колхоз, ана, “Белорус”лы
Кәбән ҡойғос-”һәнәк” алдырған.
Шунан бирле клуб тирәһендә
Йәштәр йыры ғорур яңғырай.

Бер ҡалҡытып беҙ ун талпынғанды,
“Белорус”ың алып ырғытһа,
Кәбән түгел, Казбек түбәһен беҙ
Ослар инек мыйыҡ бороп та!

Ятмаҫ инек уфтап, бот күтәреп,
Бөтөп ҡайтҡас эште, һикелә.
Килер ине китап һәм йыр, шиғыр
Иптәш булып — йәнең ни теләй!..

Әйтмә, ағай, әйтмә, сүп кенә, тип,
Арыҫланға кәбән ҡойоуы.
Ҡалҡытмаһа, матҡып, машиналар,
Сүп кенә лә тауҙай тойолор.

20.07.1965.

## Минең Насип ағайым

Күргәнегеҙ бармы һеҙ
Минең Насип ағамды?
Һалған саҡта «һала» ул,
Көтөп тормай һалғанды.

Түңкәрә лә һуҙа йыр,
Ала дуҫын ҡосаҡлап.
Төшә йәки бейергә,
Ҡырҡмыш тайҙай уйнаҡлап.

Тумалаҡ туп — кәүҙәһе,
Тимер сүкеш — аяғы.
Осоп осҡон, ялтылдап,
Тора баҙлап һәр яғы:

Баҫҡан һайын, батырып,
Һыға иҙән таҡтаһын.
Йөрәктәрҙе яндырып
Әйтә үҙе таҡмағын:

“Башҡорт әле бөлмәгән,
Башҡорт әле үлмәгән.
Дөпөлдәтеп бейемәй,
Башҡорт ятып күнмәгән!

Һәй, бер-ике, бер-ике,
Донъя хәҙер беҙҙеке.
Түшәм беҙҙең — өрлөклө,
Һике беҙҙең — йөҙлөклө!

Ике-өс тә, ике-өс,
Хәҙер беҙҙә — бөтә көс.
Һыҙғанып ең — эшлә эш,
Төрнәп балаҡ — утҡа төш!

Өс-дүрт-биш тә өс-дүрт-биш,
Булам, тиһәң, беҙгә иш,
Бейегәндә — иҙән тиш,
Һемергәндә — беҙҙәй эс!

Дүрт-биш-алты, биш-алты,
Эсмәһәң дә — бик хаҡлы.
Тик эскәндәр янына
Кил ҡыҫтырып биш “ярты”!” —

Шулай ти ҙә таҡмаҡлай,
Минең Насип ағайым.
Үксәләре шыҡылдап,
Ҡаға ҡаҙау эҙ һайын:

“Бейе-бейе, итегем.
Аҙнала бар ете көн.
Ете көндө етәкләп
Килтерҙек бит беҙ бөгөн.

Ете көндө еткереп,
Иген игеп, ер һөрөп,
Һигеҙенсе бер Төндө
Иҫертәбеҙ, һемереп.

Әүмәк-тәүмәк килһә Төн,
Таралырбыҙ өйгә тын.
Аҙғын Төндө ҡайыҙлар
Бригадир дуҫ һәм ҡатын!”

Бына шундай утлы йән
Минең Насип ағайым.
Унын һымаҡ ағайҙы
Ҡайҙан ғына табайым!

Ете көндөң етеһен
Яныпэштә үткәрә.
Баҫыуҙа ла, туйҙа ла
Йөрәк утын түңкәрә!

19.07.1965.

## Ырҙында

Көн-төн Зифа ырҙында —
Бойҙай ташҡан урында.
Тулҡын-тулҡын гәрәбә
Аяҡтарға бәрлегә.

Һары диңгеҙ, киң диңгеҙ —
Ырҙын табағы тиңһеҙ:
Машиналар гөр-килә —
Алтын диңгеҙ эркелә!

Зифа диңгеҙ шаулата,
Һары тулҡын уйната.
Көрәк ҡулда — ишкәге —

Капитан ул эштә гел.

“Күрәп-күрәп, Зифа, һин,
Алтын диңгеҙ ишәһең;
Тулҡып тулҡын бараһың,
Ҡайҙа һинең карабың?”

“Тыуған илем, ил генәм —
Минең, ағай, карабым.
Алтын диңгеҙ ҡырынан
Алып илде барамын!”

“Алтыныңдың хаҡына
Тартҡан ниндәй зат булыр?”
“Сабый ауыҙҙарында
Әпәк булыр, аҡ булыр!”

30.08.1965.

## Көҙгө моң

Болотло көҙгө көндәрҙә
Моңланам-моңһоуланам:
Үткәндәрем, еткәндәрем
Тураһында уйланам.

Быйылғы һөмөрө йәйҙәй
Үткәнем булды минең.
Терһәк менән йыртып болот,
Көнөмдө көҫәп киллдем.

Сыуаҡ көткән йөрәгемә
Боҙборсаҡтар йыш яуҙы.
Һулыманым, бирешмәнем —
Өмөт Ҡояшым янды.

Көлдө Көн аҡ, килде сыуаҡ —
Шат әбейҙәр сыуағы!
Ап-аҡ ҡайын туҙҙарына
Ҡунды йондоҙ ҡауығы!

Ағыла аҡ, яғыла аҡ—
Төрөп балаҡ, нур кисәм.

Көҙлөгөмдә, кәрлегемдә
Әллә һуңғы нур эсәм?..

Көҙкәйем шул, тиҙкәйем шул, —
"Тиҙ"ҙән тертләп моңланам.
Көҙәлмәҫме был көҙөм, тип,
Төрлө уйҙар уйланам.

Күҙҙәремде сағылдыра
Тәлгәштәрҙә алмалар —
Ағастары хатта алға
Ишереп нур һалғандар!

Мин һуң, мин һуң ни өлгөрттөм
Көҙлөгөмдә бирергә?
Болот йыртып йыйған йырым
Етер микән һибергә?

30.08.1965.

## Тирәктәрем

Үҙем ултыртҡан тирәктәр
Менән бөгөн хушлаштым.
Әйтте улар: "Биҙеп беҙҙән,
Ҡала менән дуҫлаштың!.."

Ҡулдарымдан ер тырнаған
Ҡаралыҡ та китмәгән.
Торам текләп тирәктәргә,
Ағыҙып йәш тикмәгә.

Тирәктәрем, тирәктәрем,
Тик һеҙ белдегеҙ барын.
Аҙмы буҫлығып, тик һеҙгә
Һөйләнем йөрәк зарын!

Төндәр булды йоҡламаған,
Йылмаймаған көндөҙҙәр.
Олон төптәренә һеҙҙең
Һалдым утлы юл-эҙҙәр!

Сыңҡ-сыңҡ итеп иланығыҙ,

Тәңкәгә тәңкә ҡағып,
Ҡаштарыма минең ҡапыл
Ҡағылһа ҡайғы-һағыш.

Сырҡ-сырҡ итеп көлдөгөҙ һеҙ,
Маңлайым Айҙай янһа.
Һеҙҙең күрһәткән хөрмәткә
Бирә алмайым баһа.

Тик шуны ғына әйтәмен:
Китәмен — мәңге түгел.
Бер ҡайтмаһам, бер ҡайтырмын,
Юҡһынып илде күңел.

Тик, урамдан уҙғанымда,
Мине һеҙ ят итмәгеҙ.
“Буйға үҫтереп еткермәй,
Ташлап китте...” — тимәгеҙ.

Тәңкә япраҡтан битемде
Сирттерегеҙ бер генә.
Йәшем, булып дымлы йәшен,
Тамыр тыуған еремә.

30.08.1965.

## Сыҡтым юлға

Сыҡтым юлға, оҙон юлға, —
Юлдар талғын.
Юл ғазабын кисерергә
Ниҙәр алдым?

Күп нәмәләр алып була
Бай заманда.
Күп нәмәләр талап ҡыла,
Һәй замана!

Уныһы ла, быныһы ла
Иргә кәрәк.
Уныһы ла, быныһы ла
Билгә терәк.

Кәрәк нәмәләр хисабы
Иҫ китерлек.
Мин икәүһен генә алдым
Юл үтерлек.

Беренсеһе — тынғы белмәҫ
Саф йөрәгем.
Икенсеһе — хыянатһыҙ
Дуҫ терәге.

Ә шулай ҙа, ә шулай ҙа
Шуны беләм:
Намыҫыма таянырға
Кәрәк гелән!

30.08.1965.

## Тамсы булһам

Йылғаларҙа ялтлар инем,
Тамсы булһам.
Тик тар ярҙарымда ғына
Ҡалып тынмам.

Тыныслығым, йыуашлығым
Бер юйырмын.
Суйырҙарҙы сыйылдатып
Бер һуйырмын.

Йәйғорланып үрелермен
Йә Ҡояшҡа.
Йә боҫланып йығылырмын
Ҡыҙыу ташҡа.

Есемемдән исем генә
Ҡалһа — ҡалыр.
Тамсыһынан йылға үҙе
Фәһем алыр.

30.08.1965.

## Күбәләгем

Донъям йәмле,
Тик һин булһаң ғына.
Иңкәйемә
“Елп-елп” ҡунһаң ғына.

Һинһеҙ — өнһөҙ
Миңә ҡоштар йыры.
Һинһеҙ — төҫһөҙ
Миңә Ҡояш нуры.

Һулыштарым —
Һағыш, уфтау хәҙер.
Тормош зарым —
Һине юҡтау хәҙер.

Ниңә, ниңә
Элек мин белмәнем,
Сәскәләнеп
Һиңә эйелмәнем?!

Күбәләгем,
Ҡун, ҡун иңгә ҡабат!
Һинһеҙ — мин боҙ,
Һинһеҙ — һыныҡ ҡанат...

30.08.1965.

## Ҡаңғырыу

Ырғылһам бер — шартлап ер ярылыр,
Төкөрһәм бер — төпһөҙ күл тарылыр.

Тик ни илтәм?! Нимә ҡалыр минән?!.
Тәҡдир генәм тик икенең берен биргән:

Йә — аҡ, йә — тап... Йә — аҡ, йә тап-ҡара...
Урта-екте бына шунан һайлап ҡара!..

31.08.1965.

## Дәғүә

Булды, етте! Бөттө! Баш күтәрәм!
Еккә һеңмәм! Итмәм башты әрәм!

Яҙ һин, яҙмыш, миңә миңле хоҡуҡ,
Ә яҙмаһаң, алам үҙем йолҡоп! —

Ырғылырмын — ынйы-аҡланырмын,
Йомолормон — ылғый тапланырмын!

Тик таптар ҙа минән -- ап-аҡ ҡалыр:
Аҡ Ҡош Юлым Күкте паклап яныр!

1.09.1965.

## Дау ҡошо

“Ҡояш — шапшаҡ! Ҡояш — хашшаҡ, әшәке! —
Тип һайыҫҡан шайыҡсаһын сәсрәтте. —

Ут түгел ул: нур юҡ, — тине, — күҙендә!
Ҡара таптар дочерт уның йөҙөндә!”

Ҡоторондо көлтәкойроҡ, елкенде,
“Тап”ты төртөп күрһәтергә һикерҙе.

Мәсхәрәгә ҡалды ләкин дау ҡошо:
Төрткәнендә ауҙы, төтәп суҡышы...

1.09.1965.

## “Табип” таҡмаҡтары

Күҙем шәп күрә ине,
Табип: “косой һин”, тине.
Ике аҙна имләгәс,
“Слепой” итте мине...

Килдем аҡһап имсегә,
Сөйәл сығып үксәгә.
Ҡултыҡтаяҡ таянып
Ҡайтам инде бисәгә...

Аҡтарырмын тауҙарын,
Үҫтерермен бойҙайын.
Етлекмәгән этлектән
Һаҡла, бер үк, Хоҙайым!

1965.

## Эскәмйәлә

Эскәмйәлә эстән сәңгенек
Һинең менән, ошо яҙ ғына.
Күҙҙәр минең — ялҡын-ут ине,
Һинекеләр — һалҡын боҙ ғына.

Баҡты үрҙән, уфтап, һалҡын Ай,
Шыбыр-шыбыр килде япраҡтар.
Иренемдә боҙло иренең
Тойолдо бик һаҡ та, ятыраҡ та...

Һалҡын һалып, салып үртәнең...
Үбеүемдән үкһеп боҙ янды!
Ҡотобоңдоң боҙло асманы
Һаҙағайын һыҙып ҡуҙланды...

1965.

## Үпкәләмә

Үпкәләмә, Яйыҡ, Дим, Ағиҙел, —
Йөрәк ҡаным түгел һеҙ генә.
Йәнем — йыйын бабалар төбәген
Талымламай тарта үҙенә.

Карталарҙан ҡарап көрәймәнем
Илкәйемде нескә тойорға.
Ә шулай ҙа уға күҙ һалырға
Йыш-йыш ҡына күңел бойора.

Күҙ алдыма баҫа тылсымлы ил—
Ата-баба торған ер-һыуҙар.

Йөрәкләнеп ҡитғам күкрәгендә,
Башҡортостан тамыр-юл һуҙған.

Унда — ырымдарға бай Ырымбур,
Бында — сыңрап торған Силәбе! —
Башҡортостан-йөрәкте ҡуш ҡулда
Ошо икәү услап киләме?!

Уртаҡ Урал — бүртек йән юлағы —
Был устарҙа тиртеп торалыр.
Бер үк һыуҙар — йөрәк ҡан тамыры —
Йәшәү алып илгә баралыр...

“Урал!” тиһәм, ҡыуан далаларҙы
Ҡыуалармын кеүек бөгөндән...
Әммә, әммә... Ошо ҡыуанда бит
Бабаларым ята күмелгән...

Күҙле шаһит улар тарихыма
Ҡылыс “сыҡ-сыҡ” иткән замандан.
Яугир торҡалары сыға сыңлап,
Ер аҡтарған саҡта һабандар...

Быуат-быуат ғүмер геүләй унда,
Аҙым һайын миңә өндәшеп.
Ысыҡланып һыға ҡылғандарҙы
Бабаларҙан ыҡҡан күҙ йәше.

1965.

## Ырымбурым ҡапҡалары

Ырымбурым ҡапҡалары
Асыла ла ябыла.
Европаға, Азияға
Кар(а)уандар ағыла.

Ырымбурым вокзалының
Иҙәндәре таш икән.
Европаға, Азияға
Йөрөмәле баш икән.

Ырымбурым урамдары
Тос суйыр — таҡыр ғына.
Ырымбурҙы күрмәгәндер
Юллыҡһыҙ бахыр ғына.

Ырымбурға ингәнеңдә —
Уҡтай төҙ урам икән.
Каруанһарай, башы ҡалай,
Ағарып тора икән.

Каруанһарай баҡсалары —
Хәтфәләй үлән генә.
Ағастары, ағастары —
Уралдан килгән генә!

Аҡ таштарын, аҡ таштарын
Башҡорттар һалған икән.
Һәр ташында, һәр ташында
Йәндәре ҡалған икән.

Ҡапҡаларын, ҡапҡаларын
Дауылдар ҡаҡҡан икән.
Ил ҡандары, ил ҡандары
Йылғалай аҡҡан икән...

Ырымбурым ҡапҡалары
Асыла ла ябыла.
Европаға, Азияға
Башҡорт ҡаны ағыла…

1965.

## “Туҡыл-туҡ”...

Ырымбур – ырым бер –
Хушлашыу йырымдыр.
Ухылдай паровоз,
Һулҡылдай – еремдер.

Еләмен, еләмен
Вагонда, вагонда —
Орски, Орски
Яғына, яғына.

Тимер юл, тимер юл —
Тартҡан ҡыл, тартҡан ҡыл.
Паровоз, паровоз —
Тартҡан ҡул, тартҡан ҡул.

“Туҡыл-туҡ, туҡыл-туҡ,
Беҙ — нәк уҡ, беҙ — нәк уҡ:
Осабыҙ, осабыҙ! —
Туҡыл-туҡ, туҡыл-туҡ”...

Шпалдар, шпалдар —
Иҫәпһеҙ, иҫәпһеҙ...
“Өн-тынһыҙ, өн-тынһыҙ
Нишләп һеҙ, нишләп һеҙ?”

“Йөкмәйбеҙ, йөкмәйбеҙ
Юл йырын, юл йырын.
Йыр беҙгә, йыр беҙгә
Сынйыр ул, сынйыр ул...”

“Өҙөгөҙ, өҙөгөҙ
Сынйырҙы, сынйырҙы!”
“Йөкмәр кем, йөкмәр кем
Был йырҙы, юл-йырҙы?”

Ярһыным, ярһыным
Түҙмәгәс, түҙмәгәс:
“Ҡурҡаҡ һеҙ, юртаҡ һеҙ,
Өҙмәгәс, өҙмәгәс!”

“Йыр йоғо, юл йөгө,
Маҡтанма, маҡтанма.
Һин беҙҙең, һин беҙҙең
Арҡала, арҡала!..”

Нишләйем, нишләйем –
Хаҡ һүҙгә ҡарыу юҡ...
Һағынам, һағынам –
Һағышҡа дарыу юҡ...

...Һаҡмарым, Һаҡмарым
Һул яҡта, һул яҡта.
Яйығым, Яйығым

Уң яҡта, уң яҡта.

“Туҡыл-туҡ, туҡыл-туҡ”, —
Ыстансы, ыстансы...
Аҡ уттар, шат уттар —
Ҡайтҡансы, ҡайтҡансы...

Ҡара ҡот, ҡара ҡот
Бер генә, күр генә—
Тыуҙырған, туйҙырған
Ер генә, ер генә.

Һары йот, һары йот
Иш кенә, иш кенә —
Дошманлы, ҡуштанлы
Шеш кенә, шеш кенә:

Жултыйым, Жултыйым --
Туҡталыш, туҡталыш.
Биктимер-Сәнкемем –
Тын алыш, тын алыш...

“Туҡыл-туҡ, туҡыл-туҡ”...
Мин дә ҡот, мин дә ут!
Дошманға, ҡуштанға
Мин дә йот, мин дә йот!..

Яңғыҙ ут, ғәзиз ут —
Ауылым, ауылым!
Уҡыусым, йоҡосом,
Һау булың, һау булың!

1965.

## 1966

************************




### Һөйөү

Үҙем әллә ҡырыҫ булдым инде —
Ҡырыҫ килде тәүге һөйөүем.
Шырт-энәле йәмшегән төбөндә
Йәнгә үтте ҡыҙҙың көлөүе.

Шау-сәскәлә ине донъя-ғаләм —
Күбекләнеп аңҡый муйылдар.
Өҙмәнем тик ап-аҡ сәскәләрҙе,
Башҡа сәскә булды уйымда.

Йәмшегәндең йәнсеп тырпайлығын,
Олон буйлап Күккә үрләнем.
Йондоҙлоҡта ҡуҙраған ҡуҙағын
Алып төштөм, өҙөп, ергә мин.

Бармаҡ буйы осло энәләрҙән
Тырпай гөлдөң ап-ал шәлкемен
Бүләк иткәс наҙлы һылыуыма,
Көттөм яуап, ҡатып шәм кеүек.

Еҫкәне ҡыҙ тырпай гөлдәмәмде,
Тынһыҙ тынып мәрмәр кешеләй.
Сыйнаны ла бәрҙе бүләгемде —

Ал ҡан тамды ап-аҡ түшенә...
(Хайран ҡалдым энә эшенә)...

Һөйөүемде һүрҙе осло энә…
Йәмшегәнем беште балланып.
Тормош әселәрен татытырға
Энәләре ҡалды ҡанланып...

...Йөрәк әллә көйрәк булғанғамы,
Энәлектә килде һөйөүем.
Донъялыҡта — өнһөҙ илау менән
Алмашынды ярһып көлөүем.

Булһын шулай!.. Ниңә тырпайлыҡты
Ебәк менән төрөп йәшәргә?
Энәләнгән танһыҡ һөйөү генә
Асманымда хаҡлы йәшнәргә!

13.05.1966.

## Әсәйем

Әсәй!
Һис онота алмам, әсәй,
Тәү ҡат ташлап һине киткәнде.
Әллә ниңә, сабый сағымдан уҡ,
Тартып ситкә йөрәк типкәндер...

Йүгерҙем мин, эйе, саң борҡотоп,
Яланаяҡ, далам юлынан.
Киске тынлыҡ... Ҡылдай юл осона
Шат йондоҙҙар ҡоро йыйылған.

Бере ҡыҫа ҡыҙыл күҙен,
Бере ҡыҫа йәшел күҙен,
“Кил-кил!” — ти ҙә бере ҡыймылдай.
Сабам, сабам сыңлы Ҡош Юлынан,
Әсәһенә сапҡан ҡолондай...

Әсәй, әсәй!
Таптың эҙләп мине
Ҡараңғылыҡ упҡан яландан.
Йондоҙ һәрмәп йомған

Дала ташын
Ыҫҡындырҙың нәни ҡулымдан.

Шунан бирле төрлө йондоҙҙарға
Ғашиҡ булып, алйып йәшәйем.
Киттем, тиле, ташлап һине, илде,
Йондоҙ ҡыуып,
Бәғерем, әсәйем!..
Һинһеҙ инде ҡалай йәшәйем?..

16.05.1966.

## Бөрө еле

Шартлап бөрө ярыла,
Шартлап бөрө ярыла
Күкшелт туғайлыҡта — таң яҡтан.
Булды икән нисек,
Атайҙарға, тимен, иртә-кисен
Бөрө елен тыңлау окоптан!..

Ошо минуттарҙа
Берәү ғүмер ала,
Айырыла берәү йәненән...
Ә мин ҡайтып киләм,
Уй бөрөһө бөрөп,
Һөйгән йәнейемдең янынан...

17.05.1966.

## Шырпы

Зифа һынлы уҫаҡ
Ине бер саҡ
Һыҙып һин ырғытҡан был шырпы.
Балтаң ҡайрағанда,
Нәфсең һайрағанда
Шул хаҡта бер уйлан,
Эй Кеше!

17.05.1966.

## Мөхәббәт һәм нәфрәт

Мөхәббәттән күҙем томаланып,
Илерерҙәй булған сағымда,
Тилерерҙәй булған сағымда,
Ҡарайым да, тертләп, ян-яғыма,
Нәфрәт менән йыуам аңымды,
Күҙҙе баҫҡан көмөш саңымды.

Кешелектең яһил көшөлдәре
Көнгә аяҡ салған сағында
Мөмкинме һуң фәҡәт мөхәббәттең
Ойоп ятыу татлы наҙында!

Иҫкермәһен өсөн мөхәббәт,
Нәфрәтләнә иҫке йәрәхәт...

1966.

## Кеше хаҡы

Кеше хаҡы — Тәңре хаҡы, тиҙәр,
Хаҡыбыҙҙы белеп йәшәйек.
Ҡыуыҡ ҡына көйө, "ҡыуаҡмын!" тип,
Эт көлөрлөк һөрән сәсмәйек.

"Алмаларым — аллы-гөллө!" тиеп
Тибенмәйек олон ҡыу көйө.
"Ул табам!" тип һүл тапҡан ҡуяндай,
Шапырмайыҡ төптө тыу көйө.

Кеше хаҡы — илем хаҡы бит ул,
Ҡәҙерен бик белеп тотайыҡ.
Кеше булыу өсөн был донъяла
Өнһөҙ һыҙып, ялҡын йотайыҡ.

20.07.1966.

## Таш имән

### 1

Йылайырҙың һалҡын һыуҙарына
Сумып сыҡтым быйыл яҙ менән...
Таш өҫтөнән таштар күтәрелә —
Ҡаҡ ярҙарҙа ҡалғый ҡаҙүлән.

Ҡаяларҙың ҡалын маңлайына
Ҡарағайҙар тамыр нығытҡан.
Ҡаршы ярҙан ҡәбер тәреләре
Ҡара һыуға шәүлә ырғытҡан.

Шәүләләрҙең шомло ғилләләрен
Арҡырыға ярып мин йөҙәм.
Есемемде ҡәбер төпкөлөнә
Һөйрәй кеүек һалҡын был үҙән...

**2**

Йөҙҙөм. Йөҙҙөм... Сығам инде — биҙҙем...
Баҫам аяҡ, ҡарғып, таш төпкә.
Уфтап ауам, сәнселә лә табан
Һөңгө кеүек осло китеккә...

Ҡанай табан — йәнем һулҡый яман,
Сәнселеүе үтте үҙәккә.
Йөҙөп килеп ҡабат ҡағыламын
Һөңгөләнмеш һөмһөҙ төбәккә.

Кем һөңгөһө?.. Ҡалған ҡайһы яуҙан?..
Ҡасҡандамы?.. Әллә ҡыуғанда?..
Әллә анау ҡәбер тәреләрен,
Екһенеп, ул һуя һыуҙан да?!.

Шуныһы хаҡ: таштар булмаҫтар аҡ —
Ҡараланған башҡорт ҡанынан.
Ҡаяларҙан ҡара ҡан ағыла,
Бабич ҡаны ҡанай яңынан...

**3**

Сумдым... Һурҙым һөмһөҙ таш һөңгөнө.
Һәм сығарҙым ярға, күтәреп.
Ҡатып ҡалған ҡалын ҡаяларға
Әйтте елдәр һөңгө һүҙҙәрен:

"Һеҙҙең иңдә — туйра инем мин дә,

Япраҡтарым ихлас шаулаған.
“Таш” тип тибер бары таш бәғерҙәр...
Ә мин тере һаман. Тын алам!

Таш түгел мин! Имән! Мәғрур тоҡом!
Ҡаяланып ҡатҡан таш имән!”
Сыҡылдатып саҡтым — уты сыҡты.
Таш имәнгә нисек баш эймәм?!

Ер аҫтында, һыуҙың төптәрендә
Ятҡанда ла был зат серемәй.
Таштай ҡатып һаҡлай имән затын —
Һатылмай һәм ятҡа бирелмәй!

**4**

Сал сағылдар өнһөҙ уфтаналар.
Саңға ҡалып сүккән күптәре.
Сылтыр-сылтыр ҡоя моң Йылайыр,
Ә аръяҡта шундай күп тәре...

Был ерҙә бит улар йөрөгәндәр —
Тәре, тупраҡ баҫҡан кешеләр.
Тик имәндәр ташҡа әүереләә,
Тупраҡ була беҙҙең ишеләр...

Һәм үҙебеҙ менән ҡуша китә
Мәсет айы, сиркәү тәреһе.
Ҡатҡанда ла таш булып күңелдәр,
Саңға ҡалабыҙ һәр беребеҙ.

Ә таш һөңгө — имән заттан өлгө.
Шул һөңгөнөң тере ҡыны беҙ.
Башҡорт рухы һөңгөләнеп ҡата,
Ыуалһа ла ҡыны — һыныбыҙ!

26.10.1966.

## Беренсе ҡар

Таң атҡансы донъя үҙгәргән:
Ергә ап-аҡ ебшек ҡар яуған.
Таш ҡоймалар йөҙө ҡарайған —
Күҙйәш аға, тирһең, йөҙҙәрҙән.

Шат сағандар һиҙмәй ҡалғандар —
Иҫергәндә йәйҙең йәменә,
Айнып кинәт, йәшел шәленә
Аҡ кершәндән биҙәк алғандар.

Эйеп башын, саған төбөндә
Бер наҙлы ҡыҙ таңда ҡар иҙә.
Күҙҙәрҙә йәш... Сәбәп һуң ниҙә?
Илай ул ник аҡлыҡ көнөндә?

Төн үткәнен был йән белмәгән...
Эҙҙәренә "леп-леп" ҡар яуа.
Йөрәгенә "лөп-лөп" ҡан һауа —
Көткән, көткән... Егет килмәгән...

Сағандарҙан ҡарҙар ҡойолор...
Иламасы, ҡыҙый, илама.
Талғынраҡ моң бар донъяла —
Йөрәгеңә шул моң уйылыр.

Ҡарҙар ирер, шаулап яҙ килер.
Япраҡ ярыр талған сағандар.
Һуҡмаҡ һалыр тағы табандар —
Яңы таңда яңы наҙ килер.

Иҫеңдә тот ул саҡ тик шуны:
Ғәзизерәк моң бар донъяла!
Күңелендә илдең йыйнала —
Баҫа алмай һис бер ҡар уны.
Йөрәгеңә биләп һал шуны! --
Мәңгелек моң бар был донъяла!

26.10.1966.

## Үле тимер

Хәнйәрҙәргә баҙар артҡан һайын,
Хәйлә шәйләп күңел ярһына:
Ҡәмәр-хәнйәр булып ил билендә
Йөрөүсе мут бар бит, бар ғына!

Көпләнгән ул заман туты менән,

Һабы көмөш, йөҙө улаҡтай —
Ҙур яуҙарҙа ата-бабаларҙың
Ҡулы ҡымған изге булаттай.

Ҡындан һурып ләкин бер киҙәнһәң,
Бөгәрләнер ҡырҡка, тал кеүек.
Таҡма, егет, таҡма төҙ билеңә
Үле тимер, яуға талпынып!

26.10.1966.

## Ҡарлуғасҡай ҡара

Ҡарлуғасҡай ҡара, муйыны ала,
Һауаларға сорғоп юғала.
Был ҡарлуғас ниңә түбән оса,
Аяҡ араһында урала?

Ояһы ла икән оялырлыҡ —
Һыйыр йөнөн һылап эшләгән.
Балаларын яҫтар яҫтыҡкайын
Эт ҡойроғон йолҡоп түшәгән...

Ҡарлуғасҡай ҡара, муйының ала,
Бик ғорур ҡош инең донъяла.
Ҡанат бөрөп, түбән ерҙә йөрөп,
Ғорурлығың ниңә ыуала?..

Ҡарлуғасҡай ҡара, уйлап бара:
“Бер ҡанун бар ошо донъяла:
Үрләр йәндәр генә оя үрә,
Ояһыҙҙар ғына ыуала!”

…Ҡарлуғасҡай ҡара, муйыны ала,
Һаман эшләй, һаман сыуала.
Тиҙҙән-тиҙҙән уның балаларын
Күрер әле донъя һауала!

Тамаҡ ярып шунһыҙ яр һалырға
Ғорур ҡошҡа әле иртәрәк.
Йәнең – үрҙә, тәнең ғәмле ерҙә, --
Бының өсөн күңел хөр кәрәк!

26.10.1966.

## Ҡыҙҙар

Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, ҡыҙ икән,
Үксәләре беҙ икән.
Үксәләре беҙ икән дә
Атлауҙары төҙ икән.

Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, ҡыҙ ғына,
Йөрәктәре боҙ ғына.
Боҙ булһа ла дөрләп китер —
Шырпыңды бер һыҙ ғына,
Ҡырын ҡарап уҙ ғына.

27.10.1966.

## *Әсәйем кис ултыра

Өйрөлт, әсәй, өйрөлт орсоғоңдо,
Аҡ юл һыҙып ебең һуҙылһын.
Ата-бабаларҙың хаҡ юлдары
Аҡ күңелгә көйләп яҙылһын.

Ишетәйем орсоҡ зырлауында
Быуаттарҙың байман аҡҡанын.
Өҙә тартып йәйә керештәрен,
Башҡорттарҙың яуға сапканын.

Ҡыштырлауы дала ҡылғанының
Ҡалһын сыңлап орсоҡ йырында.
Үҫәргәндең яугир егеттәре,
Ҡылған йығып, аҙмы ҡырылған...

Уралҡайҙың уҡа еләне тип
Аҡ даланы улар ҡараған.
Каруанһарай ҡороп ил төҙөргә
Аҡташ артып киткән кар(а)уан...

Өйрөлт, әсәй, өйрөлт орсоғоңдо,
Мәңгелек моң — орсоҡ йырында!
Өйрөлткән бит шулай Ер күсәрен
Бабаларым борон-борондан!

26.10.1966.

## Күк күкрәүе

Күк күкрәне бөгөн төшөмдә,
Ҡара болот китте ярылып.
Ялт-йолт иткән уҡлы йәшендәр
Күкрәгемдә һынды, бәрелеп.

Йәшлек төшө! Күрен, күрен һин!
Күреп һине, йөрәк ҡанаһын.
Йәйғорланған утлы күкрәккә
Быҫҡаҡ ямғыр ойоп яумаһын!

27.10.1966.

## Уйҙарым

Ете ятып, ете торҙом мин бөгөн,
Иңләмәксе булып уйым диңгеҙен.
Күпме тороп, күпме генә уйлама,
Уй осона сығыу ҡыйын донъяла.
Бәндә булып тыуыу, бәлки, тинлектер,
Уйлап йәшәй алыу үҙе меңлектер.

10.11.1966.

## Сәғәт уғы

Сәғәт уғы һанай заман ағышын,
Сәғәт һайын аға ҡанап һағышым:

Әле тыуҙым, әле инем кес кенә —
Етмәй кеүек ине кескәй көс кенә...

Көс тә килде, күс тә килде уй булып,
Йөрәк ҡанай, ҡанай ләкин һуйылып...

Нимә етмәй, нимә етмәй был йәнгә?! —
Әйтерһең дә, әүерелде һөймәнгә,

Әйтерһең дә, кереш киргән уҡ ҡына —

Күкрәк ярып сығыр төҫлө йолҡона.

Сәғәт уғы һуя, һуя йәнемде...
Белеүсе юҡ хиссиәтле хәлемде...

Әйтәләр: "Хис хисләп йөрөп иҫерҙең!
Сәғәтеңде алға бороп, иҫкерҙең.

Йөрәгеңде сәғәтләп һин һынаштыр —
Замананың аҡсаларын һанаштыр"...

10.11.1966.

## Саҡкылар

*

Ялбыр ялын болғап, бер йәш ҡайын
Кирә елгә нәҙек билкәйен.
Ҡусҡыл болот ҡунған иңкәйенә --
Ҡотларғамы тыуған еркәйен?

Ел тилерә, ҡайын билен кирә,
Аҡ туҙынан тиртә нур-шәме.
Аҡ мачтала балҡый, ҡусҡылланып,
Ерҙең киргән йәшел елкәне!

*

Ҡусҡыл ғына, ҡусҡыл йүкәләрем
Күҙкәйҙәрен асты таң менән.
Һары сәскә-ҡолаҡ алҡалары
Мөлдөрәшкән татлы бал менән.

Олон төбөн йыуған пак йылғаға
Былбыл йыры ҡатыш бал тама.
Аҡ сәскәнән теккән аҡ күлдәкле
Йәш күбәләк көлкеп шатлана.

*

Әрекмәндең әрһеҙ керпегендә
Тегәнәге йырҙың тулышты.
Юл ситендә, тегеп йөрәктәрҙе,
Мансый йырға һәр бер һулышты.

Күҙгә сәнсер осло осоҡтарын
Осормаған әле әрекмән.
Сөнки ул да яҙҙың күк толомло
Күксәскәһен, алйып, йәр иткән.

*

Туғайымдың аҡыҡ йондоҙҙары
Төйнәлделәр алһыу миләшкә.
Былбылдарым баллы мәрйендәрҙе
Бәрер икән кемдең өләшкә?!

Өләшһендәр, тимен, — өлөшһөҙҙәр
Былбылдарҙан алһын тейешен.
Ҡусҡыл ҡулдар ҡосоп бөтөнәйтһен
Күңелдәрҙең китек мөйөшөн.

*

Әрһеҙләнеп, тимер рәшәткәгә
Һалған ҡулын, үрмәл-сырмалсыҡ.
Уның өсөн тимер — түгел йәбер,
Йондоҙҙарға үркер юл асыҡ.

Көнгә һонған ап-аҡ касаһына
Ысыҡланып ап-аҡ нур аға.
Сырмалсығы буйлап, тулап-тулап,
Күсәренә Ерҙең урала.

1966.

*

Булған һымаҡ иблесе лә, хоҙайы ла,
Була ирҙең кәбәге лә, бойҙайы ла.
Баҫһа тупраҡ, кәбәк һыҡтай ҙа тонсоға.
Гүрҙән бойҙай йәшел хәнйәр тотоп сыға.

10.11.1966.

*

Туҡран туҡылдап
Тишә ағасты.
Һис бер туҡтамаҫ,
Һис бер алмаҫ тын.

Суҡыш бөтә, тип,

Һис бер зарланмаҫ.
Сөнки туҡтаһа —
Суҡыш сарланмаҫ.

10.11.1966.

*

Илай белеп илау — мәрүәт түгелдер,
Йәшкәйеңде белмәйенсә түгелдер.
Ил көлгәндә һин көлөүҙән ни науа?
Башлап көлә белһәң — бына шул дауа!

10.11.1966.

*

Көнө килһә, ҡыҫҡыс атҡа атланыр,
Ғүмер буйы ут ҡыҫтым, тип маҡтаныр.
Әйтмәҫ ул тик кемгә хеҙмәт иткәнен,
Кем ҡулында утлы таба илткәнен.

10.11.1966.

*

Ат аунаһа — төк ҡалыр,
Ир яулаһа — йоҡ ҡалыр.
Төккә сысҡан оялар,
Йоҡҡа дошман оялар.

Сысҡан бала сығарыр,
Дошман яла сығарыр.
Бала ашар ат ашын,
Яла ашар ир башын.

10.11.1966.

*

Талҡан тартҡан — түгел әле тирмәнсе.
Ҡамыр баҫҡан — түгел әле билмәнсе.
Илен имгән — түгел әле ил улы:
Ил имсәген тешләп өҙөр бер юлы.

10.11.1966.

*

Тонйоп яҡкан быуа күрһәң — ҡыуанма,
Тоноп аҡкан йылға күрһәң — һыу алма.
Тонйоҡ быуа тулышыр ҙа бер ярыр,
Тоноҡ йылға, ҡортлап, үләт сығарыр.

10.11.1966.

*

Бал тамғанды һөңгө буйы ҡаҙған ир,
Күҙйәш тамһа, хаҡы уның арзан, тир.
“Тып-тып” итеп ҡурайыңдан ҡан тамһа,
Бал тама, тип, ҡыла башлар тантана.

10.11.1966.

*

Хәмер ҡоло хәйер һорар баҙарҙа,
Хәйер ҡоло ҡәҙер һорар аҙбарҙа.
Ҡәҙер ҡоло шөһрәт һорар яуҙарҙа,
Шөһрәт ҡоло... ҡоллоҡ һорар һәр ҡайҙа.

10.11.1966.

*

Итек тегеп байымаған —
Ситек сигеп байымаç.
Бейә имеп тай булмаған —
Дөйә имеп ат булмаç.

10.11.1966.

*

Әрем әселәрен татығанда
Киң даланы хурлап һүкмәгеҙ.
Иҙел сөсөләрен татығанда
Ҡырсын ташын ҙурлап үпмәгеҙ.
Әсе-сөсөләрен тойған телен
Тешләүсенән игелек көтмәгеҙ.

10.11.1966.

*

Суҡмар сыҡҡан йоҙ(о)роҡто нығытыу өсөн,
Бүре башын яра һуғып ырғытыу өсөн.
Бүре йөрөй — суҡмар тора... Сәбәп низән? —
Суҡмарсыбыҙ үҙ дуҫына йоҙроҡ төйгән.

11.11.1966.

*

Мейес башы — мунса ташы тик ятҡанға.
Илем өсөн янам, тиер, кис тә, таң да.
Күкрәк һуғып, ҡашыҡ тығып, даулар бәлеш, —
Тик ятыуын һанамаҫ һис ил һатҡанға.

11.11.1966.

*

Ҡулы оҙон — ҡулын ҡурсап һаҡланыр,
Теле оҙон — телен ҡурсап һаҡланыр.
Аҡылы оҙон — аҡлы атҡа атланыр,
Ҡулын, телен ҡылыс итеп аҡланыр.

11.11.1966.

*

Батыр башы булыр ҡыуаҡта, ҡыуһаҡ та,
Ҡалтыр башы булыр дыу атта, тыйһаҡ та:
Ил аҡылын ил ағаһы тапаһа, —
Был хәл булыр шул саҡта, шул саҡта...

11.11.1966.

*

Көршәк әгәр үҙ кәштәһен онотһа,
Һауаланыр менеү өсөн болотҡа.
Менһен, әйҙә, тотма ахмаҡ нәмәне,
Ҡайтыр әле ярсыҡтары әйләнеп!

12.11.1966.

*

Ир аҙғыны һуйып маҡтар ҡатынын,
Ил ҡатыны ирен әйтер: “алтыным!”
Ялған менән ялған шулай ялғана.

Шартлап ауа бер саҡ быңдай бағана.

12.11.1966.

*

Ҡыҙыулығы бөтһә, ҡазый ҡыҙ күҙләр,
Ҡыҙ ҡуйынына кереү өсөн юл эҙләр.
Күҙе, ҡулы ҡыҙҙы һәрмәй алмаған,
Әхләҡ даулап, ҡыҙ яманлап тел төҙләр.

12.11.1966.

*

Бөттө ҡыҙҙар, мин ҡатын алған, тимә,
Күҙлек элеп, мин күҙһеҙ ҡалған, тимә.
Бер көйҙөрөп, бер һөйҙөрөп ҡараһа,
Күҙлек ярып кермәҫ шуҡ алмас, тимә.

12.11.1966.

*

Тәлмәрйенгә тилмергәнгә — күл татлы,
Тел-мәрйенгә тилергәнгә — тел татлы.
Тәлмәрйенде, тел-мәрйенде һатҡанға
Сыңлап торған алтын-көмөш бол татлы.

12.11.1966.

# 1967

***********************

## Эшләпә

Таҙ кейһә эшләпә,
Беләһеңме, нишләтә? —
Ике себен бергә килеп,
Айғыр кеүек кешнәтә.

Батыр кейһә эшләпә,
Беләһеңме, нишләтә? —
Шул эшләпә батырҙы
Үгеҙ кеүек эшләтә.

Йылғыр кейһә эшләпә,
Беләһеңме, нишләтә? —
Һылап-һыйпап, эшләпәнән
Үҙенә эш эшләтә.

1.03.1967.

## Яҡтыкүл

Аҡыҡ ҡына аҡыҡ күл – Яҡтыкүл,
Аҡ өйрәктәр уйнай һилдәрҙә.
Аҡ өйрәктәр уйнай, ай, күлдәрҙә,
Күңелкәйе әллә кемдәрҙә.

Тымыҡ та ғына тымыҡ күл — Яҡтыкүл,
Сабаҡтары алтын ҡанатлы.
Аҡ сабаҡтай алтын йәшлегемдә
Күңелемде үҙенә ҡаратты.

Бойоҡ та ғына бойоҡ, ай, Яҡтыкүл,
Тулҡынлана еләҫ саҡтарҙа.
Күрендең дә киттең, һушһыҙ иттең
Күңелкәйем иләҫ саҡтарҙа.

Тылсымлы ла күл һин, ай, Яҡтыкүл,
Яр буйҙарың ҡыштыр ҡамышлы.
Күңелкәйем түҙмәй кемде эҙләй —
Йөрәккәйем шуға һағышлы.

15.03.1967.

## Олатай

Солтановтар нәҫел тирәгенең
Ҡылысланып ҡалҡҡан ҡот-сағылы —
Шиһабитдин улы Хисамитдин
Олатайым минең бар ине
(Ҡушаматы хәтәр — Ҡыйыш Муйын...) —
Ҡояшҡа көр киргән ине буйын
Блюхерсы ҡыҙыл партизан.
Йәне менән тойоп Ленин юлын,
Батшалыҡтың алған саҡта ҡонон,
Хаҡлыҡ өсөн ҡуйып үҙ муйынын,
Дутов ҡылысынан саптырған...

Һораным мин унан, хәтерләйем:
"Хаҡлыҡ юлын нисек, олатайым,
Дөрөҫ тойҙоғоҙ һеҙ ул заманда?
Теҙегеҙгә тиклем бураҙнаға
Батҡан ҡара ялпы килеш, ҡалай
Айырҙығыҙ хаҡты ялғандан?"

Олатайым мине, бер һүҙ әйтмәй,
Салт ҡояшлы тышҡа апсыҡты:
"Күрәһеңме, — тине, — ал Ҡояшты?"
"Күрәм!" — тинем.
"Йом күҙ бер саҡлы!"

Йомғайным күҙ:
"Йә һуң нисек хәҙер —
Бармы Ҡояш? Әллә юғалған?.."
Йылмайҙым мин:
"Күҙ йомғандан ғына
Һүнмәй Ҡояш! Ҡояш юғалмай!"

Олатайым шунда, ыңҡылдатып,
"Ҡаты ергә" мине ултыртты:

“Тома һуҡырҙар ҙа тоя ала
Ҡояшты һәм ҡара болотто!

Хаҡлыҡ ине — беҙҙең Ҡояш-апай,
Суҡығанда батша-ҡарағош...
Ҡарағоштар булды ҡара болот,
Булманыҡ беҙ ләкин бер байғош!
Ленин хаҡлығына нык ынтылдыҡ,
Яра һуғып ҡара болотто.
Батшалыҡтың сәмре-ҡарағошон
Ауҙарғанда сабып, ил отто!”

“Ҡаҡшаманы нисек теҙ-быуындар,
Етте ҡалай һеҙҙең даһилыҡ,
Антантаның ун дүрт ҡарағошон
Ҡарпыҡҡанда донъя яһилы?!” —
Тип ныҡыным тағы олатайҙан...
Көлөп ҡуйҙы, ослап һүҙемде:
“Килһә белгең ул көс-түҙемде,
Олатайҙарыңдың урынына
Ҡуйып ҡара, улым, үҙеңде”...

Ошонан һуң аҡты күпме һыуҙар...
Үтте өтөп Ватан һуғышы...
Аптырайым инде үҙебеҙгә:
“Нисек еңдек, — тип, — был фашисты?!”

Беҙҙән һуң да, beләм, аптырарҙар...
“Нисек?.. Нисек?..” тиеп таптырырҙар...
Ныҡыш ейән, ейәнсәрҙәремә
Әйтер өсөн яуап һүҙемде,
Олатайҙарымдың ҡот-ҡорона
Ҡуйып ҡалдырам мин үҙемде...

3.04.1967.

## Сатҡы-сотҡолар

*

Йәшәү -- байман фани донъяла!
Тик йәшнәмәй йәшәү — ҡурҡыныс.
Һәй, аяныс! -- һалған һуҡмағың
Үҙеңдән һуң ҡалһа тып-тыныс...

3.04.1967.

*

Уҙамандан бәндә тыуған урында
“Алла” тыуыр булған борон-борондан.
Яңы түгел минең асҡан хәҡиҡәт,
Бәндәлектән һаҡлау бары бер ниәт.

3.04.1967.

*

Ил һыҙғанда телен тешләп тын уҙған —
Ер ҡыҙғанда күлгә яңғыҙ ташланыр.
Илен-ерен ялмап алған ялҡындан
Ус йылытыр өсөн ҡыҙыу таш алыр.

3.04.1967.

*

Иген иккән — интекмәҫ,
Йылҡы көткән — ялынмаҫ.
Әсәһенән тел имгән —
Үҙ иленә яу булмаҫ.

3.04.1967.

*

Иләк менән һыу ташытып,
Иштертегеҙ ҡом арҡан —
“Илең өсөн — эш”, тиһәгеҙ,
Беренән дә баш тартмам!

Иләк һымаҡ уйылыр, тип,
Ҡом арҡандай ҡойолор, тип
Минән әгәр көтһәгеҙ,
Көтә-көтә көтөк булып,
Ҡомға ҡалыр бөтәгеҙ.
Көтмәгеҙ, юҡ, көтмәгеҙ!

3.04.1967.

*

Түңгәк, тиеп, типкеләмә
Түңдә ятҡан тумарҙы:
Нисәмә күс бал ҡорттарын
Ҡышлатып ул сығарҙы!

3.04.1967.

*

Елеп-юртып “уңыш” урһа
Ғәйбәт ҡоло һайыҫҡан,
Бел: ике дуҫ араһына
Кереп ятҡан ҡойошҡан.

3.04.1967.

*

Илле ата балаһына
Ил таныҡан — кем булыр?
Илле илде телеп үткән
Ике иле тел булыр.

3.04.1967.

*

Уңға тартһаң — уңырһың,
Һулға тартһаң — һулырһың.
Үҙ юлыңдан төҙ уҙалһаң,
Ир егете булырһың.

3.04.1967.

## Бишек янында

Бишек бауын элеп ҡулға,
Бала тирбәтәм тын төндә.
Асып һалған хитапнамә
Ята тубығым өҫтөндә.

Йоҡла, балам,
Был китапҡа
Яҙмыш һинең хаҡ яҙылған:
“Ҡояш нуры көлтә-көлтә
Юлдарыңа ағыҙылған”.

Шат килерең өсөн янып,
Ҡайттым һөрөп һабан бөгөн.
Тыныс түгел әммә йөрәк:
Ҡыла золом үҙ белдеген...

Ай-һай, хәтәр хәҙер заман —

Ерҙе-күкте уттар айҡай.
Туғандарың Ер шарында —
Бишегендә тыныс ятмай.

Азияла, Африкала,
Америка илдәрендә
Ҡылыс ҡыя бишектәрҙе,
Таң ата — ҡан күлдәгендә.

Ерҙең ҡара тирандары
Төнултырып бомба ҡора.
Баштарына сабыйҙарҙың
Әжәлдәре яуып тора.

Ниңә-ниңә донъя һаман
Үлемесле һәм хәүефле?..
Аталарҙы балаларҙан,
Балаларҙы аталарҙан
Алыу йолоп — уйын төҫлө...

Хәтәр, хәтәр донъя шулай...
Йоҡла, балам,
Мин ултырам.
Ҡайһылайтып ҡотҡарырға
Ер бишеген — ниәт ҡорам.

...Ҡайттым арып һабан һөрөп —
Талған аяҡ ялға тарта;
Ҡалын томды, барлап яуап,
Ҡулдарымдан аң аҡтарта.

Китапҡа бит Ер шарының
Яҙмыштары хаҡ яҙылған:
Бишектәрҙе әжәлдәрҙән
Ҡурсау беҙгә тапшырылған!..

...Төн ултырам,
Тубығымда
Асып һалған хитап ята.
Эшләйһе эштәрем әле
Байтаҡ ята, байтаҡ ята...

17.05.1967.

## Эт йәнле

Мин өс айлыҡ ҡына сағымда,
Аҡ биләүҙән кәфен теккәндәр.
Төн йоҡламай атай, әсәйем:
“Китә инде был...” — тип көткәндәр.

Ярты үлеп, ярты терелеп,
Тауыш бирмәй оҙаҡ ятҡанмын.
“Үлде инде, бөттө!..” — тигәндә,
Нәҡ түшәмгә сәпрәй атҡанмын.

“Эт йәнле был бала!” — тигәндәр,
Ошо хәлде күреп, кешеләр.
Ә мин, эт йән, кәфен эсенән
Үрелгәнмен әсәм түшенә...

Малай булғас, күрҙе башҡайым
Тағы ла бик хәтәр минуттар.
Аҙым һайын йәшен йәшнәне,
Аҙым һайын ҡупты болоттар.

Ҡаныҡҡандай бары тик миңә,
Ашлығы ла бик йыш уңманы.
Эс бороп йә сәсәп йығылһам,
Сиренә лә дауа булманы.

Ҡарт нигеҙҙе китте ҡалдырып
Атай, ағай, ҡусты, һеңлеләр...
Йәнә миңә төртөп күрһәтеп:
“Эт йәнле был малай!” — тинеләр.

Йәшермәйем, хәтәр саҡтарҙа
Ярҙам итте миңә эт йәне...
...Һиҙмәй ҡалдым, китап ҡултыҡлап,
Мәктәпкә лә килеп еткәнде.

Һөйрәп бына йыртыҡ ботинка
(Ғәйебе юҡ — һуғыш йыртығы!..),
Барам ҡайтып күрше ауылдан,
Икмәккә, тип, эскә ел тығып.

Күк һыу баҫҡан ауыл араһын,
Һыу өҫтөнән сыйрап боҙ аға.

Йырырға юл кем, тип, һәләтле,
Малай-шалай тотто̆к шыбаға.

Сы̆ктым өҫкә, ләғнәт төшкөрө,
Тура килде һыуға сумырға.
Ауыл хал̆кын ғәмгә ҡалдырып,
Гүргә йәнә “төртәм ҡабырға”...

“Китә инде, китә...” — тинеләр,
Һайланылар “урын” зираттан.
Мин, төкөрөп туған түшәмгә,
Яттым өс йыл, “үтмәй сираттан”.

“Эт икән был әҙәм!..” — тинеләр.
Этлегемдән мин дә төңмәнем.
Ҡулты̆к тая̆к тотоп ҡал̆кынып,
Ҡал̆кыу ергә баҫтым —
Үлмәнем!

Мыйы̆к бороп шулай торғанда,
Шат торналар торлап үттеләр.
Миңә улар ая̆к ҡалдырып,
Таяғымды алып киттеләр.

Мин “эт” йәнә — күкһел диңгеҙҙә,
Булып моряк, донъя ҡыйратам.
Тўкта, ни был?!. Карап якоре
Алып сыға “алма” буръяктан.

Алма... ләкин хөртөй ашарға...
Һәләтле ул фә̆кәт шартларға.
Шыбағаһыҙ-ниһеҙ, күмәкләп,
Тура килә эште башларға.

Эт икәнбеҙ — һүттек минаны:
Үлем йәнә алып китмәне.
Тик шуныһы: ҡулды ҡыҫ̆канда,
Командирым “эт йән”, тимәне...

...Сӑкырһа ил, ғүмер һўкмағым
Шыбағаһыҙ сығыр майҙанға.
“Илең йәки йәнең?!” — тиһәләр,
Йәнем керер ут̆ка, һайланмам!

25.05.1967.

## Елкән

Күҙҙәремә баҡһаң, табырһың
Сөмгөлләнеп ятҡан упҡынды.
Зирәк йәндәр генә күрала
Елкәнемде илткән тулҡынды.

Мәңге-мәңге юлда был елкән,
Елһеҙ ҙә ул кирә ҡанатын.
Күкрәк терәп тулҡын төбөнә,
Диңгеҙ менән ҡуша ала тын.

Шул тулҡында тулай елкәнем,
Шул тулауҙан сәмем эркелә.
Ҡырҡ илаһам ҡырҡыу минутта,
Ҡырҡ илауҙы баҫып бер көләм.

Мәңге, мәңге юлда елкәнем —
Елһеҙ ҙә ул кирер ҡанатын.
Тойоп сөнки ерҙең тетрәүен,
Диңгеҙ менән ҡуша ала тын.

25.05.1967.

## Кәкре тырма

Белмәгәнгә белек бирәйек —
Беҙҙең яҡта барҙыр шул һүҙҙәр:
Бар донъяға арҡа борғанды
“Кәкре тырма һөйрәй был”, тиҙәр.

Сыҡтым һөйрәп “кәкре тырмамды” —
Тотто кирем тоташ донъяға!
Күҙҙәремде нәфрәт сырманы,
Бәғеремде ҡара ҡан яба.

Үҙ-үҙемде килә һуяһым —
Тапҡан мине әсәй ни өсөн?
Булмаһам мин, булмаҫ инеме
Төтәтеүсе ғүмер мейесен!

Ҡара ана: бисәм ултыра
Йөҙөнән ыу-һөмөр ҡойолоп.
Ҡасан ғына уны бер күрһәм,
Китә ине йөрәк уйылып!

Килмәй инде хатта ҡарағым —
Бәғеремә ҡара ҡан һауған.
Әйтерһең дә, ике араға,
Саф шишмәне баҫып, тау ауған.

Көн дә ҡарғыш, көн дә ҡысҡырыш,
Наҙ урынына — әсе күҙ йәше.
Утыҙҙан да уҙмаҫ бисәмдең
Етте, тирһең, һөмһөҙ йөҙ йәше.

Ниңә һөйҙөм, ниңә өйләндем —
Дуҫтарымдың һүҙен тыңланым!
Әйләнде ҡыҙ үтмәҫ бысаҡҡа —
Дуҫтарҙан да, ахыры, уңманым!

Бөттө хөрмәт атай-әсәйгә,
Бөттө хөрмәт иҫке дуҫтарға.
“Кәкре тырма” һөйрәп, урамдан
Китеп барам арғы остарға.

Керермен дә керле дөкәнгә,
Киртле шешә башын асырмын...
Кәкреләрен шунда сумырып,
Кәрле донъяһынан ҡасырмын...

Бына был өй... Таныш тәҙ(е)рә...
Таныш ғаилә бында наҙ ҡорҙо.
Иллә мәгәр ҡашығаяҡтар
Шалтырамай шөйлә аҙ торҙо.

Бынамындай аҫыл ҡатыны,
Сәскә генә сабый ҡыҙы бар.
Шул көйөнсә эсте өҙлөкһөҙ,
Шешә һатып ҡына торҙолар...

Киткән ташлап инде ояһын —
Был донъяла хаҡлыҡ юҡ, малай!
Ҡара ана: тәҙрә пәрҙәһен
Йолҡоп алып шылған, сусҡалай...

Булғас донъя шундай хәйерһеҙ,
Ни тип миңә усаҡ яғырға?
Етте ваҡыт — ҡайыш арҡалыҡ,
Ҡыу ботаҡлы уҫаҡ табырға!..

Уйнай ҡыҙы тәҙрә төбөндә,
Уйынсығы — китек шешәләр...
Туҡта, туҡта, ҡотһоҙ тәҙрәгә
Шешәләр, тим, ҡалай килешәләр!..

Рәт-рәт ҡуйып улар теҙелгән,
Һәр берендә йәшнәй йәш бөрө.
Сабый ҡулы шешә эсенән
Үҫтергән гөл, рәхмәт төшкөрө!

Үҙе көлә, үҙе ҡыуана,
Уҫағыңды бар тип ул белә!
Әллә бисәм, әсәм, дуҫтарым
Йөрөй микән эҙләп мине лә?..

Юҡ, был донъя түгел шөҡәтһеҙ,
Юҡ, мин түгел "кәкре тырмалы".
Ҡыҙҙар кеүек ҡылтай йәремә
Булайым гөл үҙем, сырмалып!

25.05.1967.

## 1968

************************



### Ҡаға йөрәгем

Ҡаға йөрәк, ҡаға йөрәгем —
Ҡапыл һиңә ауыр һүҙ әйттем.
Ә һин төймә генә төйөндө
Дөйә хәтлем итеп сеймәлттең...

Аҡ мендәргә ҡаплап битеңде, —
Торам күреп, — үкһеп илайһың.
Илап ҡына, ҡалған хәтерҙе
Ҡайтарырға әллә уйлайһың?

Тик бер һүҙ-уҡ... Күңел гөлөндә
Иң аҫыл таж инде юҡ хәҙер.
Ике йөрәктә тиң, тоҫҡалып,
Атылырға торған уҡ әҙер...

Ҡаға йөрәк, ҡаға йөрәгем.
Килсе, йәнем, инде һүҙ әйтмәм!
Йөрәгеңде, йәбер уҡтарын
Үбеп-һурып алып, төҙәлтәм!

1968.

## Башҡорт толпары

Шүлгәнташ мәмерйәһендәге
һүрәттәрҙе ҡарағас.

Йырлағандыр бында тәүге рәссам,
Ҡаны менән буяп аҡ ташты:
"Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы!"

Шүлгәнташтан, алып ир-егетен,
Сыҡҡан сабып башҡорт толпары.
Меӊ-меӊ йылдар саба, саба һаман,
Киреп елгә текә ялдарын.

Елер өсөн мәӊге, еҙ өҙәӊге,
Эйәр һалған башҡорт батыры.
Илен һөйәр ирҙе илткән толпар
Быуат бәйгеләре арҡылы.

Тын океан яры буйҙарынан
Атлантикка тиклем араны
Ҡалтыратҡан ҡаты тояҡтары,
Ҡанһыратҡан дошман-ҡараны!

Империяларҙыӊ ҡалалары,
Тәхеттәре ауған юлында.
Азатлыҡтыӊ алһыу тыуы менән
Ҡылыс булған батыр ҡулында.

Тояғыныӊ алмас дағалары
Төндәргә таӊ уйып ҡалдырған.
Ҡот дағаһын ҡосоп ужым үҫкән,
Ауыл, ҡалаларын һалдырған.

Дәүерҙәрҙе дөнгән елеп кенә —
Арымаған башҡорт толпары.

Күкрәк менән һуғып ул һындырған
Батый-хандың һөңгө-уктарын.

Киреп көнгә талмаҫ ҡанаттарын,
Илткән толпар изге хикмәткә:
Урыҫҡа ҡул биргән башҡорт туған!
Береккән ил, бөтөн икмәктәй!

Рәсәй-илдең еңеү ғәскәрендә
Елгән ярһып хаҡлыҡ толпары.
Минин, Пожарский сафтарында
Ҡыуған башҡорт поляк пандарын!

Бородиноларҙан бәреп сығып,
Француз яуын еңгән Парижда.
Башҡорт толпары һәм урыҫ аты
Кешнәшкәндәр Сена ярында!

Замананың ҡара батшалығы
Һыҡҡан саҡта илдең алҡымын,
Салауаттар заман толпарында
Пугачевҡа илткән ал тыуын.

Шүлгәнташтан ҡарғып ҡалҡҡан аҫау
Быуат аша кискән быуаттар.
Ҡыҙыл тыуын сөйөп, Петроградта
Ҡыҙыл сафта барған был аттар!

Шайморатов менгән буҙ толпарҙың
Дағаһынан осҡон ялтлаған.
Башҡорт толпарҙары фашизмды
Берлин урамында тапаған!

Ҡайтты еңеп ерем толпарҙары
Рәсәй юрғалары сафында.
Саба һаман, саба атлы батыр —
Мәңге уяу илем һағында!

Шүлгәнташтан — сая мәңгелеккә
Сыя юлын башҡорт толпары.
Толпар эйәрләгән Ватанымды
Тертләп-һөйөп күҙләй Ер шары!!

1968.

## Ленин

Йөрәгемдә ажар факель дөрләй —
Беләм,
Ленин ҡулы менән яғылған.
Ҡитғаларҙың төнөн көн иткәндә,
Бирешмәҫ ул елгә, дауылға.

Йөрәгемдә көслө набат зыңлай —
Беләм,
Ленин ҡулы менән ҡағылған.
Бойорһа ил, уның оранынан
Ҡубарылыр хатта сағылдар.

Йөрәгемдә даулы океан шаулай —
Беләм,
Ленин ҡулы менән һалынған.
Хис булып ул урғып сыҡһа тышҡа,
Дауылланыр ҡала, ауылдар.

Йөрәгемдә үсле нәфрәт ҡайнай —
Беләм,
Ленин аңы менән һауылған.
Вулкан утын атһа ошо нәфрәт,
Көл-күмергә ҡалыр яу-йылан.

Йөрәгемдә һынмаҫ булат сыңлай —
Беләм,
Ленин ҡулы менән ҡайралған.
Хаҡ юл ярам, һелтәп хаҡ булатты,
Ерҙән, күктән, Ҡояш-Айҙарҙан.
Ҡеүәт алам халыҡ-айбарҙан!

1.08.1968.

## Титан

Ялҡындарын янар ҡояштарҙың
Бер үҙендә яғып бер юлы,
Ул метеор булып ярып үтте
Кешелектең ҡуҙрау Ҡош Юлын.

Ваҡыт, тиҙлек, төпһөҙ арауыҡты
Бөрөп бергә, тотто усында.
Был титандың тартыу көсө ҡармай
Мәңгелектең
Заман пульсын да.

Юлын юйған янар метеорҙар
Шул тартымға тарып ҡабына.
Ҡуҙы ҡыҙғас, саң да, ялҡынланып,
Һыҙа юлын уның яғына...

Ут-ялҡындыр шундай мин дә, бәлки,
Өләшеүсе титан өлөшөн.
Ҡуймайса юл ҡара күләгәгә,
Дөрләп барырға гел тейешмен!

1.08.1968.

## *Ләйсән*

Ниндәй, ниндәй бөгөн тылсымлы көн! —
Хистәремде тыя алмайым!
Ниңә, ниңә донъям — мөғжизә, тип,
Ергә, күккә текләп ҡарайым.

Асылды күк, күкрәп, февралемдә,
Йырғанаҡтай ташты йән сәме.
Былбылланып ҡунды күкрәгемә
Шөңгөр шаңлы яҙҙың ләйсәне!

Иҫләмәҫтән итте шулай иҫәр
Былбыл йырҙарының береһе.
Бөгөн йөрәк — асылырға күкрәп
Йомарланған йондоҙ бөрөһө!

Ҡырсын таштар хатта ҡубарылмай
Ҡала алмаҫ, ҡатып бер килеш.
Мәрмәр, мәреп, йәшел бөрө яра —
Бына ниндәй сихри бөркөлөш!

Урман көлә: ылыҫ-керпегендә
Уйнай, тулап, Ҡояш тейене.
Сап-сал Урал күкте үпте үркеп,

Аҡ сағылдар кинәт бейене!..

Һорамағыҙ “был ни ғәжәп?” тиеп, —
Белеп йөрөй көнөн йән яҙы:
Күңелемдә изге анкетаға
“Һөйәм!” тиеп бөгөн мин яҙҙым!

1968.

## Һылыу ҡыҙға инәлеү

“Малһыҙ ул”, тип, йәней, йомолма,
Йөрәгең “йә?..” тиеп торғанда.
Минең кеүек эшкә ут егет
Малһыҙ ҡалмаҫ, һаулыҡ булғанда.

Өҫтөмдәге әрһеҙ кейемгә
Ҡарама һин — булһын саф күңел!
Һөйәлле был ҡулдар, ут саҡһа,
Хөллә генә тапмаҫ ҡул түгел.

“Дипломы юҡ” тиһәң, йөҙ диплом
Алырлыҡ мин, ул кәрәгендә...
Икеләнмә инде, “йә!” тип әйт —
“Йә?!.” тип ҡыҫтаған йөрәгеңә...

1968.

## Йәнтирәк

Күрегеҙсе: ҡандай шат, мөһәбәт!
Көндөң нурын имгән тирәгем!
Тамырҙары менән тоялыр ул
Һулҡ-һулҡ типкән ерем йөрәген.

Шыйыҡ ҡына әле олонҡайы,
Сабый буйын тиңләр буй ғына.
Төрөнә лә һөттәй томандарға,
Ҡояш ҡомарына ҡойона.

Саф һулышын бөркөп таң еленә,
Хис-тылсымын илгә тарата.

Керпегенә көрән балҡорт ҡуна,
Ботағында былбыл һайрата.

Ҡымыҙ күбегеләй бөрөләре —
Үҙе наҙлы, үҙе ҡөҙрәтле.
Һылыу ҡыҙ тип ҡосоп үбер инем
Һығылма бил наҙлы тирәкте!

Рәнйетмәгеҙ бүртек бөрөкәйен,
Ҡоротмағыҙ тарма тамырын.
Онотмағыҙ, нескә биле һынһа,
Ер терәге һынып ауырын!..

Көн тотҡаһы итеп үҫтерәйек
Күк нур имгән ҡолон-тирәкте.
Тирәк менән бергә юғалтмайыҡ
Күгебеҙҙе. Ерҙе. Йөрәкте...

1968.

## 1969

************************




### Ашығығыҙ, кешеләрем!

(Яппар Ноуруздан)

Ашығығыҙ, кешеләрем, ҡыуаныстар яуларға,
Ҡаңғырмаһын баштарығыҙ фани донъя зарынан.
Илатһа ла иламағыҙ: тейешле беҙ йырларға!
Күренмәһен күҙ йәштәре — беҙ бит ирҙәр ҡоронан!

Тырышығыҙ онотorға, тик бер мәлгә булһа ла,
Донъяларҙа бәхетһеҙлек, ҡайғы, золом барлығын,
Һеҙгә улар, һырнығышып, һәр саҡ аяҡ салһа ла,
Һөрлөкмәгеҙ, ырғытығыҙ йәнгә тейгән зар уғын.

Тәҙрәһенән күңелдәрҙең донъяларға бағығыҙ,
Таң нурылай яҡты һәм ҙур хыял менән эркелеп,
Һәм һис ҡасан онотмағыҙ — күкрәп йәшәр сағыбыҙ,
Зәңгәр Ҡояш күсәрендә әйләнгән Ер — мәңгелек!

Ашығығыҙ, кешеләрем, заман заңын яуларға.
Ҡағышында йөрәктәрҙең — тылсым көсө күренһен:
Йәшенләнеп йәш үҫмерҙәр барһын һәр саҡ яҙҙарға,
Йәш ҡыҙҙарҙың күңеленә сафлыҡ гөлө үрелһен.

Ашығығыҙ, кешеләрем, ашығығыҙ йәшәргә.
Төңөлгәнде, ылыҡтырып, яҡтылыҡҡа тартығыҙ.
Онотмағыҙ ярҙам ҡулы һонорға һеҙ йәштәргә,
Ҡурсалаһын ил түрендә аҡ һаҡаллы ҡартыбыҙ.

Игелекле ҡулдарҙан һәм изгелекле юлдарҙан
Йәбер-золом һис кем әле күрмәгәндер һис ҡайҙа.
Ҡанатланһын күңелегеҙ шәфҡәт илгә юллауҙан,
Ҡанаттарын яуызлыҡтың ҡайырығыҙ һәр яйҙа!

Юғалтмағыҙ, кешеләрем, минуттарҙың алтынын,
Яҡшы эштәр илдә эшләп өлгөрөгөҙ ҡалырға.
Йәшәргә һәм йәшәргә тик ашығығыҙ алҡынып,
Зинһар өсөн, ашыҡмағыҙ һуңғы һулыш алырға!

1969.

## Беләм

Мин үҙемде беләм:
бөтә яҡшы яҡтарымды ла,
үтә ҡара таптарымды ла!

Күрегеҙ,
мин киләм:
бер яурыным — береһенән түбән.
Бере — йылдар ҡәберенә иңгән,
бере — йылдар бишегенә менгән.
Ҡуш яурынға көмбәҙ — башым.
Мәңгелекте терәй түбәм!

Мин үҙемде беләм:
бер яурында — бөтмәҫ яраларҙы,
бер яурында — китмәҫ орандарҙы
йөкмәп киләм!

Ауыр, тип, йөк — бөгөлмәйем,
алғыр, тип, йөк — сөйөлмәйем, —
Заман киргән аҙым менән,
Заман биргән йөҙөм менән
йөҙйәшәрҙәй һөҙөп киләм.
Йөҙ йәшереү — минән түбән!

Күрегеҙ:
(минутында)
яраларҙың ярһыуынан ярты йөҙөм ярылып,
йыйырылған ерҙән;
саралырҙың сарлауынан ярты йөҙөм янар ут

булған ерҙән;
уйым менән уйпат күҙҙәремә уҡтар уҡлап,
ажғыр ауыҙыма хәнйәр
ҡымған ерҙән,
ҡыҙмай бер ҙә,
ут-ялҡындар йота беләм;
битлек киймәй дөрөп киләм,
уска һалып йөрәк бирәм!

Ниңә миңә, һылап төкөрөк,
күҙҙе “йәш”ләндерергә,
ниңә миңә, яғып кершән,
йөҙҙө алландырырға,
ниңә миңә, баллап ирен,
өнөм балландырырға, —
кемдәрҙелер алдандырырға?!

Быларҙың бит бөтәһе лә, бөтәһе лә —
алдаҡ түгел, ысын
татып тойған хисем —
әрйә-әрйә миндә,
төпһөҙ даръя миндә, —
саз һыҙырлыҡ, кәрәк булһа, таштан!
Тойғоларым (Дәүер хисе) — ташҡан,
мус-ҡулдарым (Дәүер мусы) — уҡмашҡан!

Сабыр килеш,
саф-йор килеш,
алғыр килеш,
табандарым — Ергә,
яурындарым Күккә —
ваҡыт ҡанаттарына тоташҡан.
Ҡеүәттәрем хәттин ашҡан.
Кәрәк булһа, майын һығам таштан!

Мин — талантлы,
мин — талаплы,
мин — ҡанатлы:
Үткәнгә лә, Киләсәккә лә яуаплы!

Ҡуш ҡанатлы ҡуш иңемә
ҡуш заманды һалып барам,
уты менән көндөң янып барам!
Ярһып барам!

Үткән саҡты — Киләсәккә,
Киләсәкте — Үткән саҡҡа
тоташтырып инҙем һаман,
түбәм офоҡ ярып барам,
мәңгелекте алып барам!
Янып барам!
Ярып барам!

1969.

## Моңһоу сәфәр

*

Сыҡтым сәфәр хәтәр сулаларҙа,
Һиллек бир, тип телә, донъяларға —
Уңһын юлы, уңһын, тиеп телә.
Табандарым таштай онталһа ла,
Таянысым тырнаҡтай ҡалһа ла,
Ҡайта алмам һиңә бик тиҙ-тилә.

Ете диңгеҙ аша етмеш төрлө
Еңмеш хәбәр гиҙһә ишек-түрле,
Күҙ йәшеңде, йәнем, түкмә, түкмә.
Тиҙ әйләнгән, имеш, тиһәләр ҙә
Ымһынма һин ундай ел-хәбәргә —
Усаҡ яғып, ҡалғып көтмә, көтмә.

Эҙҙәремдә осор саң ҡалмаһа,
Күҙҙәреңде әсе моң ялмаһа,
Ғәфү ит һин, бер үк, ит һин мине.
Табыныңда таңын аш һыуытып,
Ҡуйыныңда төнөн таш йылытып
Көтһәң — көт һин, йәнем, көт һин мине.
Мин ҡайтырмын.

22.02.1969.

*

Ҡомһоҙландым сихри күҙҙәреңә —
Һаҡлан минән, һаҡлан!
Ҡош Юлындай селтәр аҡ вуалеңде
Ҡашыңаса ҡаплан.

Ҡара ҡойон ҡыл да ҡарашыңды,
Күңелемде ҡайырт.
Ҡош Юлыңдың сөм ҡуш йондоҙонан
Күҙҙәремде айырт.

Һәм үтенәм, көлмә, сихри көлмә,
Төңөлөп мин киткәс!
Түҙерһеңме, сихырланып килеп,
Ҡуш йондоҙҙо үпкәс?!.

22.02.1969.

*

Хәтерҙә бик, минең хәтерҙә
Ул сихри кис, серле аҡ һының!
Аҡҡош һымаҡ ҡалғып ҡаршымда,
Баш әйләнткес шиғыр уҡының.

Тыңләп шиғыр наҙлы йәнеңә,
Һөйҙө һине залдан мең күҙҙәр.
Һулышыңдан гөлтләп-кабынып,
Торҙом алйып шунда мин — йүләр...

Ҡалды йәндә мәңге аҡ һының,
Йөрәгемдә — хәтәр ялҡының.
Ҡыҙған мине! — хәнйәр ҡаҙаның!..
Булам инде мәңге хаҡ ҡының...

22.02.1969.

*

Томбойоҡтар тымыҡ күлдәрҙә
Тын уттарын ҡабат ҡабыҙыр.
Үҙәктәрҙе өҙөп уралыр
Ҡайындарға ҡанлы-таңғы йыр.

Күл тирәләй танһыҡ эҙҙәрҙе
Эҙләп үтер ҡабат был күҙҙәр.
Ҡарт өйәңке менән көйәнке —
Кемделер бик һағынып көтөрҙәр.

Килмәҫ ул тик, ҡабат күренмәҫ
Томбойоҡло тымыҡ күлдәргә.
“Үтте инде, үтте!.. — тип көйләр

Иртә-кисен иҫкән елдәр ҙә. —
Кире ҡайтмай торған илдәргә
Китте инде, китте...”

22.02.1969.

*

Бөгөн иртән ике сикәмә
Ике бөртөк кенә сал ҡунған.
Ылыҫ һырған ҡара урманға
Ике бөртөк кенә ҡар ҡунған.

Ике бөртөк... ниңә, ҡарҡайҙар,
Улай иртә, ипһеҙ килдегеҙ?
Ҡарурмандың ике ағасын
Ике ситтән һайлап мендегеҙ?

“Ҡайғырма һин, кешем, ҡайғырма,
Йөрөүебеҙ — ылғый ваҡытлы.
Кем һуң һаман, яҙын яҙ итмәй,
Ҡышҡа инеп утлы ҡан йотто?

Көлдәй иттек көндәй йәнеңде,
Яныуыңа тамға булырға...”
“Ике сикәм һеҙҙе иретһә,
Тура килмәҫ бүтән янырға...”

“Шатланмай тор!..”
“Һеҙ бит тик икәү?..”
“Ә ғәмдәрең?”
“Һәр сәс бөртөгө...”
“Сәс бөртөгө һайын янмаған,
Утланмаған ирҙәр — ир түгел!”

22.02.1969.

## Һаҡмар һыу

Күңел килһә — ыға тын ғына,
Күңел китһә — аға бик ярһыу
Эскән һыуым минең Һаҡмар һыу.

Бер яғында уның — һары яр,

Бер яғында уның — ҡара яр, —
Үҙе һыймаҡ ҡына ара бар.

Баҫмаҡ булып ошо араны,
Быуат буйы ярҙар тырышҡан,
Бер-беренә булып хас дошман.

Һары ярҙан һарҡҡан һары ҡан,
Ҡара ярҙан һарҡҡан ҡара ҡан,
Ҡанға батҡан Һаҡмар аҙаҡтан...

Ярҙар ҡубып, вайран ҡылһа ла,
Үҙ үҙәнен Һаҡмар бирмәгән,
Икеһен дә ҡыйыу ерләгән.

Бер яғынан ауған һары яр,
Бер яғынан ауған ҡара яр —
Аумай торған ниндәй ҡарыу бар?!.

12.04.1969.

## Ҡамғаҡ

Күргәнегеҙ барҙыр далала,
Ер-һыу көйгән ҡыуан сулала
"Муйыны" ҡанап, елдән ҡыуылып
Аунап барған "дейеү баштары"н?
Ҡыштыр-ҡыштыр ҡашын яндырып
Ҡырыҫ ергә, өтәҫ Ҡояшҡа,
Орлоҡтарын сәсеп ҡалдырып
Дым арбарлыҡ һәр саң, һәр ташҡа,
Үҙ бурысын ҡамғаҡ башҡарыр...

...Иҫә елдәр, Ҡояш яндыра,
Ҡом бураны күктә ҡаңғыра.
Дала йөҙө — таба, ут кеүек,
"Шылт!" иткән дә терек юҡ кеүек...

Әммә ошо ҡыҙған табала
Ҡыштыр-ҡыштыр ҡамғаҡ тарала.
Ҡыҫып тешен, эшләй ул эшен
Әмәлдәр юҡ һымаҡ арала.

Сүкмәҫ өсөн сәмүм еленән,
Ул тарамыш-ҡатҡан биленән.
Турамаһын өсөн ас тештәр,
Энә һайын — энә икешәр.
Һәм шул дала, дала өсөн тик,
Эшләгән ул үлмәҫ бөйөклөк:
Көҙ үк көсәп ерҙең яҙ йырын,
Тешләп өҙгән кендек-тамырын...
Күскәнендә ергә һырлығып,
Сәселһен, тип, ҡанлы орлоғо...

Күкрәп-күкрәп шаян яҙ килер,
Күҙен асыр бөрө — наҙ көлөр.
Һөртә-һөртә шатлыҡ йәштәрен,
Дала-һылыу балҡып йәшәрер:
Ҡамғаҡ ҡанлап уҙған һәр урын
Һуҙыр ҡыяҡ, йырлап яҙ йырын!

Ҡуям уйлап ҡай саҡ мин тағы:
“Үҙем әллә — илем ҡамғағы?!.”
Тик шуныһы: ерҙе ҡомарлап
Елгә ҡаршы барам тәгәрләп...

12.04.1969.

## Кран-торналар

Урамдарға рәт-рәт теҙелеп,
Йондоҙҙарға үрә һуҙылып,
Муйындарын уңға боралар,
Муйындарын һулға боралар,
Илемә йәм биреп торалар
Сыңғыр-сыңғыр йырлы торналар.

Муйындарын уңға боралар,
Муйындарын һулға боралар,
Үрелеп алып ерҙән, торалар,
Кирелеп һалып үргә, торалар —
Йырлай-йырлай оя ҡоралар
Ҡотло тояҡ кран-торналар.

Ҡараһана, ҡандай иш улар,

Күк торналар быйыл ҡаламда!
Күп торһалар, ҡола ялан да
Һуҙыр төҫлө күккә ҡуш ҡуллар,
Йомор төҫлө уска йондоҙҙар —
Егәр шулай кран-торналар!

Түгел кирбес — ылғый алтындыр,
Түгел бетон — йылы ялҡындыр, —
Булыр икән ниндәй оялар!
Тыуыр икән ҡандай балалар!

Көҙгө итер ипле ҡыҙ, улдар
Асмандағы аҡ Ҡош Юлдарын,
Сикләнмәгән хыял-уйҙарын
Йондоҙҙарға сөйөр саф ҡуллар —
Бына ниндәй булыр ҡыҙ, улдар!

Шул шат көндө алып киләләр
Илемә был ҡорос торналар!
Ер генәмде күптән ерһенеп,
Йәйен-ҡышын ҡотлап торалар:
Муйындарын уңға боралар,
Муйындарын һулға боралар —
Ҡотло ерҙә оя ҡоралар.

Китмәгеҙ һеҙ, мәңге китмәгеҙ,
Киртләс муйын кран-торналар!

12.04.1969.

## Өҫтөнбикә
(баллада)

Дағаларҙан осҡон сәсрәтеп,
Бәйгеләрҙә сабыр ир ине.
Бератбашҡа артта ҡалһа ла:
“Мин йәшәмәм ерҙә!” — тир ине.
Алҡын-алҡын атын уйнатып,
Алға сыҡмай тынмаҫ бер ине --
Шундай елле, миңле ир ине,
Исеме лә — Миңсабир ине.

Бер бәйге лә унһыҙ уҙманы —
Беҙҙең яҡта халыҡ сабырһыҙ —

Аҡ һаҡаллы ауыл ҡарттары
Асманылар майҙан Сабирһыҙ.
Миңлесабир үҙе һуңлаһа,
Сапты юллап ҡырҡлап атсапҡын.
Күренгәндән йәшел күлдәге,
Күкрәй ине халыҡ шул саҡлым:
Кәпәс сөйә-сөйә һөрәнләп,
Ҡаршы ала ине батырҙы.
Миңлесабир шундуҡ майҙанға
Төшөрә ине уттай айғырҙы,
Тағып артҡа нәҡ ҡырҡ бахырҙы...

Һепереп саң, зәңгәр офоҡта
Ҡырҡ бер ялбыр ҡойроҡ һүрелгәс,
Бер аҙҙан һуң шул уҡ урында
Ҡырҡ бер ялбыр ял-баш күренгәс,
Елбер-елбер йәшел күлдәкте
Хуплай ине ҡубып бар табын:
“Йәшен бит был, йәшен! Ҡырҡ йөҙгә
Көҙгө иткән йәшел арҡаһын!
Килтерегеҙ бирнә тартмаһын!”

Һөйҙө халыҡ Миңлесабирҙы
Һәм ул менгән елле айғырҙы.

Бер генә тик һылыу бар ине
Өнһөҙ торған шаулы йыйында.
Ҡара күҙҙәр, ҡуҙҙай көйҙөрөп,
Баға ине йәшел буй-һынға,
Бәйге һайын һабан туйында.

Бер саҡ бына Миңлесабирҙы
Ҡара күҙҙәр кинәт арбаны.
Дөрләп барған уттай еренән
Боролоп ул ҡыҙға ҡараны.
Күҙҙәре тик көлдө батырҙың:
“Һин бишектә, һылыу, мин — юлда!”
Араларға ятты саҡырым
Һәм ҡырҡ һыбай бәйге юлында.
Ҡырғыһы ла наҙлап йылмайҙы,
Ҡырғыһы ла табынып күҙ атты.
Тик, бирҙе ҡыҙ ҡырҡҡа арҡаһын,
Дүрт күҙ менән арбап бер атты.
Илай-илай туйҙан ул ҡайтты...

Ошонан һуң, шаулы һәр йыйын
Ҡалды күпкә — янар күҙҙәрһеҙ.
Бер һыбайға тағылып ҡырҡ һыбай
Бәйге сапты оҙаҡ бик әрһеҙ.
Әллә нисә тапҡыр тирәктәр
Ярып япраҡ, ҡабат ҡойолдо,
Бына бер саҡ иң ҙур бәйгеле
Һабан туйға халыҡ йыйылды.

Бер һыбайға тағылып ҡырҡ һыбай
Сыҡты йәнә иркен майҙанға.
Сеү!.. — Ҡайҙандыр һыбай бер ҡыҙ-Ай
Килде кинәт шунда пәйҙаға.
Елберләтеп ҡыҙыл яулығын,
Йәшел янлап сапты был сапҡын.
Бөтә майҙан ҡуйҙы “ах!” итеп:
“Вәт ялҡын! Һәй, ялҡын! Вәт ялҡын!”

Ал бирмәүсе ғорур һыбай ҙа
Алды күҙгә, ялмап, сибәрҙе.
Ә ҡырҡ егет, күҙен ала алмай,
Тағылғандай арттан эйәрҙе.
Бәйге ҡыры, ҡусҡыл келәмдәй,
Мөхәббәтен ҡыҙға түшәне.
Йәшел менән ҡыҙыл артында
Ҡырҡ йән уфтап, ҡырҡ ат кешнәне...

Сапты улар, сапты елберләп,
Йәшел менән ялҡын — ике көс.
Тик атбашҡа ҡалып айғырҙан,
Турат бирҙе туйға яңы төҫ.
Ил ҡарттары алды күтәреп
Ҡот килтергән ике батырҙы.
Һанлаусы ла хатта булманы
Тағылып елгән нәҡ ҡырҡ бахырҙы...

Ошо көндән ҡала бәйгеләр
Был икәүһеҙ — һанға юҡ ине.
Миңлесабир булһа ут-йәшен,
Өҫтөнбикә — ялҡын-ут ине.
Менһә ырғып был ҡыҙ Тураҡҡа,
Әйтмәй ине бит ил һис тиккә:
“Өҫтөнбикә, их, Өҫтөнбикә,

Ҡырҡ йөрәккә ут-осҡонбикә,
Өҫтөнбикә, һин -- Өҫтөнбикә!"

Ал алалмаҫ әлеге ҡырҡ һыбай
Янманы шул көйрәп һис тиккә:
Дөрләп барған ҡыҙҙың йөрәге
Усаҡ ине һәр ҡырҡ егеткә.
Шул усаҡҡа ябай ҡыу булыу —
Хыялы ине һәр ҡырҡ йөрәктең...
Миңлесабир ғына, теш ҡыҫып,
Екте һаман айғыр ҡөҙрәтен...

Ҡыҙ йөрәге һирпкән нур-юлда
Аты — һөңгө, үҙе — уҡ ине.
Был айғырҙы ҡыуып уҙырлыҡ,
Әйтерһең дә, бер көс юҡ ине.
Турат ауыҙын теҙген шаҡарһа, —
Айғыр өсөн ҡамсы ныҡ ине...

Бәйгеләрҙә барса кешеләр
Хайран ҡалып быны шәйләне.
Турат башын теҙген тартыуын
Һис бер әҙәм аңлай алманы.
Өҫтөнбикә өсөн өтөлөп,
Ошо уйҙы һәр кем уйланы:

Өҫтөнбикә, их һин, Өҫтөнбикә,
Тураҡкайың алҡынырға итһә,
Алҡындыртмай уны тоттоң тиккә,
Ебәрмәнең теҙген бер иле —
Булдың былай ниңә шуҡ, тиле?..

Өҫтөнбикә, Өҫтөнбикә,
Әллә ысын, әллә тиккә,
Ҡырҡ һыбайға күҙең һалманың!
Йәшел арҡанан күҙ алманың!..
Ҡыуырҙай ҙа ғына, ай, Турыңды
Шәберәк кенә итеп ҡыуманың,
Уҙырҙай ҙа ғына, һай, айғырҙы
Арҡа биреп кенә уҙманың,
Быны менән нимә уйланың,
Өҫтөнбикә, Өҫтөнбикә?..
Тоттоң тиккә...

Өҫтөнбикә иһә сеңләне
Йөрәккәйе эстән семерләп:
“Уҙып китһәм уның айғырын,
Күтәралмаҫ ғәрен ғүмергә!..
Ҡара көйөр Миңлесабирым...
Елһен алдан йәшел арҡаһы!
Бағыр әле бер саҡ боролоп,
Йөрәгемдең булыр яртыһы!..”
Миңлесабир иһә, айғырын
Ҡыуа-ҡыуа, тамам ярһыны...

Ҡиблаларҙан ҡупкан ләйсәндәр
Бик күп тапҡыр илгә яуҙылар,
Бик күп тапҡыр һылыу тирәктәр
Ярып япраҡ, япраҡ ҡойҙолар.
Берәм-берәм ҡалды ҡырҡ һыбай
Айырылып юлдар сатында.
Албирмәҫте һаман ҡомарлап,
Өҫтөнбикә янды ялҡында.
Турат башын тотһа шаҡарып —
Миңлесабир боролоп йылмайҙы.
Йылмайыуы менән бәйләне
Байып барған моңло был Айҙы...

Һөйләнеләр: “Миңлесабирҙың
Уйы инде — күптән башҡала...”
Өҫтөнбикә — һаман сабырлы,
Барҙы һаман бер атбаш ҡала.
Ауыҙлығын сәйнәп Тураты
Золом күрҙе айғыр-ҡашҡала...

...Хәтфә йәйә һаман майҙандар...
Һылыу өсөн шуныһы тик бәлә:
Күҙ төбөндә — ике ят тамсы,
Көмөш ҡылған — ике сикәлә...
Хәҙер инде шаулы йыйындар
Ҡаршы ала ҡыҙын шым ҡалып.
Ал бирмәүсе Миңлесабирға
Алҡыштарын бирә бар халыҡ.
Хәҙер инде Миңлесабир ҙа
Ҡыҙыу ҡуҙға боролоп ҡарамай.
Һаман бара, һаман йылмая
Өҫтөнбикә, шуға ҡарамай...

Тик, ҡасандыр ҡуҙрау күҙҙәрҙән
Тама ысыҡ ялға ҡай ваҡыт.
Ҡыҫтай-ҡыҫтай, алғыр айғырға
Янһарыта талған Туратын.
Турат ҡына, биле бөгөлөп,
Уйлай бер уй, йәше түгелеп:
“Меҫкенбикә, меҫкенбикә,
Бәйгеләрҙә тоттоң мине тиккә!
Бәйгеләрҙә мине тотмаһаң, —
Булыр инең өҫтөн бикә.
Тоттоң тиккә,
Тоттоң тиккә...”

Их һин, Өҫтөнбикә!..

12.04.1969.

## Ауылыма

Ҡала ташын йыуып, яҙ һыуҙары
Шырҡ-шырҡ көлә табан аҫтымда:
“Ҡарасәле, булған ҡалағәле —
Йөрөй, имеш, асфальт ҡашында!

Оноҭҡан, ти, урам батҡаҡтарын,
Бураҙнаның майлы туҙанын.
Өҫтәленә ҡырын ятып ҡына
Бушата, ти, борсаҡ ҡуҙағын...”

Ни әйтәйем яҙҙың шуҡ һүҙенә,
Ауылҡайым, ғәзиз ергенәм!
Белгең килһә, мин бит ҡулдарыма
Ҡара тупраҡ услап көрһөнәм...

Күк күгәртеп әрем әселәре
Иҫкән һайын далам яғынан,
Яйҙаҡ менеп елгән тайҙарымдың
Кешнәүҙәрен шәйләп һағынам.

Ҡайҙа икән көтөү көткән көндәр
Ҡош-ҡорттарҙан ҡурсап тау яғын!
Ҡалҡынғандыр, зифа тирәк булып,
Ҡырға ҡаҙап киткән таяғым...

Хәтеремдә, ерем, бик хәтерҙә
Күк тун кейгән һөмһөҙ бүреләр.
Сеңләп “сирткән” серәкәйгә тиклем
Күңелемдә һаман тереләр.

Бөтәһенән элек, мин һағынам
Һабан һөрөп талған көндәрҙе,
Ҡыуыш төбөндәге ҡаҡ мөйөштә
Көтөп алған ҡаты мендәрҙе.

Көлөүҙәрен һағынам саф ҡыҙҙарҙың
Ил йоҡлаған айлы төндәрҙә.
Ҡыуыш тишеп инеп зыҡ-ҡубыуҙар
Ҡалды инде һағынып һөйләргә...

...Ҡалаларҙың шыма таш юлына
Юлыҡманым йәнем ирегеп.
Сыҡҡас шунда осо ыҙанымдың,
Әйтһен ерем нисек: “Кире кит”?

Йүнәлтте ул үҙе хаҡ юлыма,
Бүләк итеп далам түҙемен:
Сыйғанда ла сәмүм, үҫтерергә
Бүтәгәнең хәтфә кеүеген!

Йот ҡыйғанда киңгәп йығылмаҫҡа —
Сабырлығым менән ат итте;
Үҙ-үҙемде ҡамлар ҡамсыһының
Ҡалынлығын туғыҙ ҡат итте.

Иҙерәрҙәй иҫһеҙ сулаларҙа
Ҡыуҙы ҡамсым, тамып арҡама...
Тыуған ерем! Кеше булһам да мин,
Булырмын тик һинең арҡала!

Төштәремдә һаман көтөү көтөп,
Һаман-һаман һыбай йөрөрмөн.
Һуңғы мәлдә хыял-толпарымда
Тыуған яҡҡайыма елермен.
Заман эйәренән ҡолап төшөп,
Йәнкәйемде шунда бирермен...

13.04.1969.

## Үктәбер

Кем иҫләмәҫ атай-әсәйҙәрҙең
Ҡыуанғанын, һөйләп көн дә бер:
“Рәхмәт төшкөр, билде турайттырҙың,
Арындыртып ҡайғы-йөктән көр,
Үктәбер!”

Ауыр ине, ауыр — Ер йәненә
Быуаттарҙан быуған үс, йәбер.
Хаҡлыҡ ҡулы менән офоҡ ярып:
“Быға ҡаршы, — тине, — көс әҙер!” —
Октябрь.

Батшалыҡтар ҡара йыланының
Иҙә баҫып башын — хәс тә гер,
Ырыҫ менән Ирҙе табыштырып,
Ураҡ менән Сүкеш ҡауыштырып
Планетаға дөрҙө ут-дәүер —
Үктәбер.

Көнгә битен бороп, ҡырҡ ҡитғалар
Ҡул биреште:
“Һин дә, мин дә — көр.
Беҙҙең өсөн ерҙә-күктә бер
Октябрь!”

Ошо көндә бөтөн кешелектең
Хыял, күңел күге беҙҙәлер:
Ураҡ-Сүкеш таҡкан йондоҙҙарҙың
Арта һаны — тағы өҫтәлер!
Йондоҙҙарға йондоҙ —
Үктәбер!

Илдәр күрә:
Кеше — Ерҙә түрә,
Бәхет таба ҡулы — шул тәңер.
Матҡып тотоп, Донъя Ҡуласаһын
Әйләндерә бөгөн
Үктәбер.

Быуындарға яңы быуын ялғап,
Ер шарына дөйөм бәхет даулап,

Быуаттарҙың йөгөн күтәрер,
Эпохалар аша үткәрер:
Киләсәктең йыһан карабы ул —
Сорғоп осош биргән Октябрь!
Үктәбер!

16.09.1969.

## Йөрәк, Ер

Төн... Ятамын, шымып, йөҙлөк буйында.
Хәләл йәрем ята, тымып, ҡуйында.

Ята балам, һөттәй ойоп, бишектә.
Ята әсәм, ҡулын ҡуйып, түшәктә.

Төн... Тынғыһыҙ ут күршем дә йоҡлаған.
Урамдарҙа трамвайҙар туҡтаған.

Сыҙаһын ни йыһан тынған сәғәттә:
Гере төшөп, ҡалған туҡтап сәғәт тә.

Төн... Тын йоҡо, үле йоҡо донъяла.
(Ни эшләрбеҙ, күсәрҙә Ер йоҡлаһа?..)

Бер мин ятам һымаҡ уяу, асыҡ күҙ.
Керпектәрем, әйтерһең дә, утлы ҡуҙ.

Тыңлап Ерҙе, ятам тетрәп бер үҙем.
(Тибеп йөрәк, тетрәткәндәй Ер йөҙөн.)

Ер иңендә "нейтрон"дар туплана.
(Ни ҡылырбыҙ, күсәрҙә Ер тутлаһа?..)

Тибә йөрәк, бер туҡтауһыҙ ул тибә.
Типкән һайын, Ергә хәүеф ул һибә:

Һүндерер кем бомбаларҙы, утлаһа?
(Ни итербеҙ, күсәрҙә Ер туҡталһа?..)

Сеү! — Һиҫкәнә хәүефемдән Ер шары.
(Һиҫкәнәмен микән әллә мин бары?..)

Юҡ, һаташам! Яңылышҡанмын... (Ер белә!)
Ятам икән тетрәп тоташ Ер менән!

Булмай икән, булмай Ерҙе туҡтатып:
Һәр тәңгәлдә тибә йөрәк — “туҡ!” та “туҡ!”.

Йөрәк һәм Ер тибештәре көйләнә —
Әйләнә Ер, күсәрендә әйләнә!

10.11.1969.

## 1970
**************************

### Булды, булды...

Булды:
Башҡайымды ташҡа сағып
Яныр хәлгә еттем ҡуҙланып.
“Янһаң, бәғерем, -- янам!..” — тинең,
Һәм янманым, һине ҡыҙғанып.

Булды:
Йөрәгемде, йолҡоп алып,
Атыр хәлгә еттем, буҙланып.
“Атһаң, бәғерем, -- ҡатам!..” — тинең,
Һәм атманым, һине ҡыҙғанып.

Булды:
Был донъянан китә яҙҙым,
Үҙ-үҙемә хатта ҡул һалып.
“Китһәң, бәғерем, -- бөтәм!..” — тинең,
Һәм китмәнем, һине ҡыҙғанып...

Булды былар, булды, булды, —
Йәшәнең гел миңә ҡуҙ һалып.
Ҡуҙҙарыңды әллә ҡыҙғанып,
Китеп барҙың, иртә ҡуҙғалып...

Китер инем артыңдан уҡ,
Йәшәгәнсе былай һыҙланып;
Китә алмағанға элегерәк,
Көлөрһөң, тим, минән, ҡыҙғанып...

4.04.1970.

### Күксәпсек

Фәлсәфәләп бара бер күксәпсек
Ярҙан ҡубып аҡҡан күк боҙҙа:
“Мин ағам, ә ярҙар ҡала”, — тиеп
Донъя фәлсәфәһен кем боҙа?!

Ахмаҡ ярҙар кире килер миңә,
Аҡкандары өсөн үкенеп.
Ярҙар аға, ә мин ҡалам!
Сөнки донъяға бит мин -- кендек!

5.04.1970.

## Арена

Тарих буйы
Бөйөк Аренала
Бөйөк Трагедия уйналды.
Арена был — Башҡортостан,
ә төп уйынсыһы —
мин инем!

Тарих буйы барҙы Трагедия...
Ҡыҙыл эңер, ҡараңғы төндә лә,
быҫҡаҡ ямғыр, әсе төтөндә лә,
зәңгәр таңда, салт ҡояш көндә лә
туҡталманы Трагедия...

Ҡуш суҡышлы йот-ҡарағош булып,
Золом ҡошо үрҙән ялманды,
мине йоторға.
Ажар киреп ҡара ҡанаттарын,
күкрәгемә ҡаҙап тырнаҡтарын,
быуып тоторға...

Кулис-кулуарҙар араһынан:
Яйыҡ аръяғынан,
Иҙел тармағынан,
Иртыш арттарынан,
Алтай яҡтарынан,
хатта шайтан-иблес сафтарынан —
Спектакль барышынса мөҙҙәт алып,
төрлө персонаждар килә торҙо,
инә торҙо Уралыма --
Аренаға...

Ҡәрҙәш булып та керҙе улар,
өйҙәш булып та керҙе улар,
тиңдәш булып та керҙе улар.

Алла һүҙен ашырыусы
абыҙ-мулла,
көндәш булып та керҙе улар.
Ҡултығыңдан ҡомарлаусы
ҡуштан булып та керҙе улар.
Йыйырып йөҙ, ыржайтып теш,
дошман булып та керҙе улар...

Керҙеләр ҙә
битлек кейҙеләр ҙә
уйнанылар тирләп-һөрһөп
ҡанлы сәхнәләге тәүәрихтә...
Аренала...

Ҡәрҙәштәр ҙә,
өйҙәштәр ҙә,
тиңдәштәр ҙә,
абыҙ-мулла,
көндәштәр ҙә,
ҡуштандар ҙа,
дошмандар ҙа
үҙ ролдәрен оҫта башҡарҙылар.
Мин йығылһам сәсәп,
бөрсәләрҙәй сәсрәп,
ҡыуаҡ арттарына ташландылар...

Тик төп ролде башҡарыусы ҡалды бында,
Аренала, —
Ҡара Көстөң ҡуш ҡанаты,
ҡуш суҡышы,
ҡуш тырнағы аҫтында:
уйнап түгел —
ысынтылап
ҡан ҡойорға,
язаланырға —
ҡаҙыҡ баштарына ултыртылырға,
ҡабырғаларынан сөйгә аҫылырға,
дүрткә турап киҫелергә...
Йән бирергә...

Сөнки Яҙмыш-режиссеры
күҙ буяусы паяц итеп түгел,
ә гладиатор итеп
тыуҙырғайны Бөйөк Аренаға

Бөйөк Трагедияла
уйнарға...
Мәңгелеген мәңге һынарға...

Һонолоп-һонолоп сөйгән осло һөңгөләребеҙ,
һуҙылып-һуҙылып атҡан осҡор ут-уҡтарыбыҙ
йондоҙҙарға етер саҡтар ҙа булды,
тик Ҡара Көс-Ҡарағоштоң
ҡара йөрәгенә етмәне,
ҡара ҡанын эсмәне,
ҡара ҡанаттарын киҫмәне,
ҡара суҡыштарын китмәне,
ҡара тырнаҡтарын тетмәне, —
ҡулһуҙымдан ары үтмәне...
Тик барыбер
башҡорт сүкмәне!

Көр ғорурлыҡ һаҡлап ҡалды беҙҙе
йылан булып бөгөлөр йылдарҙа,
болан булып егелер йылдарҙа.
Башҡорт булғанлығың өсөн генә
башты балта сапҡан саҡтарҙа ла
ялҡын булды янған күҙҙәрҙә,
ҡылыс булды һынған ҡулдарҙа,
оран булды көйгән телдәрҙә!

Һәм ер төпкөлөнән,
Тарих төпкөлөнән дөргән халыҡ —
ҡанлы ялҡынына уғын манып,
Золом-Ҡарағошон һөргән халыҡ —
кирҙе күкрәк!
Ер-Күк тетрәп
Алҡышланы көрлөк тыуыуын.
Теҙ сүкмәҫлек яҙып тубығын,
булмаҫ өсөн яҙмыш ҡоло,
бил турайтты Урал улы!

Ҡот ағылды иргә ал Ҡояштан
тулҡын-тулҡын тулап,
туптай тығыҙ беләктәрен,
йөҙөн, көллө тәнен нурлап.
Ҡул-бармағы остарынан —
табан-бармаҡтарынаса
ләйсән юлы һуҙып,

кинәндереп Ерҙе, нур түгелде!
Аренаға нур эркелде!

Нурҙар тулҡынында ҡара ҡулы,
ҡара сәсе,
ҡара күҙе,
ҡуңыр йөҙө,
Ер шарына һыбайланмыш тарбаҡ аяҡтары,
ҡынындағы төҙ ҡурайы,
билендәге кәкре ҡылысы,
телендәге оран-һүҙе —
ҡараһаң бер, шундай сәйер ине,
тос, көр ине,
шөкөр ине!

Таштар хатта ҡубып терелделәр,
Көнгә бағып кирелделәр:
— Ниндәй хозур!
— Ниндәй ғорур!
— Ниндәй зарур! — тиештеләр.
Ер һәм Күктәр берҙәм килештеләр!

Һәм ҡасандыр ере —
ҡанлы аренаға ҡалып,
үҙе гладиатор һаналып,
шул яҙмышын бәреп йыҡҡан,
хаҡ-ҡылысын ҡара төнгә сапҡан,
хаҡлыҡ майҙанына сыҡҡан
аçаба-ир, бил яҙып көр,
ҡыйыр өсөн донъя Ҡарағошон,
дөрҙө,
ирәүәнлек алып керҙе
үҙен көткән дөйөм Аренаға —
Планета Аренаһына!

Был хоҡуҡты Иргә
үҙ көрәше,
үҙ аҡылы яулап биргән:
“Йәшәнең һәм йәшә, Башҡорт!” — тигән!

5.04.1970.

## Галлей кометаһы

(Боронғо легенда)

Ер тетрәй,
Илдәр һыҡтай
Баш өҫтөндә дөргән ҡайғынан.
Мәсеттәрҙә аҙан әйтәләр,
Кирхаларҙа орган тарталар,
Сиркәүҙәрҙә дөңгөр ҡағыла.

Батырҙарҙың батырҙары
Сүгәләр теҙ, бишкә бөгөлөп.
Динһеҙҙәрҙең динһеҙҙәре
Ялбаралар, күккә үрелеп.

Фәхишәләр итәк яба,
Асмай хандар ғәрем ишеген.
Юлбаҫарҙар, ҡырҡмай боғаҙ,
Үткәрәләр сәфәр кешеһен...

Ер тетрәй,
Илдәр һыҡтай,
Манаралар тора сайҡалып.
Ахырзаман көтә алйып
Күҙен күккә теккән бар халыҡ.

Был ни булды,
Ни булды был –
Ҡиәмәт көн әллә шәйләнә?
Изгелектәр, игелектәр
Туҙан бөртөгөнә әйләнә...

...Торҙо меңәр йылдар имен
Күк көмбәҙе, ергә ҡоролоп.
Манаралар айын, тәреләрен
Уҙмай ине аҡыл ҡороғо.

Күсһә лә Ер, күк ҡабағын
Юҡ ине көс йырып үтерлек.
Ҡанундарҙы ҡан илатҡыс
Был ғилләне кем һуң килтерҙе?..

Ҡарпый ана ут балығы,
Манаралар башын ҡайырып.
Ә ҡойроғо айҡай күкте,
Йондоҙҙарға саҡлым юл йырып.

Көмбәҙ көбө — донъя сиге,
Тип тылҡыуҙан инде ни ҡала? —
Күктән уҙа ҡарамаҫҡа
Бар "алла"лар өндәп доғалай...

Тик, "алла"лар хөкөмөнән
Өҫтөнөрәк көс бар был ерҙә:
Изге ай һәм тәреләрҙән
Юғарыраҡ баға ҡай ирҙәр!

Брунолар,
Галилейҙар
Убып күҙләй йыһан упҡынын.
"Ер әйләнә!" — тип бер мәлде
Әйтер бит был галлей тоҡомо!..

...Бәйһеҙ Галлей, ярып яры,
Ер хыялын сиктән сығара.
Ҡанундарҙың манараһын
Утлы ҡоно ҡағып ауҙара.

5.04.1970.

## Халыҡ

"Уны, уны, -- тиҙәр, --
Бөттөк белеп, -- тиҙәр. --
Үттек елеп, -- тиҙәр, --
Ябай бит ул халыҡ..."

Ай-һай, икеләнәм
(Һәм хатта шикләнәм), --
Иңләнегеҙ икән
Ниндәй үлсәү һалып?!

Сөнки аң-тоң етмәҫ,
Серен сисеп бөтмәҫ,
Ергә, Көнгә тиңдәш
Сал тау бит ул — Халыҡ!

Хатта Урал тауың
Тик уйынсыҡ ҡына

Ҡаршыһында уның!
Ҡайҙа ята төбө,
Ҡайҙа ҡалҡа күге,
Әйтегеҙ, Халҡымдың?!

“Уны, уны, -- тиҙәр, --
Бөттөк асып, -- тиҙәр, --
Үттек сисеп!” -- тиҙәр
(Шунан йәнем биҙәр)...

Ә сал тауҙың башын
Һәрмәп кем барлаған?
Ә сал тауҙың аҫтын
Ҡармап кем ҡараған?!

Ергә тоташ бит ул,
Көнгә утташ бит ул —
Көндө, ерҙе уҫҡа
Кем һуң йомарлаған?!.

Белгең килһә, иптәш,
Уның алда өндәш
Эшләпәңде һалып.
Күрәһеңме, күктәр:
“Мөғжизә был!” — тиҙәр,
Уға хайран ҡалып.

Халыҡ бит был! Халыҡ!

3.05.1970.

## Бауыр ташы

(Опереттанан дуэт)

**Бригадир**

Бауыр ташы — бауырҙа,
Түҙә нисек ҡабырға?
Илде йөкмәп алға илтеү,
Һай, бигерәк ауыр ҙа!
Илде йөкмәп алға китеү,
Вай, бигерәк ауыр ҙа!
Ах-ух, вах-вух...

**Шаян ҡыҙ**

Бауыр ташың — бауырҙа,
Булайымсы ҡабырға.
Бының ише аҫыл ташты
Ҡайҙан башҡа бағырға?
Һинең һымаҡ аҫыл йәрҙе
Мөмкин түгел табырға!
Их-их, вәт псих!

**Бригадир**

Бауыр ташым бауланһын,
Сәсрәп китеп быуланһын!
Йән яратҡан, күңел тартҡан
Аҫыл ҡошом буламһың?
Йән яратҡан, күңел тартҡан
Һандуғасым буламһың?
Ах-их, вах-вих!

**Шаян ҡыҙ**

Бауыр ташың бауланһын,
Сәсрәп китеп быуланһын.
Йән яратҡан, күңел тартҡан
Аҫыл ташым булаһың!
Ах-их, кит, псих!

**Икеһе бергә**

Йәшләй һөйгән, йәнем, тигән
Ҡара ҡашым булаһың!
*(Ҡул тотошоп әйләнәләр.)*

Уйҙар ҙа бергә-бергә,
Ҡулдар ҙа бергә-бергә...

**Шаян ҡыҙ**

Туҡта, туҡта, ағаҡайым,
Төртмә әле бөйөргә!
Уй-их, ҡарт псих!

**Икеһе бергә**

Яҙһын шулай бергә-бергә
Рәхәт ғүмер итергә.
Бейеп кенә бергә-бергә,
Бауыр ташын тетергә!
Их-ах, ах-ух! —
Һайрашып көн итергә!

**Шаян ҡыҙ**

Уй-их, кит, псих,
Иртә әле һөйөргә!

1970.

## Бәхет һарайы

(Өфө 20-се башҡорт мәктәбен асҡанда)

Сентябрҙең тәүге аҡ таңын
Аса һеҙгә шат көҙ — йәш егет.
Хуш килдегеҙ алтын һарайға,
Илкәйемдең ялҡын йәшлеге!

Тәбрик итә нурлы кластар —
Көтә урғып белем шишмәһе.
Нур-шишмәнән гәүһәр күкрәккә
Йотоп-йотолоп ҡына эсәһе!

Илтһен арбап тылсым теләндә
Мәғрифәтле таң һәм кисәләр.
Белем серҙәрен бит тәү башлап
Әсә теле менән сисәләр!

Әсә телен — тылсым асҡысын
Мираҫ итеп алған көр быуын
Мираҫ итер ерҙең мең телен,
Туған итер ерҙең мең моңон!

Аҡ күңелдең аҡыҡ ярына
Яғылмаһын ҡара наҙанлыҡ! —
Аҡбур менән ҡара таҡтаға
Ап-аҡ антты һыҙып яҙайыҡ!

Күкрәктәрҙән күкрәп талпынһын,

Илтһен алға рухи таҙалыҡ! —
Аҡ нур менән ап-аҡ күңелгә
Шул пак антты нурлап яҙайыҡ!

Ауыр саҡта, талғыр саҡта ла
Хыялдарҙа көлһөн яҙ айы! —
Шул саф антты ҡайнар йөрәккә
Ырыҫ менән ырып яҙайыҡ!

Бөрөнән дә бөркөт үҫтерер,
Ныҡ үтәлһә, намыҫ ҡушҡан ант.
Һона Ватан һеҙгә ҡуш ҡулын —
Бейектәргә үрләр ҡуш ҡанат!

Башҡортостан, гүзәл гөлбостан,
Ҡуя алға һеҙҙең мең һорау.
Илдең тырыш ҡыҙ һәм улдары
Булығыҙ, ти, көмөш ҡыңғырау!

Төклө аяҡ менән уҙығыҙ
Мәғрифәттең мәрмәр баҫҡысын.
Алдығыҙҙа — бәхет һарайы,
Ҡулығыҙҙа тылсым асҡысы!

25.08.1970.

## 1971

************************

### Егерме икеһе

**1**

...Егерме икеһе көндөң...
Йәш Ай —
Ҡосағында ине июндең...
Совет иле сәсә ине гөлөн
Матурлыҡтың һәм саф һөйөүҙең.

Шул аҡ таңда Ҡояш, батып ҡанға,
Сыҡты алйып биләү эсенән:
Албаҫтының йәбе — свастика
Бишегенә көндөң сәнселгән...

...Егерме икеһе ине көндөң —
Мөхәббәткә мөлдөр июндең.
Тап шул көндө һоро шинель кейҙе
Ай һәм Ҡояштары илемдең.

Туй күлдәге көткән һылыуҡайҙар
Ҡыҙыл Айлы яулыҡ бәйләне.
Туй таҫмаһы тағыр тройкалар
Тачанкаға китте әйләнеп.

Алмас ҡылыс аҫты ир-егеттәр,
Винтовкаһын һалды иңенә.
Күк Волганан һоро Эльбағаса
Илттеләр Көн — әжәл иленә...

**2**

...Тап туғыҙы ине майҙың...
Йәш Ай —
Ҡосағында ине шул айҙың...
Күрҙе донъя,
Буйлап Планетаны,
Йүгергәнен Еңеү-малайҙың...

Европаның йөрәк тәңгәленә
Тәпәй баҫып, байраҡ ҡаҙаны.
...Көн-бишектә көлөп йоҡлай сабый —
Тертләтмәһен һуғыш ғазабы!

1971.

## Яңы түгел

Яңы түгел
Был бик әрһеҙ ҡунаҡ —
Үлем.
Килтерәсәк һәр кем уға, мунап,
Телем.

Беҙгә тиклем булған,
Беҙҙән һуң да
Ҡала:
Көйрәү усаҡ,
Һаҡлаһаң да ҡурсап,
Һүнмәккә —
Тоҡана.

Хатта:
"Ҡупмам!" —
Тигән бейек ҡаялар ҙа
Төшә ҡойолоп.
"Мәңге тынмам!" —
Тигән иҙел-болаҡтар ҙа
Китә уйылып.

Тынмаҫ, тигән
Талмаҫ борғолар ҙа
Бер көн тына.
Һынмаҫ, тигән
Алмас ҡылыстар ҙа
Шартлап һына.

Һуңғы әременә
Һуңғы йәмен биреп,
Үлә дала.
Аҡтыҡ ҡорт та,
Эш өҫтөндә бөгөп билен,

Ҡатып ҡала.

Яңы түгел былар,
Тик иҫкегә сабылғанда яңы —
Һәр бер ҡылыс.
Иҫке сатнап,
Яңы йәшнәп сыҡһын өсөн үлеү —
Бына бурыс!

2.10.1971.

## Ҡыҙыл Планета

(Космос хәтирәһе)

Йыһандарҙы гиҙҙем —
Андромеда томанлығында.
Иңем менән йондоҙ һөҙҙөм,
Ғаләмдәрҙе айҡап йөҙҙөм.

Галактика елененән
аҡ-һөт татын тойҙо ут-иренем,
берсә, туңдым, берсә, иренем.
Услап өҙҙөм күк бағында
йондоҙҙарҙың зәңгәр бөрөһөн.

Дегет-ҡара серле юлдан
төпһөҙ киңлектәргә ташландым.
Берсә, бөттөм йондоҙланып,
берсә, башландым.
Хәрәкәттең бәрәкәтен
тоҫмалланым Ваҡыт һағында:
талғынайып сәғәт теле,
япраҡтарын ҡолаҡтың
Ғаләм еле ярған сағында.

Янар ҡояштарҙы тоттом,
ҡуйыныма тыҡтым —
меңәр төҫлө меңәр төрлөһөн.
Юлдарыма теҙеп һалдым,
фонарь итеп, тотҡан береһен.
Төҫтәр төрөнә төрөнөп,
иҫереп йөрөнөм.

Космос иçерегə, тиеп,
һанар ине донъя һил вакыт,
капыл əгəр тоймаһам бер
йыраҡ йондоҙ йырын шаҡ ҡатып,
ташланмаһам шунда баш атып...

Ҡандай ҡыҙыл сейə ине
ҡара күккə тамған был йондоҙ.
Яҡынайған һайын, янып,
ялҡынланып,
ҡыҙыллығы күҙҙең яуын алып
арбаны ул мине туҡтауһыҙ.

Мəңгелеккə күкрəгемə
ҡаҙар өсөн ошо ут-ҡуҙҙы —
яҡутланып янған йондоҙҙо,
үрелгəйнем,
фотон-һыбыҙғы
сөрөлдəне, киçкен тыйып;
Галлей кометаһы гөжлəп уҙҙы
космос шлагбаумын ҡуйып;
бихисап күп йүнəлештə
ҡояш дауылдары ҡупты;
космик радио тулҡындары,
һулҡ-һулҡ тибеп, юлға сыҡты:
“Тревога! Тревога!..”

Ни ғəжəп хəл! —
алдым тартып ҡулды,
ҡуҙ-йондоҙға шашып ҡараным.
Ҡаушаным...
Ҡайһы ғиллə ҡөҙрəтенəн
яралған был йондоҙ бер үҙе,
нисек тартҡан космик һөйөүҙе?!

Һəр бер ҡыры ҡыҙыл нур яралтып,
йəндəй тере тамырҙар таралтып
арбай икəн Ғалəм-Күк йөҙөн.
“Ҡыҙыл йондоҙ,
һин кем, һин кем?!
Зинһар, əйт һүҙең!”

“Юҡ, мин түгел йондоҙ, —
тине был ҡуҙ, —

Ҡыҙыл Планета мин —
үҙең тыуған Ер!
Зәңгәр инем элек, ә хәҙер
ҡып-ҡыҙыл мин сейәлер!
Миндә тыуған, үҫкән, хеҙмәт иткән,
дөрләп үткән
Ильич исемле уҙаман-ир —
баһадир.
Шул ир яҡҡан йөрәк уттарынан —
донъям ҡоттарынан —
үҙгәрҙем — ал нур алдым мин.
Мин — Киләсәк!
Ғаләмдәрҙә шытыр Ҡыҙыл Орлоҡ —
яралғы мин!” —
Шулай тине Ерем,
Ҡыҙыл Бөрөм!..

— Йәшә, Ерем,
Ҡыҙыл Планетам,
берҙән-берем!
Йыһандарға ашҡас,
нығыраҡ белдем
Ерем серен
һәм ҡәҙерен:
мин — Ир,
мин — Ер,
мин — Ҡыҙ,
мин — Ҡуҙ,
мин бит һинең
Ҡыҙыл Бөрөң,
Ерем!

Әгәр, әгәр уға китһә,
Ғаләмдә мин — үҙем ҡитға!
Үҙем — Ҡыҙыл Планета!

1971.

## Осорт, атым!

Саба атым, саға ут ҡанатым —
Тауҙан-тауға осоп үтәһе.
Дағалары һуғып, баҙрай һуҡмаҡ —

Офоҡ билен һыға түтәһе.

Һуҡмаҡ — түтә, һыртын туҡмап үтә
Саҡма саҡҡан таҡмаҡ-тояҡтар.
Шағор-шоғор йөҙгә йөҙ ҡайрала —
Ҡындан сыҡҡан ҡылыс-ҡыяҡтар...

Тауҙар тыйнаҡ: "Ел һин, — тиҙәр, — уйнап —
Саңҡы ла ос, булһаң ыласын!
Мә, маҡтып ал, һуңғы йыһат өсөн,
Уралыңдың алмас ҡылысын!"

"Һуңғы йыһат" — һуңғы изге һуғыш...
Булырмы һуң һуңы дошмандың?..
Булмаһынсы! Һуңғы Йыһат булып
Үтәйемсе илдең ҡушҡанын!

Йыһаттар ҙа, бәлки, тыумай тормаç —
Бөтәме һуң илдең ғәмдәре?
Ҡайҙан ғына уҙмай, ниҙәр түҙмәй
Ат башҡайы, егет йәндәре!..

Ярһыу атым, минең көр ҡанатым,
Осорт, әйҙә, осорт ел ярып!
Маҡтып алғас үткер ил булатын,
Баштарыбыҙ баҡһын юғары!

Ерҙең дәртен, үртен, моңон йыйып,
Һелтәнергә әле уйым бар:
Йөрөмәһен, ҡара шәүләләнеп,
Ҡаралыҡтан ҡыңғыр муйындар!

Ҡылыс ҡулда.
Ҡыйғыр күҙем юлда.
Маңлайымды бара ел өтөп:
"Илдән алда маңлай сәсең янһа,
Булырһың һин илең бөркөтө!"

16.10.1971.

## Игенсе һәм йөҙөмсө
(Авеста доғалыҡтарынан)

Иген иккән — иткән игелек.

Изем[6] изгән — иткән изгелек.
Иген — ингән онға, әпәккә;
Шашҡан шарап — изем һөҙөлөп.

Иген, изем — ике бер туған, —
Илаһынан бүләк көр булған.
Ейеп әпәк, буйҙар еткерһәк,
Эсеп шарап, күҙҙәр дүрт булған.

Күҙ икәүҙән — арта игелек,
Күҙ дүртәүҙән — таша изгелек.
Иккес менән иҙгес туҙһа ла,
Улар эше ерҙә — мәңгелек!

1971.

## Үлем

Тәбиғәттә бөтә нәмә
Үҫә, үрләй.
Үлем генә был үҫеште
Йома, күрмәй.

Дөрә ағастар бейеккә,
Бөрө ярып.
Туҡтай үҫеүҙән, ҡороғас
Тамырҙары.

Аға, алҡынып, йылғалар
Күк диңгеҙгә.
Барып етеп ҡоймайынса,
Тынмай бер ҙә.

Ҡара болоттар һауала
Ҡоштай оса.
Һәм туҡталмай осоуынан,
Яумайынса.

Үргей игендәр баҫыуҙа,
Тулҡын болғап.
Туҡтала улар үҫеүҙән,
Башаҡ тулғас.

---

[6] Изем – йөҙөм емешенең иҫке исеме.

Үҫә әҙәм дә, бишектән —
Ҡәбергәсә
(Шунан башҡа үҙгәреш юҡ
Хәҙергәсә...)

Ә шағир? Һуң, кеше булғас,
Үҫә ул да.
Үлмәй ул тик, күмелгәс тә, —
Хикмәт шунда.

“Бөтәһен дә бөттөм белеп!” —
Тигән көндө
Була әйтеп: “Шағир үҫмәй —
Шағир үлде!”

2.10.1971.

## Баррикада

Һағыш йыры ерем кешеләрен
йөрөмәһен әле ойотоп, —
Һуңғы һуғыш өсөн сыҡтым яуға,
“Бәйнәлмиләл” йырын тыу итеп!

Һолло ҡулым,
таймаҫ табандарым,
күк көмбәҙен терәр башым бар.
Киреп күкрәк,
торам, ғорур күкрәп,
баррикада ташында.

Әйтерһегеҙ:
“Беҙҙә донъя тигеҙ —
ур ҡорорға урын
бармы?
Ҡайҙа?”
Кешеләрҙең
йөрәктәрен ярып
үтә бөгөн
ярһыу баррикада!

Теләйһеңме,

юҡмы —
урын бирәү:
йә — был яҡта,
йәки — тегендә.
Тиккәме ни
партбилеттар миллион
йөрәк тәңгәленә
тегелә!

“Партияһыҙ
донъя көтәм!” — тиһә,
төшә бәндә
синфи
уйнашҡа.
Партиялар бөгөн,
яҙып устав,
элә флаг
хатта Ҡояшҡа!

Кем ул һуҙа:
“Туҡта әле, ҡоҙа,
партияһыҙ большевиктар булған!”
Ә мин әйтәм:
кисә улар—
бөгөн партияға инеү өсөн тыуған!

Ҡыҫып уҫка
утлы йөрәгемде,
мир-ғаләмгә илтәм тартынмай:
тиҫтә йылдар
торам партияла —
ҡыҙыл баррикада артында!

Барыһы унын менән:
Партияла тороп
михнәт сикһәм,
Партияла тороп
һанланғанмын.
Булһа нимәм, барын —
маңлай тирем,
күкрәк көсөм менән
яулағанмын.

Шиғырымды

һалмам наҙ-түшәккә:
һалдат булып үлһен шиғырҙарым,
һалдат винтовкаһын көрмәп.
Баррикадаға мин Партиямды,
Ватанымды,
сәсән телле Уралымды —
Хаҡлыҡ юлын мендем ҡурсап,
һәм Хаҡлыҡты яҡлап үләсәкмен,
ут ҡабынған байраҡ кеүек дөрләп!

Йырҙарыма
сырын сәпсектәрҙең,
гөл гәлсәрен, бәлки, аҙ аламдыр.
Кемдәрҙеңдер наҙлы ҡолағына
шырау булып, бәлки, ҡаҙаламдыр.

Ләкин,
ығып ваҡ хистәргә,
таймам уңға,
таймам һулға.
Сөнки
йәшел тышлы,
ҡыштыр эсле
мещан альбомына инеү өсөн түгел,
ә Халҡыма —
Хаҡлығыма хеҙмәт итеү өсөн
сыҡтым мин был хәтәр юлға!

Туған халҡым!
Ҡайнар йөрәгеңдән бәрә ялҡын —
янһын шунда
сәпелдәүек сәпсек шағирҙарың!..
Сөнки бөгөн
баррикада яугирҙәре мөһим,
һаҡлау өсөн
йортом нигеҙҙәрен!

Ҡурай тартып,
ҡумыҙ сиртеп кенә
бөттө йәшәү йырсы, шағирға.
Заман шаулай:
барабандар күкрәүен дә даулай
яуға барырға!

Терһәктәргә терһәк терәп баҫтыҡ,
яурындарға яурын ялғап баҫтыҡ
нисә донъя,
нисә мәмләкәт —
баррикада ташына.
Күмәк устар күрмәп тотҡан тыуҙа
күпме милләт ҡаны уттай ҡыҙа,
күпме халыҡ хисе ташҡына
ҡаралыҡтың ҡара башына!

Был тыу менән,
уға ҡалһа,
башҡорт ҡына түгел — урыҫ та мин,
инглиз да мин, африкан да!
Беҙҙең берлек берәмеге —
ялҡын телле
баррикада!

Һағыш йыры ерем кешеләрен
йөрөмәһен әле ойотоп.
Һуңғы һуғыш өсөн сыҡтым яуға,
“Бәйнәлмиләл” йырын тыу итеп.

Һүкһәләр ҙә,
һуҡһалар ҙа,
боғаҙыма баҫып һыҡһалар ҙа —
шуның өсөн урғыр һуңғы оран:
Халҡымды — сал Хаҡлығымды
баррикадала мин һаҡлап торам!
Заманамды үҙем ҡорам!
Түҙем ҡорам!

16.10.1971.

## Уралда таң
*(Мәҙхиә)*

### 1

Уралымдың ата-бабалар
Ҡаны тамған ергә туҡтаным.
Йәйғор саҡҡан сағыл ташына
Маңлайымды ҡуйып йоҡланым.

Уралымдың ата-бабалар
Даны ҡалған ергә туҡтаным.
Ҡанлы мүген йомоп усыма,
Һулҡылдауын тойоп йоҡланым.

Уралымдың ата-бабалар
Моңо һеңгән ергә туҡтаным.
Урал моңо менән сурлаған
Турғайҙарын һөйөп йоҡланым.

Уралымдың ата-бабалар
Заңын алған ергә туҡтаным.
Алтын зыңлы ҡуңғыҙ мөгөҙөн
Керпегемә йомоп йоҡланым.

Уралымдың ата-бабалар
Йәне гиҙгән ергә туҡтаным.
Таштарына тиклем тупырлап
Йәнләнеүен тойоп йоҡланым...

Белдем шунда ҡапыл үҙемдең
Остоҡ ҡына бер саң икәнде.
Килешалмай быға күңелем,
Бөйөклөктәр көҫәп һиҫкәндем.

Йәшем аҡты күҙҙән супырлап:
“Аһ, мин -- меҫкен ниңә был саҡлы?!
Тейһен ине түбәм күктәргә,
Төйһөн ине табан “борсаҡ”ты

(Ер шарын, тим!..). Илаһ-Тәбиғәт,
Бөйөк Теләк миндә бар бөгөн.
Үтәп шуны, форсат бирһәңсе
Баҫырға был йөрәк ярһыуын!”

**2**

Рәхим итеп, Илаһ-Тәбиғәт
Теләгемде минең һораны.
Һәм мин әйттем:
— Ерҙә Уралға
Тиңһеҙ бөйөк булып буламы?

— Уралыңдан бейек бөйөклөк

Кәрәк ниңә? — тине Тәбиғәт.
— Бөйөклөгөм күреп, йондоҙҙар
Итһен ине миңә итәғәт!

— Арбармы һуң һине, балаҡай,
Уралыңдан өҫтөн итәғәт?
— Өҫтөнлөккә, Илаһ, ни етә!
Бөйөклөк бир тик бер, бер сәғәт!

— Ярар, — тине Илаһ-Тәбиғәт, —
Теләгеңде, балам, үтәйем.
Йондоҙҙарға терәп түбәңде,
Йондоҙ көнлө хикмәт итәйем.

**3**

Шул хикмәтте юллап йүнәлдем
Сихри төштә сихри сәфәргә.
Ирәмәлдең ҡарлы түбәһен
Оҡшаттым аҡ башлы шәкәргә.

Шәкәр һөҙә зәңгәр болотто,
Уға йәнәш күкте мин һөҙәм.
Табан — ерҙә, түбәм — асманда,
Бөйөклөккә үҫеп, эй, гиҙәм!

Үҫәм, үҫәм — сорғоп мин үҫәм!
Тишеп үтте түбәм болотто.
Табан тойһа ла таш Уралды,
Төпһөҙлөккә соңҡам олаҡты!

Ҡала аҫта, ҡала тыуған яҡ —
Ашҡан һайын — ерҙән мин өҫтөн.
Көлөп бағам әрһеҙ түбәнгә:
Шул соҡорҙан микән мин үҫтем?..

Булмаҫ, булмаҫ! Бынау бейектән
Көлгән инсан унда яралмаҫ!
Аслан затым — зәңгәр күк заты,
Ергә ҡарап зиһен таралмаҫ!..

**4**

Сумды Ҡояш офоҡ артына,

Зәңгәрлеккә ҡара төн һеңде.
Ҡунаҡсала һары нәжәғәй
Һуңғы тапҡыр ҡанат елпенде.

Шундай аҫта уйһыу үҙәндәр!
Күк шыршылар шәңгей бик түбән...
Аҡ шаҡмаҡтай Урал маңлайын
Көҙгө итте “ем-ем” Етегән.

Ете йондоҙ яна янымда —
О! — был ниндәй тылсым, сихри мәл!
Табан ләкин Урал һыртында...
Күктә түгел — фәҡәт ошо йәл!

Ете йондоҙ бейей айбарлап,
Мин тулғанам ете уртала.
Йондоҙ нуры билгә урала,
Йондоҙ һулап һулыш ҡурыла...

## 5

Тауыш бирҙе Илаһ-Тәбиғәт:
　　— Мораҙыңа, балам, ирештең?
Уралыңдан бөйөк булырлыҡ
Күк затына хәҙер керештең.

Тик бер генә тапҡыр тын алма,
Тик бер генә тапҡыр моң алма.
Уралыңдың моңон, һауаһын
Онот, онот! Хәҙер һин — Алла!

Уралыңдың һомғол һындары
Һүрәтләнер — уға алданма.
Һоҡланыуҙы — бәндә булмышын
Онот, онот! Хәҙер һин — Алла!

Килер, бәлки, кире ҡайтаһың,
Уралыңда аунап ятаһың.
Тик түбәндер һинән был, аңла.
Уралдан һин бөйөк, һин — Алла!..

## 6

Күк көмбәҙе кинәт аушайҙы,

Ярты яҡка донъя ҡыйшайҙы.
Мең төҫтәре алыҫ Уралдың
Күҙ алдымда артып-ишәйҙе —

Минең өсөн һуңғы йыр булып
Ҡабатланды ерем бер мәле.
Елберҙәне ап-аҡ ҡайындар —
Күлдәктәре бөрмә-бөрмәле.

Шылтыр-шылтыр көлдө шишмәләр,
Йүкәләрҙән әскелт бал яуҙы.
Төн иңкеше ерҙең егенә
Ҡаҙап китте татлы ҡаяуҙы...

Өнһөҙ өнәп кенә ойоно
Мамыҡ томан япҡан ҡаялар.
Күк көмбәҙен көпләп күҙенә,
Ойонолар ҡырҙар, уялар.

Сыңрап көлдө көмөш Етегән —
Ҡымыҙ һоҫто көмөш ижауы.
Янда ғына — ҡолаҡ төбөндә —
Йондоҙ-ҡымыҙ ташып мыжнауы...

Леп-леп көлөп, һомғол тирәктәр
Быуындарын наҙға мәлйетте.
Ер менән Күк — күкрәк терәшә,
Иренләшә торған мәл етте...

Сихри хәлен тойоп донъяның,
Шылтырауҙан тынды болаҡтар.
Йондоҙҙарҙың күҙен йомдорҙо
Ҡош Юлынан купҡан болоттар.

Ғаләм шымды. Таңдың шаңдағы
Кирҙе шаңын йыһан иңенә.
Илаһымдың сихри сулаһы
Ялмап алды ҡапыл мине лә...

**7**

Үҫәм, үҫәм — тағы мин үҫәм,
Асмандарын ашып Уралдың!
Урмандарҙа — табан, ә түбәм

Ғаләм саңдарына уралды.

Ҡолас кирҙем — ике ҡанатым
Йыһан иңен сыйып ҡанатты...
Аһ! — кем һуң мин?.
Күҙем — ут-ялҡын,
Суҡышлы мин, ҡыйғыр ҡанатлы!..

Ҡанатым бар — ләкин осош юҡ...
Суҡышым бар — ләкин суҡыш юҡ...
Ауыҙ асһам — телем һәленә:
Тел осомда өн юҡ, тауыш юҡ...

Күкрәгемдә күкрәү көсө бар,
Тик тауыш юҡ — ауаз ҡалыплы.
Аһ! — кем һуң мин? Өнөм тығылған... —
Сағылмы мин, телһеҙ алыпмы?..

Иларға, тим, — аҡмай йәштәрем.
Уйларға, тим, — ҡатмай баштарым.
Мең төҫтәре йәнле Уралдың —
Минең өсөн үле таш бары...

Һәм мин үҙем — йәнһеҙ бер алып,
Теләк тә юҡ, әйтер тел дә юҡ.
Түбәм — күктә, табан — бик төптә,
Бәндәлеккә ҡайтыр юл да юҡ...

**8**

Тауыш бирҙе Илаһ-Тәбиғәт —
Эсе бошоп, ахыры, өндәште:
— Ризаһыңмы бөйөк ҡалырға?
Өҙмәнеңме әле ниәтте?

Ә мин өнһөҙ — бөйөк бит телһеҙ...
Ваҡлыҡтарҙан өҫтөн бөйөклөк!
— Булды! — тине Илаһ-Тәбиғәт. —
Асылыңа булмаҫ тиңлелек!
Асманға күс ерҙән иң элек!

Аушайған күк еге асылды
Алыу өсөн минең Асылды.
Ерҙе ташлап ғорур ҡарашым,

Көллө кәүҙәм күккә артылды.

Аяҡ бөкләп шауҙыр йондоҙға,
Ултырамын күктең ҡатында.
Аҫта, аҫта, түбән — бик аҫта
Уралымдың һырты ҡалҡынған...

Өнһөҙ һорау яна күҙемдә —
Тәбиғәттән телһеҙ ялбарам.
Илаһ тыныс. Күктең ҡабағын,
Ерҙән ҡаплап мине, ауҙара...

**9**

— Уралдан да бейек бөйөклөк
Алдың инде, — тине Тәбиғәт. —
Урал теле ине — ер теле,
Ҡалды һинән ул ваҡ мәшәҡәт.

Күҙ һал, балам, тирә-яғыңа:
Балҡый ҡалай гәүһәр йондоҙҙар!
Улар теле — һалҡын нур теле.
Улар гел шат. Улар моңһоҙҙар.

Күк телендә өнһөҙ һөйләшеп,
Ишет тәбрик, үҙең тәбриклә.
Бынан һуң юҡ һинең нәфрәтең,
Бынан һуң юҡ һинең йәберең дә!.. —

Ҡул ҡаушарҙы Илаһ-Тәбиғәт...
Бөйөк хәлдә тороп мин ҡалдым.
Айырылып Урал саңынан,
Йондоҙ саңдарына уралдым.

Ниндәй хөрлөк! Күҙҙәр ҡамаша:
Йондоҙ менән йондоҙ ҡайнаша! —
Ерҙә ҡалған ығы-зығылар —
Тамаша был миңә, тамаша!

Йондоҙ менән йондоҙ парлаша!
Йондоҙ менән йондоҙ һайраша!
Ерҙә барған ығы-зығылар —
Тамаша тик бынан, тамаша!

Үҙ тиреһен һөйгән кейектәр,
“Үҙ тауышым!” — тигән сибектәр,
Ҡорһаҡ өсөн ейгән һөлөктәр —
Көлкө генә, көлкө бейектән!

Ҡара менән аҡтың ағышы,
Нахаҡ менән хаҡтың алышы,
Ялҡын менән һалҡын сабышы —
Бейектән тик ваҡлыҡ табышы!

“Уралым!” — тип яуға барыуҙар,
“Урамым!” — тип боҫоп ҡалыуҙар,
“Ораным!” — тип ҡоҫоп, айныуҙар —
Бейектән тик утһыҙ яныуҙар!

Ағастарҙың ауып уфтауы,
Үләндәрҙең һынып һыҡтауы,
Туҙандарҙың осоп выжлауы —
Бейектән тик ҡолаҡ сыңлауы!..

Тирә-яғым — өнһөҙ мәртәбә.
Мәртәбәгә мәреп, нур талған.
Минең өсөн ваҡыт ағышы,
Йөрәк ҡағыштары туҡталған...

Күк көмбәҙен иңгә бөркәнеп,
Ғорур-тыныс, өнһөҙ ултырам.
Йондоҙҙарҙың өнһөҙ сабышын
Күҙәтәм дә өнһөҙ ҡаш йырам.

Бөтөн йыһан — ғорур өнһөҙлөк.
Шул йыһанда өнһөҙ мин — кендек...
Себен кеүек сыулап үтһәсе
Тик бер генә йондоҙ-әргендек!..

Тамағымдан һыҡтау һурылтып
Тырнаһасы тырпай бер үлән!..
Дауам итһә быңдай бөйөклөк,
Аллалыҡта алйып мин үләм!..

**10**

Ҡысҡыраһы ине йыһанға,
Елләндереп телем төйҙәһен!..

Ҡарайым да үрҙән Уралға,
Ҡурайланып һыҙа үҙәгем.

Һағынамын ҡорттай сағымды:
Һәр ҡортонда ерҙең тауыш бар.
Аһ Илаһым, сепей саҡтарым,
Сеп-сеп итеп сыҡҡан тауыштар!..

Бишегемдән һоноп башымды,
"Әсәй!" — тип тел ҡаҡҡан тәүге саҡ!
Әсәм теле — башҡорт телендә
Тауышымды тапҡан мәңгел-хаҡ!

Ҡайҙаһығыҙ, сырлап көлгән саҡ,
Ҡайҙаһығыҙ сеңләп илау, зар?..
Бөйөклөктән айыр, Илаһым,
Есемемә кире, һин, ҡайтар!

Туған миңә ерем туҙаны —
Ҡуйыныма керһен йомраны! —
Ҡылайымсы ергә итәғәт!..
Ҡотҡар, ҡотҡар, Илаһ-Тәбиғәт!

Уралымдың саңын һулайым,
Үләненән тәпәш булайым,
Туҙанында ятып аунайым, —
Ҡотҡар, ҡотҡар, Илаһ-Тәбиғәт!

"Урал" тиер телем бар ине,
Моңон тирер өнөм бар ине,
Илап-көлөр көнөм бар ине, —
Ҡайтар, ҡайтар, Илаһ-Тәбиғәт!

## 11

Ишетелде Күктең өҫтөнән:
— Үкенәһең һуңлап, балаҡай!
"Башҡортлоғон тапһын ғазапта
Был улан!" — тип Урал һамаҡлай...

Мең тауышын белмәй Уралдың,
Табырһыңмы башҡорт тауышын?!.
Шул юлыңда бирһәк бирербеҙ
Берәй йәнлек, ҡош-ҡорт һағышын"...

— Эй Илаһым, инде ризамын
Кем булып та ҡайтһам Уралға!
Уралымды өнәр өн генә
Алһам ине көлөп-иларға!

Миң-миң йәнлек баға Уралым —
Миң-миң һөрән һалып тилерткән!
Бер тауышын ғына алайым —
Тик береһе еткән, бик еткән!..

Өнәмәйем өнһөҙ Күк ҡатын,
Ҡороно бит тамам тәҡәтем!
Эй Илаһым, оҙаҡ тотаһың,
Ҡайҙа булды сикһеҙ шәфҡәтең?!.

**12**

Көлдө, көлдө Илаһ-Тәбиғәт:
— Теләп үҙең алған яҙмыш-хәл!..
Уралыңа тиңһеҙ һин бөйөк,
Ҡалды аҫта һинең ваҡлыҡ мәл!

— Тауыш ҡына миңә, тик тауыш...
— Бөйөклөккә сатың асылған.
Һин аҡыллы, тыныс. Һин өнһөҙ.
Һин бит хәҙер йондоҙ затынан!

— Кәрәк түгел йондоҙ затлығы,
Тупраҡ заты ғына булайым!
Уралымда ғына мин бөйөк,
Урал телен генә алайым!..

**13**

Баш сайҡаны Илаһ-Тәбиғәт:
— Ялбарыуың изге, тик *ҡыйыҡ*.
Бер ваз кискәс ерҙән, әйттем бит,
Аллалыҡтан *тура* ҡайтыу юҡ.

— Ҡыйыҡ ҡайтар, тура булмаһа!..
— Уралыңды, күрәм, һөйәһең.
Тәбиғәтең тартҡан тупраҡҡа
Ни йән булып ҡайтыу теләйһең?

Айҡамаҫмы асы аяныс,
Эйә булһаң бер ваҡ тауышҡа?
Алып тауыш заты рәүешен,
Әүерелһәң кейек йә ҡошҡа?..

— Эй Илаһым, нимә итһәң — ит,
Тик Уралым менән ҡауыштыр!
Уралымды ғына өнәрлек
Бер йәнлегең булыр тауыш бир!

Алпан-толпан атлап илергән,
Солоҡ балын ялап тилергән
Бер айыуың ғына булайым, —
Илаһ, миңә, зинһар, тауыш бир!

Һонолоп-һонолоп һыуға йүгергән,
Уҡ еткәнсе һурылып өлгөргән
Бер боланың ғына булайым, —
Илаһ, миңә, зинһар, тауыш бир!

Көнө-төнө келәт кимергән,
Бура төбөн бурып һимергән
Бер ҡомағың ғына булайым, —
Илаһ, миңә, зинһар, тауыш бир!

Сәскәң һанап шәрбәт һемергән,
Бер ай уйнап ғүмер бөтөргән
Бер иңкешең генә булайым, —
Илаһ, миңә, зинһар, тауыш бир!

Сеп-сеп итеп ҡулға тилмергән,
Төйләгәнгә типке килтергән
Бер себешең генә булайым, —
Илаһ, миңә, зинһар, тауыш бир!

Шул йәнлегең булып ырғырмын —
Кем тауышын алып уянһам...
Аһ! — мин һаман сағыл сабыулы,
Күк ябыулы — ғаләм тын һаман...

**14**

Уралыма һулығып ҡарайым,

Һыуҙарыма һонолоп ҡарайым.
Тауыш алып йәнем һынланыр
Кейек-коштоң барын барлайым...

Маңлайымда — йондоҙ саңдары,
Табанымда — ерҙең моңдары...
Юҡ, булмайҙыр, булмай донъяла
Уралымдан булыу юғары!

Тиңһеҙ хөрлөк, тиңһеҙ тантана —
Үҙе икән ҡайғы, бойоҡлоҡ.
Күккә генә икән килешә
Ер моңонан төңгән бөйөклөк.

Ҡалһын Күккә йондоҙ заттары!
Тупраҡ заты ғына булайым!
Урал көнө менән мин бөйөк,
Урал өнө менән — тулайым!..

**15**

Сер донъяһын йырып йыһандың,
Тымыҙыҡ төн таңға ауышты.
Ерҙе ҡотлап, мең-мең йәнлектәр
Шаңғырлатты шөңгөр тауышты.

Араһынан миңә береһен
Бирер микән Илаһ-Тәбиғәт?..
Себен генә булып, сереллдәп
Ҡайтһам ине ергә мин ҡабат!

Ҡосһам ине тыуған Уралды,
Күкрәгемә ҡыҫып бер ташын!
Мең-мең йәнлектәре хорына
Китһен ине йырым тоташып!

Ишет инде, Илаһ-Тәбиғәт!
Һуңғы теләк һиңә юллайым!
Уралымдың сеңләп йөрөгән
Серәкәйе генә булайым!..

**16**

Минең яҡҡа ҡапыл ауышты

Илаһымдың бизмән табағы:
Уралымды йөҙгә терәтеп
Асылды Күк — асман ҡабағы.

Шарлап китте ярһыу болаҡтар,
Болоттарҙы борғоп ел бәрҙе.
Күк күкрәне. Йәшен саҡҡыһы
Маңлайыма ялҡын тибәрҙе.

Ялҡын, ялмап туңған йәнемде,
Ер өндәрен ҡабат тойҙорҙо.
“Йәнең теләгән бер тауышҡа
Эйә бул!” — тип Илаһ бойорҙо.

Күкрәгемдә күкрәү ҡуҙғалып,
Ерҙе-күкте оран тулатты:
Керҙе йәнгә бөркөт тауышы —
Урал үҙе саңҡып уятты...

Ошо саңҡыу, ергә ҡайтарып,
Билдәләне минең Асылды:
“Әсәй!.. Урал!.. — тинем тилереп. —
Башҡортмон!” — тип телем асылды...

16.10.1971.

## 1972

************************



### Уралыма

Уралҡайым,
Тартты Ҡояш, Айың:
Хаҡ ҡулымды ҡуйып ҡашыма,
Офоҡтарың байҡап менеп баҫтым
Ҡаҡ түбәңдең сағыл ташына.

Донъя иркен, донъя ниндәй иркен,
Бейектәрҙән баҡһаң, Уралым!
Ҡояш, Айың — яҡын, менгән һайын,
Нурға мансып башты торамын.

Ялғап мине сағыу сағылыңа,
Үҫә төштөң, Урал, тағы ла.
Күҙҙәр аша минең — күҙҙәреңдә
Ҡитғаларҙың йөҙө сағыла.

Күрһен донъя: ҡулда беҙҙең — улъя,
Бөгөн беҙ көр, ғорур, байбыҙ ҙа!

Урал батыр бөрккән йәншишмәнең
Шифалары шыта ҡаныбыҙҙа!

Күкрәп ҡалҡҡан илең — тиңең менән
Кирәһең һин, Урал, күкрәк.
Ҡараш инде беҙҙең — үткерерәк,
Тауыш инде беҙҙең — көрөрәк.

Мосафирҙар саңың тырнағанда,
Тәкбир әйтеп, сағыл аҫтында,
Йөрьәт иттем, шанлы Күк Уралым,
Йырларға йыр сая башыңда.

Саңың үбеп сәждә ҡылыусылар
Донъяны бит һинән урлайҙар.
Түбәңде бит һинең түбәнһетә
Итәгеңдә ятып мырлауҙар.

Ҡаным, йәнем һиңә арналғанда,
Инанып ныҡ, әйтәм мин, улың:
Минең менән балҡыр офоҡтарың,
Минең менән ҡалҡыр хөр һының!

Иңеңдәге илең — тиңең менән
Яҙаһың бил, күкрәп, Уралым!
Ҡояш, Айың — нурлы маңлай күҙем,
Киң донъяға балҡып торамын!

Күңел күҙем — ул да тик һин үҙең,
Шуның өсөн йөрәк хислерәк.
Беҙҙең ҡараш инде — үткерерәк,
Беҙҙең тауыш инде — көслөрәк!

Киң донъяны һинән, киң Уралым,
Ҡаплай алмаҫ иҫке төн уры.
Дәү һыныңда — илең бейеклеге,
Күҙҙәреңдә — илең күҙ нуры.

Ҡаяңды бер үбеү өсөн генә
Бирер ине йәнен күп ирҙәр.
О! — мин ғорур, төплө терәк булып
Тыуғаныма мәғрур был ерҙә!

Ярылһам да, яусыл яҙмышымды

Ят ярҙарға илтеп көрмәмәм.
Уралым,
Телем ҡороһон, күҙем сыҡһын, әгәр
Телең менән һинең һөйләмәһәм,
Күҙең менән һинең күрмәһәм!..

1972.

## Тилереү

Тилемен шул, эйе, тилемен —
Хәҙер инде быны ил белә.
Ҡыйыҡ баҫып, ҡалһам көлкөгә,
Көлмәйһең тик бары һин генә.

Әүәлгесә һөйөп ҡарайһың,
Күҙҙәреңдә ләкин йәш күрәм.
Әллә инде үҙем тауышһыҙ
Илағанға, шулай йыш күрәм...

Тиле-тиле, эйе, тиле мин! —
Юғалайым — минән ал күҙең.
Юғалдыртмай, юлдан яҙҙыртмай
Тотоусым — һин, фәҡәт бер үҙең!

1972.

## Сеңләп түгел...

Яҙмыш бар, тип, башым эймәйем мин,
Мин әйтәмен: ерҙә көрәш бар!
Янғас ҡына көрәш һандалында,
Планета булған Ерем — шар!

Көрәш менән орлоҡ төшә ергә,
Көрәш менән шыта ҡыяҡтар.
Наҙлы сәскә — ул да көрәшеп тик
Асыла һәм сәсә орлоҡтар.

Яҙмыш бар, тип, минме баш эйәйем,
Тотҡас үҙем көнөм теҙгенен?!
Бөтә булған бәхет, һағышымды

Ҡулым менән үҙем төҙөнөм!

Тиртер тәҡдир ҡәҙер-хөрмәтен, тип,
Көтмәнем һис ҡәҙер кисәһен.
Ҡыуанда ла, һалҡын ҡырауҙа ла
Тормошомдоң тарттым мисәүен.

Ҡыҫып теште, әсе уттар йоттом,
Йомоп күҙҙе, шатлыҡ кисерҙем.
Бөтһә көсөм — ерҙән мин көс алдым,
Артһа көсөм — ергә көс бирҙем.

Булһын беләк — һыҡтап һүнмәҫ йөрәк,
Булһын йөрәк — үҫер ҙур теләк.
Түгел яҙмыш, хаҡ эш моратына
Илтә ирҙе имен, тиҙерәк.

Күптән таптым: яҙмыш — менге атым,
Үҙ ҡулымда — донъям теҙгене.
Сеңләп түгел, даулап ярамын юл,
Көрәш — миңә йәшәү көҙгөһө.

1972.

## Сәсрәүем

Йән дуҫымдың түгел, — ҡан дошмандың
Елле һүҙен бөгөн ишеттем:
“Сәсрәп кит!” тип орған хаҡ оранын
Хаҡ эштәрем өсөн иш иттем.

Яуһын рәхмәт ярһыу яһилыма,
Сәсрәргә ул миңә ҡушҡанға!
О! — был ниндәй йәнгә яғымлы һүҙ! —
Әйтә алмаҫ уны ҡуштандар.

Наҙлы ҡыҙҙың сәсрәп сыҡмаймы ни
Мөхәббәттән мөлдөр күҙ йәше?
Шул саф намыҫ янған пак йөрәктән
Аллалар ҙа хатта көнләшер!

Сарсап кипкән ерем ирененә
Төшмәйме ни сәсрәп һәр тамсы?

Кем теләмәç: "Ерем көткәнендә
Саф тамсылай сәсрәп тамһамсы!"

Сәсрәй-сәсрәй өрөп ут-елдәрен,
Янмаймы ни Ҡояш күгендә?
Ҡарап күккә кемдәр хыялланмаç,
Ҡояш булыу өсөн бөгөндән!

Күк ҡыртышын ярып Күк көбөнөң,
Керә дөрөп Ергә метеор.
Китһә сәсрәп, алыç ғаләмдәрҙең
Яҡынлығын, тетрәп, Ер тойор...

Үтенәмен, тәҡдир, булһаң әгәр,
Бырғыт мине сәсрәү яҙмышҡа.
Ерем тетрәп, күгем күкрәр саҡта
Булмайымсы туң бер абышҡа!

Яуһын рәхмәт ярһыу дошманыма,
Сәсрәргә ул миңә ҡушҡанға.
О! — был ниндәй йәнгә яғымлы һүҙ! —
Әйтә алмаç уны ҡуштандар!

Йондоҙ, сәсрәп, күген ҡосҡан кеүек,
Типһен, сәсрәп, янар йөрәгем!
Сәсрәмәгәс, ер-күк тетрәмәгәс,
Нимәгә бар минең кәрәгем?!

1972.

## Талисман

(Ниңәлер ярым татарсалап)

Вагон тәгәрмәчләренең
Жырларында — Жир, Асман.
Жир-Асманнан килә бер моң —
Бер жөмләле талисман.

Сихри ғиллә моң иңендә —
Нечкә билең тал сыман.
Нечкә билкәй, миңа килгәй —
Бер жөмләле талисман!

Ят жирләрдән, ят жилләрдән

Жаным янып талыҡсам,
Көн бирәдер, жан өрәдер
Бер жөмләле талисман.

Мин беләмен: көтөләмен
Сағынып, алыс-алыстан.
Шуңа шаһит — жанымда бит —
Бер жөмләле талисман.

Безнең юллар — көмөш ҡыллар —
Моңлар анда тулышҡан.
Шул моңларны сағнулармы
Бер жөмләле талисман?

Синдер минем яҡты көнөм,
Исемең — матур гөлөстан.
"Сөйәм сине!" диүләрең --
Жаныма шул талисман.

Иделләрдән, дус илләрдән
Килә бальзам – алыстан:
Бердән-берем, йөрәк серем —
Бер жөмләле талисман!

7.05.1972.

## Доктор Р.З. Шәрәфитдиноваға

Аҡҡош һынлы, аҡ халатлы доктор,
Йөрәгемде минең тыңланың.
Керпектәрең, күрәм, ҡалтыраны,
Әллә ниндәй уйҙар уйланың.

Минең кеүек аһлы ауырыуҙы
Ҡарамаған көнөң һирәктер.
Ҡолағыңа серен үткән һөйләп
Йөҙәрләгән тере йөрәктәр.

Заман зыңлай — ҡаға йөрәк тынмай,
Ҡаныбыҙҙа — быуат дауылы.
Ҡитғаларҙың утлы ярсыҡтары
Йөрәктәргә керә ҡағылып.

Доктор өсөн — моң бер иртә-кисен:
Йөрәк һайын яра-йөй яна.
Нисек ҡыйын — барлыҡ яраларҙы
Тик бер йөрәк бергә йыйнаһа!

Палаталар... Ап-аҡ палаталар...
Доктор өсөн улар һыҙлауыҡ:
Булған һуғыштарҙың ярсыҡтары,
Буласаҡтарының һыҙлауы...

Ҡарап беҙҙе, ҡара сәскәйҙәре
Ҡыуаралыр, бәлки, иртәрәк.
Бында ниндәй оло йөрәк кәрәк!
Бында ниндәй бөтмәҫ кәр кәрәк!

Инеүеңде һинең көтөп ятыу
Сәғәттәре — үҙе йыр ғына!
Палатаға балҡып күренеүең —
Күҙгә тамған ап-аҡ нур ғына!

“Аҡҡошҡайым” тиеп өндәшәһең
Беҙҙең ише байғош “ҡоштар”ға.
Йән өргәндер, беләм, шул һүҙҙәрең
Бөркөтләнеп тиҙҙән осарға...

Шаҡ ҡатырғыс ҡөҙрәт, тимәһендәр
Техникаһын яңы осорҙоң.
Донъя белә: Гагаринды ла беҙ
Йөрәк менән сорғоп осорҙоҡ!

Тормош — йөрәк, бер-беренә терәк,
Йоҙроҡтай тик йөрәк ни бары!..
Йөрәктәрҙең берҙәм тибеүенән
Әйләнәлер әммә Ер шары!

...Аҡкош доктор, балҡыш йөрәккәйең
Арынмаһын аҡкош йырынан.
Йөрәгеңә һинең таянып бит
Ҡалҡынабыҙ ҡәбер ҡырынан.

21.05.1972.

## Даһи

Даһи!
Түгелдер һин хоҙай ҙа,
түгелдер һин ҡояш та,
түгелһеңдер хатта һыу-һауа
(был тиңләүҙәр, беләм, һинән түбән!).
Һин хоҙайҙарҙы,
һин ҡояштарҙы,
һин һыуҙарҙы,
һауаларҙы
яҡынайтыу өсөн ергә килгән!

Һинең исем
түгел сағыу биҙәк -- гимн өсөн,
түгел тәсбих-һәҙәп -- динем өсөн,
парад өсөн түгел тыу-тамға.
Глобаль Бурыс йөкмәп тыуҙың ергә,
бирмәҫ өсөн йоҡо донъяға.

Бар кешелек бөгөн шул бурысҡа
текәп күҙен,
сисә мәсьәлә.
Ураҡ-Сүкеш —
һорау билдәһе лә,
һәм яуап та
Революция-әсәгә.

Ал бишектә
зәңгәр таң бәүелә,
бишек биле
ҡыҙыл йондоҙло.
Ҡыҙыл Бурыс,
услап Ураҡ-Сүкеш,
ҡыҙыл Ҡояшҡаса ҡул һуҙҙы!..

Даһи!
Һинең исем
түгел сағыу биҙәк -- гимн өсөн,
түгел тәсбих-һәҙәп -- динем өсөн,
парад өсөн түгел тыу-тамға.
Глобаль Бурыс булып баҫтың Ергә,
бирмәҫ өсөн йоҡо йыһанға.

Бурыс булып тыуҙың,

Бурыс ҡуйҙың,
Бурыс булып ҡалдың, юлбашсы.
Беҙ үҙебеҙ бөгөн Глобаль Бурыс:
Ерҙә тирбәтелгән һәр бишеккә
элеү өсөн, йолоп, Ҡояшты!

21.05.1972.

## Ейеүсе

**1**

Был донъя бик ҡыҙыҡ, сәйер нәмә:
Бар батыры уның, бар хамы.
Ҡорһаҡ киреп, йөрөй табын тиреп
Егермense быуат “тархан”ы.

...Хәтерләйһең, илем, үткәндәрҙе:
Тормош беҙгә кәнфит булманы.
Еңел көндәр көсәп, йәш иңдәргә
Түңкәрҙек бит ауыр донъяны.

Арабыҙҙа булды тик бер бахыр —
Бөгөлдө ул сафта килгәндә.
Егелеп беҙ һабан көр һөргәндә,
Һатып ятты ҡатыҡ был бәндә...

Йөкмәнек беҙ уның өлөшөн дә,
Һөрлөкмәйсә алға атланыҡ.
“Бахырйән” тип шанлау урынына
Тик “тархан” тип уны атаныҡ.

Көлдөк ихлас, әммә ҡағытманыҡ —
Йәлләнек шул өтөк бахырҙы.
Ә ул, шытып беҙҙең йәлләүҙәрҙән,
Тиреп алды, тинләп, баҡырҙы...

**2**

Алтын туйын илдең көр туйлатып,
Бирҙе йылдар беҙгә ир ҡорон.
Осраттым тик бөгөн тағы ла мин
Йәшлектәге ҡатыҡ батырын.

О мөғжизә! Ҡандай әүерелеш! —
Урам буйлап олпат тау атлай.
Иңдә — ҡама, башта — күк һеләүһен.
Ә ауыҙы һаман уҫлаптай:

Йотор кеүек, ялмап, донъяларҙы —
Тороп торһон ҡатыҡ, баҡырың!
Бөкләп аяҡ, түргә менгәйне “тау”,
Таныным мин заман бахырын.

Күркә мени — гөрләй, ҡабарына:
“Донъя йөгөн был иң күтәрҙе!” —
Тип, кисәге ҡатыҡ баҙарманы
Хайран ҡыла бөгөн күптәрҙе.

Һоғондор ҙа тулы туҫтаҡ тоттор
Һәм ҡат, маҡтап, бер сөй: “Уҙаман!”
“Халҡым өсөн!” — тир ҙә, ҡалаҡ көсөн
Һалып, “көрәш” башлар бер заман.

Беләк буйын майға манғас ҡалъя,
Бороп мыйыҡ, йырлап ебәрер.
“Урал” көйөн көҙөк күңеленә
Салма ҡылып урап ебәрер.

Һәм үҙенә үҙе бирер баһа:
“Миндә, — тиер, — Урал тауышы!”
Урал күҙлегенән ҡараш атып,
Көмөш һымаҡ һанар танышты:

Ҡалъяланыр “ҡалын” дуҫ-иштәрҙең
Исемлеген төҙөр мут ирең.
“Быныһы — “зав.”; “нач.”, “зам.” — тегеләре,
Ә был мыйыҡ — ҙур баҙ мөдире!” —

Һалыр теҙеп маңлай кәштәһенә.
Ҡымтып ирен, быш-быш һөйләшер.
“Ҡалъялы” шул һәр бер “хөрмәтле”гә
Комплименттар тосы өләшер.

Ҡуйыр уфтап, түшкә ҡулын йоплап:
“Йәшәһәк беҙ, йәшәр, һәй, донъя!” —
Ҡатыҡ туҡып кисә май йыйнаған —
Телен тылҡып бөгөн мал йыя...

**3**

Иртәгәһен батыр йөрөп ятыр,
Аҫып ҡалта, бөгөлөп бик төптән.
“Яуаплы” һәм “затлы” дуҫ-иштәрҙең
Барлар хәлен артҡы ишектән.

“Һинән — минән”... — Яҡшы үҙләштергән
Ишектәрҙең артҡы паролен.
“Тархан” тип тә инде тарайтмайҙар
Артҡы алыш-биреш королен.

“Ил улы” ул,
Йәки “ҡоролтайсы”...
Ҡора, ҡора ҡырҡмыш мәкерен.
“Илем!” тиеп, йөрөй килем төйөп –
Үҙ яғына бармаҡ кәкере.

Кисә “Урал” һуҙған көйө менән
Рәхмәт һуҙып төйөр ҡалтаһын:
“Халҡым!” тип түш һуҡҡан ҡулы менән
Тығыр төрөп ҡаҙы, ҡартаһын.

Яслеләге сабый ҡулдарына
Теймәй, осор бында апельсин.
Сирләп йығылған ҡарт ҡаһарманың
Эсә алмаҫ ҡымыҙ был кисен...

Барыһы ла бара күҙ алдында —
“Артҡы ишек” туйы уйнала.
Йомабыҙ күҙ...
Ҡараһаңсы уйлап,
Замандашым, ошо турала!

Ҡайһы ҡул был тарих ҡатыҡсыһын
Ҡалъяларға беҙҙең баш иткән?
Баҡһаң... вузға түрә балаларын
Индерә, ти, артҡы ишектән...

**4**

Киләсәктең йорто нигеҙенә
Тирләп халҡым кирбес һалғанда,
Ҡалта тотоп кергән арабыҙға

Ике аяҡлы был хайуан да...

Боҙмай ҡанун “король” — ул хөкөмһөҙ,
Уның өсөн әхләҡ — тик төшөм.
Арт ишектән инеп йөрөй ейеп
Асыҡ ауыҙҙарҙың өлөшөн.

Һыҙғанып беҙ һабан һөргән саҡта
Бахыр ине — баҡыр йыйыусы.
Ҡуҙланып беҙ уңыш урған саҡта
Һура башаҡ “һулдан” ейеүсе...

Миллиондар заңлы замананың
Көрәш кәрен йәнгә иш иткән.
Ә был бәндә яҡты киләсәккә
Аяҡ һала артҡы ишектән!..

Сыҡмаҫ барып! “Тархан” танауына
“Шап!” бәрелер ишек элгесе:
“Киләсәккә керә еңеүсе!
Ишек төбөндә ҡал, ейеүсе!”

21.07.1972.

## Ҡабаҡ

А.И.

Ҡабаҡ кеүек, үҙе йоморо,
Ҡабаҡ кеүек, һүҙе йоморо.
Йоп-йоморо аҡыл таратып,
Йөрөп-ята, хоҙай орғоро!

Уның өсөн осло мөйөш юҡ,
Осло мөйөш йәнгә тейеш юҡ.
Йомарланып ергә ятмаһа,
Һыйырға ла хатта көйөш юҡ.

Асһа күҙен, йоморо көн, тиер,
Йомһа күҙен, йоморо төн, тиер.
Йоморо эштәр, йоморо төштәр гел —
Йоморога килеп кем тейер?!

Шыуыш тышы — эстән йоморо,
Ҡыуыш эсе — тыштан йоморо.

Тормош даръяһының һыртында
Йырлап аға ҡабаҡ юл йыры.

Дуҫтары ла уны төҙәйтмәҫ,
Дошманы ла уны йөҙәтмәҫ.
Ни зыян бар йоморо ҡабаҡтан —
Йөҙә бирһен! Һис кем һүҙ әйтмәҫ.

Ярыу өсөн ҡыуыҡ йоморойон,
Борсаҡ ҡына тиклем нур етә.
Тик аяныс: ҡабаҡ, ҡабарып,
Мин — Ҡояш! — тип үҙен йөрөтә...

22.07.1972.

## Күҙ хаҡында һүҙ

Донъяла күҙ беҙгә бирелгән
Алды-артты ҡарап барырға.
Сыҡһа алға "күҙле" бүкәндәр,
Түтә юлда һыныр ҡабырға.

Маңлай күҙе ирҙең күрмәһә,
Ҡарап тормаҡҡа ла — ир түгел.
Мәхрүм икән елкә күҙҙән дә —
Юлда ятҡан ағас киртеге.

Уҙыр уны, тапап, һуҡыр ҙа,
Ҡылый күҙле — тибеп осорор.
Алдын-артын, янын белалмай,
Юл ситендә ятып ул серер...

Һәй, ҡурҡыныс, "күҙле" бүкәндең
Юл башында ҡарғып барыуы!
Мең ҡурҡыныс — йомоҡ күҙленең
Ил яҙмышын ҡулға алыуы.

Абайламаҫ ҡайҙан килгәнен,
Кем килгәнен, ҡуҙғып, артында.
Арты юҡтың, тимәк, алды юҡ —
Шул мәғлүм был меҫкен хаҡында:

Күҙ булаһы ғына урында —

Маңлайына үҫер урайы.
Әсәһен дә хатта танымай,
Ҡорор теле, һыныр ҡурайы...

22.07.1972.

## Фидель

Фидель.
Монкадоны бәреп йыҡҡан,
блокаданы ярып сыҡҡан
Фидель.

Шәкәр ҡамышылай һуйҙан һынлы,
Сьерра-Маэстро ҡаяһылай киң күкрәкле,
ә күҙҙәре —
Куба Ҡояшылай ут-ялҡынлы
Фидель.

Ҡантамырын йәшлек нуры тиртеп,
Куба пальмаһылай, һуты бүртеп
торған ерҙән,
Куба һылыуының ҡосағына
атылырға барған ерҙән,
барыһын атып ташлап,
йәшлегенән аша атлап,
Монкадоның дәһшәтле диуарын
маңлай менән бәреп ярған
Фидель.
Ҡолдар донъяһына һалып оран,
Америка ҡитғаһының зар тамғаһын —
Ҡара һаҡалын —
юҡ итмәккә мәңгелеккә
нәҙер итеп, үҙенә алған
Фидель.

Ғорур Фидель,
тораһың һин, булып сағыл —
Сьерра-Маэстро тауы булып мәғрур —
күк океанда!
Юҡ,
тормайһың! —
ҡорос мөс-ҡулдарың һинең

торғо белмәй —
дауыл теләй,
ишәһең һин, аяғөҫтө баҫкан килеш,
штормдар блокадаһын ярып ишәһең,
илтәһең
алға, дауылға
Америка ҡитғаһының хөр карабын —
йәшел Кубаны,
йәп-йәш Кубаны,
йәп-йәш
Фидель!

Фидель.
Һөйөп һине башҡорт көтөүсеһе
ҡурайында ғәзиз “Урал” көйөн
уйнай,
Фидель.
Шәкәр ҡамышылай балға ҡанған
Урал йүкәһенә ырып төҫөң
һынлай,
Фидель.

Баллы ҡамыштарҙың,
баллы йүкәләрҙең
ҡанлы ерҙән шытҡанлығын ҡурай
көйләй,
Фидель.
Йөрәктәргә беҙҙең был көй яңы
хаҡиҡәтте һөйләй,
Фидель:

“Сьерра-Маэстро менән Урал —
бер туғандар,
ҡандар беҙҙең бергә ҡушылғандар
йүкә, ҡамыш шытҡан
тупраҡта.
СССР һәм Куба —
йөрәк булып һуға
күкрәктә,
Халыҡ заңы беҙҙе
күкрәтә,
Фидель”.

Күкрәктәр — көр,

күҙҙәр — булһын үткер
донъяларҙа ошо беҙҙең,
Фидель.
Сөнки бит беҙ
һәр беребеҙ
Ҡара һаҡалын Ер шарының —
зар тамғаһын —
юҡ итеүҙе
бурыс-нәҙер итеп
алғанбыҙ,
ялҡынында азатлыҡтың
янабыҙ,
Фидель.
Бир ҡулыңды,
Фидель.
Устар аша
күсһен утлы хистәр,
Фидель.
Беҙ бит коммунистар,
Фидель!

4.08.1972.

## Уралыма ҡая

*(йыр)*

Һалып оран, бер уй уйлап торам:
Һуҡмаһын ел илем йортона.

2 тапҡыр:

Ҡалҡайымсы, ҡаяң булып, Урал,
Ел-ямғырлы ҡырлас-һыртыңа!

Булалмам мин, бәлки, мәғрур ҡаяң,
Күңелем тик ғорур, ҙур ҡалыр.

2 тапҡыр:

Күкте рухым дәғүә ҡылыр сая,
Уралыма йәнем уралыр!

Күкрәгемә ҡунһа, күкрәп-күкрәп,
Йәшендәрҙең утлы уҡтары,

2 тапҡыр:

Көләрмөн мин: көсөң һына, донъя, —
Мөмкинме һуң мине ҡуптарыу!

Онталырмын, янып көл ҡалырмын,
Ҡарғыр төбөм һаман Уралда.

2 тапҡыр:

Күрер илем мәғрур ҡаяларҙың
Әйләнгәнен мәңгел ҡоралға!

Уралҡайым, зәңгәр монарҡайың
Ҡаяларҙан төтәп ҡалғандыр.

2 тапҡыр:

Ҡая булып ҡалҡһа уландарың,
Онтай алмаç һине ел-ямғыр!
Онтай алмаç һине ел-ямғыр!

14.08.1972.

## Арыçлан

Тар ситлектә ҡалғый арыçлан,
Булып кәмит, ҡарҙар илендә.
Күҙе йомоҡ... Уйы менән ул
Африкала — тыуған ерендә.

Имеш, бейек боабаб ағасы
Төбөндә ул кинәт туҡталған.
Йомарланып хәтәр йомғаҡҡа,
Ҡорбанына януар уҡталған.

Белмәй бер ни, һыуға һонолмош
Һылыу болан — алыр улъяһы.
Ырғылыр бер — ергә ҡаҙаҡлар,
Боçоратып, ҡанлы ҡалъяһын...

Ҡайнар тәмен ҡандың танһыҡлап,
Шатлығынан мырлай арыçлан.
Африканан ситтә, ситлектә

Ятҡанын да януар онотҡан...

Хыялында тәпәй аҫтында
Ҡалтырана ҡорбан йәнтәслим:
Африканың сахра батшаһы
Үтәй ғәҙел сахра ғәҙәтен.

Һиҙмәй "батша": аунай ситлектә,
Күҙ ситтәре бөткән сейләнеп.
Арыҫландың ҡайнар ал ҡанын
Һура, һура себен, кинәнеп...

Бына себен ҡандай ҡыҙарҙы,
Арыҫландай булып ҡабарҙы.
Бына-бына осоп китәсәк,
Ә арыҫлан ята хәбәрһеҙ:

"Ҡорбанына" һалып тәпәйен,
Танһыҡ ғәмгә баштан күмелгән...
Ә ниңә һуң уға ҡорбанын
Башламаҫҡа ине себендән?!.

16.08.1972.

## Эт күңеле

М. К.

Семәрлекәй оя ҡырында
Ойой ҡарт эт көмөш сылбырҙа.
Ҡуйһа сыңлап затлы муйынсаҡ,
Ишетелә уға моң-йырҙай...

Сылбыр-сылбыр йомоҡ дүңгәләк
Һуҡбай өсөн көндәр ағышы.
Әлһер йәнгә бала саҡтарын
Хәтерләтә сылбыр тауышы.

Тыуҙы күмәк улар инәнән,
Ауыр һынау юлы үттеләр.
Күптәр туңды... Күптәр берәҙәк,
Һунар эте булып киттеләр...

Ә был бахыр "уңды" йәштән үк:

Өйрәнде ул һөсләп өрөргә —
Хужа ҡулы ҡайҙа төрткәнен
Башҡаларҙан элек күрергә...

Затлы сылбыр кейгәс муйынға,
Ике күҙен ҡара ҡан баҫты.
Туғандарын хатта танымай
Өрөп ятты аҙмыш-албаҫты...

Ҡәрҙәштәрҙе йотҡан йоттарҙан
Ҡалды һаҡлап уны был төйәк.
Баш китерлек хәтәр саҡтарҙа
Эт күңеле булды бер һөйәк.

Саба-саба яныл ауҙылар
Берәҙәктәр, осҡор бурҙайҙар...
Инде бына сылбыр мәхлүге
Ята көтөп әжәл Хоҙайҙан.

Затлы сылбыр, оя, һөйәккә
Бәйләгән ул барлыҡ булмышын.
Тик уяна шыңшып, төшөндә
Тере ҡандың тойоп һулышын...

Этләнһә лә хужа алдында,
Эт булып ул йәшәй алманы.
Сыңғылдатып затлы сылбырын,
Яҙмыш уны ҡаты алданы.

19.08.1972.

## Көҙ

Йүкәләрем һорғолт-һары инде —
Бөркәнгәндәр йылдың ғәм төҫөн.
Лыс-туҡ ерҙе һарған һары япраҡ —
Килгән алып был ғәм көҙ еҫен.

Көҙ кәләшен — һары сәскәләрҙе
Көйәҫле ел эйһә, ышылдап,
Сологона һуңғы һут һурыусы
Бал ҡорттары туҙғый, быжылдап.

Ҡыу күрәндең ҡурпы төптәренә
Тынған инеп әрһеҙ бөжәктәр.
Аҡсарлаҡтар көҙгө күк йөҙөндә
Һуңғы тапҡыр ишә ишкәктәр.

Китер инде, ишкәк ишә-ишә,
Төн яғының һуңғы ҡоштары.
Һүнер инде, көтөп яңы яҙҙы,
Йөрәгемдең моңһоу уттары...

Баҡһаң уйлап, ғүмер көҙөн туйлап,
Күпме көндәр янып үтелгән.
Табандарҙан тормош тауҙарына
Күпме һуҡмаҡ-ядкәр һүтелгән.

Йөрөй әнә, ҡырсып эҙҙәремде, —
Ышан инде был ел-ҡулсырға! —
Ҡыу япраҡка төрөп ҡыш, яҙымды,
Йәй, көҙөмдө минең осора
Һәм үҙемде минең осора...

Осһон, әйҙә...
Осайыҡсы, әйҙә...
Осоуҙар тик беҙҙен ҡалмаған.
Ваҡыт, ватып, нисә быуындарҙы
Ҡыу япраҡтай ерҙән ялмаған.

Көҙ артынан килер яңы яҙҙар,
Быуын арты ҡалҡыр быуындар.
Ер әйләнгән саҡта был ҡанунды
Туҡтатырлыҡ ни көс, быуым бар?!.

Яңы йылдар ябып һуҡмаҡтарҙы,
Юйылһа ла йылы эҙебеҙ,
Ерҙән шытҡан һәр шат йәш бөрөнән
Торор көлөп тере күҙебеҙ.

12.10.1972.

## Америка йондоҙҙары

Америка,
туҙған флагыңа

ике йондоҙ ҡалҡты
ҡуҙарып.
Береһе — төн йондоҙо —
Анжела Дэвис,
береһе — көн йондоҙо —
Жейн Фонда, —
Америка ҡыҙҙары!
Даулап Хаҡлыҡ, һаҡлап сафлыҡ,
негритян ҡыҙ, инглиз ҡыҙ —
Ҡара һәм Аҡ — ике йондоҙ
АҠШ күген ярҙы тиңһеҙ!
Хаҡ азатлыҡ йондоҙҙары!

Балҡый улар, булып сағыу сәскә,
йәнһеҙ йондоҙҙарың араһында.
Көнөң сазы — аҡ тажында,
ерең наҙы — ҡараһында.

Теләмәне улар булырға,
сырмаҡланып алтын сылбырға,
монополиялар ҡондоҙо.
Голливудтың лавр веноктарын,
фәндең тыныс, татлы кафедраһын
алмаштырҙы асы хаҡиҡәткә
ике ил ҡыҙы!
Сағылғанда сыбар флагыңда
улар — заңдың ғәййәр нурҙары,
ҡуңғыҙ-баҙлауыҡтай ғына бары
барлыҡ штаттарың йондоҙҙары...

Дөрләп бара
Аҡ һәм Ҡара —
бер ватандың ике саҡҡыһы.
Бер тәүлектең ике яртыһы.
Ер менән Күк кеүек,
көн менән төн кеүек
бер бөтөндөң ике яҡтыһы —
Аҡ һәм Ҡара
әйҙәп бара!
Офоҡ яра!

Туғанлығын ҡитғаларҙың күрҙе улар
офоҡтарҙың өҫтөн бөргән һөрөм аша.
Сәскә булып наҙлы көлдө улар

көбәк төбәп күҙгә баҡҡан үлем аша.
Ҡанаттарын ике төҫтөң ҡайырырға,
Айырырға көҫәне
әкиәти шайтантаяҡ түгел,
ә электр бүкәне...

Ике саф сәскәне — ҡыҙҙарҙы —
шул бүкәнгә атыу өсөн,
кнопкаға баҫыу өсөн
“Азат Америка” ҡомарҙы:
аяғөҫтө торор ине,
“бис!” ҡысҡырыр ине,
ҡыҙған ике электрод
төтөн ҡылһа ошо ҡыҙҙарҙы...

Бер...
Ике...
Өс...
Сәғәт һуға...
Ҡыҙҙар уҙа,
ҡылып инҡар үлем төбәген.
Һиҫкән Америка! —
электродтан көслө ике сәскә!
Ләүкеттертмәй сәпкә,
күкрәк менән яба икәү
ут һалынған пушка көбәген!

Сөнки
Вьетнамға атҡан напалмдар
Ер шарына дөрләп ҡабынырын
белә улар...
Әжәлдәрҙе теләй улар!

Йәшәү сәсә
аҡ һәм ҡара сәскә,
Һинд Ҡытайын ҡаплап үлемдән.
Донъя күрә:
ике йондоҙ — дөрә
Америка күгендә!

Пушкаларың һипкән ут-күҙҙәр —
улар фәҡәт төнгө ҡуңғыҙҙар, —
ҡуңғыҙҙарҙы
ҡәбер көтә.

Ике ҡыҙың — ике йондоҙоң,
яҡты нурға мансып ер йөҙөн,
дөм-күгеңә ҡалҡмағандыр бикәр —
ике йоҙроғоңдо төйөп күтәр,
Америка!

11.11.1972.

## Ҡырҡ йәшем тулғанда әйткән һүҙ

**1**

Декабрҙең ап-аҡ таңында
Донъяға мин бәбәк асҡанмын...
Ҡырҡ ҡыш, ҡырҡ йәй үтеп, тағы ла
Аҡ таңыма осоп ҡайтамын.

Тыуған көндә дөмбөр ҡағырға
Йәшлектән үк ғәҙәт итмәнем.
Байрам өсөн түгел, ил өсөн
Йылдарымдың йөгөн йөкмәнем.

Ҡоймай шөһрәт алтын шәмдәлдәр,
Тормай күкрәп һарнай, ҡарнайҙар.
Ҡалын ҡарлы ер-һыу, ҡырҙарым
Күҙҙәремә өнһөҙ ҡарайҙар.

Декабрҙең ап-аҡ ҡулдары
Һала мамыҡ ярам ярына.
Ер йәненең һыҙып һыҙлауы
Боҙ аҫтынан һулҡый яй ғына.

Ерҙең моңо... Ерҙең булымы...
Йәнгә беҙҙең улар уйылған.
Аҡ бинт һымаҡ, тыуған көнкәйем
Ап-аҡ ҡарға төрөп ҡуйылған...

**2**

Юҡ, ҡырҡ шәмдәл янмай табында,
Ҡырҡ ялҡын-тел осон уйнатып.
Ҡырыҫ минең халҡым йолаһы:
Уйланырға ҡуша был ваҡыт.

Ҡырҡ уй ғына бөрөп маңлайға,

Ғәм табыны ҡороп ултырам.
Ҡаршымда ил — уйсан әсәйем —
Уның менән ҡырҡым тултырам.

Ҡулындалыр йырлы орсоғо,
Зырлай-зырлай аҡ юл — йыр һуҙа.
Аҡ йомғаҡҡа шул йыр уралып,
Күҙ алдымдан ҡырҡ мең йыл уҙа.

Моң иләй ҙә әсәм еп сырмай,
Ауыҙ эсенән бер көй сыңлай.
Ирек һөйгән илем ирлеген
Минең менән бергә Ер тыңлай:

“Яҙмышының орсоҡ осона
Оронорға халҡым ҡурҡмаған.
Ил тарихын Ергә сырмаған,
Һүтелмәçлек итеп ураған!..”

**3**

Ер әйләнә, орсоҡ әйләнә...
Елдәр илай, орсоҡ йыр йырлай...
Бөйөк әсәм! Ап-аҡ ебеңде
Өҙөлмәçлек итеп Ер урай!

Аҡ бурандар ярып тыуғанмын,
Ләйсән бөркөр өсөн илемә.
Сорналамын сираҡ еп булып
Ер шарының орсоҡ биленә.

3.12.1972.

## 1973

************************

### Күк күлдәк

*Һаҡмар-һыуҡайҙарҙың яры бейек,*
*Яр аҫтында — бойоҡ томбойоҡ...*

Халыҡ йырынан.

Төштәремдә күреп уянамын
Сабыйлыҡтың күкшелт таңдарын.
Күк күлдәксән генә, яланаяҡ
Барам, имеш, елеп — ҡар ярып.

Баҫҡан ғына һайын, сәңкей аяҡ —
Табандарым ҡарға йәбешә.
Йөрәккәйем таба алмай терәк,
Башҡынайым түбән әүешә.

Ята төтәп ҡанлы яу яланы,
Ауып ҡалған атай-ағайҙар...
Һорап йылы, һуҙам ике ҡулды,
Ярҙам ғына итә алмайҙар...

Төшәм, ырғып, киртләс-киртләс ярҙан,
Ҡаплаған боҙ — Һаҡмар һыуым юҡ.
Быяла-боҙ аҫтын, шылтыр-шылтыр,
Тырнап илай наҙлы томбойоҡ...

Тоймағанмы йәмле йәй үтерен,
Һыуҡайының сатнап туңырын?
Сағыу килеш, ҡыштың ҡосағында
Боҙсәскәгә тороп ҡалырын?..

Салландыртып сабый сикәләрҙе,
Ҡалҡманыҡмы сағыл тауҙарҙай?
Тартманыҡмы көнгә боҙлоҡтарҙан
Томбойоғон йәндең, ауҙармай?!

Елә белдек, кейеп күк күлдәктәр,
Көткәндә лә күк боҙ, юл бойоҡ.
Томбойоғон ерҙең туңдыртмайса,

Типте йөрәк беҙҙең — томбойоҡ.

Эй балалыҡ! Кейгән күк күлдәгем!
Көн элгәре ҡаттың аҡ тоҙға.
Томбойоҡтар булып тыуғайныҡ та,
Туңды түбә иртә күкбоҙға...

Ҡырау атҡан шоморт сәстәремә
Боҙлауыҡлы ядкәр яҙыла.
Күбек ҡарҙар баҫҡан күк иңдәрем
Күк көмбәҙен йөкмәп һығыла...

1973.

## Ҡара төн, күк томан

*Һәләк булган космонавттар иҫтәлегенә*

Илама, һылыуҡай,
Төбәлеп күҙҙәргә.
Китәбеҙ, китәбеҙ
Томанлы төндәргә.

Баҡһаң да күктәргә,
Йәш ҡатыш өҙөлөп,
Китә бит торналар,
Сылбырҙай теҙелеп.

Ҡоштарҙың, ирҙәрҙең
Күктә үҙ юлы бар.
Осабыҙ, осабыҙ —
Хуш, ҡырҙар, болондар.

Йән һөйгән йәнейҙәр,
Хушығыҙ, хушығыҙ.
Һөйләгән саҡтарҙа
Беҙҙе лә ҡушығыҙ.

Ҡара төн, күк томан
Һәм ыҙғар — юлдарҙа.
Юл ҡала, эҙебеҙ
Юғала, юғала.

Олатай, атайҙар
Күмелгән томанға.
Илкәйен, гөлкәйен
Һөйгәндер улар ҙа...

Ҡара төн, күк томан
Һәм утлы саф юлдар.
Саҡыра дауылға
Беҙҙе саф ярһыуҙар.

Бәрә ел күкрәккә,
Өтә ут маңлайҙы.
Утлы юл ир итә
Ир булыр малайҙы!

Их һөйгән йәнейҙәр —
Йөрәктең яраһы!
Үбегеҙ бер генә —
Беҙгә күп бараһы...

“Бер генәм!” тиеүем —
Һөйөүем, һылыу, сын.
Һайланыҡ һуңғы юл —
Һылыу өсөн, ил өсөн.

Йөрәктәй бер йондоҙ
Балҡытһа төн йөҙөн,
Әйтегеҙ, һылыуҙар:
“Был — минең йондоҙом!”

Илама, илама,
Төбәлеп күҙҙәргә.
Китәбеҙ, китәбеҙ
Йондоҙло төндәргә...

Трускавецк, 22.03.1973.

## Галстук

*Ала-ҡола галстугы,*
*Ала-ҡола күңеле...*
Таҡмаҡтан.

Теүәл булып тыуҙыҡ тәүҙән үк,

Теүәл булып ҡалдыҡ хәҙер ҙә.
Күңелдәрҙең ала-ҡолаһын
Үҙ итмәҫбеҙ хатта ҡәберҙә!

Ала-ҡола беҙгә ят булды,
Ҡырыҫ ергә тәпәй баҫҡандан.
Ал галстук итеп, Ҡояшты
Алдыҡ, телеп, зәңгәр асмандан.

Арта торғас, күҙҙәр арбалды
Бураҙналы тыуған ҡырҙарға.
Йәнгә һеңгән тупраҡ буяуын
Һалдыҡ, иҙеп, ярһыу йырҙарға.

Ырҙын саңы, күсәр дегете
Мөһөрләне беҙҙең ҡулдарҙы.
Ал ялҡынды бәйләп йөрәккә,
Ҡомарланыҡ барыр юлдарҙы.

Һораманыҡ: "Күпме миңә?" — тип,
"Күпме минән?" — Булды уйыбыҙ.
Шуға күрә талыу белмәнек.
Шуға күрә уңды юлыбыҙ.

Галстугын ала-ҡоланың
Үҙһенмәнек — ҡабул ҡылманыҡ.
Үҙгәрһәк тә, бергә үҙгәрҙек —
Ер һәм Көндөң төҫөн юйманыҡ.

Йөрәк менән беҙҙең галстук
Булды, эйе, Ер һәм Көн төҫлө:
Тиртеп ужым, яҙын йәшәрҙе,
Биреп уңыш, көҙөн өтөлдө.

Тулып күңел — тулап һуҙҙыҡ йыр,
Илар көндә көлдөк ялтырап.
Тыуарҙарҙың бәхет нигеҙен
Ошо ҡулдар ҡорҙо, матурлап.

Ала-ҡола беҙҙән уңманы —
Галстуктың таҡтыҡ бер төҫөн.
Ҡыуарһаҡ та ҡыуан йылдарҙа,
Ҡыуандыҡ беҙ тыуған ер өсөн.

Шуғалыр шул һәм беҙ үҙебеҙ
Төҫ бирҙек нығ күкрәр йылдарға.
Йөрәккә беҙ ялҡын бәйләнек,
Ялҡын булып керҙек йырҙарға.

23.03.1973.

## Умырзая

*Марат Минһажитдинов иҫтәлегенә.*

“Умырзая, үтә ғүмер зая...” —
Ишеттем мин ҡайҙа был йырҙы?
Өҙҙөмө ни, сабып, йәшен-ҡылыс
Сыңрап килгән көмөш сылбырҙы!..

“Умырзая, үтә ғүмер зая...” —
Йыр дауамын әжәл урлаған.
Сыңрау-сыңрау көмөш моң сылбырын
Салғыһына, салып, сырмаған.

“Умырзая, үтә ғүмер зая...” —
Был яҡ оста сыңрап йыр ҡалған.
Салғы салған сылбыр өҙөгөнә
Көмөш сылбыр килеп ялғанған.

“Умырзая, үтә ғүмер зая...” —
Тишеп ҡарҙы, сыҡҡан күк сәскә.
Суҡылһа ла күк күҙҙәре ерҙең,
Ҡалған йыры, ерҙән күсмәҫкә.

“Умырзая, үтә ғүмер зая...” —
Үтмәҫтәрен йырҙар үҙ итмәҫ.
Заяларҙа барҙыр ҡуҙлы мая —
Сабып салғы, утты боҙ итмәҫ!

26.03.1973.

## Нәсихәт

Баш эймәбеҙ, баштар кәйелһә лә —
Күнеккәнбеҙ үрҙән ҡарарға!
Кәрәк икән -- яраһындар беҙгә,

Кәрәк түгел беҙгә — ярарға.

Цунамиҙар һалған хас-ажарҙан
Тамырлы бер әрем-ыу көслө.
Ваҡ йәндәргә ваҡлап намыҫыңды,
Үҙ-үҙеңә булма үтесле.

Ауһа үлән — тороп ултыра. Тик
Имәндәргә ҡабат тороу юҡ.
Шартлап һынғанғаса ҡарышайыҡ,
Йә һындырһын беҙҙең ҡарыулыҡ!

27.03.1973.

## Кирә тарттым

Ҡайырылып артҡа ҡараһам,
Урау-урау үткән юлдар бар.
Кереш тартып юлда, уҡ атып,
Сөйәлләнеп бөткән ҡулдар бар.

Еңел түгел йылдар һуҙымы --
Тала аяҡ, туҙа табандар.
Аҙым һайын, аяҡ-ҡулымдың
Ҡан таптары ҡатып ҡалғандар.

Шаһит улар минең үткәнгә...
Үткәндәрҙе булмай юҡ итеп.
Юл-бөгәлдән яһап ян-йәйә,
Үҙемде мин аттым, уҡ итеп.

Яттар янын көҫәп берәүҙәр,
Яһил керешенән атылды.
Тик баштары хаҡлыҡ-ҡаяла
Балсыҡ көршәк һымаҡ ватылды.

О! — шәфҡәтһеҙ хаким ул ҡая:
Бәндәләрҙең ҡоя һөйәген.
Ҡотолмайҙыр яһил-шыйғалаҡ,
Ялағайҙың баллы кейәһе.

Ҡая ярып үткән ярһыу йән
Төн йөҙөнә йондоҙ ҡаҙаҡлай.

Керешенән елдем йылдарҙың —
Алһын ялмап күкте һаҙағай!

27.03.1973.

## Һәйкәл

Һәйкәлдәр ҙә мохтаж йәлләүгә:
Эй, ҡыҙғаныс һәйкәл көндәре.
Ямғырҙарҙа яңғыҙ, күшегеп,
Үткәрә бит улар төндәрҙе.

Юҡҡа ғына мәҡәл тимәгән:
“Тамсы тамып, тамып таш ашай”.
Һәйкәл халҡын онтап ел-ямғыр,
Һиҙҙертмәйсә генә баш ашай.

Ҡаты гранит, шыма мәрмәрҙәр,
Әүерелеп ҡомға, ауалар.
Һүргәс ваҡыт, баҡыр, алтындар
Иләк кеүек кәүек ҡалалар.

Тарих әгәр үҙе керешһә,
Була ҡыйыныраҡ саҡтар ҙа:
Танауҙы йә сиртеп һындыра,
Бәкәлгә йә тибеп ауҙара...

Һәйкәлдәрҙең хәтәр яҙмышы
Бирер ине фәһем күптәргә:
Донъя шаһит, һынын һындырып,
Сонтор ҡалған бүкән-төптәргә...

Ә шулай ҙа ерҙә бәндәне
Һәйкәлләнеү ғәме арбаған:
Ҡыҙып күҙе, мәрмәр, гранит,
Баҡыр, алтындарға ҡараған.

Үҙенә ул һалған һәйкәлде
“Туҙмаҫ таҫыл” — хатта йыр менән...
Йылдар үткән. Илдәр юл һүткән.
Көй үҙгәргән — хатта йыр үлгән...

Бар ул, бар ул ләкин мөғжизә! —
Түбән унан ваҡыт, юл еле.

Ҡомдарҙан ул ҡоя гранит,
Үлемлене итә мәңгелек.

Көйҙәрҙән ул йырҙар тыуҙыра.
Йырҙарға ул үҙе көй бирә.
Хоҙайҙарҙы үҙе күтәрә,
Һуғып үҙе йәки бөлдөрә.

Асамын сер һеҙгә, дуҫтарым:
Эйәрләнем мин шул тылсымды.
Үҙемдән һуң ҡалыр был ергә
Һәйкәл итеп ҡуйҙым халҡымды!

27.03.1973.

## Алмас

Тауҙарға менгәндә
Таймаһын табаным:
Штиблеткә шыптарҙы
Шыраулап ҡаҙаным.

Ҡурҡытмай боҙлауыҡ,
Ҡурҡытмай һыҙлауыҡ.
Табаным төкөһә,
Һуҡмаҡтан һыҙыла ут!

Сигенмәм, шыптарым
Ҡалһа ла күмергә.
Күмерҙән тыуған бит
Алмастар был ергә!

...Шытырҙай шырауҙар,
Күмерле — табандар.
Эҙемдә алмастар
Теҙелеп ҡалғандар...

Алмасты алмаҫтыр
Тут һәм саң, моғайын.
Илемә юлында
Алмас шып булайым!

27.03.1973.

## Йәйғор

Аҙаштырҙым башҡайымды
Илкәйемдән алыҫта.
Аға елгә күҙ йәшкәйем,
Әүерелә болотҡа.

Яуа-тама, яуа-тама,
Үтә урап Ер шарын.
Кире ҡайта болотомдан
Һағынысым ни бары...

Илай, үкһеп, үткәндәрем,
Көткәндәрем -- ал күпер.
Алһын ине ал күперем
Хыялымды, балҡып бер!..

Теләккәйем тетелеүҙән
Йөрәккәйем өтөлә...
Аһ! ни күрәм, — йәйғорланып,
Күңел күгем кителә!

Китегендә — Күк Уралым,
Түбәләре алтынлы!
Их, хыялдың, йәйғорланып,
Уралымда балҡыуы!

Их был йәйғор, йәнгә яйҙыр! —
Таралта ҡайғыларҙы.
Хәтерләтә ҡыңғыраулы,
Таҫмалы дуғаларҙы.

Зыңғыр тағып, "зың-зың!" ҡағып,
Туҙҙырып ҡар, елеүҙәр!
Их, йәйғорло көйәнтәне
Иңгә һалған һылыуҙар!

Йәйғорлоҡтан, йән көрлөктән,
Елеп кенә үткән саҡ!
Шат йөҙҙәрҙе, саф күҙҙәрҙе
Һурып ҡына үпкән саҡ!

Киттем сығып, билде быуып —

Ҡалды ҡамыл туҙаны.
Туҙандарға һырыны ҡар —
Их, ғүмеркәй уҙғаны!..

Аһ! был йәйғор, күҙгә йәйғор! —
Күгем балҡып күкрәне.
Иҫтә, иҫтә йәнкәйемдең
Ҡалҡыу-балҡыу күкрәге!..

Яланаяҡ, йәйғор буйлап,
Илкәйемә ҡайтайым.
Ҡалҡыу-балҡыу күкрәгенә
Башым һалып ятайым!..

28.03.1973.

## Һары япраҡтар йыры

Оттоҡмо, әллә беҙ
Отолдоҡ, отолдоҡ? —
Бүртенеп бөрөнән,
Ботаҡҡа ҡот булдыҡ.

Урманды, урманды
Йәм-йәшел ут ҡылдыҡ.
Йырланы йырын Ер:
"Бытбылдыҡ! Бытбылдыҡ!"

Бытбылдыҡ-бытбылдыҡ,
Беҙ әллә тотолдоҡ? —
Сеймәлеп сәскә — сәс,
Сәскәле суҡ булдыҡ.

Емештәр, еңмештәр,
Өлгөрҙө — ныҡ булдыҡ.
Йырланы һаман Ер:
"Бытбылдыҡ! Бытбылдыҡ!"

Һәй, хисле ҡош имеш,
Хуш имеш бытбылдыҡ!
Алтындай алланып,
Урманды ут ҡылдыҡ.

Тулышып моң менән,
Һағышҡа отҡолдоҡ.
Йырланы тик һаман
Бытбылдыҡ, бытбылдыҡ...

Йырлап Ер торһа ла,
Бойоҡтоҡ, бойоҡтоҡ.
Тын ғына йоҡоға
Ойоноҡ, ойоноҡ.

"Тып!" та "тып!" төптәргә
Ҡойолдоҡ, ҡойолдоҡ.
Тупраҡлы гүрҙәргә
Уйылдыҡ, уйылдыҡ...

Йәш инек, йәм инек —
Ҡарт булдыҡ, юҡ булдыҡ.
Бер килеш йыр ғына:
"Бытбылдыҡ! Бытбылдыҡ!.."

6.04.1973.

## Яраланған бөгәл

Индейҙарҙың сиу ырыуы бар, —
Үҙ ерендә торор ауан юҡ:
Америка аҡ тәнлеләренең
Мылтығынан һынып ауған уҡ...

"Яраланған бөгәл" убаһының
Исеме бар, ә ил үҙе юҡ:
Америка иле үҙ иңендә
Сиуҙарын салған ҡасан уҡ!..

Сонгми, Хатынь, Лидице, Орадур
Ҡабатлаған сиу яҙмышын.
Ә барынан элек — Сейәнтусы,
Башҡортомдоң бәгер һағышы...

Урыҫ батшаһы ул — Тәфтиләүҙән
Башҡорт Сейәнтусын ҡырҙыртҡан.
Шул фажиға, күсеп ҡитғаларға,
Америкаға бит юл тотҡан...

"Яраланған бөгәл" убаһында
Сиуҙарҙың ята һөйәге...
Үткәс йөҙ йыл, ҡорал алып, быйыл
Даулай сиу тыуған төйәген!

"Яраланған бөгәл" убаһынан
Ата мылтыҡ — "янки" яғына.
Сиуҙарға яуа бомба күктән,
Яуа йәҙрә "бөгәл" тауына.

Ата-бабаларҙың убаһына
Яугир сиу ауа ҡанһырап.
Аҡшай күҙле АҠШ флагынан
Ку-клукс-клан күҙе ялтырай...

Бабаларҙың ҡанлы ҡәберенә
Бағып, сиу халҡы ант итә.
Һикһән өс йыл әүәл ҡанға сәсәп
Ауған ҡылыс ҡабат "ялт" итә!

Ҡанаттары һынһын "Фантом"дарҙың,
Танкыларҙың ҡатһын һындары:
Һура ҡындан ҡылыс сиу халҡы --
Ирек яулай ҡыҙ һәм улдары!

"Яраланған бөгәл" убаһынан
Күтәрә баш изге аруахтар.
Сейәнтусыларҙың ала ҡонон
"Азат донъя"лағы вариҫтар!

7.04.1973.

## Алһыу алма, йөнтәҫ ҡул

Алһыуланып бешкән һутлы алма —
Еркәйемдең йәнле ялҡыны.
Ҡусҡыл сәхрә ине ярты һы!
Көләс Ҡояш ине ярты һы!

Сәхрә менән Ҡояш биләменә
Йөнтәҫ йәпле бур ҡул үрелде.
Күсте алма уска... Йөнтәҫ ҡулдың

Күрмәгендә бысаҡ күренде...

Кереп батты бысаҡ ал Ҡояшҡа,
Йәшел сәхрә ярып юл тотто.
Ҡотһоҙ был ҡул алма алһыулығын
Картуф кеүек әрсеп ырғытты.

Ауҙы, сайрап, ергә ҙур спираль,
Дәһшәтле ҡул юлы артынан.
Ҡара саңға батып томаланды
Алма алһыулығы -- ал томан...

Ғәзиз Ерем! Һутлы емешеңдең
Һытып ҡанын, яһил бит тапай!..
...Алмаларҙы алыҫ баҙарҙарҙан
Ҡайта ине алып гел атай.

Ҡусты менән "күстәй" татый инек,
Алмаш-тилмәш һутын кимереп.
Һабағына тиклем һура инек,
Имсәк ҡапҡан йәндәй тилереп...

Башланғандыр, бәлки, шул алманан
Еркәйемә бәйләр юл башы.
Йәндә беҙҙең балҡый, балҡый һаман
Йәшел сәхрәм, алһыу Ҡояшым!

Алма һымаҡ әгәр йомарлатһаҡ
Һөмһөҙҙәргә йоморо Ер шарын,
Алһыу Ҡояш, ҡусҡыл сәхрәләрҙе
Картуф кеүек әрсеп ташлар ул.

Спиралдә ауған Ер ғүмере
Ғаләм саңы менән ҡапланыр.
Һөмһөҙ ҡулды ул саҡ кем ғәйепләр?
Кем алдында бысаҡ аҡланыр?..

6.04.1973.

## Сиктәр

**1**

Сиктәрҙе лә сикләй торған сиктәр
Алға һөрә, тиҙәр, замана.

Күҙ алдында сиктәр емерелеп,
Ике сит ҡул бергә ялғана.

Кисә бында ике дошман ине,
Аралары бөгөн береккән.
Ҡылыс һыҙған ҡыҙған ҡанлы сикте —
Ыҙан һуҙа торған ер иткән.

Ике сиктән ҡарпып ике карап,
Сикһеҙ Ғаләм-Күккә юл тота.
Орбитала бергә берегешеп,
Бер отсекта ҡулды ҡул тота.

Мөмкин түгел бөгөн берекмәҫкә —
Орбиталы юлдар түңәрәк.
Һыныҡ һыҙыҡтарҙың хәтәрлеген
Хәтерләйҙәр илдәр бергәләп.

Мәғәнәһен ерҙән юя бара
Эвклидтың үлсәм нормаһы.
Киң йөкмәтке ала дәүләттәрҙең,
Милләттәрҙең йәшәү формаһы.

Фекер тыуа: үҫә-үҫә донъя,
Юйылырмы хатта түңәрәк?
Формаларын ватҡан йөкмәткеләр
Сығырҙармы сиктән, түңәрләп?!.
.....................................................

2

Тик бер һорау: төшә ҡайҙан ҡырау?
Ерҙәнме лә әллә күктәнме?
Цельсий шкалаһын, ул төшкәндә,
Йылымы, йә һыуыҡ сирткәнме?

Бер үк сифат әгәр һыу тыңдырһа,
Бер үк сифат әгәр йылытһа,
Кәрәк булған ниңә был донъяны
Ер һәм Күккә бүлеү? Боҙ, утҡа?..

Әгәр телем — телһә бер үк телем
Мең тел телеменән үҙгәйһеҙ;
Бер иш булһа, ике тамсы һыуҙай,
Гөлгә гөл һәм тере йөҙгә — йөҙ,

Ерҙә ниңә ул саҡ Ҡояш кәрәк —
Төн сиктәрен ярып үтеүсе?
Ерҙә ниңә ул саҡ Хаҡлыҡ кәрәк —
Ғәҙеллекте байраҡ итеүсе?..

**3**

Атомдарҙың, һанап, кем сигенә
Сыға алған? Сикһеҙ ул иҫәп.
Әммә улар, бомба булыу өсөн,
Булыу зарур сикле ҡуш киҫәк.

Йәҙрәләрҙе сикле үлсәм ҡыуа,
Сикһеҙлектең ватып төрмәһен.
Бер күҙәнәк амеба ла хатта
Раҫлай сикле йәшәү формаһын!

Термойәҙрә энергияһын беҙ
Сикһеҙ ҡеүәт иттек түгелме?
Әммә сиген уның билдәләүҙе
Изге ниәт иттек түгелме?..

**4**

“Бүлгеслә лә хакимлыҡ ҡыл!” тигән
Ҡанлы ҡанундарҙы түңкәреп,
Штык менән сыйып Ер таңында,
Ғәҙел сик беҙ ерҙә үткәрҙек.

Тик шул сиктә алйып сикләнгәнгә
Тормош бирҙе һабаҡ еткелек:
Шикләнмәүҙәр үҙе — шиклелек,
Сикләнмәүҙәр үҙе — сиклелек.

Аҡ һәм Ҡара сиген юйып мәлйеү —
Көсһөҙҙәргә боҫор ек кенә.
Ғаләмдең дә хатта сикһеҙлеге —
Антисикһеҙлеккә сик кенә.

7.04.1973.

## Мәрҫиә

*(Сәгит Агиш яҡташымды ерләгәндә)*

**1**

Каруанһарайҙарҙан килдең үтеп —
Туҡ буйында тыуған шуҡ бала.
Әселәрен дала әременең
Бөркөп көлдөң әсе донъяла...

Илттең, әйҙәп, әҙәп каруандарын,
Урау-урау әрһеҙ юл үтеп.
Табаныңды үпкән бүтәгәләр
Ҡылғанланды, әсе көҙ етеп.

Көмөшләнде сикә ҡылғандарың,
Алтынларға инде юҡ сара...
Устарында илткән Ҡояш, Айын
Ҡустыларға бына туғара...

Илтешәбеҙ йөкмәп... һуңғы йөгөн,
Каруан йөрөмәҫ юлдан, юлсының.
Ҡылған остарына бара ҡойоп
Бер быуаттың әсе моң-сыңын...

...Тиртә тәме ҡырҡыу әремдәрҙең
Иҙел иңләп иҫкән елдәрҙән.
Елдәр, илап, әллә килә микән,
Китә микән әллә илдәрҙән?...

**2**

Тирбәләһең бына табутта һин,
Һөлгөләрҙән иңдәр киҫелгән.
Кемдер, һыҡтап, ҡайғы ҡайығыңа
Ырымбур әремен килтергән.

Бөркөп кәрен, үткер аңҡый әрем, —
Әселәрен һулап туйманыҡ.
Танһыҡ үлән — ергә мәңге килгән,
Китмәҫ мәңге, тиеп уйланыҡ...

Ҡоба тауҙың бейек ҡаяһында
Һуңғы йортоң — ҡатлы-ҡатлы таш...
Табутыңда әрем күҙкәйенән
Бара тамып әсе-татлы йәш...

Тыуғанда уҡ әсә һөтө менән
Һеңде йәнгә танһыҡ ул әсе.

Беҙ ҡалабыҙ илдә — әсе елдә.
Һин китәһең... китмә, китмәсе!..

Башын эйгән Урал ҡайындарын
Усың менән һыйпап тулат бер.
Һын ҡатырғкыс ҡәбер ҡәҙерҙәрен
Селпәрәмә ит тә илат бер!

Тыңламайһың... Телеп яурындарҙы,
Һөлгөләрҙә табут сайҡала.
“Юҡтарһығыҙ әле әселәрҙе,
Һыҡтарһығыҙ мин юҡ арҡала...”

Үҙең менән бергә йөҙә әрем...
Әселәрен бөркөй елдәргә...
Әрем тәме әллә китә микән,
Күсә микән әллә беҙҙәргә?..

23.05.1973.

## Альенденең ал күлдәге

*О Чили!*
*Солох Төрөпкәһен тартыр мәлең*
*етер ҡасан?*
Пабло Неруда.

Аҡ тау һынлы Халыҡ Президенты,
Аҡ күңелле Сальвадор Альенде,
Төҫ иткәйнең тыуған Чилиеңә
Һөйөп кейгән ап-аҡ күлдәгеңде!

Аҡ тау һымаҡ ҡалҡып һөйләй инең
Трибунанан, тауҙар араһында:
Һары йөҙлө шахтер һындарынан
Тора ине илең тауҙары ла.

Һары йөҙлө шахтер балалары
Аҡ-һөт һорап үргә һонолғанда,
Күңелеңдең ағы тула ине
Сабыйҙарҙың соҡор ҡулдарына.

Аҡ төтөнөн бөркөп тарттың да һин
Солох Төрөпкәһен был сал ерҙең,

Аҡ иленә — тыуған Чилиенә
Аҡ киләсәк даулап күкрәк кирҙең.

Баҡыр королдәре боғаҙына
Баҫҡан саҡта йәнсеп, аҡ тау булып,
Тишә атты ап-аҡ йөрәгеңде
Фашизмдың ҡара фетнә ҡоло.

Аҡ күлдәктән бына ал ҡан бәрә,
Ал ҡан тама һыуға: чи-ли! чи-ли!..
Ҡан ауазы итеп ил исемен
Урай Ергә бөгөн һағыш еле...

Чи-ли...
Чи-ли... —
Ҡаның аға, Чили,
Һулҡылдауың — Ерҙең ҡолағында.
Донъя кимәленән ташып яфаң
Тула бөгөн нәфрәт улағына.

Баҡыр рудниктарҙан бәргән ҡандар
Океан булып ярҙан ишелә.
Ерҙең ҡанын пуля менән ҡоя
Мундир кейгән ҡанһыҙ кешеләр.

О ал ҡандар! Ярһыу йөрәк ҡаны
Президенттың, шахтер, ковбойҙың!
Ниндәй әсе уның тәмен татыу —
Быны бөгөн бөтөн Ер тойҙо.

Индейҙарҙан килгән сал тупраҡта
Ҡанға батып ауҙы тыныслыҡ.
Солох Төрөпкәһен тартҡан илгә
Батып инде фетнә ҡылысы.

Океан буйлап ята ул төрөпкә —
Чили һыны ал ҡан эсендә.
Альенденең саҡҡан сағыу утын
Ҡалдырмаҫҡа итеп көсөндә,

Ваҡ генерал баҫҡан Кордильераға —
Арҡаһына ҡанлы Чилиҙың.
Мундир кейгән хунта түгел ләкин,
Икенсе һын иңләй ер йөҙөн!

Ҡалҡа бара ул һын ҡан эсенән,
Хунталарҙы хурға ҡалдырып.
Андтарыңдан бейек тора баҫып,
Солох Төрөпкәһен яндырып.

Бер ҡулында һындың сабый бала —
Килер еңеүҙәрҙең ил ҡояшы.
Тик алланған ғына был ҙур тауҙың
Сабый күңелеләй аҡ күлдәге
Һәм сал башы...

Аҡ тау һынлы Халыҡ Президенты,
Аҡ күлдәкле Сальвадор Альенде,
Төҫ иткәйнең тыуған Чилиеңә
Һөйөп кейгән ап-аҡ күлдәгеңде.

Күрәһеңме, ал төҫ яңа заман
Һин ятраҡан тыныс ул аҡ төҫкә:
Халҡың ҡаны төҫлө ҡаның һеңгән
Алһыу күлдәк — бына һинең өҫтә!

Аҡ-ал шәүләң, иңләп китға йөҙөн,
Ҡитғаларға бөгөн күренә.
Халыҡтарҙың нәфрәт океаны
Фетнә боғаҙына үрелә.

Юҡ, һүнмәгән Солох Төрөпкәһе —
Әүерелгән ләүкеү ялҡынға.
Бикфорд-шнур булып гөрһөлдәр ул
Генералдың табан аҫтында!

Альенденең ҡыҙыл ҡанын алып,
Кордильера һура ғәҙел ут.
Ал күлдәкле Хаҡлыҡ Президенты
Ҡитға өҫөн һаҡта һәр минут!

15.09.1973.

## Эшсе исеменә мәҙхиә

*Чилиҙағы фашистар хунтаһы башлығы Пиночет...*
*"эшсе" һүҙен тыйырға әмер биргән.*

Гәзиттәрҙән.

**1**

Сиктәр артындағы эшсе туған,
Сиктәр аша һиңә өндәшәм!
Ҡулға ҡул тотошһаҡ — беҙ йәшәрбеҙ,
Йәшәһәк беҙ — Ер һәм Күк йәшәр!

Ерән Иблес ерән бығау менән
Быуған саҡта ярты Ер шарын,
Һинең ҡайғы — минең уртаҡ ҡайғым,
Һинең дошман — минең дошманым!

Күҙләшһәк тә океан аша ҡарап,
Һөйләшһәк тә төрлө телдәрҙә,
Сүкеш беҙҙең һуға бер һандалға,
Тибә йөрәк бер үк ғәмдәрҙән!

**2**

...Шаулай Өфөм. Шаулы майҙандарҙың
Уртаһында баҫып мин торам.
Трамвайҙар елә, троллейбустар...
Йылғаларым аға шылтырап...

“Һин кем?” тиеп, күҙгә баға донъя,
Бирәм яуап ғорур: Кешемен!
Ер шарына йондоҙ сәселдереп,
Һуғып торам һандал —
Эшсемен!

Ҡалам геүләй, дөйөм бер көй көйләй, —
Һуға сүкеш эшсән халыҡтар.
Эшсе ҡулын ҡотлап тыуа ергә
Донъялағы барлыҡ байлыҡтар!

Бешә ҡалас — быжыр-көләс ҡалас —
Урып Ураҡ, Сүкеш уңдырған.
Завод менән баҫыу эшсеһенең
Эшен данлап сыңрай мең ҡылдар!

Йөрәк цехым — һүнмәҫ ырыҫ утым.
Көнө Ерҙең көйрәй аңымда.
Ер һандалы сыңлай күкрәгемдә,
Ерем пүлсе тибә ҡанымда.

Үҙ ҡулымда тотоп заман зыңын,
Ер яҙмышын яҙам мин — Эшсе.
“Эшсе” тигән бөйөк вазифанан
Ырыҫлана ерҙә һәр Кеше!..

**3**

Океан артындағы хаҡ туғаным,
Донъяның беҙ — ике ярында.
Ә шулай ҙа, уртаҡ күңел ярын
Берләштерә беҙҙең яурындар!

Ут ләүкеткән йөрәк усағында
Киләсәге Ерҙең ҡуҙрай.
Һалмаҫ өсөн үрткә Планетаны,
Уяулыҡты беҙҙең ул һорай!

Маҡып бергә Хаҡлыҡ күрегенең
Һалмауырын, берҙәм күргейек.
Йондоҙҙарын кеше бәхетенең
Ҡуш сүкештән ҡотлап сүкейек!

Сәсрәһен ут, ялтлап, һуҡҡан һайын,
Ҡунһын, дөрләп, йондоҙ асманға.
Йырлаһын Ер — Эшсе яурындары
Күк ҡабағын киреп асҡанда!

**4**

Ер шарына аяҡ кирә баҫып,
Һандал һуғып торам —
Эшсемен.
Һуҡҡан һайын, төнөн ҡитғаларҙың
Яҡты таңға борам —
Эшсемен.

Ер тажына Ураҡ һәм Сүкеште
Беркетергә тыуған
Эшсемен.
Таң аштырып, хеҙмәт тантанаһын
Күлкетергә торған
Эшсемен.

Кешелекте көрән үрмәксенең
Ауынан ҡотҡарам —

Эшсемен.
Таш быуатҡа тартҡан фашизмды
Тамуҡҡа атҡарам —
Эшсемен.

Һелкенһәм бер, елкетәм Ер шарын,
Уятып йоҡонан, —
Эшсемен.
Тамырҙарым тарих төпкөлөндә,
Ҡояшҡа ынтылам —
Эшсемен.

Кешелекте бағам, кейендерәм,
Тамағын туйҙырам —
Эшсемен.
Һабандарҙы — ҡылысҡа, ҡылысты
Һабанға ҡойҙорам —
Эшсемен.
Эшсе тигән бөйөк Кешемен!

**5**

...Ҡалам геүләй, берҙәм бер көй көйләй —
Мәҙхиәләй көнөн бар халыҡ.
Эшсе тигән исем — ғорур есем —
Йөрөр, йөрөр мәңге маҡталып!

Эшсе тигән исем!..
Туҡта!
Ләкин...
Ваҡыт мәллә кире әйләнә?..
Бар икән, бар — Эшсе исеменә
Кәфен теккән вәхши бәндәләр!

Бөйөк исем бөлһөн, үлһен өсөн,
Әжәлгә эш ҡушҡан Пиночет.
Сантъягоның эшсе урамдарын
Пүлә менән йышҡан Пиночет...

Эшсе теккән йылтыр итек менән
Буҫтау мундир — хунта иңендә.
Эшсе ҡулы һалған икмәк ашап,
Һимергән ул эшсе илендә.

Эшсе ҡулы ҡырҡҡан аҡ ҡағыҙға

Ҡаралаған мәкер планын.
Эшсе ҡойған ҡылыс тағып билгә,
Ҡанлы парадына сыҡҡан ул...

Балта тотҡан һыны “горилла”ның
Кордильера буйлап аҙымлай.
Ҡанлы итек иҙә Чили тәнен —
Ҡалҡа ҡайғым, Урал тауындай!..

**6**

Гүзәл Өфөм! Хаҡлыҡ төйәгендә —
Ҡот-дағалы ерҙә мин торам.
Тарихтарға талып — аҡыл алам,
Донъяларға бағып — уй ҡорам.

Сал Уралым — Ватан тимерлеге!
Борондан беҙ — эшсе төйәге!
Суйын суйырҙары менән бергә
Бабаларҙың ята һөйәге...

Эшсән ҡорға яугир Заман килгән,
Услап осҡон, быуат башында.
Шул осҡондан ялҡын дөрләп ергә,
Йөрәк домналары шашынған.

Сатрашланған яры биш ҡитғаның
Ал йондоҙҙоң хаҡлыҡ ярына.
Белә бөгөн Эшсе Ғәли йәнәп:
Уның ҡулдан -- ерҙә бары ла!

Үҙе ҡойоп биргән Ураҡҡа ул
Берләштерә ҡорос Сүкеште.
Икмәк менән ҡорос тоташҡанда
Биртенәсәк түгел ил, кеше!

Хаҡиҡәттең алмас бишеге бит
Эшсе ғәмәлендә тирбәлә.
Һуҡҡан һайын берҙәм Ер һандалын,
Нахаҡлыҡтың теле көрмәлә.

Алдау-йолдау, хөсөт һәм ҡурҡытыу
Ауа ҡыйрап: Эшсе — нур-ҡылыс!
Эшсе көткән ерҙә — Хаҡлыҡ түрҙә,

Ҡурҡыныстар — түгел ҡурҡыныс!

Күрһәк тә көн төрлө ҡитғаларҙа,
Ырыҫ уртаҡ — Хаҡлыҡ ярында.
Бер үк күктең уртаҡ бер Ҡояшын
Терәп ҡалҡа беҙҙең яурындар!

Соэтоның тәрән шахталарын
Сыҡҡас ярып Эшсе фекере,
“Һындырылған” ҡара Африка был —
“Эшсемен!” тип ғорур иң кирҙе!

Иран шаһы — шайтаны Иблестең, —
Долларҙарын йөкмәп елкәгә,
Утлы таба һымаҡ Планетала
Боҫор ярыҡ тапмай интегә:

Иран Эшсеһе ул бейетеүсе! —
Ярып аңын, синфи иҫ кергән.
“Ҡалъя тығып йом ауыҙын”, тигән
Ҡанундар бит инде иҫкергән!

Ҡора Хаҡлыҡ бөгөн үҙ хөкөмөн
Хатта ерән Иблес өңөндә.
Вьетнамда “бысраҡ һуғыш”тан һуң,
Дер-һелкенә Аҡ йорт бөгөн дә!

Күтәрҙе баш ҡорос ҡойоусылар —
Небоскребтар торҙо ҡалтырап...
Ҡаты Америка ҡоросонан
Эшсе ихтияры ҡатыраҡ!

**7**

Ошондай хөр Эшсе итеп үҙен
Тоймаһын, тип, беҙҙәй хеҙмәтсән,
Әлмисаҡтан бара ерҙә тартыш,
Һәм тартышлы булыр киләсәк.

Һәм мин, Эшсе — Хаҡлыҡ байраҡсыһы, —
Күрһәм дә көн азат, көр илдә,
Уйлап һеҙҙе, сит ил туғандарым,
Ете торам, һыҙлап, һәр төндә...

Тик мин беләм: миллион йөрәктәрҙә —
Хаҡлыҡ йөрәгенең тибеше.
Хаҡлыҡ ҡына булһаҡ, беҙ — Кеше!
Хаҡлыҡ ҡына булһаҡ, беҙ — Эшсе!

Донъяны бит — түгел һыу-океан, —
Фекер океаны айыра.
“Эшсе” тигән беҙҙең уртаҡ исем —
“Фекерҙәш”кә бөгөн тиң тора!

**8**

Сиктәр артындағы Эшсе туған!
Сиктәр аша һиңә өндәшәм!
Үҙ тирәңә ҡарап уйлан әле,
Үҙ көсөңдө әгәр белмәһәң!

Бөтәһе лә беҙҙән,
Тора беҙҙән —
Бер һандалға берҙәм һуғыуҙан!
Тыуыр ҡылыс, йә — һабан дөрәне,
Беҙ теләгән һайын, ҡот-ҡулдан!

Дошмандарын бары салыр ҡылыс,
Дуҫ күкрәккә барып ҡаҙалмаҫ.
Билге беҙҙең шуға — был туғанлыҡ!
Туғанлыҡтар беҙҙең — саф алмас!

Алыҫ дуҫым! Һал үҙеңә күҙең:
Ниндәй шанлы, моңло, нурлы һин!
“Эшсе” тигән бөйөк исемеңде
Мәңгелеккә илтер йырлы һин!

Тыуған ерҙе — ҡара тупрағынан,
Эшсән ҡулды ерҙең төҫөнән
Булмағандай йыуып, кешелекте
Мәхрүм ҡылып булмай Эшсенән!

Сит илдәге минең Эшсе туған!
Беҙҙеңсә бит Ер-шар әйләнә!
Берҙәм һуҙған беҙҙең дәртле йырҙан
Нахаҡлыҡтың теле бәйләнә!

Иҫке донъя үҙе дөрләп яна —

Ыҫлай алмаҫ нурлы есемде.
Хаҡлыҡҡа мин ҡанат итеп ҡуям
“Эшсе” тигән ғорур исемде!

**9**

...Ил генәмдең азат, аҡ сыуағы! —
Ҡиммәтлерәк һинән нимә бар?
Ҡояш нуры ҡойған бәрәкәткә
Тулышҡан ер, һыуҙар, һауалар.

Ҡалҡа ужым ҡусҡыл — ҡырҙарымда,
Йылдарҙың мул, ҡотло игене.
Һаумал-ҡымыҙ таша табындарҙа —
Һөйгәндәргә килер һөйгәне.

Баҫа тәпәй йәнә — яңы быуын,
Шартлауҙарҙан азат, һил ергә.
Дары еҫе китә тупраҡтарҙан,
Икмәк еҫе һеңә тимергә.

Ҡотлап шуны, зыңлай ҡырҙар заңы!
Мартендарҙан ҡорос ағыла!
Эшсе синыф баҫҡан үҙ посына —
Тыныслыҡ һәм Бәхет һағына.

Эшсе һуға, һуға ҙур Сүкешен —
Ҡояш һыҙығына ҡалҡа Ер.
Сигенеп төн, бирә юлын көнгә,
Бешә икмәк, күкрәп тыуа йыр.

Ураҡ менән Сүкеш берләштереп,
Ҡауыштыра Бәхет кешеләр.
Башаҡтарҙы алыҫ йодоҙҙарға
Тоташтырғыс ҡөҙрәт — Эшсе бар!
Эшсе атлы бөйөк Кеше бар!

4.11.1973.

## ТӨРТМӘЛЕЛӘР

**Марат Кәримовҡа**

“Баҫты, — тиеп, — проза зары(й)”,
Марат ҡарый,
Арый-арый,
“Ағиҙел”гә этә мемуарый.
Әйтә үҙе: “Ярый-ярый!
Сыҡһын сыңрап... гонорарый!
Һумдар һанап бармаҡ арый,
Ә шулай ҙа ярый-ярый!”

**Фәрит Иҫәнғоловҡа**

Иҫәнғолдо иҫнәмәйсә,
Кешнәмәйсә уҡыйыҡ!
“Ир-егеткәй менән ат...”тан
“Баш”ты алыу бик ҡыйын.
Тик... “ҡыйын”лы ҡыйыны ла
Булып ҡуя тик уйын...
Уйын әрмис — не воин...

**Назар Нәжмигә**

Назар Нәжми, йырың әҙме(й)? —
Пьеса йәнә яҙаһың.
Сәлдермәккә гонорарый,
Сәхнәләнеп аҙаһың...
“Баллада”ңдың “бала” моңон
“Гармунсы дуҫ” ҡаҡмаһын.
Ҡаҡһа ҡаҡһын, тик авторын
Суфлерлыҡтан һаҡлаһын!..

**Шакир Янбаевҡа**

“Зәңгәр сатыр” ҡапҡаһын
Тәнҡитселәр ҡаҡмаһын.
“Йөрәктау текәһе”нән дә
Тәнҡит ыуы аҡмаһын.
Тәнҡит ыуы аҡһа аҡһын,
Йылан ғына саҡмаһын.
Өф-өф, дуҫтар яҡлаһын!

**Гөлфиә Юнысоваға**

Биткәйҙәрең алһыу алма,
Ирендәрең ал сейә —
Бешкәндәрен ҡапһаң үҙең,
Тәнәйҙәргә ни тейә,
Гөлфиә?..

"Тәнәйҙәрҙең теше юҡ ул,
Ҡамашмаҫтыр һис", — тиә;
Бешмәгәне менән һыйлай —
Китап туйлай
Гөлфиә...

**Тимер Йосоповҡа**

"Алтын туҙан"ын Ҡояштың
Ҡаҡтым-һуҡтым, туҙҙырҙым.
Тутығынан тимеремдең
"Алтын" шиғыр ҡойҙорҙом,
Күҙегеҙҙе ҡыҙҙырҙым!
Ҡыҙҙарҙан да уҙҙырҙым!

**Нәжиб Асанбаевҡа**

Мин ул — Нәжиб Асанбай!
Йәшәйем һис зарланмай.
Телем ярлы тиһәләр ҙә,
Театральный кассам бай —
Аншлаг дуҫ арсалай,
Сөнки дуҫтар ҡурсалай...

**Рауил Бикбаевҡа**

Тәнҡитсе, шағир Бикбай
Ҡасан ял итә, йоҡлай?..
"Автобиография"һын
"Лирика" менән туплай
(Үҙтәнҡитенән ҡурҡмай!).
Йоҡлай, тигән нәүбәттә лә
Докторлана тотлоҡмай.

Тәнҡитселәрме һуҡмай?
Әллә уларҙы туҡмай?..
Вәт Туҡай!

**Мостай Кәримгә**

“Ташлама утты, Про...” — тип,
Сәхнәләрҙе зырлаттың.
Сырағыңдың серле утын
Прометейҙан урлаттың.
Прометей тик: “Промотал!” — тип,
Утты бирмәй йөҙәтә.
Урал батырға өндәшһәң,
Бирер ине йөҙләтә.
Әммә... әммә... “сикләнеү”ҙәр,
Шикләнеүҙәр шөрләтә
(Прометейҙың бығауҙары...
Сыңлауҙары... бигерәк тә...)
Их! — ут етмәй күкрәктә!

**Ғилемдар Рамазановҡа**

Урам аҙған, уф! —
Рамазануф
Шиғырҙарын ҡысҡыра.
Календарҙең һәр көнөнә
“Шығыр” шығып тик тора.
Әллә йөрәк, әллә шөһрәт
Уға шулай бойора...

**Ғәйнан Әмиригә**

Килә Ғәйнан, биреҢ майҙан!
Һәйкәл ҡойһон йырынан.
Постаментын — “Мораҙым”ын
Төҙөп ҡуйһын йор ғына,
Әтү бронза һыуына!

**Әнғәм Атнабаевҡа**

Атнабайҙың аҙна һай —
Шиғриәткә ваҡыт юҡ.
Драмалап-ҡорамалап
Әтмәләргә өлгөрә:
“Ут”ын өрә лә һүндерә,
Әллә шиғри такт юҡ? —
Шөһриәткә бәхет юҡ.

**Шәриф Бикҡолға**

Шәриф Бикҡол, шуруй бик мул:
Шиғыр, пьеса, (ы)роман...
Тфү-тфү, муллыҡ мөлкөп
Йүнһеҙләнмә, уҙаман!
Туҙынаһың бик яман!..

1973 (?).

# 1974

********************

## Дауыллы державам

Дауыллы державам, йәшлектең ялҡыны,
Ҡырҡынсы ҡырламдан һиңә мин өндәшәм:
Тағы ла ҡырҡ ҡырла ҡомарлап саҡыра —
Мөхәббәт, йәшлекһеҙ миңә юҡ, юҡ йәшәү!

Мөхәббәт һәм йәшлек — ялҡындың ялҡыны —
Ҡушаҡлап, ҡанатлап сорғоғоҙ ғүмерҙе!
Тыуған ер күгенә күңел көр үрелә —
Тағы ла менермен, менермен мең үрҙе!

Тик, беләм, был ерҙә иңдәрҙән ут-ир ҙә
Ҡартайыу ҡанунын ҡыйратып ата алмай:
Аймылған йәшлеген — байыусан ҡояшын,
Ҡайтарып кирегә, бирегә тарта алмай...

"Мөхәббәт һәм йәшлек — был ниндәй ят ҡунаҡ?!" —
Тип тибеп ебәргән йәндәр ҙә йәнә бар...
Дауыллы державаң ҡалһа тик телеңдә,
Төнәргә "тегендә" төрләнә донъялар...

Дауыллы державам, йәшлектең ялҡыны,
Мин ләкин ут һаман! — мин һиңә өндәшәм:
Йөкмәнеп ер ҡотон, күктәргә юл тоттом —
Һиңә лә, миңә лә айырым юҡ йәшәү!

Күмерҙәй сәстәрем көлдәрҙәй бәҫәреп,
Йондоҙҙар саңынан ҡоларыу алһа ла,
Ғаләмдең һалҡынын сырмап ер ялҡыным,
Һаҙағай ҡабынып мин ҡалҡҡан арҡала.

Һәм ерҙе, күктәрҙе күркәмләр һаҙағай —
Йыһанға йылтырар йән уйған ут-тамғам.
Һәр ҡалҡҡан ҡырламдан әйтермен мин һаман:
"Мөхәббәт һәм йәшлек, һеҙҙән ут, ҡот алам!"

13.01.1974.

## Трамвайсы ҡыҙ

Сәселә йыр сәсрәү сымдарынан —
Сыңрап ҡала талир тәңкәләр.
Туҡталыштар һанап барам баҫып,
Күҙем терәп алғы тәҙрәгә.

Килешмәйҙер, бәлки, бындай зауыҡ
Ҡырҡын уҙған ҡырҡыу кешегә...
Нишләйем һуң! — йәп-йәш трамвайсы ҡыҙ
Текте йәнде тәҙрә төбөнә.

Елкәһендә ҡалын толом юлы —
Кисә генә сәсен киҫтергән.
Модный булһын, тиеп, бөҙрәләнеп,
Шартына ла тамам килтергән.

Ирендәре — алһыу гөл бәбәге,
Ике бите — Көн һәм Ай ғына.
Нескә билен бөрөп-салбарланып,
Ҡара ҡарлуғастай талпына.

Юлым осон һаман яҡынайтып,
Ҡыҙ тауышы йәнгә моң һала.
Ерҙә түгел трамвай, ә күктәрҙә —
Йондоҙлоҡҡа кереп туҡтала.

Сыңрап ауа йондоҙ-тәңкәләре
Көмөш Ғаләм — аҡ Ҡош Юлынан.
Көмөш ломын тотоп ырғый ҙа ҡыҙ,
Көмөш рельс Көнгә борола...

Эй еләбеҙ көмөш рельстән беҙ,
Аҡ йыһанды төрөп күңелгә!
Поезыбыҙ дөрөп бара инеп
Аҡлыҡ тынҡысланған түннелгә!

Тарта һурып йәнде аҡ ҡомары —
Һушым китеп, ҡыҙға ҡарайым:
Күҙҙәренең шәкәр аҡлығынан
Ике туннель баға ҡарайып.

Туннелдәрҙең төпһөҙ, тере уты
Арбай, арбай йәнде үҙенә...
Хуш бул, Ҡояш!
Тарта ҡара Ерем
Башҡорт һылыуының күҙенән!

12.01.1974.

## Ташсы һылыу

“Ташсы һылыу, сереҢ ассы, һылыу:
Күңелемде ниңә тартаһың?
Менә алмай бейек таш һырыңа,
Гармунымды ярһып тартамын.

“Ғәлиәбаныу” моңон гармун моңлай,
Барам, барам һиңә һыр буйлай.
Үтәмен дә урап таш нигеҙең,
Көтәм, ҡарап үргә, бер талай.

Ишетмәйһең моңло гармунымды,
Иш итмәйһең һолло үҙемде.
Кирбес теҙә-теҙә бейегәйеп,
Йәшерәһең минән йөҙөңдө.

Ташсы һылыу, сереҢ ассы, һылыу:
Күңелемде ниңә тартаһың?
Тартаһың да, һануз бейегәйеп,
Ут-ялҡынға мине атаһың?..”

Сыңрап көлдө, үрҙән ишетелде:
“Ураy юлдар оҙон, егетем.
Нигеҙҙе һин урап-әйләнгәнсе,
Һигеҙҙе мин бурап өлгөрҙөм.

Йәшермәйем һинән йөҙөмдө мин —
Йәшенеп бит һинең йөҙ ҡала!..
Һинең гармун ише гүзәл гармун
Бармы икән әле донъяла!

Тик белмәйем: ниңә талъяныңды
Илатаһың, моңлап, ете төн?..
Тарт та яугир көйөн, булып Хәлил,

Тәҙ(е)рәнән һикер, егетем!

Мин ҡул бирһәм, кәрәк һиңә ерҙән
Аҡ таштарҙы теҙеп үтергә”.
“Аҡ таштарҙы теҙһәм, ҡулың бирһәң,
Ары табан нисек итергә?”

“Балғаларҙы, баплап, алмашырбыҙ,
Ике ташты парлап һалырбыҙ”.
“Ике ташты парлап тоташтырһаҡ?..”
“Ҡыйыҡты ла ҡушлап ябырбыҙ.

Ҡояш нурын ҡуша бәйләй алһаҡ
Ҡауыштырып япҡан түбәлә...”
“Туҡта, һылыу, балға балда, һылыу!
Башҡаларға серең һөйләмә!”

12.01.1974.

## Тоғролоҡ

Биш йыллыҡтың ярһыу домналары
Йөрәгемдә кеүек янамын.
Кисәгенән биш ҡат ярһыуыраҡ
Егетлектәр һорай заманым.

Мөмкин түгел бөгөн илде һөйөү,
Ил йөрәге булып янмайса.
Мөмкин түгел бөгөн байраҡ илтеү,
Заман йөгөн йөкмәп алмайса.

Иген ҡырын тирткән һәр туҡ орлоҡ
Ҡулдан минең башаҡ тиртмәһә,
Ялҡын бөрккән завод һулыштары
Ҡаным аша ялҡын өрмәһә,

Ниңә кәрәк ерҙә егет булыу,
Ил паспортын йөкмәп йөрөтөү?
Егетлек ул — боҙҙан ут сәсрәтеү,
Егетлек ул — таштан йыр сиртеү!

Теләй йөрәк Данко йөрьәтлеген
Йөкмәп алған ерсән эштрҙә;

Яҡшы менән яман араларын
Выждан үлсәүендә үлсәргә.

Сабый ҡапҡан икмәк валсығынан —
Карапҡаса Ғаләм юлында,
Тартым көсөн Ерҙең, кереш тартып,
Тоторға мин тейеш ҡулымда!

Тыуған өйгә генә түгел сөнки,
Тулай Ергә бөгөн мин — терәк.
Булһын Ватан минән тағы ла бер
Йондоҙ каратына көслөрәк.

Кендек киҫеп, бәхет биләүләгән
Ил-әсәгә тоғро һәр кеше
Йөрәк менән сыйып күк көмбәҙен,
Ҡабыҙырға йондоҙ тейешле!

1.03.1974.

## Ырымбур — Быҙаулыҡ поезында

Уралымдан олаҡмаҫым элек,
Уралымдың һағынам таштарын.
Илдән иләнеүҙән һаҡла, Хоҙай,
Ир-егеткәй, атҡай баштарын!

Оҙон юлдан “оҙон аҡса” һурмыш —
Әллә нимә тип тә уйлаһын.
Мин, йөрәген бысаҡ бысҡан аттай,
Кешнәп-кешнәп килә илағым.

Табанымдан елгә ҡубарыла
Уралымдың һуңғы юл саңы.
Үҙем дә мин әллә ошо мәлдә
Туҙанланып илдән осаммы?!.

6.09.1974.

# 1975

**********************

## Йәш быуынға

Йәш быуын, йәш быуын,
Һәр ваҡыт бул алда!
Бир өлгө уҡыуҙа,
Хеҙмәттә һәм ялда.

Бөгөнгө эштәрҙе —
Ҡалдырма иртәгә.
Өлгөрлөк уңышҡа
Этәрә, этәрә!

Маҡсатың юлында
Ел, еңдәр һыҙғанып.
Иҫкергән иҫһеҙҙең
Ҡой саңлы туҙанын!

23.01.1975.

## Еңеү

Егерме икеһе ине көндөң —
Тулған Айлы, йәмле июндең.
Тыуған илем игә ине гөлөн
Матурлыҡтың һәм саф һөйөүҙең.

Шул пак таңда Көнөм, батып ҡанға,
Сыҡты, әрнеп, ал ҡан эсенән:
Дүрт бысаҡлы фашист әүернәһе
Йөрәгенә Көндөң сәнселгән.

Ер йөҙөнә аға ҡан даръяһы,
Йәрәхәттән Ғаләм “аһ!” ора.
Ер-әсәбеҙ, һалып әсе оран,
Балаларын яуға саҡыра...

Алмас ҡылыс таҡты ир-егеттәр,
Автоматын аҫты иңенә.
Еңмәйенсә кире ҡайтмаҫҡа, тип,
Иттеләр ант Тыуған илемә.

Туй күлдәге кейгән һылыуҡайҙар
Ҡыҙыл Айлы яулыҡ бәйләне.
Туй таҫмаһы таҡҡан тройкалар —
Тачанкаға китте әйләнеп...

Миллиондар уҙҙы "марш" атлап, —
Көнбайышта булды күҙҙәре.
Күк Волганан һоро Эльбағаса
Мөһөрләнде утлы эҙҙәре...

Бөгөнгө һәм тыуыр быуындарҙың
Көнөн һуйған яуыз теҙ сүккәс,
Фашист әүернәһен, ҡойоп көлөн,
Ырғыттыҡ беҙ шаҡшы сүплеккә.

Европаның йөрәк тәңгәленә
Ҡалҡты ғорур Ватан һалдаты.
Иҙә баҫып әжәл үрмәксеһен,
Саф сабыйҙы Көнгә ҡаратты.

Уң ҡулында — һынмаҫ алмас ҡылыс:
Биләүҙәргә дошман киҙәнмәҫ!
Һалдатыбыҙ йыҡҡан ҡара һөлдә
Сүптә серер! Хөкөм үҙгәрмәҫ!

23.01.1975.

## Аҡ шиғыр

### 1

Ҡусҡыл үләндәрҙең телен беләм —
тартынмайҙар улар минән,
һөйләшәләр гелән:

"Сыҡтым, шытып, каска түбәһенән..."
"Ергә һеңгән мылтыҡ көбәгенән..."
"Ҡылыс йөҙөн үтә тишеп..."
"Һалдаттың баш һөйәгенән..."

“Гүргә ҡосаҡлашып кергән
Ике мөхәббәттең йөрәгенән...”

Мин үҙем дә инде йөҙөмдән
үлән тишеп сығыр ҡорға етеп киләм...

**2**

Өйөм мөрйәһендә күрәм таңдан
ал ҡан —
ҡанаттарын ҡаға байраҡ,
“ялп-ялп”...

Яуҙа ауған туғандарҙың алһыу ҡаны
тыуған йортка ҡайтҡан
уянып,
болоттарға буялып.

Һәм ул флаг тыныс ҡаламдың
Ҡыйыҡ баштарында елберҙәй,
Ерҙең күсәрендә елберҙәй —
Көнбайышҡа ҡылысланған флюгерҙәй...

Һәм ул, ҡанмаç ҡон-киçәтеү булып,
ергә-күккә тулып,
Европаның ҡунған күкрәгенә —
һынған әүернәнең тупрағына...

**3**

Аҡыҡ көплө тере Көн нурынан —
аҡ һөйәндән төҙ һап яһаным.
Эшсе дуçым ҡойған ҡорос перо —
йырлап торған ошо перо-көрәкте мин
шул аҡ Ҡояш нуры менән һапланым.

Ҡарҙан сыҡкан ҡара Планетаға
яҙам йәшел шиғыр, “көрәк” таштырып,
ҡитғаларҙы бергә тоташтырып...
Шаштырып...

Яҙғы йырҙың йәшел ҡыяҡтары
штыкланып шытҡан һәр төбәктә —
ҡыҙыл сәскә атыр шом-көбәккә...
Моң-көбәккә...

“Көрәк” башын “ер”гә батырып
яҙам, яҙам:
“Дзин-дзин-дзин!..” —
Был мин һуҙған аҙан!

“Көрәк” һабым йондоҙҙарға бәреләә,
төн түңкәреләә,
көн шәйләнә.
Тимәк,
Ер әйләнә!..

**4**

Ҡалҡты һәйкәл, ярып ерҙең көбөн,
терәп табан гранит ҡаяға:
бронза күҙе менән тишә ҡарап,
күк көмбәҙен егет таяған.

Табан аҫтына мин инеп яттым
кирем ботло бронза егеттең.
Тере һындан — бронза һындар өҫтөн:
минән был һын, ҡара, күпме мөһим!..

Һәм буласаҡ шулай: теге быуын
был быуындан торор ҡалҡып бер башҡа.
Көнө килер: беҙҙең дә бит кемелер
әйләнәсәк бронзаға йә ташҡа.

Асфальт, кирбес ҡатламдарын емереп
ҡалҡынырбыҙ беҙ ҙә һеңгән еребеҙҙән.
Һәм шатланып йәшәү байрамында гиҙгән
быуындарҙың башы аша бағырбыҙ:
ут эсенән ошо Ерҙе алып сыҡҡан,
әжәлдәрҙе бәреп йыҡҡан
быуын була, эйе, бахырһыҙ!

**5**

Минең күҙем менән көнгә бағa донъя.
Ике күҙем —
ҡара Ер шарының ике яртыһы,
керпектәрем ерҙең ҡара ҡурпыһы —
Ер ғәмдәре, ҡайғылары, шатлығы...

Ете ҡат ер үтә күрә Ҡояшын,
океан төптәренән — күктең Ҡош Юлын,
еребеҙҙең осоп барған юлдашын;
ә Ҡояшта — аҡ бәхеттәр шытымын,
һәр сабыйҙың әсә һөтө йотоуын —
саф ауыҙын,
һәм түшенә тамған аҡыҡ-ыуыҙын;
хатта дегет мискәһенең төбөнән
үтә күрәм ерҙең бәхет йондоҙон!
Беләм, беләм, --
Өҙөләсәк минең көн-оҙон…

Яҡынайҙы ана шулай йыһан менән минең арам.
Күҙем үтә үлән тишеп сығыр ҡорға етеп барам...

1.04.1975.

**Йәй көнө**

Эй йәйем, яҡты йәйем, йәмле йәйем!
Күк көмбәҙле, йәшел үңәҙле өйөм!

Терт-терт кенә, тау артынан таң ата,
Сут-сут ҡына, былбылдары саз тарта.

Ағиҙелгә ағып төшә аҡ томан,
Уралтауым — томан йырған ат һыман...

Йүгән — ҡулда. Ауыҙлығы — “сыңҡ!” та “сыңҡ!”,
Ялан аяҡ барам кисеп аҡ ысыҡ.

Зәңгәр күккә, ғәжәп ҡалып, күҙ атам,
Һары йомғаҡ унда күреп, шаҡ-ҡатам:

Баш осомда һабантурғай күк һүрә!
Шөңгөрөнән ерем-күгем тилерә!..

Эй йәйем, йырлы йәйем, нурлы йәйем!
Ҡояш-апай ҡалҡты, ҡоласын йәйеп.

Болонлоҡта юшай йылҡы... Бер аттың
Муйынында баҡыр бутыл — “дың!” да “дың!..”

Атай аты йыуаш — минән тоттора.

Әнә тора, йүгән көтөп тик тора.

Егербеҙ ҙә сабынлыҡҡа елербеҙ,
Күбәләрҙе тейәп алып килербеҙ.

Ослап, кәбән башын күккә төртөрбөҙ,
Ҡарап үргә, маңлай тирен һөртөрбөҙ.

Ағиҙелдә һыу инербеҙ, төш еткәс.
Баллап-майлап сәй эсербеҙ, эш бөткәс...

Атай менән көн дә шулай мин барам.
Атайыма ат егешәм, туғарам.

Йәйем йәмле — бик күңелле беҙҙең эш.
Егет кеше эшләп үҫергә тейеш.

1975.

## 1976

************************

### Беләм

Энә биреп,
Дөйә талап итте
Яҙмыш минән.
Юлдарыма йәнем дөйәләрен
Теҙеп киләм.
Көнө етер,
Каруан аласаҡмын тартып
Юлдан —
Беләм!

1976.

### Яңғырауыҡ һүҙҙәр

Мин: “Халҡымды һөйәм!” — тимәйем,
“Илем өсөн көйәм!” — тимәйем.
Яңғырауыҡ һүҙҙәр нимәгә?
Тыңлай-тыңлай тейҙе теңкәгә!

Булмаймы ни шундай “шәп” ирҙәр:
“Ватан өсөн фиҙа йән!” — тирҙәр.
Ә кәрәкһә хаҡ эш эшләргә,
“Форсат” ҡушмай был кешеләргә...

Өнһөҙ елгән дауыл булайыҡ,
Сүбен ерҙең ҡырсып тулайыҡ.
Түгелеп тә йыуһын саф ҡырҙы
Беҙҙең күҙйәш -- ләйсән ямғыры!

1976.

### Бөтәһенә лә мин үҙем килдем

*Бөтәһе лә миңә иртә килде...*
Сәйфи Ҡудаш.
*Бөтәһе лә миңә һуңлап килде...*
Назар Нәжми.
*Бөтәһе лә миңә ваҡытында килде...*
Шакир Ғәлин.

Ҡәләмдәштәр ғәфү итһен мине, —
Улар моңон татып белмәнем.
Сөнки миңә һис ни, һис бер ҡасан
Үҙ аяғы менән килмәне.

Бөтәһенә лә мин үҙем килдем,
Бөтәһен дә күрәм үҙемдән:
Көтмәй ясле, детсад төҙөлөүен,
"Төштөм" етенсе ҡат күгемдән.

Күҙем асып, һөрән һалғанымда, —
Нянечкаһыҙ, шыҡһыҙ өй ине.
Имәм тиеп морон төрткәнем дә —
Имсәк түгел, тимер сөй ине.

Тәпәй баҫып, үҙем йүгергәйнем, --
Резин "эмей" бөткән кибеттә.
Тура килде көрпә ҡатыш картуф
Сәйнәп тейенергә елеккә.

Егет еткәс, тормош тирәгенән
Ала алдым өлөш, алай ҙа:
"Шишка"лары шытһа ҡарағайҙа,
Шешкәләре — минең маңлайҙа...

Йәшермәйем, миңә һис бер нәмә
Үҙ тәпәйе менән килмәне.
Алмағасҡа яҡын ятһам да шул,
Үҙе өҙөлөп төшә белмәне.

Мөхәббәт тип йоттом зәһәр ялҡын,
Ожмах тиеп остом тамуҡҡа.
Магазинға үҙем барҙым сабып,
Үҙем ҡойоп эстем һаулыҡҡа.

Бәхетле баш: вузда ҡуна ятып
Һабаҡ һурыуҙан да ҡотолдо.
Көнөн эшләп, төнөн хәреф сүпләп,

Аяғөҫтө “кәктем” дипломды.

Айнып китеп, түргә ҡарағайным, —
“Кеше” булып киткән ҡорҙаштар.
Ә миңә тик төпһөҙ калуш менән
Ашһыҙ табын ҡалмыш түрбаштан.

Бөткәйне шул йолоп министрлыҡ
Портфельдәрен донъя ғаләме.
Тейҙе миңә әрһеҙ яҙыусының
Мәңге әрләнеүсән ҡәләме.

Ҡәләмемде үҙем осលармын да
Үҙем һыҙып, үҙем яҙырмын.
Нөктә ҡуйыр мәлдә Ғазраилды
Ҡаршы барып үҙем алырмын.

Арбаһына яткас, баш ҡынайым
Ауыртһа ла, юлға зарланмам.
Тик... Ғазраил, бер үк ғәфү ит һин,
Төшөп ҡалһам үҙем арбаңдан...

1976.

## Йәшәү

Йәшәүҙең дә
Була, тиҙәр,
Төрлө һыры,
Төрлө хикмәте.
Төрлө бәндә
Төрлө хәлдә
Таба, тиҙәр, өлөш-икмәкте.

Берәү — башын ташҡа бәреп,
Күҙйәш менән юлын тигеҙләй.
Берәү — тарта тормош ғәрен,
Бураҙнаға еккән үгеҙҙәй.

Бәғзе —үксә ялап туя, —
Ундайҙарға Иблес юл ҡуя.
Була, тиҙәр, — нәфсе өсөн
Атаһын да хатта ул һуя...

Әле башы менән йөрөй,
Әлә түше менән йөрөй,
Әле ята салҡан — арҡаға.
Аҡмаһа ла, тама, тиҙәр,
Циркач була белеү арҡала...

Шундайҙарҙы күрер булһам,
Йөрәк ҡаным ҡатып,
Баш ватам:
Ниңә кеше,
Булмай Кеше,
Маймыллыҡҡа ҡайта ҡабаттан?!

Рәхмәт һиңә,
Рәхмәт, тормош:
Нурың менән сағып йәшнәнең!
Алдашмаҫ өсөн,
Урлашмаҫ өсөн,
Уттарыңда янып йәшәнем.

Биҙер инем был донъянан —
Маймыллыҡты ғәрлек ҡыумаһа,
Циркач түгел,
Спартактар
Сәғәт һайын сәсрәп тыумаһа!

Тиккәме ни —
Тәбиғәт тә
Кешеһенән күреп көнләшә.
Һабан һөрөр,
Яуға керер,
Ғорур үлер Кешем,
Мең йәшә!

1976.

## Сифат, эффектлылыҡ

*(плакат)*

Хайран ҡылып донъяларҙы,
Цехҡа килгән иң элек:
Бәхет сүкеү вахтаһында —
Сифат, эффектлылыҡ!

Сәсеп ҡотло орлоҡтарын,
Йөрөй ҡырҙа нур, елеп:
Тос башаҡтар баҫыуында —
Сифат, эффектлылыҡ!

Ғалимға һәм яҙыусыға
Бирә ул емешлелек:
Бар эштәрҙе бара барлап —
Сифат, эффектлылыҡ!

Ил ғәмендә һәр минуттың,
Тиндең ҡәҙерен белеп,
Яңы кеше булып килде
Сифат, эффектлылыҡ!

Елтерәгеҙ, елғыуарҙар,
Хужалыҡһыҙ туң елек! —
Еңеү яҙын башлай үҙе
Сифат, эффектлылыҡ!

28.02.1976.

## Яҙғы хистәр

*

Сыҡтым яҙға, йыртып ҡыш ҡыртышын —
Шундай хозур йәшел донъялар!
Ҡайындарҙың бүртек ирендәре
Иренемә ирен ҡуялар.

Ҡарҙай аңҡып, йәшел араһында
Тоғро ҡалған ҡышҡа туҙ ғына.
Ап-аҡ туҙҙа мөлдөр ҡояшапай
Мыйыҡ бора — ҡыҙыл ҡуҙ ғына!

*

Турғай белә: муйыл сәскәһенә
Сәңгелдәген элеп бәүелә.
Бәүелгәндә — бәүел тирәгенән
Тирәһенә йыры түгелә.

Әллә йыр был, әллә аңҡыш муйыл —
Хушбуйынан донъя иҫерек.
Уйнай турғай, бәү-бәү йырын йырлай,

Ә мин торам тамам тилереп...

*

Таң ата ла ҡусҡыл ер шатлана,
Турғайҙарын күккә сөйөрөлтөп.
Ер күсәрен нурлы буҙтурғайҙар
Йырлай-йырлай йөрөй өйөрөлтөп.

Үләндәрҙе тарта нур ептәре,
Ҡыяҡ артлы ҡыяҡ ярҙырып.
Йәшел ҡыяҡ һайын ҡояшлы аҡ —
Ысыҡланып тама наҙ йыры.

*

Эй был туғай, былбыл-турғай,
Йырҙың шөңгөр аҙашы!
Ҡай ерҙәрҙән ейҙең икән
Сут-сут тирер яҙ ашын!

Юҡ, еймәгән... Нурға мансып
Биргән уны Ер-әсәй.
Ҡусҡыл ҡыяҡ һайын сыңлап,
Нурҙар эсеп йыр йәшәй!

*

Тын ҡалығыҙ, ҡуҙғалмағыҙ —
Ҡыҫһын донъя һулышын:
Ер төбөнән тибәрелә
Сабый бала тауышы!

Сеңләй-сеңләй сыҡты ана, —
Көнгә ҡарғып талпына.
Ҡусҡыл ҡуллы сабый-ҡыяҡ
Терһәкләнеп ҡалҡына!
Кисер Хоҙай хаҡына!

*

Ерҙе һүргән һап-һары таж
Һары ҡуҙын балҡытты.
Бәпембәнең бәпесенән
Ер йөҙөнә ут ҡапты.

Аҡтары ла, күктәре лә
Күкрәр әле ҡуҙҙарҙың.

Тик был һары, үртәп ҡарҙы,
Һиҫкәндәрҙе Ер шарын.

*

Һары япраҡ бара туҙрап
Йәшел ҡашлы сәхрәнән.
Әйтә алмай өҙөлгәнен
Ҡайһы тирәк-әсәнән.

Әйтә алмай кем өҙгәнен, —
Һабышҡан ул һарыға.
Яңы япраҡ ярыр микән
Ҡанап ҡалған яраға?..

1976.

## Октябрьский — дан ҡала

*(30 йыллығына)*

Аҡҡоштай аҡ ҡала ҡалҡты
Йәмле Ыҡ буйҙарында.
Ҡайып аҡыҡ ҡаурыйҙарын,
Нурланды Уралында.

Ҡушты илем: "Батыр Нарыш,
Ҡеүәтләнеп күкрәк кир!"
Алды ҡөҙрәт девондарҙан
Ҡайнар йөрәк баһадир!

Һура аҡ нур ер аҫтынан —
Аҡ күлдәкле пак ҡала.
Шәмдәл теҙеп вышкаларҙан,
Аҡ бәхеткә юл һала.

Йәйғорлатып тыуған ерҙән
Сағыу нурлы яҡтылыҡ,
Нефтселәр йөрәгенән
Балҡый илгә яҡшылыҡ.

Буровойҙар бураһынан
"Ҡара алтын" аҡ һала.
Ҡотлап илде, ҡалҡын мәңге,
Октябрьский — дан ҡала!

1976.

## Пиночет кадриле

*(Имеш, үҙенең ауыҙынан)*

Бер яғымда — упҡын диңгеҙ,
Бер яғымда — Кордильера.
Сантъягонан Досонғаса
Чили — “ҡанлы коридора”.
    Сантъяго — Досон,
    Күңелемде асам!
Хунталарҙа балта барҙа —
Ҡыбырҙамаҫ ҡәбер-ил.
Ҡәбер таштары өҫтөндә
Бейеп китәм кадриль.
    Сантъяго — Досон,
    “Гитлер-марш”ҡа баҫам!
Шпицрутень тотоп, хунтам
Досонғаса теҙелгән.
Кадриль бейемәгән уҙа
Корваландың эҙенән.
    Сантъяго — Досон,
    Һалдаттарым яусан!
Һуҡҡан һайын ҡан сәсрәй,
Ниңә, тим, ал ил ҡаны?
Ал байраҡтар, уттай дөрләп,
Бешерәләр хунтаны.
    Сантъяго — Досон,
    Ер тетрәй аҫтан...
Илде Досон яһаһам да,
Ҡурҡам үҙем, барыбер.
Көбәк тығып бөтәштерәм
Ҡоймамдың һәр ярығын.
    Сантъяго — Досон,
    Ҡотолормон ҡасан?..
Тауҙар тулай, диңгеҙ олой,
Табанды ут көйҙөрә.
Хунтам муйынына, яйлап,
Донъя элмәк кейҙерә.
    Сантъяго — Досон,
    Нисек сығып ҡасам?..
Ҡасып ҡайҙа китәһең, тип,
Көн-төн баға ил күҙе.
Ерҙең көслө эшсән ҡулы

Ташларға тора иҙеп.
　　Сантъяго — Досон,
　　Финишыма баҫам...
Донъяның бер ҡулы алды
Корваланды күтәреп.
Икенсеһе, миңә һуҡһа,
“Коридор”ҙы түңкәрер.
　　Сантъяго — Досон,
　　Тамуҡҡа мин осам...

24.12.1976.

## Салауат

*(Һәйкәл янында уйланыу)*

Алмас ҡылыс иле тотторҙо,
Ярһыу атҡа иле мендерҙе.
Ҡурайынан үле йәндәрҙе
Терелтерлек сихри моң бирҙе,
Фатихаһын, һөйөп, күндерҙе:

“Толпарыңды уттай тулатып,
Бәйгеләрҙә сап һин, Салауат.
Ҡурайыңды ғәййәр выжлатып,
Ғәйрәт уты яҡ һин, Салауат.

Ҡылысыңдың ҡыйғыр ҡырыйы
Гел тал башын сапһын, Салауат.
Сапмаҫ булһа, шуға ҡыуанып,
Ҡын эсендә ятһын, Салауат.

Ҡуйыныңа Ҡояш, Ай байып,
Яурыныңдан ҡалҡһын, Салауат.
Йырың, урап Ҡояш, Ай юлын,
Дуҫлыҡ алып ҡайтһын, Салауат.

Ағиҙелең, Һаҡмар, Яйығың
Арбаулап һил аҡһын, Салауат.
Уландарың, күрмәй ҡанлы яу,
Мәрәйгә гел атһын, Салауат.

Етмеш ырыу — етмеш бәхетен
Бергә барып тапһын, Салауат.
Етмеш ата улын етәкләп,
Елкетергә хаҡһың, Салауат!” —

Шулай тине иле улына,
Теҙген осон биргән сағында...
...Туптан атты яуыз батшалыҡ,
Батыр күкрәк киргән сағында.

Ярсыҡтары, ҡанлы юл ярып,
Йөрәгенә кереп ҡаҙалды.
Бәйге түгел — һуғыш ораны
Тет(е)рәтте сәмле майҙанды...

Сапты батыр, сапты сыҙамай,
Арғымағын типсеп, ҡамсылап.
Йәҙрә ярған ҡурай осонан
Ҡаны илдең барҙы тамсылап...

“Ҡылысыңды ҡындан һур, батыр!” —
Ошо булды илдең ораны.
Ай һәм Ҡояш юлын, йыр түгел, —
Ҡыйғыр уҡтар, уттар ураны.

Һәр сыуалда ҡорос ҡуҙарып,
Һәр һандалда ҡылыс тапалды.
Һил ауылдар ҡабат тыуҙырҙы
Батыршаны, Ҡараһаҡалды.

Ҡырҡ ул, ҡырҡ уй һәм ҡырҡ теләкте
Бер йәҙрәгә ҡойҙо Салауат.
Аҡ батшаның ҡара йөрәген
Ҡап урталай һуйҙы Салауат...

Ярып төндө, елде Салауат,
Елде иле, ярһып, янынан...
...Арғымаҡтың саҡма тояғы
Менеп баҫты ирлек тауына!

Ҡарғый батыр, сөйөп уң ҡулын,
Бырғый ялҡын терһәк осонан:
Ирек ире ирлек еренең
Уҡ-юлдашын күккә осорған!

24.12.1976.

# 1977

****************************

## Азатстан

Республикам, ҡитғам баҡсаһында
Яҙ сәскәһе булып тыуҙың һин!
Таң шаңдағы шаулап алып килгән
Ләйсәндәргә битең йыуҙың һин.

Зәки асты сағыу күҙҙәреңде,
Иркен һулыш алдың, күкрәп.
Азатстан булдың, Башҡортостан,
Ике күҙең нурға мөлдөрәп.

Башҡортостан, гүзәл Азатстан,
Илемә һин — ҡоттоң әсәһе.
Көндөң, Айҙың күҙен сағылдырып,
Ерсән бәхет Ергә сәсәһең.

Һинән башҡа миңә Ватаным юҡ,
Һәм һин дә юҡ — бөйөк Ватанһыҙ.
Балтиканан Тымыҡ океанғаса
Берҙәм иләү булып ҡалҡҡанбыҙ!

Республикам, бөйөк державамдың
Күкрәге һин, ҡорос терәге.
Тибә һиндә, ярһыу ҡеүәт биреп,
Сал башҡорттоң йәп-йәш йөрәге!

1977.

## Ябай һалдат

Алҡыштарҙан билем һығылырлыҡ
Яҙмыш көсәп ҡыҙмам-көнләшмәм.
Ленин иптәш, һиңә Партиямдың
Бер ябайы булып өндәшәм!

Ябайлығым — түгел төҫһөҙ ҡылау,
Ҡыҙыл ҡаным ҡуҙрап мин янам.
Рубин байрағыңа йөрәгемдең
Дөрләү утын дөрөп ҡыуанам!

Ҡалҡа илем киреп офоҡтарын,
Башаҡтарға ҡайыла Ер шары.
Ленин гербын ҡосоп сағыулана
Замананың саҡрым таштары.

Һалып иңгә аҡыҡ Ҡош Юлдарын,
Биш йыллыҡта бишләй балҡындыҡ!
Түп-түңәрәк икмәк булып ҡайтты
Ҡояш менән беҙҙең яҡынлыҡ.

Илем теҙгән ҡорос колоннала
Көр маршҡа баҫып мин барам.
Илем менән ҡуша һулыш алам,
Илем менән ҡуша юл ярам.

Ябайлығым — түгел яуапһыҙлыҡ,
Мин — тыуасаҡ таңға яуаплы.
Нурҙарынан Көндөң алда сәсрәп,
Ҡоям илгә яҡты сыуаҡты.

Минән башҡа донъя бөтөнәймәҫ,
Теүәлләнмәҫ күктең мөйөшө.
Сөнки көлөп тыуған дәү Ҡояштың
Мин тутыҡмаҫ, ҡупмаҫ өлөшө.

Күкрәктәрҙән беҙҙең, ҡомарланып,
Илем иккән дуҫлыҡ-ҡот таша.
Ер шарында беҙҙең ҡулдар аша
Ҡитғаларҙың ҡулы тоташа!

Алҡыштарҙан билем һығылырлыҡ
Яҙмыш көҫәп түгел барышым.
Халыҡ сафтарының йөрәк ритмын
Тойоп алынһын һәр һулышым!

Ябайлығым йоҡһон эштәремә,
Бөйөклөгөн бөркөп Ватандың.
Хаҡлыҡ байрағын саф илтеү өсөн,

Ябай һалдат булып аталдым.

4.01.1977.

## Йондоҙ йыры

Күҙ ҡараңды төбәп, сөм-төндәрҙә
Барҙыр, барҙыр йыһан баҡҡаның —
Ҡош Юлының көмөш ярын йыуып,
Йондоҙ йылғалары аҡҡанын.

Ҡырсын мыни! — иҫәп-һанһыҙ йәндәр —
Беҙҙән, ерҙән, күккә күскәндәр...
Ем-ем килә ана шау йондоҙлоҡ –
Бабаларым улар икәндәр...

Яралғандыр ҡасан был йондоҙҙар?
Яңрағандыр ҡайһы борғола?
Тоям шуны: улар мәңгелектең
Көр ораны булып урғыла.

Беҙ көйләгән моңдо илтә улар
Хыял етмәҫ сихри илдәргә...
Йондоҙ йыры ярала бит ерҙә,
Беҙҙең өндә, беҙҙең телдәрҙә!

6.01.1977.

## Партбилет

*(Коммунист ауыҙынан)*

Мин атанан сабый ҡалдым,
“етем бала” булып һаналдым.
Мине ләкин, етемһетмәй,
ҡатарына алды Партиям.
Балтырғандар ашап үҫкәндә лә,
батырланып егет еткәндә лә,
ир уртаһы — утыҙ үткәндә лә
юл башлаусым булды Партиям.

Тормош һандалына баҙрап янған
ҡыҙыл утлы ҡорос һалды ла, —
ҡулыма ҙур сүкеш һондо ла

былай тине миңә Партиям:

“Сүке үҙең —
йөрәк хисең менән,
йәшлек көсөң менән,
бар шатлығың,
үсең менән!

Уйлан,
тырыш.
Бел,
был ҡорос —
Ленин йөрәгенең ҡуҙ киҫәге!
Шунан йөрәгеңә тынмаҫ терәк --
ғәйрәт сүкеп алыу —
һинең бурыс!”

Сүкенем мин уны —
Планетаға
аяҡ кирә баҫып
сүкенем.
Күкрәгемде
алмас һандал итеп,
йөрәгемде талмаҫ балғам итеп,
күккә йондоҙ атып
сүкенем!..

...Малай булып тыуҙым.
Балиғ булдым.
Партияма шунан ул булдым.
Ләкин
һис бер ҡасан аҙмыш ул булманым,
күкрәк көсөм менән мин юлланым
бер юлды;
ҡырсып, ҡыуҙы ҡыуаланым,
ҡурсап, тыуҙы ҡеүәләнем,
әшнә, туған тимәй
янып
ғауғалаштым,
кәрәк саҡта
ҡыйыштым,
талаштым,
үҙ-үҙемде онотоп
хәттән аштым

тик шул юлды тотоу өсөн —
бер юлды —
Намыҫымдың
хаҡ юлын,
пак юлын!

Улы итеп һөйөп
үҫтерһә лә бейек,
улымын, тип, уның,
ҡул һонманым,
тотонманым
еңел өҙөлөп төшөр
емешкә.
Партбилетым
ятты бөхтә
тейгәндә лә түбәм күккә;
башым әйләнмәһен,
телем бәйләнмәһен,
намыҫым сейләнмәһен өсөн
Хаҡлыҡ утын,
Хаҡлыҡ дәртен
һаҡлап һәр эштә,
Партбилетым ятты бөхтә.

Ҡара эштән —
ағынаса
талымламай
башҡарҙым.
Кәрәк икән —
китап яҙҙым,
кәрәк икән —
таш ярҙым.
Тик ҡаҡманым
һауаланып күкрәк,
Партбилетты
визит карточкаһы итеп ишек ҡаҡманым.
Туң йәндәрҙән бәғерем ҡатҡанда ла
Намыҫ утын, дөрләп, һаҡланым.
Намыҫ юлы менән атланым.
Партбилетым
булды мандат,
үҙем —
һалдат.

Дошмандарҙың
бысраҡ ялаларын
хаҡ юлымдан
тибеп ырғытам.
Минең илем,
минең телем,
минең көнөм
Хаҡлыҡ юлын йәндәй ҡурсыта!

Был күкрәктә
көн-төн тибә,
ялҡын һибә,
йәнле йөрәк менән
пар килеп,
замананың көйрәү утын алған
янар терәк —
уттай ҡыҙыл,
ҡайнар йөрәк —
мәңге әйҙәр йөрәк —
Партбилет!

1977.

## Йорт

Ветерандар йәшәй был йортта —
Ватан һуғышының ҡарттары.
Таяҡтарҙың утлы эҙенән
Ҡуҙғыллана һуҡмаҡ һырттары.

Икмәк һәм һөт алып ҡайталар,
Шешә ҡайта ҡайсаҡ тоҡсала.
Иртән тороп, миндек ҡыҫтырып,
Йүнәләләр ташлы мунсаға.

Ихатала иҫке өҫтәлдә
Һуғалар йыш, ярһып, домино.
Тауыштары күрше-күләндең
Тейгеләп тә ҡуя йәненә.

Йышҡы тотоп бик йыш китәләр,
Йышып таҡта, игелек итәләр.

9-сы Майҙа, турайып,
Ордендарын тағып үтәләр.

Һәм шул кистә, бергә йыйылып,
"Еңеү өсөн!" тиеп эсәләр.
Рейхстагка атҡан ҡулдарҙан
Етәкләйҙәр сабыр бисәләр...

6.01.1977.

## Комбайнер иҫтәлегенә

"Ике ҡулы көрәк кеүек" тиҙәр,
Эш кешеһен телгә алғанда.
Беләм: көрәк, биреп ҡулға терәк,
Игелеген игә һаман да.

Көрәк ҡуллы ине был ир. Ләкин
Таянманы көрәк биленә.
Уҙҙы услап бәхет штурвалын,
Киреп күкрәк заман еленә.

Ҡулдарының ҡотон бураларға
Аҡыл ҡулы менән арттырҙы.
Ураҡҡа ул байраҡ киреп сыҡты,
Йондоҙҙарҙан салют аттырҙы.

Барыр ине "баҫыу карабы"нда,
Ҡояш булып ергә ҡалҡҡандай.
Ҡурсаланы көндө ҡытлыҡтарҙан
Ике ҡулы, яҫы ҡалҡандай.

Юҡ, көрәктәй генә түгел ине
Донъя ҡуласаһын тотҡан ҡул.
Арттырырға күркен еребеҙҙең,
Йомарланған ҡалас ине ул!

Барып керҙе, йырлап, комбайны
Ватанымдың тарих түренә.
Башаҡ итеп, күркен ҡулдарының
Ҡайып китте тыуған еренә.

7.01.1977.

## Ҡыҙыл поезд

Ҡыҙыл поезд саба экваторҙан —
Монорельсен сүкеп “шарик”тың.
Меридиан артлы меридиан —
Шпалдары ҡала “шарт!” итеп.

Ҡорос юлға көмөш күк сымының
Йондоҙҙары шаулап ҡойола.
Ҡыҙыл поезд саба, саба — уға
Йәшел семафорҙар ҡуйылған.

Магистрале буйлап замандарҙың
Тора, көтөп, бик күп туҡталыш.
Сыҡмай рельстән һәм графиктан —
Ҡотолғоһоҙ көйлө был сабыш!

Ҡитғаларҙың вокзал ҡапҡалары
Монорельскә йөгөн атҡара.
Ураҡ-Сүкеш асҡан ал ишеккә
Платформа үҙе апара.

Вагондарға менеп ултыралар
Төрлө яҡтан төрлө кешеләр.
Төрлө яҡка төшөп китеүселәр,
Йәнә менеүселәр ишлеләр!..

Социализм, тип, дөнә илдәр,
Капитализмды ҡалдырып.
Феодаллыҡтан да унда хатта
Күсенәләр, тура алдырып!

Түтә юлдан әммә таш быуатҡа
Ырғып ҡалыусылар бармы — бар.
Таш быуаттан шытып, фашизмды
Эҙләп барыусылар бармы — бар...

Коммунизмға ныҡ, зирәктәре
Транзит билет менән ҡуҙғалған.
Алыҫтан уҡ Ҡояш семафорын
Тоҫмаллай машинист-уҙаман.

Олағыусы — түгел төп юлаусы.

Улар — ҡуян йәнле пассажир.
Монорельсләп ҡойған магистралдә
Ал поезда елә барса ер!

11.01.1977.

## Шиғыр

Суйындарҙан “сөгөн” шиғыр ҡойҙом —
Көсө еткән генә күтәрер.
Күптәр уны, ауыр гер тотҡандай,
Күтәрмәйсә генә үткәрер.

Хаҡ-баһаһы илдең — үҙ ҡулында,
Үҙ зауҡына тиңләп һанларға...
Заңы башҡа -- Ерҙе йыһан тарта,
Еңел-елпе -- әллә ҡайҙарға...

Дюралюмин — шиғри ихтыяжда,
Ҡойған — уңа, була артымлы...
Ә мин ҡойҙом ауыр “сөгөн” шиғыр —
Ер йәҙрәһе кеүек тартымлы.

Түбәм — күктә. “Сөгөн” табан — төптә...
Сорғой йөрәк — Икар тоҡомо.
Орбитала ләкин тора тотоп
Суйын йырҙың “сөгөн” тартымы.

16.01.1977.

## Олон

*Ҡорҙашым Рәми Ғариповка.*

Мин бит Уралымдан
Үреп сыҡҡан олон.
Исем-затҡа килһәк,
Кем булһа ла — булһын!

Имән атаһындар,
Имандары килһә.
Унан ғына самам
Сыҡмаҫ бер иле лә.

Ҡарағай тиһендәр, —
Кемең нимә тимәç!
Уға ҡарап ҡына
Түбәм күккә теймәç.

Ҡайын тип әйткәндән
Ҡайғы ҡағы алмам.
Булһам бер ҡарама,
Ҡайырылып аумам.

Үçәйем тик илдә —
Ҡалғаны барыбер.
Булырға ла әҙер
Ерем туйраһы бер.

Булайым йә, ҡалҡмай,
Һырғалы һын — талҡай.
Оло олпатлыҡтар
Күңелемә ятмай...

Ах, булһам тал-тиле —
Һығыл-бөгөл билле!
Йор һандуғас миңә
Килеп ҡуныр — көйлө.

Ҡанаттарын ҡағып,
Шөңгөр шаңын түгер.
Ярһып талпыныуы
Билкәйемде бөгөр.

Татлы йәш эркелер
Бөрө-күҙҙәремдән.
Һығылып йыр сығыр
Нескә үҙәгемдән...

Әммә, елпе-елгә
Бөгөлөр был, тимә!
Ҡояш нурына тиң
Туралыҡтар миндә!

Былбыл тояҡкайын
Тойор йәнем иңе!
Йыры сыңрағанда

Шартлап һынһам ине!

16.01.1977.

## Март

Бөрөләрҙең бөрөлгән сағы,
Берәүҙәрҙең тилергән сағы —
Март.
Бөрөләргә бик төрөлмәҫкә,
Берәүҙәрҙәй бик тилермәҫкә —
шарт.
Аҡыл тере: "Гөнаһ! Һаҡ йөрө!
Һинең өсөн түгел йәш бөрө,
ҡарт!.."
...Ҡыумаҡ булдым йәндән мин яҙҙы,
Ҡосаҡ яҙһа ла бит бик наҙлы
дәрт.
Ҡағылмаһын, тинем, тылсымы,
Борһон миңә яҙҙың моң-сыңы
арт!
Тик, мут икән наҙҙың сәм-сере:
Йөрәгемдән ярҙы йәш бөрө! —
Март... март!..

8.03.1977.



## Н. Доризонан ике шиғыр

*(Рәми үлгәс тәржемә ҡылынды)*

**1**

Етә инде йәшем ут һыҙығына...
Өй ишеген, йыр ижеген асҡандай,
некрологтан башлайым
гәзитәне һәр таңда.
Тере дуҫтар ҡалмай бара яҡ-янда.

Етә инде йәшем ут һыҙығына...
Шулай минең кәбисә йыл башланды.
Китә дуҫтар, ҡала тол ҡатындары
һәм шул уҡ, бер үк тик — телефондары,
шул уҡ һаман цифрҙар,
тауыштар тик башҡарҙы...

Шулай минең кәбисә йыл башланды...
Кемдер үлһә, ҡурҡам үҙем үлгәндәй.
Һәм, хушлашып дуҫ ҡәбере янында,
гөнаһлымын, тертләп ҡуям мин шунда,
артынса уҡ үҙем дә йән биргәндәй...

Кемдер үлһә, ҡурҡам үҙем үлгәндәй.
Тик мәңгелек бар — мәңгелек шаңдар юҡ.
Хатта һеҙ ҙә, үлемһеҙ ҙур шағирҙар,
һуңғы сиктә үлемесле — нәҡ күктәге йондоҙҙар
һәм нәҡ Ҡояш — һүнмәй торған шәмдәр юҡ.

Тик мәңгелек бар — мәңгелек шаңдар юҡ.
Килде миңә — миңә тигән көн башы.
Тере саҡта — үлемһеҙ мин, барыбер,
тик онотоп булһа ла шул
әжәлемдең барлығын.
Фекерем бар, хеҙмәтем бар, һүҙем бар —
иң ҡыҙығы.
Йәшем инде иңләне ут һыҙығын...

15.04.1977.

**2**

Тирбәтәм ҡулымда
бер йәшлек немецты.
Шундайын яҡын ул, —
урыҫса нәҡ ҡарай,
шундай ғәжәп үҙемдеке ул малай!

Милләте —
йылдар аша асылыр.
Ә сабыйлыҡ, сабыйлыҡ —
интернациональ уның
тәбиғи асылы!

Шоколад ашаттым мин
ап-аҡ панночкаларына Краковтың,
ҡыҫыҡ күҙле ҡытай малайҙарын мин
елдерҙем иңдәрҙә...
Сабыйҙар бит илайҙар
бөтә телдәрҙә лә бер,
һәм бер төрлө көләләр
бөтә телдәрҙә!

15.04.1977.

## Фажиғә

*(Бер ирекәйҙең зары)*

Ағайҙарым, дуҫ-иш, туғандарым,
Төштөм бит мин хәтәр хәлдәргә!
Бисәкәйем, "ағас игәү"ләнеп,
Тейә генә көн дә йәндәргә.

"Ҡара, әнә, күрше Садиҡты, — ти, —
Гөлдәй итте йортон, баҡсаһын.
Итмәһен ул гөлдәй ник баҡсаһын,
Күрәп-күрәп ала аҡсаһын!

Һыйырына тиклем, кис көтөүҙән
Шәлкем бесән ҡайта ҡыҫтырып.
Ә беҙҙең, — ти, — аҡса ҡалтаһында
Һуҡыр әтәс ята ҡыскырып!.."

Тибрәтмәккә күңел ҡылҡайҙарын,
Тыуған көнөн туйлап ҡараным.
Биш тәңкәгә сәскә алып ҡайтып,
Букет менән көйләп ҡараным.

Эштәрем тик китте киреләккә:
"Ах ахмаҡ баш, шуны белмәйһең.
Сәскә һатып алып сүп иткәнсе,
Аҡса килеш кенә бирмәйһең!

Садиҡтың, — ти, — һантый бисәһе лә
Яҫтыҡ яҫтап ята аҡсанан.
Ә һинең бит пистон кармандарың
Бишлектәрҙе йома бисәнән!”

Ағайҙарым, дуҫ-иш, туғандарым,
Ни хәл генә инде итергә?..
Йөрөй торғас уйлап, таптым әмәл
Нескә ҡылдарына сиртергә.

Аванс һәм расчет көндәрендә
Тегәм букет ҡыҙыл аҡсанан.
Өсәр һумлыҡ йәшел “япраҡ”тарын
Теҙәм, алып, һаҡлыҡ кассанан.

Эй һөйөнә бисәм, мин һөйөләм:
“Аҡыллым! — ти. — Алтын башым!” — ти.
...Ҡыҫырланғас һаҡлыҡ кенәгәһе,
Баҫты ҡайғы йәнә башымды...

Юҡ, был юлы “ағас игәү”ҙәрҙең
Игәүенә ҡалып киҫелмәм!
Һуңғы тапҡыр тектем затлы букет, —
Командировка хәл ителгән!

Китер саҡта букет араһына
Ҡара йылан һалып тотторҙом.
“Хуш, бәхил бул, бисә, һөйөклөм!” — тип,
Ярһыу “Жигули”ҙа юрттырҙым...

Ағайҙарым, дуҫ-иш, туғандарым,
Ни хәл генә инде итергә?
Боролдом мин кире ярты юлдан,
Төшөп фажиғәле фекергә.

Йөрәк һыҡтай, хатта һулыш туҡтай...
Рүлгә ятып, илап мин ҡайтам.
Йылан сағып бисәм үлгән булһа,
Үҙ-үҙемде ярҙан мин атам!

Юҡ, яр йыраҡ! Өйҙөң бар балконы! —
Биш һикереп мендем ун ҡатҡа.
Асҡыс бороп ишек асҡан саҡта...

Йылан ырғып өҫкә, шаҡ-ҡатам.

Ни күрәм тик: бисәм тере һәм шат —
Йыланды ла, игәп, арбаған.
Уралып шул йылан муйыныма...
Аҡса һура пистон кармандан...

5.10.1977.

## Диссидент

(Балһыҙ баллада)

**1**

Транзистор көйләп ятҡанда,
“Би-би-си”ҙы тыңлап ятҡанда
Ғата менән булды бер кәмит:
“Мин дә, — тине, — булам диссидент...”
Шаҡ-ҡатырлыҡ хәтәр был эшкә
Ғәбделғата нисек ирешкән,
Тип аптырай, күрәм, күбегеҙ.
Мажараһын теҙәм, түҙегеҙ

**2**

...Ғәбделғата менән Таңата
Пар килешкән ине уғата.
ЗАГС-тан һуң донъя ожмахтай —
Таңатаны Ғата ҡосалай.
Төнө буйы: “Йәнем, Таңым!” — ти.
Таң атҡас та: “Таңым, йәнем!” — ти.
Кәнфит тешләп ирен үбәләр —
Бер кәнфитте шулай бүләләр.
Бер-берендә ике яртылыҡ —
Бер-беренә тора тартылып.
Ҡояш менән Айҙы уйната
Ғәбделғата менән Таңата.

**3**

Сутылдашып үтте баллы ай.
Икеһе лә эшкә самалай.
Сәй әҙерләү иртүк тик бәлә —
Һалҡын һыу һемереп китәләр.
Ҡайта эштән, арып, икеһе —

Аш бешмәгәс, донъя тип-тигеҙ:
Һалҡын һыу һемереп яталар,
Бер-беренә ҡарай арҡалар...

**4**

Йөрөй-йөрөй, шундай көн етә —
Ғәбделғата йоҙроҡ һелкетә:
"Ҡайҙа өй-ут, ҡайҙа ҡайнар аш?
Йылы эҙләп китәм мин, шабаш!"
Ошо хәтәр, хәтәр ваҡытта
"Би-би-си"е йөрәк ярһыта.
"Би-би-си"гә көйләп бер ҡылда,
Көлә кемдер ситән артында.
Ауыҙынан татлы гәп аға,
Ҡойроҡ болғай эте Ғатаға.
Бибиәсмә — күрше тол ҡатын! —
Баҫып тора, йәйеп ҡанатын.
Һәй исеме, елле исеме! —
"Би-би-си"ҙай Биби есеме!
Ғәбделғатаны ул йоторҙай.
Өҫтәлендә ашы боҫорай.
Урталыҡта тора "ярты"һы.
Күсә ирҙең йөрәк ярпыһы...

**5**

Аш бешерә инде Таңата,
Керҙәрен дә йыуып ҡайната.
Бейеп кенә йөрөй, ирем, тип.
Ғәбделғата йөҙөн бирһен, тип.
Ғәбделғата ләкин һуң ҡайта,
Ситән аша күҙен уйната.
Таба алмай көйөн ҡатыны,
Теге яҡта сөнки ярты һы...
Таңатаны йоҡо сырмағас,
Таң әтәсе берҙе йырлағас,
Бибиәсмә-күрше күҙ ҡыҫа,
Ситән аша, ырғып, ир оса.
Ғәбделғата — була Ғәбдекәй, —
Һис бер нәмә башҡа кәрәкмәй...

**6**

Таң ата ла илгә һүҙ китә:
Таңы хәҙер йоҙроҡ һелкетә.
Тар таҡтала ирен бейетә.
Арҡа биреп оҙон төн үтә...
Башы ҡатып Ғата аптырай:
"Туҙынаһың, ҡатын, ник былай?!
Күргәнем юҡ рухи фәҡирҙе,
Тыңламайһың әллә эфирҙы?!
Кеше азатлығы хаҡына
Донъя-Ғаләм бөгөн ҡубына.
Кеше азатлығы яҡлы мин —
Ситән ашырға ла хаҡлымын!"
Уҡлау менән йөпләй Таңата:
"Бөгөндән һин азат, — тип, — Ғата!"
Күçәкләнгән Ғата, үкереп,
Ситән аша төшә һикереп...

**7**

Транзистор көйләп ятҡанда,
"Би-би-си"ҙы тыңлап ятҡанда
Ғата менән булды шул кәмит:
"Бөгөндән мин, — тине, — диссидент!" —
Ҡаршы алды, өрөп, овчарка,
Бибиәсмә — үбеп йәштәрсә.
Исеме лә — Бибиәсмәкәй!
"Би-би-си" тип кенә әйтәкәй!..
Ғәбделғата, ай-һай, кинәнә, —
Бибиәсмәгә ул өйләнә!
Овчаркаһын тәүҙә иркәләй,
Ә унан һуң үҙен йүпәләй.
"Йәш бисә"нең баллы ҡосағы,
Әйтерһең дә, ожмах баҡсаһы!
Көнө-төнө уклау аçтында
Йөрөгән ник түҙеп ҡатынға!.. —
Ғәбделғата балға кинәнә,
Оҙаҡ иткере, тип һөйләнә.

**8**

Тик өс көндә шиңә баллы ай:
Әсмә киçәүҙәре — ай-һай-һай!.. —
Баш өçтөндә уйнап тик тора,
Ғәбделғатанан эш таптыра.
Торғоҙҙорта ауған ҡапкаһын,
Яңырттырта түбә таҡтаһын.

Ситәндәрен утҡа яҡтырта,
Ҡоймаларын таштан ҡойҙорта.
Һәм ҡаҙҙырта тәрән мөғәрәп —
Ғәбделғата йөрөй тәгәрләп:
Мунсаһын да яға кәләшкә,
Һыйырын да һауа кәләшкә.
Ҡамыр баҫа янып, май туҡый,
Ә эсенән ләғнәт ул уҡый...

**9**

Тоноҡланғас тамам күҙҙәре,
Ептәй ҡалғас аяҡ-ҡулдары
Һәм ҡалмағас һөйөр дарманы,
Сыҡмаҡ кире ырғып ҡойманы.
Биби тота ләкин беләктән,
Овчаркаһы тарта балаҡтан.
Уҡлау баҫа башты ахырҙа.
“Диссидент”, баш тартып, аҡыра:
“Забастовщик мин! — ти Ғәбдекәй. —
Етте, баллы ҡосаҡ кәрәкмәй!”
Итмәй тәьҫир ләкин был әмәл.
Килеп тыуа шундай елле мәл:
Овчаркаһы, ырлап, ҡотора —
Ғәбделкәйҙең өҫтөн һыҙыра.
Бибиәсмә бәргәс киҫәүен,
Артҡапҡанан елдәй иҫә ул...

**10**

Ғәбделғата ҡайта күшегеп,
Таңатаның тарта ишеген.
Әммә ишек эстән йоҙаҡлы,
Ҡатын тотҡан уҡлау нығ һаплы:
“Тәүге ауырлыҡҡа түҙмәнең,
Азатлыҡта йәшә, гүзәлем!”

**11**

Килде бына тулы азатлыҡ,
Азатлыҡта ләкин ғазап нығ!
Йыртыҡ салбар, китек күлдәкле
(Овчарканан бит нығ эләкте!..)
Һуға көҙҙөң һалҡын елдәре,

Һындырырҙай Ғәбдел билдәрен.
Асығыуҙың көслө биҙгәге —
Өҙөлөрҙәй нескә үҙәге...

**12**

Инер ине — ишек йоҙаҡлы,
Ситән арты — сит ил, тоҙаҡлы.
Баҫып башын, китә ырҙынға,
Соҡоп, керә һалам-һырғынға.
Йыртыҡ-китектәрҙе ел бөрә,
Бесәй мырлай янда, эт өрә.
Сысҡан-ҡомаҡ турай һаламын...
Юҡтап азатһыҙлыҡ заманын,
"Би-би-си"ҙы ла ир тыңламай,
Бибиәсмәне лә уйламай...
Өҙөк ҡойроҡ, аҡһаҡ бер һуҡбай
Терәп башын уға, тын йоҡлай.
Ара-тирә, шыңшып, эт илай —
Тунындалыр бөрсә-бет тулай...
Терәп арҡа илаҡ һуҡбайға,
Ғәбделғата баға тик Айға...
Айы әммә уға өндәшмәй,
Азатлығынан да көнләшмәй.
"Диссидентты һиндәй күргән бар!" —
Тип ағыла шыйыҡ томандар.
Һалҡынлығы үтә үҙәккә,
Сәңгетеүе етә һөйәккә.
Шыңшый, "Би-би" башҡа етте, тип,
Ғәбделғата, азат диссидент...

12.10.1977.

## Төрттөрмәләләр

### Хәким Ғиләжев

Ырыуымды ураным да
Орандарын һораным.
Һәр береһен, шиғыр итеп,
Мыйығыма һырланым.

Шиғырҙарым — шығырым-шығырым,

Бер нәмә тик етешмәй:
"Тыуған тупраҡ" (у)романымдың
Ырамауы килешмәй.
Һе!..
Тәнҡит, тим, һүлпән эшләй!

### Роберт Байымов

Үҙем — әҙәби тәнҡитсе,
Үҙем — проза яҙыусы.
Бер уйлаһаң, энә менән
Алтын ҡойо ҡаҙыусы.

Алтындарын ҡамшайым да
Шлактарын ташлайым.
Ҡайсаҡ, төртөп ҡабырғама,
Киреһенсә башлайым.
Үҙ-үҙемде тәнҡитләү — хөрт...
Кисерегеҙ! — Нишләйем?!.

12.05.1977.

### Алтын күҙ

Шатлыҡлы күҙ! Илем буралары
Һығылыр мәл хәләл байлыҡтан:
Башаҡтары баҫыу иңдәренә
Ҡояш нуры менән ҡайылған!

Туҡ бүҙәнә йырлай йырындарҙа,
Игенсене маҡтап, көн һайын.
Ҡайсылатып ҡорос салғыларын,
Алтын яҫма яҙа комбайн.

Тос бөртөктәр аға төҙ мөшкәнән —
Ташып ҡына өлгөрт йылғаһын!
Иген тейәп, шофер бара көйләп —
Оноҡкан ул бөтә донъяһын!

Ә ырҙында ырай алтын тауы —
Ил икмәген өйә еңгәләр.
Ҡандай ҡыҙыл ялҡын-галстуктар

Сыҡҡан йәнә изге өмәгә.

Күмәктәрҙең йөрәк ялҡындары
Ашлыҡ менән ташып ағылыр.
Ил бураһы — элеваторҙарҙың
Башында ал йондоҙ ҡабыныр.

Алтын көҙҙән — алтын сәләм булып,
Алтын ҡалас менер табынға.
Ғәжәпме ни, хатта хоҙайҙарың
Ер икмәген күктә һағынһа!

12.05.1977.

## Икмәк

Икмәгебеҙ Көндәй түп-түңәрәк —
Балҡышы ул ерҙә Ҡояштың.
Тыуған илем, ҡотлап һәр бер өйөн,
Түп-түңәрәк Ҡояш өләште.

Һәр табындың күрке — бөтөн икмәк,
Һәр кешеһе илдең өлөшлө.
Ҡояш түрҙә — беҙҙе донъя күрә,
Икмәк барҙа эштәр килешле.

Сәсеп дуҫлыҡ, бәхет ура илем —
Йырлап тора урған көлтәһе!
Усыбыҙға ҡымып, түгел ҡылыс, —
Ҡитғаларға Ҡояш илтәбеҙ.

Табындар көр. Ил күңеле хозур.
Көндәребеҙ сыуаҡ, һиммәтле!
Сыуаҡ йөҙлө алсаҡ кешеләрем
Ҡосаҡлаған Ҡояш-Икмәкте!

1977.

## Башҡорт ҡыҙы

Йәш ғүмерҙе, наҙлы сәскә, тиҙәр,
Халыҡ уны белмәй әйтмәгән.

Ә һине бит, һылыу, сәскәм, тиеп,
Таң еле лә әле үпмәгән.

Әсәң әле һине, бәпесем, ти,
Ҡыҙый, тиҙәр ҡулсыр малайҙар.
Ә үҙҙәре аяҡ тауышыңды
Алыҫтан уҡ танып тыңлайҙар.

Һылыуҡайым, ҡара төнкәйҙәрҙән
Алдырҙыңмы ҡара толомдо?
Таң шаңдағы ярып үткәнмәллә
Түбәңдәге һыҙма юлыңды?

Бер битең — Ай, бере — Ҡояш һинең,
Тамсылта нур — талир эйәгең.
Әйтсе, һылыу, ҡыйыу егеттәрҙең
Ҡайһыһына һин баш эйәһең,
Эстән генә янып-көйәһең?

Күҙе кемдең, сағыу Таңсулпандай,
Ҡарашыңды сағып иркәләй?
Ә төндәрен кемгә һығаһың йәш,
Ысыҡ ҡойған наҙлы сәскәләй?..

Ғорур һылыу! Бергә илең менән
Ғорур башлайһың һәр көнөңдө.
Көн нурылай текә, төҙ тотаһың
Томбойоҡтай нескә билеңде.

“Әнә бара Урал ҡыҙы!” — тиһен,
Күргән һайын һине, кешеләр.
Томбойоҡтоң сабыр моңһоулығын
Ҡурсау өсөн утҡа төшһөндәр!

Йәшә шулай, йәшә, башҡорт ҡыҙы!
Йәшлегеңде ғорур ҡурсала!
Саф ҡыҙҙарҙан донъя паклыҡ ала,
Паклыҡтарҙан гүзәл йыр ҡала.
Донъялар пак һинең арҡала!

4.10.1977.

## Их, һөйөргә ине...

Их, һөйөргә ине шундай йәрҙе —
Бер күреүҙән утҡа һалырлыҡ.
Аҙашҡанда тормош һуҡмағында,
Тыны менән тартып алырлыҡ.

Үпһен ине үртле ирендәре,
Һурып алып йөрәк-йәнеңде.
Уттан һыуға һалып тертләтерлек
Усаҡтарҙа яҡһын тәнеңде.

Тауышынан моңон тирһен былбыл,
Һулышынан шытһын шат гөлдәр.
Тулҡынынан тулыш толомоноң
Тулҡынланһын зәңгәр диңгеҙҙәр.

Их, һөйөргә ине шундай йәрҙе!..
Һәм шундай йәр керҙе өнөмә:
"Тының менән тартып алыр булһаң,
Утҡа һалыр булһаң, кил миңә!" —
Юғалды ул, шулай тине лә...

4.10.1977.

## Күк күлдәкле һылыуға

Эй күк күлдәк кейгән Күк һылыуы,
Күк таңдарҙа ниңә күрендең?!
Юйып иҫтән ерҙә икәнемде,
Буй етмәҫтәй Күккә үрелдем...

Күкрәтһәңсе төпһөҙ Күктәреңде,
Тетрәтһәңсе екһеҙ Еремде!
Һинһеҙ Күгем — һаңһыҙ Күк инде...
Һинһеҙ Ерем — моңһоҙ Ер инде...

4.10.1977.

## Был илаһи тауыш

Был илаһи тауыш, яҙ тауышы,
Ишетелде миңә бурандан.

Өйөбөҙҙөң тәҙрә тәңгәлендә
Үтеп киттең, көлөп, урамдан.

Бәҫ буҙарҡан тәҙрә быялаһы
Һулышыңдан ҡапыл терелде.
Боҙсәскәнең боҙо, бөрөләнеп,
Йөрәгемә минең бәрелде.

Аҙымдарың талды таң юлында.
Ап-аҡ ҡарҙа ап-аҡ эҙ ҡалды.
Йөрәгемә үргән ап-аҡ гөлөң
Һулышымды өтөп ҡуҙланды...

5.10.1977.

## Теләк

Ике күҙең — ике Байҡал күле,
Сағыл ҡая — текә маңлайың.
Күлдәреңдең ҡоңғор нурын уртлап,
Сағылыңа башым һалайым.

Дөмә-күктең дөрләү йондоҙҙары
Иңебеҙгә иңрәп ауһындар.
Дауыллатып йөрәк тибештәрен,
Ирендәрҙә гөртләп янһындар.

Ҡояш байышынан ҡалҡһын Ҡояш
Һәм Ғаләмде алйып буйлаһын.
Мәңгелеккә сумған таш балбалдар,
Тәбрик итеп беҙҙе, уянһын.

Туң суйырҙар иреп һулыштарҙан,
Ҡанатланып осһон күктәргә.
Алтын былбыл, алҡып, сиртһен алҡыш
Ҡояш ҡайған алтын ептәрҙә.

Бөтәһе лә булыр...
Ер бәүелер,
Сөм-Байҡалдар сихыры теләһә.
Күҙ ҡараңа ал да төн, көнөмдө,
Мине генә шунда биләүлә!

11.10.1977.

## Аҡ ҡайғы

Төштәремдә күреп уянамын
Һаҡмар һыуын, һары талдарын.
Аҡ күлдәксән генә, ялан аяҡ
Сабам, сыйып ярҙың ҡарҙарын.

Сапҡан ғына һайын, сәңгей аяҡ,
Табандарым ҡарға йәбешә.
Тоя алмай тәнем ер йылыһын,
Баш ҡынайым түбән әүешә.

Төшәм, ырғып, киртләс-киртләс ярҙан,
Ҡаплаған боҙ — унда Һаҡмар юҡ.
Боҙ-быяла аҫтын, шылтыр-шылтыр,
Тырнап илай туңған томбойоҡ...

Эй бала саҡ! Керһеҙ аҡ күлдәгем!
Әйләндеңме инде күк боҙға?!
Томбойоҡтай моңло, саф йөрәгем,
Тибеп боҙҙо, илай һәм һыҙлай.

Аҡҡан һыуҙар кире ҡайтмай, тиеп,
Суҡый күкбоҙ, һыҡтап, буҙтурғай.
Ҡанатланып осоп китеүҙәрем —
Кисә генә күргән төш, буғай...

Төштәрем, хуш!
Сикә сәстәремә
Боҙло ядкәр һыҙып яҙылған.
Күбек ҡарҙар баҫкан күк донъямдың
Аҡ ҡайғынан биле һығылған...

11.10.1977.

## Шағирәгә

Хәтерҙә бик, минең хәтерҙә
Ул сихри кис, сихри аҡ һының:
Аҡҡош һымаҡ сығып сәхнәгә,
Иҫ китмәле шиғыр уҡының.

Шиғыр тиңләп наҙлы һыныңа,
Һөйҙө һине залдан мең күҙҙәр.
Һулышыңдан гөлтләп-ҡабынып,
Дөрләп торҙом шунда мин — йүләр...

Күҙ алдымдан аҡты аҡ һының,
Күңелемдә ҡалды ялҡының.
Йөрәгемә ҡылыс ҡаҙаның!..
Ҡыҙған мине! — булдым хаҡ ҡының!

12.10.1977.

## Утлы уйын

Ут менән мин һәүәҫ шаярырға —
Яланғас ҡул тотам ҡуҙҙарҙы.
Әллә ниңә, һине күргәс кенә,
Ике битем ҡуҙҙай ҡыҙарҙы.

Йөрәгемде өттө был ҡуҙраулыҡ —
Һулышыңдан, дөрләп, ут йотам.
Ә төшөмдә һаман ут уйнатам,
Ике ҡулымда ҡуҙ ҡуҙлатам.

Унының һайын, һыҙып йөрәк майын,
Тарта бара был ут уйыны.
Күҙем асһам, һулар һулышымды
Ойоҡһота утлы ҡойонон...

Төштә түгел инде — өндәремдә
Ҡуҙраулығың менән ҡуҙарам.
Аҡ һыныңды күрһәм аҡыл юям,
Бер ағарам һәм бер ҡыҙарам.

Тик күрмәнең мине... Юл бирмәнең
Дөрләүемде асып һалырға.
Үтте йылдар... Аймылышты юлдар...
Күңелемде инде ҡар һырған...

Кире ҡайтмаҫ янып тилереүҙәр...
Устарыма һалҡын боҙ яуа.
Күрмәҫ өсөн һине, көнө-төнө
Боҙҙар аша бағам, диуана...

Һулыштарым — һуңғы туңмыштарым...
Тик, ни күрәм! — һин бар донъяла!
Көләүеңдән, -- сыйнап! -- китте сатнап
Йәнгә ҡатҡан күкбоҙ-быяла.

“Мин — ут! — тинең. —
Уйнат! Мә, тот!” — тинең.
Һәм мин әйттем ихлас:
“Юҡ! Тамам!..”
Ҡуҙҙарыңды төртөп боҙҙарыма
Уйнатһаң да инда уйнамам!

Ҡалма ләкин минең хәлемә һин,
Боҙға туңып, ҡуҙға ҡурылып.
Әйт миңә тик ҡасан туңғаныңды!
Янғаныңды белдерт бер юлы!

Үбеп-һурып алып боҙлоғоңдо,
Утлы йөрәгемә йомормон.
Утлығыңды уртлап урттарыңдан,
Иренемдә ҡымтып тотормон.
Йотормон...

1.11.1977.

## Күк иҙел һылыуына

Күк иҙелдең кистең һыуҙарын,
Күк суйырын һирпеп уйнаның.
Һары һандуғасҡа һарылып,
Зәңгәр күктең төбөн буйланың…

Күк иҙелдең нескә талылай,
Ҡонажындың ебәк ялылай
Һомғол-һылыу ине буй-һының...
Ирендәрең — йүкә балылай...

Алдыртманың нескә билеңде,
Тоттортманың былбыл-тилеңде.
Төшкәйҙәрем инде төшөңкө...
Кил, кил инде, тағы кил инде!..

Талып күҙем, күпме эҙләнем,
Күк илеңдән тауыш бирмәнең.
Әллә инде, менһен үрҙәргә,
Өлгө булып тиле күптәргә, --
Бейегәйһен, тиеп теләнең...

Тейҙе түбәм күптән күктәргә —
Күк көмбәҙен иңем күтәрә.
Күк иҙелле күкшелт арағa
Ятты кереп монар-шекәрә…

Сыҡты шытып ерҙән һары тал,
Төштө тамып үрҙән һары бал.
Пыр-туҙҙырып һары ҡамылды,
Үтте сабып байтал — һары ял.

Һарылыҡҡа донъя төрөнә.
Сабырлыҡҡа донъя күмелә...
Әллә ниңә сабыр доғамдың
Сабыр йолалары өҙөлә...

Төшә күҙем талдың осона —
Зәңгәр былбыл унда осона.
Күк талсыбыҡ, сәпәп битемде,
Тамыҙа бал ирен осома…

Аһ балы ла балы — йүкә бал!
Ҡамыллыҡта — күм-күк ҡурпы-шал.
Үтте сабып күкшелт ҡонажын —
Елберҙәне елгә күм-күк ял!

Күк монарҙың йырып тулҡынын,
Зәңгәр һандуғасҡа тотоноп
Сыҡтың килеп, елеп, яныма
Һәм күк мәҙхиәһен уҡының.

Тубыҡтарым кинәт бөгөлдө,
Күк көмбәҙем түбән эйелде.
Тотам ғына тигән былбылым
Һине алып күккә сөйөлдө...

2.11.1977.

## Сер

Йөҙ йәшәнем кеүек, бер үҙем
Йөҙ кешенең күреп күрмешен.
Систем мең-мең серҙәр төйөнөн,
Бөттөм кеүек белеп ер эшен.

Йөҙ бәхеткә үҙем ирештем,
Татыным йөҙ ожмах емешен.
Әммә тик бер емеш емендә
Тылсымыңдың тойҙом еңмешен.

Йәнекәйем, берҙән-бер генәм,
Айный алмай һинән тилерәм.
Сиселмәҫлек серҙәр төйөнөн
Бөргән икән һиндә ер генәм!

Йөҙ ғүмерем етмәҫ һөйөргә,
Күҙҙәреңдең нурын тирергә.
Сиселмәгән һуңғы сер булып
Ҡалырһың һин, ахыры, ғүмергә.

2.11.1977.

## Роман

Яҙмыш итте беҙҙе авторҙаш,
Яҙыу өсөн һуңғы моң-роман.
Ул романдың япһам биттәрен,
Урамыңа ҡайтып урамам.

Китер юлым ҡоштар юлынан,
Күмелермен офоҡ артына.
Беҙ ултыртҡан ҡусҡыл тирәктең
Япраҡтарын елдәр тартҡылар.

Аҡ йондоҙҙар булып яралыр
Һуңғы тапҡыр ҡойған күҙ йәшең.
Һинең менән минең арала
Тик Күк кенә булыр көндәшең.

Бергә яҙған ярһыу романдан
Алыр яҙҙар, алйып, туй йырын.

Шул ваҡыт мин һалҡын Ғаләмдән
Йылылығын ерҙең тойормон.

2.11.1977.

## Күҙ ҡараһы

Күрҙем килер ап-аҡ көндәрҙе,
Ҡорҙом аҡтан хыял-һарайҙы.
Тоймай ләкин донъям аҡлығын,
Ҡарай-карай, күҙҙәр ҡарайҙы.

Булманы ал — алғыр йылдарым,
Ҡара ҡырау тынды йыш ҡурҙы.
Илде өткән көндәр ҡараһы
Күҙ ҡарама кереп ултырҙы.

Йөрәгемде ләкин йөрөттөм,
Уҡ-һөңгөнән хатта ҡапламай.
Хәҙер уны үтә күрмәле,
Тишкеләнеп бөткән ҡалҡандай.

Ҡанһыраған ҡара яралар
Бар донъянан шунда йыйылды.
Әсеттереп йөрәк башҡайын,
Сабыйҙарҙың йәше ҡойолдо.

Һылыуҙарҙың күмер күҙҙәре
Мөһөрләнде миндә ғүмергә.
Еңгәйҙәрҙең һуңғы өндәре
Тороп ҡалды, һеңеп бәғергә.

Тишкеләнгән йөрәк-ҡалҡаным
Мине мәңге түҙмер яһаны:
Донъя елдәренән екһенмәй,
Үткәрәмен аҡ һәм ҡараны.

Йөрәк-ҡалҡанымдың артында
Бабаларым барлап ултыра.
Аҡ һәм ҡараларҙы бизмәнгә
Инәйҙәрем инләп тултыра.

Бизмән табаҡтарын баҫтыртып

Ҡара һәм Аҡ ғәҙел герҙәрҙән,
Ҡара күҙе ап-аҡ алмалы
Хаҡ-сабыйҙы улар ебәргән.

Йөрәк ярып сығыр ул улан —
Бизмәнсеһе Аҡ һәм Ҡараның.
Киләсәккә мин шул сабыйҙың
Күҙ ҡараһы булып барамын.

2.11.1977.

## Саған

*Рәмигә.*

Һынды, шартлап, йәшел бер саған,
Иртә ҡарҙан биле һығылып.
Көрт өҫтөндә, олон эҙендә,
Йәшел ҡаны ҡалды ағылып.

Көткәйне ул һалҡын күктәрҙән
Ыуыҙ кеүек майҙың ләйсәнен,
Һуңлап ҡалған ләйсән, ҡарланып,
Киҫте уның һуңғы йәшнәүен.

Ҡалды йыры, ҡарға һыҙылып:
"Һуңғы йәшнәү ҙә һис һуң түгел!"
...Туңған ләйсәндәрҙең йылыһын
Тоя алмай китте саф күңел...
Һуңғы йәшнәү ҙә тик һуң түгел...

2.11.1977.

## Кристалл

Кристалланып ҡатты бәғерем,
Иламайым инде сабыйса.
Көләүҙәрем, көлмәҫ күҙҙәрем —
Бөтәһе лә инде яңыса.

Яңы хатта атлап барышым,
Үҙ-үҙемде үлсәп тотошом.
Тиреләнеп йәнде тилертмәй
Тиреләрҙән-тиле моң ҡошом.

Иҫтәлектәр, иҫәр ярһыуҙар
Башҡайымды башҡа сыуалтмай.
Һылыуҙарҙың сыңрап көлөүе
Күңел арфаларын сыңлатмай.

Тыуа алмай туңа йырҙарым,
Кәрниздәргә ҡатҡан боҙ кеүек.
Томаланған кристалл-хистәрем—
Ҡоторсоҡта ятҡан тоҙ кеүек.

Башкөлләйем — һалҡын кристалл,
Бер бағыуҙан үтә күрәһең.
Тик... кристалда тибә, тырпырап,
Һөйөү көткән тере йөрәгем…

2.11.1977.

## Таңғы йыр

Таң әтәстәрен уятып
Кем йырлап уҙҙы икән?
Ғүмеркәйе, буҙ күлдәктәй,
Иҙерәп туҙҙы микән?

Моңдары ауыл осонда...
Эҙҙәрен ел тигеҙләй...
Йәнекәйем, кил янымa,
Йөрәгем һине эҙләй!

Таң әтәстәре ҡысҡырмай,
Таң моңон боҙмай әле.
Тилергән йөрәктәребеҙ
Һөйөүҙән һыҙлай әле.

Өндәребеҙ – өйөрмәлә,
Хистәребеҙ – буранда...
Әтәстәрҙең иң алйыған
Мәле беҙҙең урамда...

Йәнекәйем, ят иңемә,
Йәнкәйем һыҙһын әле.
Үтелмәгән таңдар алда,
Урамдар оҙон әле.

Уйҙарыбыҙ — уйым-уйым,
Буйҙары буйланмаған.
Таң әтәсе ҡысҡырмаған,
Йыр әле йырланмаған!..

3 — 4.11.1977.

## Һағыныу

Көр Сулмандан — йылғыр Яйыҡҡаса,
Йор Иртыштан — алғыр Иҙелгәсә
Ҡосор инем, аунап, был ерҙе:
Күңелкәйем шундай тилмерҙе!

Сөнки һәр бер үлән остоғо
Бында, минең тыуған илемдә,
Күҙгә ҡарап ихлас һөйләшә,
Илай, көлә әсәм телемдә...

11.11.1977.

## Яҙ йыры

Комсомолия! Һин — Партияның
Үткер штык яҙған яҙ йыры!
Штыктарың, йәшел ҡыяҡ ярып,
Йәшлек яҙын Ерҙең яҙғыры!

Комсомолия! Һин — кешелектең
Бөҙрә талға ҡунған былбылы!
Былбылдарың, ҡыуып ерҙең зарын,
Мөхәббәткә мәҙех булғыры!

Комсомолия! Һин — май айының
Тәүге йәшен, күкрәү ауазы!
Күкрәүҙәрең, еңеп тетрәүҙәрҙе,
Тыныслыҡҡа алып барһасы!

Комсомолия! Һин — йылы бөркөп
Яуған ләйсән — йәшлек ямғыры!
Ләйсәндәрең, ялап ҡом сүлдәрен,
Планетаны ялмап алғыры!

Комсомолия! Һин — мәңгелектең
Мәңге тынмаç ярһыу йөрәге!
Йөрәктәрең, сәсеп тормош кәрен,
Игелектең булһын терәге!

Хаҡиҡәтте таймаç илсе итеп,
Хаҡлыҡ юлын юллап барғыры!
Комсомолия! Һин — Планетала
Илем йәшлегенең яҙ йыры!

23.11.1977.

## Алһыу елкән

Ярһыу дауылдарҙың ҡосағында
таңға ҡарай Ерем елә икән, —
беләм:
Ҡояш елдәренә иңен кереп,
Ҡояш йөҙлөгөнә йөҙөн биреп,
Планетаны илтә алһыу елкән!

Дүрт ҡибланы ҡоса космос иңе —
ҡитғаларҙа офоҡ ҡуҙрай.
Күк керешен сыңғырҙата тартып,
төн ҡараһын иңдәренән атып,
Планетам таңы баҙрай.

Яугир дауылдарҙың ҡосағында,
юлын ярып, Ерем елә икән, —
беләм:
Ҡояш шквалына иңен кереп,
Ҡояш йөҙлөгөнә йөҙөн биреп,
Планетаны илтә алһыу елкән!

Ғаләм боҙлоҡтарын боҙоп дөргән
атом боҙватҡысы һымаҡ бара
ал елкәнле зәңгәр Планетам, —
Кешем, күҙең асып ҡара!

Синфи бәрелеше боҙлоҡтарҙың
сыя ҡорос борт һәм килдәргә,
төндәрҙә.
Ләкин ерҙең йәп-йәш Корчагины,

Матросов һәм Ғөбәйҙуллиндары
алһыу елкән кирә елдәргә!

Кешелектең Ҡояш йырлы яҙы! —
Юҡ бөгөлөү, һыныу йәшлеккә!
Беҙҙең елкәндәрҙең алһыу нуры
боҙлоҡтарҙа ҡыяҡ йәшнәтә!

Мәңге йәшә,
йәп-йәш Планетаны
мәңге йәшлек яҙҙарына илткән,
ҡайнар йөрәк ҡандарыбыҙ типкән
Алһыу Елкән!
Мәңге йәшә!

23.11.1977.

## 1978

************************

### Дуҫтарға

Маҡташмайыҡ, дуҫтар, бер-беребеҙҙе,
Зинһар, баллашмайыҡ, --
Сөсө һүҙҙәр
Ҡыйын, ҡыйын миңә.
Һеҙҙе бит мин үҙем кеүек беләм, --
Һеҙҙе күрһәм,
Үҙем күҙ алдыма килә.

Күкрәк ҡағып йөрөү, тубал тағып,
Көҙгө боҙҙа —
Килешмәй һис беҙгә:
Яҙылып яҙын яҫмыҡ сәсер саҡта
Көҙгө "батыр" —
Йоҡлап ятыр өйҙә…

Юҡты ниңә "бар" тип шаштырырға —
Һеҙ өрһәгеҙ ҡыуыҡ,
Гүйә, мин өрөләм.
Барҙы ниңә "юҡ" тип йәшерергә —
Һеҙ ҡымһағыҙ сирҙе,
Гүйә, мин бер үләм.

Дорфаланып, йомһағыҙ күҙ көнгә,
Тирә-йүнгә —
Гүйә, мин дә, дуҫтар, дөмә-һуҡыр...
Был донъяның
Әсе-сөсөләрен
Йотмаһаҡ беҙ, кем һуң инде йотор?

Һанлаһағыҙ әгәр, дуҫтар, мине,
Зинһар инде,
Бәғзе бәләләрҙән яҡлағыҙ:
Үҙемде мин һеҙҙең аша күрәм —
Үҙегеҙҙә мине һаҡлағыҙ.

1978.

## Башҡортмон

Бер халыҡ та тыумай "холоп"лыҡта —
Ҡол ҡылмағыҙ мине аҫтыртын!
Ҡатил балталарын ҡаты ҡайырып,
Ҡаты торған ғорур башҡортом.

Башҡортлоғом өсөн батшаларҙан
Янаһа ла яһил баш ҡырҡым,
Баш бирмәгән сөнки бабаларым,
Әйткән ҡырҡып: "Эйе, башҡортмон!"

Ер ожмахын вәғәҙә итһәләр ҙә,
Ваз кисkәнгә, һатып баш йортон,
Ваз кисмәгән минең бабаларым,
Киҫкән өҙөп: "Юҡ! Мин башҡортмон!"

Бығау өҙгәс Рәсәй халыҡтары
Азатлыҡтың даулап баш йортон,
Ҡылыс айҡап башҡорт ғәскәрендә
Барған атам: "Азат башҡортмон!"

Шул уҡ ҡылыс менән тураҡланыҡ
Фашизмдың шаҡшы, хас ҡортон.
Урал ҡылысы ла рейхстагка
Яҙып китте: "Еңмеш башҡортмон!"

Тиңдәр араһында бер тиң булып,
Туғанлыҡтың тойҙоҡ баш ҡотон.
Күкрәп сәскә атыр Ватанымда
Сәскә атыр өсөн — башҡортмон!

Планетаның ырыҫ күсәренә
Бүҫкәрмәҫлек ырыҫ ҡаушырттым.
Ерҙе-Күкте бергә тоташтырып
Мәңге йәшәр, йәшнәр башҡортом!

Шуға күрә беҙҙе донъя күрә —
Күтәрелә бейек баш йортом.
Киң донъяға ҡарап киң күҙләшкән,
Тиң һөйләшкән тиңһеҙ башҡортмон!

1978.

## Тыуған ер

Эй Уралым, ғәзиз ер генәм,
Былбыл телле туған моңдарым!
Һеҙҙең аша танып белдем мин
Ерҙә мең ил, мең тел, моң барын.

Шул мең телдәр, моңдар эсенән
Туған иткән Хоҙай тик берен.
Мең былбылдан — Урал былбылы
Минең өсөн арнай ғүмерен.

Мең биҙәкле сағыу Уралым, —
Әсәм түшәп биргән келәмдәй! —
Күңеленә кемдең мәңгелек
Биләмәләр булып биләнмәй!

Эй Уралым, былбыл телеңдә
Йырым менән моңом селтерәне!
Хыялымды тартты тауҙарың —
Әсәйемдең баллы күкрәге.

Баш ҡынайым китһә олағып
Һәм ҡаңғырһам, һиңә ҡайталмай,
Төштәремдә елеп үттем мин
Ҡырҙарыңды, ҡырҡмыш байталдай.

Ҡусҡыл ҡурай ҡыяҡ ярғанын
Тилерҙе гел йәнем ишетеп.
Төшөм менән ҡуша түшемде
Тартты тыуған тупраҡ, иш итеп.

Тойоп түшем — түшең йылыһын,
Аунап ятып нәк тай, туланым.
Ҡылғандарға серем сурылдап,
Ҡолонсаҡтай сыңрап-сыйнаным...

Эй Уралым, ғәзиз ер генәм,
Ысынлап та булһам әгәр тай,
Үтер инем аунап иңеңде,
Ярған саҡта ҡыяҡ йәш ҡурай.

Ҡалыр инем мәңге-мәңгегә
Һандуғаслы йәшел ҡыяҡта.
Сөнки  йәнде арбап, былбыллап,
Баллы әсәм ята был яҡта...

Шуға һәр бер үлән остоғо
Бында, минең ғәзиз илемдә,
Күҙгә ҡарап ихлас һөйләшә,
Илай, көлә әсәм телендә.

8.04.1978.

## ЯНҒАНТАУ ДӘФТӘРЕНӘН

### Янғантау йыры

Ҡаратауға сәләм бирә
Янғантауҙың аҡ ташы.
Ҡайғыларҙан арындыра
Аҡ баҫҡыслы тау башы.
Их!
Янғантау — ул шатлыҡтарҙың,
Сафлыҡтарҙың аҙашы.

Янғантауҙың яландарын
Юлай юллаған икән.
Салауат батыр ҙа бында
Юҡҡа булмаған икән.
Их!
Килгән берәү, килгән берәү
Күреп туймаған икән.

Янғантауҙың ҡаяларын
Ҡосаҡлап бер йырланым.
Йырланым да үткәндәрҙе,
Киткәндәрҙе уйланым.
Их!
Йүрүҙәндең көмөш моңон
Тыңлай-тыңлай туйманым.

Янғантауҙың йәне ялҡын,
Һалҡын — һыу тулҡындары.
Йөрәгемде ялмап алды

Мөхәббәт ялҡындары.
Их!
Булһын ине яндарымда
Йәнемдең яҡындары.

Баҫҡыстарҙан менгәнемдә
Баҫмаларын һананым.
Ғүмер баҫкыстары һымаҡ
Икән был, тип уйланым.
Их!
Янғантауға тағы-тағы
Килермен – һис туймамын.

7.08.1978.

## Йүрүҙәндең аҡ кереше

Йүрүҙәндең аҡ кереше
Тауҙан — тауға тартылған.
Уҡ башағы Ҡаратауға —
Ҡара янға артылған.

Быуаттарҙың утлы усы
Кирә тарҡкан кереште.
Янғантау – ус-усаҡ, янып,
Башҡарамы көр эште?..

Көстән ашҡан көсөргәнеш —
Күкрәгендә ут дөрләй.
Дәүер еле, киршәй-киршәй,
Уҡ башағын үткерләй.

Салауаттар ҡайҙа икән?.. —
Тора уҡ-ян, бер килеш.
Янғантауҙың янғыр уғы
Атылырға бит тейеш...

...Сарлап уҡты, ағылалар
Йондоҙҙар һәм Ғаләмдәр.
Янғантауҙың сабырлығын
Алһын ине әҙәмдәр!

Уҡты кирем керешендә

Тотоу, бәлки, ирлектер?..
Уҡ баһаһын белһәң генә,
Атып дошман һөрлөктөр.

7.08.1978.

## Ҡаратау

(Рәми иҫтәлегенә)

Һаумы, һаумы, Ҡаратау,
Ҡара яуҙар барған тау.
Ҡыҙылдарҙан, аҡтарҙан
Ҡаяң ҡанап ҡалған тау.

Ҡанлы-яулы дауҙарҙа
Башын монар алған тау.
Партизандар һуҡмағын
Ташҡа уйып һалған тау.

Комсомолдар, ҡомаслап,
Ал таҫмалар тартҡан тау.
Ал монарлы таңдарын
Ҡанға мансып атҡан тау.

Тәүге “Фордзон” гөрләүе
Тетрәндергән һиҙгер тау.
Тәүге колхоз уңышы
Тибрәндергән тилбер тау.

Илгә афәт килгәндә
Батальондар биргән тау.
Фашист ҡара тауҙарын
Ҡаршы барып ҡырған тау.

Ватан менән, гөрләшеп,
Еңеү туйы ҡорған тау.
Аҡыҡ-хаҡлыҡ байрағын
Елберҙәтеп торған тау!

Эй һомғол тау, һомғол тау,
Һынсыл дуҫым тыуған тау.
“Туған тел” тип ташына
Ынйы шиғыр ҡойған тау.

“Ҡара тауға ҡуйығыҙ”, —
Тип васыят иткән тау.
Шағирының ҡайтырын
Күҙен төбәп көткән тау...

Эй Ҡаратау, Ҡаратау,
Ҡара төнөн ҡыуған тау.
Салауаттар оранын
Салауатлап торған тау!

7.08.1978.

## Салауат ерендә

Инде бына нисәнсе ҡат мин Салауат ерендә!
Зымлай табан — тапап барам төçлө табын түрендә...

Баçҡан һайын, ерҙең тере туҙандары ҡыбырлай,
Үләндәре, әйтерһең дә, өлән әйтеп шыбырлай.

Һәр күҙәнәк һаҡлай бында Салауаттың ядкәрен,
Нисә быуат ҡурсалайҙыр, ҡағылдыртмай ят кәрен!

Ҡалҡа иртән Йүрүҙәндән һөттәй ҡуйы аҡ томан —
Салауаттың сисеп һалған аҡ күлдәге пак һаман...

Ысыҡ тама ҡыяҡтарға — Салауаттың күҙ йәше.
Көрһөнәләр төҙ имәндәр — Салауаттың тиңдәше.

Һуҡмаҡ үтә тауҙа түтә — Салауаттың һуҡмағы.
Был сал ҡая — баһадирҙың ырғып үткән тупһаһы.

Ята аунап һуйҙан саған — батыр атҡан уҡ һыны.
Алһыу сәскә һәм еләктәр — Салауаттың ал ҡаны.

Һарылары — ил улының һағыштары бөткөһөҙ.
Зәңгәрҙәре — хыялдары күктәй барып еткеһеҙ.

Аҡсәскәләр — батыр баҡҡан асмандағы йондоҙҙар:
Салауатты ҡотлап улар ошо ергә яуғандар.

Былбылдары-һомғолдары — үҙенә бер тамаша:
Салауаттың саф исемен әйтеп улар һайраша.

Баҫҡан һайын, ерҙең тере туҙандары ҡыбырлай,
Әйтерһең дә, һәр береһе "Салауат!" тип шыбырлай.

Ауыҙ асып өн һалыу ҙа — яҙыҡ кеүек был ерҙә.
Мөмкин бары "Салауат!" тип тыуырға һәм үлергә.

7.08.1978.

## Ҡурай

Янғантауҙың сауҡа аҡланында,
Көтмәгәндә, күрҙем йәш ҡурай.
Ҡоролоҡто еңгән еңмеш ерҙең
Көр һулышы ине ул, буғай.

Көмөш суҡлап теҙгән йондоҙҙарын,
Ҡыяҡтарын ҡыйған алҡалай.
Үлән баштарынан үрә ҡарап,
Ҡул болғаны миңә был малай...

Һөйҙөм, барып, һомғол һабағынан, —
Башын эйҙе йәшел буҙ бала.
Юҡ, өҙмәйем! Ерҙе йәшәртерлек
Һинән башҡа йәм юҡ донъяла!

Йылдарымдың һүнмәҫ моңо булып
Йөрөрһөң һин мәңге йәнемдә.
Ҡурайһыҙ йән бит ул — ҡыуарған йәм...
Ҡурай ҡуры ҡайнай ҡанымда!

Ҡотлап көндө үҫ һин, йәш һомғолом,
Суҡтарыңды елдәр таралтһын.
Әсәм бишегенән был еремде
Һомғол ҡурай итеп яраттым.

7.08.1978.

## Һыҡтау

Йүрүҙәндең ебәк һыуҡайҙарын
Эстем ятып, һыуһын ҡанғансы.

Йырлайым да әле бер илайым,
Күп йөрөнөм йөрәк янғансы.

Ҡасан ғына инек бында икәү,
“Мәңгелеккә!” — тинек, хаҡ инек.
Боролоп та аҡҡан бормаларҙы
Кискәс инде ярым ят инек.

Йәнде тартҡан хыял шәрбәттәре
Яҙмыш кәсәһенән түгелгән.
Күктән ауған йондоҙ шәүләләрен
Күрәм инде күҙең төбөнән...

Икәү инек, хистән миңкәү инек,
Йүрүҙәндең баҫҡас ташына.
Инде һинең һомғол-йомғол ҡулдар
Ҡаҙай бысаҡ йөрәк башыма...

Иҫерҙекме, әллә иҫкерҙекме...
Иҫкәйҙәрҙе йыйыр юҡ сара.
Йүрүҙәндең ебәк тулҡындары
Бер һөйә лә йәнде, бер сала...

7.08.1978.

## Ҡорғаҙаҡ

Ҡурыҕ-әсәк (ҡурғып-ҡурсаларға тейешле
изге һыу) — ошо тәүге атаманан
“Ҡорғаҙаҡ” сыҡҡан, имеш...

Тойолһа ла “ҡоро” һүҙе һымаҡ,
Ҡоро түгел икән Ҡорғаҙаҡ.
Ҡойоу өсөн, урғып, Йүрүҙәнгә —
Кисерергә әҙер ҡырҡ аҙап.

Әйтмәгеҙ тик: булһын ниндәй аҙап,
Уҙғанында шундай ҡыҫҡа юл.
Һемереп беҙ, һулыш алғанғаса,
Миллиард йыл-ара үткән ул!

Әле генә ике тирмәненең
Әйләндергән, йырлап, таштарын.
Әйләнәлә йылдар онтағандар

Күпме илдең, ирҙең баштарын!

Әсә һөтө һымаҡ сыға тиртеп,
Әсә күкрәгеләй тау битләп.
Туҡталмайса аға, аға, аға,
Әҙәм ирендәрен сихәтләп.

Үлеп барғандарҙы терелтергә,
Эҙләй-эҙләй сигеп мең ғазап,
Урал батыр тапҡан йәншишмәбеҙ —
Үҙе икән ошо Ҡорғаҙаҡ!

Әсә ағындағы сихәттәрҙең
Сифаттары тере һыуҙа бар.
Эскән кеше — була эшсән, көслө,
Моңһоҙ йәндәр була моңлояр.

Тамаҡтарға ҡаймаҡ яғылыумы,
Шәрбәтеме әллә асмандың?!
Йотҡан һайын, йотам ғәжәпләнеп,
Тылсымдарын тойоп әсәмдең!

Ҡорғаҙаҡҡа килһәң сигеп ғазап,
Ғазаптарҙы юя Ҡорғаҙаҡ.
Менгән һымаҡ, ырғып, толпарыңа,
Йүнәләһең унан һин аҙаҡ.

Йәйен-ҡышын ҡусҡыл гөлбаҡсалы
Быуаһында — тылсым донъяһы.
Ҡарап уға, һүнмәҫ йәшлегеңде,
Мәңгелеген ерҙең тояһың.

Ҡорғаҙаҡтың сөмгөл төпкәйенә
Һалып киттем көмөш бер тәңкә.
Эйелеп һыу алған һылыуҙарҙың
Төҫөн сағылтһын, мин килгәндә.

8.08.1978.

## Йәшен

Өлгөрмәнем барып һөйәлергә, —
Йәшен атты ап-аҡ ҡайынды.
Аҡыҡ шәмдәй балҡыу аҡ ғүмере

Ҡара һөрөмләнеп байыны.

Һары башлы көләс көнбағыштар
Торҙо бағып әсе үлемде.
Сәрпәкләнеп оскан ҡанлы туҙҙар
Аҡлан итәгенә түгелде.

Һерәйеп тә ҡалды һыныҡ олон...
Сыраланып ҡатҡан, бисара.
Беҙҙе көткән йәшен ҡамсыларын
Онотмаҫҡа был һын — ишара...

8.08.1978.

## Күк мәтрүшкә

*Н-га.*

Арнап йыйҙым һиңә күк мәтрүшкә
Күкрәп торған йәшлек эҙеңдән.
Ерең шундай шифа-сәскәгә бай —
Алғандыр нур зәңгәр күҙеңдән.

Күк һырттарын һыртлап Янғантауҙың,
Һуҡмағыңа һуҡмаҡ һырланым.
Исемеңде яҙып киттем ташҡа —
Ҡаяһында мәғрур ҡырланың.

Шул ҡаяға күкшелт болан ҡалҡты,
Мөгөҙөнә Ҡояш ҡармалап.
Йүрүҙәндең йүләр йөҙкәйенә
Сәсрәп китте утлы тармалар.

Һулышымды өрҙөм йырлы ташҡа —
Ҡалды ҡалғып моңло исемең.
Ҡосағымда ҡайнай күк мәтрүшкә —
Күкрәр мөхәббәткә илсемен.

Төндәреңдә, моңһоу өйкәйеңде
Төрөр нурға йырлы күк сәскә.
Һине көтөп, күкһелт болан булып,
Ҡалам зәңгәр ҡая-киртләстә.

9.08.1978.

## Һүрәт

Йүрүҙәндең һомғол һылыуҙары
Толомдарын һыуға сайҡайҙар.
Ә үҙҙәре, ҡаплап саф йөҙҙәрен,
Һынсыл егеттәрҙе байҡайҙар.

Алдарында ағын-көҙгөләре,
Йыуған була сәсен, ҡатыҡлап.
Тыбырсына аҡҡа аҡ сабаҡтар,
Толом осҡайҙарын ҡытыҡлап.

Текә ярҙан төшә таш тәгәрләп,
Терелгәндер ул да — йәш күңел.
Ҡамыш һайын һағыш бәүелгәндә
Таш булыу ҙа бында — йәл түгел!

9.08.1978.

## Йор кәмә

Ағиҙелдән ағып килә
Йәшел иңле бер кәмә.
Йәшел еңле ишкәксеһен
Оҡшаттымсы иркәмә.

Үҙе ишә, үҙе көлә,
Күкрәксәһе ал ғына...
Һомғоллоғон һынап һыҡтай
Ярҙа үҫкән тал ғына.

Талғын ғына талып бара,
Күҙҙәре янып бара.
Таллы-толло ике ярға
Ялҡыны ҡабып бара.

Һыҙғырғайным, һиҙмәнесе —
Үтте-китте кәмәсе.
Тороп ҡалған тал-толдарҙы
Булманысы йәлләүсе.

Туҡталманы икән ниңә

Йәшел иңле йор кәмә?
Йәшел йәме, йәшлек сәме
Зәңгәр монар бөркәнә...

10.08.1978.

## Хат

*Н-га.*

Күк күгәрсен ҡунды яурыныма —
Изге билдә. Һинән хат көттөм.
Оҙаҡ үтмәй, буйҙаҡ-буш бүлмәмде
Көләс конверт кереп елкетте.

Һағынысың — яҡты яғынысың
Йөрәгемдә гөлтләп, ут алды.
Минең өсөн ваҡыт юйҙы көсөн,
Сәғәт секундтары туҡталды.

Хатыңдағы хаҡлы юлдар булып
Һуҙылдылар таңдар, дауылдар.
Араһында беҙҙе тик беҙ иткән
Бер йыл, бер ай, бер төн, дауыл бар.

Арауыҡтың ары ағылышы,
Таңланышы — шул төн хаҡына.
Бөтөн Ғаләм инеп ятҡан, тулап,
Ҡош телендәй генә хатыңа.

Шуға ла шул килде Ҡош Юлынан:
Хат ташыусым — күм-күк күгәрсен.
Ялҡыныңды алам таң еленән...
Күҙкәйҙәрең кеүек, күктәр сөм...

9.08.1978.

## Әрем

Янғантауҙың яҫы киртләсендә
Тап иттемсе далам әремен!
Һәм әйтте ул: “Рәхәт миңә бында.
Йүрүҙәндең һөйгән йәремен!”

Һөйгәндәргә йола — түгел кәртә,
Ҡосаҡлаша тау һәм сал дала.
Ҡаратауҙан иҫкән талғын елгә
Әрем бөҙрәләре сайҡала.

Салауаттың сал саң-тупрағына
Килеш тә һуң әсе хуш еҫе!
Сейә сафлығына сеймәләнеп,
Хасил ҡыла ожмах букеты.

Әрем менән сейә әйтә миңә:
"Араларҙы арбап ҡауыштыҡ.
Беҙҙең өсөн бирә һөйөү көсөн
Һеҙҙе айырыусы алыҫлыҡ!.."

Сығып иртән, сихри юлдар үтәм,
Сафлыҡтарын һулап иҫерәм.
Гөнаһлығын ерҙең ғәфү итәм,
Ожмахлығын ерҙең кисерәм.

Сеймәлешеп, әрем менән сейә
Никах түшәгендә сайҡала.
Ғишыҡ ғилләһенән иҫерттертеп,
Иренемдә әсе саң ҡала...

10.08.1978.

## Ир ҡоро

Түҙҙем, таймай, яҙмыш таяҡтарын,
Һәм түҙергә тағы -- тайярмын!
Яурындарым — таяҡ һындырырлыҡ,
Һынмағаным өсөн ғәййәрмен.

Бәреп маңлай, ҡая ярғанымда
Күкрәгем ут саҡты, ышҡылып.
Уңлы-һуллы һулҡып баш эйергә —
Башҡортлоғом түгел бушҡыуыҡ!

Ары торһон минән ялағайлыҡ:
Бөркөт мороно — суҡып ҡайрала!
Ҡаршы һөңгән һөмһөҙ һөңгөләрҙе
Ҡайырып, көн илгә арала!

Бирмәнем буй — буйтлы ир ҡоромда,
Барҙым, барҙым ярып яу ҡырын.
Ватаныма ҡалҡан булғаныма —
Ҡатты беләк, ҡалҡты яурын.

Табаным таш төйөп дағаланды,
Туҡмап беште йоҙроҡ суҡмары.
Шуға күрә яҙмыш онтаманы,
Шуға күрә һағыш йыҡманы.

Үҙ тиреһен ҡурсап ҡурылғандар —
Бөгәрләнә, ҡорттай, сүплектә.
Сәүекләнеп ҡойроҡ болғай бәндә,
Һалғандан һуң башын этлеккә.

Хаҡиҡәтте иңдә илткән генә,
Донъя баҫкан һайын, турая.
Сүктертергә һуҡҡан һуйылдарҙы
Йыға һуғып ҡалҡа, ҙурая.

Уралтауҙай ныҒый хөр хаҡиҡәт
Ирҙәренән ерҙә — һабаҡҡа...
Илгә һуҡҡан йәшен йәҙрәләре
Яурынымда һынып тайғаҡлар!

10.08.1978.

## Хат яҙ, тиһең...

Хат яҙ, тиһең... Яҙыр һүҙең юҡта
Нимә булһа ла, хет, яҙ, тиһең.
Ебәрһәң дә сыйып көн шарттарын,
Күңел тыныр, хет, бер аҙ, тиһең...

Көн шарттары бында шул бер инде —
Беҙҙәгеләй һауа шарттары.
Төнөн, ҡойоп, ҡойма ямғыр яуһа,
Сыуаҡ сәсә ямғыр арттары.

Ҡатыҡ яҡҡан ҡайын ҡайыҙҙары,
Беҙҙәгеләй, алсаҡ ялтырай.
Йүрүҙәндең йөҙө күк томанда,

Беҙҙәгеләй, өшөп ҡалтырай.

Ҡамыштары ҡалҡыу, беҙҙәгеләй,
Һалҡын — үгәй инә үләне.
Беҙҙәгеләй, ҡара ҡарғаларҙың
Йыры йыра донъя күләмен.

Ҡалҡһа Ҡояш ҡалҡыу тау яғынан,
Ҡыя һуғып, ярҙы ҡаймалай.
Ята нуры ялтыр һыу йөҙөнә,
Ауып төшкән алтын ҡаялай.

Һулыштарҙы һурып һаулары
Иҫертә лә йәнде тилертә.
Әҙер төҫлө йөрәк Йүрүҙәндең
Һалҡын ташын ҡосоп үлергә...

Беҙҙәгеләй түгел бары тауҙың
Боҫрап сыҡҡан ҡайнар дауаһы.
Беҙҙәгеләй түгел ҡай сағында
Йәнгә үткән һалҡын һауаһы.

Былбыл моңон ойоп тыңлағанда,
Билде был ел боҙҙай һындыра.
Хәйер... был да бит тап беҙҙәгеләй:
Утың менән ҡуша боҙ тора...

10 — 11.08.1978.

## Кесерткән

Киртләс-киртләс тауҙың баҫмаһында
Ҡайҙан килгән ҡырыҫ кесерткән?!
Әллә, тимен, тылсым бында уны
Бала саҡтан беҙҙең күсерткән?..

Ялан аяҡтарҙы өтә ине,
Сағып, уның утлы әсеһе.
Һуғыш уты сығып һәм талсығып,
Көнбайыштан көттөк әсене...

“Фронтҡа” тип, һөрөп ҡайтҡас һабан,
Кесерткәндән ерҙе әрсенек.

Яланғасҡул ыуып, ашҡа һалып,
Астан үлер саҡта йәлсенек.

Аяҡтарҙа ҡышын быйма туҙғас,
Кесерткәнде ҡарҙан сүпләнек.
Киндерәгә унан сүс һыҙырып,
Күпме табандарҙы төпләнек!

Кесерткәндәй сағыу саҡтар беҙҙе,
Саға-саға, сабыр ир итте.
Ә шулай ҙа балдай татлы ине
Кесерткәнле әсе ер еҫе.

Һәм үҙебеҙ, атай булғас та беҙ,
Кесерткәнде алдыҡ һабаҡҡа:
Ҡулсыр уландарҙың арт һабағын
Уҡытҡыланыҡ шул ҡай саҡта...

Кесерткәнем, әрһеҙ ҡусҡыл дуҫым!
Онотҡан был, тиеп, ситләмә.
Һинән уҫалыраҡ кесерткәндәр
Сабып тора әле сикәмә!

Эйеләм дә өнһөҙ кесерткәнгә,
Ике усты уттан саҡтырам.
Илде өткән уттар араһынан
Бала саҡтың балын саҡырам.

11.08.1978.

## Гөлйемеш

Гөлйемеш, гөлйемеш,
Ерле юҡҡа көл имеш!
Бер һылыу ҡыҙ, ҡыҙҙырып күҙ,
Көлә ҡарап — был ни эш!

Гөлйемеш, гөлйемеш,
Мин дә әле, тим, еңмеш!
Көлгән күҙгә ҡарап көләм —
Әнә шулай беҙҙең эш!

Гөлйемеш, гөлйемеш,

Кемдә нескә бил имеш!
Ах, шулай ҙа йөҙө Ай ҙа
Буйы-һыны бик килеш!

Гөлйемеш, гөлйемеш,
Күҙҙәренән нур килмеш!
Әллә, тимен, нуры гөлдөң
Миңә генә бөркөлмөш?!.

Гөлйемеш, гөлйемеш,
Их, өлгөргән был емеш!
Түҙмәйемсе, өҙәйемсе,
Булмайымсы еңелмеш!

Гөлйемеш, гөлйемеш:
"Үҙ хәлеңде бел!" — имеш!..
Сәнстерҙе сәнскеһен —
Миңә түгел гөл имеш...

11.08.1978.

## Аҡ муйын

Аҡ кершәнле сауҡа сыуағында
Саңҡылдаша сәүкә — аҡ муйын.
Осорғандыр, барлап, балаларын —
Уҙғаралыр алтын көҙ туйын.

Елпенеп ел, һылыу тирбәләләр,
Үләндәргә тейеп, тәлгәштәр.
Төшөп бара тауҙан йәшел еңле,
Аҡ еләнле ҡайын-кәләштәр.

Сәүкә саңҡыуҙары сауҡалыҡтың
Аҡ юрғанлы ҡышын саҡыра.
Тау аҫтында ҡалғый күкшел шыршы,
Кәләш ҡуйынына ҡасырға.

Көн яғына осор бала сәүкә,
Ҡырпаҡ ҡарҙан булып аҡ муйын.
Сәүкә муйынының аҡ балдағы
Ҡотлар Ҡояш менән Ер туйын.

11.08.1978.

## Туҙбаш

Түбәләсен ята ялтыратып
Бала саҡтың туҙбаш йыланы.
Баҫа яҙып һоро ҡамсыҡайға,
Әллә ниңә йөрәк жыуланы.

Ҡалғанғалыр ҡурҡып йыландарҙан,
Сирғып киттем шомло һуҡмаҡтан.
Әммә "шомло"м, бахыр, шыуышалмай,
Тос ҡойроғо ерҙе туҡмаҡлай.

Уҫал йәнгә тарып ҡурҡҡан ҡыҙҙай,
Ҡарай миңә тертләп, һыҙлап та.
Түбәһендә — алтын ҡалпаҡҡайы,
Бәрхәт камзул иңен буйлатҡан.

Гөнаһһыҙ йән! Йыуаш күңелкәйен
Күҙҙәренән күреп аңланым.
Һомғол һынын ҡыҫҡан ҡыу ағасты
Юлдан ситкә алып ташланым.

Боролдо ла шылды моңһылыуым.
Рәхмәт әйткән кеүек кешегә.
Тыуған ерҙең хатта туҙбашҡайы
"Кеше һин!" тип иҫкә төшөрә.

11.08.1978.

## Тылсымташ

*Диҡҡәт Бураҡаевка*

Утлы тауҙың ҡотло итәгенән
Алдым, табып, күкһелт күбекташ.
Ташлағайным, юрый, Йүрүҙәнгә,
Һыу өҫтөндә ҡалды ул тоташ!

Эй был донъя! Таштары ла хатта
Батмаҫ өсөн батыр алыша.
Тау төбөнән утта ҡайнап сығып,
Ер тартымын еңеп ҡырҡыша.

Сүп-сар ғына йөҙә тотҡарлыҡһыҙ —
Сүпкә биргән хоҙай "өҫтөнлөк".
Тауҙар түҙемлеге — мәңгелеккә,
Ә сүптеке бары өс көнлөк.

Мин белгән көр йәнле ысын ирҙәр
Көр мәңгелек менән йәшәне.
Есемдәре гүргә кергәндә лә,
Ҡотайттылар Ватан-әсәне.

11.08.1978.

## Ҡара тал

Ҡарурманын илдең гиҙгәнемдә,
Тертләнем бер ҡанлы ғилләнән:
Өймәкләнеп үҫкән ҡара талдар
Ағарынып ҡалған билдәрҙән.

Сыйған балта ҡара ҡайырыһын
Аҫтан, өҫтән — ярып сығарған.
Тере тәндән тере ҡара тунын
Һыҙырып, ул эшен туғарған.

Шәрә ҡалған шулай, ҡанап, талдар —
Япраҡтары, һыҙлап, ҡалтырай.
Һис кем инде тунын кейҙералмай —
Һөлдәләре, кибеп, шалтырай...

Өндәшкәйнем бер ҡарт урмансыға,
Ҡушылып ул миңә иланы.
"Был урманды ҡарау — оят миңә!" —
Тине лә бик ауыр һуланы...

Ҡара тундар кейеп күнгән халыҡ —
"Дубленка" тип кейә әле лә.
Һәр "дубленка" нисә ҡара талдың
Тунын һалдыртҡанын кем белә?..

Заводтарға ҡайта ҡара ҡабыҡ —
Тундар күбәйеүҙең билдәһе.
Ҡар аҫтында күпме ҡалды икән

Ҡара талдың ҡанлы һөлдәһе?..

Химик дуҫтар! Ҡара буяу өсөн,
Тал тәндәрен ниңә һуябыҙ?
Ҡараланған бәҫле тунды кейгәс,
Ауыр һулап, һеҙ ҙә уйлағыҙ!

Әйтер бер саҡ башҡорт ҡарурманы:
“Һирәк һылыуҙы бер күреп ҡал...”
Ҡара тунын илгә һала-һала,
Ҡарурмандан китә ҡара тал...

11.08.1978.

## Шәфҡәт туташы

*Янгантауҙағы Ләмигә һылыуға.*

Сөм-ҡара икән күҙе лә
Дөм-ҡара икән ҡашы.
Аҡ яулығын ҡыя бәйләп,
Йөрөй шәфҡәт туташы.

Палатанан — палатаға
Инеп, хәлде һораша.
Тик бер ҡарашынан уның —
Һандуғастар һайраша.

Үлсәй тамыр тибеүҙәрен:
“Борсомаймы йөрәгең?”
Ах туташҡай, ҡара ҡашҡай,
Ниндәй һорау бирәһең!

Йөрәк тотоп йөрөүселәр
Бер мин түгел — ун, йөҙәр.
Йөрәктәрҙең дарыуҙары
Бары һиндә бар, тиҙәр.

Йылмайып бер көлһәңсе лә
Дарыуыңды бирһәңсе!
Палатанан — палатаға
Бик йыш инеп йөрөһәңсе!

Сөм-ҡара икән күҙе лә

Дөм-ҡара икән ҡашы.
Көндәй балҡып килә көн дә —
Кемдең фәҡәт туташы?!.

11.08.1978.

## Ҡайын-тай

Ғәжәп ҡалам: дегет-ҡара ерҙән
Сыға үркеп һөттәй аҡ олон!
Һәр аҡ ҡайын — ҡатыҡ аҡланында
Аунап торған ап-аҡ тай, ҡолон!

Бара сабып, ҡойроҡ сәнселдереп,
Йәшел яллы шаян ҡайын-тай.
Ап-аҡ тояҡтарын текә ҡаҙап,
Уйнаҡлай шат сихри тауында.

Үрәпсегән ҡайын ҡолағына,
Ҡайыҡланып, кисен ҡуна Ай.
Йәшел ялы менән сөйөп Айҙы,
Төнө буйы уйнай ҡайын-тай...

12.08.1978.

## Ҡарға баҙары

Ҡарҡылдашҡан ҡарға баҙарҙары
Ҡара таңдан ҡупсып уятты.
Әллә ниңә ҡырыҫ моң-зарҙары
Үткән үҫмерлекте уйлатты.

Күмгән һайын Һаҡмар болондарҙы,
Һаҡлай ине оя ҡарғалар.
Ҡарға ояларын ҡармаларға
Менә ине асҡаҡ балалар...

Шыуышалар йыуан өйәңкенән,
Таҡыяға күкәй тултырып.
Һәм сығасаҡ ҡарға балаларын
Ҡайыҙлайҙар, ташта ҡыҙҙырып...

Барҙым мин дә бер көн был һунарға,
Мендем бейек тирәк башына.
Баш осомда — тыуыр ҡарғаларҙың
Ата-әсәләре шашына.

Ҡаплай Көндө ҡара ҡанаттары,
Ҡарғаларҙан күгем ҡап-ҡара.
Дүрт йомортҡа йомған тар ояны,
Ҡарҡылдашып, минән ҡотҡара.

Ҡулым һоноп, тотҡас күк күкәйҙе,
Уттай янып усым, тартылдым.
Балаларҙы быуған фашист итеп
Тойҙом үҙемде мин... Ярһыным...

Йәшен һымаҡ кисте мине шул уй,
Һәм төшөрҙө, һуғып, тирәктән.
Шунан бирле, булып һуғыш йөгө,
Йәшен уғы йөрөй йөрәктә...

...Ҡара таңда ҡара ҡарғаларҙың
Көр баҙары ҡупсып уятты.
Тыуыр балаларын тойһа ғына,
Күге илдең булыр һил-яҡты.

12.08.1978.

## Етегән

Баҫҡыстарҙан менәһең дә
Туҡталып тын алаһың.
Мырлап, тәбрик итә һине
Алты бесәй балаһы.

Арыҡлаған әсәләре
Сыға баҫҡыс аҫтынан.
Табып баҡҡан алты йондоҙ —
Бөйөк йәшәү хаҡына.

Тимер таҡта ышығында
Йондоҙҙарын үҫтергән.
Мырлап, бына аяҡтарға
Урала шат етегән.

Һона кемдер — йомшаҡ әпәк,
Кемдер — сабаҡ киҫәге.
Эсергә бар күләүеге —
Ҡойма ямғыр кисәге.

Бүләктәрҙе көйшәйҙәр ҙә
Ысыҡ эсеп йәшәйҙәр.
Ел-ямғырҙа һырнығалар
Мамыҡ түшле әсәйгә.

Шуныһы тик: етер һыуыҡ,
Күктән ҡырпаҡ ҡар төшөр.
Мыр-мырҙарҙың, йондоҙҙарҙың,
Тәпәйҙәре бөрөшөр.

Сыҡмаҫ сабаҡ саптырыусы,
Бурар буран икмәкте.
Теҙеп көрткә йондоҙ-эҙҙәр,
Ҡайҙа былар китмәксе?..

Мырлай, нурлай баҫҡыс аҫтын,
Йондоҙлоҡ көр — етегән.
Ергә, гүйә, Етегәндән
Ете ярсыҡ кителгән.

12.08.1978.

## Этюд

Ойҡота ел ҡайын ҡашмауҙарын —
Сеймәлешеп тулай тәлгәштәр.
Ҡоба һыйыр һынлы бура-болот
Тәңгәленә тауҙың йәпләшкән.

Ер арҡаһын ялай “ҡоба һыйыр” —
Ҡояш-күҙен йомоп, тын баҫкан.
Елененең тулыш, тиртеү һөтөн
Имеҙергә бында ул ҡайтҡан.

Ә тау — яңы тыуған еүеш быҙау —
Тәмле төштәр уны тилертә.
Болоҡһоған болот — имсәктәрен

Ирененә тауҙың тейҙертә.

Эй түҙемһеҙ шәфҡәт — әсә ағы!
Имсәктәрҙән аға, тызылдап.
Аҡ-мәрхәмәт балҡып ҡалған төҫлө
Ҡайындарҙың һөтлө туҙында.

12.08.1978.

## Ҡарт имән

Ҡырҡылған ҡарт имән төпҫәһенә
Ултырып, мин бер һил ял иттем.
Күҙҙе йомоп асыр араларҙа
Тылсымдарға йәнде һал иттем.

Киҫелгән төп, имеш, киҫелмәгән...
Үҫәм, имеш, төпкә тоташып.
Кәштәләнеп ҡалҡты яурындарым,
Болоттарға түбәм олғашып.

Тарамыштай тығыҙ тармаҡтарым,
Ябып ерҙе, янға кирелде.
Ел үткәрмәҫ ҡарпай япраҡтарым
Йәшел ҡалҡан булып теҙелде.

Аҡ йондоҙҙар аҡты баш осомдан,
Ағылдылар йылдар, быуаттар.
Иләүҙәргә йәйҙем күләгәмде,
Келәм итеп, эҫе сыуаҡта.

Манаралай мыҡты олонома
Терәп арҡа, батыр ултырҙы.
Булат айбалтаһын ҡайрап ташҡа,
Оҙаҡ заманалар уй ҡорҙо.

Уҙған быуаттарҙы — килерҙәргә
Ялғау өсөндөр, тип, изге уй,
Һулыш һурып ерҙең күкрәгенән,
Һуҙмаҡ булдым илгә оҙон көй.

Киҫелде тик көйө быуаттарҙың —
Батыр, тороп, балта һелтәне.

Манаралай оло олономдо
Балта һаплыҡ ҡылып мөнтәне...

...Уяндым мин, тертләп, төп өҫтөндә...
Ҡарт имәндәй булдым болоҡһоу.
Күктә йөҙгән аҡ Ай-айбалтаның
Ас һағағы ярһыу-ҡылыҡһыу...

12.08.1978.

## Ҡояш яланы

Янғантауға барһаң, иркәм,
Буйла Ҡояш яланын,
Ҡалҡҡан саҡта тау артынан
Көләс Ҡояш, алланып.

Үҙәндәрҙән төшөр, ағып,
Һөттәй ҡуйы аҡ томан.
Тубыҡтан аҡ томан кисеп,
Түтә юлдан кит һаман.

Менерһең бер, төшөрһөң бер
Түбәһенән түңдәрҙең.
Ал Ҡояштың сайпылынан
Алһыуланыр еңдәрең.

Ҡыштыр-ҡыштыр ҡыштырларҙар
Ян-яғыңда күрәндәр.
Әйләнмә лә, бәйләнмә лә —
Күп булырҙар күргәндәр.

Тик Көн йөҙгән аҡланлыҡта
Әйләнмәйсә һин ҡара! —
Көлөшөрҙәр, нур сәсерҙәр
Мең-мең ҡояш үҙ-ара.

Табаҡ-табаҡ ҡояшланып
Баға Көнгә көнбағыш.
Йөҙөңә нур бөркөлөүҙән
Таралалыр моң-һағыш.

Һәр бер һабаҡ -- ҡояш-табаҡ,

Нур-саткыһы һап-һары.
Һап-һарынан күҙҙәреңде
Ҡамаштыртма, ни бары!

Уң яғыңа ҡарарһың да
Һул яғыңа ҡарарһың.
“Ни булды был? Ни хикмәт?!” — тип,
Ҡояшлыҡтан һорарһың.

Йәшел ҡуллы көнбағыштар
Һырып һине алырҙар.
Ялбырлатып еҙ сәстәрен,
Көндәй көлөп-янырҙар.

Биҙәнерҙәр, төҙәнерҙәр
Бағып Күккә -- Ҡояшҡа...
Онотоп үҙ ҡояшыңды,
Ҡалмаһаңсы ояҡка...

Ышан, иркәм: мөхәббәтем
Ҡояш минең — гел һиңә!
Үтеп ҡояш яланынан,
Ҡояш илтәм йәнеңә!

12.08.1978.

## Йүрүҙән

Рәхмәт, рәхмәт, эй Йүрүҙән,
Тилбер үҙән, көр үҙән!
Дарыуһыҙ ҙа дарманландым,
Буйлап һине йөрөүҙән.

Текә үрле — уң яҡкайың,
Һулы — ҡускыл гөл үҙән.
Сейәләрең, алһыуланып,
Алҡаланған ал үҙән.

Тирәктәрең йөрәктәрҙең
Телен белгән — бер һүҙҙән.
Томралары, томандары
Сатнап киткән көләүҙән.

Бөрлөгәндәр-бөрөлгәндәр —
Балаҡтарға үрелгән.
Гөлйемештәр — гел сәскәгә,
Гел емешкә төрөнгән.

Еләктәре — силәктәрҙе
Тартып, үҙе тирелгән.
Муйылдары, ҡарағаты —
Ҡулға ҡулай бирелгән.

Ҡырҙарында — мулығып мал,
Һулауҙарға тығылған.
Байманлыҡтан баҫыуҙарҙа
Биле ерҙең һығылған.

Фирүз ярҙар яҡаһына
Шат ауылдар теҙелгән.
Кешеләре — кеше өсөн,
Йәне сығып, өҙөлгән.

Салауаттың аҡ сағылы
Һыу битендә сағылған.
Ҡамыштары һөңгө һаплыҡ —
Батырҙарын һағынған.

Ярып Урал ҡаяларын,
Йор йырлаған көр үҙән.
Батыр йылға һинең кеүек —
Бармы икән, Йүрүҙән?!

Хәл алдыҡ беҙ. Үҙең дә һин
Хәл ал беҙҙең йөрөүҙән.
Һине гиҙеп, булдыҡ егет, —
Һау бул, һау бул, Йүрүҙән!

13.08.1978.

## Ҡырҡбыуын

Ағиҙелдең буйҙарында
Үҫә икән ҡырҡбыуын.
Ҡырҡ быуынды — ҡырҡ быуынға
Тоташтыра йор һыуым.

Ҡырҡбыуындың быуындары
Баҙыҡ икән — өҙөлмәй.
Ҡырҡ тапҡыр ҡырҡ быуындарын
Бабаларҙың — күҙ иңләй.

Ҡырҡбыуындың һәр быуыны —
Ҡырҡар йәшлек бер ғүмер.
Ҡырҡ йәшендә күкрәмәһә,
Була, тиҙәр, ир — күмер.

Эй ҡырҡбыуын, ҡырҡбыуын да
Ҡояш нурына йыуын.
Ағын һыуҙарға һамаҡла
Ҡырҡ быуындың ҡырҡ моңон.

13.08.1978.

## Таш күпер

Тимербетон дөргән Йүрүҙәнгә —
Ҡоя, тирләп, ирҙәр таш күпер.
Тиҙҙән бында Юлай һуҡмағына,
Ҡырҙы ҡырҡып, бетон юл үтер.

Юлланырҙар йылғыр юламандар,
Болан өркөр тауҙың башына.
“Маша плюс Саша” тип яҙырҙар
Салауаттың ҡая ташына...

Юҡ! Һаташам! Ерҙең был тәхетен
Ҡулсырҙарҙан илем ҡурсалар.
Тәбиғәттең сафлыҡ күперҙәре
Тимербетондарҙы ҡулсалар.

13.08.1978.

## Бәйге

*Рәми Ғариповҡа.*

Борондан уҡ булған бәйгеләрҙең
Иҫке серен сисһәм, көлмәгеҙ.

“Иҫкелекте иҫләп яңыртҡандың
Күҙе сыҡһын мәгәр!” — тимәгеҙ.

Бәғзеләрҙе белдек: бәндә ҡоло,
Бәйгеләрҙән байып туй итте.
Кемдәрҙеңдер ҡулы был бахырҙың
Алашаһын алдан бейетте.

Исем-атын сөнки сонтор йәндең
Ҙур жюригә түрә ҡыҫтырған.
Сөнки был йән, түрә сөскөргәндә:
“Йәрхәмикалла!” — тип ҡысҡырған...

Дегәнәккә лайыҡ сабышҡының
Ял-ҡойроғон ҡайый таҫмалар...
“Йәрхәмикалла”сы, ҡуҡырайып,
Ала бүләк алғы баҫмала.

Сәпәкләй ҡул, ҡурпып, ялағайҙар,
Турһыҡтарҙан ҡымыҙ түгелә.
Айныҡ аҡыл йәндәргә лә хатта
Батыр тыуған кеүек күренә...

Ә был мәлдә ысын бәйге толпар
Бәйгеләрҙән мәхрүм йән ине.
Ауыҙлығын сәйнәй шағырлатып...
Ҡапҡа бикле... Эстә сәм ине...

Уны менеп сабыр батыры ла
Ат ҡараусы ҡылып ҡуйылған.
Улар өсөн — гөнаһ алға сығыу,
Улар өсөн бәйге тыйылған...

Салландылар, сапмай, толпар, батыр...
Еткән саҡта ғүмер аҡшамы,
Шартлап һынды толпар ауыҙлығы,
Батыр сабырлығы ҡаҡшаны.

Ҡалды ауып ҡапҡа бағанаһы —
Осто ғына оҫҡор һыбайлы!
Донъя күрҙе: данлап серек ҡорҙо,
Юғалтҡандар ниндәй һыбайҙы!

...Алҡыштарҙан тетрәп-сатнай һауа —

Был икәүгә шөһрәт, дан яуа.
Тик аяныс: еңеү тантанаһы
Һыймай инде фани донъяға...

Онотолған теге ялған батыр.
Ә ысынын көс юҡ ҡымшатыр:
Шартлап ярылған ҙур, ҡанлы йөрәк
Ҡанъяғаны ҡанлап тын ятыр...

Борондан уҡ булған бәйгеләрҙең
Иҫке серен систем, көлмәгеҙ.
Кем сөскөрһә, "йәрхәмикалла!" тип
Ҡысҡырмаҫ та бәндә, тимәгеҙ.

13.08.1978.

## Ҡарағай

Янғантауҙың алсаҡ аҡланында
Үҫә ине бер ҡарт ҡарағай.
Япа-яңғыҙлыҡтан, һанһыҙлыҡтан
Ҡалған кеүек ине ҡырағай...

Килгәнемдә ошо ҡарағайҙы,
Әҙәмисә әрнеп, ҡыҙғандым.
Ҡалғанына әсе яңғыҙлыҡта,
Унын менән ҡуша һыҙландым.

Һыҙланған һәм һыҙған саҡтарымда
Төштәремә керҙе ҡарағай.
Яңғыҙ ҡалған һайын, һыҡтандым мин:
"Түҙә икән ҡалай ул ағай?.."

Йылдар үтте... Сәсем ҡырпаҡ һипте...
Килдем әле таныш аҡланға.
Тубырсыҡтар сәсеп китмәк булдым
Ҡарағай ҡартлығын һаҡларға.

Тик ни күрәм: ғәжәп ҡусҡылланып
Алды ҡаршы алсаҡ аҡланлыҡ.
Ылыҫ ышығында йәп-йәш кенә
Ҡайын япраҡтары шауланы!

Хәтерләнем: һуғыш етемдәрен
Үҫтергәйне, ҡарап, бер ағай.
Шуның һымаҡ булып тойолдо был —
Ҡайындарҙы ҡосҡан ҡарағай.

Таралды ла китте ҡайғыларым,
Ауыр төш томаны һүрелде.
Күмәк ейәндәрен тубығына
Теҙгән ҡарттай көләс күренде.

14.08.1978.

## Йүрүҙән томандары

Йүрүҙәндең ҡымыҙ томандарын
Онторға, әйтсе, мөмкинме?!
Кәсәләнеп балҡый түбәләре --
Ылғый аҡтан мөлдөр был киңлек!

Һин тораһың, бағып, сал сағылда,
Кәсә ҡырыйына баҫҡандай.
Ҡайнай аҫта ап-аҡ һаумал-ҡымыҙ!
Үҙәндәрҙән һаумал аҡҡандай!

Күбекләнеп, ҡымыҙ күтәрелә, —
Кәсә күҙәүенән ул таша.
Аяҡтарҙы йыуып аҡҡан болот —
Үҙе хозур, үҙе тамаша!

Болот буйлап бейеп китке килә,
Тартымына ерҙең буйһонмай.
Хыялымда күрәм күктең төбөн,
Йондоҙҙарҙы тирәм, ҡул һонмай...

...Яҫтыҡ итеп алып ҡайтып китәм
Ғәзиз ерҙең ҡымыҙ болотон.
Башҡайҙарым бошоп ауыртҡанда
Ҡосағына алып алйытһын.

14.08.1978.

## Ҡурай аҡланы

Етмеш бишенсе йыл ҡоролоҡтан
Урал иңе кибеп ҡаҡшаны.
Өс йыл буйы ҡурай ҡурпытманы
Йәнем һөйгән ҡурай аҡланы.

Ҡурай көйләп күнгән ел ауыҙы
Өс йыл буйы өрҙө ҡурайһыҙ.
Көмөш таҡыялы егеткәйен
Аҡ ҡайындар юҡтап моңайҙы.

Ҡанлы яуҙа башҡорт яландарын
Өткәндәй үрт, ҡалдыҡ шәп-шәрә.
Ҡурайсылар ҡулы ҡунды йәнә
Теш төшөргөс баҡыр көпшәгә.

Тере моңон ерҙең тарта алмай,
Интектерҙе шул еҙ ҡурайы.
Ҡурай китһә, беҙҙән ни ҡала, тип,
Ҡыуарылды ҡәүем сырайы...

О мөғжизә! Таңым тулҡынында,
Таныш моңдар арбап, уяндым.
Мең көпшәнән “Урал” көйөн тарта
Ҡурай аҡланҡайы Уралдың!

Ысыҡ ярып елдем яланаяҡ,
Аяҡ тартмай ҡалған аҡланға.
Ҡайындарҙың иңе, елһеҙ көйө,
Бейей генә моңдар аҡҡанға!

Аҡ туҙлыҡтың туҙғыҡ араһынан,
Дарҫлап йөрәк, үтә ҡараным.
Аҡ таҡыя кейгән — тап егеттәр! —
Туйлай ҡурай ерем байрамын!

Мөғжизә бар — ерҙә ҡурай барҙа!
Ҡурсалған ер! Ҡалған йән-ҡурай!
“Беҙ — мәңгелек тере бөрө!” — тиеп,
Ғәзиз моңо йәндең яңғырай.

14.08.1978.



### Ҡымыҙ

*Ҡорҙашым Шакир Бикҡоловҡа*

Салауаттың тыуған еркәйенең
Ауыҙ иттем һаумал ҡымыҙын.
Барып кергәс, хәлен белергә, тип,
Һалып бирҙе дуҫым, тулғыҙып.

Арғымаҡта елер еркәйҙәрҙе
“Жигули”ҙа урап ҡайтҡандар.
Салауаттың сая ауылдашын —
Ҡымыҙ бешеүсене тапҡандар.

Саялыҡмы, әллә наянлыҡмы
Ҡайтҡан, йоғоп, тулы турһыҡҡа.
Дуҫым миңә ҡымыҙ һалып бирә,
Шул турһыҡты ҡуйып тубыҡҡа.

Баһадирҙар, бәлки, борон да, тим,
Туҫтаҡтарҙы ошолай тотҡандыр.
Салауаттың менгән толпарының

Тоҡомонан был һут йоҡҡандыр.

Уны, бәлки, батыр улдарының
Тоҡомдары туҡып-бешкәндер.
Шуға күрә зерә сихәтле һәм
Дәртле ҡымыҙы етешкәндер...

Туҫтаҡ таша, йәндәр күккә аша
Эстә ҡайнап ташҡан хистәрҙән.
Батыр тупрағының һуткайынан
Күңелдәр бит шулай нескәргән!

Эй илаһи минут! Беҙҙе лә, тим,
Салауатҡа йәнәш алып сап.
Туҫтаҡтарҙы ҡуйып, беҙҙең дә бит
Ярһыу атҡа эйәр һалыр саҡ.

14.08.1978.

## Ярты

Уҙҙы инде баллы яртыҡайы
Алйыуымдың — Айлы айымдың.
Аҡ томандар кисеп гиҙгән таңдар
Аҡшам ағы менән ҡайылды.

Баҡсалағы тулыш алмаларҙың,
Ҡунды алһыу, ярты яғына.
“Ярты йәнем” тиеп ярылғаным —
Төштәремдә килдең янымa...

Ярым-ярты бешкән бөрлөгәнең, —
Өҙөп ҡабыр ғына әмәл юҡ.
Яртыһынан кистем кисеүеңде,
Арғы ярға сығыр кәмәм юҡ.

Һуҙған ҡулым талып яртылыҡта,
Үрҙәреңә ярым артылды.
Һин дә, беләм, ярым-ярты тарттың
Ярты егет, ярты ҡартыңды...

...Ярты билдән батып Йүрүҙәнгә,
Бара байып ҡандай ҡыҙыл Көн.

Хыялдарҙың ҡалғый ҡап-яртыһы.
Күберәктер... Ҡулым тотоп һин:

“Ярты йәнем!” — тинең... Тойҙом хисең...
Ярты хистәр йәнгә һаналмай!
Ҡапланайым ҡушҡай күкрәгеңә,
Тулыланайыҡсы, тын алмай!

Алда әле ярһыу ярты ғүмер, —
Кәм булмаҫын өмөт итәйек.
Беректереп йөрәк яртыларын,
Был донъяны бөтөн көтәйек!

...Алйып торам һаман яртылыҡта...
Ара алыҫ, ҡалай итергә?
Ярты билдән кергәс кисеүеңә,
Күкрәккәсә әллә үтергә?!.

Яртыланым тулы йәй айымды...
Асҡан шешәм тора яртылай.
Һулыш һайын һине хәтерләтеп,
Күктә йөҙә кәмә — ярты Ай...

15.08.1978.

## Нескәреү

Ҡыуарһа ла йылдар, ир күңеле
Ҡатмай икән... һаман нескәрә.
Һынған үлән күрһәм, күҙ йәшемде
Йәшерергә миңә көс кәрәк.

Сөкөрәйеп туңған һәр турғайға
Бирер инем йәнем йылыһын.
Күктә йөҙгән болот, тимен, ергә
Ләйсән генә булып яуылһын.

Игенсенең ипле ҡулдарына
Ағылһын гел уңыш бойҙайы.
Юлға сыҡҡандарҙы бәләләрҙән
Аралаһын тылсым хоҙайы.

Ялан иңләп килгән һары иңкеш

Аҙашмайса ҡайтһын йортона.
Йүкәләрҙең татлы балын уртлап,
Илтһен шатлыҡ, тим, бал ҡорто ла.

Һәммәһе лә...
Ана, йәш бер әсә
Картуф ала ерҙән, биҙрәгә.
Әллә ниңә йоморо бүлбеләрҙе
Оҡшаттымсы утлы йәҙрәгә...

Жыулап китте йөрәк...
Бураҙнала
Йәш әсәнең уйнай балаһы.
"Йәҙрә" ләр, тим, яуһын биҙрәләргә.
Был бала, тим, утта ҡалмаһын!

Гүзәл донъям!
Һәр бер валсығында
Тоям бөгөн татлы нескәреш.
Ер-күгеңде ҡосоп үпкем килә —
Бына ниндәй миндә үҙгәреш!

Әсә итәгенән морон төрткән
Һәр ҡараны тартам һөйөргә.
Сабый табандарын иркәләгес
Үлән булайымсы был ерҙә!

21.08.1978.

## Көтөүсе

"Һарғамыш"тың башмаҡ көтөүсеһен
Таңғы томанда мин осраттым.
Туплап малын, тынған бер арала
Тормош-күрмештәрен һораштым.

Терәп теҙҙе, йәндәй тойоп ерҙе,
Бесән яҫмаһында ултырҙыҡ.
Ята салғы, ялтлап, сал ҡылғанда,
Сая эшкә ирҙе ҡотортоп.

Уңған йәшел һалдат кейемендә,
Салбарында — һалдат билбауы.

Һаҡал етек — “ҡырған” “Фидель” итеп.
Мода түгел. Ваҡыт булмауы.

Һалдаттан ул ҡайтҡан биш йыл элек
Һәм, биреп иң, эшкә егелгән.
Кейеменең йәшел бөрмәләре
Йәшел ергә ҡуша тегелгән.

Һимертәм, тип, һеҙгә ҡалъяларҙы,
Көтөүенә төртөп күрһәтте.
Салҡан ятҡан салғы сыңлап китте,
Үлән башҡайҙарын тибрәтте.

Һәүкәшкәйенә лә бесән кәрәк
Ҡышҡылыҡҡа. Бирһен кем уны?
Яҫмаларын яҙып яҫы ергә,
Киләсәген яҙа ер улы.

Эшләп йөрөп саба был салғыһын,
Бик киң әле яҫҡар яланы.
Утыны ла көтә әҙерләүҙе, —
Маллы кеше яллы буламы!

Ял итергә ҡайта туғандары
Ҡалаларҙан. Ҡырпаҡ ҡар төшкәс.
Һыйлы ҡунаҡ булып һәр береһе,
Йола ҡалъя, һуғым етешкәс.

Арҡаһынан тапай ҡустыҡайҙы,
Өлгөрһөң, тип, уңған һәр эштә!
Таш йорттағы йылы фатирҙарҙан
Ауылдарын күреп тик төштә.

Ә был ҡусты, белмәй йәйҙе-ҡышты,
Бил бөгә лә ҡайнар тир түгә.
Һалдат билбауҡайын һыға быуып,
Салғы тотоп сыға көтөүгә...

Салғыһына һалды ҡулын һалдат,
Китте сабып, ботто айыра.
Кескәй улы — атай ҡатарында! —
Көтөү башын осҡа ҡайыра.

Хуш, сос малай! Атаң яланында

Ҡулараға инде кергәнһең.
Йәшел ерҙең йәш һалдаты итеп,
Сәләмемде һиңә бирәмен!

20 — 21.08.1978.

## Алыш

Һынашты көс ике болан-бүгәй,
Ҡаяһында оҙон ҡырланың.
Тана болан тора аҫта — көтөп
Донъя бүлешеүен быларҙың.

Сәсрәй осҡон, сатнап, мөгөҙҙәрҙән,
Тояҡтарҙан таштар онтала.
Бүгәй морондары бөрккән боҫтан,
Әйтерһең дә, дары тоҡана.

Быға тиклем уртаҡ ине донъя,
Һыя ине былар донъяға.
Бөгөн килеп, берәгәйлек теләп,
Һына мөгөҙ, ҡайнар ҡан аға.

Өҫтөнлөктө даулап, сыҡҡан яуға
Үҫеп еткән егет — йәш болан.
Ҡарт һантыйҙың һанап ҡабырғаһын,
Болан ғәҙеллеге эш ҡыла...

Көслөнөкө — донъя, тигән мәҡәл
Күҙ алдында ҡурпып, ҡотайҙы.
Ҡарт боландың гөрҫләп ҡолауынан
Хатта ҡая, гүйә, ҡыйшайҙы.

Еңеү борғоһонан йәш быуындың
Сүкте, тетрәп, тауҙар, урмандар...
Һөйәркәһе, мөңрәп, алды ҡаршы, —
Уйнаҡланы ҡуша боландар...

Ҡанһыраған ҡорбан, тубыҡланып,
Кирт ситенән күккә баҡҡанда
Күҙ йәшендә Ҡояш мөлдөрәне
Һәм шат ике болан аҡланда.

Һуңғы уфтау... Торманы ҡарт аҫау —
Тубыҡланғандарға аяу юҡ!..
Йәш аҫауҙың аҙып ҡартайыуын
Ҡалды көтөп уйсан ҡаялыҡ.

21.08.1978.

## Йөрәк йыры

Эй, ҡайҙа һин, керһеҙ сабый сағым! --
Дөнөп барам далам юлынан.
Ҡылғандарға, гүйә, йондоҙҙарҙың
Йылтыр көмөш саңы ҡойолған.

Ғаләмдәр тын... Күктең зәңгәрлеге
Йөҙә, һарҡып, таңғы томанда.
Әйтерһең дә, Ерҙе аҡ биҙәкле
Күк яулыҡҡа төрөп ҡуйғандар...

Ҡапыл шул саҡ, йәнде һиҫкәндертеп,
Яулығын Ер йолоп ташланы.
“Бытбылдыҡ!” — тип көләс ауаз биреп,
Ерсән йырын көйләй башланы.

Эй тетрәтте ошо һоҡланғыс йыр,
Күңелдәге сиртеп ут-ҡылды!
Ҡош телендә типте Ер йөрәге:
“Бытбылдыҡ! бытбылдыҡ! бытбылдыҡ!”

Йөрәк йыры Ерҙең — бәғеремә
Мәңгелеккә кереп һеңеште.
“Бытбылдыҡ!” — тип минең йөрәк типте.
“Бытбылдыҡ!” — тип ер-күк һөйләште.

Ер юлдашы ашҡас ғаләмдәргә,
Ҡалып хайран, шуны тыңланыҡ:
Пипелдәүес эфир тулҡындары
“Бытбылдыҡ!” — тип ерсән сыңланы!

...Күк яулыҡлы Ерем бара елеп
Йондоҙ саңлы йыһан юлынан.
“Бытбылдыҡ! бытбылдыҡ! бытбылдыҡ!” — тип
Сыңлай донъям йөрәк моңонан.

30.10.1978.

## Хушлашыу

Эй изге ер! Ҡайнар һулышыңды
Бөркөп һөйҙөң мине, әсәмдәй.
Ҡайнар ҡуйыныңдан алдым шифа,
Шатлыҡтарым ташты, ләйсәндәй.

Елеп үткән бер ай араһында
Тауҙарыңа ерһеп өлгөрҙөм.
Көмөш суҡлы ҡурай таҡыяларын
Юлдарыңда һөйөп йөрөнөм.

Килмәк барҙың инде китмәге бар —
Етте ваҡыт билде быуырға.
Һуңғы тапҡыр төшәм текә ярҙан,
Йүрүҙәндә битем йыуырға.

Хуш, Салауат ере! Хушлашыуҙың
Ауыр гере баҫты бизмәнгә.
Бер таҡыя ҡурай орлоғондо
Китәм алып, илдә гиҙмәккә.

Ташлаһа ла ҡайҙа яҙмыш еле,
Үҙем менән бергә йөрөһөн.
Ҡуш табаным баҫҡан һәр тәңгәлгә
Ҡушар бөртөк орлоҡ тирелһен.

Планетаны, бәлки, билбаулатып
Тура килер йырлап уҙырға.
Шытһын ине ҡурай гел артымдан,
Юлдарымды күмеп моң-йырға!

Юл елдәре киҫһә күҙҙәремде,
Шул моңдарҙан юҫыҡ табырмын.
Ҡурай таҡыяларын һөйә-һөйә,
Уралыма урап ҡайтырмын...

Хуш, Салауат ере! Хушлашыуҙың
Әсе йәше тула күҙҙәргә.
Бер таҡыя ҡурай орлоғондо
Алып барам ерҙе биҙәргә.

24.08.1978.

## Тракторсы ҡыҙ

*(һүрәт)*

Машиналар дырылдай ҙа үкерә,
Ҡырҙан улар һутлы үлән килтерә.

Күҙ алдында ҡалҡа ҡуҫҡыл тау-ҡорған,
Шат ҡыҙ уны тослата тракторҙан.

"Силос" тигән татлы аҙыҡ малдарға –
Ярап ятыр ҡыш үҙәген ялғарға!

Кабинаһы асыҡ — шаян ел өрә,
Ал яулығын ҡыҙҙың, йолоп, ул кирә

Һәм күтәрә, сөйөп, ҡорған өҫтөнә.
Алһыу яулыҡ ал әләмдәй елпенә!

12.08.1978.

## 1979

**************************



### Илемә

Мин халҡыма тәрән тамыр йәйҙем,
Түгел уны ләкин имергә.
Тамыр йәйҙем, ерҙең йәҙрәһенән
Йәнһыу алып уға бирергә.

Мин халҡымдан үргә олон үрҙем,
Түгел уны ләкин ҡапларға.
Олон үрҙем, Ҡояш дөрләүенән
Ялҡынланып уны пакларға.

Мин ҡулыма хәләл ҡәләм алдым,
Көнгә мансып — төнгә яҙырға.
Баштар китһә китһен — Намыҫ ҡалһын
Ил түрендә мәңге янырға.

23.05.1979.

### Хоҙай

Хурлама ла мине, ҙурлама ла —

Был хистәрҙән өҫтөн мин күптән.
Миңә ҡалһа, илем ҙурланһын да
Хур хурланһын — миңә шул еткән.

Тетрәнһә лә кемдәр, ҡалтырамам —
Уҙҙым инде ундай саҡтарҙан.
Ҡауырһыным ҡатып етмәҫ элек
Көлә белдем ҡалтыр заттарҙан.

Һөймәгәнгә һөмһөҙ һөйкәлергә,
Түгелмендер илдең үкһеҙе.
Теләгәндәр — ҡырҡҡа теҙләнһендәр,
Сығарһындар шайтан мөгөҙө.

Был донъяға “ике йәшәйем” тип
Килгәндәр тик шуны белһендәр:
Бөгөлһә лә тәкә мөгөҙөләй,
Иблестәрҙән сыҡмаҫ пәйғәмбәр!

Ҡабындыҡ бер! Һәм тик бер һүнергә! —
Табыныуҙар беҙҙең юғары.
Ҡояш нуры һымаҡ төҙ Хаҡлыҡты
Хоҙай иттек... Хаҡлыҡ ни бары!

24.05.1979.

## Аҡ көндәрем, пак төндәрем

“Пак-Ут” һүҙен дәррәү заманабыҙ
Алмаштырҙы тығыҙ “ваҡыт”ҡа.
Секундты ла һатып алып булмай
Һис бер алтын, гәүһәр-яҡутҡа.

Ут булыуҙан, дөрләп юҡ булыуҙан
Йыйналалыр ваҡыт һәм донъя.
Эҙҙән беҙҙең — ейән-ейәнсәрҙәр
Тапһын ине дөрләү ҡот-улъя!

Аҡ көндәрҙә булыр ҡара төндәр,
Һәм аҡ төндәр — ҡара көндәрҙә.
Тоҡомдарҙы нурлап, паклығыбыҙ
Балҡып барһын ине күҙҙәрҙә!

25.05.1979.

## Диңгеҙҙәргә китәм

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм, —
Күрешмәнек тағы был юлы.
Йөрөйһөңдөр ҡайҙа, аҙашып,
Ҡара сәсле Урал һылыуы?

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм,
Төштәремә һаман керәһең.
Муйыл сәскә минең шоморт сәс
Сеймәлергә тейеш, күрәһең.

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм,
Хыялымда һине тыуҙырҙым.
Зифа билкәйеңдән ҡосаҡлап,
Урал туғайҙарын ҡыҙырҙым.

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм,
Килеп ниңә "йәнем" тимәйһең?
Әллә инде Балтик буйҙарын
Гиҙгән диңгеҙсеңде белмәйһең?..

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм,
Бомба менән тулы палуба.
Ҡанундары ҡаты диңгеҙҙең:
Йә — бул уяу, йә — йән һал уға...

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм,
Хыял ҡошон һиңә осорҙом.
Ҡара күҙле матрос турында
Һөйләр әле зәңгәр ҡошсоғом.

Диңгеҙҙәргә китәм мин, иркәм, —
Бешһен әле Урал муйылы.
Яр башында тора, моңайып,
Һары сәсле эстон һылыуы.

25.06.1979.

## Диңгеҙ

*Афзал бабам иҫтәлегенә.*

Килдем бына ҡырыҫ ярыңа,
Салауатты салған шом-диңгеҙ.
Болоттарың һыуға һарыла,
Аҡсарлағың илай өҙлөкһөҙ.

Тулап үпте тулҡын табанды —
Башҡортонмо әллә һағына?
Ике быуат буйы тулҡындар
Тәгәрләгән Урал яғына...

Балтиканың тоҙло уртына
Тығып алдым Урал ҡурайын.
Диңгеҙ шауын үрә ҡатырып,
Уйнайым да шашып йырлайым.

Гәрәбәле йыйнаҡ ярҙары:
"Ярһый тағы, — тиһен, — Салауат!"
Йөрәгемде ярып ҡысҡырһам,
Үткәндәрҙән булыр ғазауат.

Теге яҡтан Тымыҡ океан
Тулҡындары ярға ҡағылыр.
Олатамдың тоҙло һөйәген
Уралғаса һирпеп ҡағыныр.

Булған заман — Афзал олатам
Гиҙгән диңгеҙ бер аҡ батшаға.
Алыҫканан[7] урап ҡайтҡанда
Дауыл ҡупҡан, мәхшәр башланған.

Батыртмаҫҡа батша алтынын,
Кәрәк булғас ҡорбан — Балыҡҡа,
Тотошҡандар, тиҙәр, шыбаға.
Олатайҙы яҙмыш йолоҡҡан...

Батырылған Афзал диңгеҙгә
(Ҡайҙа ҡалмай башҡорт һөйәге!..)
Батша шыбағаһын ләғнәтләп,
Доға ҡыла тыуған төйәге...

Салауаттарҙы ла аулаған
Борондан уҡ килгән шыбаға...

[7] Алыҫканан – Аляскана.

Ун етенсе йылда һындырҙыҡ
Шыбағаны бына шуға ла!

Һағында мин бөгөн замандың, —
Олатамдай диңгеҙ гиҙеүсе.
Яҙмышымды ләкин балыҡҡа
Һала алмаҫ Рәсәй иблесе!

...Салауаттың ҡалҡа шәүләһе,
Аҡыҡ тулҡындарҙы таралтып.
Балтиканың тоҙло уртында
Гөжләй ҡурай, шашҡын моң тартып.

26.06.1979.

## “Кәкре тырма”лыға

Белмәгәнгә белек бирәйем —
Беҙҙең яҡта барҙыр был һүҙҙәр:
Бар донъяға арҡа биргәнде
“Кәкре тырма һөйрәй был”, — тиҙәр.

Кәкре тырмаң ҡалһын өйөңдә —
Булырһың һин алсаҡ илгиҙәр!
“Көн-тараҡты һәм Ай-ураҡты
Ялҡылдатҡан аҫыл ир!” — тирҙәр.

26.06.1979.

## Һөйөү — көйөү...

Һөйөү — түгел баллы бауырһаҡ,
Ҡаба һалып ҡына йоторлоҡ.
Тейеп телең тилбер бороска,
Күҙҙәреңдән сыға ут ырғып.

Гөлдәмә тип шашып ҡосҡаның
Булып ҡуя шайтан таяғы.
Ялын ялмап менгән тайыңдың
Тибеп ҡаса көмөш тояғы.

Мөхәббәттер шундай бауырһаҡ —

Уттан алып, утҡа һалынған.
Илағанда — балҡып көләһең,
Көлгәнеңдә — йәшең ағыла...

26.06.1979.

## Зәңгәр томан

*Күпер башы — күк томан...*
**Халыҡ йырынан.**

Күпер башҡайҙары — зәңгәр томан,
Зәңгәр донъяларға ул тыуған.
Йөрөһә лә күпер өҫтәренән,
Күпер аҫтарында гел ҡунған.

Күпер башҡайҙары — зәңгәр томан,
Ҡояш менән бергә ул торған.
Байыһа ла Ҡояш, Ай аҫтында
Шиғыр-миғыр яҙып ултырған.

Күпер башҡайҙары зәңгәр томан,
Намыҫҡайы керһеҙ ул булған.
Саф күңелле халҡы хаҡыналыр,
Хаҡиҡәткә тоғро ынтылған.

Күпер башҡайҙары — зәңгәр томан,
Томандарҙы йырып юл ҡыуған.
Иле өсөн отҡан саҡтарында
Үҙе өсөн һәр саҡ отолған.

Күпер башҡайҙары зәңгәр томан,
Юлҡайҙары уның быуылған.
Бөркөтләнеп саңҡыр саҡтарында
Ҡанатҡайҙары шул ҡыйылған.

Күпер башҡайҙары — зәңгәр томан,
Күпһенмәгеҙ күпләп – күп тормам.
Зәңгәр томандарға кереп сумһам,
Һағынырһығыҙ ҙа — мин булмам!"

26.06.1979.

## Зәйнәб апай Биишеваға

(Ҡотлау кисәһендә)

Ҡалҡты ҡая, дөрөп тар донъяны —
Ер йәҙрәһен ярып яралған.
Ҡояштан ул утлы ҡойон алған,
Тупраҡтан ул һутлы кәр алған.

Болоттарҙың ҡара өйөрмәһен
Төҙ биленә, көлөп, ул көрмәй.
Итәгендә унын ер тетрәй,
Түбәһендә күктәр күкрәй.

Ҡая ҡырҙарына ҡырҡылышып,
Урагандар йыры йырлана.
Йыһандарҙың көмөш туҙандары
Маңлайына уның сорнала.

11.10.1979.

## Тралсылар йыры

Тралсылар тип атайҙар
Ҡай бер ҡыйыу ирҙәрҙе.
Беҙ үҙебеҙ көл итәбеҙ
Беҙгә тигән гүрҙәрҙе!

Диңгеҙ тулы суйын сумар —
Мина тигән күстәнәс.
Фашистарҙың күстәнәсен
Күсерәбеҙ, тып-тыныс,

Гитлерҙың үҙ тамуғына! —
Телеграф кәрәкмәй.
“Гөрç-гөрç” килеп, артыбыҙҙан
Утлы “морзе” сәләмләй.

Көн-төн “салют” бара шулай
Икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙҙә.
Шартлатылған мина менән
Баһалана ир беҙҙә!

Зәңгәр юлдар — зәңгәрләнһен,
Бөтһөн һуғыш бәләһе!
Төтөн яһап миналарҙан,

Өҙҙөк дошман хәйләһен.

Тоташтырҙыҡ илдәр ярын
Дуҫлыҡ күпере менән.
Тралсылар ике үлмәй,
Тралсылар бер үлә!

Имен торһон зәңгәр юлдар,
Иҫләһен ил беҙҙәрҙе.
Тралсылар, тип әйтәләр
Ҡай бер ҡыйыу ирҙәрҙе.

12.12.1979.

## Үпкәләмә үпкәндә

Үпкәләмә үпкәндә,
Утлы иренем өсөн.
Көйҙөрәм дә һөйҙөрәм —
Беләм утымдың көсөн.

Үпкәләмә үткәнгә,
Үкһе үкенер өсөн.
Үкһетһәм дә, үлтертмәм —
Үгәйҙән түгел хисем.

Үпкәләмә үпкәнгә,
Үп убып мине үҙең.
Үпкәнеңде үпкәндә
Үтер үпкә диңгеҙең.

12.12.1979.

## Әрмеләргә барып

Әрмеләргә барып сәс еткергән
Бабаларҙың данлы юлында
Флоттарға гиҙеп сәм үҫтерҙе,
Башҡортостан, йырсы улың да!

Балтиканың Ватан һуғышынан
Көйрәп ҡалған утлы ҡырҙарын
“Тыныс” йылдарҙа беҙ тыныслаттыҡ,

Миналарҙың сиртеп ҡылдарын.

Бейенек беҙ әжәл туйҙарында,
Үлем ләкин беҙҙе тотманы.
Шартлатылған әжәл-мина һайын,
Йәшәттек беҙ яҡты донъяны.

12.12.1979.

## Әсәм теле

Ғорурланам: әсәм теленең
Саф өндәрен ҡурсап йәшәнем.
Үҙ башыма бәлә баҫһа ла,
Иҙә баҫтым үләт бәшмәген.

Әсәм һөтө менән һеңдереп
Аҡ донъяның шөңгөр өн-моңон,
Яҡшылыҡты яҡлап йәшәргә
Әсәм теле менән тулымын.

Автоматын илдең ҡосаҡлап,
Тура килде сиктә ҡалырға.
Әсәм телендә мин теләнем
Йәнде илгә фиҙа ҡылырға!

Әсәм телендә мин аңланым
Намыҫыма лайыҡ эштәрҙе.
Әсә телем мине йәшәтте,
Әсә телем мине күтәрҙе!

Тамырымды төптән ҡырҡырға
Яһилдарҙың шашып янауын
Әсәм иленән мин тибәрәм,
Әсәмдән үк әҙер яуабым!

Ауыҙымдан ҡаным аҡһа ла,
Йолҡа алмаҫ һис кем телемде.
Әсәм телендә мин йәшнәрмен,
Йәшнәтермен Әсәм-Еремде!

22.12.1979.

## БАБАЛАР ЯДКӘРЕНӘН (ШӘЛКЕМ)

(Һарт ҡалаһы ташъяҙыуҙарынан

### Күҙһеҙҙәр

“Яҙма телһеҙ булған башҡорт”, тиҙәр
Сүбек сәйнәп сүккән улдары.
Бейей улар Иблес таҡмағына,
“Ғилем”дәрен сөйөп юғары.

Көндө хатта ҡуйыр ине ҡаплап,
Нуры юҡ, тип, ындай көҙөктәр.
Үҙ баҙлағы баҙлап янһын өсөн
Көндән ҡасҡан ҡуңғыҙ кеүектәр...

Уралдары, Шүлгән, Аҡбуҙҙары
Булған халыҡ — телһеҙ буламы?!.
Донъя яралғандан янар Ҡояш —
Күҙ йомоуҙан нурһыҙ ҡаламы?!.

Теле лә бар, яҙған һүҙе лә бар —
Шаһит быға һырлы сал таштар.
Атлантиктан — Тымыҡ океанғаса
Соҡоп яҙған йыр һәм ҡарғыштар.

Әлифбаһын ерҙең уйлап табып,
Ырған уны алыҫ бабабыҙ.
“Башҡорт, — тиеп, — булған ҡырағай-кейек”... —
Самаларҙан сыға самабыҙ...

Ҡояш кеүек бара ерҙә халҡым,
Күҙһеҙгә ул — уҙа эҙһеҙ ҙә.
“Күҙһеҙ”, “телһеҙ” тиҙәр бабаларҙы
Йәне һаҡау, күңел күҙһеҙҙәр!

Әсә телен, хатта имгән имен
Өҙөр, тешләп, яһил аҙауы.
Маңҡорт ҡалып, маңҡанан тапалып,
Үҙенең дә етер аҙағы.

27.03.1979.

## Ҡояш теле

И, белемсеҙ артмаҡ — килемсеҙ әүәрәү, улан...
**Таштағы һарт яҙыуынан.**

Бынан ике мең биш йөҙ йыл элек
Яҙылған ядкәрҙе уҡыным.
Изге ҡорамында, соҡоп ташҡа,
Яҙған уны башҡорт тоҡомо.

Кесе Азияның Ағиҙеле,
Шылтыр-шылтыр, типкән һыуҙарын.
“Сейәлетау” булған хәҙергеләй,
Сейәләре бешкән, ҡыҙарып.

Тау башында “теремә” торған таштан
(Шунан беҙҙең “тирмә”, “төрмә”ләр...)
Теремәлә хөкөм ҡорған батша
(Ҡорос исемле ул көр әҙәм.)

Элладаны хатта дер-һелкетеп,
Ил ағаһы илдәр ҡармаған.
Атлы ғәскәренең тояҡтары
Күп ерҙәрҙең ялын тараған...

Афәт менән тулыш шул заманда
Бер һил урын булған теремәлә:
Ҡояш-хоҙайҙың пак уты янған
Теремәләге ҡорам-тирмәлә.

Бүрелекле[8] ижау менән ҡойоп
Ерҙең майын — “ҡара алтын”ын,
Тормош мәңге дауам итһен өсөн,
Ҡурсаған маг Ҡояш ялҡынын.

Көн-төн янған илаһи был ялҡын,
Таш йөҙөндә теле уйнаған.
Ташҡа ырып ырын яҙыр өсөн,
Мәҡәлен маг ерҙең уйлаған.

Тарих-сал атаһы Геродот та,
Искәндәр ҙә әле тыумаған...

---

[8] Бүрелекле – брелоклы.

Шул замандан минең телем менән
Ҡаяға маг яҙыу һырлаған.

Теременән тышта — төрмә икән
Тәңренең был яҡты көндәре:
Кеше менән кеше боғаҙлашып,
Илдәр киҫкән, килеп, илдәрҙе.

Шул Ҡорос та ҡорос ҡылыс менән
Тәхетенән сабып ташланған.
Дошман ғәскәрҙәре уба өйгән
Ҡорам ҡорған ғәзиз баштарҙан,
Ырын ырған изге таштарҙан...

...Ҡорос та юҡ инде, ҡорам да юҡ —
"Сейәлетау" өҫтө кәҫ кенә.
Кәҫ аҫтынан, ҡаҙһаң, сыға килеп
Ядкәр яҙған изге таш ҡына.

Һәм "башлы"лар, шуны уҡый алмай,
Нисә быуат инде баш вата.
Яҙыу ырындарын таныһа ла,
"Телен аңлай алмай" шаҡ ҡата...

Уҡыным мин бөгөн шул ядкәрҙе —
Алыҫ бабаларҙың мәҡәлен.
Ике мең биш йөҙ йыл ниндәй яҡын! —
Һәр һүҙенең тоям йәм-тәмен.

Сер һандығын астым телем менән —
Иң серле тел менән донъяла.
Ҡағыҙға беҙ яҙған сал мәҡәлдәр
Ул таштарҙа асыҡ һынлана.

Ер аҫтына шиңгән Шүлгән-күлдәй,
Ятҡан икән, һис кем шәйләмәй:
И туған тел! — урғылды ла ҡапыл,
Сылтыр-сылтыр аҡты, шишмәләй.

Түшем терәп ятып эсәм шуны, —
Алыҫ һарттарҙың мин тоҡомо.
Бабаларҙың телен телем менән
Һыуһындарым ҡанып уҡыным.

Күҙ алдыма ҡалҡты таш ҡорамдар,
Ҡояш теле — майлы ижауҙа.
Таш битенә ырып ырым яҙған
Сәсән-шағир бабам — маг ҡайҙа?..

Тар-мар килгән дәүләт, теремәләр,
Ҡалған тупраҡ — тажлы баштарҙан.
Тик һүнмәгән Ҡояш: әсә телем
Ялҡынлана һырлы таштарҙан!

27.03.1979.

## Маг баба

Бүрелекле улан, ике-өс артым аҡсаҫы ҫал, улан...
**Таштағы һарт яҙыуынан.**

Ҡояш ҡорамында алыҫ бабам
Шулай тип башлаған яҙыуын.
Артым аҡса, тимен, килгәндер мул —
Ныҡ тотҡан ир яҙғыс ҡаҙауын.

Сал таш бите Кесе Азияның
Таш теремәлә тәрән соҡолған:
Ике мең биш йөҙ йыл үткәс тә ул
Бөгөнгөләй асыҡ уҡыла.

Белгәндерме бабам, белмәгәнме
Сал Уралда улан тыуырын,
Уның соҡоп яҙған ядкәрҙәрен
Үҙенеке күреп уҡырын?!.

Ҡорһа мәжлес, улан табынында
Бүрелекле ижау торорон,
"Ҡояш"ка ул шунан ҡойғандай май,
Дуҫтарына ҡымыҙ ҡойорон?!.

Белгәндер ул, бабам, — маг булған ул...
Магтар сөнки сихри нәҫелдән.
"Энциклопедист" тип атар инек
Бөгөн уны — маһир һәр фәндән.

Бүрелеген тағып муйынына,

Ғайсаларҙан элек тыуған ул.
“Бог” тип үҙен иғлан итмәйенсә,
Ҡояш-ут һаҡсыһы булған ул.

Табындыртҡан илде шул Ҡояшҡа —
Тормош башы сөнки Ҡояшта!
“Маг” тип танылыуҙан әүәлерәк
“Баҡ” тип исемләнгән ул башта.

Ябай исем ниндәй һәм хөрмәтле —
Баҡ — Ҡояштың утын бағыусы!
Өшөп килгәндәргә ут биреүсе
Һәм таштарға шиғыр яҙыусы!

Батшалар ҙа эйгән бында башын,
Ҡапсыҡта беҙ тиген ятмағас.
(Йәл: “Бог”тар бит тыуған шул “Баҡ”тарҙан,
Үҙен “Ҡояш” итеп атағас...).

Финансист та, экономист та ул,
Философ та — баба-Баҡсыбыҙ.
Ер йөҙөндә тәүге тәңкәләрҙе
Һуғып, артҡан көмөш аҡсабыҙ.

Күрәһегеҙ: хәс тә бөгөнгөләй,
“Аҡса” тип атаған, “бол” тип тә.
“Ике-өс артым аҡса çал”ып ингән
Әҙәплеләр изге ишектән.

Әҙәплеләр, — сөнки әҙәпһеҙгә
Үтенестәр ырып яҙылмай.
Үтенеүсе, — сөнки йолоусылар
Батша ғәскәрендә аҙымлай.

Ҡорамдағы Ҡояш ялҡынын бит
Кәрәк аҡса көн-төн ашларға.
Кешеләрҙән хатта Ҡояшты ла
Үтенеп ул һорай һаҡларға...

Оҡшатамын бабам сафлығына
Ҡояш илткән илем шағирын:
Ут хаҡына фәҡәт үтенә ул
Күңелдәрҙең сыңрау талирын...

28.03.1979.

## Ҡояш ҡорамы

Пак улан, маҡ улан, уҡ улан, тыйнаҡ улан...
**Таштағы һарт яҙыуынан.**

Иң тәү-башта беҙҙең бабаларҙың
Һыуға табынғаны билдәле:
Әсә һөтө һымаҡ һөйгән Нилды
Яғыбиттең[9] баҡ-маг-бейҙәре.

Һоймәй ҡара! — ярҙар араһында
Тормош, әжәл илткәс тулҡындар.
Әсә ағын бәпес имгән кеүек,
Аҡ-һыу эсеп үргән ужымдар.

Ужып ужым, башы күтәрелгәс,
Көнгә баҡҡан күҙе кешенең.
Иҫе китеп күргән Ҡояшты ул,
Асҡан кеүек бәхет ишеген.

Уйлаған ул: унда йылылыҡтың
Әсәлектең бөтә ҡот башы.
Ҡылған ҡарар: һутлы һауытымда
Донъя көтһөн Бәхет-Ҡояшым!

Ҡорған ҡорған таштан... Ҡуйған соғут[10],
Граниттан соҡоп, түренә.
Ҡояш-апай "имер" ыу-майҙарын
Ҡойған, еткеҙгәнсе күҙенә.

Һәм бер төндә йәшен саткыһынан
Шул соғутҡа ялҡын күсергән.
Балҡып киткән — Ҡояш ергә төшкән:
Көндө баҡҡан бабам, эсергән.

Баҡ тип аталған ул — ут бағыусы.
Маг, бог, бәк, бей — шунан таралған.
Ҡояш ялҡынына ҡойған "май"ҙар —
"Мағ" (май), "вағ" (яғ) булып яралған...

[9] Яғыбиттең – Египеттың.
[10] Соғут – һауыт.

Төҫләтһә “мағ” ялҡын сихырсыһын,
Иҫләтә “яғ” ялҡын яғыуҙы.
Бог, бәк, бейҙәр — илдең иғәнәһен
Ҡорамдарға йыйып байыуҙы...

“Пак-Ут” тип был утты атағандар —
Ҡояш бит ул паклыҡ аллаһы!
Шул пак утҡа тарып, көлгә ҡалып,
Көйгән төндөң ғәйбәт-ялаһы...

Төҙөшкәндә солох державалар,
Тыныс йәшәргә лә ваҡыт, тип,
Батырышып бармаҡ изге утҡа,
Иткәндәр ант, солох — Пакт, тип,
Пакт иһә илгә Бәхет, тип,
Һыйышып дуҫ йәшәү — Факт, тип...

Быуындарҙың ҡуры — Ҡояш нуры
(Быуын-быуын Ҡояш теҙелгән.)
Серек быуын тыуһа был донъяға,
Ҡояш сылбыры шарт-өҙөлгән...

Һәр хәлдә шул асыҡ: ул ҡорамда
Көн-төн, һүнмәй, изге ут янған.
Уттан яҙған донъя бахырҙары
Шул ҡорамға килеп ут алған.

Туңғандарға ошо изге ялҡын
Тоҡандырған йылы, ал нурын.
(Һис бер кем дә әле шәйләмәгән
Ҡорамдарҙан “храм” тыуырын.
Ҡояш уты -- бомба булырын...)

Усаҡтарға күскән ут алдында
Йөрәктәргә йөрәк бәйләнгән.
Ҡояш ялҡынының бағыусыһы
Аҡ(ы)рынлап Богка әйләнгән...

Ух, ҡурҡыныс, әгәр бәндә үҙен
Ҡояш-Апай итеп күтәрһә!
(Хоҙайланмыш бәғзе батшаларҙың
Ҡылыҡтары ғибрәт күптәргә.)

Тыуған тәхет... Таж ослаған уны...

Ялағайлыҡ, яла ҡолдары...
Бәндә менән бәндә араһында
Батҡан һаҙға Ҡояш юлдары...

Һәм һөҙөмтә: илдәр көйрәп яна...
Тик бер ус көл — ҡорам урынында...
Ҡулдан ысҡынған Пак-Ҡояшты, тим,
Ҡайтарырға нисек?... Сер шунда.

29.03.1979.

## Ишет, йәш улан

Ишет, йәш улан, вә нәҫел(ең)не
ҡалдыр, буғ(а)-улан...
**Таштағы һарт яҙыуынан.**

Демографы антик донъяның! —
Булаһыны беҙҙең ҡайғыртҡан!
Егерме биш быуат элек үк
Быуындарға орлоҡ һалдыртҡан.

Ишет бына шуны, йәш улан,
Йәшен утын яҡҡан ҡартыңдан:
Кәүек кәбәк түгел, тос бойҙай
Ҡалһын икән, шытып, артыңдан!

Быуындарың барып ялғанһын, —
Биш мең йылдан һуң да! — быуынға.
Нәҫелдәрең ҡалһын ереңдә,
Ҡалмаҫ өсөн аҙаҡ саң-ҡыуға.

Ҡуңыр Буға юлын уҙғанда
Буға мөгөҙөнә тотоноп,
Йылғаларҙың иҙел-башына
Һипкән бабаң изге тоҡомон.

Океан һәм океан араһын
Уҙған гиҙеп, йылға-һыу кисмәй.
Бөтөн кешелектең донъяһын
Тыуҙырған да киткән, үтешләй...

“Буға-улан” -- бүгәй-уландыр,
Телгә беҙҙең бөгөн күсерһәк.

Баба һүҙе — мәңге тура һүҙ:
Нәҫелһеҙҙәр — илгә тик сергәк.

Серей улар эйәр аҫтында.
Сапҡынсыһы илдең — ул түгел...
Ҡуңыр Буға юлын юғалтып,
Упҡындарға оса ҡыу күңел...

Ҡояш нуры — быуын ҡурында
(Быуын-быуын Ҡояш теҙелгән.)
Сергәк бәндә менһә тәхеткә,
Ҡояш сылбыры шарт-өҙөлгән...

“Нәҫелеңде ҡалдыр, йәш улан!” —
Ҡояш ядкәрендә шул тора.
Быуындарҙың сылбыр башында,
Бағып һиңә, бабаң ултыра.

29.03.1979.

## Ер-Һыу, Ҡояш, Кеше, Әпәкәй

Мендем тауҙың башына,
Ядкәр яҙҙым ташына...
**Халыҡ йырынан.**

Быуаттарҙың баҡһаң бәғеренә,
Бабаларҙың борғой ораны.
Туған өндәр! Әсәм теле булып,
Бөгөн дә һеҙ тере, өр-яңы!

“Ер-Һыу, Ҡояш, Кеше, Әпәкәй”, — тип
Ҡаяларға тылсым яҙылған.
Ырып яҙған ырын-доғаларҙы
Уҡыным мин сая сағылдан.

Урал бөркөттәре саңҡыуына
Оҡшаттым шул ғәзиз өндәрҙе.
Болот ярып осҡан шоңҡар кеүек
Килеп еткән хәреф йөйҙәре.

Уҡыйбыҙ шат бөгөн туған телдә,
“Башҡортостан!” — тип хаҡ яҙабыҙ.
Ошо көндө юрап, ядкәрҙәрен

Яҙған беҙгә алыҫ бабабыҙ!

Бөркөт сорғоп менер сағылдарға
Сорғоу кәрәк уны уҡырға.
Сағыл сыңлатырлыҡ сая өндәр
Сыға алмаҫ һаҙмат-соҡорҙан!..

“Ер-Һыу, Ҡояш, Кеше, Әпәкәй”... — Был, —
Юйылмаҫлыҡ мәңгел доғалар!
Һалдат штыгылай, ул доғалар
Туған телде һаҡлап торалар!

Кем ул тылҡый, телһеҙ-яҙыуһыҙ тип,
Таштар ярып яҙған башҡортто?!.
Ул түгелме — китап бите битләп
Ҡаяларҙан, мең йыл таш ҡырҡты?!.

Урал буйлап утлы яуҙар уҙған,
Көл ителгән ауыл, ҡалалар...
“Ер-Һыу, Ҡояш, Кеше, Әпәкәй!” — тип
Йырлай һаман мәғрур ҡаялар.

30.03.1979.

## 1980

************************



Йыхат, мама Бибисадика. 1970 г.

### *Яңғыҙлыҡ

Ҡәбереңә, әсәй, яҙ һайын
Яңғыҙ ғына һаман киләмен.
Яңғыҙлатып мине китергә
Булған, буғай, һуңғы теләгең.

Һин булмағас, инде миңә юҡ
Хәйерле юл теләп ҡалыусы.
Сит илдәрҙән алйып ҡайтҡанда,
Асып ишек, көтөп алыусы.

Баш осоңа ҡуйған мәрмәрташ
Ураҡ-Айын ҡосоп ҡыуара.
Өҫтөңдәге нәҙек түтәлгә
Гөл үҫтереп булам әүәрә.

Яңғыҙлығым баҡҡан ҡыналар,
Ҡыйналһам да, балҡып ҡыҙармаҫ.

Һуңлап тамған асы күҙ йәшем
Йөрәгеңә инде юл ярмаҫ.

Ҡаңғырамын япа-яңғыҙым...
Һәм юҡ урын һинең яныңдан...
Алып кил, тип, әсәм күҙ нурын,
Ялбарамын тыуыр таңымдан…

8.07.1980.

## Йәмшегән

“Ҡыуара был...” — тиеп ҡыуанмағыҙ,
Туйманым мин әле йәшнәүҙән!
Күмһәләр ҙә гүргә, бөрөләнеп,
Ярып сығыр ярһыу-йәш кәүҙәм.

Йәмшегәндәй тырпаҡ энәле, тип,
Биҙҙе минән эттәр, ҡуштандар.
Тыуған ерҙең инем энәһе шул,
Ҡаҙалырға яуыз дошманға!

Ҡауырһыным ҡатмаҫ элгәре үк,
Тырпайырға йәнем өлгөргән.
Йоторға тип килгән ялмауыҙҙың
Йотҡолоғон йыртып бөлдөргән!

Минең һымаҡ итеп төҫмөрләгеҙ
Миндәйҙәрҙе биргән еремде.
Был ерҙә бит һәр бер осло ҡыяҡ
Шытҡан тотоп ҡылыс һәм һөңгө!

Динозаврҙарҙан — төлкөгәсә,
Күҙе ҡыҙып ергә, тамшанған.
Шуға ла шул, бөтөн халҡым минең
Тырпай йәмшегәнгә оҡшаған!

Ҡанға ҡанып бешкән емештәрен
Бирә алмаҫ бирән аҙауға.
Хатта елдәр бында — таран төртә,
Ямғырҙары ҡаға ҡаҙауҙай…

Күмһәләр ҙә тапап, энәм шап-шаҡ –
Ярып сығыр бөрөм гүр-өңдө.

Тынғы бирмәҫ йәнем йәмшегәне,
Тырпайлатып ҡылыс һәм һөңгө!

24.06.1980.

## Ошо ер

Ошо ерҙә тыуып үҫкәнгәме,
Ер кендеге тоям үҙемде.
Ерем кеүек үтә мин ябайлы,
Ерем кеүек үтә түҙемле.

Ғәзиз ерҙе берәү ятып үпһә,
Берәү китә тибеп, төкөрөп.
Унда ләкин һаман иген уңа,
Үләндәре үрә күпереп.

Икмәген ер йомарт етештерә
Сырхауға ла, мыҡты иргә лә.
Сәскәһе лә аңҡый һабағында,
Энәһе лә тора эргәлә.

Һәммәһенә әҙер берҙән-бер Ер,
Ҡолаҡ һалмай маҡтау, һүгеүгә.
Үҙ белдеге менән әйләнә ул,
Биреп иңен көнгә һәм төнгә.

Һандуғастың һары балаҡайын
Һары балға манып осора.
Ҡара ҡайғыларҙың ҡарынынан
Ҡара йыланын да тыуҙыра.

Үгәй түгел һис ни ер йәненә,
Берҙәй изге — тыуым, үлеме.
Кендек инәһен дә, ҡатилын да
Тупраҡ ҡыла унның ғилеме.

Ерҙе, һөйөп, шуға “әсәй” тиҙәр,
Һәм, “ҡәбер” тип, тапап-төйәләр.
Бөтәһен дә түҙем күтәрә ер,
Бөтәһе лә ергә тейәлә...

Ерем менән йырым көрмәлешеп,

Күр терәге булдым Ҡояштың.
Табан менән ергә тамырландым,
Түбәм менән күккә олғаштым.

Ер намыҫын һаҡлап тыуғанғалыр,
Башҡортомдоң күре ҡуҙарған.
Ер булһаҡ та, гүргә ир-йыр булып
Кереү яҙған беҙгә Хоҙайҙан.

2.07.1980.

## Ынйы сәскәһе

Ниһәйәт, беҙ күҙгә күҙ тегештек
Һинең менән, ынйы сәскәһе!
Нисәмә, нисәмә миллион йыл
Ошо мәлем өсөн йәшәнем!

Тыуғанһыңдыр ергә минән алда,
Атҡанһыңдыр сәскә, орлоҡ та.
Эйелеп тә һиңә ҡарай алмай,
Уҙғанмындыр сағыу ҡырыңдан.

Сәскә түгел — үлмәҫ өсөн аҫҡа,
Һыҙғанмындыр кейек эҙенән.
Мамонт ботон йөкмәп ҡайтҡас ҡына,
Балҡыған нур йәрем йөҙөнән...

Нисәмә мең һәм мең йылдар үткән...
Таш ҡалалар хатта һалғанбыҙ.
“Йым-йым” итмеш ынйы бөртөктәрен
Диңгеҙҙәргә сумып алғанбыҙ,

Ә ҡул аҫтымда бит үҫкән ынйы —
Серһеҙ генә ситән буйында:
Диңгеҙ ынйыларын ҡамаштырып,
Ынйы-сәскә нурға ҡойонған!

Күрмәгәнмен. Күрә белмәгәнмен...
Диңгеҙҙәргә сумып-кергәнмен.
Йәргә ынйы бүләк итер өсөн,
Йәнемде лә хатта биргәнмен...

Бөгөн генә, ситән ситләп кенә,

Еттем килеп һинең эргәгә.
Беренсе ҡат, күҙгә күҙ тегешеп,
Ултырабыҙ таңғы ғилләлә.

Өҙөргә тик һине бармай ҡулым —
Йәрем ҡалыр ынйы сәскәһеҙ...
Биртендертмәй тере ынйыларҙы,
Сырмалтайыҡ сәсте — сәскә беҙ!

...Быуаттарҙың саңы сыңлай ерҙә,
Ә икебеҙ һаман — саф ҡына.
Сәскә менән сәсән үтте ҙур юл,
Ошо изге сәғәт хаҡына.

2.07.1980.

## Ярсыҡтар

*

Аҡ ҡайыным, һине, “минеке” тип,
Атамайым инде күптәндән,
Үҙенеке итә алһын өсөн
Ҡайын аҡлыҡтарын бүтәндәр.

*

Ҡушмаһа ла башҡорт үҙ исемен,
Иҫләй уны ҡала, ауылдар:
Яҡын Көнсығыштан — ҡотопҡаса
Әллә нисә Башҡорт тауы бар.

*

Мин башҡалар һымаҡ булмайым,
Башҡаларҙың юлын ҡыумайым:
Аҡыл — миңә сикһеҙ бирелгән,
Йә — алынған, тиеп уйлайым...

3.07.1980.

## Аҡ ҡайын

Аҡ ҡайыным минең, аҡ ҡайыным,
Инсафлығы башҡорт еренең!
Сит илдәрҙә һине төштәремдә
Ҡосағыма алып йөрөнөм.

Тундраның туңғар елдәрендә
Күҙ-бөрөңдө өрөп иреттем.
Аҡ күлдәкле керһеҙ кәләшемдәй,
Муйынымдан ҡосоп тилерттең.

Аҡ ҡайыным минең, аҡ ҡайыным,
Аҡ биләүле бала сағымдан
Әсәм күкрәгеләй аҡ туҙыңа
Ерем ағы итеп табынам.

Һиңә генә йөрәк серҙәремде
Әсә телемдә йыш һөйләнем.
Өнәмәнем ләкин урыҫымдың:
“Урыҫ ҡайыны был!” — тигәнен.

Һинеке лә, минеке лә ҡайын...
Әлмисаҡтан башҡорт ерендә
“Башҡорт ҡайыны” тип тамға һалып
Йөҙәтмәгән ерҙе бер кем дә.

Ирек ҡуйған башҡорт һәр кеменә —
Теле теләгәнсә атарға.
Шуның менән теләгәндер, бәлки,
Аҡлыҡтарын ерҙең һаҡларға.

3.07.1980.

## Космонавт монологы

Элемтә юҡ Ер менән... ул... өҙөлдө...
Эшләмәйҙәр инде при... приборҙар...
Ауыҙлығын сәйнәп өҙгән айғырҙай,
Алып ҡасты карабым... юҡ... юҡ ярҙам...

ЭВМ-дары ла Ерҙең көс... көсһөҙ...
Тота алмай инде тартым көсө лә.
Академиктарҙың хис... хисаптарын
Бутап, сти... стихия-көс көлә.

Бюрокандан алып — Гринвичҡаса
Телескоптар япты... япты чехолын.
Гәзитәләр ҡара ҡайма... ҡаймалап

Бәхилләне батыр... батыр Ер улын.

Ә мин һаман тере килеш осамын.
Алып ҡаса... ҡаса айғыр төпкәрәк...
Шау-йондоҙҙар ҡайнап торған йыһанда
Тибә... тибә һаман кескәй бер йөрәк...

Аҙыҡ-түлек, һауа запастары ла
Ҡалып бара бары бер тын алырлыҡ.
Ҡап-ҡара төн ҡаплаған Ер тарафын —
Һуңғы шатлығым да юҡ... юҡ бағырлыҡ...

Иллюминаторҙың ҡалын боҙҙарын
Тыным өрөп... туңын һүреп күҙ текәм...
Туҡта! Ни был?!
Ерҙең дөм-ҡара боҙон
Сысҡан күҙендәй ут... ут-ҡот иреткән.

Тура баға, тура баға күҙемә
Етеле шәм — ялҡын телле бер маяҡ.
Ауылым бит!
Ауылым!
Әсәкәйем
Көтә мине унда, һүнмәҫ ут яйлап!

Ошо уттан, кинәт, туң йөрәгемдә
Һәм мейемдә ярһыу ялҡын ҡабынды!
Алып ҡасҡан карабым-айғырымды
Ауыҙлыҡлар әмәл, ғәмәл табылды!

Тота ҡыҫып ҡулым карап штурвалын —
Ултырамын ҡабат ныҡлы эйәрҙә!
Үҙгәртә лә айғырым орбитаһын,
Етеле шәм тылсымына эйәрә.

Телгә килә туңған приборҙарым,
Ҡуш ҡулын Ер һуҙа — яҡлап, шатланып.
Йөрәгемдә — сысҡан күҙендәй генә
Дөрләп бара әсәкәйем яҡҡан ут!

4.07.1980.

## Йәшендәрҙең йәшел яраһына...

Абайламай киҫкән ҡылыс кеүек,
Хистәремдең киҫәм ылыҫын.
Шашып көлһә донъя — мин илайым,
Һулыҡҡанда донъя — тынысмын.

Шуғалырмы, тоям мин үҙемде
Сит ғаләмдән ҡупҡан йондоҙҙай.
Үҙ ғаләмем мине кире алмай,
Ер ғаләме мине һыйҙырмай...

Үкһеүемде түгәм үләндәргә,
Һөйөүемде һибәм талдарға.
Әҙер улар мине кисерергә,
Әҙер улар мине аңларға.

Сыбарлыҡтан сыйрап, кәфенемде
Йәм-йәшелдән инде тышлаттым.
Һөйөлмәйсә һөйгән йәшен ташын
Таба алмай ғаләм баш ватһын.

Йәшендәрҙең йәшнәү яраһына
Йәшел сатҡы булып күмеләм.
Мине һөймәй үткән һылыуҙарҙың
Йәше ағыр әле күҙенән.

04.07.1980.

## Әрепләшеү

Ярар. Булһын. "Ҡара ҡарға" мин.
Ә һин — сыбар һыртлы шом-йылан.
Бөтә көсөң — мине сағыуҙа.
Ағыуыңдан үлә фил, болан.
Ә мин — "ҡарға". Йылан ағыуы
Ҡарға өсөн түгел ҡурҡыныс.
Услайым да нескә биленңдән,
Ҡабып йотам һине, тып-тыныс.

4.07.1980.

## Ямғыр

И илаһи ямғыр! Игенсенең
Көтөп алған сихәт арбаһы!
Дөбөр-шатор килеп, күк күленән
Күнәк-күнәк ҡойоп бара һыу.

Ята һулап, асып ауыҙын, ер,
Ҡоро ярҙа ҡатҡан балыҡтай.
Кинәндереп яуа, яуа, яуа,
Рәхмәт төшкөр, яуа ялыҡмай!

Туйынды ер...
Сөйҙө, текә тороп,
Йәшел ҡойроҡ —
Ҡайын-аҡбалыҡ.
Күк көмбәҙен һүргән ут-мунсала
Сауҡалыҡта ҡалды сырмалып...

Сихәттәрен сәскән Күк арбаһы
Алыҫлаша Урал артына.
Тәгәрмәсен тотоп ҡалайым, тип,
Үлән ускайҙары тартыла.

Арыштарҙың ҡарыш мыйыҡтарын
Ҡармап, ҡырҙан аҡ боҫ үрмәләй.
Шырау-шыршы баҫыу ҡырыйында
Тора баҫып, эре түрәләй.

Сейәләрҙең ҡыҙыл мәрйендәрен
Йылҡылдатты Ҡояш убаһы.
Олаҡҡан шат сихәт ылауының
Ҡалды балҡып йәйғор-дуғаһы...

Ҡыштыр-ҡыштыр тороп ултырыша
Бүтәгәләр аулаҡ аҡланда.
Аҙашыпмы ашҡан бер аҡсарлаҡ
Йәйғор кисеп уйнай яланда.

4.07.1980.

## Ҡайын еләге

Тамсы-тамсы ҡандай — ҡайын еләк,
Ҡайын төптәренә һибелгән.

Әллә микән анау ап-аҡ туҙҙың
Яраһынан ал ҡан түгелгән?..

Үтте мәллә ярып ҡайын йәнен
Ҡайһы яҡтан атҡан яу уғы?..
Ҡыҙыл ҡандай, йәнде арбап шундай,
Бешә еләк — йәнем зауығы.

Һыпырам да тәлгәш тармаһынан,
Ҡабам, услап, алһыу тамсыны.
Ҡайын ҡара күҙе тора ҡарап
Аҡ туҙынан — ҡомһоҙ ҡансыны.

Ҡайынҡайым, беҙҙең ал ҡандарға
Буялғайны билең бер заман...
Еребеҙҙе алһыу еләк кенә
Алларҡаны өсөн ҡыуанам.

5.07.1980.

## Һылыуға

“Ағай” тиеп миңә өндәшәһең,
Әллә үртәп, әллә шаярып.
Көлгәнеңдә сыңрап, күңелемде
Сыйып үтә хәтәр ғәййәр ут.

Белмәйем мин шунда үҙ-үҙемде:
Ағаймы мин, әллә тиңдәшең?
Эҙең гиҙеп үткән һәр һуҡмаҡта
Тора кеүек, көтөп, көндәшем.

Томорайтып ҡара толомоңдо
Уҙғаныңда — йөрәк уйыла.
Аҡ таңдарҙың ап-аҡ томанынан
Төштәремдә һының ҡойола.

Сумам кереп зәңгәр монарыңа,
Аңым — аңыш, күҙем — быуыулы.
Көлгәнеңдә ҡыйып ҡыймылдаһам,
Илатырмын төҫлө бер юлы.

5.07.1980.

## Ер әйләнә

Өйрәнгәйнем инде үтергә...
Күнеккәйнем инде китергә...
Ғазраилым салғыр салғыһын
Салғанда ла сабыр итергә...

Әллә ниңә бөгөн йөрәкте
Дерелдәтте ярһыу яңы уй:
“Ҡалай итеп ташлап китәйем? —
Бара ерҙә ерсән һабантуй!..”

Был үләндәр, ап-аҡ ҡайындар
Минән башҡа йәшәй алырмы?
Анау ятҡан йәшел йәшмәташ
Мин юҡ саҡта сағыу ҡалырмы?

Миңә тиклем, ата-бабалар,
Булып риза, нисек киткәндәр?!
Ҡара ерҙе һүреп сыҡмаҫмы
Минең күргән, минең үткәндәр?!.

Аңлай алмай быны аҡылым.
Ғажизлыҡтан телем бәйләнә.
Бәндә һаман килә һәм китә...
Ә Ер һаман, һаман әйләнә...

5.07.1980.

## Асылыу

Әллә ниндәй булып тыуғанмын,
Әллә ниндәй тотам ғәҙәтте:
“Әҙәпле”ләргә мин — әҙәпһеҙ,
“Әҙәпһеҙҙәргә мин — әҙәпле.

Дошманымын яһил ялғандың,
Һанламайым ҡатҡан ҡанунды.
Серәкәйҙең яҡлап хаҡлығын,
Ағыҙырға әҙер ҡанымды.

Әллә шуға, әллә башҡаға, —

Тулай миндә бәйһеҙ хыялдар.
Кемгә бикле тимер ишектәр —
Миңә асыла ла ҡуялар!

Мөрхәтһенмәй шиғыр, прозаны,
Тамырына телдең тотондом.
Рәхмәттәрен хатта көҫәмәй,
Төндө ярып яҡтым утымды.

“Тәүтел” тигән тәүге ғилемдең
Уйнап ҡына ҡойҙом нигеҙен.
Быуаттарға һуҙған ҡулымды
Дәүерҙәргә тиклем тейгеҙҙем.

Илемдең һәм тыуған еремдең
Ҡайтты миңә ҡайтмаҫ тарихы.
Дәүерҙәрҙе күҙҙән күҙәүләп,
Алдым һөҙөп алтын балыҡты.

“Һөйләшмәгән” иҫке яҙыуҙар
Бирҙе тауыш миңә таштарҙан.
Лот иленән һарттар ҡысҡырҙы,
Алдым хәбәр скиф-сактарҙан.

Тамғалары ҡатай-көҙәндең
Өнлө яҙма булып балҡыны.
Бәктораның донъя картаһын
Ҡаяларҙан күҙем таныны.

Мөхәммәт һәм Ғайса, Буддалар
Тыумаҫтан уҡ улар булғандар.
Ядкәрҙәрен минең телемдә
Ташҡа соҡоп яҙып ҡуйғандар.

Баш ватҡанда олпат “башлы”лар
Уҡый алмай һаман шуларҙы,
Ҡанундарҙы ватҡан аҡылым
Сер асҡысын һөйрәп сығарҙы.

Йоҙаҡ икән ябай асыла —
Тот та уҡы әсәм телендә!
Колумбтарға тиклем асылған
Алты ҡитға алҡый ҡулымда!

Аңлат бына шуны донъяға...
Үҙем дә мин аңлай алмайым!
Аҡыл — йәки сикһеҙ бирелгән,
Йә — алынған, тиеп уйлайым...

5.07.1980.

## Халыҡ тамыры

Бер халыҡ та түгел тәбәнәк! —
Ошо фекер менән көн итәм.
Был ерҙәге һәр бер тоҡомға
Күңелемдә һөйөү йөрөтәм.

Йән иҫәбе менән үлсәнмәй
Сал бөркөткә тейгән алғырлыҡ.
Мең-меңме ул, әллә бер меңме, —
Алғырлығы хайран ҡалырлыҡ.

Донъя яралғандан яралып,
Еткән бит ул килеп был көнгә.
Алмаштырмайынса һаҡлаған
Үҙ йөҙөн һәм әсә телен дә!

Килә һаҡлап донъя үҙ күркен,
Ҡыйралтмайса, бына шуғалыр.
Ҡарға булып әгәр ҡысҡырһа,
Ылаҫындан, тимен, ни ҡалыр?!.

Юҡ! ҙур түгел халыҡ — күплектән,
Ҙур итәлер уны тамыры.
Тамырынан ҡупмай ҡурпылап,
Кисерә ул мәңге яңырыу.

Бына шуны һанға һуҡмаған –
Киҫеп ташлай үҙен тарихтан.
Үҙ ҡорона уны алырға
Ҡарап тора шайтан ярыҡтан.

6.07.1980.

## Боронғо тарихтан

Саҡма ташҡа саҡма сағып
Саба сапҡын.
Арғымағы тояғынан
Оса ялҡын.

Ҡанъяғанан күбек аға,
Йүгән сыңлай.
Һыбай-егет үҙе лә бик
Ауыр һулай.

Күкрәгенән ҡашағаға
Тама ал ҡан.
Күмер кеүек ҡара күҙҙәр
Төпкә батҡан.

Ҡыя ләкин ҡамсыһын ул,
Ҡыуа атын...
Тыуған йәйләүенә инде
Ара яҡын.

Аҡһаҡалдар аҡ тирмәлә
Уны көтә.
Әммә сапҡын ул тирмәне
Янлап үтә.

Ҡырыйҙағы күк көмбәҙгә
Бора атын:
"Һылыуҡайым, һиңә Еңеү
Алып ҡайттым!

Дошман яуы күмәк ине —
Нығ алыштыҡ.
Ошо ҡылыс менән ҡырҡтым
Һуңғы башты.

Беҙ еңгән яу яланында
Ҡалдым бер мин.
Шатлыҡ сапҡынсыһы булып
Һиңә килдем!.." —

Шулай тине лә йән биреп
Ауҙы егет.
Күҙҙәрендә ҡатты ҡапыл

Һуңғы өмөт.

Күк тирмәнән сыҡҡан һылыу
Өнһөҙ ҡалды...
Йәйләүҙә тантана ҡупты —
Еңеү шанлы.

7.07.1980.

## И Илаһым
(Шаярыу)

И Илаһым, шаяртаһың һин мине:
Һөйә мине йәмһеҙ-йәнһеҙ ханымдар...
Үҙәккәйем өҙөлөрҙәй нескәмен,
Ә ҡосмаҡсы була һөмһөҙ йыуандар.

И Илаһым, бүкәндәрҙе — бүкәнгә,
Умартаны умартаға тоташтырт.
Умартаға керергә мин түгел ҡорт,
Ә башҡорт!

7.07.1980.

## Бушлыҡ

Мөхәббәттең бушлыҡ арауығына
Ғүмер юлым ахыр мине түңкәрҙе:
Ҡосаҡлайым төшкә кергән шәүләне,
Елгә иләп осорамын хистәрҙе.

Миңә тигән ҡыҙҙар инде — ҡатындар,
Ә ҡатындар ҡарсыҡ булып бөткәндәр.
Мине тыңлар, аңлар изге йөрәктәр
Аҡ елкәнле ҡайыҡтарҙа киткәндәр.

Мөхәббәттең гиҙәм бушлыҡ даръяһын,
Боролоуы мөмкин түгел арттарға.
Йәштәр инде күптән миңә ҡарамай,
Ә мин иһә ҡарамайым ҡарттарға...

7.07.1980.

## Бесәй-сысҡан уйыны

Минең менән күптән шаяра
Бер бәләкәс кенә буҙтурғай.
Әллә нисә быуат артында
Төштәремә кергән наҙ, буғай.

Үҙе үбә, үҙе “ағай” ти...
Ни әйтергә теләй — белмәҫһең.
Әллә инде алйыу ағаһын
Алйот ҡына ҡылып көлмәксе...

Йүгерә лә килә эргәмә,
Күбәләктәй кинәт юғала.
Муйынымда ҡала ҡул еле,
Йөрәгемде татлы шом ала.

Мин бал көткәнемдә — тоҙ һалып,
Тоҙ көткәндә шәрбәт тамыҙа.
Һүрелергә иткән сағымда
Ирендәре өтөп ҡабыҙа.

Бирмәй үҙе хатта һыйпарға...
Йәндәремде алды буҙтурғай...
Сысҡан итеп мине уйнарға
Бесәй булып уйнай ул, буғай.

Береләмен, әйҙә, уйнаһын!
Бесәйлегенә лә ҡарышмам.
Ләкин унып сысҡан тигәне —
Быуаттарҙы быуған арыҫлан.

7.07.1980.

## Старт

Ер әйләнә.
Ерҙең космодромы
Йыһан төбөн сәпкә самалай.
Ә ракета —
Әсә күкрәгенән
Нур имеүсе сабый балалай.

Балаһына барлыҡ йәнен эйеп,
Һулҡ-һулҡ тибә ерҙең йөрәге.
3...
2...
1...
Бәрә таблоларҙа
Йөрәк пульсе.
Яуап: “Мин әҙер!”

Ябырыла бала зәңгәр күккә,
Әсә күкрәгенән өҙөлөп.
Ауыҙынан аҡ-һөт ҡала ағып,
Йыһан төбөнәсә һуҙылып.

Ошо мәлдән алып Ер йөрәге,
Йыһан йәне — ҡуша тибәлер.
“Бала күңеле — далала” тигән һүҙ
Беҙҙең алға бөгөн киләлер...

8.07.1980.

## Башҡорт космонавты

Башҡорт космонавты әллә ҡасан
Булған инде йыһан төбөндә!
Шунан менеп ҡайтҡан Аҡбуҙатын
Менеп саба ерҙә бөгөн дә.

Һомайҙарын, Ай ҡыҙҙарын юллап,
Нисәмә ҡат күкте әйләнгән.
Күк төбөнә ҡағып Тимер Ҡаҙыҡ,
Аҡ тайҙарҙы шуға бәйләгән.

Ҡыҙҙары ла күптән осҡан уның
Ерҙән — Күккә, Күктән — ерҙәргә.
Айһылыу бит йыһан ҡайығында,
Ялҡын ялмап, төшә үрҙәрҙән.

“Сарбайлауы” хас та бөгөнгөләй:
Эфир аша байҡай ҡайтыуҙы.
Урал батыр көтөп тора ерҙә —
Ҡосағына алыр һылыуҙы.

Быны “Урал батыр” эпосының

Сал биттәрен асып уҡығыҙ.
Атын һуғарғансы — гиҙеп йыһан,
Йондоҙҙарҙы теҙгән халҡыбыҙ.

8.07.1980.

## Бахырйән

Бахырйән! Ул халҡы исемен,
Әсеүташтай, телдән һөрөлтә.
Хаҡлыҡ яҡлап ялҡын йотмаған
Һәм боҙ иретмәгән йөрәктә.

“Донъя милләте”нә күсергә
Йыйылышта ҡулын күтәргән.
“Ағай” теле – өлкән, күркәм! – тип,
Өгөт-нәсихәтләй күптәргә.

Тетһәләр ҙә кем тип тоҡомон,
Бәндәгә был икән барыбер.
Тараҡан да шулай талымһыҙ —
Булһын ғына иҙән ярығы!

Әйтерһең дә, әсә тапмаған...
Ороһо ул тома бушлыҡтың.
Әсә телен ташлап төкөрөп,
«Әсеһеҙ» тел теләй буш тоҡом.

Әсе лә юҡ ләкин әсәһеҙ!
Әсенәсәк әле тайғанға!
“Донъя гражданы” булыу бит
Килешә тик телһеҙ хайуанға!..

Ә беҙ — әсе! Ә беҙ — әсәнән!
Тыумыштан уҡ телле, милләтле!
Тел төбөндә милләт йөрөтә
Йәнен һулҡылдатҡан йөрәкте.

8.07.1980.

## Янғантау баҫҡысы

Күккә сорғой баҫкыс Йүрүҙәндән, —
Киртләстәре осһоҙ-кырыйһыҙ.
Ҡыҙҙар унда, -- оскан ҡоштар, гүйә, --
Көләп кенә үтә вайымһыҙ.

Арттарынан ғына ҡалам ҡарап,
Толомдары елгә елпенә.
Ә эргәлә, кейеп эшләпәһен,
Яңғыҙ ыршы уйсан күрһөнә.

Аҙашҡан шул йылға типсәнендә,
Йәш шыршылыҡ — өҫтә шыбырҙай.
Минең кеүек, ул да маңлай һырлы,
Ә Күк — зәңгәр, кереп сумырҙай!

Кисер шыршы! Баҫкыс тарта мине, —
Киртләстәрен киртеп йүгерәм.
Ҡыҙҙар көлә тауҙың битләүендә —
Буҙ болоҡка кереп өлгөргән.

Көләүҙәре өҙә үҙәгемде,
Көмөш шишмә кеүек селтерәп.
Ята шунда ярты донъя сере —
Терелтә лә йәнә үлтерә...

Осһоҙ баҫкыс буйлап осам Күккә,
Табырмынмы ләкин күгемде?
Йоморҡка урларға менгән малай
Итеп тоямынсы үҙемде...

9.07.1980.

## Йомолоу

Ҡырҡ кырына менеп баҫмаҫымдан,
Алтмыш йәште миңә бирҙеләр.
Ут үрмәләп үткән урман төҫлө
Килгәнмендер, ахыр, зил-зибәр.

Ҡорҙаштарҙың барҙым ҡыртышында
Көйгән имән кеүек ҡарайып.
Бил тоттортмай, урап үтте мине
Бүтәндәргә тейгән бал айы.

Көн көйҙәрөп ерем сөрөшкәндәй,
Үҙ-үҙемде тыйҙым, йомолоп.
Саф ҡыҙҙарҙың аяҡ аҫтарында
Мөхәббәтем ҡалды йығылып...

Был донъяның йыйын сабырлығын
Бер үҙемә төйнәп йыйғандай.
Ә ҡанымда минең — Ҡояш ҡайнай!
Ә хистәрем минең — йыһандай!

Асырҙармы сикһеҙ йыһанымды?
Татырҙармы ҡояш-ҡанымды?
Илтәм әле, илтәм, усҡа йомоп,
Илаһымдан иңгән йәнемде.

9.07.1980.

## Тик бер йән

Бикләнем мин, йомоп, үҙемде
Ҡырыҫлыҡтың ҡорос сейфына.
Асҡыстарын атып ташланым
Ете диңгеҙҙәрҙең төбөнә.

Буйы етмәҫ унда һис кемдең.
Күренмәмен һис кем күҙенә!
Әммә йөрәк, асҡыс табалмай,
Сығыр өсөн көн-төн тибенә.

Төйгөсләй ул бәғер пәрҙәһен,
Ҡанаттары бәйле зар-ҡоштай.
Оса алмай зәңгәр күгенә,
Хыялдарым йәйләй һәм ҡышлай.

Белмәйҙәр тик быны берәүҙәр...
Уларға мин — һыуыҡ таш кеүек.
Тик бер йәнде телэй йәнкәйем,
Сарсап кипкән сүлдәй, ашҡынып...

Шул тилбер йән ватыр биктәрҙе,
Асҡысһыҙ ҙа табып ғилләне.
Сейфым үтә ҡара күҙкәйе

Күңелемдең ағын иңләне.

9.07.1980.

## Янғантау ҡайындары

Барғанымда Янғантауға
Йәмле июль айында,
Тау башында ҡаршыланы
Аҡыҡ һынлы ҡайындар.

Барҙым тағы Янғантауға
Саҫҡау февраль айында,
Тау башында көтөп тора
Аҡ еләнле ҡайындар.

Халаттары ап-аҡ икән,
Хәләттәре пак икән.
“Һөйөп кенә дауалайҙар”
Тигәндәре хаҡ икән.

Аҡ юлдарын буйлағанда,
Байманланды күңелдәр.
Һауаларын һулағанда,
Оҙонайҙы ғүмерҙәр.

Бындағылай сафлыҡтарҙы
Бер ҡайҙа ла тапмаҫһың.
Бындағылай, күңеленә
Аҡ бөркәнеп ҡайтмаҫһың!

Аҡ ҡайындар! Аҡ ханымдар!
Һеҙҙе генә уйлайым.
Ҡара төндә лә төшөмдә
Аҡлыҡ күреп туймайым!

Ап-аҡ һынлы ҡыҙҙарының
Тилертте шаяндары...
Төштәремә керер инде
Янғантау ҡайындары!

9.07.1980.

## Рәмигә

Бирер инең миңә һин ҡаныңды,
Мин — бирергә әҙер йәнемде.
Шулай инек... Быуаттарҙы аша
Ҡарап һөйләштек беҙ, кәмендә.

Ҡубарылып болот баш өҫтөндә,
Көндәребеҙ көлмәй башланы...
Төшөрҙөң көс шул саҡ һин бокалға,
Ә мин уны ташҡа ташланым...

“Ташла!” — тинем. Ләкин ташламаның,
Тик нығыраҡ уға тоташтың.
Маңлай бәреп кенә таш ватмағас,
Баш ватылһын, тиеп һаташтың.

Әллә ниңә күңел олпатлығын
Һуңғы сиктәргәсә тотманың.
Арыҫланды һырған себендәрҙәй
Һырғайны шул көнлөк дуҫтарың...

Һуңғы тапҡыр ҡорған табыныңда
Ултырғандар, өҫтәп ҡаныңа.
Улар тайған.
Ыулы бокал услап
Ғазраилың килгән яныңа...

“Ҡаратауға мине ерләгеҙ”, — тип,
Васыятың ҡалған уларға.
Өфө убаһынан уҙалмағас,
Ҡалды инде беҙгә иларға...

9.07.1980.

## Мәрйәм-ана тоҡомо

Шуҡ тоҡомо Мәрйәм-ананың
Күңелемде күптән илертә.
Арыш һаламылай толомон
Муйыныма урап тилертә.

Күк төбөндәй зәңгәр күҙҙәре —

Убып алыр төпһөҙ күл кеүек.
Һығылмалы нескә билдәре —
Йығылмалы йыуаш тал кеүек.

Торһам иртән, тора юлымда,
Толомдарын елгә таралтып.
Бирһәм сәләм, миңә ҡайтара
Һандуғастар телен һайратып.

Күрмәй мәллә сикәм салдарын,
Белмәй мәллә ғаилә хәлдәрен?
Яурыныма башын терәһә,
Түгелә лә китә йәндәрем.

Мең йоҙаҡтар менән бикләнгән
Эсәр һыуым, һулар һауам ул.
Мәрйәм-ана һынын һалмаған
Әжәлем һәм әжәл дауам ул.

Уйламай һис: "Илдең күҙе сос,
Китһә күпкә, юҡтан һүҙ тейә".
Әллә инде: "Кәмәң булайым,
Ишкәгеңде ишеп йөҙ", — тиә...

Булды микән Мәрйәм-ананан
Ошондай уҡ шуҡлыҡ һәм ғәмдәр?..
Һары сәстәр сәскә уралып,
Тыуҙы микән Ғайса пәйғәмбәр?..

Гөнаһтарҙан бөттө ҡурҡыуым:
"Теге донъя", ожмах — сүп кенә.
Ожмахланып ошо донъяла,
Һары яллы кәмәм елкенә.

20.07.1980.

## Әсәйгә хат

(Сергей Есениндан теүәл тәржемә)

Һин һаумыһың әле, минең ҡарсығым?
Һаумын мин дә. Суҡ сәләм һиңә, сәләм!
Түбәбеҙгә түкһен нурлы шатлығын
Теге киске әйтеп бөткөһөҙ Ғаләм.

Яҙалар: һин, йомоп ауыр хисеңде,
Ҡайғыраһың бик ныҡ минең турала,
Йыш сығаһың, кейеп иҫке көпөңдө,
Юл буйына эңер-меңер сулала.

Һәм һиңә, ти, киске мәл ҡараһында
Һаман-һаман бер үк нәмә күренә.
Имеш кемдер мут ҡабаҡ ғауғаһында
Фин бысағын тыҡҡан йөрәк төбөмә.

Буш ғәләмәт, әсәкәйем! Тынычлан.
Был — тик фәҡәт йән йүнкеткес һаташыу.
Ул тиклем үк түгел бит мин эскес йән,
Һине күрмәй үтәргә гүр ташын.

Мин һаман шул элеккеләй нәҙберек
Һәм хыялым йөҙә тик бер тапҡырҙа:
Һағыш фетнәләрен еңеп тиҙерәк,
Тәпәш кенә өйөбөҙгә ҡайтырға.

Мин ҡайтырмын ботаҡтарын йәйгәндә
Тап яҙғыса, беҙҙең ап-аҡ баҡсабыҙ.
Тик һин мине таң һарғайып килгәндә
Уятма, нәҡ һигеҙ йыл элек, тағы.

Хыялланып бөтөлгәнде уятма,
Ғәмәлдәргә ашмағанды ҡуҙғалтма, —
Үтә йәшләй юғалтыу һәм гөнаһтар
Бәғеремде минең күптән һыҙлата.

Табынырға һәм өйрәтмә. Кәрәкмәй!
Иҫкеләргә инде кире ҡайтыу юҡ.
Тик һин — шифа һәм ҡыуаныс йөрәккә,
Тик һин — миңә әйтеп бөтмәҫ яҡты ут.

Онота күр, бер үк, ауыр хисеңде,
Ҡайғырмасы бик ныҡ минең турала.
Йыш сыҡмасы, кейеп иҫке көпөңдө,
Юл буйына эңер-меңер сулала.

19.05.1980.

# 1981

********************

## Быума битлек

**1**

Мистер Рейган
Тағы тауыш йыйған
Һайлаусыларынан АҠШ-тың.
Икенсе ҡат ул президент булғас,
Эшһеҙҙәр, ти, эшләр йәй, ҡышын.

Төн сыҡҡансы,
Имеш, доллар сәме
Фермер яраларын майлаған.
Һәр мистерҙы иткән Рокфеллер,
Һәр негрҙы Дюпон яһаған.

Акцияһы, имеш, активлашҡан
Кризистан ярыҡ АҠШ-тың.
Азатлыҡтың статуяһы ла
Рейганға, ти, атҡан алҡышын:

“Шат алҡынһын бөйөк Америка!
Йәлләмәһен доллар сәскәгә!”
Бөтә ролдәрҙе лә уйнап бөткән
Актер менде йәнә сәхнәгә...

Джондар һәм наҙлы Дженниҙар,
Йылмайығыҙ, киреп ауыҙҙы!
АҠШ факелының сағыулығын
Рейган йылмайыуы ҡабыҙҙы!

Сәскә! Сәскә! Килтерегеҙ сәскә!
Актер йәне һөйә гөлсәсәк!
АҠШ президенты тештәренең
Балҡышында — доллар ут сәсә!

**2**

...Факел сөйгән ханым-статуя

Факел төтөнөнән сәсәне...
Төтөн араһынан ҡалҡа Рейган —
Ҡырҡынсы президент нәсәбе.

Рейган менән бергә кирә иңен
Ул яралтҡан “Шаттл” карабы.
Йыһан бәғерҙәрен телер өсөн,
Бомбаларын ергә елләр өсөн
Күтәрелә әжәл ҡарғаһы.

**3**

“Шаттл” карабының шатырҙауы
Мылтыҡ шартлауҙарын шаңғырта.
Үткән президентлыҡ дәүерендә
(Пуля йөрөй Рейган бәғерендә!..)
Атылыуын хәтәр яңырта.

О хәтәр көн!
Президенттың һыны
Таба яҙҙы ятыр табутын.
Ә бит наҙға тулы ине донъя,
Йәйгән ине һиллек ҡанатын...

Сеү!
Ни булды?!
Шартлау йәнде алды...
Сорғолдо ҡан, пүлә ингәндә.
Актер ҙа юҡ,
Һәм юҡ президент та —
*Кеше* ята, һыҡтап, иҙәндә...

Тап *кешесә* сеңләй президентың:
Тап Сонгмиҙың йәне — киçелгән...
Йә булмаһа тәне Герниканың —
Пулеметтан “тегеп” кителгән...

*Кеше* һыҙлай әжәл ҡосағында,
Аға ал ҡан
Һалҡын таштарға.
Америка!
Һинең кешелегең
Пүлә тишкәс кенә башлана?!.

**4**

Трибунала мистер президент...
“Шаттл” ыҫы илде томалай...
Оноткан ул пүлә алған сағын —
Яралары инде һыҙламай.

Күҙ йәштәре уның кипкән күптән,
Йөрәкһеүе күптән туктаған.
Кешелектән уҙған актер үҙен
“Шаттл”латкан – намыҫ йоҡлаған.

Эсе тулы нейтрон бомба ғына —
Көл ҡылырлыҡ көллө Ер шарын.
“Ҡыҙылдар”ҙы ҡуҙҙа тотор өсөн,
Һүтер ине Күктең ҡоршауын!

Эсе тулы нейтрон бомбаһы...
Тик,
Кейеп битлек,
Актер йылмая.
Тештәренең зәһәр балҡышында
Быума битлек рухы маһая.

**5**

Быума битлек!
Уны Кортестарҙың
Ҡанлы ҡулы, ҡармап, таҡкан бит!
Юҡкамы ни
Ку-клукс-кландың
Балахонын кейеп ҡайтҡан бит!

Берсә, “һаҡлай” кеше азатлығын,
Берсә, “яҡлай” Ерҙе террорҙан.
Ул осорған йыуаш “аҡ күгәрсен”
Нейтрон-йәҙрә менән ҡоролған.

Күрмәгәндер бындай быумалыҡты
Быуыуҙарға маһир был быуат.
Кеше булып уйнап, кешеләрҙең
Күҙен, телен, ҡулын ул быуа:

“Хунталарын Чили, Сальвадорҙың
Ҡыҙыл террорҙан, — ти, — арсайыҡ!
Хоҡуҡтарын яҡлап афғандарҙың,

Афғанстанға ут асайыҡ!..”

“Террорсы” тип атай совет илен, --
Аш атҡанға битлек таш ата.
Быума битлек быуып уҙған ерҙә
Ҡан ята ла киҫек баш ята...

**6**

Президенттың ҡулы кнопкала —
“Шаттл”ланып Шарҙы ул буйлай.
Донъя халыҡтарын быуып һалыр
Уйын тураһында уй уйлай.

Ни ҡылырбыҙ
“Йондоҙ һуғышы”ның
Кнопкаһын баҫһа Аҡ йортта?
Президентын атҡан быума битлек
Ерҙең үҙен әгәр аттыртһа?!

Мистер Рейган,
Туҡта уйыныңдан!
Американ, ана, уфтана!
Илең илткән роза бәбәктәре
Энәләнеп һиңә уҡтала!

Эшселәрең, фермер, негрҙарың
Күп алданмаҫ хәтәр “шуҡлыҡ”ҡа:
Бөгөн һомғол ҡулдар һонған гөлдәр
Әйләнеүе мөмкин штыкка!

Мистер Рейган
Әммә уйнай һаман...
Аҡ тештәре зәһәр йылмая...
Юҡ! – теш түгел! – Атом бомбалары
Ауыҙында уның ҡуҙлана...

6.04.1981.

## Ҡарышыу

Ҡыҙҙар тороп урын бирә башланы
Трамвайҙа, торандайҙап барғанда.
Әллә инде улар ҡапыл йәшәрҙе,

Әллә ҡалдым үҙем ҡалдау ҡарғалай?..

Ни булһа ла, булды инде әкәмәт:
Төндәрем киң, ә көндәрем тарайҙы.
Татлы тукталыштарыма тукталмай
Елеп-юртты, ахыр, тормош трамвайы...

Төшөп ҡала тешһеҙ ҡарттар, ҡарсыҡтар —
Урындарын йәштәр миңә ҡалдыра.
Тоймайынса туктальштар тәңгәлен,
Ике аралыҡта йәнем ҡаңғыра...

Елеп-юрта бирһен тормош трамвайым,
Татлы талпыныштар әле алда бар!
Ултырмайым ҡыҙҙар биргән урынға —
Йәнкәйемә танһыҡ әле тамбурҙар.

6.04.1981.

## Телһеҙҙәр

Зәңгеләрҙең[11] зәғиф йәнкәйҙәре
Бала-сағаларын ҡурсыта:
Йә немецса, йәки инглизса,
Йә урыҫса ғына уҡыта.

Урыҫсаһы йөрөй урып уңыш:
Урыҫ теле — ырыҫ йәнәһе.
Үҙ телкәйен тешләп аҙа, аҙа
Бәғзе башҡорт ғали йәнәбе.

Һәм күптәре былдай сағаларҙың
Һаҡау кәкүк булып ҡалалар:
Ҡ,һ,ҙ,ҫ,ө,ү өндәренә
Алмаш протез-өндәр алалар.

Телкәйҙәре ағас игәү мени —
Ярып ҡолаҡ, йәнде яралай...
Йәндәре лә бер саҡ алмашынып,
Ҡалыр микән ала ҡарғалай?..

Төкөргәстен имсәк имгән телен,

[11] Зәңге – цинга сире (витамин етешмәүҙән).

Ата-әсәһен дә төкөрөр.
Ватанының ерен-күген ҡурсап
Утҡа керерме был бөкөрө?!.

6.04.1981.

## Ҡоралай

Төштәремдә күрҙем тағы һине,
Күктән осоп төшкән ҡоралай.
Маңлайыңдан миңә баға ине
Ергә ғашиҡ сәмле-нурлы Ай.

Елберләгән ебәк толомоңдо
Ал шәфәҡкә мансып уйнаның.
Селтерәүек сулпы сихырҙарың
Урал армыттарын буйланы.

Ярым өнлө инем, ярым тиле...
Ҡосҡом килде һомғол һыныңды.
Тал сыбығы һымаҡ нескә билең
Утлы һулышымдан һығылды.

Сыңраның да көлдөң ер улынан...
Йондоҙҙарға һинең буй етте.
Саз ҡылындай ҡылып йәнкәйемде
Сыңғылдата өҙөп туй иттең...

Хоҙай үҙе ҡушкан ине һиңә
Күк ялҡынын ерҙә яғырға.
Сорнаның да нурға йөрәгемде,
Сырмалдырҙың алйыу йәйғорға.

Ниңә, ниңә керҙең төштәремә,
Күкте гиҙгән ерсән ҡоралай!
Табандарым ерҙән айырыла...
Ҡараштарым ерҙе ҡармалай...

Рәхмәт, тимен. Тамам тилемен мин...
Әүереләм таңғы саф нурға.
Яҙған миңә — һинле Күк көмбәҙен
Иңдәремә һалып осорға.

13.10.1981.

## Меңҡыяҡ

Яралғанмын ошо сал Уралда,
Мең дауыллы сағыл өҫтөндә.
Имәндәрҙең билен һыҡҡан елдәр
Еңел түгел минең өсөн дә.

Ағас ауа. Хатта таш ҡыйрала...
Мин аумайым. Торам. Мин — кеше.
Миллиард йылдарҙың, дәүерҙәрҙең
Мәңгелеккә биргән емеше.

Миндә — ерҙең бөтә дауылдары,
Дауылдарҙы баҫыр ҡөҙрәте.
Йәҙрә матдәһенең ҡатылығы,
Болоттарҙың йомшаҡ йөрьәте.

Иңләгәнмен бергә бар донъяны —
Үткәндәрен, бөгөн, киләһен.
Йондоҙ яралтырҙай устарымда
Ҡояш уйнатырға беләмен.

Һулышымды бөркһәм, һил таштарға
Йән керә һәм күкрәй тирә-яҡ.
Сөнки мин бит ерҙең дәү ҡеүәһе —
Ҡусҡылланып ҡалҡҡан меңҡыяҡ!

Аумай. Аумаҫ. Мәңге торор кешем!
Меңҡыяҡты йығыу бик ауыр.
Ер ҡөҙрәтен тартып Уралымдың,
Һәр ҡыяғым һуҙған мең тамыр.

13.10.1981.

## Ҡара йондоҙ

**1**

Гәзитәләр шаулай:
“Америка донъя яулай!
Полигонда “ШАТТЛ” ҡорола,
Ҡара йондоҙ күккә осорола! —

Күктән атыр “Шаттл” карабы!
Шартлар Ерҙең ҡыҙыл тарафы!

Имен ҡалыр фәҡәт Америка,
Азатланып ҡыҙыл ҡитғанан!”
Президенттың ҡулы — кнопкала!
Йөрәгендә ҡара ут яна!

Азатлыҡтың Гудзон ярындағы
Сыраҡ тотмош баҡыр һылыуы,
Ә шулай ҙа, илап кире ҡаға
“Шаттл”дарҙың шашып олоуын...

**2**

Ҡара һөрөмләнгән Аҡ йортонда —
Ҡара йөрәкле аҡ президент.
Шатланыуы уның — “Шаттл”ланыу...
Яҡтылыҡтан күҙе биҙгән бит!

Факел тотоп баҫҡан баҡыр һындың
Яҡтыһынан ярһып,
Аҫтыртын,
Ҡара төндә ҡара битлек кейеп,
Ҡара һыны сыға Аҡ йорттоң.

Ҡара ҡулы Азатлыҡ һылыуын
Постаменттан тартып төшөрә.
Ҡара урамдарҙан алып ҡайтып,
Ҡара “Аҡ йорт”она уҙҙырта,
Ҡара ултырғысҡа ултырта —
Шул электр ултырғысында
Сырағының утын һүндертә...
Гудзонына кире килтертә...

Факел утһыҙ! Баҡыр һылыу ҡотһоҙ! –
Сырағынан ҡара һөрөм бөркөлә.
Илле һигеҙ камералы төрмәләй
Илле һигеҙ штат сәсәй, Ер көлә...

**3**

Аҡ йорт түбәһенән һөрөм һөрөлтә
Ҡара президенттың ҡара шатлығы:

Ҡара йондоҙонан аттыртасаҡ ул
Ер шарының “ҡыҙыл яҡ” ҡап-яртыһын...

Аҡ йортонан бойора аҡ президент —
Костюмы аҡ, тәне аҡ, йәне — ҡара.
Ҡара йондоҙонан ерҙе ярҙыртып
Шөһрәтләнергә ҡара ниәт ҡора...

Ярылһа ла, ҡалыр Америкаһы,
Азатланып, имеш, ҡыҙыл ҡотҡонан.
Азатлыҡтың сәсәй статуяһы
Үлемесле “Шаттл”дарҙың ысынан...

20.04.1981.

# 1982

*******************

## Уралым

(Ҡобайыр)

Ер генәмдең урайы —
Уралмалы Уралым.
Уралымда үр булып,
Баҙыҡ баҫып торамын.
Өсөнсө мең йылдарға
Йырып кереп барамын,
Ҡырыҫ Урал ҡырласы --
Һыным! Дауыл ярамын!

Йондоҙҙарға йоғолоп,
Йыһандан ут сағамын —
Ил-толпарҙың тояғын
Тайҙыртмаҫлыҡ дағамын.
Ҡан ҡоҫҡанда Уралым,
Ҡанһыраған ярамын;
Урал батыр уртынан
Оранлаусы баламын!

Алтын ҡуллы атам бар,
Сәсән телле әсәм бар,
Йәнем-тәнем — Халҡым бар, ау,
Урал иле — Халҡым бар!

Эй, Халыҡ бар, Халыҡ бар —
Халыҡ атлы алып бар!
Иген иккән, мал көткән,
Ҡорос ҡойған, тун теккән,
Китап яҙған, таш киҫкән,
Алтын ҡаҙған, аш илткән,
Ер майҙарын һурҙыртҡан,
Күккә ҡарап осортҡан,
Йондоҙҙарға юл ярған,
Ергә ырыҫ-түл ярған,
Ерен, түлен, йырын ҡурғап

Яу ҡайтарған, ҡомарған —
Урал затын затлап тыуған,
Урал кеүек сал, саф булған,
Сал, сафлығын һанламаусы
Һөмһөҙҙәрҙең, дуңғыҙҙарҙың
Һөйәктәрен онтаҡлаған
Халыҡ бар, ау, Халыҡ бар,
Халыҡ тигән алып бар!

Алып бар, ау, алып бар!
Торған ере — Уралдыр,
Һөргән өнө — орандыр,
Тартҡан моңо — ҡурайҙыр.
“Урал!” тип өн урғылтһа,
Тылсым йәнде арбайҙыр,
Былбылланып һайрайҙыр,
Аҡлыҡ ҡына юрайҙыр —
Урал йәне — ҡурайҙыр!
Ҡурайҙыр, ау, ҡурайҙыр!
Ҡурайы Ер урайҙыр!
Ҡурайлы ҡор — Уралдыр!

Йылтырап Көн ҡалҡалыр,
Тонйорап Көн баталыр.
Бил тиңентен сәскәһе
Йәнгә йәннәт-сафалыр.
Бауырҙан ҡар ҡырҙары
Яҙҙы тартып яталыр.
Көлгән саҡта ҡыҙҙары
Иҙел боҙон ваталыр, ау,
Иҙел боҙон ваталыр!

Сут-сут иткән һандуғасы,
Саңҡ-саңҡ иткән бөркөтө,
Дала япҡан мал-тыуары —
Аҙым һайын бер көтөү;
Һеләүһене, бүреләре,
Боландары, айыуы;
Мәңге йәшел урмандары,
Ужымдары, саф һыуы;
Алтын-көмөш — ер ҡуйыны,
Урғыл-урғыл ер майы,
Аллы-гөллө сахралары —
Көнләшерлек хоҙайы!

Уралымдың ынйы кеүек
Хатта осҡан туҙаны —
Уралымдың туҙаны!

Мең йылҡыға, мең төлкөгә,
Мең өкөгә ем биргән,
Мең йылғаға, мең убаға,
Мең туғайға өн биргән,
Дүрт юлдың дүрт тел эйәһен
Бер туғандай үҫтергән,
Мәкер йәнде ҡан илатҡан,
Миһырбанға көс биргән;
Үткенсенән ҡунаҡ көткән,
Баҫҡынсыны бөлдөргән,
Хаҡлыҡ тыуын шатлыҡ иткән —
Йәндәй күреп елдергән,
“Уралым!” тип йән атырлыҡ
Яугир Халыҡ еткергән,
Батыр-алып еткергән —
Урал да ғына Уралтау,
Уралтау шул, Уралтау!
Иргә терәк-ҡорал тау!
Халыҡ төбө Уралтау!

Кем ул Халыҡ, тиһәгеҙ,
Батыр-алып, тиһәгеҙ, —
Әсәлер был, ҡыҙҙыр был,
Аталыр был, улдыр был;
Таш быуаттан — таш ярып,
Дәүерҙәрҙе ҡайшарып,
Уралына уралып —
Ҡанын ҡойоп, йыр алып,
Еҙ быуаттан — тимергә,
Тимерленән — был көнгә
Атом атын егергә
Килеп еткән заттыр был;
Ҡартайыуҙы белмәүсән
Мәңге йәп-йәш ҡарттыр был, ау,
Мәңге йәп-йәш заттыр был!

Оҡшатамын ул затты,
Ҡартаймаусан был ҡартты,
Ер йөрәген тамырлап
Ҡармаған дәү Тирәккә,

Ябалдашы Ғаләмде
Сырмаған дәү Тирәккә.
Ҡояш менән Айҙарҙы,
Йондоҙҙарҙы, таңдарҙы,
Көндөҙҙәрҙе, төндәрҙе,
Үткәндәрҙе, Хәҙерҙе,
Килер заман-ҡәҙерҙе —
Көллөһөн тиң ҡомарлап,
Ҡош Юлына йомарлап
Тотоп торған Тирәккә,
Тирәккә, дәү Тирәккә!

Тамыр төбө — энә-төк,
Олон осо — гөл-емеш.
Энә сәнсеп, гөл асып,
Был дәү олон түл йыймыш,
Киләсәккә көн уймыш:
Тирәк һынлы терәгем —
Халыҡ үҙе ул имеш!
Ҡуш табанын Уралға
Терәп тороп ил ҡормош —
Халыҡ-алып-тарамыш!
Киләсәккә ҡарамыш!

Кәмһетһә кем Халыҡты,
Урал улы алыпты —
Баҡһын ошо Тирәккә.
Серәкәйҙәй сәр йәнен
Ҙурлау өсөн тел йәбен
Тейҙермәһен терәккә,
Халыҡ тигән Тирәккә!
Ҡаҙалмаһын йөрәккә, ау,
Ҡан һаумаһын йөрәккә!

Йәшен йәшнәп ел өрөр,
Дауыл ҡая емерер,
Тау-таштарҙы күтәрер,
Даръяларҙы түңкәрер;
Алсаҡ Айҙың аҡ йөҙө
Туҙан баҫып төҫкәрер,
Ал Ҡояштың ал йөҙө
Һөрөм баҫып бүҫкәрер —
Донъя илар, йәшкәҙәр, —
Шул саҡта ла дәү Тирәк

Торор киреп күкрәк,
Япраҡтарын йырлатып,
Былбылдарын һайратып,
Бар донъяны тыңлатып
Сыңрап торор ул Тирәк,
Нәҙер әйтер ул Тирәк,
Уралыма тиң Тирәк:

“Уралыма ереккән
Емерелмәҫ терәкмен.
Еремә лә кәрәкмен,
Күгемә лә кәрәкмен —
Йөрөр йәнгә йөрәкмен,
Торор тәнгә терәкмен.
Терәкмен шул — Тирәкмен!
Уралыма терәкмен!

Үрмәкселәр үрмәләр
Дәү олоном буйынан,
Ҡырмыҫҡалар ҡымырлар
Дәү олоном буйынан,
Себен-серәкәй сырмалар
Дәү олоном буйынан,
Кәлтә, йылан йылмалар
Дәү олоном буйынан,
Тейен-тилбе тилберләр
Дәү олоном буйынан,
Айыу-айман аймырлар
Дәү олоном буйынан —
Үҙе буйы үҫ күреп
Һәм үҙенә төҫ күреп,
Табыр аҙыҡ бөтәһе.
Ауһа, башы осона
Алыр ҡаҙыҡ бөтәһе!
Алыр ҡаҙыҡ бөтәһе!”

Күҙ иңләмәҫ Тирәктең
Тоташ тамыр, олонон,
Һәр йән үҙе һынына
Тиңләр уның булымын,
Тиер: “Мин — тиң буйлымын!
Тирәккә тиң буламын!
Тирәктән дә оломон!”

Бәғзе әйтер: “Мин — мыҡты,
Минән ул саҡ ҙурыраҡ”.
Икенсеһе: “Ул бары
Миндәй ике-өс буйлыраҡ”.

Хатта аҡтыҡ серәкәй,
Ҡунып бөрө осона,
Сыйнар: “Ул да бәләкәй! --
Ниңә олон осона?!”

Бал ҡорт булып осһам да
Алып-Тирәк осонда,
Ризамындыр мин — бәндә.
Сағыр өсөн түгел, ә
Алып-Тирәк сәскәһен
Түлләр өсөн киләм дә!..

Фәҡәт Бөркөт ҡарашы
Иңләр бөтөн дәүлекте --
Тере Тирәк-Халыҡты!
Ҡыйыу йөрәк Алыпты --
Дәүҙәрҙән дәү Халыҡты!

Иң оҫко башбөрөнән —
Тамырбөрө-аҫҡаса
Үтер бөркөт ҡарашы.
Тарбаҡ-торбаҡ олондан,
Тармаҡ-тормаҡ тамырҙан
Халыҡ-алып тарихын
Һүтер бөркөт ҡарашы.
Алып-Тирәк һынын ул
Үҙ буйына тиңләмәҫ, —
Үткер Бөркөт ҡарашы!
Отҡор Урал балаһы!

Көнөн төндән яптыртмай,
Ерен ҡыуҙан ҡатыртмай,
Билен яуҙа һындыртмай,
Телен дауҙа ҡырҡтыртмай,
Йырын юҡка ҡалдыртмай,
Йәрен ятҡа ҡостортмай,
Түлен елгә осортмай
Халыҡ-Алып ил иткән,
Уралында көн иткән,

Дошмандарын көл иткән,
Дуҫ-иштәрен йән иткән,
Тәүтөйәген йәм иткән, —
Тиер Бөркөт ҡарашы!
Ғорур Бөркөт ҡарашы!
Тирәгенең шауына
Шау бирер ул, ярашып!

Дәү Тирәгем төбәге —
Ҡыйғыр Урал ҡаяһы,
Унда бөркөт ояһы.
Шул ояның улына,
Улына йә ҡыҙына
Үҙен Бөркөт тояһы, ау,
Үҙен Тирәк тояһы! –
Алып-Халыҡ булаһы!

1982.

## Бирсәткә

Йәндәремде һаман йәмләтәһең,
Әсәй бәйләп киткән бирсәткә.
Әсә йылыҡайы йәнгә шифа,
Башты баҫҡан боҙло ғәрәсәттә!

Хәтеремдә: нурлы энәләргә
Элде, имләп, тылсым-күҙҙәрен.
Үҙе китте... мине нурлы итте.
Нурҙан зыңлай нескә үҙәгем...

Күҙ нурҙары һеңгән нур-бәйләмдән
Күрше-күлән күпме ҡот алды.
Ике усым ике аҡ нур һибеп,
Ап-аҡ Ҡош Юлдарын тотамын...

Керһеҙ генә көйө, нурһыҙ ҡулдан
Һәләк булған саҡта йыр-сәскәм,
Керһеҙ күңелемә көр нурҡайын
Ҡоя әсәм биргән бирсәткәм.

Яланғасҡул тотам утты, боҙҙо,
Сәскәләрҙе һөйәм шуға ла.

Нурҙан ҡойған йөрәк йылыҡайы
Ҡурсау бирә ялан ҡулға ла.

3.11.1982.

## Ҡысҡырыу

Әсәкәйем, инде улың ғына
Эҙҙәреңде эҙләй имгәкләп.
“Әсәй!” — тиеп әрнеп ҡысҡырамын,
Сапҡан саҡта дошман йөрәккә.

Һиңә илткән һалҡын, тар һуҡмаҡты
Яйлап ҡына үлән, саң баҫа.
Үләнкәйҙәр нисек йыуһын саңын,
Күҙ йәштәрем минең таммаһа!..

Заманалар булып ағылалар
Ғаләмдәрҙә йәй һәм ҡыштарым.
Аҡ кәфендәй урай Ҡош Юлдары
Һине алған моңһоу Ер шарын.

Юҡ, Ҡош Юлы түгел! Сал толомоң
Сағылдарҙан сығып сағыла.
“Әсәй!” — тиеп әрнеп Ер ҡысҡыра
Донъя уны сапҡан сағында…

23.11.1982.

## Донбасс тупрағында

Ошонда һәләк булған Башҡорт
кавалерия дивизияһы яугирҙәре
иҫтәлегенә.

Аҙым һайын ҡәбер — шау-сәскәлә...
Шәһиттәрен һанлай был ерем.
Ҡыҙыл ҡәнәферҙәр сыҡҡан тишеп
Ҡыҙыл яугирҙәрҙең бәғерен.

Ишетәмен иңрәү — йән ауазын:
“Имен генә микән туғандар?
Беҙҙе атландырҡан аҫауҙарҙың

Уйнаҡлаймы түле яланда?

Беҙ ҡайраған алмас ил ҡылысы
Тупарланып тышта ятмаймы?
Беҙ "әсәй!" тип йәндәр биргән өндө
Тәнәйҙәрҙең теле һаҡлаймы?

Ҡыҫҡармаймы оҙон бураҙналар,
Бүҫкәрмәйме бүртек буралар?
Бөркөт булып ҡысҡырмаймы ҡоҙғон,
Салауатты тапҡан Уралда?!."

Һорау ала ҡыҙыл ҡәнәферҙәр,
Ҡәберҙәрҙән бағып күҙемә.
"Әҙерме мин?" — тиеп һорау бирҙем,
Ил выжданын йыйып, үҙемә.

Әҙерме мин бөгөн баш һалырға,
Башым менән ярып золомдо?
Ҡыҙыл ҡәнәферҙәр һорау ала —
Намыҫ детекторы бойомло!..

Тын йоҡлағыҙ, Ватан батырҙары!
Тулай беҙҙә һеҙҙең йән-бәғер.
Әсә һөтө менән имелгәнде
Имгәталмаҫ иблес һәм ҡәбер!

24.11.1982.

# 1984

**************************

## Күлдәк

Күлдәк алып кейҙем —
Яңы күлдәк,
Ә иҫкеһе —
Иңдән хуш инде!
“Үҙ иңеңдә туҙһын иҫкең”, — тигән
Ҡарттар һүҙен йығыу — ошо инде.

Ҡолас ташлап,
Атай нигеҙен дә
Бетон менән таштан ҡойҙорттом.
Ғөрөфтәрҙе боҙоп,
Күҙем ҡыҙып,
Дүрт тарафҡа тәҙрә уйҙырттым.

Ҡоймаларҙы ватып,
Хөрлөк татып,
Астым юлдар — һәр дүрт яҡҡа ла.
Дүрт ҡибланың бөтә шуҡ елдәре
Ҡағып торһон, тинем, ҡапҡаға.

Әйтһә әйтер
Мүкле берәй бәғер:
“Тотанаҡлы түгел егет!” — тип.
Иҫке нигеҙ,
Иҫке күлдәктәргә
Иңем һыйышмаҫлыҡ көн етте!

Үҙем дә мин
Илем-тиңем менән
Һаман үҫәм,
Һаман яңырам.
Мумиялай ҡатһам күлдәгемдә,
Булыр инем илгә ят шырау!

Беҙ яңырһаҡ,

Беҙ йән өрһәк кенә,
Торор имен
Еребеҙ,
Күгебеҙ.
Күлдәк алмаштырған араларҙа
Алмашынмайыҡ тик үҙебеҙ.

1984.

## Ҡырҡ йыл

Ҡырҡ йәй, ҡырҡ ҡыш ҡырлап ҡырҡ йыл ята
Һуғыш менән беҙҙең арала.
Әммә ерҙе һаман һағыш һыға,
Әммә һаман һыҙлай яралар.

Күкрәк төптәрендә яугирҙәрҙең —
Фашист ярсыҡтары ҡуҙғала.
Йөрәк түрендә тол ҡатындарҙың —
“Ҡайтыр” тигән өмөт ҡуҙлана.

Көтөп улын, сап-сал булды инде
Яу йылында йәп-йәш әсәләр.
Ҡайнар ҡосаҡтарҙы күрә алмай
Ҡартайҙылар наҙлы бисәләр.

Һәләк булған һалдат улы булып,
Ҡыҙы булып етте бер быуын.
Фотонан тик белә ейәндәре
Олатайҙарының булыуын.

Ауылдарҙың, оло ҡалаларҙың
Урамдарын хәтер һағалай:
Дүрт йыл буйы киткән эшелондар
Көнбайыштан ҡайтмай ыҙалай.

Теге саҡта ҡырҡын уҡытырға
Ҡурҡып ҡалһа кәләш-алтындар,
Ҡырҡ йыллығын инде ирҙәренең
Уҡыталар сап-сал ҡатындар.

Мәңгелек ут яна майҙандарҙа,
Тоташтырып йөрәк уттарын.
Ҡырҡ йыл буйы йыйһаң ялҡындарын,

Көйрәр ине бөтөн Ер шарың!

Фронтта ла, фронт тылында ла
Йәндәр биреп Еңеү ҡойҙоҡ беҙ.
Һәм үҙебеҙ ҡойған ҡылыс менән
Фашизмдың йәнен ҡыйҙыҡ беҙ.

Еңеү көйрәй ҡайнар ҡаныбыҙҙа,
Замананың булып терәге.
Бомба шартламаһын өсөн шартлай
Сал яугирҙең бөгөн йөрәге.

9.12.1984.

## Томбойоҡтар

Томбойоҡтар тымыҡ күлдәрҙә
Тын уттарын ҡабат ҡабыҙыр.
Таң тынлығын өҙөп, уралыр
Ҡайындарға ҡабат яңғыҙ йыр.

Күлде күҙләп, таныш эҙҙәрҙе
Үтер эҙләп шул уҡ моң-күҙҙәр.
Ҡарт өйәңке менән ҡушарлап,
Шул кемделер һағынып көтөрҙәр.

Тик килмәҫ ул, ҡабат килмәҫ ул
Томбойоҡло тымыҡ күлдәргә.
"Үтте инде, үтте... — тип көйләр
Иртә-кисле иҫкән елдәр ҙә. —
Кире ҡайтмай торған илдәргә
Китте инде, китте..."

1984.

# 1986

************************

## Киҫәтеү

Һин өнәгән “аллы-гөллө” юлға
Юлығалмам, ахыры, һылыуым.
Ҡылыс ҡырҡаһында барам буйлап,
Ҡаштарыма ҡунды ҡылауым.

Роза гөлө түгел инде йөрәк, —
Һуғышсының дары моҙғайы!
Теләһәм дә, көйләй алмам, тимәк,
Татлы-баллы йырын турғайҙың.

Теләмәһәң, мине өнәмәһәң,
Ялҡыныма яҡын һарылма.
Вулкандарҙың утлы гөрөлтөһө —
Йөрәк үртем үрләр дарыла.

Баллыларҙы барла баллыларҙан —
Иренеңә балы яғылһын.
Быуаттарҙың дары моҙғайына
Мин йөрәгем менән ҡағылдым.

1986.

## Демагог

*М.К.*

Әҙәплемен, тиеп, аҙапланың,
Тутыйғоштай тылҡып сүбекте.
Демагогияңдан иҫермештәр
Күтәрмәкләп һине йөрөттө...

Тупарланды инде тутыйлығың —
Сүбек түгел -- илең эш көтә.
Ҡунаҡсаңдан ҡағып төшөрөрҙәй
“Әҙәпһеҙ”ҙәр һине өшкөтә.

Юҡ, һеңмәне һиңә әҙәплелек —
Унының һайын, һөмһөҙ аҡландың.
Тауыҡ килеш кенә әтәсләнеп,
“Әҙәпһеҙ!” — тип илгә ташландың.

“Әҙәплелек етмәй һеҙгә!” — тинең,
Мөнбәрҙәргә баҫып, күп тапҡыр.
Һинең тайыш аяҡ төйгән саҡдан
Трибунаның төбө тап-таҡыр.

“Әҙәплелек етмәй илгә!” — Шунан
Ил ҡолағы аҙмы шаңҡыны.
Сәпәр ине сүмес ауыҙыңа,
Ил урынында булһа ҡатының.

“Әҙәплелек етмәй илгә!” — тинең,
Ултырғыстар хатта сайҡалды.
Мәрхүм әсәйеңдең, атайыңдың
Ҡәберендә таштар тайпылды.

“Әҙәплелек етмәй илгә!” — Ейгән
Тағарағың тибеп ауҙарҙың.
“Әҙәпле!” — тип алған миҙалыңды
Тағып йөрөп ғауға сығарҙың.

“Әҙәплелек етмәй илгә!” — Өнөң
Ҡара дегет кеүек һарҡылды.
Үҙең имгән имсәк башына ул
Ирен эҙең булып яғылды.

Йығып әҙәп, һине юғарыға
Әҙәпһеҙлек, буғай, сығара.
Әҙәпләнер көнөң алда әле —
Әҙәп бирер ярыҡ тағараҡ!

1986.

## Туғанлыҡ

*Башҡорт эпосында, урыҫ тоҡомо —*
*башҡорттоң һигеҙенсе ырыуы, тип әйтелә.*

Урыҫты мин бөйөк тием икән —

Бөгөү түгел был үҙ халҡымды.
Диңгеҙ тиклем ыу ҙа тутыҡтырмаҫ
Шырпы башы ҙурлыҡ алтынды!

Халҡым менән ғорурланһам әгәр,
Ник кәмһетһен бөйөк милләтте?
Урыҫ, башҡорт, башҡаларҙан элек,
Йөрәк менән тапҡан йөрәкте.

Тылмассы ла хәжәт түгел беҙгә,
Тылсым телен танып һаҡларға.
Татар-монгол тартҡан бер үк ҡылыс
Сыйҙы инде, Батый сапҡанда.

Батыйғаса аҙмы дәүер аша
Кендектәргә кендек тоташа.
Скиф бабаларҙың ҡаны таша --
Башҡорт, Урыҫ көнгә олғаша!

Ағиҙел һәм Волга баштарында
Бабаларҙың аунай баштары.
“Болаҡ” тиһәм — “Волга” була хасил,
“Болаҡ-этил” тиһәм — таш ярып

Аҡ-этилем, аҡһыу-Ағиҙелем,
Быуаттарҙың ярын тигеҙләй.
Телдәребеҙ ярын ашып китеп,
Йәндәребеҙ йәнгә юл эҙләй.

Таш быуаттың суйыр төпкөлөнән
Өҙөлмәйсә килә берҡанлыҡ:
Һигеҙ ырыуҙың бит бере — Урыҫ,
Ә етеһе — Башҡорт туғаны!

Сал сәсәндәр теле көйләй быны,
Йығып сиркәү, мәсет киҙеүен.
Бабаларҙың һаҡлап аманатын,
Быуаттарҙан бағып килеүем.

Иҫәүәне бөгөн урыҫымдың
Танымай ҙа, беләм, башҡортто.
Көндө Айҙың танымауын ләкин
Таныта Көн үҙе, яҡтыртып!

Тиккәме ни, Урал һырттарынан
Мәскәү йондоҙҙары күренә.
Туғанлыҡтың тәрән тамырҙары
Йөрәктәргә тығыҙ үрелә!

1986.

## 1987

***********************

### Бөйөк Филал тураһында баллада

*Филология фәндәре филе Ғ.Р. әфәндегә.*

**1**

Тыуғанда уҡ, тиҙәр, уландың
Аяғында булған ҡатаһы.
Филал тиеп улын атаған
“Һәр фәнгә лә маһир” атаһы.

Ҡаталылар ҡатмай ҡатҡаҡта.
Тайғаҡта ла тайып йығылмай.
Алла үҙе биргән ғилләне
Аңламаған филдәр — фил булмай!

Умарталығында колхоздың
Балдар йыйып атай “балл” ҡорған.
Баллап-майлап мәктәп маһирын,
Улына гел “бишле” ҡуйҙырған.

**2**

Филал, тимәк, ул — “фил ал” тимәк,
Аулап йөрөп, филле тармаҡта.
Өлгөр улан һәр бер бармағын
Кәк(е)рәйтә белгән ҡармаҡтай.

Дүрт класты үткәс йүгереп,
Дүрт тарафтан дәрес күсереп —
Шылдыралар кескәй йылғырҙы,
Шау-“бишле”нән ҡата кейҙереп.

Унынсыға тиклем фән йыя
Кәрәҙ-кәрәҙ колхоз балынан:
Атаюлла, балҡорт мөдире,
Фил алдырта Филал-улынан.

Математик — класс етәксе —

Ҡаталының ҡата балында.
Мәктәп директоры балл ҡоя
Филдәй алтын миҙал юлында...

Алыш-биреш фәнен фәһемләп,
Хөр ҡалаға Филал юл уҙа.
Ҡотҡаралыр ҡотло атаһы —
Бәреп керә улан ҙур вузға.

**3**

Ах был атай! Тайып йығылып,
Умарталыҡ осҡан ҡулынан.
"Үҙ филеңде үҙең аулап тот!" —
Фәнен генә тирә улына...

Филал бейей ҡыҙған табала:
"Фил ауларға әүәл ни кәрәк?"
Атай фәне әйтә: "Файҙаны
Ҡалҡыта бел, улан, өҫкәрәк!"

"Файҙа" ҡайҙа? Файҙа — баҙарҙа!
Баҙар — хужа ерҙең йөҙөнә!
Филал шәйләй: бизмән табағын
Ауыштырыу кәрәк үҙенә!

Баҙар барлай Филал-студент,
Диаматтар кермәй мейегә.
Шәйләй улан: *филе*[12] еҫенән
"Фил"дәрҙең дә башы эйелә.

Шунан башлап Филал бизмәнен
Тарта *филе* һәм фән ғәмәле.
Фани фәнде *филе* еңгәнен
Фәһем ҡыла Филал сәмләнеп.

Яллана ул, ярһып, кистәрен
Ит баҙында түшкә сабырға.
Сапҡан һайын, "сарпы-сорпоһо"
Осоп тора дуҫ-иш, тамырға.

Филологтар — фәндең филдәре
Йәғни профессор, докторҙар —
Улар ҙа, ти, *филе* ярата,

[12] Филе -- иң яҡшы һум ит.

Филалға, ти, рәхмәт уҡыйҙар...

Дуҫ-иш терәк — тамыр нығыраҡ,
Йәшәй belә Филал һыйышып!
Зачеттары "сам-черт" ҡуйыла,
Баһалары бара ҡыуышып...

Вуз бөтәрәк, Филал, филләнеп,
Һала ҡармаҡ филлек күленә.
Нисәмә "фил", имеш, *филеле*
Ҡармағына ҡапҡан теленән!

Нисәмә "фил", уйлап һин ҡара,
Филалдан, ти, *филе* ялбара:
Фил-ателия,
Фил-армония,
Фил-ология,
Фил-ософия —
Бөтәһе лә:
*"Фил-е... сап, өйә"...*

Биш ҡармаҡҡа ҡаба биш тармаҡ,
Бишеһе лә филле һәм елле.
Филал уңа, сөнки ҡармаҡҡа
Емләй белә һутлы һум-филе...

**4**

Аспирантурала ас-бирән
Шөғөлләнер заман юҡ инде!
Филал-аспирант, күр: ит саба —
Урындығы тулы ит-филе.

Фән филдәре бейей эргәлә —
Быrғый Филал елек, филеһен.
Елекләнеп, йола "кандидат" —
Дипломдың да ҡыҙыл биллеһен!

Уңа Филал, уңа биш "фил"дән —
Биш фәндә лә фәһем юғары.
Быға тиклем хатта Сократ та
Унын тиклем уңған юҡ әле!

Ҡалтаһына фәндәр филенең
Филал услап филе ырғыта.

Китә әһел ҡырҡҡа бөгөлөп —
Фәндәр филиалы ҡармаҡта!

Диссертацияһын Филалдың
Яҙып биргән, тиҙәр, филеләр.
“Филеп кенә” доктор булған ул,
Филе яратҡанға тиләләр...

**5**

Биш филеләй, филе яратҡан
Академияла президент.
“Пенсияға китер алдынан
Игелегең илгә игеп кит!” —

Әйткән, имеш, шулай ҡарсығы...
Һәм президент уны тыңлаған.
Ҡаталынан да шәп кандидат
Игелеге өсөн булмаған.

Шунан бирле Филал-фил хәҙер
Президенты Ғилми төйәктең.
Айбалтаһы еңе эсендә —
Еле менән онтай һөйәкте...

Арынһа ла баҙар баҙынан,
Арынмаған филе, електән:
Филологияға шул көндән
Филе тәғлимәте ереккән.

Филологтар инде — “филелог”,
Өҫтәлдәр нәк итсе бүкәндәр.
Фәндәренән филе сапҡылап,
Филгә сая хеҙмәт итәләр...

**7**

Фән түрендә Филал ултыра
Башлыҡ булып, нәк баш бармаҡтай.
Балта тотоп күнгән уң ҡулы
Кәк(е)рәйеп ҡатҡан ҡармаҡтай...

Орбитала филе йондоҙо —
Номенклатур-филле эшмәкәр:
Фил-ателияла юл асыҡ,
Фил-армонияла юл асыҡ,

Фил-ологияла юл асыҡ,
Фил-ософияла юл асыҡ,
*“Фил-е... сап, өйә”лә* юл асыҡ! —
Ер шарынан күсәр күсһә *лә,*
Орбитанан таймаç “фил” мәгәр!..

Филал әле ҡайҙа, тиһәгеҙ,
Баш йортта беҙ күрҙек был “фил”де:
Филе һалған усын ялатып,
Йөгөнөкләндергән ул “ил”де...
Премьер ҙа була, ти, инде...

20.12.1987.

## 1996

*************************



### Карап

Диңгеҙ ярған тиңһеҙ карап булып
Быуат офоғонда ҡаңғырам.
Тирҙәремде һөртә Ҡояш ҡынам,
Серҙәремде көтә Ай ғынам.

Бәндәләрҙең көнсөл хәйләләре
Күбекләнеп ҡала артымда.
Йән һулышым, йығып хөсөт ҡошон,
Шаңдауланып ҡайта халҡымдан.

Йөрәгемдең һандал һуғыуынан
Сатнап офоҡ, болот йыртыла.
Ишерелеп йыһан йондоҙҙары,
Карабыма шаңғыр йыр тула.

Ҡуҙлы Ерҙең ҡуҙрау һаҙағайы
Күкрәгемдән баҙрап ярала.
Яба шәфәҡ ҡыҙыл таҫтамалын
Арҡамдағы ҡанлы ярама.

Ауыҙҙары яуыз ҡайырылып
Сәскән ағыу — миңә сәм генә.
Заманаы зыңлап үткән карап
Бара кереп йондоҙ саңына.

1.01.1996.

## Тәре

*Р.Б.*

Беҙ ҡан төкөргәндә йоттоғоҙ май,
Түшәлеүсән өлгөр-өрәктәр!
Ус ыуғандың ялап тирле усын,
Кинәндегеҙ ысын йөрәктән.

Нисәмә йыл шуны юҡтайһығыҙ —
Ялағайға ине ҙур баһа.
Малайҙары ҡылып Тәфтиләүҙең,
Аҫыраусы һеҙҙе -- ул даһа!

Буйһонмаған ғорур йәнебеҙҙе
Йәнсетергә, беләм, ул ҡушты.
Туҡ йөҙөндә — ҡоҙғон ҡомһоҙлоғо,
Ирекһеҙләү иркен тормошто.

Балаҫ булып шуға түшәлдегеҙ,
Кәрәк саҡта — ҡаптыр ҡанъяға.
Таҫлап һеҙҙе, тапаны ул беҙҙе,
Ике урты бүртеп ҡалъяға.

Сәсрәгәндә сыртлап ҡандарыбыҙ,
Һеҙ түгелме ҡамсы һаплаусы?
Һәр берегеҙ яһил үксәһенең
Дағаһына булды ҡатлансыҡ.

Балаҫланмыш баллы юхалыҡтың
Йыланланып саҡты тел йәбе...
Түр көшөлөн тибеп төшөрөүҙе
Интеккән ил үҙе теләне.

Йырттым, — эйе! — ҡара йөҙөгөҙҙө —
Көнөгөҙҙөң йыҡтым тәреһен.
Ярылғанға, шартлап, шом тәреһе,
Шомло йәндәр шыңшып йөрөһөн!

Ҡәберенә ҡойоп һүлегеҙҙе,
Шыңшығандан кире терелмәç.
Балаçығыҙ баçҡан ҡыуан ерҙә,
Беҙ үлгәс тә, беҙле ер үлмәç!

...Яңы яһил көçәй көтөкйәндәр,
Кирә бирәм яным керешен.
Яурындарым күптән Күкте үткән,
Табандарым тарта ер көсөн.

1.01.1996.

## Ике аҡкош

*Саниягa*

Яңы йылдың баçтыҡ аҡ ҡарына,
Баçҡан һайын — йондоҙ шағырлаҡ.
Ике аҡкош — тәүге һәм аҙаҡҡы
Ғишыҡ утын бара йомарлап.

Ике аҡкош — тәүге аҡкош йыры
Йөрәктәрен һурып уҙмаған.
Уҙмағанға, йәндәр баҙлағанға
Аҡ йондоҙҙар шашып ҡуҙланған.

Ике аҡкош — күктең сөм ҡабағы
Ҡаурыйҙарға ап-аҡ нур яға.
Аҡ нур ғына эсеп осор өсөн
Килгән ине икәү донъяға.

Ут йоттолар — утҡа янманылар,
Яңғыраны аҡкош аҡ йыры.
Ер шарына уралды шаңғырап
Мөхәббәттең шөңгөр йәйғоро.

Йылдарының йылдам сылбырҙары
Ҡалды сыңрап аҡкош сыңында.

Ике аҡҡош — өҙөлмәҫ моң-һағыш,
Ике йөрәк типкән сағында.

Ике аҡҡош йыра аҡ буранды —
Аҡыҡ туйға инде яр яҡын.
Беҙҙән һуң да аҡҡош йыры ҡалһын,
Аҡ йөрәктәр аҡ йыр яралтһын.

1.01.1996.

## Урман

Ҡаршымдағы шыршы, ҡарағайҙар
Күҙҙәремә ҡарап һарғайҙы.
Һары һағыш һарып һыға инде
Хыялый йән тейен-малайҙы.

Ҡарлы елдең ҡаҙау тырнаҡтары
Тарай үле ылыҫ толомон.
Олондағы ҡәбер ҡорто ҡыуа
Морон төрткән шыршы ҡолонон.

Моронона үле әсәһенең
Үле ылыҫтары ҡойола.
Бойоғоп та ҡалған йәш шыршыҡай
Етем бала төҫлө тойола...

Ни ғилләбыл? Ниңә күҙ алдымда
Ҡороттолар ҡусҡыл урманды?
Балтаһыҙ ҙа ҡырып була икән
Сөмгөл күктән саф нур һурғанды.

Залим йәндәр золом ебәргәндәр
Борлап торған завод-мөрйәнән.
Күҙгә күренмәгән әжәл, ҡырҡып,
Хыялдарҙы беҙҙең ерләгән.

Беҙ ҙә бит, тим, тығыҙ урман инек
Шиғыр-тейендәрҙән хыялый.
Һирәкләндек... Киҫеп ғүмерҙәрҙе,
Арабыҙҙан йәшен ҡыялай...

1.01.1996.

## Керәм ялҡындарға

*Ҡ.А.*

Һәр яһил йән өҫтәл яҫылығын
Терәк иткән мине тибергә.
Яҙғандарым — Уралтау ҡәҙәре,
Тыҡмаҡсылар ҡуша ҡәбергә.

Теркәгәндәр ҡара исемлеккә —
Йөрөй алдан ҡара һаҡалың.
Кәрәк түгел һинең тапҡырлығың,
Кәрәк түгел һинең аҡылың.

Илең, телең, көнөң улар өсөн
Һуҡыр баҡыр — тамаҡ ялғарлыҡ.
Өҫтән төрткән бармаҡ ыңғайына
Күрһәтәләр этсән алғырлыҡ.

Тиреп валсыҡ түрә табынынан
Тибенгәнгә тиреҫ — пак ҡына.
Әсәһен үк һатып эсер шаҡшы
Байраҡ булып йөрөй халҡына...

Уттан сығып, керәм ялҡындарға —
Ҡуша керә Ҡояш, һалҡын Ай.
Мәңгелегем булып, янғанымда
Баш осомдан баға Дәү Хоҙай.

1.01.1996.

## Кисер мине

*Санияга*

Ғәфү ит һин мине, йәшлегемдә
Булдым аңыш — күпте белмәнем.
Килен итеп өйгә төшөргәндә
Устарымда алып инмәнем.

Баллы төнөбөҙҙө балһыҙ иттем,
Ә һуңынан ал-ял белмәнем.
Буйындағы һыйпап тере йәнде
Тилергәндә, “рәхмәт” тимәнем.

Ҡорманым йорт -- лайыҡ хан ҡыҙына,
Тапманым тун -- лайыҡ һыныңа.
Күҙҙәреңдең изге сағыулығын
Һалалманым фани йырыма.

Тәртә араһында ҡолонлаған
Байтал кеүек, эшкә егелдең.
Ыжғыр буранда бит илтеп ҡуйҙым
Бесән санаһында үҙеңде.

Малай тапҡан, тигәс, буран сығып,
Килә алмай ҡалдым бер аҙна.
Аҙашҡан да туңып үлгәндер, тип,
"Тынысландырғандар" бер аҙға...

Кисер мине, шунан һуң да һаман
Ултырманым камил аҡылға.
Тапҡан береңде... Бесән санаһында,
Арбаһында... сыҡтың хаҡ юлға.

Көнөн-төнөн ҡарап колхоз малын,
Сабый имеҙергә йүгерҙең.
Ашарға ла беҙгә һин бешерҙең,
Өҫ-башты ла йыуып өлгөрҙөң.

Ҡырыҫлығым менән мыжыҡлығым
Рәхмәтемдән булды күберәк.
Бөтәһе лә ятты бер яурынға,
Бөтәһен дә тартты бер йөрәк.

Ожмахыңдың хаҡын ҡайтарырлыҡ
Рәхәтлектәр бирә алманым.
Әрнетергә һине, буғай, ҡайта
Фәҡәт ошо әрнеп яҙғаным.

1.01.1996.

## Урыҫйән

*М.К.*

Урыҫйәнмен, тиеп ғорурланды,
Һатып ашағас та үҙ йәнен.
Урыҫ йәнле башҡорт — башкөлләйгә

Һатмаҫ тимә башҡорт Бөрйәнен...

Ата-әсә, алыҫ бабалары
Кәрткә һалып йәнен уйнаған.
Башҡортостанды ла, башын бороп,
Кәрткә һалмаҫ тимә ҡомағай...

Урыҫйәнмен, тиеп күкрәк ҡаҡкас,
Йондоҙланды күкрәк-яу(ы)рын.
Яу(ы)рынын баҫкан алтын йондоҙ —
Иблес билдәһеләй... Был ырым

Килә, тиҙәр, Тәфкил заманынан...
Тәреһен үк таҡмаҫ тимәгеҙ.
Иблес йыры зырлай үҙәгендә, --
Урыҫ йәнен һатһа нишләрбеҙ?..

1 — 2.01.1996.

## Бүлешеү

Талантлылар, талантһыҙҙар тиеп,
Ҡап-уртаға ҡырҡа донъяны.
Яңғыҙ үҙе — талантлылар яғы,
Яңғыҙ ауыҙ ҡаба ҡалъяны.

Игенсенең уңған бөтмөрлөгө
Бүләме ни илде уртаға?
Түккән тирҙәр — дөйөм бирнә ергә,
Тос бөртөктәр — дөйөм бураға.

Тәүлекте лә көн һәм төнгә телеү —
Хилаф кәсеп. Ер бит әйләнә!
Тигеҙ елә көн, төн ер йөҙөнән,
Береһенә-береһе бәйләнә.

Дәү Хоҙайҙың тигеҙ ҡолдары беҙ.
Айырыуын бәндә баплаған.
Ваҡыт тигән сират күпере бер —
“Талант”ты ла “талаҡ” яһаған.

2.01.1996.

## Биреле Әхпәп

Биреле Әхпәп тигән бер инәйҙе
Беләинем малай сағымда.
Яуыздар эт һөтөн имеҙгәндәр
Әхпәпъямал тигән сабыйға.

Нескә билле һомғол ҡыҙ булғансы
"Этйән"леген һиҙмәй йөрөгән.
Урман яҡтың башҡорт ауылына
Һылыу килен итеп бирелгән.

Шунан ары уның булмышҡайын
Һөйләргә мин төптө белмәйем...
Ҡара яҙҙа тыуған ауылына
Килеп сыҡты алыҫ инәйем.

Бала-саға һеперелгәс һыртҡа,
"Биреле Әхпәп! Биреле Әхпәп!" тип,
Ауыҙ асып мин дә йүгергәнмен,
Шул һөрәнде ихлас көсәйтеп.

Ни күрәмен — Ҡыҙҙар сабынында
Диңгеҙләнеп күкшелт һыу ята.
Ҡара тәпәйле бер торна килә,
Билән тауҙан төшөп, аръяҡта.

Биле нескә һаман талсыбыҡтай,
Көнгә балҡый хром итеге.
Ҡарҙай ап-аҡ күлдәк буйлап аға
Һумалалай һәр сәс бөртөгө.

Нәфис йөҙө — тәңкә биҙәгеләй,
Баҙлап яна ҡара күҙҙәре.
Ҡарлуғастай ҡыйылып киткән ҡаштар,
Ынйы кеүек йылтыр тештәре...

Ҡояшланмыш балҡыу итектәрен
Сисә һалып, керҙе күк һыуға.
Тулҡын ярып текә түше менән,
Әйләнде ул аҡҡош-һылыуға.

Етеп ярға, һыуын һыҡты ергә,
Кейеп алды хром итеген.

Телен тешләп ҡатҡан беҙ малайҙар
Һөрәнләнек Әхпәп “эт”леген:

“Биреле Әхпәп, Биреле Әхпәп килә —
Итегенең башы кителә!”
Кителмәй ҙә, хатта һелкенмәй ҙә —
Бейегәндәй “йөҙөп” тик килә.

Ғорур буйлай ауыл урамынан,
Асып керә тыуған ҡапҡаһын.
Күреп ҡалам фәҡәт күҙҙәренән
Ике бөртөк йәйғор аҡҡанын...

Өс көн ҡунғас атай нигеҙендә,
Ҡара таңдан тороп ул китә.
Сеңләп илағанын ауылдаштар
Көсөк сеңләүеләй ишетә...

Эт имеүҙән биреләнгәнлеген
Тыңлап үҫә яңы малайҙар.
Ҡара яҙҙан ҡара тәпәй аҡҡош
Һыу ярғанын барып ҡарайҙар.

Тегендә лә, тиҙәр, теләгәндәр
Арынырға Әхпәп Биреленән.
Тик китмәгән Әхпәпъямал инәй
Килен булып төшкән еренән.

Ялтыратып илгә итек теккән,
Типсегән тун түҙмер ҡулдары.
Биреләне, тиҙәр, ҡурсалаған
Тыумай ҡалған ҡыҙ һәм улдары...

Ҡаңғылдашып ҡаҙҙар ҡайтҡан һайын,
Сыҡҡан яҙын инәй сәфәргә,
Хыялының һылыу ҡыҙ, улдарын
Тыуған ергә тиртеп йәшнәргә...

...Әхпәпъямал инәм — аҡҡош һаман,
Үҙем дә мин — тиле малаймын.
Аҡҡошланып илгә ҡайталмауҙан
Көсөкләнеп сеңләп илаймын...

2.01.1996.

## Мысай

Сысҡан йылын тағы ҡаршылағас,
Иҫкә төштө мысай икмәге.
Сысҡан тарыһы — шул мысай уңып,
Баштарыбыҙ мәрткә китмәне.

“Бөтәһе лә -- фронт өсөн!” – тиеп,
Һөрҙөк, сәстек, урҙыҡ баҫыуҙы.
Үҙебеҙгә бөртөк ҡалмағанда
Ҡабартманыҡ астан асыуҙы.

Ҙур һуғыштың дүрт йыл ғәрәсәтен
Еңдереүсе — мысай булғандыр.
Бойҙай — байға, иләк аҫты — илгә
Булғанға ла мысай уңғандыр.

Бойҙай сәскән, урған беҙ тайҙарҙы
Үлер саҡта мысай туйҙырҙы.
Ыумас итеп, икмәк, бутҡа итеп
Табындарға теҙҙе һыйҙарҙы.

Сысҡан көҙендәй шул бөртөктәрҙең
Күкшеллеге керә төшөмә.
Тамсылатып аҡ-һөт тиртелдерҙе
Әсәләрҙең шиңгән түшенә.

Шуны имеп еткән үкһеҙ быуын
Үкле итте барлыҡ донъяны.
Сысҡан тарының тик сысҡандарға
Ҡалырында — илдең даланы.

Ә шулай ҙа, әл дә мысай уңған.
Ил быуынын мысай ныҡытҡан.
Бойҙай — байға, тигән заманала
Мысайым бар йәнде йылытҡан...

2.01.1996.

## Йылан-таяҡ

*Тағы М.К.*

Кәкре башлы йылан-таяғыңа
Таянғанһың — еткән ҡоһороң.
Борғоланған йылғыр һуҡмағыңдың
Оҙаҡламаç үтен ҡоçоро.

Ояланың йылы ҡуйындарға,
Саға-саға илдең имсәген.
Ҡаяуыңдан күпме йөрәк ҡанай,
Башҡайына еттең нисәнең!

Ҡатиллыҡтың ҡушбаш ҡарағошо
Юхалыҡтан һинең тәм күрҙе —
Йылан йәнең менән сырмап йәнен,
Милләтеңде төптән кимерҙең.

Ҡылғандарың, теҙер ҡорбандарың,
Теркәлгәндер ҡара китапҡа.
Ҡоҙғон ҡаҙанынан ҡаçмаҡланып,
Килеп еттең һуңғы этапҡа.

Үҙең инде кәкре таяҡ хәҙер —
Таҙғараның йылан-таяғы.
Тик уға ла хөкөм бар донъяла —
Бөгөләлер ҡамыт аяғың...

Әҙәм ҡиәфәтле йыланлыҡтан
Ил ҡуйыны ләкин тынмаған.
Ҡатиллыҡтың йылан-таяҡтары
Һыныр ине — үҙе һынмаған...

2.01.1996.

## Әмәлдәр

Хәмер ҡармап ирҙәр була харап,
Юҡтыр һымаҡ золом тышауы.
Әллә инде иблес игелеге,
Әллә, тимен, Хоҙай ҡушыуы.

Аристовтар көсләп эсереүҙән
Вафат булмыш башҡорт улдары.
Бөгөн үҙе һатып алып эсеп,
Үҙ-үҙенә һала ҡулдарын...

Каруан-каруан тәре килтергәндә
Башҡорт һайын баулап тағырға,
Арбаһында ятҡан араҡыһы,
Тәмәкеһе торған ҡабырға.

Айныҡ бабам, бүлеп каруан юлын,
Тәреләрен утҡа ауҙарған.
Араҡыһы менән тәмәкеһе
Ауылдарҙы әммә ҡыҙырған.

Һеңде, буғай, ыуы електәргә,
Тулды, буғай, быуы ҡандарға.
Бының өсөн әллә хөсөтсөнө,
Үҙ нәфсеңде әллә ҡарғарға?..

“Опиум” тип мәсет манараһын
Ҡолатҡанда башҡорт ҡулдары,
Мәсет урынына дәррәү ҡалҡты
Шешә манараһы юғары.

Ғаиләләрҙең инде табынында
Манараны мәжлес күтәрә.
Ир ғүмере менән бергә ҡушып,
Ил ғүмерен гүргә түңкәрә...

“Әмәлдәр юҡ” тиеп әйтеп кенә
Ҡалмайыҡсы мәңге әмәлһеҙ.
Әмәлдәргә һаран был донъяла
Һәр беребеҙ — әмәл-ғәмәлбеҙ.

Тәреләрен утҡа ауҙарыусы
Бабаларҙың ҡайтып ҡотона,
Араҡыһы менән тәмәкеһен
Ауҙарайыҡ тамуҡ утына!

2.01.1996.

## Ҡәҙер

Ҡанһыраған нервы остарымды
Ҡәләм ҡылып һаман яҙамын.
Минең һымаҡ юҡтыр эт типкелә

Кисереүсе ижат ғазабын.

Аттай эшләп, хатта ат һарайын
Тәтетмәгән миңә түрәләр.
Хан һарайы һымаҡ фатирҙарҙы
Холуйҙарға инләп бирәләр.

Ятһам, торһам, яҙһам — тар урындыҡ,
Унылы ла уртаҡ икәүгә.
Ҡағыҙҙарым, үкһеҙ сабыйҙарым,
Барып баҫа утлы киҫәүгә.

Ғүмер буйы тартып төп тәртәнән,
Әйтерһең дә, "стаж" етмәгән.
Рухым менән таяп илдең рухын,
Бөкөрөм дә сыҡҡан, етмәһә.

Китаптарым оса ҡырпаҡ ҡарға,
Көлгә сыға, дөрләп, архивым.
Үҙ башҡайым өйгә һыймағанда,
Ҡотҡарайым инде ҡайһыһын?..

Мин тәүгеһе түгел, һуңғыһы ла...
Ил ярата ҡәбер ҡәҙерен.
Бер бит ҡағыҙ булып ҡалғас ҡына,
Иркенәйер фани фатирым...

2.01.1996.

## Кәкүк

— Кәкүк, кәкүк, һана ғүмеремде,
Нисәмә йыл миңә йәшәргә?
— Был урманда нисә төп тирәк бар —
Шул тиклем йыл һиңә ишара.

— Кәкүк, кәкүк, урман киң бит сикһеҙ,
Тирәктәрҙең юҡтыр иҫәбе?
— Халҡың да, бит, һинең — ҡуйы урман,
Ә һин шуның ҡуҫкыл киҫәге.

— Кәкүк, кәкүк, тирәк ауа ҡороп,
Дауыл йыға, ҡырҡып китәләр...

— Ә шулай ҙа, ана, шаулай урман,
Тирәктәре гөрләп үҫәләр.

— Кәкүк, кәкүк, мин, бит, өҙөлөр төк —
Ғүмеркәйем сикле һанала?
— Шул сиктәрҙе сыҡҡан йәнең менән
Сикһеҙ ғүмерең бар донъяла.

3.01.1996.

## Шүрәлеләр

(Үлгәс кенә Рәмиҙең дуҫтары күбәйҙе)

Шүрәлеләр урлап менә, тиҙәр,
Өйөрҙәге толпар аҫылын, —
Шағир әруахын, күр, алды һырып
Шиғри шүрәлеләр нәҫеле.

Толпар, тиеп, данға көрмәнеләр,
Осорҙолар, сөйөп, һауаға.
Бар шүрәле, сеңләп, осто ҡуша,
Әйләндереп күкте баҙарға.

Кикеленән — ҡойроҡ осонаса,
Йөнтәфигә менгәш йөнтәфи.
Толпар толомоноң тетеп төгөн,
Йөнлө ояһына ем ташый.

Улар икән уның йәндәштәре,
Киргән улар кирем ҡанатын.
Ҡуш ҡанаттың ҡаурый остарынан
Тора инде, ана, ҡан атып.

Толпарҙың юҡ һелкеп ташлар әмәл —
Һәр яйҙаҡтың аҫты һумала.
Бер ҡаранан бер ҡараға тиклем
Ҡыуала ла, әйҙә, ҡыуала.

Толпарсы мин, тиеп, ҡуҡырая
Урлап менмеш йөнтәҫ шүрәле.
Ярылғас бер, ярылырмы тағы
Шағир әруахының йөрәге?..

3.01.1996.

## Ошолоҡ

*Н.Швейцер-Швецовка*

Сытырайып сыҡҡан сытыҡ йөҙө —
Ошо көндән тамам йөҙәгән.
Төкөргән дә ошо табағына,
Ошолоҡһоҙ табаҡ көҫәгән.

Ошо ерҙең һыуы тәмһеҙ уға,
Шишмәләре сөнки һөйләшә:
Ошо илдең ошо теле менән,
Уртлап алған һайын, өндәшә.

Телен йотоп, тәре таҡмай ниңә,
Сиркәү ҡормай, ватып мәсетен?
Ошо ошолоғон туҡтатмаһа,
Түҙеү мөмкин күпме хөсөтөн?!.

Ошолоҡтоң ошо һауаһынан
Аңҡып аңдый ошо Күк еҫе.
Төштәренә хатта төҫө керә —
Балаҫтарҙың сағыу төк төҫө.

Ошо ҡырҙың ошо баҫыуҙары
Биргән икмәк уға танһыҡһыҙ,
Сөнки ошо ҡулдар бәрәкәте
Тиеп таныу ифрат яғымһыҙ.

Ошо көтөүҙәрҙең май-каймағы,
Колбасаһы һәм йөн костюмы
Һис оҡшамай, иҫкә төшөргәнгә
Ошо көтөүселәр тоҡомон.

Ошо йорттар — ошо мәрмәрҙәрҙән,
Иҙәндәре — ошо имәндән.
Йылыһы ла хатта ошо девон
Ҡатламынан — йәнгә йәһәндәм!

Поездары елә ошо юлдан,
Осҡостары — ошо һауанан.
Ҡымыҙы ла, алсаҡ хур ҡыҙы ла
"Ошомон!" тип ала яғанан.

Һөйөр ине йәне был ожмахты,
Төкөрмәҫ тә ине табаҡҡа,
Ошолоҡто әгәр, ул тигәнсә,
Бырағтырһаҡ йәһәт тамуҡҡа.

Быныӊ өсөн алып ташлау мотлаҡ
Ошо ергә биргән исемде.
“Исем бөтһөн өсөн, бөтөрәйек
Шул исемле-йәнле есемде!”

3.01.1996.

### Кимәлдәр

Тракторҙыӊ һабан ҡарлауынан
Ҡарпыһам да ҡәләм ҡырына,
Киҫәттеләр: “Ябай тракторсыныӊ
Аӊ кимәлен шәйлә йырыӊа!”

Ялпы аӊламаҫлыҡ кимәл, тиеп,
Фекеремде өҙә саптылар.
Ялпылаштырыуҙыӊ әмәлдәрен
Әһелдәре көсләп таҡтылар.

Кимәлеӊдән ҡалҡма, тине көнөм,
Көйләнгәнгә тик бер кимәлдән.
Баштан баҫып кимәл батырғанға,
Йәндәребеҙ ҡалды кимәлйән.

Тик кимәлем тартмай тарлыҡтарҙы,
Дауылдарҙан дөрҙө карабым.
Тракторсынан түбән кимәлдә бит --
Мин, һабансы, тиеп ҡараным.

Әммә һабансылыҡ офоғомдан
Түбәнерәк ҡалды тауҙары.
Шулар иләгенән иләп кенә
Иләүләнә ине баҙарыӊ...

Иләмәнем. Еӊде иләҫлегем.
Ҡояшыма баҫҡыс төҙләнем.
Ҡулдарынан тартып мендерергә

Ҡулдар таба алмай йөҙәнем.

Дуңғыҙ ҡаны булды яҙғандарым,
Донъя малы шылды ҡулдарҙан.
Фанилыҡҡа фәһем алыр өсөн,
Кәрәк түгел баҫҡыс ҡолдарға...

Ҡояшҡа һөйәгән баҫҡысымдан
Үрмәкселәр, ана, үрмәләй.
Күрмәкселәр, аҫта, аулап улъя,
Үрмәкселек ауын һәрмәләй.

Түбәнлектең тибеп түбәнлеген,
Яраласаҡ йәнем яраны.
Таңғы Ҡояштай ул ҡалҡынасаҡ,
Буйлап минең баҫҡыс-араны.

3.01.1996.

## Белем

Белгән һайын күпте белгем килеп,
Офоғомдоң йыртам ҡыртышын.
“Белем”дәре менән биләүләнмеш
Белдеклеләргә ят был эшем.

Боғаҙыма ҡороҡ һалып ҡына
Тотмаҡсылар фекер елешен...
Тибрәтәмен Ғаләм алмағасын, —
Евнух ейә әммә емешен...

Хакимдарҙың ғәрем ғилемдәре
Бүртә шунан ҡыҫыр түлендә.
Маңлайымдың Ғаләм һырҙарына
Асҡыстар юҡ ғәрем илендә.

17.12.1996.

## Гөнаһ шомлоғо

*Әлеге лә баягыга.*

“Мейеһенең аҡыҡ юлаҡтары

Бөҙрәләнгән түбә төгөнә”.
Тамаҡ сарлап, бөҙрә йырын йырлап,
“Аҡыҡ-аҡыл” илгә түгелә.

“Аҡыҡ”тары арбай тауыҡтарҙы,
Арыҫландар хатта буй һона.
Бер башҡа, тип, торам илдән өҫтөн,
Атланған ул илдең муйынына...

...Шаҡырая баҫып бай залдарҙа
Фыртлатҡанда фирҡә гимнын,
Етмеш йыллыҡ золом ҡыҙамығы
Ҡыҙыллатҡан көллө фиғылын.

Сиренең ул әммә һөйә серен —
Сиртә беләә сиреү ҡылында.
Тинен биреп, меңен алған тиреп
“Аҡыҡ-аҡыл” — “хаҡлыҡ” юлында.

“Телһеҙ, күҙһеҙ, һаңрау, миңрәү булған
Борон халҡым...” — яра ярманы!
“Өлкән ағай”, имеш, үпкәс кенә,
Башҡортомдоң артҡан дарманы!..

Үпкес ағаһының хыялын ул
Үтес иткән йөрәк түренә:
“Башҡорт урынына маңҡорт ҡылһаҡ,
Бер бөҙрәбаш етер ине лә!..“

Бөҙрәләнмеш “аҡыҡ” көҙрәләре —
Парик икәнлеген кем белә?!
“Көйөк” халҡына ул “бөйөк” булып,
Ҡолойлана иблес түленә...

Башы аша балҡып бағырлыҡтың
Сала аҫтан, сабып, тамырын.
Саба-саба, нишләр ҡанап ауһа
Үҙен атландырҡан яурын?!.

17.12.1996.

## Маймыл йылы

“Уҡсы” йондоҙлоғо аҫтында тыуғанһың,
ә мөсәл йылың — “Маймыл”.
**Күк күрәҙәһе.**

Дәү Хоҙайым Ғаләм мөсәленә
“Уҡсы” итеп мине яралтҡан.
“Маймыл” йылында ла Йыһат[13] тиеп
Атам-әсәм исем яратҡан...

“Изге һуғыш” тигән был намымды
Ҡырҡыулатмай, зинһар, ҡарағыҙ:
Тейһәм дә гел тинтәк теңкәгеҙгә,
Һуғышҡа бит маймыл яраҡһыҙ!

Ҡылансыҡлы был зат ҡылансанан
Маймылланып ейһә бананын,
Ҡылансала түгел — дуэльсала
Ә шулай ҙа морон ҡананы...

Маймыллатып кәмит уйнатмаҡсы
Заманға баш бирмәй, тибелдем.
Арыҫландай ватып ситлектәрен,
Атҡан уҡтай тура “кәйелдем”...

Мөсәллектән инсан булыуҙары,
Ай-һай, ауыр – төшә ҡыйбатҡа.
Арыҫландар бөгөн маймыллана,
Ә маймылдар сыға йыһатҡа.

“Махабхарата”нан белдем аҙаҡ
Маймыл батшалығы булғанын.
Хаҡлыҡ өсөн изге һуғыш асып,
Уғы менән золом ҡыйғанын...

Уйын түгел, эйе, уҡсы хәле —
Ғүмергә ул хәтәр йыһатта.
Маймылланһын, әйҙә, “арыҫлан”дар,
Ә беҙ — гел уҡ, “маймыл” булһаҡ та!

19.12.1996.

[13] Йыһат – ғәрәпсә “Изге һуғыш” тигән һүҙ.

## Һ. б. (“Һәм башҡалар”)

*Башҡорт телевидениеһының режиссер-бесеүселәренә*

«Һ.б.» тимәк – һәм башҡалар, тимәк, --
«Һ.б.»ларҙың йәне исемһеҙ.
«Йыһат Солтанов» тип яҙыр өсөн,
Булырға мин тейеш есемһеҙ...

“Һ. б.” күрһәм, “х/б” төшә иҫкә —
“Хлопчато-бумаж.” кейемдәр...
“Ҡара башҡорт”тарым тураһында
Уй уйылтам “һ.б” мейемдә.

Зәки Вәлидиҙең “һ.б”-лары
“Аҡтар” булғас, кейеп “х/б.”-лар,
“Ҡыҙылдар”са ҡапыл ҡуҙарынып,
“Автономия”лы булдылар.

Ҡара мейенең аҡ юлаҡтарын
Ҡаплап булмай әммә ҡыҙылға:
Ап-аҡ аҡылыбыҙ һыйышманы
Ленин буҙлап һыҙған ҡуҙ-юлға.

Шунан бирле ҡара башҡорт сирле:
Ҡыҙылланмаҫ аҡыл — “милләтсе”...
Шиғырымды ҡыҙыл ҡаным менән
Яҙғанда ла шул сир эләкте.

Ҡара башҡорт булып тыуғанғамы,
Ҡыҙыллыҡ тиҙ кермәй ҡаҡшаным.
Тинтрәтте, тибеп, ҡыҙыл донъям,
Донъялыҡта тынғы тапманым.

“Башҡортлоҡ”то сүптәй сүпләүселәр
Баҫмаларҙа миңә ҡаныҡты:
“Башҡорт” менән “сүп”те бергә бутап,
Исемемде ҡуша йолоҡто.

Изге һуғыш теләп йыһатлығым,
Тейгәнгәлер ҡыҙыл теңкәгә,
Ҡыҙыл ҡапҡалары ҡапҡанланды
Гәзит, эфир, башҡа өлкәгә.

Күк экранға һалып бесеүсенең
Маһирлығын маҡтап йырлайыҡ:
Кадрҙарҙа — миңә йәнәш торған
Тауистар бар, ә мин, турғай,юҡ...

Ҡалай оҫта ҡырҡып-ҡырсығандар! —
Нисек итеп йөйөн тапҡандар!
Тауислыҡтан тибеп мин-турғайҙы,
Аҙым һайын ҡапты ҡапҡандар...

...“Һ.б.”-лыҡта “х/б” кеүек һыҙҙы
Боғалаҡлы-ярһыу йылдарым.
Быуаларҙы быуат ярғас та бит
Боҙ аҫтында ҡатты йырҙарым...

Тауистарын алтын ҡунаҡсала
Таҫыллайҙар һаман тәү башта.
Ҡарға сумып сыңрай ҡара турғай,
Өшәләге — “һ.б.” (“һәм башҡа”)...

“Һ.б.,һ.б.”!..
Һанһыҙ “һ.б.”-ларҙа
Ҡөҙрәттәрем ҡайнай ҡотороп!
Ҡыҙыу рәхмәт ҡыҙыл был донъяма —
Йыһатланы “һ.б.” булдырып!

“Заманаһы шулай ине”, — тирҙәр,
Ярай, булһын. Шулай булғандыр.
Берәүҙәре шулай унғандыр ҙа
Берәүҙәре шулай туңғандыр.

Ризамын һәм ҡарҙа ҡалғаныма —
Ҡара башҡорт көйө ҡалғанмын!
Башҡорт көйө үрттә янғанмын да
Башҡорт көйө көрттә туңғанмын.

Шөкөр,
Йырым йырған һайын йырын,
Көртлөктәрен йәнем ҡаплайҙыр.
Төрөп төрлө “һ.б.”, ”х/б”-ларға
Йөрөткәнгә, һыным ҡатмайҙыр.

“Һ.б.”лыҡтан уҙмыш туҙмыштарға
Тылҡып быны, асмам яңылыҡ:

Ялтыраҡтар яна йә күгәрә,
“Һ.б.” — “һ.б.” һаман, — мәңгелек!

Мәңгелек дан “һ.б.”-турғайҙарға —
Мәңгелеккә һеңгән батырҙар!
Тауистар ҙа алтын ҡунаҡсанан
Беҙҙең ҡорға кереп ятырҙар.

17.12.1996.

## Тирәк тибрәнеүе

Яратығыҙ мине ярһыу көйө, —
Тамырҙары тәрән Тирәкте.
“Ябалдашы япты ярты күкте!”, --
Тип күпһенеү өҙә йөрәкте.

Был яртыны, мин юҡ сағымда уҡ,
Дәү Хоҙай бит миңә инләгән.
Бында ҡурпып, бында ҡарпыуымды
Ер-Күк үҙе өҙөлөп теләгән.

Тиккәме ни, тимер тармаҡтарым
Ер йәҙрәһен, етеп, сырманы.
Күкте күмеп күкаҡ ябалдашым,
Бөрөләрем Көндө күрмәне.

Олономда — Ерҙең көрһөнөүе
Күк күкрәүе менән тоташа.
Ғаләмдәрҙең тыуым-үлемдәре
Йәйғорланып миндә уҡмаша...

Күпһенмәгеҙ мине, күпһенмәгеҙ, —
Юҡһыныуҙар аңдый алдараҡ.
Үҙегеҙҙе өнһөҙ һөйөүемде
Өнәрһегеҙ әле һуңғараҡ.

19.12.1996.

## Хаҡиҡәт

Хаҡиҡәтте һанлай хөкөмдарҙар,
Ҙур залдарҙың ҡулын күтәртеп.

Күпселек ҡул — тимәк, хаҡлыҡ ҡулы,
Аҙсылыҡты була ҡыҫҡартып...

Шул "ысул"дың ысын асылыуын
Татынылар, етмеш йыл үткәс.
Ғифритләнеп ҡалҡты "хаҡлыҡ"тары,
Нахаҡлыҡҡа илде ҡол иткәс.

Ултырманы аҡыл. Ил һаман ҡол...
Ялған күҙен, төртөп, кем соҡор?!
Ғифрит һуғып ярған көршәкбаштан
Фәһем алалмаған беҙ — һуҡыр...

Ярсыҡ-йорсоҡтары араһынан
Ҡабат ҡалҡа "ысул" — юҡ кәртә...
"Баҙарман"дар булып, баҙар ҡороп,
"Ҡолой"ҙарҙың ҡулын күтәртә.

Ә Хаҡиҡәт ҡалғый ҡәлғәһендә
Беҙҙән ары — япа-яңғыҙы...
"Хаҡлығығыҙ ҡалды аҙсылыҡта!", —
Аҙғынлана "ысул" дуңғыҙы...

Күпселек — күп! — Ҡул күтәрә "ер-күк", —
Дуңғыҙлыҡты хаҡ тип танырға.
Белмәйҙәр тик, Хаҡлыҡ, булып Хаҡлыҡ,
Япа-яңғыҙ мөмкин ҡалырға.
Алҡымыңдан бер саҡ алырға...

19.12.1996.

## Серәкәй

(йәмһеҙ төш)

Уф... Серәкәй ҡунды бәғеремә! —
Яп-яланғас йөрәк башыма!..
Фил һемәге һымаҡ һыуырғысын
Ҡаҙамаҡсы булып ҡамшана.

Күҙ алдымда терәп тубыҡтарын,
Табаныма ҡәҙәр батырҙы.
Тыңламаны ҡыуғыр ҡул-аяғым...
Быҙау һымаҡ буҙлап баҡырҙым...

Ятам, ялҡып, сағыл сикәһендә,
Аҫта — упҡын, өҫтә — Күк-һауа...
Ә серәкәй һура, һура ҡанды...
“Ҡанһурарҙы һис кем ҡыумаһа,

Упҡын упһын ине үҙемде!” – тип
Көйәләнәм... Ана, килделәр.
Серәкәйгә ҡарап торҙолар ҙа
Шарҡылдашып сәмле көлдөләр.

Ҡыуҙылар... тик,
“Баҡырма, баҡа!” -- тип,
Серәкәйҙе түгел — үҙемде...
Алйыған, тип, тағы ғәфү итеп,
Ҡалдырҙылар... ябып күҙемде...

Ах, ҡубынмай...
Ана кү...е ҡанай —
Һемәк һурып, аға хәләл ҡан!..
Серәкәйҙән хатта сәбәләнер
Сәм ҡалдырмай, донъям алдатҡан...

Һуңғы сарам –
Аунап аҫҡа ауам!..
Упҡын-ташта серәкәй иҙелер!..
Уф! — сәсрәне йөрәк! Осто һемәк —
Серәкәйем күктә гиҙәлер...
Упҡын төбө мине иҙәлер...
Серәкәй ул — тормош үҙелер...

19.12.1996.

## Тәреләнгән аждаһа

Юхаланып, яуыз ҡиәфәтен
Алмаштырҙы йылан-аждаһа —
Алдап алйыулатҡас, әҙәм ҡаны
Аждаһаға танһыҡ аш таһа!..

Ҡыу баш һөйәк, арҡыс-торҡос һөйәк --
Һүрәтләнде юха бер заман,
Ҡото осоп, йәнен бирһен өсөн
Ерекмән һәм ерһеҙ юламан.

Пираттарҙың ҡара флагында
Юлбаҫарлыҡ ҡылып йөрөнө...
Йыланланып ҡабат ҡуйындарға
Кереүенән тәҡәт ҡороно...

...Аждаһаның юха-йыланлығын
Таный белгән әммә бабалар:
Аҡбуҙатлы Урал, һөңгө һөңөп,
Йылан башын юлға ҡаҙаған.

"Йылан үлтереүсе Урал батыр!" —
Киткән даны етмеш илдәргә!
"Еңеү килтереүсе Гөйәргәй" тип
Кергән "Гөйәргәй"ле телдәргә...

"Гөйәргәй" – ул, тимәк, Урал батыр...
Исемкәйе ингән ят дингә...
Сиркәүҙәрҙә торған тәреләнеп,
Йылан башын алып һөңгөгә...

Йылан ләкин йылдам һыпырылған,
Ҡыу ҡабығын ғына ҡалдырып.
Әүерелгән ҡушбаш мут ҡоҙғонға,
"Гөйәргәй"ҙең күҙен ҡыҙҙырып.

Һәм "Гөйәргәй" уның ҡиәфәтен
Семәрләгән тәхет, тажға ла.
Гербы булып ҡунған байраҡтарға,
Аҡсаларға ҡушбаш аждаһа...

Ажарланып, ана, ҡуш суҡышы
Суҡый, суҡый ике ҡитғаны...
Изге Гөйәргәйле тәреләрҙе
Йыуып аға алһыу ил ҡаны...

Суҡылмаҫка суҡмар суҡлаусылар
Ҡарыуынан уның була көл.
Ҡарағыҙсы ҡалҡып шул ҡоҙғонға —
Томшоғонан саға йылан-тел!..

Урал батырҙы ла һанламайҙар,
"Гөйәргәй"ҙе генә данлайҙар...
Һөңгө һөңгән йыландың ҡабығын

“Басурман” тип инде һанайҙар...

Мендерелде, ана, атлы тәре
Поклонная тауҙың түренә.
“Йылан-басурман”ды үтә сәнсеп,
Йыраҡтарҙан ҡалҡып күренә.

Күргән һайын, күҙҙе, һай, сағылта
Һөңгө осҡайының балҡыуы.
Ҡойоу өсөн шуны, кергән, тиҙәр,
“Басурман”дарҙың да алтыны...

Аҡбуҙ атлы, Урал тигән затлы —
“Еңеү килтереүсе Гөйәргәй”...
Аҙан ғына әйтер сулаларҙа
Сиркәү дөңгөрҙәре дөңгөрҙәй...

20.12.1996.

## Тау, Дала

Тауым бейек, далаң йәйек, тиеп,
Йәберләмәгеҙсе бер-берен.
Үҙебеҙ бит уйлап сығарғанбыҙ
Урал менән Шүлгән йәберен.

Тыуып Йәнбирҙе һәм Йәнбағанан,
Икеһе тиң — икһеҙ игеҙәк.
Араларына беҙ бәндәләрҙең
Керергә ни хаҡы? Ни ғәҙәт?!

Игеҙәктәр йөҙөн ҡайырмағыҙ! —
Бер-беренә көҙгө, күҙ һәм дә.
Көн-Шүлгәндән — аҡ нур Ай-Уралда,
Урал ҡаралығы — Шүлгәндә.

Икеһен бер бөтөн белһәк кенә,
Тигеҙләнә аҡ һәм ҡаралар.
Беҙ, бәндәләр, йөҙөн ҡайырғанға,
Йыраҡая бара аралар...

Бейегәйтмә, бүлеп, Урал-тауҙы,
Түбәнәйтмә Шүлгән-даланы.

Икәүләп бит улар тыуҙырғандар
Ғаләмгә тиң башҡорт-баланы!

24.12.1996.

## Ҡарабай менән Һарыбай

Башҡорт — ҡайҙа ла шул башҡорт инде,
Эттәрҙе лә күңел тиң күрә.
Подъезға шәп баһбай алып күсте
“Өлкән ағай”ланған бер түрә.

Ҡара туны – ҡара-йылтыр йөнлө,
Ҡара баһбайына иш килгән.
Һөйләшеүҙәре лә көйләшеүле –
“Юғары штил”дә ишелгән.

Оноҡкан ул әсә биргән телен --
“Өлкән ағай”са тик телләшә.
Баһбайы ла, бәлки, һуҡбайҙарға
Тик шул телдә генә өндәшә?..

“Эт модаһы” маҙа маһайҡкан саҡ,
Баҙлауҙары күҙҙе ҡыҙҙырып:
“Өлкән ағай” уҙа янибыҙҙан,
Илдекенән иле уҙҙырып.

Ҡомполдатып ҡотло йоҙаҡтарын,
“Баҙлаҡкүҙ”ен алдан керетә.
Минең ҡусты ҡунһа кухнябыҙҙа,
Йөнтәҫ “ҡусты” — түрә түрендә.

Ҡойроғон бер бөгөп үтеүенән
Ҡараныҡ та ҡаттыҡ — Ҡарабай!
Ҡара “Волга”ла эт елә һаулап,
Әйләнеп тә беҙгә ҡарамай...

Эй был донъя... Ниңә хозурлығы
Була икән шулай топ-тоҡос?!.
Ни күрәбеҙ? Йылтыр Ҡарабайҙың
Хәле мөшкөл... Хатта ҡот осҡос:

Услап башын, аунай ҡаҡ тупһала,

Сүп үткәргес торба артында.
Һөйәк-һаяҡ һалһа үткән-һүткән,
Оялыштан хатта ҡалҡынмай.

“Өлкән ағай” һары тунда баһлай —
Һары баһбай бөгөн модала.
Һарыбайҙы бөгөн ул елдертә
Алтын төҫлө һары “Вольва”ла.

“Волга” танһыҡлаған Ҡарабайҙы
Һары аяҡ тибеп аҡырҙы:
“Пош-шел, сиған!” — “Башҡорт” тип әйтмәне,
Мин торғанға ғына, ахыры...

Һауаланып елгән Һарыбайҙың
Тибелерен белә Ҡарабай...
Типкән саҡта, татар торһа ғына,
“Пош-шел, татар!” — тимәҫ был ағай...

26.12.1996.

## Бағана

(Зәйнәб апай Биишеваны ерләгәндә)

Ауыр матәм матҡый araларға
Арабыҙҙан унның китеүе.
Ярандарҙы ярған ярһыуҙарын
Һыуындырҙы һалҡын гүр көбө...

Дуҫ-дошманы ҡуша өйөрөлдө
Ер шарылай табут төбөндә.
Фанилыҡта үҙен күпһенеүсе —
Юҡһыныуын әйтте был көндә.

Ышығына ығып емшәнгәндәр,
Ялҡынына ҡабып янғандар,
Дуҫлашмайынса уҡ “яҡын дуҫ”тар,
Тыуышмайынса уҡ “туған”дар —

Бөтәһе лә бөлдө матәменән —
Быуатты бит бауҙа төшөрөү...
Бары бер йән ҡалды һыны ҡатып,
Өндә көйө торҙо төш күреп:

Апай менән, имеш, ята гүргә
(Мөмкин түгел булыу башҡа хәл!)...
Төшөп етер ирҙе кире борҙо:
“Һин, мырҙам, ҡал, мине иҫкә ал”...

Тора бына... Ҡатҡан тап бағана...
Төйөп түңде, көрәк ташлайҙар.
Иҫкә алыр өсөн иҫтәлеген,
Мәйханаға әүҙем атлайҙар.

Тарһыныусы бара башлап үҙе,
Дуҫ-дошмандар йылдам эйәрә.
Иҫе китеп ҡатҡан бағананың
Бәғеренә һалҡын ел бәрә...

26.12.1996.

## Этлек

“Эт йәнле” тип белдем мин үҙемде,
Этлектәрҙән алйыу сағымда.
Эт ҡайышы һымаҡ һыпырылдым
Алыр мәлдә мәлғүн алҡымдан.

Йән асыһы, тиҙәр, аҡтығында —
Ғазраилға йәнең биреүҙе.
Ғазаплыраҡ ләкин ҡыҙыл донъя
Типкеһендә түҙеп йөрөүе.

Кешелеген юйып, көшөл йәндәр
Юхалыҡҡа ауҙы шуға ла.
Этлектәрҙән эткә әйләнмәгәс,
Эт йәнлелер шул мин донъяла...

Еңел түгел әммә йән әрнеүе,
Кешелегең тотоу тешегеп.
Өрәгәстәр өрөп аулауынан
Хыялдарың ауа ишелеп.

Йәнең ярып тыуған ярһыуҙарың,
Ҡыҙыл ҡылыс ҡырсып, ҡыйыла.
Ҡыҙыл ҡыҫығынан ҡомармағас,
Ҡаршыңдағы ҡитғаң уйыла.

Ҡояшыңды хатта әйләндерә
Энә менән тунар йәлләткә.
Эсәр һыуың, һулар һауаң бөтә —
Шайтан шәйләй "ҡыҙыл йәннәт"тә...

Алмашмайһың әммә юҫығыңды,
Ҡояшыңды, һыуың, һауаңды.
"Һуңғы һулышың!" — тип һыҡҡанында
Этләшәһең, терәп табанды...

Алмашынмайынса ал бирмәүе,
Ай, ауырға төштө, ауырға.
Алмашынмаған шул алғырҙарҙы
Ауҙарҙылар гүргә һалырға...

Араларынан бер эт йәнлеһе --
Донъя йөгөн талғын тартамын.
Этлектәрен этеп ауҙарырлыҡ
Түҙемлегем, дәртем бар тағын...

26.12.1996.

## "Топор"ло төш

Топор-балта нинады, урыс мине ҡинады...
**Бәйеттән**

Иртыш-һыуҙан алып — Иҙелгәсә,
Ағиҙелдән — алыҫ Каспийғаса
Усаҡ яға беҙҙең Үҫәргән.
Өнһөҙ өлкәләрҙең өлпөләре
Булып бүлгесләнгән, бүҫкәргән.

Тере тәнде сабып тураҡлауы
"Топор"лоға ғына килешә.
Ҡаңғырамын, ҡанап, бүлкәләрҙә, —
Шағир йәнен киҫкәс өләшкә...

Һәм Каманан алып — Обь-һыуғаса,
Ағиҙелдән алыҫ — ҡотопҡаса
Көнө-төнө тәнем ҡанһырай.
Йөрәгемдең төбөн — Межгорьены
Умырып алып, "топор" ҡон һорай...

Тыпырсынған тере ҡалъяларҙың
Йәне сыҡһа сығыр, — өнө юҡ.
Гүр ташылай ҡатҡан Каруанһарай,
Биленә тиң моңға күмелеп.

Ай осона ҡарпып, ҡушбаш-ҡоҙғон
Тәсбихләрме ҡара тәкбирен?..
Юҡ! — "Топор"ҙо гүргә бырағтырҙы
Һынмаҫ рухым, еңеп тәҡдирҙе!

"Башҡортостан — ҡайын япрағы", тип
Ҡайыҙлаусы ҡылмаҫ тантана!
"Топор"сonoң йәне тыпырсынып,
Ҡурай остарынан ҡан тама.

28.12.1996.

## Шағирҙар

Йырҙарҙы ла баҙар ҡанундары
Яғындыртҡас аҡса ялына,
Арҡаһынан атып йырсыларын,
Пегас ҡасты Парнас тауына.

Ҡаушарып нур-илһам ҡанаттарын,
Һутлы ужым уртлап ял итә.
Тау түтәһен һырмыш илһамйәндәр
Йәйәүләнеп юҡты бар итә.

Тәңклек түгел сөнки — тәңкә, сыңлап,
Елкендертә хисйән күңелен.
Иблес имләүҙәре илерткәндә
Тота алһын ҡалай бәүелен?..

Шиғыр менән түгел — шөғөл менән
Түш ҡыуығын өрә, ҡабартып.
Дәрүишләнеп, сәфәр гиҙмешләнеп,
Ил кеҫәһен ҡайта таҙартып.

Рәхмәт илгә — спонсорҙар биргән! —
Презентлайҙар брезент киҫәген.
Улар булмаһа — беҙ булмаҫ инек,

Тип әйтергә әле иҫәбем.

Улар арҡаһында даһи арта,
Даһиҙарҙан түрҙәр һығыла.
Һәр төбәктең тере мөғжизәһе
Мәркәз мәрмәренә һуҙыла.

Филармонияның сәхнәләрен
Сатнаталар, сыңрап, сос ирҙәр —
"Юбилей"ҙарын йор йоморолап,
Йомарт улъя аулай шағирҙар.

Сәскәһенән былай сәксәктәре
Сәселә лә йәнен тилертә.
Кем толпарын үҙ ҡорсанғы тайың
Уҙыуына, дуҫтар, ни етә!?.

Бөйөк Мөхәммәтша сәсәнебеҙ
Хаҡ менгеһен Хәмит сәсәнгә
Бүләк иткән дә бит... Ә беҙҙәргә
Нисек итеп йәйәү йәшәргә?!

Йүгән шалтыратып, юҡмыш тайға
Таяндырткас төбәк түрәһе,
Затлы келәм йәйеп, тун кейҙертеп,
Батман балын ҡала бирәһе.

Бирнә өҫлө бирнә... Сәм-сәхнәлә
Әртистәргә хатта урын тар.
Шағир өҙләй, шағир гармун көйләй,
Фокус яһарға ла уйы бар...

Быныһы ла хәләл, тимен, сөнки
Бабич та бит шырмый уйнаған.
Тик үкенес, кеҫә бөтәйтерлек
Спонсоры ғына булмаған.

Шуға күрә яҙған ул шиғырын,
Сәхнәнән һуң, майшәм ҡабыҙып.
Парнас тауына ла, ҡанат киреп,
Илткән Пегас уның яңғыҙын.

Ә беҙ... күмәк... Даһиҙар күп, тимәк...
Гөрләй банкет, сыңлай бокалдар.

Шағирҙарҙың шанлы алҡыштарҙан
Бөгөлөп үк китә бәкәлдәр.

Ҡайта артып тимер арғымаҡҡа
Ектән еткән йүгән, келәмде.
Сөйгә сөйөлһә лә йүгәндәре,
Үҙҙәре үк инде йүгәнле...

Бабич һымаҡ майшәм яҡһа ымлап,
Белмәй Пегас шағир ҡәҙерен.
Йүгәндәре сеңләй сөйҙәрендә —
Тибеп ҡасҡан Толпар һәр берен.

Их ғүмеркәй, зая үтәһеңкәй!..
Йүгәнкәйе бар ҙа — аты юҡ.
Ат булмағас, Парнас тауҙарына
“Парить итергә” лә хаҡы юҡ.

Табыналар, йүгән шалтыратып,
Һары таңдан Парнас тауына.
Тик аяныс — Толпар ҡанаттары
Йүгәнһеҙҙе һайлап ҡағына...

29.12.1996.

## 1997

***************************

### Рәмиҙе юҡһыныу

Туҡһан етенсе йыл, алтынсының
Һуңғы төнөн һүреп, яҡынлай.
Ҡыш бабайҙы түгел — һине көтәм,
Инерһең, тип, ишек шаҡымай.

Урыҫ танау, мужик маңлайыңды
Бөҙрә сәсең көләс килтерер.
Ярты табан ҡыйыш түфлиҙәрең
Ишек төпкәйендә сиселер.

“Ни хәл, Йыһат ҡарт?!” — тип өндәшеүең
(Ул саҡ әле йәп-йәш булһаҡ та!)
Һәм көлөүең тамаҡ ҡырып ҡына —
Тора зыңлап һаман ҡолаҡта.

“Сәй ҡуяйым”, — тиер хужабикә,
Илем итәғәте бойороп.
“Сәй эскән бар ҙа ул, Сания...” — тип,
Саҡ ҡына көрһөнөп ҡуйырһың...

Етешмәгән донъя хөкөмөлөр —
Булмай ҡуя “мәй”е шул саҡта.
Ҡайғырмайбыҙ ләкин, һөйләр һүҙҙәр
Былай ҙа бит дөрләй усаҡта!

Донъя яратылған замандарҙан
Хәҙергегә тиклем араны
Ала ине иңләп беҙҙең күңел,
Ҡора ине йәндәр байрамын!

Үҙең кеүек тағы ҡорҙашыбыҙ
Ҡорҙашлана ине эс керһеҙ —
Сафа улы Сафин ул саф йөрәк,
Башҡа Сафичтарға биргеһеҙ!

Терәй кеүек инек беҙ асманды,
Өс тағандай ҡуша берегеп.
Күктең таяуҙары итеп беҙҙе
Тоя кеүек ине Ер үҙе...

Шуғалыр шул, ауыр заманала
Ауырһынмай ғына йәшәнек.
Алға табан сәнскәкле юлды
Йәшлегебеҙ менән түшәнек.

Кителдең тик ҡорҙан йәш көйөңсә,
Бөтмәйенсә йотоп “мәй”еңде.
Ҡышын — һине, көҙөн әсәйемде
Оҙатыуым алды йәнемде...

Төп-терәге күктең емерелеп,
Көмбәҙ гере баҫты иңемә.
Дүрт аяҡлап инде торам терәп,
Текә баҫып торор көйөмә...

Ҡуймайһың иң, килеп йәнәшәмә,
Инде миңә ни хәл итергә?
Яҡшы беләм: ахыры тура килер
Йәнәшәңә үҙем китергә.

1.01.1997.

## Аптырама

Сабырлығым сарпылыр был заманда,
Сабырлыҡтың сабырлығы булһаң да,
Шағирлыҡтан — ҡаныҡтың, тип, ғилемгә,
“Ғалим”дар, тип, һанай һине тилегә,
Янып-көйөп аҙмы инде йоттоң ут.
Утлы һулыш алдың ҡуша һәр минут...

Эт типкеһе типһә — ҡуша тибелеп,
Мисәүемдә барғас ҡуша егелеп,
Ҡыйындыр шул күтәреү, һай, ҡыйындыр!
“Академик”тарға ғына уйындыр
Мин тиленең ҡаңғырыуын күҙәтеү —
“Бред” — тиеп, — “Бер эт” — тиеп һүҙ әйтеү...

Көрһөнәһең: “Барҙы ниңә күрмәйҙәр?
Барлығыңа күрә нарыҡ бирмәйҙәр?
Һин бар икән тиеп тә бит белмәйҙәр...
Әллә инде... барлығыңды һөймәйҙәр?!.”

Аптырама түбәнлекле түбәнгә —
Табанына тиңде генә күргәнгә.
Аптыра һин — ниңә түбәм күктәрҙә,
Тетрәүҙәрен теҙем нисек күтәрә?!.

Төңөлгәндәр барлығымдан көр булыр,
Күкрәгенә күкрәгемдән нур тулыр.
Бәндәлектән сөнки бөгөн өҫтөнмөн —
Дәү Хоҙайым нурын һыҙған илсемен.

8.02.1997.

## 1999

**********************

### Башҡортостан — гөлөстан

Донъя яратылғандан уҡ,
Яралғанбыҙ был ерҙә.
Башҡортостан булып балҡыр
Башҡорт халҡы ғүмергә!

Эй Башҡортостан,
Гөл Башҡортостан!
Гел нур балҡытҡан
Нурлы гөлөстан!

Урал тауы — ҡорал тауы,
Ул изге мәғдәнебеҙ.
Ерҙе-Күкте күкрәтерлек
Ҡеүәткә әйләнербеҙ.

Эй Башҡортостан,
Гөл Башҡортостан!
Гел бергә-бергә
Беҙ бар булмыштан!

Яуҙар үтте, дауҙар үтте,
Сәскә атты гөлөстан.
Башҡортостанды данлайбыҙ
Бөтәбеҙ бер һулыштан.

Эй Башҡортостан,
Гөл Башҡортостан!
Гел бер ғаиләләй
Йәшәргә ҡушҡан!

Хәләл күкрәк көсө менән
Гөл итәбеҙ донъяны.
Беҙҙең кеүек егәрлеләр
Ерҙе нурға сорнаны.

Эй Башҡортостан,
Гөл Башҡортостан!
Беҙҙең туғанлыҡ
Ер шарын ҡосҡан!

16.03.1999.

## Тере ҡуҙҙы...

Тере ҡуҙҙы төрөп күмеүселәр,
“Онот”тортоусылар халыҡтан
Ҡыуанмаһын: ҡәбер төбөнән үк
Ҡуҙырармын -- ятып ялыҡмам!

Мин гел тере! Улар һимергәндә
Илгә илһам тиреп тилерҙем.
Ҡылыстары ҡында тутыҡҡанда
Ҡоросланып диуар емерҙем.

Башҡорт сабырлығын юйған ирҙәр
Уҡыһындар, ҡыҫып һулышын:
Донъя яратылған көндән алып
Башҡортлоғом -- булды булмышым!

Баш бирмәй, тип беҙҙе тарһынғандар
Биҙгә тарығандай ҡоторҙо.
Көслөләре менән үслеләре,
Күҫәк күсләп, яһил лаф орҙо.

Ә шулай ҙа шыраy-ҡәләмемде
Утҡа мансып сыйҙым асманға.
Баш тартманым баҙап баҙарымдан,
Сәсрәп-сәсрәп ҡаным сыҡҡанда.

Ялағайлыҡ ялмап намыҫ йөҙөн,
Ҡомағайлыҡ ҡапҡас ир һүҙен,
Күҙҙәренә тура төртөп әйттем,
Ҡалғанда ла ҡанап бер үҙем.

Шуға күрә иҙҙе беҙҙе түрә —
Түрәләрҙән ҡатты бәғерем.
Уралтауҙай өйгән игелегем
Имгәтмәне донъям йәберен.

Ҡыл иләктән ҡырҡып үткәрҙеләр
Иләүселәр илсән шиғырҙы.
Тыуалмайса ҡатҡан сабыйҙарҙай,
Йөрәгемә күмдем көр йырҙы.

Башҡортлоғом башйорт тупһаһында
Тибелгәндә маңҡорт-миңрәүҙән,
Көс алдым гел тәрән тамырымдан,
Башҡортлоғом еңеп биләүҙән!

Ҡанлы империя төрмәһендә
Тыпырсынып кәрем яталыр.
Йәштәштәрем йәнен һатҡан заман,
Ҡәберташтай, йәнде баҫалыр.

Саңҡый рухым әммә сағылдарҙа —
Сағылланыр унан саф ирҙәр.
Тере ҡуҙҙы төрөп күмгәндәрҙән
Саң да ҡалмаҫ – һуңлап белерҙәр.

18.06.1999.

## Байҙар байый

Байҙар байый, ярлы ярлылана.
Ә мин иһә һаман бер көйө.
Ҡәләм менән ҡағыҙ — бар байлығым
Һәм илемдең шөңгөр йыр-көйө.

Һигеҙ имсәк иммеш яһилйәндәр
Һауа-һауа илдең һыйырын!
Һөттөң өҫтө — уҫлап ауыҙында.
Ҡалғандарға — шыйыҡ-шыйырым...

“Тигеҙ ине теге заман”, — тиеп
Теҙергә лә телем көрмәлә.
Пайка ғына байҡап тигеҙләндек
Милләттәрҙе төргән төрмәлә.

Урыҫ урҙаһының уртаһында,
Мыйыҡ бороп, дәжжал ил көттө.
Ураҡ менән Сүкеш айҡалышы

Быуындарҙы беҙҙең һиңкетте.

Эйе, булды заман кемгә — таман,
Кемгә — тамам типте туҡмағы.
“Азат” көйө — йәнем азатлыҡҡа,
Тәнем тиңлелекҡә туйманы.

Ураҡ-Сүкеш сөйөп, “Атам” тиеп
Ҡотланы ил Иосиф-ҡорбашын.
Барлы-юҡлы, аслы-туҡлы тулап
Тулаҡ булды Рәми ҡорҙашым...

“Ҡыҙыл ахун” — ҡылыс таҡмай ҙа “ҡон”, —
Ҡырҡты, ҡырҡты ҡорҙоң ҡарыуын.
Тиҫтәләгән тилбер ҡорҙаштарым
Ауҙы аҙап -- Ураҡ урыуы...

Сүкеш сүкеп, сүкте “хөр тигеҙлек”...
Теҙләндерҙе көндө “игелек”...
Ә шулай ҙа, һабан үгеҙҙәрҙәй,
Тарттыҡ, тарттыҡ илде, егелеп...

...Хәҙер инде Ҡушбаш-Ҡоҙғон еңде,
Ураҡ-Сүкеш — саңда болара.
Ҡыҙыл ҡыҙамыҡтың башын ашап,
Ала-ҡола киҙеү ҡомара.

Ихтилалсы “ҡыҙыл” атайҙарҙың
“Их!” хыялы ҡалды көлкөгә.
Ҡуянланды ҡыйыу бәһлеүәндәр,
Әүерелде айыу төлкөгә.

“Яңы урыҫтар”ы ҡурыстарҙы
Минең тәндән телеп һыҙыра.
Урыҫ урҙаһының уртаһында
Сәс һыпырып шайтан ултыра.

Урайының Ураҡ-Сүкешен тик
Алмаштырған Ҡушбаш-Ҡоҙғонға.
Яңы күрмештәрҙе теҙһәк әгәр,
Һуҙылыр, тим, ядкәр оҙонға...

Көллөбөҙҙө, урмай-сүкемәйсә,
Ҡушбаш-Ҡоҙғон хәтәр тигеҙләй.

Бөрөп алып төрөп һалыр өсөн,
Заманаса гүр -- “люкс” әҙерләй...

Кәфенлеккә, ана, аҡ ҡағыҙым,
Гүр ташына — осло ҡәләмем.
Ҡушбаш-Ҡоҙғон, ҡунып ҡәләмемә,
Яҙҙыртмаҡсы ясин-сәләмен...

19.06.1999.

## Ике меңенсе йыл

Ике меңенсе йыл йыша Ерҙе,
Тыуғандан һуң Ғайса пәйғәмбәр.
Быуат ахырында, ахыр юрап,
Тараланар төрлө ғәйбәттәр.

“Башҡорт бөтә!” — тиеп лаф орғандар
“Урыҫ бөтә!..” — тиеп яр һала.
Урыҫ бөткәс, тимәк, донъя бөтә —
Шундай шөбһәләр ҙә ярала...

Эй дәүерҙең шомло шыбағаһы! —
Кем ғүмерен икән ул һанай?
“Мең йәшәгән халыҡ үлә”, — тиеп
Үртәүселәр ҙә бар бер талай.

Урыҫҡа был, бәлки, урынлылыр —
Еткән, имеш, уның мең йәше.
Ә башҡортҡа нисә мең йәш икән? —
Ерҙең, Күктең бит ул тиңдәше!

Ғайса пәйғәмбәргә ике мең йыл...
Ә нисә мең Урал, Шүлгәнгә?
Шүлгән — әсәй, Урал атай булып
Башҡорт халҡын табып биргәнгә?!.

Күккә ашҡан Ғайса — бөгөн ҡайҙа?..
Урал, Шүлгән — әммә эргәлә:
Ай — Уралым, Көн — Шүлгәнем көн-төн
Ер тирәләй нурға тирбәлә.

Ваҡыт, Арауыҡтың мәңгелеге

Билдәләй тик улар ғүмерен.
Улар ғүмеренең бәҫе башҡорт
Ҡиәмәттең көтмәй килерен.

Ике мең йыл — ялдан бер бөртөк ҡыл.
Ялһыҙ ҡалмаҫ Ғаләм толпары.
Ғаләм толпарында елгән егет
Ҡамсы һелтәп ҡуйыр ни бары.

22.06.1999.

## Ҡыу уҫаҡ

(Замана анчары М.К.)

“Имән мин!” — ти был уҫаҡ-иманһыҙ,
Тамырланып илем түренә.
Ҡатҡан тармаҡтары — салғы бары,
Тирә яғын сабып үргенә.

Салыналар яһил салғыһынан
Баш ҡалҡытҡан имән-туйралар.
Уҫаҡ уҫмағынан һынған билдәр
Ерҙең шыраууылай торалар.

Һуғыла ла елдәр ҡыу уҫаҡҡа,
Ялап ҡоҫа мәйет ағыуын.
Салғы иһә һаман билдәр киҫә —
Беләә, белә кемде сабыуын!

Өкө менән күке — ҡорҙаштары,
Моңдаштары салғы туйында.
Күке күкшәп әжәл саҡырғанда
Өкө емтек емшәп туйына.

“Иман мин!” — тип янай яһил уҫаҡ,
Имәнлектең ҡырып иманын.
Шат шаулашҡан шайтан таяҡтары
Имәнеләй ҡалҡа донъяның.

Туйраларҙан ҡала ҡоро төптәр...
Ҡыу яланда сәмүм ҡотора.
Уҫаҡ үҙе ҡырған туйралыҡта
Ҡәбер ташы һымаҡ ултыра,

“Имән мин!” – тип һаман ҡотора...

22.06.1999.

## Барҡылдаҡ

Барҡылдаҡтың баҡтым батырлығын
Ҡайынлыҡтың ҡыҫыҡ юлында.
Балаларын ҡурсап, уҡ шикелле
Атылды ул миңә олондан.

Күрҙем уның йәнә һайыҫҡандан
Оя һаҡлап һауа ярғанын:
Муттың муйын йөнөн пыр-туҙҙырып,
Зәңгәр күктә суҡып барғанын...

Шунан бирле шул ҡош шомлай мине —
Баш осома бағып һағаям.
Ботаҡ һындырғандай барҡылдауын
Ишетеүҙән ситкә янтаям...

...Оя ҡорҙо бына көтмәгәндә
Мунсам һыулығына барҡылдаҡ.
Баҡсамда ул мине, ҡалайәнде,
Ҡаршылаңы хәтәр барҡылдап.

Имән иңенән дау ҡора береһе,
Икенсеһе — шып-шым ояла.
Бер ҡымшанһам, сатнап төшөр төҫлө
Бөтә донъя — хас та быяла...

Мин күрмәйем, һеҙ ҙә күрмәгеҙ, тип,
Утлы ҡуҙға баҫып йөрөйөм.
Балаларын ғына сығарһындар,
Осорһондар, тиеп теләйем.

Тик шунан һуң ситкә шыуҙырырмын
Хәтәрйәндең хәтәр ояһын.
Хәтәр урындарға урынлашып,
Хәтеремде һүреп ҡуймаһын!..

Киттем ҡайтып...
Килдем...

Аһ, ни күрәм?! —
Оя аунай ерҙә, өлтөрәп.
Мунсам һыулығында, мут яланып,
Ата бесәй эшен бөтөрә...

Алмаш-тилмәш баҫҡан барҡылдаҡтың
Икеһе тиң булған зым-зыя.
Әллә инде, барҡылдамай, тимме,
Үрҙән генә улар йәш ҡоя...

Үҙемде лә өнһөҙ барҡылдаҡҡа
Оҡшатыуҙан йәнем сатнаны.
Аҙмы булды минең моң-улдарым —
Күкрәгемдән күкрәп сыҡманы!..

Тыуҙыртмайса быуған "ата бесәй"
Үҙемде үк яҫҡап ялана.
Барҡылдатмай ғына быуыр өсөн,
Ата бесәйләнде замана...

22.06.1999.

## Байрамсылар

(Буранбайҙан, буғай)

Байрамсылар байрам итәләр,
Баш ҡаланан һайрап китәләр.
Баштар — батша, телдәр — тутыйғош,
Мәркәз мәртәбәһен илтәләр.

Байрамсылар байрам итәләр,
Байраҡтарын киреп үтәләр.
Байрамсылап барған бар ерҙә
Ашлы ҡаҙан аҫып көтәләр.

Байрамсылар байрам итәләр,
Байрамдарҙан тейек теңкәләр...
Ә еңгәләр ҡымыҙ бешәләр,
Ҡыңғыраулы ҡашмау тегәләр...

Байрамсылар байрам итәләр,
Барған ерҙә һайрап китәләр.
Тутыйғоштар кеүек тутылдап,
Аҡһаҡалдар тәбрик әйтәләр.

Байрамсылар байрам итәләр,
Ҡайырылып ҡуйған тәртәләр.
Ҡараусыһыҙ ҡалған аттарҙың
Ҡараштары күҙгә төртәләр.

Байрамсылар байрам итәләр,
Саң туҙҙырып бейеп китәләр.
Бағыусыһыҙ биҙгән балалар
Ҡатҡан һыныҡ һыртын китәләр.

Байрамсылар байрам итәләр,
Байлыҡ бөтһә, ҡайҙан көтәләр?
Ағай-эне һәрмәп ҡараһа,
Шомторайып шиңгән кеҫәләр...

Байрамсылар байрам итәләр,
Ҡаҙан төбөн ҡыра еңгәләр.
Ҡаҫмаҡтарын ҡағып арбаға,
Ағайҙарым аттар егәләр.

Байрамсылар байып ҡайталар,
Байраҡтарын ҡайып ҡайталар.
Ҡалғандары, тамаҡ ялғарға,
Елек юллап һөйәк ваталар...

22.06.1999.

## Йәншишмәм

Шылтырап та аҡкан шөңгөр шишмәм
Бүҫкәрәлер ямғыр яумаһа.
Сыңғырлап та сыҡкан йөрәк йырым
Өҙөләлер илһам булмаһа.

Ҡайҙан яуһын ямғыр, Хоҙай үҙе
Болоттарын баплап һаумағас?
Ниҙән тыуһын илһам, ил ағаһы
Көндәреңде көйләп баҡмағас?

Ҡоролоҡтан ерҙәр ярылғанда
Шишмәләрҙән инде ни ҡалһын?
Ҡырыҫлыҡтан ирҙәр ҡырылғанда

Килһен икән ҡайҙан илһамың?

Шеш өҫтөнә, шишмә баштарымды
Ҡатҡаҡлатып сусҡа тапаны...
Сыңғырлап та сығыр йөрәк йырым
Илаһынан илһам тапманы...

22.06.1999.

## Ике флаг

Там царь Кащей над златом чахнет;
Там русский дух... там Русью пахнет!
**А.С. Пушкин**

Ала флаг, ҡола флаг
Ҡушарланып елберләй.
Бере ала — бере һала,
Һалмағанды ел әрләй.

Әрләнеүҙән биҙәр ҡола
Һалып бирә һуңғыһын.
Ҡола ялан һымаҡ ҡалып,
Төҫө нисек уңмаһын?

Ала иһә сағыулана,
Һалған һайын ҡолаһы.
Эстән янып яһиллана:
“Төҫө төләп ҡолаһын!

Ул ҡолаһа, үҙем генә
Алырмын бар көн төҫөн!
Ҡола бит ул енле бала —
Өнәмәйем ен еҫен!..”

Ике флаг ҡуша баға,
Ҡанаттарын ел ҡаға.
Ер һәм Күкте бүлгән упҡын
Кереп ятҡан уртаға.

22.06.1999.

## Мәҙхиә

Шағирҙарҙың, шәйәт, шәп һөнәре —
Түрәләргә тиреү мәҙхиә.
Ярышышып бере-береһенән,
Лакейҙарса улар баш эйә.

Ҡандарында — һөмһөҙ усын ялау,
Артын һөртөү, атын туғарыу.
Шағирлыктың “күрке” булып йөрөй
Мөсһөҙ йәндән мөгөҙ сығарыу.

Ғорур һынын текә теккән килеш
Ҡалды бары Рәшит Ниғмәти
(Сәсен алдыртҡанда: “Башымды мин
Парикмахерға тик эйәм!” — ти).

Аҙауһыҙҙан аҙмыш аҙаштары
Аҙғындарға мызлай мәҙхиә.
Урал тауынан да бейегәйтеп,
Мәҙхиәнән улар бәҫ өйә.

Бәҫ биленә баҫмыш түрәләрҙән
Әжер-мәжер түбән тәгәрләй.
Бүләкләнгән шағир — мүкләкләнгән:
Һөҙә алмай — һөҙләк ебәрмәй...

Эй һөҙмәйсә генә һөҙләкләләр! —
Һөҙләк эсеп, күпсеп-йөҙөгөҙ.
Һөҙләксөгөҙ менән бергә һеҙер
Мәҙхиәгеҙ һәм дә үҙегеҙ!

22.06.1999.

## Шайморатов генерал

Тынғы бирмәй килә тыумышымдан
Шайморатов — шанлы генерал.
Уның менән мәңге рифмалашҡан
Ҡадир Даян ҡойған “киң Урал”.

Киң Уралын донъя тарлығында
Таянысы итеп талпынған.

Ҡылысын ул сынлап-сыныҡтырған
Урал тауы өргән ялҡындан.

Инглиз, француз, ҡытай телдәрендә
Һыу эскәндәй иркен һөйләшеп,
Әүерелмәйенсә әүермәнгә,
Йөрәгендә һөйгән милләтен.

Төркиәлә, Ҡытай ҡитғаһында
Баянын ул йөкмәп йөрөткән.
Туңып барған бәғер яраларын
"Урал" моңон көйләп иреткән.

Кремлдең полк командиры —
Мәскәү һаҡлап киткән фронтҡа.
Доваторҙың атлы корпусында
Дошман ҡырып кергән гел утҡа.

Башҡорт атлылары ҡашҡаһында
Башҡортлоғон тапҡан, ниһәйәт.
"Олатай"ын данлы дивизия
Ололаған яуҙа бик һәйбәт:

Фашистарҙың ҡырҡып тамырҙарын,
Башҡортлоғон башҡорт башҡарған.
Уралының урғыл үртен сағып,
Шайморатов шанын атҡарған.

Яна-яна яҡшы аңлағандыр:
Батыр йәне яна гел утта.
"Беҙ Салауат тоҡомдары!" — тиеп
Оранлаған һуңғы минутта.

22.06.1999.

## Нәшриәт — мәхшәриәт

Китап нәшриәте тупһаһында
Игелегем ята тапалып.
Игелекһеҙләнгән был донъяла
Игелекһеҙ йөрөй маҡталып.

Китаплатып сүп-сар сығаралар —

Үҙ сүптәре сөнки ҡәҙерле.
Йөрәгемде тибеп киткән һайын,
Мәкерҙәре телә бәғерҙе.

Башҡортомдоң баш ҡор тәүәрихен
Өс тиҫтә йыл эстәп-юлланым.
Донъя яралғандан килгән башҡорт
Белһен үҙен, тиеп уйланым.

Белдертмәйҙәр ләкин, белдертмәйҙәр...
Хәтәр хәлдә "Хәтерхитаб"ым.
Хәтерҙәрен юйған йүнһеҙҙәргә
Әйтәйем һуң, йүнләп, ни тағын?..

Һеҙ типкәнде типмәҫ тыуасаҡтар —
Күтәреп үк уны алырҙар.
Баш йортомдан сөнки мәңгелеккә
Минең аша үркей тамырҙар.

23.06.1999.

## Быума быуат

*Б.Н.Е.*

Быума быуат быуа донъяларҙы,
Уртаһында алйый Әрәсәй.
Алйыулыҡтан алйотланмыш илдә
Ер ҡыртышы яна, ир сәсәй.

Аҫта аҡһай Аҡыл, Аң, Намыҫ, Ғәр —
Өҫкә ҡарпый ҡараҡ, ялған-мут.
Ҡушбаш-Ҡоҙғон ҡунған ҡәлғәһенән
Эш бойора йүнһеҙ-баламут.

Баламуттың — һеҙ, ти, балалары, —
Ҡаға-һуға "һыйлай" ил халҡын:
Эҫҫергәнгә эҫе һыу һемертә,
Өшөгәнгә өҫтәй боҙ һалҡын.

Мутлығы ла ихлас баламутса —
Салғый ҡырҡып ямай салбарын.
Эшләтә лә, "кисен тешләтәм" тип,
Төнәтергә һала ас ҡарын...

Йортон ташлап ҡаса йораттары
Кордон аша — бына тамаша!..
Урыҫтан күп заман таланғандар
Урыҫ малын талап талаша.

Сүп хаҡына ҡалды (э)рубле,
Акциялар ауа упҡынға.
Кисә хәйер һорап килгән төрөк
Бөгөн беҙҙе төрөп һоғона.

Инглиз, француз, немец осаларын
Ялап ята, шыңшып, Әрәсәй.
Баламуттар иле мутлығынан,
Тиҫкәреһен тиреп, Ер сәсәй.

Тиҫкәрегә мәллә Ер әйләнә?..
Күге ләме күсте кирегә?!.
Ямғыр көтһәң — көпләп ҡар яуҙыра,
Ҡармы, тиһәң, ҡором ерегә...

Заводтарҙың ағыу ағымдарын
Алйығансы эсеп, һулайбыҙ.
Бахырйәндәр ҡылып баҡыртырға
Үҙебеҙ шул шундай ҡулайбыҙ...

Иген дә юҡ, малдан килем дә юҡ.
Эшсе — эшһеҙ, малсы — ырыҫһыҙ.
Торба тулып күскән ер майҙарын
Яһил ялмай мылтыҡ-ҡылысһыҙ, —

Бур-баламут, ҡараҡ-ҡарамуттар
Кәсебе был!.. — нәҫеле ҡороғоро!
Бер тин ҡуян — ун тин зыян булып
Ҡайта ғына илгә ҡоһоро.

Быума быуат быуған мут мәмләкәт
Бурһып ята ерҙең йөҙөндә.
Баламутлыҡ башҡа менгән өсөн
Башы барҙың ғәйеп үҙендә.

13.07.1999.

## Нурлы карап

*Рафаэль Сафин ҡорҙашҡа*

Хәтереңдә микән, Рафаэль дуҫ,
Өскөлләнгән осор — өс таған?
Аҡ күңелең кеүек яҡты бүлмәң
Хәтеремдә минең ныҡ ҡалған:

Коммунистик урам мөйөшөнән
Алға ашҡан ҡыры, ослайып, —
Фатирың бит дауыл яра ине
Хәрби карап кеүек мусланып!

Күренгәндер миңә, бәлки, шулай —
Хәрби моряк булған һантыйға.
Аҡ карапта йөҙгән, — их! — ул төндәр,
Күңелдәрҙе мансып яҡтыға!

Гиҙҙек өсәү нурлы карабыңда —
Рәми, Йыһат һәм һин, Рафаэль.
Беректерҙе беҙҙе әллә шатлыҡ,
Әллә хаҡлыҡ, әллә яфа гел?..

Гармуныңды тартып ебәрәһең
Йән һыҡтаған оҙон ғәмдәргә.
Күкрәгеңде телгән "Ҡолой кантон"
Килеп керә беҙҙең йәндәргә:

"Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй тигән яуыз батшалыҡ"...

Карабыбыҙ бара моңға тулап,
Моң һемереп беҙҙең йән ҡана.
Күҙҙәрҙән йәш беҙҙең тамған мәлдә
Ҡурайҙарҙан мәллә ҡан тама?..

Их Рафаэль! Изге-моңло төндәр!
Текә торған тура, ныҡ һының!
Рәми менән мине иҫәрләтеп
Төндәр буйы шиғыр уҡының.

Лермонтовты, Блок, Есенинды
Һинең аша астым яңынан.
Дөрөҫ булыр әгәр, сыҡтым, тиһәм,
Рафаэль һәм Рәми янынан.

Һабан һөрөп күнгән ерекмәнде
Алдығыҙ шул шиғри дуҫлыҡҡа.
Ауыр заманамда һеҙ булғанға
Ҡоламаным ҡола-бушлыҡҡа.

Ҡолар саҡта сөнки ике яҡтан
Ике дуҫтың тотто яурыны.
Шиғырыма һеҙ күрһәткән һаҡлыҡ
Хаҡлыҡ булып бик йыш яңраны.

Таң атҡансы уҡып сығыуығыҙ
Повесымды, проза булһа ла!..
Икәүләшеп иртән "Ағиҙел"гә
Илтеүегеҙ! — Бына был далан!

Даланлы мин һеҙҙең далан менән,
Ике дуҫым, ике ҡорҙашым.
Рафаэль дуҫ, нурлы карабыңда
Нурға сумды әлдә юл башым.

22.07.1999.

## Агиш Ғирфановты ерләшеп ҡайтҡас

Уф Алла, эй, уф Алла,
Ҡалмаһамсы Уфала!
Ҡайтып тыуған илкәйемә
Йығылһамсы, уф Алла!
Тупрағыма тупраҡ булып
Ҡойолһамсы, уф Алла!
Ҡалмаһамсы Уфала!..
Уф Алла...

10.11.1999.

## 2001

*****************



### Үҙем

Тыуҙым Сәнкем-Биктимерҙә,
Һунарсыла йәшәнем.
Икеһен дә тыуған иттем,
Икеһендә йәшнәнем.

Үҙем һөрҙөм, үҙем сәстем,
Үҙем урҙым игенен.
Үҙем һөрләгөп йығылдым,
Үҙем торҙом тибенеп.

Ата-баба аҡыҡтарын
Имдем аҡлы әсәнән.
Йотоп донъя ваҡлыҡтарын,
Шуға күрә сәсәмәм!

Оҙон булды сыбыртҡыһы
Сыбыртҡылы урамдың.
Муйыныма уралтманым,
Муйынына ураным!

Ураным да йыҡтым тартып,
Тимер йәнен һындырып.

Бөгәрләй алманы мине,
Суҡындырып, төңдөрөп.

Суҡыһа ла суҡынманым --
Бар соҡолмаҫ иманым!
Бабаларҙың тупрағынан,
Һыҡрауынан туйманым!

Тетрәүләтеп һыҡрауҙарын,
Тупрағын гөл итермен.
Иманымдың манараһын
Ергә ҡаҙап китермен.

09.01.2001.

## Ҡалтыр-ҡолтор

*Мөнәжәтсе Т.Й.*

Батырлығы ҡалтыр-ҡолтор –
Шалтырай ҙа ҡалтырай.
Май ашаған бесәй кеүек,
Ике күҙе ялтырай.

Ҡиәфәте кәлтер-көлтөр –
Шайтан ялап шымартҡан.
Сылғауынан салып салма,
Тәһәрәтен яңыртҡан.

Йөрөй иблес иләүенә,
Ҡорһаҡ көҫәп, намаҙға.
Хоҙай ҡушмағанды ҡушып
Иблес ибен ярарға.

Иплеләрҙән ипле булып,
Ипле генә ҡылана.
"Телем!" – тиһә, телде һата,
"Илем!" – тиһә, ил яна...

Ике күҙе ялтыр ҙа ул,
Йөҙө ҡара, өмөтһөҙ.
Сират күперенән биҙеп,
Ҡалтырана өҙлөкһөҙ...

09 – 10.01.2001.

## Яҙмышым

Йөҙөн генә йәшәрмен дә,
Ике йөҙөн йәшәмәм.
Күҙөн генә күҙәрмен дә,
Яҙын ғына йәшнәмәм.

Яҙғы йәшел ужымдарҙы
Урыр йәнем ҡырауы.
Ерҙең йәмен йөрәкһетер
Уйҙарымдың урауы.

Һыуға батҡан балталанып,
Былтырҙарға батырмын.
Йәйғор кеүек алҡаланып,
Эңерҙәрҙә балҡырмын.

Мине тапмаҡ әсәләрҙең
Тупаҡланыр табаһы.
Тыуыр минән минлерәктәр,
Тыумаç миндәй маҙаһыҙ.

Минең һымаҡ уйламаç та
Минең һымаҡ иламаç.
Туйламаған туйҙарымды
Минһеҙ бер кем туйламаç.

Был донъяның үҙәгендә
Үҙем булып ҡайнаным.
Донъя үҙе булһын өсөн,
Үҙлегемде һайланым.

10.01.2001.

## Еүешлек

*В.В.П.*

Һаҙматлата державаны
Державалы еүешлек.
“Держи вора-террориста!” –
Һөрән һала әүеçлек.

Әүеҫлеге әүәҫле лә,
Еүешлеге кеүәҫле.
Ҡоҙғон ҡоштоң ҡуш башынан
Ала, тиҙәр, ҡеүәтте.

Һай, әүеҫлек, вай, әүеҫлек! –
Ҡоҙғон ҡунған башына!
“Ни эшләтәм? – Еүешләтәм!” –
Ти ҙә хәтәр шашына.

“Вор”ҙар инде “ворота”сы –
Ултырмайҙар төрмәлә.
Еүешләтер йә кешнәтер –
КобураҺы бөрмәлә.

Етә ҡулы – мин был юлы?!.
Мин есть, тимәк, террорист.
Ҡарамай ҙа милләтемә –
Түгел икән формалист.

Ҡоҙғон тышлы ҡатырғаҺын
Ҡаптыралыр карманға.
БулмаҺа шул карманында,
Тейәсәк, ти, дарманға.

Батша борон биргән, тиҙәр,
Беҙгә “кәзә билеты”н.
Кәзәләнмәй мукәйләҺәң,
Кейҙерткән, ти, жилетын.

Мукәйләмәй кәзәләнҺәң,
Киткән башың Себергә.
Хәҙер, Себер Һөрмәйсә үк,
Тотоналар кобурға.

УлтырҺаң да унитазда,
Еүешләтер кәлбеңдә.
Еүешлегең китер ағып,
Китер алып йәнеңде...

Һай, әүеҫлек, вай, әүеҫлек, --
Килә үрҙән еүешлек!
Ултырамын унитазда –

Бер пүләгә бер эшлек!..

10.01.2001.



## Ҡорҙаштар

"Сулпан Иманғолов вафат", --
ауыр хәбәр таралды...

Уңғандыр, тим, урып уңыш,
Ваҡыт-бабай – мосафир:
Бер Уралда, бер үк йылда
Тыуған ҡасан ун шағир?!

Уңғандыр ҙа Ваҡыт-бабай,
Уңдыҡ микән беҙ – унау?
Тыуғанда уҡ туңға баҫтыҡ,
Ҡанап китте ун танау...

Һынауҙарҙың һынауҙары
Аҫҡа беҙҙе этәрҙе.
Бүкәндәй тик күрҙек ерҙе,
Үңнектәй тик – күктәрҙе...

Бармаҡтар ҙа түгел тигеҙ,
Беҙ ҙә тигеҙ булманыҡ.
Ҡулын илдең бармаҡланыҡ
Бармаҡтарын ҡулланыҡ.

Йырылмаған йыр булдыҡ та
Ҡурсалмаған ҡор булдыҡ.
Ил йөрәге булып типтек,
Берәм-берәм ярылдыҡ...

Ун бармаҡтай инек унау,
Ҡалдыҡ дүртәү – нишләргә?
Кәмей-кәмей көшөлөбөҙ,
Көйөшсөбөҙ көйшәүҙән...

Сулпан, Әнүр, Рәми, Рәмил,
Шакир, Ким – беҙ йылғылар,
Күҙ алдында күкрәп-тетрәп,
Әллә ҡайҙа булдылар.

Көйшәмәй үк йотто ғына
Әллә ҡомһоҙ баяғы?
Китте микән, ҡалды микән
Ҡоробоҙҙоң ҡаймағы?

Ҡәҙерҙәрен белмәгәндәр –
Йәберҙәрен белмәҫтәр.
Моңһоҙ ҡалып үлмәгәндәр –
Моңло ҡорһоҙ үлмәҫтәр...

Һыңар ҡулда дүрт бармаҡтай
Торабыҙ ҙай, тырпайып.
Беҙҙәр китһәк, эйәрләр кем
Ерҙең йырлы толпарын?

Төйһөн әле, түҙһен әле
Беҙҙе һөйгән яфа-ел.
Фәрит, Илшат йөрөһөн шат
Һәм дә Йыһат, Рафаэль!

Төңөлмәҫтер көйшәүенән,
Ә шулай ҙа, көйөшсө...
Ә шулай ҙа Һаҙағайға
Һыҙҙыҡ балҡыу өлөштө!

10.01.2001.

## Арба

*Тагы ла шул Б.Н.Е.*

“Ултырһаң кем арбаһына –
Йырын шуның йырларһың”...
Ултыртып, һай, мурт күсәргә,

Яҙмыш, илде хурланың...

Төбө тишек ҡуҙлаһының,
Тәгәрмәсе шығырлай.
Арбасыһы, арбаймын, тип,
Ҡотһоҙ-ботһоҙ йыр йырлай.

Ректәндер тәртәләре,
Сөрөктәндер сәкүшкә.
Аты ла бит – артын алға
Егелгәндер “шәп эш”кә...

Арбасымдыр үрәсәлә,
Шешәләре – мөшкәлә.
Асһа тешләп, тығындары
Төшә минең тешкә лә...

Сиртеп серек дилбегәһен,
Төртөп селек, ҡыуалай.
Лыс арҡаһы “лошадка”ның
Бөгөләлер дуғалай.

Бармай алға (баҡҡан артҡа!),
Башын бәреп тартһа ла...
Арба арбағыстың тыны
Тейеп, тыным тарҡала...

Ҡубыр инем, ҡул тышаулы,
Ике ботом кешәнле.
Үрәсәнән үрәпсетә
Үҙе эскән шешәне.

“Боже, царя храни!” – тип,
Йырын йырлап ебәрә.
“Ниңә йырламайһың?!” – тиеп,
Шешә менән тибәрә.

Шешенәмен, өшөнәмен,
Дарманым юҡ йырларға.
Әйләнмәгән тәгәрмәсен
Әйләндертеп, тир аға.

Ыуы ығып мөшкәһенән,
Һулышымды томалай.

Өнһөҙ “лошадка”мын үҙем, --
Бөгөләмен дуғалай...

11.01.2001.

## Серем минең

Их һин, елһеҙ елкеткесем,
Иренкәйең миңле йән!
Көндәштәрҙән көнләшмәҫтән,
Өндәшмәҫтән мин һөйәм!

Һиҙмәйһеңдер, белмәйһеңдер, --
Үҙем дә мин белмәйем:
Сыңрағанда саф көлөүең,
Көлә көнөм мөләйем.

Күгәрсендәй гөлдөр-гөлдөр –
Күкрәгеңдән тауышың.
Нурлы йөҙөң, шоморт күҙең –
Көнөм, төнөм ҡауышыу...

Ә шулай ҙа мин был айҙа
Төштәремде һөйләмәм.
Уларҙы бит һиңә күптән
Таң елдәре көйләгән.

Таңды һөйөп, йәрем, тиеп,
Яҙғанһыңдыр дәфтәргә.
Мине күптән көҙөм үпкән,
Көҫәп һуңғы сәфәргә...

Һағышылыр һуңлауымдың –
Һуңлап һине һағыныу.
Хуш бул серем, һутлы ирен!
Моңло миңгә табыныу!

Йырлы сере ядкәреңдең
Төштәремә яҙылыр.
Серем минең – тилбер миңең –
Мәңгелектең наҙылыр.

11.01.2001.

### Алты

Йәнә берәү... Алтынсыбыҙ
Китә бөгөн баҡиға.
Гәзиттәрҙең биттәрендә --
Ҡара ҡайған ваҡиға.

Ни булды был эт ҡайышы-
Яҙыусылар халҡына?
Биҙеп ерҙән, йәнкәйҙәре
Асмандарға алҡына.

Тышауынан таш ҡаланың
Тайшаныуҙар шул микән?
Һәр йыл – алтау... Бер-бер артлы
Ташынаһы юл микән?..

Ҡайғы ҡайып, ҡаҡ ҡайыҡта
Ятып ҡына китәләр.
Тыуып үҫкән төйәктәре
Һуңғы юлын көтәләр.

"Сираттаһың", -- тиеп кемгә
Китеүселәр әйткәндәй?..
"Ҡайтырһың", тип, "ятырһың" тип
Туған тупраҡ көткәндәй?..

Көтмәҫтер тик мине генә –
Иләгәндәр илемде.
Сталиндар, Калининдар
Алған ялмап еремде.

Гөбөрнәләр гөрләткәндәр,
Ижад ҡылып картала.
Карталағы ҡар аҫтында
Яраланған яр тала...

Ят гөбөрнә гүрҙәрендә
Ята ата-бабалар.
"Башҡорт инек... Баш йорт инек..." –
Тиҙәр тауҙар, далалар.

Ҡайҙа ғына барайым да

Башым ҡайҙа бәрәйем?
Ер аҫтынан юлдар булһа,
Табыр инем бер яйын...

...Алтмышын да артылмаҫтан,
Алтаулашып үтәләр.
Етмешкәйен еткерһен, тип
Әллә кемде көтәләр...

***

Баш ҡаҙығы ҡалҡты егерме дүрт,
Ер үкһетеп, дүрт йыл эсендә.
Йыл да йолҡоп алты яҙыусыһын
Баҡилыҡҡа фани күсерә.

Ерем тоҙо бит ул һәр береһе, --
Иремәйме был тоҙ күберәк?!.
Яҙын китеп, көҙөн кемдәрегеҙ
Йөрөр икән киреп күкрәк?

Егерме дүрт ҡаҙыҡ ер иңендә --
Әҙәплеләрҙең баш ҡаҙығы.
Әҙәпһеҙҙәргә бит ҡала донъя, --
Бына ҡайҙа яҙмыш яҙығы...

12.01.2001.

## Өйөр

*Тагы Р.Б.*

Тел осонда торһа төйөр,
Тамаҡ төбө төйөлә.
Ил башында булһа өйөр,
Илдең биле бөгөлә.

Тешегәлер, тешләп телен,
Төйөрлөктөң эйәһе.
Түктерәлер йәшен илдең
Өйөрлөктөң бәләһе...

Өйөр-өйөр, төйөр-төйөр –
Иңебеҙҙә “түрә”лер.

Елкәбеҙҙе кимерәлер,
Һөлдәбеҙҙе һүрәлер.

Өйөрөлтөп, сөйөрөлтөп,
Йоталыр ил ҡаймағын.
Шыйыҡ һөттән миктәп әптән,
Алйыр иләү-аймағым.

Арыҫландар һарыҡланыр,
Һарыҡ – аҙыҡ бүрегә.
Ил башҡайын ашау еңел
Бүреләнгән өйөргә.

Суҡмар суҡлап һуғаһы ла
Түрҙән ине йығаһы!
Ил суҡмарын тибә кире
Һарыҡ-ярыҡ ҡынаһы...

Һарыҡ-ярыҡ илкәйемде
Булыр микән ҡотҡарып?
Бүрегә бит бирә үҙен
Аңраланған был һарыҡ.

Сукмарсыһын тапалайҙар,
Өйөр "ни"ен ялайҙар
(Яраулыҡта яралалыр
Һарыҡйән ялағайҙар!..).

Телкәйҙәре яллы-яллы,
Ялап-ялмап туйғыһыҙ.
Өнкәйҙәре баллы-баллы,
Балта сабып тыйғыһыҙ.

Салҡан ауып, мәҙхиәләр
Мәҙехләйҙәр өйөргә.
Ятып шыр һыу һемерәләр
Сыбыртҡыға бейергә.

Бейе-бейе! Ниңә мейе,
Әүерелгәс һеңергә?
Мут бүренең бүкҫәһендә
Һеңергә тәк – һеңергә!..

...Суҡмарсыһын суҡмарлайҙар,

Өйөр “ни”ен ялайҙар.
Ярыҡ-һарыҡ итә илде
Һарыҡйән ялағайҙар...

13.01.2001.

## Өшәләктә өшәнеү

Өшәләктәй генә бүлмәбеҙҙә
Өйҙәш булып йәшәү, ҡыҫылып.
Сысҡан тәпеһеләй таш ситлектән
Сығармайса тота юҡсыллыҡ.

“Тәпе” тиһәм, телем ҡорор кеүек:
“Унынһы ла юҡ”, -- тир “бомжа”лар.
Баштан ашып китте әммә-ләкин
Башҡайыма төшкән нужалар.

Бына өҫтәл. Китап шкафтары.
Шифоньер һәм ике урындыҡ.
Телевизорҙы ла, урын тапмай,
Шкаф түбәһенә һырылттыҡ.

Ятһаҡ-торһаҡ, өҫтәл ҡырыйына
Тубыҡ, терһәк сатнай, бәрелеп.
Зәңгәр экранына салҡайған баш
Төшөр төҫлө салҡан, ҡайырылып.

Урталыкта – диван беҙ икәүгә,
Дүрт тарафҡа төрткән мөйөшөн.
Хоҙай хатта үлем түшәгендә
Ҡауыш ҡылмаҡ беҙҙе (ни өсөн?!.).

Йән бирер ҙә шулай бер кейеҙҙә,
Йә -- мин, йә һин һыуып ҡатырбыҙ.
Үлмәйенсә оҙаҡ ятһаҡ аҙап,
Тамуҡтарын гүрһеҙ татырбыҙ...

“Бомжа”ларҙың тоноҡ күҙҙәрендә
Үсәү уты миңә йымылдай.
И ҡотһоҙ ил! – хатта шағирының
Урыны юҡ тыныс ҡунырҙай.

Айлап түгел, көнләп ваҡланамын, --
Энә күҙәүендәй ҙурлығым.
Күрһәтмәһен Хоҙай инсанына
Өйҙәш менән көндәш хурлығын.

Арып-талған арыҡ ат кеүекмен,
Ғәжәп түгел, төшһәм тырмаға.
Фатир булғанда лә буләрмәндәр
Һыйҙырҙылар ярты нормаға...

Китергәме сығып хәйерһеҙҙән,
Тотоп ҡулға хәйер муҡсайы?
Халҡым, бәлки, һөйөр ине мине,
Ҡулҡайында булһа муҫкайы...

Ыңғыраша бисәм... күрә төштәр...
Һаташыулы уның төштәре.
Ауылымдың алып һылыу ҡыҙын,
Ҡайһы көнгә ҡалды эштәре...

Һаташа ул һөйөп алмағасын, --
Сәскәләнеп көнгә йәйелгән.
Кинәнепкәй емеш биререндә
Балта саба төпкә яһил йән.

Тамырына әгәр сабылмаһа,
Сәскәлә үк киҫеп килемде,
Алмағастың ҡандай алмалары
Ҡыуандырыр ине илемде!

Ыңғыраша бисәм... Күпме улдар,
Ҡыҙҙар ҡалды унда быуылып...
Тыуыр өсөн генә яралғандар
Нужабыҙҙан китте ҡыуылып...

Ғәйепле мин! Тик мин! Эй Хоҙайым,
Кисерерһеңме был золомдо?
Ҡанһырайым, иҫләп ҡарында уҡ
Быуып үлтерелгән улымды.

Ҡанһырайым... Ғүмер юлыбыҙҙа
Аҡланмайса аҡты күпме ҡан.
Түҙем бирһен Хоҙай хәләлемә --
Йылмайыр ул, тороп, мотлаҡан.

Тартынмамын мин дә яҙмышымдан, --
Миңә оҡшағандар аҙмы бар!
Минең кеүек, тимен, президенттар
Өшәләктә шиғыр яҙһындар.

14.01.2001.

## Тырпайған

Тырпайған бер тырма теше булдым, --
Баш эймәһәм, башҡа һуғалар.
Һуҡҡан һайын һеңәм Ер шарына,
Бөгөлмәйсә әммә дуғалай.

Осом – инде Ерҙең йәҙрәһендә.
Сүкмәм, сүкеш сүкеп торһа ла.
“Әүерелә һынмаҫ күсәремә”, --
Ти бит Ерем минең турала!

Тырпайлығым төртөп күҙҙәренә,
Сүкештәрен сүкеп боларам.
Ғаләмдәрҙең сыйып йөҙҙәренә,
Ерем менән бейеп мин барам.

15.01.2001.

## Ҡыуаныс

*У.Н. Б.*

Ер шарының дөм-төн яғын
Яһил миңә инләгән.
Яҡты сатын сыратмаҫҡа
Сихырҙарын сөйләгән.

Интектерҙе, күшектерҙе
Һулышының һалҡыны.
Әммә-ләкин сатнаманы
Сабырлығым ҡалҡаны.

Өңөлһәм дә, төңөлмәнем,
Тойҙом Көндөң барлығын.

Доғам менән дағаланым
Ҡараңғылыҡ ярығын.

Ҡабул ҡылды Хоҙай үҙе
Аҡ нағышлы доғамды.
Күк ҡабағым асылды һәм
Төн ҡараһы юғалды.

Хоҙайымдың фәрештәһе
Һалды ҡулын иңемә.
Күрәм: Ғаләм йондоҙҙары
Ҡалҡаныма һибелә.

Уйнап-көлә Көнөм үҙе,
Маңлайымды уратып.
Кем был мине итте тиле,
Күңелемде сыңратып?!

Юҡ, фәрештә түгел, бәндә --
Хоҙайымдың илсеһе.
Үҙенә лә бирһен Хоҙай –
Үҙе миндәй йәлсеһен!

15.11.2001.

## Васыят һымағыраҡ

Иҫтәлектәр иҫләп маташмағыҙ, --
Булманым бит һеҙгә шешәләш.
Дуҫтарым да минең һирәк ине,
Минең менән булғас шелтәләш.

Шелтәләне беҙҙе хакимиәт –
Замананың ҡыҙыл шойҡаны.
Быуат боғаҙында төйөрләнде
Боғаҙҙарҙың беҙҙең шау ҡаны.

Бөгөнгөнөң һөмһөҙ-көслөләре
Көсәнгәндә сүлмәк өҫтөндә,
Улар киләсәге өсөн яндыҡ,
Сығармайса хатта төтөн дә!

Шуға күрә беҙҙе белмәнеләр

(Үлгәс кенә ҙурлап беләләр)...
Килер бер көн, сафлыҡ аңҡыр иркен,
Аңкауҙарҙан ҡубыр келәләр.

Һәм тултырып ауыҙ (боҫор яуыз),
Хаҡиҡәтте көйләр ер үҙе.
Ҡолаҡ сайырҙарын ярып керер
ЯрҺыуҙарҙың йыраҡ йор һүҙе.

Көйрәп ҡалған йөрәк ҡандарыбыҙ
Йөрәктәрҙе йырыр, һулҡылдап.
Беҙҙе тапап күмгән кемҺәләрҙең
Ейәндәрен емләр инҡилап.

Күкрәп-тетрәп иҫен йыйған ил-көн
Иҫләүҙәрен итмәҫ шешәлек.
Динозаврҙарын аҫкан кеүек,
Табыр әле беҙҙе кешелек.

15.11.2001.

# ҺУҢҒЫ ЙЫЛДАР ҺУЛЫШЫ

*********************************

## Үгәйлек

Рәсәй тигән үгәй әсәйҙең
Башҡортостан – үгәй балаһы.
Башҡорт кәрәк түгел үгәйгә,
Кәрәк ере, һыуы, һауаһы.

Башҡорт Йыһат кемгә кәрәкһен –
Үгәй Башҡортостан үгәйе?..
Үҙ балаһын үгәйһеткәнде
Һөҙөп йығыр күрше бүгәйе…

14.05.2014.

## Аттар китте…

Беҙҙең аттар китте, илай-илай,
Алыҫ һөргөндәргә – Ҡырымға.
Буранбайҙар Себер киткән кеүек,
Ҡарттарыбыҙ илай урамда.

Тәгәрмәсле төрмә – суйын-йөрмә,
Үҙәктәрҙе өҙөп тыҡырҙай.
Заман тәфтиләүе бара ҡармап –
Ҡылысмыйыҡ уҫал йылтырай.

Этаптарҙа, туҡмап, эт һуғарыу –
Йотоп булмай ят яҡ һыуҙарын.
Бейә менән айғыр, баш терәшеп,
Һағынып һыҡтай Һаҡмар буйҙарын:

«Ҡалды инде ебәк бүтәгәләр –
Ирендәрҙә ирер май һымаҡ.
Ҡырҡ икенсе йылда киткән аттар
Ҡайтмағандай, ҡалырбыҙ ҡолап…»

Буй еткермәй ҡалған ҡолондарҙың
Кешнәүҙәре көн-төн шаңғырыр.
Буранбайҙан һуңғы балаларҙай,
Эҙкәйҙәрен эҙләп ҡаңғырыр…

«Беҙҙе менгән, һауып эскән ирҙәр
Нисек түҙә, тормай ныҡ ҡаршы?!»
Ҡайҙа ғына бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы…

…Ҡырым тигән ҡырғын сиреүенең
Сирәмдәрен сирләп ҡабырҙар.
Башҡорт бейәләре елененән
Еңмешләнеп ҡан-йәш һауырҙар…

Буранбайҙы һөргөн ебәргәндәй
Йәберләнде илем йорттары.
Йөрәктәрҙе ярып кешнәүҙәрҙән
Зар илайҙар Урал һырттары.

29.05.2014.

## Берәү килә, берәү китә...

Берәү килә, берәү китә мәңге
Был донъяла. Инде ни кәрәк?
Тыуҙым микән әллә һуңлабыраҡ,
Әллә, бәлки, үтә иртәрәк?

Халҡым ҡанын ҡалдым әллә ҡамап,
Булдым әллә үҙем ҡанаҡкан?
Маңҡортлашҡан башҡорт араһында
Тыуҙырам, тип, башҡорт ҡабаттан?

«Ханлыҡ шағирҙары» шауҡымында
Хаҡлыҡ ҡаурап, ҡалдым бер үҙем.
Пустойҙары, Буҡмай-густойҙары
Ҡан һурғанда, данлап гүр йөҙөн.

«Рус түгелмен, ләкин урыҫйәнмен» --
Әйтмәҫ быны ысын бпшҡортом.
Йәғәфәрҙәр, Алдар, Зәкиҙәрҙе
Ҡурҡытмаған ҡырғын башҡырҡым!

Башҡортлоҡтан аҙып  маңкортлоҡҡа,
Ҡалтырайбыҙ ҡабыр ем өсөн.
Батырҙарҙың әҙер ояһында
Күкәй баҫа һатлыҡ енесем.

Бабичтарҙы, Мөхәмәтшаларҙы
Алмаштырып бер ус тәңкәгә,
Кинйә блат, төймә блаттары
Баш ҡортланып тейҙе теңкәгә.

Мортазаһы, илдең мурт ҡазаһы,
Башҡортлоғон борҙо башҡаға.
Йәнен йәлләп, кәмит хам-эттәрен
Әйләндерҙе башҡорт-ҡашҡаға.

Намыҫ шылды – ҡорһаҡ, аҡса ҡоло
Ҡоролтайҙар илде ҡороҡлай.
Башҡорт ҡанундарын ҡан-илатҡан
Енлекейек ҡанун турыҡлай…

Ә мин ҡайҙа? Әллә инде Айҙа?..
Айҙарҙарға ауыҙ ябылған.
Замананың заңы – намыҫһыҙлыҡ,
Ялағайлыҡ, тиеп табылған…

Халыҡ – һарыҡ… Арыҡ тәфтиләүен
Һайлаясаҡ, ҡылып ҡорбашы.
Мәктәптәрен, телен киҫеүсене
Һанаясаҡ илаһ-юлбашсы…

Ура! Ура! Ҡотлап ҡул сабайыҡ,
Ауылдар һәм аумал ҡалалар!
Урыҫ иргә сыҡһын беҙҙең ҡыҙҙар,
Иван булып тыуһын балалар!

Юл башында башҡорт тормағанда,
Булыр микән илгә көньяҡты?
Минең менән ҡатар тыуғандарҙы
Оялтмаймы ошо көн факты?!.
12.06.2014.

## Милләтһеҙ ғиләттәргә

Милләтеңдән еләп екһенмәгеҙ,
Башҡорт итеп әсәң тыуҙырғас.
Йә әсәңде, йә үҙеңде һатып
Ашау хисен Хоҙай ҡыуҙырғас.

Күпме генә ярамһаҡланмағыҙ,
Ярылырға етеп урталай,
Яртығыҙға ярлыҡаусың сыса,
Яртығыҙҙы ҡәберҡорт ялай.

Көсәнмәгеҙ, көслө кәсәһенән
Ялманырға тамсы һарҡытын,
Аллаһ Үҙе сүпкә сиртер һеҙҙе,
Осормаһын өсөн Ер ҡотон.

Донъя гражданы булмаҡ булыу –
Шайтандарға булыу олтораҡ.
«Башҡортмон!» тип бер ҡат үлеү яҡшы,
Йәшәгәнсе ҡырҡ ҡат ҡалтырап!

13.06.2014.

## Татарник

«Татар-монгол аты ҡойроғона
Йәбешкәкләп килгән был орлоҡ», --
Тип хәтерләй урыҫ былинаһы.
Башҡортто ла уйға һалырлыҡ.

Ул үҫемлек, тиҙәр, шәп үрсемлек,
Харабалар өҫтөн тиҙ ҡаплай.
Аҫабаның аҙһа нигеҙҙәре,
Ошо шайтан үҙен һабаҡлай.

Һөрмәй-сәсмәй шыта шомло ерҙән,
Ал сәскәһе – тәхет тажылай.
Ҡылсыҡтары – батша мыйыҡтары,
Һине үпһә, ҡаның тамсылай…

«Шайтантаяҡ» тиеп беҙ типкәнде
«Татарник» тип урыҫ кәмһетә.
Шайтантаяҡтары илде баҫҡас,
Ҡоролтайҙар уны йәм итә.

Шулар шаңы, булып илдең аңы,
Аҡыл күҙен шауҡым аларткас,
«Ҡылсыҡ мыйыҡлыны Йорт түреңә
Ултырт!» -- тиеп шайтан шаярткас,

Ултыртырбыҙ. Ап-аҡ күңелебеҙ
Түрендәге алтын тәхеткә.
Әйтәләр бит: «Гүзәл был гөлдө беҙ
Һайлап алдыҡ һеҙҙең бәхеткә!»

Әҙәплебеҙ. Тыңлас ғәҙәтлебеҙ.
Виват! Виват! Мыйыҡ, сәскә ат!
Шайтантаяҡ-шайтандың телендә
Һөйләшәсәк инде беҙҙең зат!

Ҡоролтай бит, әнә, ил ҡороҡлай –
Енлекейҙар, Зинар, башҡалар…
Нисек түҙә, сыҡмай ярҙарынан,
Ағиҙел, Дим, Һаҡмар, Ашҡаҙар?!.

Мәктәптәрҙе, клуб, балнистарҙы
Яптырткастын берҙәм тауыштан,
Үҙебеҙ үк, шайтан таяҡтары,
«Татарник»ланырбыҙ аҙмыштан.

«Аҡлан» баҡсаһы, 24.06.2014.

## Тарих барлағыҙ

Урыҫ батшалығы түңкәрелеп,
Тыуғас Рәсәй Республикаһы,
Башҡортостан Йөмһүриәтен бит
Ҡатар ҡуйҙы Ырыҫ бикәһе!

Киләсәктең азат ялҡындары
Дөрләгәндә беҙҙең усаҡта,
Империя бәндәләре рухи
Ҡолдар килеш ине ул саҡта.

Ленин «Аврора»һы атканында
Яңы Рәсәй таңын кәртәләп,
Яңы Башҡортостан күкрәк кирҙе

Ленин декретынан иртәрәк!

Үҙ ғәскәрен төҙөп үҙалдына,
Советтарҙан барҙы алдараҡ:
Рәсәй федерализмын илтте
Башҡорт еле киргән ал байраҡ!

«Ленин бүләк итте башҡортҡа, -- тип, --
Республика», -- эре ярмағыҙ!
Башҡорт үҙе унан тартып алды
Үҙ яҙмышын! Тарих барлағыҙ!

Шуныһы хаҡ, Мәскәү алдай алды
Саф күңелле ихлас башҡортто:
Ҡылыс ҡоно менән аҫтан ҡырҡты,
Таҫма теле менән баш ҡырҡты.

Гонаһтарын йыуып хакимлыҡтың,
Тубыҡтарҙан ашыр ҡан аҡҡас,
Урыҫ-башҡорт дуҫҡа Монумент, тип,
Баш ҡаламда ҡәберташ ҡалҡҡас,

Ҡалды, ҡалды бары шул көйөнсә,
Телһеҙ, күҙһеҙ ҡалдыҡ, ҡолаҡһыҙ.
Мәктәптәрҙе ябып, балта саба
Башҡорт тамырына был, хаҡһыҙ!

Ирҙәребеҙ менән ҡуша ҡапты
Ерҙәребеҙ ҡауыш ҡапҡанға.
Улар китте… ә беҙ ҡыуаныштыҡ
Толпар биреп – ҡуян ҡайтҡанға…

Ер майҙарын, алтын-көмөштәрен
Һурып алып бөткәс һурғырлы,
Ер өҫтөнөң барлыҡ бәрәкәтен
Убып тора туймаҫ убырлы.

Башҡорт ҡалды һыуһыҙ һәм урманһыҙ –
Талын ҡырҡма! Сумма күленә!
Һәр ауылдың сиге кәртәләүле –
Ары сыҡма! Ҡаҙна һүгенә!

Хаким унда хаҡ-киң федералдар,
Аҫабалыҡ сәңкей ситлектә.

Бабаларҙың ватып зираттарын,
Таш йорт һала, һалып этлеккә.

Тыуған төйәгем юҡ. Төйәкләнә
Унда ала-ҡола йәнлеләр.
Урыҫ менән башҡорт өйләнешеп,
Ҡытай тыуа… Илде ул биләр!

Аҫабаның инде үҙен үк, тим,
Уралынан ҡалды һөрөргә.
Тура килер ҡырыҫ Мәскәүгә
Ҡытай Уралына йөрөргә.
06.07.14

## Мызылдауыҡ Мәҙехйән

Сәлихйән тип төптән теркәлгәндең
Ысын аты өҫтән – Мәҙехйән.
Көнө-төнө түрә мәҙехләүҙән
Биҙеп ҡасҡан, тиҙәр, «Сәлихйән».

Ситтән генә көтөп йөрөй, тиҙәр,
Мәҙех биҙеп, Сәлих ҡайтыуын.
Әммә тынмай – Мәҙех мызлап-мызлай,
Туҡтатмай һис мәҙех әйтеүен…

Мәҙхиәләр мызлау мызылдағы
Туймай икән нисек мызлауҙан?!
Гробовщик мәйет теләгәндәй,
Түрә танһыҡлай был һәр ҡайҙан.

Сөнки түрә уға өлөш тирә,
Өлөш көҫәп күпсей мәҙхиә.
Айран кеүек мызлап күпсегәнде
Көпшәк күңелләләр ныҡ һөйә.

Чиновникмы буйлай тәхетенә,
Һанъяуникмы туйлай юбилей, --
Быҙау кеүек буҙлай мәҙхиәсе,
Йылан телен болғап йүпәләй.

Юғарынан сос ҡор сөскөргәнен
Сөмбөрләтеп мана мәҙехкә.

Хатта хөрҙөң артҡы түбәненән
Атҡандарын һала рәдифкә…

Түрә менән сура араларын
Тоташтыра ғәүрәт йәйғоро.
Шуға ла ул сафсат-касафаттың
Унлап премия маһиры!

Юҡҡа түгел! Юҡтан бар ителеп,
Мәҙкүрлеген миҙал маҙалай.
Артҡы ишектәрҙең усын ялай,
Кишер киҫкән козел-ҡазалай.

Муслыларҙан, ялар услыларҙан,
Ялмап йөрөй байман, бол, ҡәҙер.
Чиновниктар илә һанъяуниктар
Гимнын яҙырға ла ул әҙер!

Бер том булды ишкән ишәклеге,
Китапланып китте кибеткә.
Инде, тимен, ауған түрәләргә
Матәм мәтәлләүен ил көтә.

Хатта мәйет, булмаҫ өсөн ғәйеп,
Керер ине матәм томына.
Табутсылар күптән гимн көҫәй,
Күҙен төбәп Мәҙех моңона.
07.07.2014.

## Мөстәнлеккә мәҙхиә

Наследникам Сталина…
**Е. Евтушенко**

### I

“Аҫабалыҡ! Азатлыҡ!» -- тип даулап,
Империяны нык ҡаҡшатты –
Башҡорт тигән нацмен һис бер ҡасан
Була алмаҫ беҙгә яҡшатлы!» --

Шулай тиеп уҫал батшаларҙың
Ғәмәл дәфтәренә яҙылған.

Баш күтәргән һуңғы башҡорт өсөн
Зыяратта ҡәбер ҡаҙылған!

Башҡорт рухын бөкләп һындырырға
Мөстән сире гиҙә һарайҙан.
Мөстән-шағир яһап талантлыны,
Ауыҙына илде ҡаратҡан.

«Мөстәнлин» тип алды шанлы исем
Мөстәнләнмеш мөстәй ороһо.
Һарай тупһаларын ятып ялай
Шиғри ялағайлыҡ ярыһы...

II

Таланттың да хәтәр талантлығы,
Мөстән сире быуғас йоғошло.
Күптәребеҙ сыулап табынған йән
Милләт әжәленә торошло.

Рухыбыҙҙың мөстән-үләтлеген
Үрсетеүҙә үркеп танылды.
Дәжжаллыҡты дер-һелкеткән йәнрух
Бойҙай игеп, урҙы ҡамылды.

Аҫабалыҡ – әҫпе ҡалдығы, тип,
Әҫәрләне шағир ҡолаҡҡа.
Шиғырҙары көн-төн шығырҙаны,
Әләмләнеп ҡыҙыл флагка.

Яусыл башҡорт даусыл булмаһын, тип,
Шәп үтәне Ҙур Хан әмерен.
Башҡортмон, тип, мандараланып ул
Рухыбыҙҙың ҡаҙҙы ҡәберен.

Шул мандара һабын услаштылар
Талантлынан аҙған тоҡомдар.
Имгән телен, илен тешләп өҙҙө
Рухилығын өҙгән шауҡымдар.

Йырлап-бейеп, мөстән мөсөн һөйөп
Хөр йәшәнек хурлы «баҡса»ла!
Телһеҙ ағас булып үҫеүселәр
«Мөстәйлин» тип бөгөн маҡтала!

Сөнки донъя – мөстәйлинле ҡойма,
Баҡсасыһы – Ҙур Хан Сталин.
Мичурины булып шул баҡсаның
Хеҙмәт итә мөстән-Мөстәйлин…

Башҡорт ере биҙһә башҡортлоҡтан,
Башын һалһа «һуңғы могикан»,
Алҡышларбыҙ! – Мөстәнләнеүҙән бит
Һәр беребеҙ – мөстәй! Һуңғыйән!..

### III

…Шәп ир тыуҙы. Шанлы шағир булды.
Ҙур Хан уны алды иҫәпкә.
Мөстәнләтеп илде илертергә
Әйләндерҙе күндәм ишәккә.

Ишәктең дә ниндәй ишкәклеһе!
Йырҙар ишә, ҙурлап «баҡса»ны.
Баҡсасының мыйыҡ араһынан
Һәрмәп ала данды, аҡсаны.

Ишәк йөрөй, башҡорт мин, тип юрый,
Ауыҙына илде ҡарата.
Һәй, талантлы шағир! Һәм һәләтле –
Йырлап ҡына мөстән тарата.

Сәс бөртөгө һайын аҡыл, тиеп,
Һиммәтләйҙәр уны һәр ҡайҙа.
Илде иләп-иҙеү һөнәренә
Өйрәнәләр шағир-бабайҙан.

Нәшриәттә аҡыл томдарының
Онотолдо һаны-хисабы.
Исеменән хатта биҙгәк тотоп,
Ҡаса ине Намыҫ нәсәбе.

Йырлай шағир: «Гүзәл баҡса был ер,
Баҡсасыһы бөйөк Сталин.
Шул баҡсаны сүптән арсаларға
Сталинса торам поста мин!»

## IV

Рухы ҡаты ниңә нацмендарҙың,
Ҡыҫҡан һайын арта – бирешмәй.
Урыҫ ҡына булһын ырыҫ, тигән
Маҡсатына фирҡә ирешмәй.

Империя тейеш иң кирергә,
Монолитҡа теле әйләнеп.
«Сталинсыл сталдәй итәйек
Монотелдең тығыҙ бәйләмен!» --

Аҫабаны аҫмай ҡырсыу өсөн,
Сәйәсәтсе төптән алдыртты:
«Төбәгенә тынҡыслап ҡырҡ халыҡ,
Шыйыҡлатыу кәрәк башҡортто!»

Ҡыҙын һөйһөн ҡырҡ ғаләм мужигы,
Ҡырҡ йыныстан килен алһындар.
Балалары, ҡырҡ телдә буталып,
Моңһоҙ маңҡорт булып ҡалһындар!

Ялағайлыҡ, ике йөҙлөлөктәр
Буй ебәрҙе буйтым «баҡса»ла.
«Мөстәй сорты» булып үрмәләне
Ирбик, Байбик, Ҡамыр, Байсалар

Һәм шуларҙың ботаҡ-сатаҡтары…
Ҡорһаҡ – түрҙә, Намыҫ тупһала.
«Намыҫлы буллл!» -- тиеп өндәй илде,
Үҙ намыҫы – харам тоҡсала.

Мөстәнлиндарҙың, һәй, мөстәнлеге
Сталиндыҡынан сөмөрәк.
Мыйыҡ бороп ҡына баш киҫкәндән
Уҙҙырҙы йән киҫкес был өрәк.

Нисә быуын йәндәр ҡалғый йәмһеҙ,
Бахыр йәнен йомоп ҡалтаға.
Ҡанлы ҡандаланы данлай шағир,
Тотонмаһын, тип, ил балтаға.

Ҙур Хан мыйығының һәр ҡылсығын
Мыйыҡһыҙ был – ҡылды остазы.

Бығауһыҙ ҙа йәндәр бығауланы
Гулагтарға тиңдәш моң-сазы.

### V

Бере килә, бере китә торҙо,
Ә Мөстәнлин янмай һәм батмай.
Сөнки йырланы ир: «Хандан башҡа
Ер әйләнмәй, һыҙылып таң атмай!»

Ханһарайҙан өргән елгә күлкеп,
Милләтен ул хатта онотто.
Милләтһеҙ мал көсәп исҡән елдә
Тамырлының төбөн ҡоротто.

«Сәскә атҡан» мөстән баҡсаһына
Ерекмәгән «ҡыйыш аңлы»лар
«Әсәм теле – сәсән теле!» -- тиеп
Ҡыйыш шиғыр яҙып яндылар.

Ә был – илгә булды иплe билдә.
Ипһеҙ шағирҙарҙай аҙманы.
Башҡортмон, тип, йәки татармын, тип
Ярты юл да шиғыр яҙманы.

«Урыҫ булмаһам да, урыҫмын мин!» --
Гимн гиҙә мөстән ерендә.
Хәтер киҙеүенән хәтәрләнеп
Гимн һуҙа мең-мең ирендәр.

Әҙиптәрҙең әрһеҙ көтөүсеһе
Булды мөстәй – Ҙур Хан яллаған.
Сыбыртҡыһын усал шартлатырға
Дуңғыҙ ҡаны менән майлаған.

Һәй шартлата! Ғорурйәндәреңдең
Йәнен ала ҡайыш сыбыртҡы.
Әйләнә ил – аңғыра һарыҡҡа,
Тәкәләнә түлһеҙ йыбытҡы…

Сәсе менән иҙән һеперәләр,
Итек саңын ялап, -- иҫ китә!
Хушбуй аңҡығандай еҫкәнәләр,

Сөнки Хандан ҡапҡан еç тиртә!..

-- Нисек итеп быға өлгәштегеҙ,
Ханға килештегеҙ – әйтегеҙ?!
-- Салғыйҙарын Хандың үбә белһәң,
Асыҡланыр асыл бәхетегеҙ!

## VI

Баҡыйлыҡҡа күсте «баҡсасы»һы,
«Нинел» менән ятып йәнәшә.
Мавзолейҙан ләкин бырғыттылар,
Мыйығынан һөйрәп… тамаша…

Ләғнәт яуҙы тупраҡ өйөмөнә
Халыҡтарҙан… батты ҡояшы.
Мөстәйлинға ләкин «хоҙай» килеш
Ҡала бирҙе мөстән-юлбашсы.

Сыбыртҡыһын мөслө шартылдатып
Өйөрҙө, һәй, шиғыр көтөүен.
Мыйыҡ ебәрергә хыялланып,
Һиҙмәй ҡалды мәрткә китеүен…

Мөстәнлеге ләкин йөрөй йырып,
Сирләтергә йырҙар тулҡынын.
Итә кумир күпме ихлас ғүмер,
Абайламай мөстән упҡынын.

«Үтә инеее һүҙе Мөстәйлиндың,
Ҙур Хан өçтән ҡыçҡан саҡтарҙа.
Их, булһасы хәҙер, -- тип уфтана
Вариçтары, -- илде яҡларға!»

Эйе, булды, ҡылды заманында
Яҡлаусығыҙ «изге» эштәрен:
Бөйөк Мөхәмәтша Буранғолға
Күп йөкмәтте төрмә биштәрен!

Бөйөк Бабич шуның булымында
Ҡырҡ ҡат үлеп, ҡырҡ ҡат терелде.
Ҡадир Даян «Шайморатов» йырын
Яҙған өсөн ҡырға һөрөлдө.

Башҡорт тарихының романсыһы
Хамматовтың, Биишеваның
Ҡыйғыр ҡанаттарын киçә торҙо…
Башҡаларын әйтмәй шымамын.

Һағыналар… Һыҡтап табыналар,
Ҡайтыр, тиеп, кейеп итеген.
Яңы мыйыҡ ҡына бөтәйтер, ти,
Һыныҡ күңелдәре китеген...

Вариçымын, тиеп илермәгеҙ,
Илергән ил – иләү аҡтығы.
Табынмабыҙ, тайып абынмабыҙ, --
Һеҙ бит һуңғы мөстән ҡалдығы!

Тәреләтеп яһил суҡынғанда
Портретына мыйыҡ ҡуйығыҙ.
Мыйыҡ аçтынан һәр төкөргәнен
Ялаһығыҙ, етһә буйығыҙ!
19 – 20.07.2014.

## Аҙғынлыҡ

Древнекитайский историограф «Шы-гу пишет: «Усуньцы обликом весьма отличны от других иностранцев Западного края. Ныне тюрки с голубыми глазами и рыжими бородами, похожие на обезьян, суть потомки их. (Историк Шы-гу работал в 627 – 650 гг)».

Усуньцы (древние циньцы) – племя основателя китайской империи, заложивщий краеугольный камень Великой Китайской Стены Ши-Хуан-ди, суть предки современных усярганцев-башкир.

У них «почва летом болотиста; зимою большие снега. Жители вообще рослы, с рыжими волосами, с румяным лицом и голубыми глазами».

Сыма Цянь. Исторические записки, том I, стр. 190, 351.

«Чингиз-хан – синеглазый, светловолосый, белокожий человек, он не тюрок, а белая раса – русский».

Левашов Н., историк; видеофильм «Орда, Иго, Тартария, хан Чингиз».

«Хан Батый – светловолосый, голубоглазый, белокожий богатырь, а вовсе не тюрок или монгол».

Историки Антон Горюнов, Александр Серегин, публицист Михаил Сарбучев; видеофильм «Самый большой миф русской истории».

Сыңғыҙ-ханды, ғәзиз бабабыҙҙы
«Урыç булған», -- тиеп яҙалар.

Әллә беҙ аҙғанбыҙ урыҫлыҡҡа,
Башҡортҡамы улар аҙалар?..

Батый хан да икән сап-саф урыҫ,
Көнбайышты яулап барғанда.
Алтын Урҙа – бөйөк империя –
Урыҫ йорто, урыҫ команда.

Зәңгәр күҙле, аҡ йөҙ, ерән сәсле
Үҫәргәндәр («циньдәр») – саф иван.
Шуға күрә ерҙе тетрәткәндәр –
Иван ғына була бәһлеүән.

Һәм Арҡайым, ҡалалар әсәһе
Ер йөҙөнөң – урыҫ ятағы.
Мәғрур Урал – урыҫтың бишеге.
Скиф – урыҫ! Сармат һәм тағы!

Угрофиндан урыҫ шытҡанлыҡтан,
Татар ҙа юҡ! -- Ярым угрофин!
Шуға күрә «Бөйөк Тартария» --
Урыҫ ере! Әйтеп ҡара һин!

Юҡҡамы ни Урал ҡайындары
«Урыҫ ҡайыны» тип ҡырҡыла.
Шуныҡы, тип, үлән, иген үҫә,
Ер аҫтының майы урғыла.

Аполлонды грек иленәсә
Ирештергән иҫке Өфөбөҙ
«Башҡортмон!» -- тип һаман ҡырҡышҡанға
Саңға осор, етмәҫ көсөбөҙ

Танытырға, -- әгәр башҡортлоғон
Тупрағынан ҡырсып юймаһаҡ,
Бөйөк «Урал батыр» тәүәрихен
Уларҙыҡы итеп ҡуймаһаҡ.

Йәнбирҙене Ыуан яһау кәрәк,
Йәнбикәне – Ыуан Мәрйәһе.
Уралынан умырылһын башҡорт,
Кешелектең нәҫел әрйәһе!

Төрки заты, тимәк, юҡмыш ҡаты –

Булмаған һәм булмаç артабан!
Көсәнелә, күпме үсләнелә,
Юйыу өсөн уны картанан!

Хоҙай Тәғәләнең көсөн ләкин
Булыр микән бөгөп, һындырып?!
Һындырыусыларҙың һыныҡтарын
Өйә Тарих, саңға ҡалдырып.

Тауыҡ һалған Йомортҡа, баш бирмәй,
Һанай үҙен Тауыҡ анаһы.
Тауыҡты бит, имеш, ул тыуҙырған!
Тауыҡ уның себеш-сағаһы!

Аҙғынлыҡтың була бер аҙағы,
Ваҡыт инде шуны танырға:
Урыç – башҡорттоң бит бер тармағы!
Балта сапма башҡорт-тамырға!
30.07.2014.

## Көшәлекле Араммал

Бөтөн донъя Башҡорт ҡоролтайын,
Ең һыҙғанып, беҙ бит төҙөнөк.
Башҡорт мәнфәғәтен ҡурсаларға
Булат ҡылыс ҡойҙоҡ йөҙө ныҡ!

Ни күрәбеҙ хәҙер – үле тимер…
Тутыҡҡан һәм йөҙө кителгән.
Ҡыны менән ҡуша сигәләнеп,
Ҡындан һурылмаçлыҡ ителгән.

Ҡаҡлағандар ҡағып витринаға:
«Күрһен халыҡ – ҡыйғыр ҡылыс бар!»
Көшәлеген аçҡан кәкре билгә,
Ҡылыс итеп, Араммал-йыныстар…

Бер ус көмөш килем -- һата илен,
Ярап ята баҡыр баçһа ла.
Араммалдай арам-һатлыҡтарҙан
Башҡорт башын ашау башлана!

Маңҡорт боçа: «Башым ҡалһа, ҡоҙа,

Күтемде, -- тип, -- бүре ашаһын!»
Түрә белә, мыйыҡ бороп көлә:
«Аҫабанан һарыҡ яһаным!
Шешлек ҡурып унан, ашаным!»
07.08.2014.

## Шағирҙар, һәй, шәп ирҙәр!

Бөйөк Бабич! Изге ҡан-ҡәрҙәшем!
Һәйкәлең юҡ шанлы ҡалала.
Рухың тыуа ләкин һәйкәлләнеп
Башҡорт тапҡан һәр бер балала!

Исемеңде йәшлек театры
Инселәргә тейеш ине лә!
Әммә ләкин яугир башҡорт рухы
Рухһыҙҙарҙан бөгөн еңелә…

Үҙгәрҙек шул, ай-һай, ныҡ үҙгәрҙек –
«Ҡыуаныслы» заман ҡыуартты.
Намыҫлылар ерҙә ныҡ кәмене.
Выжданһыҙҙар беҙҙә ныҡ артты…

«Халыҡ шағирҙары»н бөгөнгөнөң
Телдә талҡып талып тормайым.
Ус ялатҡан мөслөләрен данлап
Тарта улар ярыҡ ҡурайын…

Аҙғынлыҡҡа ауман бәндәләрең
Рухын һатып, һатлыҡ рух ала.
Албаҫтылай, илдең тынын баҫып,
Аллаланып йәшәй донъяла.

Йәшәһендәр! Ҡырҡҡа йәмшәйһендәр!
Нәфселәрен ниңә тыяйыҡ?!
Мин, мәҫәлән, юха булырға ла
Хаҡлылыр бит! Кәртә ҡуймайыҡ!

«Дөмәҡаратөйәк» дөмәһендә
Ялағайлыҡ яҡшы ярала.
Рух милләтен шағир алмаштыра
Күҙ асып та йомған арала…

Әйләнәләр йәһүт, французға,
Тик урыҫҡа аҙыу уҥышлы.
Башҡортлоҡка татар аҙмаһа ла,
Татар сире беҙгә йоғошло.

Ә шулай ҙа Сафа улы Мостай
Башҡорт баҫыуында аунаны.
«Башҡортмон» тип бер һүҙ яҙмаһа ла,
«Татармын!» тип һөрән һалманы.

Шуғалырмы ҡапыл ҡылманылар
«Татарстан халыҡ шағиры».
Ҡазанында түгел, ә Өфөлә
Ҡалды һәйкәле һәм ҡәбере…

Бөйөк Туҡай башҡорт әсәһенән,
Башҡорт атаһынан тыуһа ла,
Татар рухын рухлап бөйөкләнде –
Һәйкәлләнеп тора шуға ла

Ҡазанында! Эйе, «башҡортмон», тип,
Бер тапҡыр ҙа туҙға яҙмаған.
Татар улы булып ҡалған Туҡай –
Башҡортлоҡка татар аҙмаған!

Ә беҙҙәр һуң?! Башҡорт-маңҡортлоҡтан
Татарлыҡка аҙыу – аҙапһыҙ.
Аҙғынды кем тағы башҡортлата,
Хоҡуҡтарын боҙоп әҙәпһеҙ?!

Әүерелегеҙ, әүҙем әүерелегеҙ!
Саяланып, әйҙә, сағығыҙ.
Саҡкан һайын, саңҡыр башҡорт рухы,
Сапҡан һайын, артыр сафыбыҙ!

«Нәжиб Фигури» тип Туҡай белгән
Мәжитебеҙ – мәжнүн ҡашҡаса:
«Ғәбдел[мәжид] – татар улы» мин, тип,
Башҡортлоғон ташлап ул ҡаса.

Шуғалыр, тим, бронза һынын һырып,
Мәҙехйәндәр мәҙех уҡыны.
Саф татарса һайрап сутылданы
Өс-дүрт быуын нәҫел-тоҡомо!

Бахырҙы бит ата башҡорт яһап,
Аруахының рухын ҡурҡыттыҡ –
Башҡорт театры ҡаршыһына
Мәңге рәнйетергә ултырттыҡ…

«Унитазда ултырған бабай», -- тип
Шаярталар шуға шаяндар…
Татар театры «Нур» ҡаршына
Күсенергә көтә фармандар…

Бирһен Хоҙай! Аҫыл сәскәләргә
Төрһөн ине халҡы шағирын!
Урынына бөйөк Буранғолдо
Баҫтыртырға теләй бәғерем!

Опера һәм балет театры
Көтә хәҙер һәйкәл һәм исем.
Албаҫтыны баҫтыртмаһын Хоҙай,
Тапатырға рухлы ил хисен!

Йәне һөйгән – йылан ите ейгән,
Әүерелгән сыбар йыланға.
Сыбарланып, әүермәнләнеп гел,
Бара, тиҙәр, Рәсәй ныҡ алға...

Рәсәйләнә алмаҫ ләкин маңҡорт,
Ябынып та йылан ҡабығын.
Урыҫ, татар сысып киткән ерҙе
Ялап таба маңҡорт аҙығын...

Отмаҡ булып, беҙҙе йотмаҡ булып
Ҡубарынһа ҡуҡыр аждаһа,
Бирешмәбеҙ! Ятҡа һырышмабыҙ!
Урал батыр заты бар ҙаһа!

Кем ғәйепле, шағир күңелендә
Шайтанланып шайтан табышһа?
Был донъяла шағирәнә йәшәү –
Йәшнәү булһын ине Бабичса!

15.08.2014.

## Загсбюро залында

## егет һайлау заңында
**(Билдәле бер йырға эйәреңкерәп)**

Ҡарттай ҡарап ҡарыу һалды,
Ҡартәсәйем ҡармап алды,
Үлсәнеләр буйымды.
Атай-әсәй йоҙроҡ төйгәс,
«Ҡарттар заңын заңла!» -- тигәс,
Торған ерем уйылды...

Балиғ булғанһың, ҡыҙым, тип,
Башлы булырһың үҙең, тип
Ҡулға башборт бирҙеләр.
Загсбюроға елеп бар, --
Кейәүлеккә биш егет зар –
Һайла береһен, тинеләр.

Загсбюро затлы икән,
Ҡарттар заңы хаҡлы икән –
Көтөп тора биш егет.
Һайлауын һайлар инем дә,
Яйлауын яйлар инем дә, --
Береһенән-береһе ебек...

Береһе ҡылйыҡ, береһе шыйыҡ,
Береһе әтәлге, береһе мәтәлге,
Береһе таҙ.
Барыһының үр яғы юҡ,
Уртаһы боҡ,
Аҫты һаҙ...

Һәр береһе, мине ал, ти,
Ауыҙ-мороноң булыр бал, ти;
Башлыҡ булырмын, тип, йортҡа,
Һине ҡылырмын, тип, ҡортҡа,
Тәҡәтемде ҡорота,
Әйкәйем!
Егет тиеп дегет алһам,
Дегет тиеп боҡҡа ҡалһам,
Башлыҡ ҡылып быҫҡып янһам, --
Нишләйем?!.

Шаршау артына тиҙ ин, тип,
Һайландығыңа һал ин, тип

Инләтергә ҡыҫтайҙар.
«Һайламаһаң – бел, һайларбыҙ!
Яйламаһаң – гел яйларбыҙ!
Майларбыҙ!» -- тип яҫҡыйҙар...

Бишеһе лә бер егеткә
Торош итмәҫ әргендек.
Егет елләһен тапмаға
(Һәр береһе бит ҡыу ағас!),
Ниңә килеп бәрелдек?!.

Була алмайса әүәрә
Йәш күңелкәйем ҡыуара,
Нәк ҡорт төшкән алмағас.
Башборт барлыҡтан ни файҙа,
Башлыҡ булырын былай ҙа
Үҙең һайлап алмағас?!.

...Загсбюро – тимер ҡура,
Ҡартатайым мыйыҡ бора,
Ҡартәсәйем ҡарғып тора, --
Арт ишек юҡ тайырға...
Тура килә, һайламайса,
Үҙ-үҙемде һанламайса,
Ҡушҡандарын алырға...
Яныраға...

23.08.2014.

## Кеше бәхете

Их күңелле! «Кеше бәхете»нә
Эшләй башлар инде түрәләр!
Илгә эшләп, бәхет килтереүҙе
Намыҫ бурысылай күрәләр!

Кем икән ул «Кеше» тигәндәре?
Беҙҙер ул, тип, йөрәк өлтөрәй.
Арҡабыҙҙан һөйә уҙамандар,
Һайлау төбәгенә юл көрәй.

Урамдарҙа шиғар таҡталары
Ырыҫ бөркә беҙҙең иштәргә:
«Кеше бәхетенә һайланабыҙ –

Кеше өсөн янып йәшәргә!»

Дүрт йыл сөнки һыуҙай ығып үткән
Кемде һыйлап, кемдән һыйланып.
Донъя ҡуласаһы беҙҙең ҡулда!
Беҙ – һайлаусы! Улар – һайландыҡ.

Эркеләбеҙ һайлау һандалына –
Беҙҙең уста бейей барсаһы!
«Кеше бәхеттәрен» бәхетләйбеҙ –
Сәскә атыр илдең баҡсаһы!

...Һайлау үтте. Бәхет мәле етте.
Һайлау эрәхәтен күрәбеҙ.
Донъя ҡуласаһын әйләндерә
Һайлап ҡуйған эре түрәбеҙ.

Кибеттәрҙә берҙе ике хаҡка
Һатып алып ғүмер һөрәбеҙ.
Кеçә төбөн ҡырсып бирәбеҙ –
«Кеше бәхете»нә тирәбеҙ...
Һайландыҡтар – «Кеше», беләбеҙ...

Ауылдарҙа һөттө, итте, балды
Юҡмыш тингә йыйып алалар.
Етмеш һумға һатып, ҡалынайта
Көшәлеген бәғзе бабалар.
«Ҡалын ҡалта – Кеше бәхетенә!» --
Тиеп беҙҙең өндө ябалар.
Улар – «Кеше», бәхет һауалар...

Урмандарҙың, йылға, тау, күлдәрҙең
Кәртәләнгән керер юлдары.
«Кешенеке был ер!» -- тип бойора
Аҙым һайын закон-заңдары.
«Кем һуң беҙ?..» -- тип уфтай ил зары...

Ауылыңдың ашма ҡапҡаһынан,
Арғы донъяң – «Кеше» биләме.
Аңдып тора түрәң – һайландығың
Ҡаты ҡуллы, ҡырыç келәмле.

Келәменә көйләп баçтыртһалар,
Кәрәк түгел донъя-ғаләме!

Шуны шәйләп телдәр бәйләнде –
Ҡуласабыҙ кире әйләнде...

Ҡайҙа барма – шунда «Кеше»ләр,
Кеше түгел беҙҙең ишеләр.
Һайландыҡтар – «Кеше», беҙ – «һарыҡ»,
Улар ҡалыная, беҙ арыҡ...
Биргәндәрен генә ашайбыҙ,
Шөкөр итеп кенә йәшәйбеҙ
(Яңы һайлауғаса сәсәйбеҙ)...

Һәй, уҙа бит ғүмерҙәр, уҙа...
Сәхнәләрҙән сәсән йыр һуҙа:
«Бәхетебеҙ – һарыҡ булыуҙа,
Бәхетлебеҙ ярыҡ булыуҙан!»

Кеше бәхетенә ҡыуанып,
Һайлау сихәтендә йыуанып,
Телде тешләп ҡарап торабыҙ,
«Кеше»ләргә ярап торабыҙ...

Килде, килде «бәхет» заманы –
Һатып бирә һыуҙы, һауаны.
Ҡолаҡ ҡырҡып ауыҙ яманы –
Өндәшәбеҙ белеп саманы...

Мәктәптәребеҙҙе ябалар,
Дауаханаларҙы сабалар,
Телебеҙгә тилсә тағалар –
«Кеше өсөн был!» -- тип табалар...

Башҡортостаныбыҙ башына
Етергә лә береһе шашына...
Урамдарҙың шул уҡ шиғары:
«Бөтәһенән Кеше юғары!»

Беҙ түбәндән ҡарап торабыҙ,
«Кеше»ләргә ярап торабыҙ,
Һандуғастай һайрап торабыҙ,
Йыраҡая ләкин арабыҙ...

Баҡылдайбыҙ ҡай саҡ баҡалай,
Бер туҡтауһыҙ бер уй яфалай:
Улар – «Кеше». Беҙ һуң, беҙ – кемдәр?

Һарыҡ икән шул беҙ, меҫкендәр!..
Көтөү-көтөү барып һайланыҡ,
Һайландыҡты беҙ бит майланыҡ...

Һарыҡтар беҙ, эйе, һарыҡтар –
Түбә – тишек, төбө ярыҡтар.
Ни эшләргә инде – белмәйбеҙ,
Иламайбыҙ ҙа һис көлмәйбеҙ.
Сабырлығын йыя ил-ғаләм:
Сабырһыҙҙы көтә шырт киләм!..

Һарыҡ булып ҡалғас – ҡалайыҡ,
«Кеше»ләргә булһын уңайлыҡ,
Тиеп инде доға ҡылайыҡ
(Һарыҡ та бит кемгә ҙур байлыҡ)...

Белдек, белдек: заман боролған --
«Кеше бәхете»нә ҡоролған.
«Кеше» түгелдәрҙең (кемдәрҙең?!)
Бәхет кенәгәһе йыртылған.

«Бәхетлеме һуң һин?» -- тиһәләр,
Йөҙөм була ҡыҙыл сөгөлдөр.
«Бөтәһе лә кеше бәхетенә!» --
Беҙ, ахыры, кеше түгелдер...

30.08.2014.

## Баҙарҙа

Көпәш тараҡан баҙарын
Күрергә сыҡтым әле.
Көпөшән-башлыҡтар ҡарап
Йөрөргә сыҡтым әле.

Үҙем үк көпәш тараҡан –
Хоҙай шулай яралтҡан.
Ватанымдың батманына –
Баҙарына ҡараҡан.

Баҙаркомдары биҙалы,
Сауҙалары ғауғалы.
«Башыңа башлыҡ ал!» -- тиеп
Тибәрәләр маҙаны.

«Көпәш тараҡан булмаһаң,
Йөрөмә бында!» -- тиҙәр.
«Башбортонда күрһәт тәүҙә,
Һин – беҙҙең ҡулда!» -- тиҙәр.

Ышаныслы ҡулдар икән
Ҡулға алыусыларым.
Биш көпөшән ҡоҙалайҙар:
«Һайлап ал иң айбарын!»

Һайлаһаң-һайламаһаң да, --
Бер төҫтәге бер фасон.
Йыртыҡтары ғына төрлө,
Төрлө яҡлап йырғастын...

Береһе – тишек, береһе – ҡыйшыҡ,
Береһе – серек, береһе – юҡ...
Бүҫереген бүҫеремә
Баҫыралар: «Быныһы ныҡ!»

Айбарлыһын-айбарлы ла,
Башыма һыймай бары...
Ҡыҫтап һыйҙыртҡандарының
Бүҫерелде буйҙары...

Бишеһенең иң еллеһе
Тап ошоһо булғандыр.
Ҡаҡ түбәмдең бүҫеркәйен
Бешер инде ел-ямғыр...

«Көпөшәнле көпәш», -- тиеп
Маҡтау – мин-тараҡанды.
Әммә баҙарҙан сыҡҡас уҡ,
Һыуыҡ өтә арҡамды...

...Миндәй көпәш тараҡандар
Киләләр ҙә китәләр.
Көпөшәнле иткән өсөн
Оло рәхмәт әйтәләр.

Бөтәһе лә, алдыҡ, тиҙәр,
Шул көпөшән-башлыҡты...
Бүҫер башлы барсабыҙҙы

Бүҫерергә шәп сыҡты!..
14,09.2014.

## Ашҡа төшкән тараҡан

Бешереп алған ашыма
Төштө һары тараҡан...
Бот-саттарын йәйерәткән,
Мыйыҡтарын тарбайтҡан...

Үкһеҙ үләкһә көйөнсә
Һарҡылдырта ағыуын.
Табын ҡото уҡшыу йотто,
Ҡаба алмай ҡабымын...

Табағын түңкәреп кенә
Булһа икән ҡотолоп!
Мыйығынан һөйрәр инең, --
Ерәндертә был ҡылыҡ...

Күңелдәребеҙ күмһене
Тараҡанлы табында.
Уҡшыуыбыҙҙы баҫырға
Юҡ бит еҫле һабын да!..

Һыуынып ҡалған табаҡҡа
Һырый һары тараҡан...
Тараҡанға юл ҡуйғандың
Йөҙөн Хоҙай ҡарайтҡан...
Бәрәкәтен тарайтҡан...
18.09.2014.

## Һайлау-майлау ҡоштары

Бөтөн төбәк ҡоштары
Йыйылған йүн яйларға:
«Бөтә ҡоштар бәхетенә»
Төбәк Башын һайларға.

Кем генә юҡ был ҡорҙа:
Турғай, Тартай, Һайыҫҡан...

Ҡоҙғон ҡоро, ҡыҙышып,
Килеп еткән алыҫтан...

Төбәктәрҙең Хужаһы
Пеләш башлы Таҙғара
Бейек сағыл башынан
Байҡап байман башҡара.

Алды бына өйөрөп
Ҡан көҫәүсе ҡорҙарын:
Ҡоҙғон, Тойғон, Төйләгән
Һәм Ябалаҡ – бар-барын.

Һәм әйтте көр кикереп
(Емтек ейеп төйөлгән):
«Ҡан эсертмәҫ өсөн бит,
Турғай-мурғай өйөлгән!

Улар күмәк – бөртөкләп
Тары, бойҙай сүпләүсе.
Башлыҡ булһа уларҙан,
Ризыҡ булыр бик әсе!

Ҡан ҡонауҙы тыйырҙар,
Емтек еҫе ҡыҫҡарыр.
Төбәк ташлап тайырға
Барығыҙҙың көн ҡалыр...

Шуғалыр ки, туғандар,
Тотонайыҡ ҡулға-ҡул;
Һайлауҙарын майлайыҡ,
Уңһын өсөн беҙҙең юл!

Беләһегеҙ: һәр ҡоштан
Бөртөк бойҙай һалына.
Теркәлешкә күп бойҙай
Өйөп Башлыҡ һайлана...

Бөртөктәрҙе һанарға
Маһир беҙҙең Ябалаҡ.
Етмәгәнен еткерер,
Уңды-һулды абайлап.

Бына Ҡоҙғон-Ҡоҙаны

Баш итергә теркәйек!»
«Теркәлештә бер башы
Тормаç микән һерәйеп?..

Берәү ҙә юҡ беҙҙәрҙән,
Тиһә Турғай-дәғүәсел, --
Бойҙай һалып һайларға
Килмәй ҡуйыр күп нәçел...

Улар күмәк, беҙ һирәк...» --
Тип уфтанғас Ябалаҡ,
Тамаҡ ҡырҙы Таҙғара:
«Беҙҙән һиңә ҙур талап:

Күҙ буярға теркәттер
Сәпсек, Ҡарға, Торнаны.
Бөтәһенең бөртөгөн
Биреп Баш ит Ҡоҙаны!»

«Их, шулайын шулай ҙа...
Шулайтмаç шул бер даны:
Изге ҡош тип һанайҙар
Был төбәктә Торнаны...

Бөртөктәрҙең барыһын
Ошо Торна алмаçмы?
Ниңә Торна үтмәй, тип,
Ғаләм ғауға һалмаçмы?..»

«Асығауыҙ икәнһең,
Күҙлек элеп йөрөһәң дә.
Торнаны тый теркәүҙән, --
Төйләгән бит эргәңдә!»

...Осорттолар Торнаны –
Урынында Төйләгән...
Һанағанда Ҡоҙаға
Иң күп бойҙай өйөлгән...

Баш сайҡаны турғайҙар,
Был бәләнән таң ҡалып...
...Ҡоҙғон ҡоро – һунарҙа,
Турғай-мурғай ҡырҙарҙа... –
Таҙғаралы хужалыҡ...
01.10.2014.

## Тилсәле билсәндәргә

Башҡортомдоң бөйөк символы ул
Бөйөк Мөхәммәтша Буранғол!
Башҡорт үҙен Буранғолда табыр,
Үтеп урау, урау, урау юл.

Мөстәй-Мөстәнлинды хоҙай ҡылып
Сеңләүселәр белеп торһондар:
Серәкәйгә йәнен һатҡандарға
Юғарынан хөкөм-хаким бар!

Ҡәберенән ҡармап ҡиәфәтен,
Баҫтырҙығыҙ урам сатына.
Хөрәфәттән хоҙай яһайһығыҙ,
Алмашынып ҡорһаҡ хаҡына.

Мөстәнлиндар ҡоло боҡбайминдәр
Ҡоллоҡ ҡәлғәләре ҡормаҡсы.
«Урал рухын, буранғолдар духын
Ҡамар ҡәлғә, -- тиҙәр, -- булһасы!»

Була алмаҫ! Хан нәжесен наҙлап
Үпһәгеҙ ҙә ҡырҡҡа бөгөлөп!
Үҙегеҙ үк бурһып, нәжесләнеп
Ҡалырһығыҙ юлда түгелеп.

Урал батыр йәнен айырмаҡсы,
Аңралатып, ҡолдар халҡымдан.
Сүп-сарланып көйөр ҡолйән өйөр –
Туҡылдыҡ беҙ тере ялҡындан!

Табынғанда иблес балбалына,
Болванкалап баулай ул һеҙҙе.
Рухын һалып ҡатыҡ ялағандың
Маңлайында – шайтан мөгөҙө!

Шайтан шалтырағы түшегеҙҙә,
Эсегеҙҙә ҡара мәкерлек.
Ҡорһаҡ ямап борсаҡ ҡайыҙлауҙар –
Рухығыҙҙы ҡылды ҡәберлек.

Лаф орошоп вәхшәт баҙарында,
Итмәксеһеҙ илде тилсәле.
Урал телле мәңгел Мөхәммәтша
Рухы ҡырыр морло билсәнде!
21.10.2014.

## Патриот тәҡдимдәре

Президент хәлдәре бик ауырҙан:
Чиновниктар һырып алған тирәһен.
Дәүләт бюджетының сирек өлөшөн
Шулар кеҫәһенә һалып бирәһең.

Йәнә сирек өлөш Донбасс, Ҡырымға, --
Украина -- туғаны бит Рәсәйҙең.
Ҡытлыҡтарын, мутлыҡтарын ямарға
Ҡаҙнаһынан ҡуба Рәсәй-Әсәйҙең.

Абхазия, Осетия, Ҡарабах
Көтөп ята аралауҙы бәләнән.
Днестр буйы, Сербия, Боливия...
Имгәк -- Әсәй имсәгенә бәйләнгән.

Ҡытай тигән ҡатлы-ҡаплы Дракон
Драть итә, аҫтан торба һуҙҙыртып.
Себер сиктәренең ситен асабыҙ,
Обаманың ҡара күҙен ҡыҙҙыртып.

Ҡыҙһын өсөн, ҡотһоҙ Урыҫ утрауын,
Асман күпер аҫып, ҡотҡа беркеттек.
Аляскаға, диңгеҙ аҫтын тоннелләп,
«Йәшел кешекәйҙәр» китһен бер көтөү!

Рәсәй ере ләһә борон-борондан! –
Мирным путем Державаға ҡушайыҡ!
Мағаданға мәғдәнләнһә алтыны,
Обамалар тороп ҡалыр аңшайып!

Их, бюджеттың наҡыҫлығы!.. Ер шарын
Шарик итеп уйнатырға юрған тар...
Ә шулай ҙа мин, патриот, юрғаным
Аҫтында ҙур план-млан ҡорған бар!

Эй һөйөклө күҙ ҡарамдай Президент,
Һинең хаҡта көнө-төнө уйлайым.
Әле әйткән оло эштәр хаҡына
Яңы килемдәр бюджетҡа юллайым.

Беләм беләм: олигархтар – йән дуҫың,
Әшнәләрҙән әжер алыу ярамай.
Минең ише ишле патриоттарың
Күтәрәсәк, ауырлыҡҡа ҡарамай!

Белһен ине тинтәк чиновниктарың
Һалымдарҙы ҡайҙа һалып-алырға!
Мин бер үҙем алмаштырам йәмғеһен,
Сөнки беләм йөдө ҡайҙан йолорға.

Әйтәйек, һәр төндә ятып йоҡлайым –
Һәр төш өсөн ниңә һалым һалмаҫҡа?!
Ер йөҙөндә көн дә атлап йөрөйөм –
Һәр аҙымым һайын ниңә алмаҫҡа?!

Ә һауаны ниңә бушлай һауалар?
Һәр һулышым булһын һумлап иҫәптә!
Ямғыр йә ҡар яуған өсөн баҡсама
Мин түләргә тейеш – намыҫ киҫәтә!

Дөрөҫ, тишек торбаларҙан подвалға
Аҡҡан һыуҙарыбыҙ өсөн түләйем.
Аҙ түләйем! Дүрт-биш тапҡыр арттырыу
Кәрәкле, тип сын күңелдән теләйем!

Олигархтар алйый саф Маямиҙа,
Заводтары ыҫлап төтәй Рәсәйҙә.
Төтөн ҡыуып иҫкән елдәр өсөн дә
Һалым түләнергә тейеш һәр өйҙә!

«Әсә капиталы»н ниңә ваҡларға?!
Тыуған өсөн бала үҙе түләһен!
Һалдатланып һынһа Донбасс-монбаста,
Ҡайтыу юл сығымын алдан көйләһен!

Иң шәп килем илдә, иптәш Президент» --
Ниңә бушлай китә бәндә баҡыйға?!
Һалым булһын йән биреүгә! Һәм булһын
Йыллыҡ һалым гүрҙә тыныс ятыуға!

Державаны сәскә аттыртасаҡ бит
Тап ошондай тоталь һалым ҡалымы.
Рәсәйебеҙ һалһын үҙе-үҙенә
Әрһеҙ Әсәйләнеп йәшәү һалымы!
27.10.2014.

## Тутыйғоштар шиғырлай

Тутыйғоштар тутылдашып шиғырлай
Ҡоролмайлы тутыҡ тимер ситлектә.
Хужаһының бер ус емен танһыҡлап,
Һәр береһе башын һалған этлеккә.

Тыңлап торһаң, иҫ китмәле һүгенеү! –
«Попа – дурак!» булыр иң-иң һүлпәне.
Үҙ-үҙҙәрен шулай шанлап тутылдай,
Ятлап бәндә ауыҙынан һүткәнен.

Ала-ҡола, сыбар-собар килбәтле,
Суҡыштары кәп-кәкере танауҙай.
Маҡтай-маҡтай тимер ситлек һауаһын
Һауаланыуҙары һаҫыҡ канауҙай.

Әммә хужа сыбырҡылап сурытҡан:
«Ситлек – сихәт!», «Йөрәк – ялҡын!», «Донъя – киң!»
Ҡубарылып-карғып ҡанат ҡағалар –
Ярһыуҙары ярауланған эткә тиң.

Этлектәрен, емләп, бәндә күҙәтә...
Зәңгәр талда тулай һантый һандуғас...
Бикләр өсөн уны ла тут ситлеккә,
Йәтмә үрә, йәһәтләнеп, таң тыуғас...

Тутылдаҡтар тутылдаша ҡыуанып:
«Ни хаҡы бар һайрарға был үҙ йырын!»
«Һантый – һармаҡ!» тип ситлектән сыңратыр
Һантыйҙы ла емсе берәй кисҡырын...
06.11.2014.

## Ҡытлыйәндәр ҡытлығы

Етмеш йыллыҡ «ожмах» осоронда
Ҡурсаусылар «ожмах» ҡапҡаһын,
Ҡапҡа сереп ыуалғас та, берүк
Таҡмаҡлайҙар сереү тапмаһын.

«Ожмах» менән «тамуҡ» дуҫлығы, тип,
Был тапманы заман данланы.
Етмеш йәшен тиргән ҡапҡасылар
Малайлығын һаман һалманы.

Ҡытлыҡәләмовтар, ҡытҡылдашып,
Ҡотҡо ҡоя башҡорт рухына.
Ике йөҙлө бысаҡ: һәр икеһе
Ҡырҡа бер үк тормош торроғона.

Мөслөләре, бөклө-мүклеләре
Бишек йыры йырлай – «хаҡлы йыр»:
Ике йөҙлө бысаҡ булһа һәр саҡ,
Дуҫлығынан дүнмәҫ ҡотло ер!

Белдек инде, белдек! Бишек элдек,
Бишек йырын мөсләп йырланыҡ.
Шайтан алмаштырған балаларҙы
Ҡытлыҡәләмләнеп ҙурланыҡ.

Дуҫҡайым, тип, алһа ҡосағына
Ҡытлыйәнде «ҡотло башкирин»,
Ҡытлы еңдән – бысаҡ: арҡаһына
Ҡаҙалыуҙан осто баш ҡырын...

Башһыҙ башлыҡтары күбәйеүҙән
Аҫабалыҡ башын юғалтты.
Башы юҡтың теле, намыҫы юҡ.
Дуҫлыҡ тыуҙы ҡыҫыр тулғаҡлы...

Башһыҙ башҡорт -- булды бошмаҫ маңҡорт,
Телергә юҡ хатта теле лә.
Баш урынына ҡытлыҡәләмовтар
Бушҡыуығы өрөп тегелә...

Йыһандай киң дуҫлыҡ өлгөһө, тип,
Мандытабыҙ маңҡа маңҡортто.
Батырҙарын бахыр итеп барын,
Йомшаҡ түшәп ҡаҡка ултыртты...

Зәңгәр экрандары зәңгәләнә,
Мәсет мөнбәрҙәре лаф ора:
«Тише воды, ниже травы буллл! --
Әҙәплелек шуны бойора!»

Һәй әҙәпле башҡорт! Һай ғәҙәтле! –
Балаçланып ергә төшәлдек.
Аҙғынйәндәр аяҡтарын һөртә –
Дуçлыҡ дөкәнендә көйшәлдек...

Ауылдарҙың алйый алғырҙары...
Мәктәп, балнис, клуб ябыла...
Ере ҡала – баçҡын баçып ала,
Баçрауланыр Урал тауы ла!..

Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы, тиеп,
Түреңдән тай – үрләт күршеңде!
Тупһаңдан уҡ тибеп осороуын
Дуçлыҡ һана! Тартма керешеңде!

Сөнки башҡорт – дуç йәшәүсе баш йорт,
Башын быcаҡ ҡырһа, ҡырҡһа ла!
Уралыңда ҡытлыҡәләмовтар
Ҡоро ҡала – ҡырҡмыш йыр ҡала!

Ә һин,
Йыһат,
кит!
Һең йәһәт!!!
Ҡырҡмыш йырҙар ерҙә зауыҡлы!
Шулай тиҙәр... Әммә тыуа ирҙәр!
Керештәре ҡаты һәм уҡлы!

07.11.2014.

## Бахырлыҡ

Ләпелдәүек ләплутаттар ләпелдәй
Көндө төнгә ауыштырыу файҙаһын.
Көнөм бөтһә, телем бөтһә, нишләрмен?
Ил инәһе Рабиғалар ҡайҙа һуң?!

Ил инәһе итеп кемде кемләйбеҙ?.. –

Йәпләнә лә илҡырҡмышҡа йәнәшә,
Тутыйғошлоҡ ятламаһын янтыҡлап,
Йән алыуҙың «йәмле» йырын көйләшә...

Ил ағаһы ҡылып, кемде ҡотайттыҡ?.. –
Кендегенән түбән кимәл үтмәне.
Йырлай-йырлай эсте илдең ҡаймағын,
Ышҡылғандан ыштан төбө кипмәне...

Фирҡәләрҙән күркәләнеп күрктеләр
Мөнбәрҙәрҙә кәүек ярма ярырға.
Конституцияны көсләкләргә,
Асыҡ ишектәрҙе тибеп ябырға...

Ни күрәбеҙ: ҡалдыҡ мәктәп, балнисһыҙ...
Ауыл ҡуба, ҡамғаҡланып, ҡалаға.
«Мама» тиеп сабый теле телләнһә,
«Иван» аты йәбешер һәр балаға...

Башлы тигән башлығыбыҙ – йомоҡкүҙ,
Ҡыубашланып ҡыуһа илде, нишләрбеҙ?
Нишләмәбеҙ – бары сүбек көйшәрбеҙ,
Тешләмәбеҙ – бары телде тешләрбеҙ...

Башҡорт иле башын юйып башҡара... –
Башҡаларҙың башы беҙҙең муйында.
Кәпәсбаштар, яулыҡбаштар – ҡыуыҡбаш,
Ҡыуығына ҡыуыу ғына уйында...

Ҡоролтай тип ҡорғаны ла ҡороһон,
Күҙен йомоп кеүәҫлектә күмһәрҙе.
Батырҙары – бахыр бары... көйшәнеп,
Илсәнлеген билсәнлеккә түңкәрҙе.

Ил инәһе Бәндәбикә ҡайҙа һуң?! –
Һөйәктәрен хатта алып киткәндәр...
Урал батыр мәретенән уянмай –
Уяулыҡты ялағайлыҡ иткәндәр...

Ҡайҙа, ҡайҙа Салауаттың ҡылысы?!
Ҡылйыуланмыш ҡылйыланды ҡырҡырлыҡ?
Ҡында ҡынйып ҡыуарғас ил намыҫы,
Батырлыҡты батыра был бахырлыҡ.

10.1102014.

# Ҡулсырлыҡ

I

Бороно китек-митек борон замандарҙың
Ҡулсырлығын аныҡ ҡына белмәйем.
Шырпы сыҡҡас, бәғзе шырпый бәндәләрҙең
Хәтәр уйындарын ғына һөйләйем.

Ут ялманы бер көн тоташ ауылды –
Ихатанан ихатаға күсте ут.
Һүндерергә һис бер форсат булманы –
Өйҙәрен дә, бейҙәрен дә итте юҡ...

Торонбаштар тороп ҡалғас беленде:
«Бөтәһенә себен икән минауат!»
Ихатала шырпы тотоп уйнаған
Балаларға килеп ҡунған ул ҡанат.

Сабыйҙарға ғына хас бит ҡулсырлыҡ --
Уйнап ҡына улар уймаҡ уйғандар:
Себендәрҙе ҡыуабыҙ, тип, ҡуранан,
Аҙбар һаламына шырпы һыҙғандар...

II

Мең туғыҙ йөҙ ун дүртенсе һанала
Һалам менән шырпы ифрат күбәйҙе.
Серелдәүек себендәре үрсене,
Һерелдәүек ҡулсырҙары түл йәйҙе.

Һәй ҡурҡыныс, ҡулсырланһа атайҙар!
Шырпыға бит улар хужа! Ут – ҡулда!
Бәндәләрҙән себен яһау әмәлен
Белә улар болаланған «хаҡ юл»да...

Шырпы һыҙып ут ҡабыҙыу донъяға
Бер ни тормай, ҡыуыу өсөн себенде.
Герман – Рәсәй тигән донъя һуғышын
Тоҡандырып, себенде, тим, кем еңде?..

Австро-Венгрия йортоноң
Һаламына ут төрткән ҙур ҡулсырҙы
Мыйығынан һөйрәп һелкеү урынына,
Шырпыһынан яндырҙыҡ дәү осорҙо...

III

...Береһе «фюрер», береһе «вождь» (юлбашсы) –
Ике йортта ҡулсырлана шырпысы.
Бер-беренән себен яһап яҫҡына –
Тар уларға Ер шарының ҡыртышы.

Ике яҡтан шырпы һыҙып уйнайҙар:
Алданыраҡ кем өлгөрөр, кем ҡыуыр!
Ике баштан тоҡандырғас һаламды,
Ҡитға яна! Ҡулсырлыҡты кем быуыр?!

Быуылмай ул! Тороп ҡала ҡулсырлыҡ!
Баяғы уҡ шырпы – ҡулсыр ҡулында!
Атайҙарҙың ҡулсырлығы ҡурҡыныс
Шырпы һыҙып себен ҡыуыу юлында...

IV

Ике мең дә ун дүртенсе һанала
Ирлек һандалында ирҙәр һынала.
Шырпы тотоп тыуа бәғзе дыуамал –
Ҡулсырлығы ҡул осона йыйнала...

Ах был себен! Тынғы бирмәй бызылдай,
Хас та фашист! Сәбәләнә оло йорт.
«Һайлауҙары – майлау», тиеп тызылдай...
Оло йортта себен гиҙһә, була хөрт...

Һаламы ла етерлек тә... төрт кенә! –
Шырпы ҡулда! Ил хаҡ юлда – бәхилләй!
Әммә, әммә... теге бахыр ауылдай,
Үҙең ҡуша янырһың, тип, йән йәлләй...

Төртмәһәң дә, төртөрһөң был себендән!
Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы бар тағы...
Ут күршеңдә майҙан асҡан себендәр
Килеп тулһа... билдәлелер аръяғы...

Шуны күреп туҙғышмаһын бындағы –
Шырпы һоноу – оло һауап, күршегә!
Ҡулсырланып ҡыуһын фашист себенен –
Ирлек кенә өҫтәр атай кешегә!

Эй ут дөрләй! Ҡыуаныша ҡулсырҙар!

Һауаланып уйнай тамуҡ уттары!
Тик шунығы: риза түгел уйынға
Ҡитғаларҙың төрлө-төрлө яҡтары...

Хатта океан аръяғынан арбайҙар...
«Санкция»лап сал елкәне тунайҙар...
Себен ҡуна аҙыҡ аҙған кәштәгә –
Дөкәндәрҙән себен ҡыуып тулайҙар...

Иң хәтәре – шырпы ҡулсыр ҡулдарҙа,
Ҡулсырҙары йортобоҙҙо ураткан.
Шырпы әгәр был тарафтан һыҙылһа,
Һыҙыласаҡ шул уҡ шырпы һәр яҡтан...

Шырпыларын йолмаҡ була Ҡыш бабай,
Ялҡын яғып биҙәмә, тип, шыршыны...
Дөрләп янған ҡулсырҙарға ярҙамға
Оҙатабыҙ яңы һалам, шырпыны...

Балаларҙан боҫто бөгөн ҡулсырлыҡ –
Ҡулсырлана ирҙәр, бөтөн Ер шары.
Өсөнсө ҡат көл итергә донъяны
Шашынабыҙ... Уймаҡ уйын был яңы...

29.11.2014.

## Крымнаш

*Башҡортостан Яҙыусылар берлегенең*
*80 йыллыҡ юбилейына*

Крымнаш бит, дуҫтар, Крымнаш! –
Елкенеүҙән аҡыл сөйөлә.
Аҡылыбыҙ күсһен Ҡырымға!
Ел ҡалһа ла ярай мейелә!

Елғыуарҙың елле кеҫәһе –
Һәр ҡырымдаш ҡосһон миллион!
Кеҫә төбө елләү хаҡына
Ил бюджетын ҡыҫһын ел-уйын!

Бюджет бүстәк беҙҙәй ирҙәргә! –
Уралдың күп алмас, алтыны!
Аукцион сүкеп осортһаҡ,
Елгә дөрләр йөрәк ялҡыны!

Ялҡынланып ерҙе сорнарбыҙ,
Планетаны ялҡын уратып!
Елле елгә ҡаршы төкөргән
Бәндәләрҙең хаҡын хурлатып.

Ялҡындан тик ялҡкан Крымнаш, --
Ерҙәре нык көйә ялҡындан.
Һуғарырға етмәй һыуҙары...
Ҡыуан еле ала алҡымдан...

Крымнаш шул тоже горе наш! –
Көлкөп ятыу беҙгә ярамаç!
Ағиҙелде, Яйыҡ, Өфөнө
Крымнашҡа борһаҡ, ер янмаç!

Их, килмәй шул, килмәй әхүәлдән...
Урал батыр ырып ҡалдырған.
Бирер инек Урал тауын да,
Урал бирмәç... баштар ҡаңғырған...

Их Крымнаш, беҙҙең Крымнаш,
Ни хәл генә инде итергә?
Әллә, тимен, булып ҡырымдаш,
Түрә-ғара күсеп китергә?

Эйе, эйе, дуçтар, китәйек!
Гөл итәйек көйгән саңдарын!
Комфорт кәрәк әммә беҙҙәргә
Тәүбаштан уҡ! Күсеү ғәмдәрен

Күсерәйек практик ғәмәлгә:
Ҡымыҙға бит күптән күнектек!
Ебәрәйек тәүҙә бейәләр –
Ҡымыҙ бешһен ҡыҙҙар күп итеп!

Бал ҡорто һәм Урал йүкәһе
Бара торһон беҙҙән алдараҡ.
Бында шиңгән мәктәп, балнистар
Крымнашта ҡалҡһын ялтырап!

Яслеләр ҙә күсһен етерлек,
Сағаларҙы беҙҙең бапларға.
Һанауниктарҙың иң һанлыһы –

Маҙаларҙы беҙҙең һаҡларға!

Йолҡоп алып Урал ҡурайын,
Ултыртайыҡ Крымнашҡайға.
Тамырланып иң шәп ҡурайсы,
Йәм өҫтәһен тәмле ашҡайға!

Халыҡ шағирҙарын үрсеттек –
Ҡырымлашһын берәй тиҫтәһе!
Башлыҡ үҙе башлап барғанда
Бик теләр бит мәҙех ишетәһе!

Крымнаштың башлы башлығы
Аҡтау төбәгенә баш итер.
Һыҡтап ҡалған Урал иленең
Моңло бәғеркәйен таш итер...

Ҡәҙимгенән ялһыҙ ялпылар
Ятып ҡалыр ҡатып Уралға.
Шулар араһында үҙем дә
Ошо йырҙы йырлап торам да!

Башһыҙ, ашһыҙ тороп ҡалһаҡ та,
Башйортонан биҙмәҫ башыбыҙ.
Ә шулай ҙа Крымнаш яғына
Башты бороп ҡына – яҡшыбыҙ...

10.12.2014.

## Ялмандар

Ялағайҙар менән тулды донъя, --
Ялманыусы ялман-ҡомағай.
Ян-яғына ялғап яландырта
Ил башҡайын борған ил ағай.

Ил ағаһы, тиһәк, ил ҡазаһы, --
Кимерәләр ҡаҙна ҡаҙыһын.
«Аға» баға, илгә илһам таға,
Илаһилап ялман яҙығын...

Алдын-артын ялай яллы ялман,
Ялһыҙҙары – ҡалған килбәтен.
Әсәһенең тапап әсәлеген,

Башлап бара «ялман милләте»н.

Яңы «милләт» ялғай илгә ғилләт –
Ил намыҫын ялмап кимергән.
Намыҫ намы ҡалғас илдә наҡыҫ,
Намыҫһыҙҙар намы һимергән.

Намыҫты ла ялман яһанылар...
Намыҫ инде иреп ялана.
Яланған ир -- иреү эренлеге, --
Ялманлыҡҡа ағам ялғана...

Ялғанмаһын нисек, ялағайлыҡ
Ҡанунланып үрҙән ялғанғас?!
Ялманлыҡты йылдам ялғатмаһа,
Ҡалыр ине «король яланғас»...

Кимерәләр кимтеп ил иләүен,
Иләктәрҙән ирҙе үткәреп;
Иләк өҫтөндәге ил ирҙәрен
Иләү сүплегенә түңкәреп...

«Аға» инде түгел ил ағаһы –
Ялмандарҙың иләү башлығы.
Илен, телен ялман яһатырға
Егеләләр ялман хаслығы.

Ерһеҙ (гүрһеҙ!), ғәрһеҙ ҡалып, ирҙәр
Ҡамылланыр, ҡағып Уралын.
Ялатҡанға ялғар әсәһен һәм
Урал батырының ҡоралын...

Нәҫелләнмәй шиңһә нәҫелдәре,
Кәрәк имәс мәктәп, балнисы!
Маңҡортланып, моңһоҙ маңҡаланып
Ялаусыға ҡалһа ил тосо,

Иләү башлыҡҡайы, баш кәйелтеп,
Ялмар үрҙән ялау хоҡуғын...
...Һуңғы ир мин, ҡалып яланмайса,
Яҫауlармын Урал мылтығын.

20.12.2014.

## Кроншпан-Крематорский

Тарих үҙе башын вата бөгөн:
Кем алдаған, кеме алданған?
Ҡара йорттоң ҡара шәүләләре
Ҡырғын-шпананы яллаған.

Кроншпанский тиҙәр уны –
Крематорий тейеш һалырға.
Тамуҡ шайтандары саҡыртылған
Урал урмандарын яғырға.

Суйын юлы шпан-шпанаға
Тарттырылған – уҫлап ауыҙы.
Балға – дегет, шайтандарға һағыҙ
Ағыҙасаҡ ҡайын ҡайыҙы.

Шаулап торған йәшел ылыҫтарҙың
Ҡуптарылыр төбө-тамыры.
Кроншпан крематорийына
Утын кәрәк, шайтан алғыры!

Сәсәй-сәсәй тамуҡ киҫәүҙәре
Ыҫмаҡлағас һыуҙы, һауаны,
Ҡараҡ йорттоң ҡараҡ шәүләләре
Әжәлләтер һуңғы дауаны...

Ул әжәлдән янып төтәй, тиҙәр,
Күктә – ҡоштар, һыуҙа – балыҡтар.
Тәмәкеһен ҡапмай эстән төтәп
Көлләнер, ти, хатта халыҡтар...

Крематорий сөнки күкрәктәрҙә
Бар йәнлектең, һәр бер бәндәнең!..
Гүр хәйерен һәр кем үҙе бирһен,
Ҡараҡ кеҫәләр көр бәҫләнһен!

Халыҡ – байлыҡ: башкөлләйгә янып,
Көлдән килер кемгә алтыны?
Кроншпанский-шпананы
Яға алмаҫ, тиҙәр, ялҡыны...

Шайтан һумалаһын ҡайнатырға
Киҫәүләнер үҙе, ялланып.

Ҡараҡ шәүләләре шул тамуҡҡа
Уның менән төшөр ялғанып!
30.12.2014.

## Мөһөр

Сығармайҙар һис бер китабымды --
Юғарынан мөһөр һуғылған.
Ғәҙеллек һәм Хаҡлыҡ шаңҡытылған,
Ил Намыҫы алйып йығылған.

Ҡара мөһөр ҡарай маңлайымдан,
Салауаттың «ВОР»лы йөҙөндәй.
Ҡайсылатып ҡыйған ҡамсылары
Киҫә, киҫә йәнде, өҙөлмәй...

Башҡортостанымдың әсәйлеге
Семтей, семтей, үгәй әсәләй.
Ҡоролтайҙың ҡырҡмыш ҡарлауҙары
Теләтелде, яман силсәләй.

Үгәй әсәйләнгән Күк Уралым
Күкһәүҙәргә имсәк имеҙә.
Үҙ улдарын убып упҡындарға,
Үбә-үбә өрәк тергеҙә.

Өрәк йөрөй өрөп өрөнтөһөн –
Китә, киңгәп, Урал тоҡомо.
Көләс көндө төнгә төңөлдөртөп
Ҡара ҡарпый – Шүлгән шауҡымы.

Аҡ күңелдәр күмһеп ҡаралана,
Яралана ярһыу яраны.
Түштәренә көмөш-көлтөр тегеп,
Ҡөҙрәтләнә көндөң арамы.

Бронзаланып ҡалҡа майҙандарҙа
Көмөшләнгән зәғиф-зәнкиҙәр...
Ҡара мөһөрләләр ҡарай күҙгә –
Буранғолдар, Бабич, Зәкиҙәр...

Ҡасан килер, әллә килмәҫ тәме
Киңгәү башҡорт кинәт аңына?

Йоҡлатып бит уны юхалары
Ҡәбер ташы ҡуйҙы янына...

Буйымда уҡ быуып туңдырылған,
Тыумайынса ҡалған хитаптар
Тулғаҡлатып туҡмай тыу толҡамды, --
Ил белмәҫлек бөтмәҫ ғазаптар...

Мыйыҡ бороп, сүс һаҡал һыпырып
Хуплай үрҙән мөһөр муллаһы:
Ҡара мөһөрҙәргә – ҡар ҡарыуы,
Көмөш-өлөшкә – һый-ҡалъяһы!

Бөйөк Мөхәммәтша Буранғолдоң
Ҡатарында ҡатам, ҡанһырап.
Айырма шул: «ҡара ҡарға»лары
Килмәй төнөн, ҡорбан-йән һорап...

Ҡарыулыға матҡып ҡара мөһөр,
Муртайталар мөслө башҡортто.
Нисә быуат инде бала быуҙы!
Әсә ҡарынында баш ҡырҡты!..

Башҡортлоғон илдең ҡырсып ташлап,
Мөһөрсөләр мөҙҙәт яҡшырта.
Бөгөн инде башҡорт юхалары
Ҡара мөһөр һуға башҡортҡа.

08.03.2015.

## Көпәш-кәбәк

Көпәш-кәбәк ҡунды түремә,
Мыйыҡ бороп, кейеп көпәшән.
Эсе – бушлыҡ, ҡара ҡыуышлыҡ, --
Ҡабыҡ ҡыуы ғына, бөтәшкән.

Мыйыҡ осҡайҙары мәскәүле,
Мәселәнеп сыҫкан ауларҙай.
Табынымдың татлы ниғмәтен
Ҡыуыш бушлығына бауларҙай.

Ил ағаһын алыр түрбашта

Мыйыҡ бороп кәбәк ултыра.
Ултыраһы ғаиләм урынын
Көпәш көндәштәре тултыра.

Башы – бушлыҡ, аҫты ҡыуышлыҡ –
Көпәшәнле кәбәк-көп кенә.
Мыйыҡ мәскәүенә мәскәүләп,
Ризыҡ һура төпһөҙ төбөнә.

Йәнемде -- бар рухи сәмемде
Үҙемдең үк һура эсемдән:
Көпәш-кәбәкләнә есемем...
Осам табынымдан... бисәмдән...

Ел сығарып йүнһеҙ егенән,
Һыҙғырталар йәнде һыҙлатып.
Көпәшләнгән көпшәк өйөмдән
Тибәрәләр мине, «выжт!»латып...

...Ҡуна, ҡуна ҡотһоҙ ҡибланан –
Йортобоҙҙо кәбәк тултыра!..
Һәр бер өйҙөң һәр бер түрендә
Мыйыҡ бороп кәбәк ултыра...

Мыйыҡ мәскәүенә сырмалтып
Маңлайымдың урал-урайын,
Маңҡортланып һалам маңҡаға
Башҡорт моңло башҡорт ҡурайын...

Кәбәкләнгән өйөм, хуш инде! –
Көбәкләнеп аҙам Себергә.
Буранбайҙар эҙен эҙәрләп,
Көбәк-эттәй еҫкәп йөрөргә.

Еҫем-ҡоҫом ерҙән елләнер,
Йән һатырман, һалып бурысҡа.
Кәүек башым, кәбәк тоташым
Мираҫланыр меҫкен ырыҫҡа...

Мәсем тауы – «Максим» тау хәҙер...
Уралым уҡ сәсәр кәбәктән...
Бирешкәстен бире ҡорона,
Биртенеүҙәр -- беҙҙең ғәҙәттән.

Хатта маңҡорт маңҡый маңкаға,
Мәскәүлеләр һурып ҡартаһын...
Оран: «Башҡортостан – һәр остан
Кәбәгстан тиеп маҡталһын!»

Мыйығынан матҡып ормағас,
Үҙ Уралым инде миңә ят.
Һыбыҙғыһын кемдең һыҙғыртып
Һуйыр икән йәнде был аят?!.

Ҡалды инде йүнһеҙ елләнеп,
Телһеҙ тимгелләнеп йәшәргә:
Салғыйымды уйып күт ямап,
Танауымды ҡыйып ашарға...

24.03.2015.

## Ҡаза

Ямантауҙы һатҡан Мортаза
Башҡорт өсөн булды бер ҡаза.
Торатауҙы, Йөрәктауҙы ла
Һатыр ине һәм Ҡуштауҙы ла, --
Аллаһынан алды ҙур яза,
Ояһынан ауҙы Мортаза...

Ҡоллоҡ ҡолон китте ултыртып,
Ҡол ҡылып һат, тиеп ҡотортоп.
Ҡолонланы – шылды хоҡуҡтар,
Аçабалар -- булды мәхлүктәр...
Ҡолонлай ҙа ҡыла ҡиәмәт,
Ҡиәмәте – илгә хыянат...
Теленә лә илдең хаҡы юҡ,
Теле юҡтың, тимәк, заты юҡ!..
Заты юҡтар елгә гел оса...
Йот-килмешәк, көлөп, ил быса...
«Минән һуң да ҡалды, -- тип, -- ҡаза!»
Йыуаталыр йәнен Мортаза...

Күрә Аллаһ әммә быны ла –
Ҡолон һалыр ҡоллоҡ ҡоло ла!

21.04.2014.

## Конституция

Башҡортостан тигән ыҫтанда
Конституция бар ине.
Исемкәйе генә тышында, --
Есемкәйе йәнгә зар инде...

Заложниктар яһап аттылар
Тәүҙә ыстатья һәм һүҙҙәрен.
Азат ҡылғандарын ҡылмышлап,
Соҡонолар йән һәм күҙҙәрен...

Юҡ, үҙҙәре түгел – көндәре
Иблес игелеген үтәне:
Йәнеһайҙар, зинхур, баһбайҙар
«Төп Закон»дың заңын мөнтәне.

Алғайнылар сөнки йәнкәйен
Ыстатьяһы һайын һыпырып,
Башҡортостан тигән ыҫтанды
Хәрефтәре талай ҡотороп...

Үҙаллылыҡ – инде үҙ алһыҙ,
Арты ғына, әнә, һөйрәлә.
Милләт тигән милек кәрәкһеҙ –
Йөрөмәһен беҙҙең эргәлә!

Ҡалғандары – ҡалғый аранда,
«Өф!» тигәндән өркөр Өфөңдәй.
«Хужаһы – һин!» тигән ҡанундар –
Ас тамаҡҡа икмәк еҫендәй...

Йырларға йор телем бар ине,
Хәреф хөргән – телем көрмәлгән.
Хоҡуҡтарҙың хаҡлыҡ-хаҡтары
Шайтан шауҡымында керләнгән...

Хәрефтәре хөр ҙә – кәре юҡ...
Йәне юҡтың йәнгә йәре юҡ...
«Һауаң» тиһә – һулар һауаң юҡ,
«Һыуың» тиһә – һыулар һыуың буҡ...

«Ереҥ» тиһә – тая табаның,

Хәрефтәр бар, хәрез ҡайҙа һуң?!.
Ерең-һыуың-һауаң – хәрефтәр, --
Йырла, башҡорт, данлап файҙаһын!..

...Йәмһеҙ йәнекәйеф-йүнһеҙҙәр
Булған, тиҙәр, юрист улдары.
Конституция ҡаҡларға
Ултыртҡандар, тиҙәр, юғары.

Рәйес булып хатта алғандар,
Хәреф хөрләп йәнде алырға.
Инде «Башҡортостан» тигәндән
Тейеш хәрефтәр тик ҡалырға...

25.04.2015.

## Иблес, Батша, ҡара тап

Иблес булған ул саҡ фәрештә
Аллаһыға хеҙмәт итеүсе.
Еткергәндәр Аллаһ әмерен
Ябраил һәм Иблес икеһе.

«Мең яҡшыға булһын бер яман», --
Ябраил, ти, теүәл башҡарған.
«Мең яманға булһын бер яҡшы», --
Киреһенсә Иблес атҡарған...

Ябраилдың ҡанат аҫтында
Аҫылланған ерҙә яҡшылыҡ:
Мең яҡшының аяҡ аҫтында
Интеккән бер яман-шаҡшылыҡ.

Аллаһының изге еренә –
Уралға нәҡ Иблес уҡталған.
Мең яманды унда тыуҙырып,
Бер яҡшыға нәфрәт туплаған.

«Башҡорт, -- тигән Аллаһ берәүгә, --
Раббыңдың бул һынмаҫ ҡашҡаһы!
Яманлыҡты еңеп бер үҙең,
Өлгө алһын ерҙең башҡаһы!»

Иблесйәнде ләкин ҡалдырған:
«Тәүбә ҡылыр, айнып төҙәлер...
Ябраилдың яҡшы үрнәген
Өлгө итеп йәне йүнәлер».

Төҙәлмәгән Иблес, төңмәгән –
Иблеслеген ҡылған аҫтыртын:
Юҡ итергә ерҙән яҫҡынған
Раббыһының Урал, башҡортон...

Ябраилдан яман көнләшеп,
Эшләй биргән һаман киреһен:
Мең ямандың ҡуйған башына
Батша итеп яман береһен.

Мәскәү йылғаһының убаһын
Ураттыртҡан таштан, мәскәүләп.
Керәмәлгә, тигән, кермәһен
Һис бер яҡшы, хатта мүкәйләп!

Мәскәү биргән ҡылдан нескәрәк,
Мәскәүлә, тип, яҡшы-ҡолдарын.
Мәскәү йылғаһына батырып,
Теүәлләрбеҙ түтә юлдарын!

Килтергәндәр илдән мәскәүләп
Ябраилйән һәр бер яҡшыны.
Тирмә ҡороп боҙға, мәкеләп,
Кереткәндәр: «Табын аш-һыулы

Көтә һеҙҙе тирмә түрендә!» --
Керә-тора халыҡ – һаны юҡ.
Береһе лә сыҡмай тирмәнән,
Боҙ аҫтына китә – ҡаны юҡ...

Башҡорт балҡый ләкин Уралда –
Ала алмай Иблес ҡотҡоһо!
Мәскәүҙәрен өҙөп килелә,
Яҡшылыҡтың яҡшы тотҡаһы!

...Иблес илә Батша-мәскәүле
Хәүефләнеп ҡора ҙур ғәмәл:
«Аллаһының борһаҡ ҡояшын,
Һуңғы хеҙмәт ҡылыр был әмәл!

Раббылары сөнки яңылышҡан –
Көн йөҙөндә ҡалған ҡара тап!
Ҡара таптың ҡара ҡырауын
Башҡорт Уралына ҡаратһаҡ,

Һүнер ерҙә һуңғы яҡшылыҡ!
Сәскә атыр яман-шаҡшылыҡ!»
Иблес ҡөҙрәтенең сиге юҡ –
Бора башлағандар ашығып...

Ябраил, ти, осҡан асманға,
Раббыһына хәлде еткергән.
Ирек ҡуйып ике яманға,
Аллаһы, ти, эшен бөтөргән:

Ҡара табы көндөң боролған
Иблес менән Батша башына...
Ошо хаҡиҡәтте иҫләһен –
Сама белмәй кемдәр шашына...

11.05.2015.

## «Теге донъя»нан репортаж

Быйыл (йәғни 2015 йылдың 27 майында), уйламаҫтан-көтмәҫтән, үҙемдән генә түгел, хатта Ғазраил әфәнденән дә һорап тормай, «Башҡортостан» гәзитенең «һәр фәнгә лә маһир» мөхәррире Нияз Сәлимов мин фәкирегеҙҙе туп-тура «теге донъя»ға (баҡилыҡҡа) бырақтырҙы – гәзиттең шул көнгө һанын ҡарағыҙ: «Йыһат Солтанов (1932 – 2015)» тип, фанилыҡтан китеүем шаҡырайтылған... Моғайын, Йыһат атлы ҡәләм эйәһен ифрат яуаплы эшкә – «теге донъя»нан репортаж яҙырға ебәрәлер, тип төшөнөп, хәсрәтләнә-хәстәрләнә күҙем эленеп киткәйне, үҙемде кинәт баҡи донъяла тойҙом...

Барғас та уҡ Ябраилға өндәштем:
«Күрһәтмәһен үтәп маһир иптәштең,
Бурыслымын бахырҙарҙы күрергә,
Бәйнә-бәйнә уға хәбәр бирергә –
Бында нисек йәпләшкәнен һәр кемдең,
Зинһар, әшкәрт миңә!» -- тиеп үтендем.
-- Ярар, -- тине, кире ҡаҡмай Ябраил, --
Хәбәреңдән фәһем алһын аңра ил!
Мәңгелеген-баҡилығын уйламай,

Фанилыҡтың өс көнлөгөн шәйләмәй,
Илен, телен һата бәндә! Намыҫын
Һалып тапай – белеп торам барыһын!
Бәйнә-бәйнә бәйән ҡылһаң әгәр ҙә,
Ғибрәт бирер ташҡа баҫкан хәбәр ҙә! –
Һәм Ябраил күрмәгәнде күрһәтте!
Белгән булһам... тешләр инем терһәкте!..

Юлыңғайы юлбашлыҡтан һораштым:
«Хәле нисек Венер Йәнбәк ҡорҙаштың?»
-- Хәле яҡшы. Ожмахта ул эскерһеҙ.
Ожмах ҡағиҙәһен ятлай бик әрһеҙ.
«Тойғон ҡусты? Киткән ине... Ҡайҙа ул?»
-- Тура түренә ожмахтың алды юл.

...Алдыбыҙҙа оҙон һәм киң коридор –
Ике башта ике ишек тора ҙур.
Быныһынан хушбуй хушы аңҡыла,
Тегеһенән һумала-еҫ ағыла...

Ике ишек араһында шул ара
Өйөр-өйөр ҡара халыҡ болара:
Ҡасалар ҙа һумалалы һаҫыҡтан,
Хушбуй еҫкәнәләр ярыҡ-ҡыҫыҡтан.
Ябраилды күргәс – этеш һәм төртөш:
«Хушбуй миңә, миңә!» -- тигән иҫкәртеш.
Бер-береһен ауҙаралар, йығалар...
Ғыжылдатып муйынынан һығалар...
Төҫмөрләнем үҙәгендә көрәштең:
Әсғәт, Нәжми, Ғәзим, Нәжиб-керәшен;
Денис Исламһыҙы бергә бутала
Бер йотомлоҡ хәмер көҫәп тупһала...
Олтангорой Рәшит, Динис, Булаттар –
Блат артынан ҡыуыусы братттар,
Ҡаға алмай бында блат ишеген,
Тетрәнәләр тойоп тамуҡ тишеген... –
Кем генә юҡ, кем генә юҡ өйөрҙә!
Теҙә китһәң, булмаҫ-булмаҫ, тиерҙәр...

Ҡара йөҙлө был тоҡомдоң имеш тә
Гонаһы ла, сауабы ла бер кәштә.
Ябраил, ти, тейеш үлсәп ҡарарға,
Ҡайһы ишеккә ҡайһыны ярарға...

Ҡара өйөрҙәрҙе һөрөп бер ситкә,
Мине оҙатыусым эскә керетә.
Нимә күрәм! – хуш һауалы гөлбаҡса!
Хур ҡыҙҙары бейеп йөрөй шул саҡта.
Хозур ҡоштар хозурланып һайраша,
Ҡарап торһаң, тылсымлы бер тамаша!
Фаниҙағы дуҫтарыма оҡшатам,
Ҡанаттарын күреп тағы шаҡ-ҡатам:
Ҡошҡа әүерелгән, эйе, бәндәләр –
Шундай икән ожмахтағы ғиләләр!

Һабаҡ бирә мин-бәндәгә Ябраил:
-- Был ғиләне, аңшаймасы, аңра, бел:
Бына Уран... Фанилыҡта тар урам
Тейҙе уға... Тик төңөлөп торманы –
Илен иңләп йырланы ла йырланы.
Һабантурғай булып бына сыңраны!

Диананың тыңланыңмы йырҙарын?
Йөрәгенән һыҙҙы Урал моңдарын.
Һандуғасы булды хәҙер ожмахтың,
Фани туңйән, туңҡолаҡтар шаҡ-ҡатһын!

Кәкүкләнеп күкелдәйҙер Фәриҙә,
Теле тотлоғалыр өс ай йөрөүҙә.
(Фанилыҡта оҙонлоҡто үҙһенмәй
Ҡыҫҡалыҡҡа күскәнгәлер ерһенмәй...)
Өс айҙан һуң оҙон моңло тағы ла –
Килгән, тирһең, бында Урал яғы ла!

Саңҡ-саңҡ итеп саңҡый Урал бөркөтө –
Шамил Ҡолбарисов бит ул – йыр ҡото!
Биишева шиғриәтен ҡотланы,
Мөстәйҙекенә тәрилкә тотманы.
Мөстәнләнеп мөслө быуғас тамағын,
Китеп барҙы тамамламай һамағын.
Баһа белмәй фанилыҡта ҡолдар һис... –
Саңҡый мәңгел хозурлыҡта Ҡолбарис!

Был ни тылсым-моң ағыла баҡсанан –
Бар ҡоштарҙы әсирләгес саф аҙан!
Күк Уралы, Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмары
Ауаздарын ҡушҡан, тиерһең, бары!
Тылсым аңҡауынан хөрлөк һуҙыла –

Ғәзиз Әлмөхәмәтов был һыҙыла!

Тамуҡ ҡаҙанына ҡапҡан бахырҙар
Фанилыҡта фыртый ине, батырҙар:
Боғаҙына бөкө тыға алмағас,
Ҡара йортҡа ҡарауыллап ҡамағас,
Ишелгәстен ғәзиз моңдан таш диуар,
Ғәзиз башын иҙә һуғып шаштылар...

Моңо ашты ләкин ожмах түренә,
Тыңлаусылар – изге йәндәр – күренә:
Мөхәммәтша, Бабич, Афзал, Дауыттар;
Заһир, Имай, Әбүс, Бикбай, Яҡуптар;
Ғәли, Рәми, Муса, Рафай Сафиндар,
Хакимдарға баш бирмәгән Хәкимдәр;
Рәшит, Ғәйнан, Һәҙиә, Рабиғалар
Моңланышып ҡыла изге доғалар;
Шәриф, Харис, Тойғон, Даян ултыра,
Фани моңға баҡи моңон тултыра;
Ырымбур төбөнән мине сығарған,
Мөйөш биреп, «Һәнәк» эшен туғарған
Шат Идиәт ағай ҙа бар был ҡорҙа
Һәм Рафаэль Аҙнағолов – шәп мырҙа!

Йәнәшәлә былар менән – берҙәм ҡор:
Әхмәтзәки, Сөләймән, Муса-батыр;
Йомағолов, Ҡарамышев, Ҡулайҙар
Йотлоғошоп Урал моңон тыңлайҙар.

Ә һауала оса күпме фәрештә!
(Аллаһынан өлгөр улар һәр эштә).
Арала бар ап-аҡ кәфен-көпәйле,
Буйындағы тыумаған пак тәнәйле –
Тыуҙырмайса Ылауирҙан булғанды,
Ниңә икән баҡилыҡҡа юлланды?!.
Сеңләй йөрәк аҫҡайында тәнәйе,
Башҡортомдоң тыумай ҡалған йәнейе...
Әхмәҙиева Флүзә-шағирә
Тулғаҡланып, таба алмай илерә...
Сабый ғына фәрештәләр бишектә...

...Килеп еттек һумалалы ишеккә...
Асып керҙек, мәхшәр күрҙек бер юлы:
Ҙур ҡаҙанда ҡайнай ерҙең ир-улы...

Суйын ҡаҙан эсе – ҡайнар һумала,
Һумалала, сыйнап, кемдәр болғана...
Киҫәү киҙәп шайтан ҡаҙан ҡайната,
Бер ҡыҙҙырта ялҡынын, бер яйлата,
Боҡор-боҡор күтәрелә күбеге,
Күбек һайын ҡалҡа сәстәр сүбеге,
Бахыр баштар олой, яман үкерә,
Алҡымынан һумалаһын төкөрә –
Ҡаҙан ашып шап-шоп төшә һумала,
Төшкән ерҙә әллә кемдәр сыуала:
«Хап!» иттереп һөйәк һелтәгән эттәй,
Һәр һумала-төкөрөктө төшөртмәй
Йотоп тора бер-беренән ярышып,
Йотмағанды шайтан ҡыйнай орошоп –
Ҡуна башҡа ҡыҙған тимер киҫәүе
(Һәр меҫкендең ҡыйналмаҫҡа иҫәбе),
Йығылғандың йырып көргөй осаһын,
Һөйләүҙәре ҡыйын тамуҡ ҡиссаһын...

Ҡаҙан ҡайнап төкөрә лә төкөрә,
Төкөргәнен былар йотоп өлгөрә –
Фанилыҡтан булып холуй-ялағай,
Түрә күтен ялағандыр һәр ағай...
(Таныным мин уларҙы... тик баҙмайым,
Исем-шәрифтәрен бында яҙмайым...)

Ҡайнай ҡаҙан, күбек шартлап ярыла,
Һумаланан икәү үргә һарыла –
Мөстәй менән ҡосаҡлашҡан Ыратмир,
Башҡортлоҡто башһыҙларға килгән сир...
Тәфтиләү тарҡалғас шаң ҡарынында,
Эполеты – икәүҙең яурынында...
Улар менән бергә, фани саҡталай,
Сәйфи, Таһир, Ғилемдар, мут Атнабай...
Күмәк улар – предтар, замдар, пом-помдар –
Иблеслеккә хеҙмәт иткән тоҡомдар...
Барыһы ла яман олоп үкерә,
Холуйҙарҙың ауыҙына төкөрә...

Ябраилым әйтте: «Күреп ғибрәт ал:
Иман ине улар өсөн ҡөҙрәт, мал...
Тәфтиләүҙәр тәне – инде һумала...
Мөстәнлеләр сыйнай ана шуға ла!
Һумалаға ҡалғас былар ҡаҙанда,

Фанилыҡтан килер яңы команда!..»

Уй ҡурҡыныс! Улар бит күп ултыра –
Аҡ йортта һәм Ҡара йортта ҡотора.
Ҡотороғо ҡоторталыр илдәрҙе;
Теш ҡайралһа, тешләтәлер телдәрҙе.
Мәктәп, клуб, шифахана ябыла,
Телһеҙйәндәр Себерҙәргә ағыла.
Әрем, билсән биләне ил баҫыуын,
Ауылдар юҡ – зыяраттар бар йыйын...
Урмандарҙы ятбауырҙар киҫәләр,
Ил һыуҙарын килмешәктәр кисәләр.
Урыҫ бала таба башҡорт бисәләр,
Хатта йәһүд, татар булып үҫәләр...

Ә рухыбыҙ? – ура беҙҙе мөстәнлек,
Мөстәйлектән мираҫланып күскәнлек.
Китте... ләкин ҡалды китек ҡатаһы,
Шул ҡатала йөрөй иблес батаһы --
Ылауир тип ымланалыр шайтандан.
«Мөстәй – хоҙай!» -- тип доғалай һәр таңдан...

«Хоҙай»ы Күк Уралды күп тибәрҙе,
Бөйөк Буранғолдо Себер ебәрҙе.
Ҡырҡты аҫтан, ҡалҡһа башҡорт сәскәһе –
Яныбай, Зәйнәб, Йыһат аҙмы сәсәне...
Хатта фронтташы Нәжми Назарҙы
Судлашырға етештереп буҙарҙы...
Яҙышһа ла камил башҡорт телендә,
Тел имсәген тешләп өҙҙө тегендә...
Тәфтиләүҙең ләғнәтләнгән шәүләһен
Күреп, ҡорҙо фанилыҡтың хәйләһен:
Ғазраилы яҡынлашҡас һарайға,
Тотондо башҡортто яҡлап һайрарға...

Ылауиры, вариҫы, тим, шәп шилма:
Бурҙайлығын хоҙайлата шып-шыма.
Хәйләлекле сазын баштан башланы:
«Башҡорт яҡлы» булып ыҙан ашланы.
Алҡағыллы алас булды Рәмигә –
Аҫтыртынлап яҡынлатты мәрейгә...
Киҫә аҫтан – һуғып йыға киҫтәнһеҙ,
Күпме тапҡыр ҡанап ауҙыҡ иҫтән беҙ.
Һанай үҙен берсә сиған бароны,

Тәре танһый түше, ук̇а – яурыны...
Иблес иләүенә сумып к̇ашынан,
Иблеслеге ашып китте башынан:
К̇оролтайҙа Башк̇ортостан-балк̇ырҙы
К̇ороторға к̇ул күтәреп ултырҙы!..
Шайтан улы – башк̇ортмон, тип к̇оторҙо!

-- «Хоҙай»лығы к̇алыр бары төшөндә,
Күп к̇ыҙырмаҫ, к̇айнар ул да ошонда! –
Тине, к̇аҙанды күрһәтеп, Ябраил. –
Килтерәсәк уны ла бит Ғазраил!

Хәтәр, хәтәр миңә ошо киҫәтеү –
Минең дә бит гонаһтарым күп әтү...
-- Юк̇, һин, -- тине, -- һыймайһың был теҙгескә,
Сауаптарың баҫа бизмән-элгестә.
Иң мөһиме – намыҫыңды һатманың,
Баш эймәүсе колоннала атланың!

Хозурланып ошо бөйөк баһанан,
К̇алғым килде, биҙеп фани-яфанан.
Тик Ябраил әйтте: «Һине ебәргән
Темеҫкенгә фарман еткер үрҙәрҙән:
Тәфтиләүҙәр к̇айнаған ут-к̇аҙанда
К̇айнаясак̇ уның да мут команда!»

...Күҙ алдымдан юғалғайны Ябраил,
Хасил булды эргәмдә хас Ғазраил:
-- Аллаһынан өҫтөнлөклө ирме һин?!
Аҙып-туҙып ниңә бында йөрөйһөң?! –
Шытырлатып алды ла к̇ак̇ елкәнән
Күткә типте... Сык̇тым бак̇и-өлкәнән!..

07.06.2015.

## Көфөр Күмеркеләтов

Бер дуҫым бар ине ук̇ығанда –
Мөхтәр Тимербулатов, ир-фронтовик.
Танк батальоны комсоргын
Ярат̇кандар унда, фронтта, бик.

Тыныс тормошта беҙ, икебеҙ ҙә,
Һуңлабырак̇ бөттөк вуздарҙы.

Әммә башҡаларҙан элегерәк
Нығытҡайныҡ, буғай, выжданды.

Хәтеремдә: Мөхтәр фатирында
Фекерҙәрҙе көйләп ултырыу.
Ыштанһыҙ шуҡ малай, ғауғаланып,
Өҫтәл аҫтында эш бөлдөрөү...

Танауҙарға еҫе бәрелгәстен,
Һөйрәп алды Мөхтәр малайын...
Табын ҡото китте... әммә һөйөп
Иркәләнек шуҡлыҡ шалайын.

...Иркәләнеп үҫкән... Утыҙ йылдан
Күрҙем уны өҫтәл артында.
Тәпәш буйлы ҙур чиновник булып
Эш бөлдөрә дәүләт йортонда.

Еҫе сыҡмай... Әҙип ҡулъяҙмаһын
Төтәтмәйсә генә яндыра.
Көлө лә юҡ, автор күңелендә
Ҡара күмер генә ҡалдыра...

Күмеркеләтов тип – фамилия,
Көфөр тиеп исем бирҙеләр.
Күңелдәре ҡара күмерләнеп,
Эргәһендә күптәр бөлдөләр...

Ун биш томлыҡ Әҫәрҙәремдең мин
Тәүге томын илткәс нәшергә,
Ҡара күмерләнеп ҡалдым мин дә...
Күмер ғүмерләнеп йәшәргә...

Өҫтәл аҫтынан еҫ сығарыусы
Әүерелде күмеркеләткә.
Инде вузда ҡара күмер яһап
Хеҙмәт итә, тиҙәр, дәүләткә...
01.07.2015.

## Йыртҡыслыҡ

Тилберҙәрҙең теле таҫлаһа
Хаким осаһының хәлүәһен,

Телем менән телеп төҙөнөм
Намыҫымдың гранит ҡәлғәһен!

Бөйөк Буранғолдар юлынан
Бурандарҙы йырып етештем.
Мәңгелеген мәғрур халҡымдың
Ун биш томға һалып сер систем.

Башҡорт башлы асыр серемде,
Китаплатһам тос-тос томдарҙы!
Ләкин түрәләнгән суралар
Тота быуып изге ҡомарҙы...

Тирә-яғым – яһил-яуызлыҡ, --
Әйтерһең дә, бүре ҡоторған!
Ҡашҡалары ҡашлы ҡалҡыуға
Йырткысланып менеп ултырған!..

Оҡшаманы ҡашлы ҡашҡаға
Эйелмәҫ баш, сүкмәҫ тубығым.
Ҡулъяҙмала ҡата томдарым,
Ил намыҫы ҡата, ҡомоғоп...

«Ил ағаһы» тигән аҡаның,
Мине күреп, күҙе аҡайғас,
Әйтте берәү: «Көтмә башҡорттан,
Башҡортҡа ул файҙа яһамаҫ.

Сөнки тирәһенә тирмәнең
Ҡырҡ ҡәүемле ҡомаҡ һырышҡан!»
Киҫте хаким: «Тик үҙ башҡортон
Баға башҡорт, тиер бар дошман»...

...Үҙ тиреһе өсөн тартышып
Ауғас түрҙән башҡорт хакимы,
Алды биләп алғыр биләмен
Хакимланған татар тоҡомо.

Көрһөндөм дә ҡапыл ерһендем,
Хакимдарға барҙым йүгереп:
«Сығарығыҙ, зинһар, ситлектән
Томдарымды! Талдым, өлгөрөп!»

Тик шул уҡ хәл: юлым быуылған...

Әйтте бирәү: «Көтмә игелек!
Башҡортҡа ул бирһә яҡты йөҙ,
Татарынан татыр, һүгелеп!..»

Алмашынһа ла шул хакимдар,
Хөкөмдәре ҡала бер килеш.
Яныптйәнем биргәс башҡортҡа,
Башҡайыма – шул уҡ бер өлөш...

Илаһымдан иңгән илһамым
Тар ситлеккә бикләп ҡуйылған.
Тотҡонлоҡта туңа тыуымым –
Үҙ һөнәрем миңә тыйылған...

Әүерелтеп телһеҙ хайуанға,
Егерҙәр һәм һуйып ашарҙар.
Йыртҡысланып яна күҙҙәре...
Йыртҡысланып иркен йәшәрҙәр!..

Күптәр инде төптән сурыта:
«Алмаштырыу кәрәк ҡәғбәңде!
Белһәң кемгә йәнең бирергә,
Бейек осларһың ҙур кәбәнде!»

Төшөндөм дә яман өшөндөм:
Алмашыныу талап ителә!
Атам-әсәм, халҡым үҙгәрһә,
Үҙ итәсәк хаким эте лә...

Йыртҡыслыҡтың йыртҡыслығы был –
Ҡаңғыртып әҙип үлтереү.
Ватасаҡмын тибеп ситлеген!
Бурға булмаç ҡорбан килтереү!

Мең йыртҡыслыҡ ысын кешене
Әүерелтә алмаç улъяға!
Миллион йыллыҡ Башҡорт-Кешелек
Йыһат[14] булып тыуған донъяға.

04.07.2015.

## Һәйкәл

[14] Йыһат – изге һуғыш, ғәҙеллек өсөн көрәш.

Килде заман: Өфөм урамын
Ырмап ырай бронза кешеләр!
Бабич, Буранғолдар сиратын
Сирып ҡалҡа ҡатил ишеләр...

Ҡул сәпәкләп, сәмле алҡышлап
Ылау килә, күсер – Ылауир.
Бөҙрә башын болғап тәбрикләй
Бронзаланған буйлы бола-ир.

Тирәһендә ялай табанын
Мөриттәре – булыр бронзалар.
Уралымда баҡыр бөтмәгән,
Шуның менән бөтһөн ҡазалар!

Түгеп тирен металл хаҡына,
Көн-төн эшләй халҡым, егелеп.
Ғәзиздәрен көҫәп күрергә,
Игелекһеҙҙән көтә игелек.

Теҙелгәндәр ҡыҙҙар, уландар –
Нур-шәүләле шанлыҡ теҙеме:
Зәки, Муса, Әмир, Сөләймән,
Һәҙиәләр – тәҡдир түҙеме...

Баҡыр баҡмай ләкин уларға,
Тигелдәрҙә бронза иремәй.
Мөртәтлектең йөрөй фарманы,
Хаҡиҡәттең хаҡы йөрөмәй.

Һәйкәл һорап Зәки, Бабичҡа,
Нисә йылдар әрнеп-яндыҡ беҙ.
Буранғолдар торор торонда
Бөҙрәғолдар һынын алдыҡ беҙ...

Килер бер көн: күҙҙәр асылыр,
Хаҡлыҡ еле һелтәр күҙйәшен.
Бабаларҙың бабы күкрәп,
Күгебеҙҙе ялмар нур-йәшен.

Хаҡһыҙҙарҙың хаҡы түбәнләп,
Хаҡлыларға һәйкәл ҡойолор.
Урал батырҙың да үҙенә
Үҙенсәле ядкәр ҡуйылыр!

Күрерменме быны, күрмәмме –
Уныһында түгел мәғәнә.
Әммә саңға сығыр ялған дан,
Ялған бронзалар һәм йәнә!

Бронзаланған ысын изгеләр
Нурлатыр шат Өфөм аҫманын[15].
Шул нурланыш беҙҙең яныуҙың
Һәйкәлләтер йәйғор таҫмаһын.
09.07.2015.

## Дуҫлыҡ

Дуҫлыҡ арта башҡорт илендә –
Башҡорт менән татар дуҫлығы.
Оҙон көйҙәр бөтә. «Әпипә»
Менән тула күңел бушлығы.

Зәңгәр экрандарҙан эркелә
Ҡазалаусы Ҡазан һағышы.
«Ҡурай» каналының яртыһын
Биләп алды татар тауышы.

Башҡорт мәктәптәре ябыла,
Ә шулай ҙа яйы табыла:
Татар тирмәнендә тарттыра
Башҡорт телен Урал яғы ла.

Радиола «Юлдаш» каналы
Юлдар юллай «чиста татарча».
«Ашҡаҙар»ың ташҡа баш ҡаҙар,
Исем-шәрифләнеп «Ҡазанча».

Башкирофоб Буғлов әфәнде
Башлыҡ башын оҫта борғанда,
Зәкиҙе хурлаған Нагаров
Баш прокурор булып торғанда

Барыһы ла булыр! Ҡуласа
Тиҙ әйләнер кирем кирегә:
Алмаштырып аңды албаҫты,

[15] Аҫман –– Күк йөҙө.

«Татар туфрағы»нда йөрөргә.

Ишетегеҙ: инде сәхнәлә
Ҡурай әсе сыйнап уйнала.
«Сыбызғыдай сызғыр» сыңынан
Сыбыртҡылап йәнең ҡыйнала.

Нисә өйөр «халыҡ артисы»,
Нисә өйөр «халыҡ шағиры»!
Ҡул сәпәкләп, дәррәү алҡышлап
Хуплай улар – рухтың фәҡире...

Талъян тысҡылдатып Ахырйән
Һындырмаҡсы ине ҡурайҙы.
Һындырасаҡ Буғлов-быумайән –
Башлыҡ күҙен быуып ҙурайҙы!

Ҡурай һынығынан сыбызғы
Сыжылдатыр оҫтаханаһы...
Ташҡа бәреп яңғыҙ башымды,
Миңә генә микән янаһы?!.

Ҡурай һынһа, йәнем һынасаҡ,
Һындырыусыларға йән керер...
Башлыҡ-капюшондың мал теүәл –
Мыйыҡ аҫтынан тик сөскөрөр.
13.07.2015.

## Маклерҙар

*Незванный гость хуже татарина.*
(А.С. Пушкин. Капитанская дочь).

Аҙғын башҡорт, була ла шәп маңҡорт,
Йәнен һата, китеп Ҡазанға.
Татар яһап уны абзалары
Маклер[16] итеп ҡуя баҙарға.

Маклерҙар бит борон мал шылдырған,
Ә был һата, маллап, милләтен.
Һатмай ҡара! Бер һатылған йәндең
Ҡазан беләҙ ҡаза-ғилләтен...

[16] Маклер – һатыу-алыу эштәрендә арала йөрөүсе бәндә.

Берәүҙәре, һаҫып Казанкала,
Һаҫыһына елде ағыулай.
Иҫә елдәр: «Ерҙә башҡорт юҡ!» -- тип,
Татарлыҡҡа маклер ер даулай...

Бәғзеләре, бурһып Болағында
(Аҙып китеп башҡорт Илештән),
Аҫабанан ҡазаба яһарға
Юха һөнәренә ирешкән.

Ҡазанынан ҡайтып ҡаҙнаһына,
Ҡазан ҡазалығын өләшә.
Хатта бер туғаны башҡортона:
«Татарҡайым!» -- тиеп өндәшә...

Сыпсыҡланып Урал ыласыны
Сырҡылдаһа сибек ҡатарҙан,
Урал шиңер! Телен сырҡылдатып
Аҙған башҡорт яман татарҙан!

Татар-хәтәрен дә күрҙе тарих,
Башҡорт-маңҡортон да татыны.
Әммә йән алыусы татарйәндән
Артығыраҡ бәҙрәф «алтын»ы!

Йәнен биреп башҡорт һөйгәнендә,
Йәнен алып «һөйҙө» башҡортто.
Бүре менән һарыҡ туғанлығын
Таҡмаҡларға хатта таш ҡурҡты...

«Тату йәшик!» -- Йәшәү булыр микән
Йәнең биреп тапҡан татыулыҡ?!.
Киткән малға кире ҡайтыуҙар бар,
Сыҡҡан йәнгә кире ҡайтыу юҡ!

18.07.2015.

## Хәнйәр

Хәнйәр керә башҡорт йөрәгенә –
Бөрйәненә бөйөк Башйорттоң.
«Антон мәмерйәһе» кләймәһен

Һуҡты урыҫ Сумған-Ҡотоҡтоң[17]

Маңлайына... Бөйөк Салауаттың
Ҡашҡаһына кләймә баҫҡандай...
Антон атлы берәҙәк-ҡасҡынды
Күтәрмәкләп өйөр яҫҡандай.

Имеш, унда изге Антон ятҡан,
Доға уҡып яттан, суҡынып.
Имеш, хатта изге монастырҙың
Нигеҙ ташы ҡалған йолҡоноп.

Башҡорт ерҙәренә шыналанған
Аҡсаҡ йортон һипләп Өфөмдә
Түл йәйеүсе өйөр Бөрйәнемде
Йотмаҡ була, тимәк, бөгөндән.

Миссияһын мөсләп юлға сыҡҡан
Миссионерҙарҙың тилбере.
Бөрйән күкрәгенә беркетергә
Тәре күтәргәндер һәр бере...

Урыҫ-туған – бер тыуғаным ине
Урал батыр байман заманда.
Тәүге телен, динен алмаштырып,
Булды яһил-яңы команда...

Бөйөк төрки телле бөйөк урыҫ,
Телгеләнеп, телен ваҡлаған.
Телгеләнһә, бөлгөләнһә лә тик
Төркилеген башҡорт һаҡлаған!

Дәүерҙәрҙең дәүмәл-төпкөлөндә
Көнбайышҡа ҡубып Башйорттан,
Башҡортлоғон миргә бүлә-бүлә,
Урыҫ бит ул аҙған башҡорттан!

Бынаһы ла Хоҙай ҡушҡанылыр...
Тарих ҡуша быны аҡларға.
Уралдағы йәҙрә-башҡортон бит
Урыҫ теләй ләкин ваҡларға...

Тоҙлошишмә, Өпәй, Арҡайымдай,

[17] Ҡотоҡ-Сумған Мәмерйәһе.

Сиркәү ҡалҡыр унда, монастырь...
Йоҡлап ята бирһен башҡорт-туған,
Урыҫ-туған, туйлап, ҡолас кир!..

...Эфир көйләй, диктор вәғәз һөйләй –
Миссияны маҡтай, ҡыуанып.
Ә мин, шағир, ойойом тирмәмдә,
Буш хыялым менән йыуанып.

Уралынан шыуған урыҫ-туған
Тамуҡ телен аҫтан дөрләтә.
Йоҡлап ҡалып, йылы ҡуйыныңа,
Башҡортҡайым, йылан үрләтмә!
04.08.2015.

## Йәнәстем...

Бөйөк Мөхәммәтша Буранғолдоң
Башҡортлоғон тапай башҡортом.
Һәм вариҫы Буранғол-Йыһатты
Йәһәтләтә гүргә Башйортом...

Башҡорт!!! Һиңә әйтәм! Солтановтың
Ун биш томын тапап кинәнмә!
Буҡмайҙарың, Мөстән, Әрәмбайың –
Серәкәй генә саҡмыш, -- биғәйбә!..

Кемгә Салауаттың исеменән
Бүләк илә исем бирелгән –
Бөтәһе лә бөтмөр КГБ-ның
Ҡоло ине башы эйелгән...

Саҡты улар беҙҙе, ҡаплап йөҙҙө, --
Вариҫтарым, шуны белегеҙ!
Һәм уйлағыҙ: беҙҙең урындарҙа
Була алыр ине кемегеҙ?!

Ҡан йоттоҡ та ҡанап аҡтыҡ өнһөҙ,
Тапатмайса башҡорт намыҫын.
Ҡалынайҙы Буҡмай, Ҡамырмайҙар,
Намыҫлының ботап ылыҫын.

Ун биш томым аяҡ аҫтығыҙҙа –

Кем күтәреп алыр, -- алғыр юҡ.
Йәшәйһегеҙ бөгөн, башҡорттарым,
Һарыҡ та, тип, бөтөн – бүре лә туҡ...
11.08.2015.

**Һуңғы юл**

Ҡәҙеремде таплап күмеүселәр
Ҡәберемде тапап йөрөрҙәр.
Булманы был ижад был донъяла,
Тыуманы ул Йыһат, тиерҙәр.

Ташҡа баҫылғанын ташлатырҙар,
Баҫылмағандарын һуйырҙар.
Интернетта тамам интектереп,
Ун биш томлығымды юйырҙар.

Күҙҙәренә төшкән дегәнәктәй,
Ҡырҙы сөнки ҡырыҫ намыҫым.
Түрә «һайт!» тигәндә «тайт!» тимәнем,
Яҡшы белеп бәндә «бонус»ын...

Ҡорһаҡ киреп улар йәшәнеләр,
Ашанылар, ашлап, ир башын.
Милләт һутын һурып һимергәнде
Һиммәтләне илдең ҡорбашы.

Ҡорбашы шул – ҡороҡос «ҡор» ҡорҙо,
Тәҡәтенә тейеп халыҡтың.
Илем менән мин иң иңрәгәндә,
Күтен ялап «ҡор»ҙоң, ҡый ҡалҡты.

Шағирланып шайтан таяҡтары
Сәскә атты – ҡыҙыл миҙаллы.
Намын һатып утыҙ тин көмөшкә,
Булды «булдыҡлы» һәм «үҙаллы».

Улар «үҙаллығы» -- үҙаллыға
Боғалаҡлы быума-сир ине.
Мин быуылып-сәсәп йығылғанда,
Улар мине тапап йөрөнө...

Барыһына шаһит тик Хоҙайым –

Ярлыҡаусым рухым ныҡлығын.
Бәндәләрҙең биҙеп бизмәненән,
Һуңғы юлға сығам, йотлоғоп...
27.08.2015.

## Маңҡортлоҡ

Аптырата башҡорт маңҡортлоғо –
Онотолған ата-бабалар.
Бөйөк Салауатты туҡматырға
Маңҡортланған бала-сағалар.

Маңҡорт Морҡазаны алмаштырғас
Ҡырҡ тапкырға маңҡорт Ҡамытйән,
Алмашманы хоккей командаһы –
Салауаттың намын кәмһеткән...

Киреһенсә, мыйыҡ бороп ҡына
Кинәнәләр, күреп туҡмауҙы.
Туҡматтыртҡан һайын, иблесйәндән
Көтәләрҙер ҡайнар хуплауҙы...

Тарих белә: һуғып ҡамсы илә
Батырыбыҙ хөкөм ителгән.
Һәм Рәсәйҙә Салауат Юлаев
Туҡмаласаҡ, тиеп, һәр кемдән.

Шуны белеп, шуға эстән көлөп,
Ҡушылғандыр изге исеме.
Сәкән сәпәүселәр кимәлендә
Кәмһетелә батыр есеме.

Типкеләнә «Салауат Юлаев»
Стадион һайын – мсхәрә!
Ҡанға һеңде бөйөк бабабыҙҙы
Мәсхәрәләү меҫкен сәхнәлә!..

Бахыр башҡорт, һин бит һуңғы маңҡорт
Туҡмалыусы туҡмаҡ тәбрикләп!
Оҙаҡламай «башҡорт» исемен үк
Типкеләтәсәкһең, бәҙрәфләп...
27.08.2015.

## Донъя бөтөн

«Донъя бөтөн, әгәр булһа Бутин!» --
Тип йәшәйбеҙ китек донъяла.
Бөтөн бутинсылар бөтәйгәндә
Китек донъябыҙ ҙа ыуала.

Китеклеген көндөң көпләтергә
Күрше көнөн китеп алабыҙ.
Китkән һайын, киртек яматырға
Кирбес, цемент алып барабыҙ.

Ут күршебеҙ, ҡандаш туғаныбыҙ,
Киреләнә ләкин бөтөнләй.
Дуҫлыҡ ҡолоннаһын кире ҡағып,
Хаслыҡ харабаһы төтөнләй.

Державабыҙ тыштан сырматылды
Сәнскеле һалҡын сым менән.
Яуап итеп, дошман сырын серетеп,
Сым һуҙабыҙ эстән сәм менән...

«Укроп» тибеҙ уҡра сығанағын,
«Ватник» тиҙәр улар беҙҙәрҙе.
Китеп алып кире бөтәйтеүҙән,
Карта түгел, ҡарта үҙгәрҙе:

Кәрәкмәгән саҡта, ҡарта ҡыҫып,
Әбрәкәйҙә әүрәй бөтәбеҙ.
«Донъя бөтөн, сөнки беҙҙә Бутин!» --
Тип, нәжестә донъя көтәбеҙ...

Ике яҡ та инде, китек баштан,
Ҡарта менән уйлап көн ҡора.
Ҡартаһынан атып ҡолата ла
Унитазда илап ултыра...

29.08.2015.

## Йөрәк

Ҡанһыраған ҡаңғыр йөрәгемде
Тертләтмәгеҙ, төртөп тырпай һүҙ.
Йәшәйем бит ҡанап ҡыл осонда,

Йөрәгемде тотоп: «Түҙ һин, түҙ!»

Мөмкинме һуң түҙеү, тейҙерһәләр
Көтмәгәндә, ҡаҙап арҡамдан?
Нисә тапҡырҙар бит тишкеләнеп,
Бәғеркәйем бырғый ал ҡандан.

Йөрәккәйем тере иләк инде –
Ҡанһырай ҙа ҡатып ямала.
Беләм-беләм! – йыртып йығылтырға
Ең осонан бысаҡ ҡайрала.

Тамшанмағыҙ! Тауға ташланмағыҙ,
Һуйып һалырға, тип, Намыҫты!
Урал батыр, Буранғолдар ҡаны
Йөрәгемде ҡанап нығытты.
07.09.2015.

## Кеше хаҡы

Иртән торһам, эфир гимн йырлай,
Кисен ятһам, гимн оҙата.
Гимндарҙың гөман баҙарында
Хаҡтар ырғаңдауы йөҙәтә...

Ә шулай ҙа илдә күтәрелеш:
Нефть һәм газ урғып ағыла.
Көнбайыштың тулып торбалары,
Көнсығышҡа торба тартыла.

Торған һайын, доллар күтәрелә,
Күкһәүләнеп рубль тәгәрәй.
Бөйөк юлбашсыны һүккән һайын,
Рейтингыһы 100-гә йүгерләй.

Иле һөйә сөнки ВВП-һын,
ВВП бит илде күтәрә!
Сталинын һөйөп үлгән халыҡ
Үлгәндә лә һөйөү үткәрә!

Санкцияға антисанкция бар –
Дошман сыры ямға тәгәрәй!
Һәм шул ямдан сыр күтәреп ашай

Минең күрше аңһыҙ Шәңгәрәй...

Сыр етмәһә, сығып эфирҙарға,
«Сүгә Рәсәй!» -- тиеп сығынлай.
Тубыҡланған илде күтәреүҙең
Рейтингыһын түбән тойомлай.

Дошман колонна ул шәңгәрәйҙәр! –
Сталин юҡ тотоп атырға!
Илдә барған бөйөк күтәрелеш
Тейеш түгел түбән ятырға.

Күтәрелә бензин, газдың хаҡы –
Түбәнләтә алмаç кем-етте!
Электрҙың хаҡы күтәрелгәс,
Түбәнләмәç трамвай билеты!

Икмәк һәм һөт хаҡы... буй еткертмәй! –
Хаҡтар ямдан үргә йолона!
Үргә менә-менә әүерелә
Шәкәр ҡомо – алтын ҡомона...

ЖКХ-ла дәртле күтәрелеш –
Үргә сирғый торлаҡ, һыу хаҡы.
Ҡосоп ятҡан бисәм йылыһы ла
Күтәрелмәç, тимә, бик хаҡлы!

Үрле-кырлы ҡыла йәшәү хаҡы
Кеше кеçәһенән сәйәхәт.
Кремлдең йырлай шарманкаһы:
«Кеше хаҡына был сәйәсәт!»

Хаҡтар сәйәхәтле сәйәсәтте
Аңлар өсөн етмәй белемем.
Белемлеләр көтәләрҙер, буғай,
Белдертергә Ленин килеүен?!

Әллә, тимен, күтәрерме беҙҙе
Ямдан сығарыусы Шәңгәрәй?
...Йәшәү хаҡы күтәрелгән һайын,
Кеше хаҡы түбән тәгәрәй...

08.09.2015.

## Әҙәбиәт йылы был!

**I**

«Әҙәбиәт йылы был!» -- тип,
Түрҙән тороп әйтелде.
Әҙәпһеҙҙәр әҙәпләнер
Быйыл, тиеп көтөлдө.

Әҙәбиәт әҙәпләргә
Юғарынан ҡушылған.
Ҡушылғанды ҡушарларға
Әҙиптәр шәп йышылған.

Өйөр – «халыҡ яҙыусыһы»,
Өйөр – «халыҡ шағиры».
Барыһы тиң мәҙех әйтә –
Әҙәплектең шәп ире!

Оторайһаң -- оторайыр
Нәшриәттең табағы.
Әҙәпләгес әҙәпленән
Төшә тормош һабағы...

Һабаҡлылар – табаҡлылар,
Булмай ҡара һабаҡһыҙ!
Һабаҡһыҙҙың һабаҡтары
Тороп ҡала табаҡһыҙ...

**II**

Һаҡаллылар, һаҡалһыҙҙар –
Өс йөҙ икән әҙиптәр.
Кәләпүшле, картузлылар,
Яулыҡлылар – бик күптәр

Төркөм-төркөм юлға сыҡты,
Юлбашсыһы һаҡаллы.
Ауылдарҙан, ҡалаларҙан
Әҙип эҙләү айҡанлы.

Өйберенсә әҙип үҫһә,
Булыр, тип, ил әҙәпле,
Әҙәпйән бабабыҙ үҙе
Үҙһенде был ғәҙәтте.

Сип-сип иткән себештәргә
Нурлы ҡәләм тотторта.
Әҙәбиәт әҙәплеген
Үҙе сәйнәп йотторта.

**III**

Сипылдашып, себешкәйҙәр
Шиғыр «шырлап» елкенә.
Ашағанда, ашығышып,
Ҡолаҡтары һелкенә.

Ай-һай, күпме аш кәрәгер, --
Биш йөҙгә лә тулырбыҙ!
Хәмитйән бабай табаҡты
Тултырмаһа, туңырбыҙ...

Биш йөҙ бала бәләһе ҙур –
Аш табағы бәләкәй.
«Аш табағын арттыр», -- тиһәң,
Хәмит бабай: «Кәрәкмәй!»

Нәшриәттә, әштер-өштөр,
Табаҡ төбө ҡырсыла.
Биш йөҙләгән ҡалаҡ кәрәк
Биш йөҙләгән йырсыға!

Барыһы йор, -- таҡыр-тоҡор,
Табаҡ төбөн тырнайҙар.
«Һаҡаллылар һоғона!» -- тип,
Сырылдайҙар, илайҙар.

«Әҙип булһаң – әҙәпле бул!
Әҙһенмә һәм тулама!» --
Алтын табаҡтан тамшана
Һаҡаллылар ҡуллама.

«Халыҡ әҙәплеһе» тигән
Исем тирә ҡарт-ҡара --
Әҙәпйән баба әҙәбен
Мыйыҡ бороп атҡара.

Тирәһендә терәктәре –
Әҙәплеләр көллөһө.

Башлыҡ башын башмаҡлата
Биглов тигән еллеһе.

«Сез! Без!» ти ҙә сыбызғыһын
Безелдәтә түбәккә.
Тәфтиләүҙәр пүләһелер
Биглов өргән көбәктә...

Тулыр-тулмаҫ табаҡтары –
Биш йөҙләгән әҙиптең.
«Әҙәплелек йылы был!» -- тип,
Данлай бите гәзиттең...

**IV**

...Райондарҙан ҡайтып керһә,
Әҙәп илткән әҙиптәр,
Тар-тарлыҡҡа тайярлана
Башҡорт телле гәзиттәр.

Телеүҙәк үҙәгенә
Тар-тар тигән ҡорт төшкән.
«Ҡурай» каналы сыбызғы
Сыйнатырға етешкән.

Тар-тарстан әләменә
Теркәп ҡурай сәскәһен,
Тап-тар Ғәйниев-сәмлиев
Туйлай: «Башҡорт сәсәһен!»

Сәсәмәгән – сөңкөлдәһен,
Ҡалып ҡалъя ҡолона.
«Әпипә»ләп йырланасаҡ,
Тиҙәр, «Урал» моңо ла...

**V**

Сыбызғыһы сыйылдауын
Илгә Биглов тултыра.
Табаҡ тултыраһы бабай
Мыйыҡ бороп ултыра...

Алтын табаҡ ялаусылар –
«Халыҡ маһирҙары», һуң?!
Һоғонғанын һеңдерергә
Йоҡлай улар – донъя уң!

Себешйәндәр сепелдәйҙәр –
Таҡыр-тоҡор табағы.
Башҡорт башы, баш булмаһа,
Булыр мәңге ябағы!..

...Әҙәбиәт йылы был! – һәй,
Мәҙехләнә әҙиптәр!
Башҡортлоҡҡа баш ҡаҙығы
Ҡаға ошбу мәҙехтәр...
27.09.2015.

## Шыйыҡлыҡ

Шыйыҡландыҡ, ләкин мыйыҡландыҡ! –
Рәсәй-әсәйгә ҙур эрәхмәт!
Шыйыҡсала шымып тонсоғасаҡ
Ҡуйылыҡты ҡыуған һәр зәхмәт!

Башҡортостан (Өфө, Пермь, Һамар,
Вятка, Һарытау һәм башҡалар)
Төйөрөм бер башҡорт булып ҡына
Йәшәгән бит, ахмаҡ-ҡашҡалар!

Шыйыҡлыҡтың шифа-шайыҡлығын
Бабалар, тим, ниңә белмәгән?
Төйөрләнеп кенә төйәбеҙ, тип,
Әлмисаҡтан төйөр теләгән...

Яуыз Иван Ҡазан ҡазалығын
Ҡазалатып, баҙын баҫҡанда,
Әллә «сыуаш», әллә «татар» тигән
Тарҙар башҡортҡа, тип, ҡасҡанда,

Ҡабул ҡылған бабам меҫкендәрҙе. –
Урыҫ заты төптө юҡ ине.
Башҡорт араһына ҡатлауланған
«Татар» -- ҡаталаҡлы буҡ ине...

Һөйкәлештек Рәсәй-әсәкәйгә,
Нуғайлыҡтан бүгеп, бер заман.
Татар ҡатарына ҡатарланып
Килеп керҙе урыҫ-уҙаман.

Эй башланды шашып шыйыҡланыу! –
Бер башҡортҡа бишәр «иш» ине.
Һәр «иш» ишкән һыйлы урындарҙа
Ҡалҡып сыҡҡан сиҡан-шеш ине...

Аҡыллы шул Рәсәй батшалары –
Янһыҙ-ҡанһыҙ ҡамап баш ҡырҡты.
Йоҡло юламандар артҡан һайын,
Шыйыҡлығы артты башҡорттоң.

Ҡуян һурпаһының һурпаһылай,
Ҡырҡ һурпалы инде Уралым.
Бер башҡортҡа әҙер бишәр «башҡырҡ» --
Тыумыштан уҡ тыуа уралып...

Табан баҫҡан бабам тупрағында
Табып ҡара башҡорт табанын!
Рәхәтләнеп рәхәт шыйыҡландыҡ! –
Рәхмәтләнеп мәҙех яҙамын!

Башҡорт бутҡаһынан өйрә бутап,
Ҡалдыҡ тик өс бөртөк ярмаға...
Йәннәт көтә беҙҙе баҡыйлыҡта,
Ашығайыҡ шунда бармаға!

Рәхмәт төшһөн Рәсәй батшаһына,
Төйөрлөктән беҙҙе биҙҙертте!
Башҡорт-башйортлоҡтан төңөлдөртөп,
Шыйыҡлыҡта бәхет йөҙҙөрттө!

01.01.2016.

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ "МӘМӘЙ"ҘӘР

***********************************

## Ошо ерҙә йәшәгән

Ғүмер-баҡый башҡорттар
Ошо ерҙә йәшәгән.
Баҫҡын дошман өҫтөндә
Уҡ-ҡылысы йәшнәгән.

Алып барған уларҙы
(Шаһит быға тау-ҡырҙар)
Илдең ғәййәр улдары –
Салауаттай батырҙар.

Хатта татар-монголдар
Бөгә алмаған башҡортто.
Әммә бик күп дошмандар
Интектергән ил-йортто.

Башҡорт бабам шул заман
Урыҫ менән дуҫлашҡан.
Башҡортостан -- Әрәсәй
Мәңгелеккә тоташҡан.

Ватаныбыҙ ҡәҙерле,
Ныҡ тотабыҙ нәҙерҙе:
Әле лә беҙ ғәййәрле,
Аттарыбыҙ эйәрле!

Башҡортостан, гөлстан,
Айырылмаҫ сын дуҫтан.
Урал батыр бабабыҙ
Күкрәп йәшәргә ҡушҡан!

3.05.1969.

## Балалар баҡсаһында

Башҡортостан тыуған көн --
Илемдең ҙур байрамы.
Март айында күңелдә
Һандуғастар һайраны!

Оҙон ҡышты үткәрҙек
Сөнки көтөп был көндө.
Букет тотоп сығырға
Йөрәгебеҙ елкенде.

Баҡсаға бит йөрөнөк,
Эштә саҡта әсәйҙәр.
Һөйөп-һыйпап үҫтерҙек
Матур-матур гөлкәйҙәр.

Сиратлашып ҡойҙоҡ һыу,
Тупраҡтарын йомшарттыҡ.
Бесәй гөлдө ауҙарғас,
Тағы беҙгә эш артты.

Ауған гөлдө күсерҙек
Ҡабат матур көршәккә.
Шелтәләнек Мыяуҙы,
Яратып бик йөрөһәк тә...

Тышта буран, — ә гөрләп
Үҫте беҙҙең гөлбаҡса.
Сөнки уны ҡәҙерләп
Ҡарай белдек һәр саҡта.

Иртә һайын, йыйылып,
Япраҡтарын һананыҡ.
Бүртек-бүртек йәш бөрө
Сығарғанын ҡараныҡ.

...Шулай эшләп, һиҙмәй ҙә
Ҡалғанбыҙ ҡыш үткәнен,
Көлөп торған Ҡояшлы
Март айының еткәнен...

Килһәк бер көн баҡсаға,
Ни күрәбеҙ, туғандар:
Гөлдәребеҙ байрамға
Күкрәп сәскә атҡандар!

Сағыу-сағыу гөлбаҡса:
Ҡыҙыл, һары, зәңгәр, күк...
Әйтерһегеҙ: бер төндә
Атҡан улар нисек күп?!

Белмәһәгеҙ, белегеҙ
Был ҙур мөғжизә серен:
Гөлдәр ҙә бит илемдең
Белгән ҡыуаныс көнөн!

Теҙелдек тә сафтарға,
Киттек, йырлап, майҙанға.
Бүләк иттек гөлдәрҙе
Һәр бер апай, ағайға.

Сәскә һымаҡ үҫербеҙ
Ошо изге ерҙә беҙ.
Яҡшы уҡып, эш эшләп,
Тыуған илде биҙәрбеҙ!

3.05.1969.

## Башҡортостан -- илкәйем

Йөҙҙән ашыу милләт бар
Минең тыуған илемдә.
Һәр береһе һөйләшә
Туған әсә телендә.

Телдәр төрлө булһа ла,
Табабыҙ тел үҙ-ара:
“Башҡортостан” тигән һүҙ
Туғанлыҡҡа юл яра.

Төрлө милләт төрлөсә
Әйтә: “икмәк”, “тоҙ”, “көрлөк”.
“Башҡортостан” тигән һүҙ --
Бар телдә лә бер төрлө.

Төрлө милләт төрлөсә,
Һалып көйгә, йырлай йыр.
Ләкин бер үк яңғырай

"Башҡортостан -- тыуған ер!"

Төрлө милләт төрлөсә
Үҙ кейемен кейенә.
Төрлө кейем кейһә лә,
Ошо ерҙә һөйөнә.

...Беҙ, балалар, күмәкләп,
Тектек кейем байрамға.
Төрлө милләт кейемен
Кейеп сыҡтыҡ майҙанға.

Сәскә кеүек биҙәлде
Бөтә майҙан, "гөлт!" итеп.
Башҡортостан-илкәйем --
Гүзәл сәскә букеты!

3.05.1969.

## Томдың ҡыҙыл флагы

Тыуып үҫтек, буйға еттек
Гүзәл илдә беҙ.
Флаг тотоп, Май байрамын
Байрам итәбеҙ.

Үтәбеҙ йырлап урамдан,
Киң майҙандарҙан.
Тайпылһаҡ, милиционер
Күрһәтә ярҙам.

Ҡуялар илтеп, аҙашһаҡ,
Һорашып, өйгә.
...Башҡаса үтте был байрам
Башҡа бер илдә.

Америка булалыр был
Илдең исеме.
Хөрмәт итәләр унда тик
Бик бай кешене.

Ҡара тәнлеләрҙе унда
Тотоп туҡмайҙар.

Негр балалары, ҡурҡып,
Өйҙән сыҡмайҙар.

Тик был көндө сыҡты тышҡа
Негр улы Том.
Булғанғамы әллә иртә —
Тыҡрыҡ ине тын.

Урамдан Том, ҡаса-боҫа,
Майҙанға үтте.
Халыҡ ташҡынына берҙәм
Ылығып китте.

Президенттың һарайына
Ҡарай атлайҙар.
"Икмәк! Эш!" — тип талап итә
Эшсе ағайҙар.

Кемдер: "Президент, сәнселеп
Кит!" — тип ҡысҡыра...
Ҙур урамға полисмендар
Арҡыры тора.

Үтә, ватып арҡылыны,
Халыҡ ташҡыны.
Йүгерә ҡуша һарайға
Том да, ашҡынып.

Бәрелеп мәрмәр баҫҡысҡа,
Ҡанай тубыҡтар.
Томдың да бит президентҡа
Әйтер һүҙе бар!

Бына алдағы ал байраҡ
Ауҙы, сайҡалып.
Тапай полисмен байраҡты,
Асфальтҡә һалып.

Быны күргәс, Том күҙенә
Йәштәр эркелә.
Полисмендар янына Том
Йүгереп килә.

Һурып алып ҡуйынынан,

Сөйә ал яулыҡ!
Президенттың тәҙрәһенә
Һөрәнләй халыҡ:

"Бөтһөн һуғыш! Илгә — ирек!
Ергә — тыныслыҡ!
Вьетнамдағы һалдаттар
Һалһын ҡылысын!"

Бара иң алдан ал яулыҡ —
Ал флаг булып.
Яуһа ла таш, Том флагы
Ҡалмаç йығылып!

Президенттың ҙур тәҙрәһе
Шартлап ябыла.
Тотоналар полисмендар
Наган һабына.

Яçы маңлайына Томдың
Ут оса балҡып.
Йығыла Том, ал флагын
Юғары атып...

"Бөтһөн золом!" — тип эшселәр
Ҡыйыу юл яра.
Томдың флагы иң алда
Елберләп бара!

4.05.1969.

## Ван Линь

### 1

Көньяҡ Вьетнамда
Йәшәне Ван Линь.
Был шат малайҙы
Күреп беләм мин.

Линдың атаһы —
Заводта эшсе.
Әсәһе — ябай
Трамвай йөрөтөүсе.

Яратты Ван Линь
Ап-аҡ сәскәләр.
Көн дә һипте һыу,
Һөйөп-хәстәрләп.

Тотоп аҡ сәскә,
Көттө, кис һайын,
Атай-әсәйҙең
Йылы ҡосағын...

Бына бер заман
Илдә яу ҡупты.
Сәскәләр шиңде,
Халыҡ ут йотто.

Дошман ғәскәре
Баҫты ҡаланы.
Халыҡ уларҙы
“Янки” атаны.

Американан
Килгәндәр улар.
“Вьетнам булһын ҡол!” —
Тигәндәр улар...

Йән ҡыя дошман
Ван Линь иләндә.
Ләкин Ван Линдәр
Ҡурҡмай үлемдән!

**2**

...Бер көн ҡалала
Ҡупты ҙур һуғыш.
Янки-дошмандар
Булды аймылыш:

Халыҡ ғәскәре
Ҡалаға ингән,
Ҡаты алышып,
Кире сигенгән.

Ван Линь көтһә лә,
Ул кис ҡайтманы

Ғәзиз әсәһе,
Ғәзиз атаһы:

“Янки”ға ҡаршы
Нығ һуғышҡандар.
Азатлыҡ өсөн
Ҡорбан булғандар...

**3**

Тынмай, төн буйы
Гудок олоно.
Өҙгән сәскәләр
Ҡулда һулыны.

“Әсәй!” тип бушҡа
Саҡырҙы Ван Линь.
Таңды күҙ йоммай
Аттырҙы Ван Линь.

Талған күҙҙәрҙең
Нуры һүрелде...
Йортта полицай,
Янки күренде.

Ташланды улар
Малайға, шашып:
“Ҡыҙыл партизан!
Тубыҡлан, шаҡшы!

Әйт, ҡайҙа әсәң,
Ҡайҙа динамит?
Атаң йәшенгән
Ергә беҙҙе илт!”

Әйтмәне һүҙен
Ван Линь дошманға.
Тубыҡланманы
Улар ҡушҡанда.

Полицай менән
Янки ҡоторҙо.
Ергә Ван Линде
Һуғып осорҙо.

Ҡырылды өйҙә
Шкаф, кәштәләр...
Буялды ҡанға
Ап-аҡ сәскәләр...

**4**

...Дөрләп урамда
Трамвай яна,
Ван Линды янлап
Янкиҙар бара.

Әнә әсәһе
Яндырған трамвай —
Ерҙә янкиҙар
Ята, торалмай.

Әнә атаһы
Шартлатҡан завод —
Шул янкиҙарға
Булған ҙур табут.

Ван Линь дошмандар
Һағында бара —
Ғорур малайҙы
Сүктереп ҡара!

Япһындар, әйҙә,
Ҡара зинданға.
Яуға юл табыр
Ван Линь унан да!

Тайҙыртмаҫ һис ни
Уны хаҡ юлдан.
Вьетнам еңелмәҫ!
Ҡол булмаҫ Вьетнам!

3.05.1969.

## Ил йоҙағы — үҙебеҙ!

Беләм, борон-борондан
Ил ситендә сик барын;
Дошманды ул тотҡарлай

Һәм үткәрә дуҫтарын.

Йөрөй дуҫтар ҡунаҡҡа,
Дуҫлыҡ аҫҡан сик аша.
Дуҫлыҡ теләп һуҙған ҡул —
Сик аша ла тоташа.

Килеп дошман сик боҙһа
Ил йөрәген һуйырға,
Беләм, дошман эсендә
Ҡара-мәкер ҡуйыра...

Беләм, борон-борондан
Ил сиктәре ныҡ булған.
Үтә алмай дошмандар,
Ил сигендә юҡ булған.

Йән аямай һаҡлаған
Сикте атай, ағайҙар.
Үҫеп беҙ ҙә етербеҙ,
Сик һаҡларбыҙ, малайҙар!

Шыуһа дошман — төндә лә
Күрер үткер күҙебеҙ.
Илгә яуыз уҙа алмаҫ —
Ил йоҙағы үҙебеҙ!

1960.

## Ғәрәп туғандар

**1**

Африкала ҙур ҡом сүле,
Сүлдә — бархандар.
Ғүмер итә, дөйә көтөп,
Ғәрәп туғандар.

Ҡап-уртаға ярып илде,
Нил һыуы аға.
Нил буйында, дөгө игеп,
Күптәр көн баға.

Кистәрен ҡайта көтөүҙән,

Һыуһап, дөйәләр.
Малайҙар йәш буталарын
Тотоп һөйәләр.

Пальма башынан маймылдар
Сәтләүек ташлай.
Эсә какос һөтөн халыҡ,
Һәм бейей башлай...

**2**

Тыныс тора ине шулай
Сүлдә бархандар.
Ут эсендә ҡалды бер көн
Ғәрәп туғандар.

Бомба яуҙы күктән, жыйлап,
Улар өҫтөнә.
Пальма башынан маймылдар
Ҡолап төштөләр.

Туҙыраны ҡом сүленә
Дөйә көтөүе.
Сорнап алды шат өйҙәрҙе
Һуғыш төтөнө.

Ут-көл ҡылғас оазисты,
Ауыр туп атып,
Танкылары Израилдың
Үтте тапатып...

**3**

Тыныс түгел Ғәрәп иле,
Күсә бархандар.
Бархандарға ышыҡланып
Үтә каруандар.

Яуға сыҡҡан, мылтыҡ алып,
Ғәрәп улдары.
Ҡурсай уларҙы ят күҙҙән
Сүлдең ҡомдары.

Баҫҡынсылар таба әжәл
Көн дә ут-ҡомда.

Танкылары яна дөрләп
Нәфрәт-ялҡында.

Ултырһа һалдат ашарға,
Табыны шартлай.
Ятһа йоҡларға, ҡыл короҡ
Һулышын ҡаплай.

Һәр түң артынан юлында
Ҡалҡа партизан.
Миналанып, табанында
Шартлай саң-туҙан!

...Түгел тыныс Ғәрәп иле,
Күсә бархандар.
Яҡлап илен, сыҡҡан яуға
Ғәрәп туғандар.

Ғәҙелһеҙлекте барыбер
Ғәҙеллек еңер.
Баҫҡынсыларҙы баҫасаҡ
Әжәлле эңер!

3.05.1969.

## Атагуальпа

Америка ҡитғаһында
Амазонка аръяғында —
Һаҙлыҡ яҡта
Йәшәй ҡамыштай төҙ һынлы,
Ҡыҙыл тәнле индей улы
Атагуальпа.

Ерҙә уның тиҫтерҙәре
Беренселә уҡый бары,
Ә ул — таңдан,
Һөңгө һаплап, ҡыйыу атлап,
Ауға китә — малай арттан,
Атай — алдан.

Был малайҙың күҙе үткер,
Ҡулы мәргән: ата тапҡыр —
Салт болан да

Күҙ асҡансы йәнен биреп,
Сал ҡаянан ҡубарылып,
Ята янда!

Сөйһә уҡ — ҡыр ҡаҙы юлын
Өҙә... Сумһа, сыҡмай һыуҙан
Аҡ балыҡһыҙ.
Биш туҡталмай, биш йоҡламай
Йөрөү, тиһәң, һис ашамай —
Ул талымһыҙ.

Ишеткән ул ата-баба
Йырҙарынан бер атама:
Улар элек
Йәшәгәндәр Ҙур Аҡланда —
Амазонка аръяғында —
Уйнап-көлөп.

Аҡ тәнлеләр, баҫып килеп,
Ябырылған бүре кеүек —
Океандан.
Бөтә индей ырыуҙарын
Атып-киҫеп һөргән барын
Ҙур Аҡландан.

Баш күтәргән халҡы һаман,
Ерен яулап, ирек даулап,
Һәр йыл-ара.
Һаман дүрт йөҙ йыл буйына
Алһыу ҡанға ил ҡойона —
Һуғыш бара...

Түҙемлеләр, йөрәклеләр
Генә еңеп сығыр, тиҙәр,
Был талашта.
Атагуальпа хәҙерҙән үк
Һөңгө башын, бик йөрәкһеп,
Ослай ташта.

Ата-баба ерҙәренән
Балҡый Ҡояш иртә менән,
Кис Ай ҡалҡа.
Амазонка аша илен
Күрә ғорур индей улы

Атагуальпа.

4.05.1969.

### Бәхет ҡалай тыуа?

Күпте, күпте белһәм дә,
Бер нәмәне белмәйем.
“Бәхет ҡалай тыуа?” — тип
Һорайым да һорайым...

Әллә ниңә был серҙе
Береһе лә әйтмәйҙәр.
“Юҡты ныҡып, ҡолаҡты
Тондорма!” — тип әрләйҙәр...

...Олатайым килгәйне
Октябрҙә ҡунаҡҡа,
“Ҡалай тыуа бәхет?” — тип
Һораным мин унан да.

Мине ләкин олатам
Әрләмәне бер нисек.
Уйлаңҡырап ултырғас,
Һөйләп бирҙе, сер сисеп:

“Донъялағы серҙәрҙең
Бөтәһен тиң белмәйем.
Әммә бәхет тыуғанды
Күрҙем үҙем — һөйләйем!

Беҙ бәләкәс саҡтарҙа
Ауыр ине замандар.
Өс йәшемдән ҡаҙ көтөп
Көн күрҙем мин, уландар.

Ете йәштән, егелеп,
Һөрҙөм һабан байҙарға.
Мал-тыуарын ҡараным
Ҡышҡы һалҡын айҙарҙа.

Өҫ яланғас, тамаҡ ас,
Мин бәләкәс, донъя ҙур —

Ун биш йәштән шахтала
Булып киттем “зимагур”.

Егермегә еткәндә,
Алды батша һалдатҡа.
“Эт” тип кенә этләне
Әфисәрҙәр фронтта.

Себен кеүек ҡырылдыҡ —
Ҡырҙы пүлә, миналар.
“Батша өсөн ҡан ҡойоп
Үлеү — бәхет!” — тинеләр...

Билдән батып, окопта
Көнө-төнө күшектек.
Ысын ирек һүҙҙәрен
Шул ваҡыт беҙ ишеттек:

“Эшсе, һалдат, ерекмән —
Улар хеҙмәт кешеһе.
Бөтһөн һуғыш! — Хаҡ оран
Берләштерһен өсөһөн!”

Килде хәбәр бер заман:
“Күтәргән баш эшселәр”.
Шаңҡытырға баштарын,
Беҙҙе алып киттеләр.

Ун етенсе йыл ине,
Нәҡ үктәбер — көҙ айы.
Килеп индек ҡалаға...
Эшсән халыҡ, төҙәйеп,

Ҡыҙыл байраҡ дөрләтеп
Даулай бәхет, азатлыҡ:
“Түңкәрелһен батшалыҡ!
Бөтһөн аслыҡ, ғазаплыҡ!”

“Баҫығыҙ, — тип, — баштарын!”,
Патрон беҙгә бирҙеләр.
“Ҡыҙғанмағыҙ, атығыҙ —
Дошман улар!” — тинеләр.

Аттым... ләкин пүләмде

Жандармға тоҫҡаным.
Оранланым: “Аҡ батша —
Илдең ҡара дошманы!”

Штык ергә ҡаҙағас,
Башҡалар ҙа ҡаҙаны.
Эшселәр һәм һалдаттар
Ҡосаҡлаша башланы!

Еңде ялпы! Эшселәр
Ҡосоп мине үптеләр:
“Тыуҙы һинең бәхетең,
Йәшә, һалдат!” — тинеләр.

Ауҙы батша тәхете,
Тигеҙләнде донъялар.
Бына нисек тыуҙырҙым
Бәхетемде, балалар!

Донъялағы серҙәрҙең
Бөтәһен тиң белмәйем.
Әммә бәхет көрәштә
Тыуалыр, тип шәйләйем”.

4.05.1969.

## Пионер маршы

Дөмбөрҙә, барабан! Беҙ әҙер
Сафтарҙа нығ баҫып барырға.
Кәрәкһә, beләбеҙ атырға —
Уйынсыҡ мылтыҡтар яурында!

Дөмбөрҙә, барабан! Беҙ — илдең
Еңелмәҫ ҡыҙҙары, улдары.
Тимерҙәй теҙемгә теҙелдек —
Барырбыҙ гел алға, юл ярып!

Дөмбөрҙә, барабан! Хәбәр бир —
Ҙурҙарға киләбеҙ алмашҡа.
Булырбыҙ көрәштә баһадир,
Беҙ сөйгән байраҡтар аумаҫтар!

Был ҡулдар ярырҙар бураҙна
Ғаләмдең йондоҙло ҡырына.
Алҡынып, Ер шары ҡушылыр
Беҙ һуҙған мәңгелек йырына!

1960.

## Аҡ елкән

Әсәй беҙҙең кер йыуған,
Киптерергә кер элгән.
Ептәге аҡ йәймәләр
Тығыҙ елгә кирелгән.

Әнә ҡыҙыл күлдәгем —
Флаг кеүек елберҙәй,
Косынкаһы һеңлемдең —
Ел күрһәткес флюгерҙай.

Епле ике бағана —
Улар карап мачтаһы.
Диңгеҙҙәге тулҡындар —
Күршебеҙҙең баҡсаһы.

Өйҙәр артта ҡалалар —
Булмай артҡа ҡарап та.
Һеңлем менән барабыҙ
Елкәнле аҡ карапта!

Икебеҙ ҙә шәп моряк:
Таҙалыҡты һаҡлайбыҙ.
Аҡ елкәндәр йөҙөнә
Саң борҡотоп сапмайбыҙ.

Эй ел өрә, ел өрә,
Елкәндәрҙе ел кирә.
Карап беҙҙең, туҡтамай,
Юл ярып бара бирә!

Кипкәс керҙәр, күрербеҙ,
Әсәйемә әйтербеҙ.
“Елкән”дәрҙе йыйнаулап,
Өйгә инеп китербеҙ.

1960.

## Көсөк

**1**

Оя итеп үҙенә
Таҡта солан аҫтарын,
Тере бүләк килтергән
Минең матур Ҡашҡарым.

Көсөктәре шундай күп,
Бере сыбар, бере күк.
Минең менән ҡыуанып,
Әтәс әйтә: "Кикрикүк!"

Оянан тик сыҡмайҙар,
Көнө-төнө йоҡлайҙар.
Йомоҡ булғас күҙҙәре,
Ҡараңғынан ҡурҡмайҙар.

Бына бер көн Ҡашҡарым
Сыҡты ишек алдына.
Көсөктәре йүгереп
Килде уның янына.

Асҡандар ҙа күҙҙәрен,
Әллә нимә эҙләйҙәр,
Табаға тик ҡойолған
Һөттө генә күрмәйҙәр.

Баҫҡан инем баштарын,
Эсте улар сөскөрөп.
Ҡойроҡтары тырпайҙы,
Кейем элгес сөй кеүек.

**2**

Сыҡты тышҡа ағайым,
Сыҡты тышҡа атайым.
Шулар менән бергәләп,
Көсөктәрҙе байҡайым.

Улар инде ҙурайған —
Белә нисек йөрөргә.
Һәр берегеһе, алмашлап,

Өйрәнәләр өрөргә.

Ҡашҡар әйтә: “Һау-һау-һау!”
Көсөктәре: “Вау-вау-вау!”
Тик бер генә Аҡтүшем
Тауыш бирә: “Бау-бау-бау!”

Берәмләп тә өрҙөләр,
Күмәкләп тә өрҙөләр.
Аҡтүш һаман: “Бау-бау-бау!” —
Бына шуны күрҙеләр...

Аптыраны, алйыны
Өйрәтә алмай Ҡашҡарым.
Атай менән ағай ҙа
Сайҡап ҡуйҙы баштарын.

Елкә тырнап күп торғас,
Килеп керҙе бер малай:
“Миңә “Бау-бау!” тигәнен
Баулап бирегеҙ, ағай!”

Китте һалып Аҡтүштең
Муйынына бау-тамға.
Күҙ алдында ҙурайып,
Әйләнде ул Полканға!

Көсөктәрҙең ҡалғаны
Ҡасан “Бау-бау!” тир икән?
Үҙем баулап алырға
Бер ебәк бау йөрөтәм.

1960.

## Бәрәңге

Ҡуңғыҙ, Ҡуңғыҙ-ҡуңғалаҡ,
Һыңар мөгөҙлө ҡалаҡ!
Сыҡҡан һабан һөрөргә,
Бәрәңге үҫтерергә.

Бураҙнаға егелгән,
Башы түбән эйелгән, —

Вәт, ниндәй ул эшлекле,
Вәт, ниндәй ул белдекле!

Тарта, тарта — нык тарта,
Табандан кәҫ аҡтарта.
Һабан әммә кәҫ ярмай,
Һабан әммә шәп бармай —
Шыбыр-тиргә нык бата,
Бураҙнаға “лып” ята
Ҡуңғыҙ, Ҡуңғыҙ-ҡуңғалаҡ,
Һыңар мөгөҙлө ҡалаҡ!

Ята торғас көнәүшән,
Етә килеп Селәүсән:
“Сел-сел, был сүл минеке,
Һабан ғына һинеке.
Көрәк менән ер һөрәм,
Бүлбе үҙем үҫтерәм!”

Торҙо Ҡуңғыҙ-ҡуңғалаҡ,
Һыңар мөгөҙлө ҡалаҡ:
“Ҡыҙма, ҡустым, Селәүсән,
Ер ул күп көс теләүсән.
Бергә икәү һөрәйек —
Һабанды көр һөйрәйек.
Тирҙе бергә түгәйек,
Үҫер бүлбе күбәйеп!” —
Булды риза Селәүсән,
Сөнки ул эш теләүсән.

Эй, тарталар, тарталар,
Лыс-һыу булды арҡалар.
— Һабан ниңә шәп бармай?
— Һабан ниңә кәҫ ярмай? —
Бөттө ҡеүәт, тигәндә,
Етте килеп бер бәндә —
Ҡушҡар, Ҡушҡар -- ҡуш мөгөҙ,
Донъяла көслө үгеҙ! –
Мөслө үгеҙ икән дә!

Егелгәс ул һабанға,
Артты көс өс таңанға.
Бураҙналар һуҙылды,
Тиҙҙән тик эш боҙолдо:

Ҡайҙа һабан тотоусы,
"Үгеҙ"ҙәрҙе ҡыуыусы? —
Шып-туҡтаны өс "үгеҙ":
"Әрәм китә көсөбөҙ!"

Төштө осоп шул заман
Мыйыҡлы бер уҙаман.
Сиң-сиң итеп йырланы,
Төрәндәрҙе сарланы.
Сыбыртҡыһын шартлатты,
"Үгеҙ"ҙәрҙе атлатты, —
Вәт, ниндәй шәп Сиңерткә,
Вәт, ниндәй шәп Сиңерткә!

Кискә тиклем һөрҙөләр
Һәм бына ни күрҙеләр:
Баш осонда баҙлай ут —
Был бит ҡуңғыҙ Баҙлауыҡ,
Яҡын күреп дуҫтарын,
Яҡҡан фонарь уттарын! —
Вәт, ниндәй дуҫ — Баҙлауыҡ,
Вәт, ниндәй дуҫ — Баҙлауыҡ!

Төнө буйы йоҡламай,
Эшләнеләр туҡтамай.
Бәрәңгене, күнәкләп,
Ултырттылар күмәкләп.
Иртән Ҡуңғыҙ-ҡуңғалаҡ
Әйтте дуҫтарға ҡарап:
— Вәт, үҫәсәк бәрәңге!
— Бергә булайыҡ мәңге!

1961.

## Гөбөргәйел ҡыҙҙары

Гөбөргәйел — гөбөр-гөбөр,
Ҡыҙҙары бик өлгөр-өлгөр.
Берәү түгел — ун ике,
Бөтәһе лә күҙлекле.

Бер көн иртә торҙролар,
Күҙлектәрен ҡырҙылар.

Күҙлектәрен ҡырҙылар,
Табынға ултырҙылар:

— Әсәй, әсәй, әсәкәй,
Ҡалаҡ беҙҙең бәләкәй.
Әсәй, әсәй, әсәкәй,
Бутҡа беҙгә кәрәкмәй.

Кәрәк беҙгә боламыҡ,
Кәрәкмәй тик ылымыҡ.
Кисә сөнки ылымыҡты
Ашай алмай иланыҡ,
Иланыҡ!
Иланыҡ!

— Мин бит һеҙгә — әсәкәй,
Ә һеҙ — түгел бәләкәй.
Булмағас һеҙ бәләкәй —
Кәрәк беҙгә эсәкәй,
Эсәкәй!

Ҡыҙҙар, ҡыҙҙар, барығыҙ,
Күҙлектәрҙе ҡырығыҙ.
Бит-ҡулдарҙы йыуығыҙ,
Көбөсәктәр ҡуйығыҙ!

Һауҙым кисә мин бейә,
Бейә менән дәү дөйә.
Шул һөттәрҙе бешәйек,
Ҡымыҙ яһап эсәйек,
Эсәйек!

Эй торҙолар, торҙолар,
Күҙлектәрҙе ҡырҙылар.
Көбөсәктәр алдылар,
Бешә-бешә талдылар.

Ташты ҡымыҙ ажғырып,
Илде хайран ҡалдырып.
Тултырылды һабалар,
Тултырылды шешәләр...
Ә урамда, урамда
Этәләр-тәртөшәләр
Әллә ниндәй халыҡтар:

Тәлмәрйендәр, Балыҡтар,
Сүмесбаштар, Ҡушҡарҙар,
Ҡуңғыҙ тигән ҡашҡарҙар...

Һырый улар тәҙрәгә,
Ҡымыҙ ҡой, тип, беҙҙәргә.
Үреләләр табынға,
Ҡымыҙ эсеп ҡалырға...

Гөбөргәйел ҡыҙҙарын
Һөйөп, йырлай йырҙарын:
— Һеҙ, һеҙ генә, һеҙ генә,
Һеҙ ун ике ҡыҙ ғына,
Күктәге йондоҙ ғына,
Һыуҙағы ҡондоҙ ғына!

Сихәт-ҡымыҙ бештегеҙ —
Булһын илгә эшегеҙ!
Алтын ижау алығыҙ,
Һоҫоп-һоҫоп һалығыҙ!

Ҡымыҙ тигән байлыҡтан
Ауыҙ итһен халыҡтар,
Сабыйҙар ҙа эсһендәр,
Сирләмәйсә үҫһендәр!

Эй, асыла, асыла,
Шартлап ишек асыла!
Керә килеп халыҡтар —
Тәлмәрйендәр, Балыҡтар,
Сүмесбаштар, Ҡушҡарҙар,
Ҡуңғыҙ тигән ҡашҡарҙар...

Эй, күмәктәр, күмәктәр,
Ҡулдарында күнәктәр:
Көбөсәккә ҡуялар,
Һаумал-ҡымыҙ ҡоялар,
Кинәнешеп эсәләр,
Бейергә лә төшәләр:

— Ритәм-ритәм-эритәм,
Мин — Тәлмәрйен — көр икән.
Ҡымыҙ эсеп, кикереп,
Һикереп-һикереп көн итәм!

— Ритәм-ритәм-эритәм,
Бөтәбеҙ ҙә бер икән.
Ҡымыҙ бешкән, ҡымыҙ бешкән
Ҡыҙҙар бик өлгөр икән!

Бейенеләр, талдылар,
Ижауҙарын алдылар.
Гөбөргәйел ҡыҙҙары
Өҫтәп торҙо һыйҙарҙы,
Сөнки улар белдекле,
Сөнки улар күҙлекле!

...Гөбөр-гөбөр, гөр-килеп
Ултыралар эркелеп
Ҡымыҙ эскән халыҡтар:
Тәлмерйәндәр, Балыҡтар,
Сүмесбаштар, Ҡушҡарҙар,
Ҡуңғыҙ тигән ҡашҡарҙар.

Әйтәләр һәм:
— Их, ҡара,
Эштәр ҡалай шәп бара!
Эсһәк ҡымыҙ гел генә,
Йыҡмаҫ беҙҙе сир генә.
Ауырымабыҙ һис ҡасан,
Арымабыҙ һис ҡасан.
Беҙ ҙә ҡымыҙ бешәйек,
Бергә татыу йәшәйек!

Керешәләр бергәләп,
Көбөләрҙе эргәләп:
Тирләп ҡымыҙ бешәләр,
Йырлап сихәт эсәләр!

Их, көбө-ижауҙары!
Их, ҡымыҙ ҡызлауҙары!
Ҡымыҙ бешеп, ҡымыҙ бешеп
Ҡыҙҙарҙың йырлауҙары!

Их-их, ҡарағыҙ:
Ҡалай татыу арабыҙ!
Ҡыҙҙары ла ҡыҙҙары —
Егәрле икән бары!

1961.

## Тиле-тиле Төйләгән

Тиле-тиле Төйләгән
Себеш йотоп төйөлгән.
Көргөтөргә тамағын,
Ҡарға-ҡарлауға килгән.

Ҡарға-ҡарлау: “Ҡарҡ-ҡарҡ-ҡарҡ,
Тилергәнһең, ҡарт-карт-карт!
Себеш кенә тигәнең —
Ҡоба һыйыр бит һинең!

Ҡарлауымды тыҡмамын —
Мөгөҙөнән ҡурҡамын!
Теймә минең теңкәгә,
Күрен Сәүкә-йәмкәгә!”

Киткән осоп Төйләгән,
Сәүкә-йәмкәгә килгән.
Сәүкә-йәмкә тамаҡты
Көргөргә, ти, эйелгән.

Эйелгән дә шаҡ-каткан:
“Дөйә тибә тамаҡтан!
Юҡ-юҡ, йәмкәм йәмшәйер,
Ике битем салшайыр!
Һайыҫканға һөйкәл һин —
Һөймән осо төкәлһен!”

Бына алыҫ-алыҫтан
Китеп бара Һайыҫкан...
Тиле-тиле Төйләгән
Уға табан кәйелгән.

Һайыҫкан, ти, туҡтаған,
Һөймән осон һаплаған,
Йылтыр көҙгө тоҫҡаған —
Башын сайҡап уфтаған:

“Себеш түгел — ултырған,

Ҡоба түгел — ултырған:
Тамағыңа Фил торған,
Фил торған шул, Фил торған!..

Харап булғанһың, харап!
Алмаç минең аппарат —
Кәйел Мәскәйгә ҡарап!
Кәйел Мәскәйгә ҡарап!”

Илай-илай Төйлөгән
Ҡарурманға кәйелгән.
Ҡара мунса эсенә
Мәскәй әбейгә килгән:

“Яҡшы түгел һин үлһәң,
Яҡшы түгел мин үлһәм!
Мин дә һине көргөрмөн,
Төймә йотоп төйөлһәң!

“Себеш” тип мин тотҡанмын,
Бер дәү Филде йотҡанмын...
Тамаҡҡа Фил төйөлгән,
Ҡотҡар, уй, уçал Филдән!
Ҡотҡар, уй, уçал Филдән!..” --

Илай-илай ялбарған,
“Ашығыс ярҙам” һораған.
Мәскәй әбей, ҡыҙғанып,
Тамағына ҡараған.

Уймаҡ кейеп бармаҡҡа,
Төрткән Мәскәй тамаҡҡа:
“Филем, филем-филешем,
Бына майлы бәлешең!
Майлы бутҡаң табаҡта —
Сыҡ һикереп был яҡҡа!”

Ах, был ни хәл, был ни хәл —
Булғаны юҡ быңдай хәл!
Мәскәй әйткән таҡмаҡтан
Тауыш килгән тамаҡтан:
“Әлегә мин себешмен,
Әммә тере килешмен!
Филдәй булып үçермен,

Төйләгәнде тибермен,
Кәрәгенә бирермен!"

Төйләгән ҡарҡ-кикергән —
Тышҡа Себеш һикергән!
"Сип-сип, сип-сип!" тигән дә
Әсәһенә йүгергән!

"Ҡараҡ-ҡараҡ Төйләгән! —
Тип һөрәнләп өлгөргән. —
Ихатама етермен,
Һунарсыға әйтермен:
— Төйләгәнде атып ал
Мылтыҡ тоҫҡап! — тиермен!"

Ҡалған Мәскәй аптырап,
Ә Төйләгән — ҡалтырап...
"Һаҡла, Хоҙай, Себештән!" --
Тип теләргә керешкән...
Йөрәккәйе бөрөшкән...

Тиле-тиле Төйләгән
Күҙ йәшенә төйөлгән.
Ҡыйғыр-ҡыйғыр ҡыйғырлап,
Ҡурҡып күккә сөйөлгән...
Күҙ йәшкәйе түгелгән...

1961.

## Ике йондоҙ тоташҡан

Шау-гөр килеп урамда
Йүгерешә малайҙар.
Йүгерешә әсәйҙәр,
Йүгерешә атайҙар.
Хатта етмеш йәшәгән
Инәй һәм олатайҙар...

"Шарт!" — асыла ишектәр,
Шығырлаша ҡапҡалар.
Сыңрай йырлап тәҙрәләр —
"Шыҡ-шыҡ" итеп ҡаҡһалар.

Һәр күршенән — күршегә
Өйбөрөнсә кешегә
Хәбәр тауы ишелә.

“Лап-лоп” саба быҒаса
Атлап ҡына йөрөгән
Йыуанҡорһаҡ кешеләр.

Урам аша, юл аша,
Ҡойма аша, өй аша
Бөтәһе лә осраша,
Бөтәһе лә һораша:

“Ишеттеңме бер хәбәр?
Иҫ китерлек шул ҡәҙәр!
Иҫ китерлек шул ҡәҙәр!”

Ни булҒан был донъяҒа,
Ни булҒан был халыҡҡа?!
Сирханала яҫтыҡтан
Сирлеләр ҙә ҡалыҡҡан.

Бер сал бабай — инвалид
Арбаһы менән сыҡҡан,
Дөмә- һуҡыр аҒайҙы
Улы етәкләп тотҡан.

Барыһы ла осраша,
Барыһы ла һораша
Урам һәм ҡойма аша:

“Ишеттеңме бер хәбәр?
Иҫ китерлек шул ҡәҙәр!
Иҫ китерлек шул ҡәҙәр!”

Иҫ китерлек шул! — Туҡта,
Ни булҒан был халыҡҡа?
Әллә инде ут сыҡҡан,
Әллә инде тау ҡупҡан?
Әллә, тимен, һыу ташҡан?! —
Улай тиһәң, һәр кемдең
ШатлыҒы хәттин ашҡан:

Һәр сат һайын, гөрләшеп,

Транзистор йырлатып
Алалар хәбәр ТАСС -тан,
Күңелдәр күлкеп ташҡан!

Минут һайын, эфирҙан
Ҡабатлана бер һөйләм,
Ҡанатлана ил-ғаләм:

“Тыңлағыҙ! Тыңлағыҙ!
Хәбәр итәбеҙ баштан! —
Күктә ураҡ-сүкешле
Ике йондоҙ тоташҡан!

Космонаттар шул саҡта
Йөрөшкәндәр ҡунаҡҡа
Ике карап-юлдаштан!”

Их-их, асманға
Беҙҙекеләр олғашҡан —
Ике йондоҙ тоташҡан!

2.05.1969.

## Ҡолонҡай

Ҡолон ҡалған аҙашып
Биләм тауҙың артында.
Әсәкәйе янына
Сабып нисек ҡайтырға?

Кешнәй, кешнәй — тау бейек,
Ишеттертмәй Биләм тау.
Сапсый, сапсый, күрәм, тип,
Күрһәттертмәй Биләм тау.

Тау артында — ҡарурман,
Ҡарурманда Бүре бар.
Әсәһенә: “Бүленеп
Ҡалмам!” — тигән һүҙе бар...

Бата Ҡояш тонйорап,
Ҡалҡа шәфәҡ монйорап.
Ҡалай итеп ҡайтырға? —

Төн ҡурҡыныс, юл йыраҡ.

Менә сабып Ҡолонҡай
Билән тауҙың биленә.
Мең бүреләр ҡыуһа ла,
Ҡайтмай ҡалмаç өйөнә!

Бына Билән итәге —
Елеп-елеп үтәбеҙ.
Бына урман яҡаһы —
Дөнөп инеп китәбеҙ.

Юл ҡыçырыҡ, тын урман.
Күктә — ҙур Ай киçәге.
Шырлыҡ йырып сығырға
Ҡолонҡайҙың иçәбе.

Ҡарамай ул уң яҡҡа,
Ҡарамай ул һул яҡҡа.
Әсәһенең кешнәүен
Тыңлап, елә шул яҡҡа.

Ҡарт имәндәр, ҡайырылып,
Ҡолонҡайға юл бирә.
Ҡолай яҙһа һөрлөгөп,
Аҡ ҡайындар ҡул бирә.

Барса кейек, ҡошҡайҙар
Баçа сығып юлына.
“Иçән-имен ҡайт елеп!” —
Теләктәре шул ғына.

Күрәләр тик: ҡурҡыныс! —
Алда ҡомһоҙ Бүре бар.
Ҡолонҡайҙы быуырға
Унының уçал кәре бар.

Барса кейек, ҡошҡайҙар
Ҡуйыша һүҙ, бер булып:
Таң атҡансы тоторға
Ҡолонҡайҙы, һырлығып.

Төшә Керпе алдына —
Ырғып үтә Ҡолонҡай.

Сыға Ҡуян юлына —
Сорғоп үтә Ҡолонҡай.

Аптырағас, юл ҡамай
Болан менән дәү Айыу.
Ҡолонҡай тик бынан да
Үтә, йомолоп ҡыйыу.

Ни эшләргә белмәгәс,
Барса кейек, ҡошҡайҙар
Ҡолонҡайҙы уратып
Ҡул тотоша башлайҙар.

"Китмә, китмә һин, — тиҙәр, —
Таң атҡансы ҡал бында.
Ҡояш сыҡҡас, сығарып
Ҡуясаҡбыҙ юлыңа!"

Тик, әсәһен имгәндә
Биргән һүҙен онотмай,
Ҡыуаҡ аша һикереп
Сығып китә Ҡолонҡай...

Бөттө бына ҡарурман —
Алда Убыр күле бар.
Күл башында Бүренең
Уттай ике күҙе бар.

Тора ҡайрап тештәрен,
"Бөтөрәм, — тип, — эштәрен!.."
Ҡолонҡай тик ишетә
Әсәһенең кешнәүен.

Сигенмәй ул юлынан,
Алға оса, уҡ һымаҡ.
Күк Бүренең томшоғон
Тибеп ҡаса, туп һымаҡ.

Олоп ебәрә Бүре,
Китә, тумарлап, кире.
Убыр күле төбөндә
Бөтә уның ғүмере...

Ә Ҡолонҡай шат, тыныс

Инә, ҡайтып, өйөнә.
“Тора әйткән һүҙендә!” —
Әсәкәйе һөйөнә.

Һәй Ҡолонҡай, Ҡолонҡай,
Бигерәк матур Ҡолонҡай.
Күк Бүреләр булһа ла —
Елеп ҡайтыр Ҡолонҡай,
Бигерәк батыр Ҡолонҡай!

2.03.1969.

## “Йем-йем” итә йондоҙҙар

Йәйҙең йәмле кисендә
Уйнап талғас бер талай,
Әүеҫлек башы аулаҡҡа
Ҡуна килде дүрт малай.

Марат, Кәрим һәм Ильяс,
Ишмырҙа исемдәре.
Ғәләү бабай янына
Ятты һалып мендәрҙе.

Менде йәнә, үрмәләп,
Әүеҫлеккә шул ваҡыт
Күрше улы Әптелхәй,
Ҡустыһы уның Латип.

Алтау булды малайҙар,
Етенсеһе — дәү бабай.
Олатайҙы уратып
Ятыуы ҡыҙыҡ ҡалай!

Ҡоя бабай бер йомаҡ,
Ейәндәре һорағас:
“Мейес тулы бәрәмәс,
Уртаһында — бер ҡалас”.

Эй, баш вата малайҙар, —
Нимә икән был, тиҙәр.
Бәрәмәсе — беҙ булһаҡ,
Ҡалас — бабай, һин, тиҙәр.

Кет-кет көлә олатай:
“Белмәнегеҙ, улдарым.
Табышмаҡты тапмаҡҡа —
Күҙ һалығыҙ юғары!”

Ятып салҡан, малайҙар
Юғарыға ҡарайҙар.
Ҡалас-Айҙы ураҡҡан
Йондоҙҙарҙы барлайҙар.

Шәйләй йор телле Марат,
Башлай һүҙ, күккә ҡарап:
“Ух малайҙар, бер заман
Була яҙҙым мин харап!

Каруан менән сүл аша
Бара инем дөм-төндө,
Бик ҙур саян, үрелеп,
Саға яҙҙы битемде.

Тик мин уның, ҡуш ҡуллап,
Эләктерҙем ҡойроғон.
Болғап-болғап бырғытҡас,
Саян күккә сорғоно!..”

Баға күккә малайҙар:
Ысынлап та, саян бар!
“Саян” тигән йондоҙҙар
Шундай сағыу, шаяндар!

Өндәшә шунан Кәрим,
Тотоп ҡулына әрем:
“Ошо әрем менән мин
Көтә инем ҡаҙ һәр көн.

Ҡаңғылдашып, ҡаҙҙарым
Африкаға остолар
Күктә, әнә, эҙҙәре
Ҡалды тороп сып-сыбар...”

Ҡарай күккә малайҙар:
Ысын бит, ҡаҙ юлы бар!
“Ҡаҙ Юлы” тип атала

Уҡмашҡан шау-йондоҙҙар!

Ултыра тороп Ильяс,
Ала һүҙ ул да ихлас:
“Мин бер заман ырҙында
Иләй инем ем, ҡорҙаш.

Көтмәгәндә, ел сығып,
Осто-китте иләгем.
Күктең әнәү түбәндә
Ҡалды иләк, эләгеп...”

Текләй күккә малайҙар:
Был да ысын, ағайҙар!
“Иләк Йондоҙ” “ем-ем-ем”
“Ем” иләүен ҡарайҙар.

Ала элеп Әптелхәй,
Ҡустыһы уның Латип:
“Беҙ әнә шул иләкте
Төшөрә яҙҙыҡ атып.

Ҡустым ете уҡ атты,
Мин дә ете уҡ аттым.
Ниңәлер тик уғыбыҙ
Сәптән ситкәрәк сапты...”

Ҡарай ҡалҡып малайҙар,
“Уҡ баштарын” һанайҙар.
Күктә ике “Етегән
Йондоҙ” барын аңлайҙар.

Тора ырғып, сәмләнеп,
Шып-шым ятмыш Ишмырҙа:
“Мин — дәү инем, — ти, — элек,
Буйым ине биш урҙа!

Тимер ҡаҙыҡ ҡаҡтым да
Ерҙең көмбәҙ-күгенә,
Йондоҙҙарҙы еп менән
Ҡуйҙым бәйләп түбәнә.

Шунан бирле йондоҙҙар
Тимер ҡаҙыҡ тирәләй

Сөйөрөлтмәктәй өйөрөлә —
Уларҙы еп ебәрмәй!..”

Таң атҡансы малайҙар
Төпһөҙ күккә ҡарайҙар:
Ысынлап та, йондоҙҙар
“Өйөрөлә” бит, ағайҙар!

Ысынлап та, бер генә
Йондоҙ тора “өйөрөлмәй” --
“Тимер Ҡаҙыҡ” йондоҙон
Кем танымай, кем белмәй!

...Ал таң атҡас, олатай
Малайҙарын уята:
“Кисен тағы килегеҙ
Әүеҫлек башы аулаҡҡа.

Әммә шуны әйтәйем,
Һис кем килмәһен яңғыҙ:
Күк көмбәҙен биҙәргә
Алып килһен аҡ йондоҙ!

Гагарин да үҫкән, ти,
Әүеҫлек башы аулаҡта...
Йыһандарҙы йондоҙлап
Елерһегеҙ карапта!”

2.02.1969.

## Ишкән ҡалас

Әсәй яҡты мейескә —
Ишкән ҡалас һалырға.
Осло-осло өс тоҡан
Ҡуйҙы һуҙып ҡамырҙан.

Әүәләгәс, тоҡандар
Оҙон-оҙон бау булды.
Аҡ ҡаласты тоҡанлап
Ишеүсеһе табылды —

Һеңлем менән икебеҙ,

Бит-ҡул йыуып, тотондоҡ.
“Һә” тигәнсе иштек беҙ —
Ҡалас иттек тоҡанды!

Эй, көтәбеҙ, көтәбеҙ
Ҡалас бешеп сыҡҡанын.
Хатта бесәй, мыраулап,
Бейеп йөрөй уҡтанып.

Ура! Мейес ауыҙы
Хуш еҫ бөркөп асылды.
“Туп-туп” итеп икмәктәр
Таҫтамалға теҙелде.

Ашъяулыҡҡа аш ҡуйып,
Әсәй табын түшәне.
Бөтәбеҙ ҙә, май яғып,
Ҡайнар ҡалас тешләнек!

Кешнәй сыжлап “һарайғыр” —
Семәрле еҙ самауыр.
Ҡуян ҡаны кеүек сәй
Аҡ сәйгүндән тамалыр...

Рәхмәт һиңә, әсәйем,
Майлы ҡалас ашаттың.
Һинең көләс йөҙөңдө
Аҡ ҡаласҡа оҡшаттым.

1983.

## Тимеркәй

Юл сатында тора баҫып
Оҙон телле малайҙар.
Ҡойонан һыу алып ҡайтмыш
Ҡарт-ҡороно ҡарайҙар.

Оло көйәнтә йөкмәгән
Етмеш йәшлек бер әбей.
“Биле бөкөрәйгән икән,
Бахыр!..” — тип ҡуйҙы Нәби.

“Кеше юҡ микән өйөндә,

Ниңә һыуға йөрөй ул?!" —
Тип көйөндө, сайҡап башын,
Кәштә иңле Хаматҡул.

"Ай-һай, йүнһеҙ ейәндәре!
Түҙеп булмаҫ! — ти Файыҡ. —
Барып ауыл башлығына,
Тел ярҙамы ҡылайыҡ!"

Шулай улар сарлаған тел,
Ҡулды ҡуйып бөйөргә,
Сыҡты йүгереп ҡапҡанан
Ҡустылары Тимеркәй.

Тегеләрҙең тел ярҙамы
Тейеүен дә көтмәне:
"Рөхсәт ит, инәй!" — тине лә
Көйәнтәһен йөкмәне.

Аҡыл бында ябай ғына,
Тыңлағыҙсы, балалар:
Ярҙам итһәң — тел дә бар,
Ләкин аяҡ-ҡул да бар!

1983.

## Шәп-шапшаҡ

*(шук малай ауыҙынан таҡмаҡтар)*

Төшөрҙөм шәп кәртишкә,
Кәртишкәлә — тәртешкә.
Сөнки әсәй һыймаған, —
Һыйған бары тәртешкә...

Әйтте миңә атайым:
"Тартма бесәй ҡойроғон!"
Үтәп атай бойороғон,
Йолҡтом бесәй мыйығын.

Ата ҡаҙҙан ҡурҡмайым,
Ҡурҡытһа ла, юртмайым.
Сөнки, сыҡмай ишектән,
Бармаҡ янап эш итәм.

Итек кейеү ғилемен
Ауыр тиеп кем әйткән?! —
Ағай миңә кейҙертә,
Ә мин уға өйрәтәм.

Атып бәрҙем һабынды —
Хәле хәҙер хөрт уның.
Битем уға теймәгәс,
Баҫыр керле тут уны!

“Таҙарт, — тиҙәр, — тешеңде,
Шүткә, — тиҙәр, — дуҫ һиңә”.
Дуҫым булғас, әсәйҙе
Алдай алмай ул ниңә?!

Асыу тотам әтәскә:
Таңды иртә аттырта.
Ә кис булғас ҡысҡырмай —
Мине иртә ятҡырта...

15.02.1965.

## “Әтәс” Әсәт

“Әтәс” тигән ҡушаматы
Йөҙәтә бик Әсәтте.
Шуның өсөн нисә тапҡыр
Йоҙроғо ут сәсрәтте!

Апай дәрес һорағанда,
Юҡ-юҡ, әтәс түгел ул!
Башын баҫып, аҫҡа ҡасып,
Тауыҡ була гел, гел ул...

Ә әшнәһе аҡбур тотоп
Сыҡһа таҡта янына,
Яуаптарҙы “кикрүкләй”,
Ауыҙын ҡаплап ҡына.

Саҡырһаң үҙен таҡтаға,
Елкә тырнап ҡашына...
Тәнәфестә Әсәт ҡайҙа?

“Әтәс” ҡойма башында!

Башҡаларҙың баштарына
Ташлай үрҙән таш табып.
Тәнҡитләһәң, әтәсләнә:
“Ҡытҡылдама һин, тауыҡ!”

“Әтәс” тиеп бик яңылыш
Атағандар Әсәтте:
Тәртипкәйе хәтерләтә
Аңһыҙ себеш-хәсрәтте...

1983.

## Һипкелле

Беҙҙең синыф Кәримәнең
Ике бите һипкелле.
Кемдер әйткән: һипкелдәрҙе
Бөтөрөүе икеле.

Ошо һүҙҙән Кәримәнең
Күңеле нык ителде.
Шунан һуң, ти, ала ҡыҙый
Дәрестә гел “икеле”...

Таҡтаға сыҡҡайны бөгөн,
Тамам һәләк ителде:
Химиянан бирҙе яуап
Икеле лә микеле.

Үртәй малайҙар: химия
Бөтөрә, тип, һипкелде.
Уфтана янып Кәримә:
“Икеле шул, икеле...”

Йөрөй аңҡы-тиңке килеп,
Ҡанатһыҙ ҡош шикелле.
Ах, алмаһа ярар ине
Физиканан “икеле”!

Әйтте бөгөн әсәһенә:
Ниңә мин, тип, һипкелле?

Көлдө әсәһе: “Һин, ҡыҙым,
Йондоҙло күк шикелле!”

Әйтәм мин дә: Кәримәкәй,
Кем бар һиндәй һөйкөмлө!
Йөҙөңдәге йөҙ һипкелең —
Йөҙ-йөҙ сәскә шикелле!

Тик һин генә арабыҙҙа
Шундай матур бит инде.
Йылмайып бер көл инде лә
Алма инде “икеле”!

1983.

## Күсәтсе Ғиззәт

Таяҡ тотоп, күсәт[18] һуғып
Көн уҙғарған Ғиззәтте
Күргән берәү үтә көлөп:
“Күҙе тонған күсәтсе!”

Күсәт һуғыу — матур уйын,
Белеп мәлен уйналһа.
Әммә Ғиззәт, һуғып күсәт,
Мәктәпкә һуң йыйнала...
Дәрескә лә һуң ҡала...

Шырауланған аяҡ-ҡулы,
Саңлы булыр өҫ-башы.
Өйгә кереп йыуынырға
Ваҡыты юҡ — эш ҡаты!

Китаптарын ырғыта ла
Таяҡ болғап йүгерә.
Күрше-күлән тәҙрәләрен
Селпәрәмә килтерә.

Мин ватманым — күсәт ватты,
Тип таяҡты ғәйепләй.
Шул арала үҙҙәренең
Тәҙрәһен дә ул “ипләй”...

[18] Күсәт -- уйнағанда таяҡ менән һуғып күсермәле ағас ҡырҡындыһы.

Ҡарт ата ҡаҙ ауған шаңҡып
Күсәтенең еленән.
Уҙып барған ала бесәй —
Ҡойроғо ҡырт-өҙөлгән...

Бригадирҙың маңлайына
Ҡунғас сирғып шул күсәт,
Саҡыртылып директорға,
Һабаҡ алған, ти, Ғиззәт...

Ант иткән ул уйнамаҫҡа
Аяҡ аҫты — урамда.
Уҡыуына һуңламаҫҡа
Хатта ыжғыр буранда.

Иртән тороп, бик тырышып
Киткән мәктәпкә Ғиззәт.
Тик... онотоп китаптарын,
Илткән класҡа күсәт...

1983.

## “Күҙ-ҡолаҡ” Барый

Барый урам гиҙеп арый —
Тәртип, имеш, күҙәтә.
“Ниңә?” — тиһәң, “Кескәйҙәргә
Күҙ-ҡолаҡмын!” — тип әйтә.

Күҙ-ҡолағы тора уйнап,
Оҙон уның ҡулдары.
Сөнки бит ул кескәйҙәрҙән
Ике башҡа юғары.

Ҡыуыҡ-шарҙар ҡалһа күреп,
Барый ҡаны ҡайнаша:
“Шарҙы тәкә һөҙҙө!” — ти ҙә
Энә төртөп шартлата.

Эй, илайҙар шарылдашып
“Тәкә һөҙгән” бахырҙар.
Ашарға ла ҡайтмай Барый:

“Мин — күҙ-ҡолаҡ! Ваҡыт тар!”

Туп һикерткән малайҙарҙың
Тишеп ҡаса туптарын.
Хатта велосипедтарҙың
Бышылдата тындарын!..

Ҡайһы саҡта ҡайта үҙе
Күҙ-ҡолағын күптереп...
Уның һымаҡ “күҙ-ҡолаҡ”ты
Һөҙһөн үгеҙ үкереп!

1983.

## Уҙаманлы ун йомаҡ

Эй, кис ине, кис ине,
Күңел тулы хис ине...

Бүрәнәлә малайҙар
Бармаҡтарын һанайҙар:
— Берәү, икәү, өсәү... ун...
— Ҡыҙыҡ түгел был уйын!

— Ерҙә күпме эштәр бар!
— Нисә төрлө һөнәр бар?
— Шуны, әйҙә, уйлайыҡ,
Йомаҡ итеп ҡояйыҡ!
— Унибыҙҙан — ун йомаҡ,
Йәнә лә -- һигеҙ уйнаҡ,
Тәмле булыр ул ҡоймаҡ!

Йомаҡ ҡойоу башланды,
Батыр башлап башҡарҙы.

### 1. Батыр әйтте:

Түп-түңәрәк аҡ ағай алдан бара,
Түп-түңәрәк ал апай арттан бара, —
Бер офоҡтан — бер офоҡҡа юл ала.
Аҡ ағай йыш ураҡтай булып ҡала.
Ал апай гел түңәрәк булып яна.

Улар үрҙә — һыуһыҙ диңгеҙҙә йөҙә.
Бере төндә, бере көндөҙ ил гиҙә.

*(Ай, Ҡояш.)*

**2. Ишем әйтте:**

Ҡояштан алда тора,
Дырылдаҡҡа ултыра.
Артында ер тулҡына,
Туҡ башаҡтар ҡалҡына.

*(Тракторсы.)*

**3. Арыҫлан әйтте:**

Һарай эсе — мөңөр-мөңөр,
Мөңөр төбө — көбөр-көбөр,
Аҡ еләнле еңгәй — өлгөр,
Аҡ йылғаны илгә бөркөр.

*(Һауынсы.)*

**4. Ямырҙа әйтте:**

Ер аҡланһа — өйҙә тора,
Алтынланһа — ҡырҙы ҡыра.
Башында ағай ултыра,
Ҡумтаға алтын тултыра.
Бөртөктәре шаулап төшә,
Табаларҙа тауҙай бешә.

*(Комбайн.)*

**5. Малсыбай әйтте:**

Дүрт таяҡлы, үҙе ерҙе ябып йөрөр.
Туҡыласаҡ буҫтауҙарҙы алып йөрөр.
Баҡырыуы далаларҙы ярып йөрөр.
Ағаһының аҡ таяғын танып йөрөр.

*(Һарыҡ көтөүе.)*

### 6. Тимеркәй әйтте:

Ҡалала тора ағай,
Торбалы йортҡа атлай,
Өҫтәлдә тимер юна,
Тимерҙән дөңгөр тыуа,
Дүрт тәгәрләк ҡуҙғала,
Дөбөр-шатор юл ала.
Ағай, йылмайып ҡына,
Яңынан тимер юна...

*(Эшсе.)*

### 7. Юлдаш әйтте:

Шау-быяла тимер өй
Урамдар буйлап йөрөй.
Тик юлы түгел тимер,
Халыҡты тейәй тилбер.
Түбәһендә һиртмәһе —
Ут сәсрәтеп китәһе.
Апай бороп ултыра,
Әмер биреп ултыра,
Ишектәрен астырта,
Астырта ла яптырта,
Сыҡһаң, таҫма таптырта,
Таҫмаһыҙҙы ҡаптырта.

*(Троллейбус.)*

### 8. Баййегет әйтте:

Унда ла саж-сож,
Бында ла саж-сож —
Һуған, борос, аштоҙ,
Ашыҡтыра аҡ ҡыҙ.
Табынға татлы ҡуя —
Телеңде йотоп ҡуйма!
Ул аҡ апай кем? Уйла.

*(Ашнаҡсы.)*

**9. Игебай әйтте:**

Тау аҫтында талҡан —
Таш араһы тартҡан.
Тоҡҡа тылҡып һалған,
“Туҡ ҡыл!” тиеп ҡалған,
Аҡ һаҡалын һыпырған,
Аҡ талҡаны борҡоған —
Әйтегеҙсе, кем булған?

*(Тирмәнсе.)*

**10. Аҡъюл әйтте:**

Иртән аҡ ер аса,
Кис тә аҡ ер аса,
Ҡарабойҙай сәсә,
Илтеп ташҡа баҫа.
Таш баҫҡанды алабыҙ,
Күҙҙе текләп ҡалабыҙ,
Сәскәндәрен йыябыҙ,
“Шәп сәскән!” — тип ҡуябыҙ.

*(Яҙыусы.)*

*

Күсәрҙәге күк йомғаҡ
Күсеп бара, зыр-уйнап.
Көнгә ҡарап бер көлә,
Йөҙөнән нур бөркөлә.
Айға ҡарап йылмая,
Ҡарая ла моңая.

*(Ер шары.)*

*

Күкрәү-күкрәү күк ҡаҙан,
Төртһәң, төбө юҡ ҡаҙан.
Түңкәрелгән ныҡ ҡаҙан,
Төбө тулы ут ҡаҙан.

*(Күк көмбәҙе.)*

*

Айран бештем көбөһөҙ,
Майы төштө, күрегеҙ:
Күбек-күбек күбекмай —
Айран өҫтө һөҙлөк май.
Бер йомарлаҡ һары май —
Йөрөп-ята, арымай.
Бер тумалаҡ ап-аҡ май —
Һары майҙан ҡалышмай.

*(Күктәге йондоҙҙар, Ҡояш, Ай.)*

*

Тейҙе түбәм күксәгә,
Түп-түңәрәк тәңкәгә.
Тәңкә тинләп ҡойолдо,
Ун икегә йыйылды.
Ҡыҫҡарҙы нык күләгәм —
Ун икенән шөрләгән.

*(Төш ваҡыты, сәғәт ун ике.)*

*

Тилбер-тилбер тилегән —
Ҡунаҡсала тилергән:
Аҡ күлдәккә кейенгән,
Тәкмәс атып кәйелгән,
Утлы юлы уйылған.

*(Йондоҙ атылыу.)*

*

Дөм-көмбәҙҙә Аҡ ағай,
Түп-түңәрәк, шат ағай
Ҡаҙан ҡырынан уҙған,
Битенә һөрөм һыҙған:
Ярты йөҙө кителгән,
Көлмәҫтәй ҙә ителгән.

*(Ай тополоу.)*

*

Офоҡ киреп елә ат,
Йылы биреп көлә ат.
Үркеп Күккә менә ат,
Утлы ялын һибә ат.
Уты үлән үҫтерә,
Уландарға көс бирә.
Сәскәләргә төҫ бирә,
Әсәләргә һөт бирә.

*(Ҡояш ҡалҡыу.)*

*

Йылан арбай өс фәҡир —
Өсөһө лә тос фәҡир.
Һыҙғыралыр һыҙмаһы —
Ҡыҙыл йылан ыҙаһы.
Ҡыҙҙыралыр ҡаҙнаһы —
"Ҡыҙыл әтәс" ҡоҙаһы.

*(Ут яғылған өстаған.)*

Малайҙарҙың әйткәндәрен яҙҙыҡ беҙ,
Әйткән берен епкә теҙеп барҙыҡ беҙ.
"Йомаҡ сисеү — ҡыйын", тигән һүҙ яман.
Йәмғеһен дә сискән — булыр уҙаман.

1.03.1983.

## Отҡор малай

Беҙҙең Йәләй — отҡор малай,
Яңылыҡты тиҙ ота.
"Күстем подряд ысулына!" —
Оләсәһен йонсота.

Имеш, һис кем түгел тейеш
Көндәлеген ҡарарға.
Нисә "икеле" алғанын

Бармаҡ бөкләп һанарға.

Йүнләп битен дә йыумай ул,
Тырнаҡтары — ҡаралы.
"Үҙем беләм! — тип екерә. —
Подряд менән барамын!"

"Подряд" менән "бәҙрәф"тең ни
Икәнен дә айырмай,
Ҡата башы оләсәнең...
Йәләй генә шат йырлай.

Аңламайса подрядтың гел
Сифат эше икәнен,
Ҡолағына тиклем ҡатҡас,
Мунса инә киткән ул.

Әммә йыуына алмаған —
Ташы һыуыҡ, һыуы юҡ.
"Мин дә бәҙрәф!" — тип оләсә
Бәйләп ултыра ойоҡ...

12.03.1990.

## Тартай табыр теленән

"Оҙон тороҡ торна" тиеп
Көлә икәү Зиләнән.
Ҡалай ҡылып ҡотолорға
Тартай телле бәләнән?..

Әллә "Ҡарға" тип ҡарғарға
Ҡарлау морон Ҡолойҙо?
Услап сәсенән тартырға
Бүкән буйлы Юлайҙың?

Юҡ, ярамай: тел-тештәрҙән
Тороу кәрәк юғары!
Күҙ йәштәрен йотоп, Зилә
Күҙ алдынан юғалды.

...Автомобиль көткән мәлдә
Юл сатында ҡаланың,

Ҡолой менән Юлай ҡапыл
Сыйнап саңға ҡоланы:

Оҙон берәү йыҡты һуғып
Икеһен тиң бер юлы,
Бүректәрен алып ҡасты —
Оҙон икән һәм ҡулы...

Иртәгәһен кепка кейеп
Килһә теге меҫкендәр,
Бүректәре тора көтөп
Парталары өҫтөндә.

“Оҙон тороҡ торнанан”, — тип,
Тәбрик хаты өҫтәлгән...
Ошонан һуң теге икәү
Тартай телен тешләгән.

12.03.1990.

## Аҡсарлаҡ

Аҡсарлаҡҡай, аҡсарлаҡ,
Алған суҡышын сарлап.
Суҡылмаҫмы сабаҡ, тип,
Йөрөй һыу өҫтөн барлап.

Ҡанат аҫты — аҡ ҡына,
Ҡанат өҫтө — күк кенә.
Һыуҙа күктәй күгәрә,
Күктә — ап-аҡ һөт кенә.

Килә-килә ҡыйғырлап,
Һыуға уҡтай атылды.
Аҡ сабаҡты “һабаҡлап”,
Зәңгәр күккә ҡалҡынды!

Күптер инде балаһы,
Бик бәләкәс сабағы.
Көнө буйы ҡыйғырлап,
Туя микән тамағы?..

Минән генә өйрәнһә,
Булыр ине ҙур ағай:

Сабаҡ ҡатып ҡармаҡҡа,
Алыр ине сурағай!

1966.

## Сиңерткә

Һалдым ҡармаҡ ятыуға,
Аҡ балыҡты тотам, тип.
Боҫто балыҡ сөңгөлгә,
Ҡармаҡсыны отам, тип.

Селбер-селбер селәүсән —
Ҡармағымдың "аҙығы".
Ҡап-ҡап инде, йәһәт ҡап,
Тәрән һыуҙың балығы!

Әйтә балыҡ: "Ҡапмайым,
Ямаҡ була селәүсән.
Сәләүсәнде ҡапма, тип,
Әйтә килде гел әсәм.

Селәүсәндең эсендә
Кәкре башлы сым була.
Селәүсәнде семсенгән
Сабаҡтар бик отола!"

Алдым тартып ҡармаҡты —
Ни хәл инде итергә?
Күрәм шунда: усыма
Әллә нимә һикерә!

Ҡанаттары: "пыр-пыр-пыр",
Мыйыҡтары: "дыр-дыр-дыр".
Әллә инде вертолет,
Әллә инде трактор...

Белдем, белдем, был икән
Сиңер-сиңер-сиңерткәм.
Аҡ балыҡты тот-тот, тип,
Ярҙамға килеп еткән!

Ҡармаҡ ҡабып, һыуға ул

Тракторҙай елдерҙе.
Вертолеттай талпынып,
Аҡ балыҡты килтерҙе!

1966.

## Ҡыңғырау

Һағындыҡ, һағындыҡ
Ҡыңғырау сыңғырын,
Ҡап-ҡара таҡтала —
Аҡбурҙың аҡ нурын.

Уҡытҡан апайҙы,
Ағайҙы һағындыҡ.
Дуҫтар ҙа һәр бере
Класта яғымлы!

Көткәндер, зарығып,
Беҙҙе лә парталар,
Саҡыра сәфәргә
Глобус, карталар...

Ҡыңғырау, ҡыңғырау,
Йый беҙҙе, шат йырлап!
Уҡыусы исемен
Аҡларбыҙ аҡ нурлап!

Уҡырбыҙ тырышып,
Алырбыҙ белемде.
Мәғрифәт нурына
Сорнарбыҙ күңелде.

Балҡытыр донъяны
Беҙ яҡҡан факел-ут.
Булырбыҙ Ватанға
Ялҡынлы патриот!

15.05.1977.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**1951**

Ерем........................................................
Эш........................................................
Бойҙайым..............................................
Ер улы..................................................
Өндәшәм.............................

**1953**

Беҙҙең әсәйҙәр.......................................
Диңгеҙҙән хат.......................................
Пүлә.....................................................
Хәрби моряктар...................................
Матрос хәтерләүе................................
Тыныслыҡтың торам һағында.............
Моряк һүҙе.........................................

**1954**

Беҙҙең кандидат...................................

**1956**

Ҡайтыу.................................................
Ҡайтҡас...............................................
Көндәлек дәфтәрҙән...........................
Яңғыҙлыҡ............................................
Хеҙмәткә саҡырыу...............................
Буксир-теплоход N 11..........................
Һалсы һылыу........................................
Яҙғы ямғыр..........................................
Өфө урамдары.....................................
Ш. Хоҙайбирҙин, М. Ғафури................
Йәйге таң.............................................
Ғаләмдәрҙең йыры..............................
Юғалтыу..............................................
Ағиҙел матросына күренгән ҡурҡыныс төш...

Туғыҙтамаҡ............................................
Яуа, яуа..................................................
Диплом...................................................
Кирбес һуғам.........................................
Өйәңке...................................................
Ауыр һәм еңел.......................................

**1957**

Яныу.....................................................
Дәғүә....................................................
Антым бар............................................
Теләк....................................................
Ҡоштар киткәндә..................................
Ер еләккәй............................................
Кем нисек.............................................
Ҡайыным..............................................
Бәхет ҡояшы.........................................
Ысыҡ тураһында...................................
Дөрләү..................................................
Ни өсөн?...............................................
Ябайлыҡ...............................................
Ҡырыҫйән............................................
Һәйкәл..................................................
Кем үлһә...............................................
Хафа....................................................
Нисек?..................................................
Ниңә?...................................................
Булһам йәшен.....................................
Дуҫлыҡ.................................................
Ҡурҡыу.................................................
Мөхәббәт.............................................
Йырсы теләге......................................
Иш иттем............................................
Араҡыны яҡлау...................................
Араҡы ҡолдарының йыры....................
Әсегән сөгөлдөр, сөсөгән бригадир....
Атым менән һөйләшеү...............................
Мүскә......................................................
Шағир ҡайғыһы........................................
Өлгөрөү...................................................
Ысын шағир һәм мин...............................
Шиғыр яҙам.............................................

**1958**

МӘҪӘЛДӘР ҺӘМ МИҪАЛДАР
Селәүсен һәм себештәр.........................
Төш.........................................................
Комсомолка Һәҙиә.................................
Айыу — етәксе.......................................
Талант һәм талап...................................
Ҡунаҡсаһын ҡайғыртҡан........................
Ҡуян — бригадир...................................
Әптерәй..................................................
Бер өйәңке һәм имән.............................

**1959**

Тормош юлы...........................................
Хәтәр хәл................................................
Күҙ нурымды..........................................
Гөлбәҙәр.................................................
Кем ул?..................................................
Балта.....................................................
Хөкөм.....................................................
Тәбиғәт тауышы....................................

**1960**

Яҙ шатлығы..............................................
Беҙҙең менән..........................................
Һалҡын елдәрҙә......................................
Юғалған моңдар......................................

**1961**

Хыял.........................................................
Шишмә.....................................................
Был ҡулдар...............................................

**1962**

Халҡым рухы.........................................
Күк күкрәүе һәм бала.............................
Ямғыр......................................................
Ҡар бөртөгө............................................
Юлдар, юлдар.........................................
Кеше булыу.............................................
Моң тураһында.......................................
Һағыш.....................................................
Шәүәли....................................................
Ике себен................................................
Ҡотос булған космонат...........................
Һунар билеты..........................................
Туҡран.....................................................
“Инсафлы” Кәзә......................................
Ҡаһарманлыҡ ҡиссаһы...........................
Мажаралы Ғәпкәләй...............................
Егеткә.....................................................
Көҙ..........................................................
Баһадир..................................................
Бурыс......................................................
Хәтәр хәл...............................................

**1963**

Нурланыу.................................................
Дуҫтарҙы күмәк тойоу.............................
Әйтмә.......................................................
Ила, балам................................................
Төнгө хәбәр.............................................
“Хәжәтле” хитап......................................
Көҙгө төндә уйланыу...............................
Мал ҡолона.............................................
Ер ауазы..................................................
Дәрт, моң..................................................
Ҡайғылы шатлыҡ.......................................
Таң нурҙары..............................................
Аҡыҡ ҡар...................................................
Ғүмер........................................................
Мәңгелек сере...........................................
Бала һаҡлау...............................................
Дуҫым.......................................................
Ишеттем мин..............................................

**1964**

Уйҙар............................................................
Буранлы юлда..............................................
Мостай Кәримгә...
Әгәр..............................................................
Милиция иптәшкә өндәшеү.........................
Химия һәм игенсе.........................................
Далам юлында..............................................
Йәремә..........................................................
Ышаныс.........................................................
Ҡайберәүҙәр.................................................
Бик кәрәгер ине............................................
Был әҙәм.......................................................
Яҙғы уйланыуҙар..........................................
Ҡаҫмарт һыуы..............................................
3-ҙең ҡәбер ташына.....................................
Фатҡулла......................................................
Ҡара күҙҙәр..................................................
Беҙҙең быуын...............................................

“ПОРТРЕТТАР” ШӘЛКЕМЕНӘН
1. Кәримәкәй һылыу.......................................
2. Ирәндек........................................................
3. *Ленька — Лүңке*...........................................
Ҡара йөрәктәргә............................................
Үтә һиҙгер....................................................
Һөйөр булһаң................................................
Оялма һин.....................................................
Мин дә тыуҙым.............................................
Күңелем.........................................................
Сәскәләрҙе һөйһәң.......................................
Сәсеүсе.........................................................
Төңөлмәгеҙ...................................................
Өмөт..............................................................
Мең хаҡым бар.............................................
Рәмиҙән........................................................
Һөҙөмтә........................................................
Хаҡлыҡ юлы.................................................
Ут.................................................................
*Ләшә*............................................................
Нурҙар менән моңдар..................................
Сабыйлыҡ.....................................................

Яҙһын яҙ мыш............................................
Моң сиртмәгеҙ............................................
Аҫыллығын тойоп.......................................
Күренештәр...............................................
Үлеү менән Ҡалыу араһы..........................
Ашламалы фашлама..................................

**1965**

Далам ҡылғаны..........................................
Ҡайтам!......................................................
Каруанһарай...............................................
Манара.......................................................
Һағыныу.....................................................
Елдерт, поезд!............................................
Тирмән.......................................................
Ҡояш-солтан һәм көтөүсе..........................
Йылантау....................................................
Юҡ, мин түгел тамсы.................................
Тимерлектә................................................
Болоттар....................................................
Болондарым, ҡырҙарым............................
Дуҫлыҡ......................................................
Селләлә.....................................................
Ҡауын телеме............................................
Дала һылыу................................................
Ҡайғым.......................................................
Юл-билғауыр..............................................
Апрель йыры.............................................
Тере тупраҡ...............................................
Көлмә, бәндә!............................................
Ҡанаған алмағас........................................
Оҙон тирәктәр...........................................
Әлфиә.......................................................
Егетем.......................................................
Бәйгесе......................................................
Ирлек.........................................................
Их, күңелле!...............................................
Кәбәнсе йыры............................................
Минең Насип ағайым................................
Ырҙында...................................................
Көҙгө моң..................................................
Тирәктәрем...............................................

Сыҡтым юлға.............................................
Тамсы булһам............................................
Күбәләгем..................................................
Ҡаңғырыу...................................................
Дәғүә.........................................................
Дау ҡошо...................................................
“Табип” таҡмаҡтары..................................
Эскәмйәлә.................................................
Үпкәләмә...................................................
Ырымбурым ҡапҡалары............................
“Туҡыл-туҡ”...............................................

**1966**

Һөйөү.......................................................
Әсәйем...................................................
Бөрө еле.................................................
Шырпы....................................................
Мөхәббәт һәм нәфрәт............................
Кеше хаҡы..............................................
Таш имән................................................
Беренсе ҡар...........................................
Үле тимер...............................................
Ҡарлуғаскай ҡара...................................
Ҡыҙҙар.....................................................
Әсәйем кис ултыра................................
Күк күкрәүе.............................................
Уйҙарым.................................................
Сәғәт уғы................................................
Саҡҡылар...............................................

**1967**

Эшләпә..................................................
Яҡтыкүл.................................................
Олатай...................................................
Саҡҡы-соҡҡолар....................................
Бишек янында.......................................
Эт йәнле................................................
Елкән.....................................................
Кәкре тырма..........................................

**1968**

Ҡаға йөрәгем.........................................
Башҡорт толпары.................................
Ленин..................................................
Титан..................................................
Ләйсән.................................................
Һылыу ҡыҙға инәлеү.............................
Йәнтирәк.............................................

**1969**

Ашығығыҙ, кешеләрем!........................
Беләм..................................................
Моңһоу сәфәр.....................................
Һаҡмар һыу.........................................
Ҡамғаҡ................................................
Кран-торналар....................................
Өҫтөнбикә..........................................
Ауылыма.............................................
Үктәбер...............................................
Йөрәк, Ер............................................

**1970**

Булды, булды......................................
Күксәпсек...........................................
Арена.................................................
Галлей кометаһы................................
Халыҡ................................................
Бауыр ташы.......................................
Бәхет һарайы....................................

**1971**

Егерме икеһе......................................
Яңы түгел...........................................
Ҡыҙыл планета...................................
Осорт, атым!.......................................
Игенсе һәм йөҙөмсө............................
Үлем...................................................

Баррикада.........................................
Уралда таң..........................................

**1972**

Уралыма...........................................
Тилереү.............................................
Сеңләп түгел.....................................
Сәсрәүем..........................................
Талисман..........................................
Доктор Р. З. Шәрәфитдиноваға.........
Даһи.................................................
Ейеүсе...............................................
Ҡабаҡ................................................
Күҙ хаҡында һүҙ..............................
Фидель..............................................
Уралыма ҡая.....................................
Арыҫлан............................................
Эт күңеле..........................................
Көҙ....................................................
Америка йондоҙҙары.........................
Ҡырҡ йәшем тулғанда әйткән һүҙ......

**1973**

Күк күлдәк.........................................
Ҡара төн, күк томан...........................
Галстук.............................................
Умырзая...........................................
Нәсихәт............................................
Кирә тарттым....................................
Һәйкәл..............................................
Алмас................................................
Йәйғор..............................................
Океан арты өкөләре..........................
Һары япраҡтар йыры.........................
Яраланған бөгәл...............................
Алһыу алма, йөнтәҫ ҡул....................
Сиктәр...............................................
Күҙе тонған ҡорҙашҡа.......................
Мәрҫиә.............................................
Альенденең ал күлдәге.....................

Эшсе исеменә мәҙхиә.......................
Төртмәләләр.....................................

**1974**

Көләс Ҡояш.....................................
Трамвайсы ҡыҙ...............................
Ташсы һылыу..................................
Дауыллы державам.........................
Тоғролоҡ........................................
Ырымбур — Быҙаулыҡ поезында......

**1975**

Йәш быуынға....................................
Еңеү.................................................
Аҡ шиғыр..........................................
Йәй көнө...........................................

**1976**

Беләм...............................................
Яңғырауыҡ һүҙҙәр............................
Бөтәһенә лә мин үҙем килдем.........
Йәшәү..............................................
Сифат, эффектлылыҡ.....................
Яҙғы хистәр.....................................
Октябрьский — дан ҡала................
Пиночет кадриле.............................
Салауат...........................................

**1977**

Азатстан...........................................
Ябай һалдат.....................................
Йондоҙ йыры...................................
Партбилет....................................
Йорт..................................................
Аҡ күгәрсен, күк күгәрсен................
Комбайнер иҫтәлегенә.....................

Ҡыҙыл поезд....................................
Тауыш..............................................
Шиғыр..............................................
Олон.................................................
Март.................................................
Н. Доризонан ике шиғыр.................
Фажиғә............................................
Диссидент.....................................
Төрттөрмәләр.................................
Алтын көҙ.......................................
Икмәк..............................................
Башҡорт ҡыҙы.................................
Их, һөйөргә ине...............................
Күк күлдәкле һылыуға....................
Ҡарғыш...........................................
Был илаһи тауыш............................
Теләк..............................................
Аҡ ҡайғы........................................
Шағирәгә........................................
Ут уйыны........................................
Күк иҙел һылыуына........................
Сер..................................................
Роман.............................................
Күҙ ҡараһы.....................................
Саған..............................................
Кристалл........................................
Таңғы йыр......................................
Һағыныу.........................................
Яҙ йыры..........................................
Алһыу елкән...................................

**1978**

Дуҫтарға.........................................
Башҡортмон...................................
Тыуған ер.......................................

ЯНҒАНТАУ ДӘФТӘРЕНӘН

Янғантау йыры...............................
Йүрүҙәндең аҡ кереше..................
Ҡаратау..........................................
Салауат ерендә.............................

Ҡурай..........................................
Һыҡтау..........................................
Ҡорғаҙаҡ......................................
Йәшен..........................................
Күк мәтрүшкә..............................
Һүрәт...........................................
Йор кәмә......................................
Хат..............................................
Әрем............................................
Ир ҡоро........................................
Хат яҙ, тиһең................................
Кесерткән....................................
Гөлйемеш....................................
Аҡ муйын.....................................
Туҙбаш.........................................
Күбекташ.....................................
Ҡара тал......................................
Шәфҡәт туташы...........................
Ҡайын-тай...................................
Ҡарға баҙары..............................
Етегән.........................................
Этюд...........................................
Ҡарт имән...................................
Ҡояш яланы................................
Йүрүҙән.......................................
Ҡырҡбыуын.................................
Таш күпер...................................
Бәйге...........................................
Ҡарағай.......................................
Йүрүҙән томандары......................
Ҡурай аҡланы..............................
Ҡымыҙ.........................................
Ярты............................................
Нескәреү.....................................
Көтөүсе.......................................
Алыш..........................................
Йөрәк йыры..................................
Хушлашыу...................................
Тракторсы ҡыҙ............................

**1979**

Илемә..........................................

Хоҙай.........................................
Аҡ көндәрем, пак төндәрем..........
Диңгеҙҙәргә китәм........................
Диңгеҙ..........................................
“Кәкре тырма”лыға.......................
Һөйөү — көйөү.............................
Зәңгәр томан...............................
Зәйнәб апай Биишеваға..............
Тралсылар йыры..........................
Үпкәләмә үпкәнгә........................
Әрмеләргә барып........................
Әсәм теле...................................

БАБАЛАР ЯДКӘРЕ

Күҙһеҙҙәр....................................
Ҡояш теле..................................
Маг баба.....................................
Ҡояш ҡорамы..............................
Ишет, йәш улан...........................
Ер-һыу, Ҡояш, Кеше, Әпәкәй......

**1980**

Яңғыҙ...............................................
Йәмшегән..........................................
Ошо ер..............................................
Ынйы сәскәһе....................................
Ярсыҡтар...........................................
Аҡ ҡайын...........................................
Космонавт монологы..........................
Ҡырағайлығым...................................
Әрепләшеү.........................................
Янғантауҙағы ямғыр..........................
Ҡайын еләге......................................
Һылыуға............................................
Ер әйләнә..........................................
Асылыу..............................................
Халыҡ тамыры..................................
Боронғо тарихтан.............................
И Илаһым..........................................
Бушлыҡ.............................................
Бесәй-сысҡан уйыны........................
Старт.................................................

Башҡорт космонавты..........................
Бахырйән.............................................
Янғантау баҫҡысы...............................
Йомолоу..............................................
Тик бер йән.........................................
Янғантау ҡайындары...........................
Рәмигә.................................................
Мәрйәм-ана тоҡомо............................
Әсәйгә хат..........................................

**1981**

Быума битлек....................................
Ҡарышыу...........................................
Телһеҙҙәр.........................................
Ҡоралай............................................
Меңҡыяҡ...........................................
Ҡара йондоҙ......................................

**1982**

Уралым.............................................
Бирсәткә...........................................
Әсәкәйем..........................................
Донбасс тупрағында..........................

**1984**

Күлдәк..........................................
Ҡырҡ йыл......................................
Томбойоҡтар...............................

**1986**

Киҫәтеү..........................................
Демагог..........................................
Туғанлыҡ.........................................

**1987**

Бөйөк Филал тураһында баллада...

**1996**

Карап...........................................
Тәре.............................................
Ике аҡҡош...................................
Урман..........................................
Керәм ялҡындарға.......................
Кисер мине..................................
Урыҫйән........................................
Бүлешеү........................................
Биреле Әхпәп................................
Мысай...........................................
Йылан-таяҡ...................................
Әмәлдәр........................................
Ҡәҙер.............................................
Кәкүк.............................................
Шүрәлеләр....................................
Ошолоҡ.........................................
Кимәлдәр......................................
Белем............................................
Гөнаһ шомлоғо...............................
Уҡсы.............................................
Һ.б. (“Һәм башҡалар”.)................
Тирәк тибрәнеүе...........................
Хаҡиҡәт........................................
Серәкәй........................................
Тәреләнгән аждаһа......................
Тау, Дала......................................
Ҡарабай менән Һарыбай.............
Бағана..........................................
Этлек............................................
“Топор”ло төш..............................
Шағирҙар.....................................

**1997**

Рәмиҙе юкһыныу............................
Аптырама.......................................

**1999**

Башҡортостан — гөлөстан................
Тере ҡуҙҙы.........................................
Байҙар байый....................................
Ике меңенсе йыл................................
Ҡыу уçаҡ...........................................
Барҡылдаҡ........................................
Байрамсылар....................................
Йәншишмәм.......................................
Ике флаг............................................
Мәҙхиә..............................................
Шайморатов генерал........................
Нәшриәт — мәхшәриәт....................
Быума быуат....................................
Нурлы карап......................................
Агиш Ғирфановты ерләшеп ҡайтҡас…

**2001**

Үҙем................................................
Ҡалтыр-ҡолтор.................................
Яҙмышым.........................................
Еүешлек...........................................
Ҡорҙаштар.......................................
Арба.................................................
Серем минең....................................
Алты.................................................
Өйөр................................................
Өшәләктә өшәнеү...........................
Тырпайған.......................................
Ҡыуаныс..........................................
Васыят һымағыраҡ.........................

**ҺУҢҒЫ ЙЫЛДАР ҺУЛЫШЫ**

Рәсәй тигән…………………………..
Аттар ките……………………….
Берәү килә, берәү китә… ………
Милләтһеҙ ғилләттәргә …………
Татарник…………………………..

Тарих барлағыҙ…………………..
Мызылдауыҡ Мәҙехйән…………
Мөстәнлеккә мәҙхиә………………
Аҙғынлыҡ…………………………
Көшәлекле Араммал………………
Шағирҙар, һәй, шәп ирҙәр!..............
Загсбюро залында егет һайлау заңында....
Кеше бәхете..................................................
Баҙарҙа.......................................................
Ашҡа төшкән тараҡан...............................
Һайлау-майлау ҡоштары.........................
Тилсәле билсәндәргә................................
Патриот тәҡдимдәре..................................
ТутыйҒоштар шиғырлай...........................
Ҡытлыйәндәр ҡытлығы..............................
Бахырлыҡ......................................................
Ҡулсырлыҡ..................................................
Крымнаш.....................................................
Ялмандар......................................................
Кроншпан-Крематорский.........................
Мөһөр...........................................................
Көпәш-кәбәк.............................................
Ҡаза............................................................
Конституция.............................................
Иблес, батша, ҡара тап..........................
«Теге донъя»нан репортаж....................
Көфөр Күмеркеләтов.........................
Йыртҡыслыҡ..........................................
Һәйкәл....................................................
Дуҫлыҡ..................................................
Маклерҙар................................................
Хәнйәр.....................................................
Йәнәстем................................................
Һуңғы юл...................................................
Маңҡортлоҡ............................................
Донъя бөтөн........................................
Йөрәк........................................................
Кеше хаҡы...............................................
Әҙәбиәт йылы был.................................
Шыйыҡлыҡ.............................................

## ТӘНӘЙҘӘРГӘ «МӘМӘЙ»ҘӘР

Ошо ерҙә йәшәгән............................
Балалар баҡсаһында.........................
Башҡортостан -- илкәйем................
Томдың ҡыҙыл флагы........................
Ван Линь............................................
Ил йоҙағы -- үҙебеҙ............................
Ғәрәп туғандар.................................
Атагуальпа........................................
Бәхет ҡалай тыуа..............................
Пионер маршы.................................
Аҡ елкән...........................................
Көсөк................................................
Бәрәңге...........................................
Гөбөргәйел ҡыҙҙары........................
Тиле-тиле Төйләгән.........................
Ике йондоҙ тоташҡан......................
“Ем-ем” итә йондоҙҙар....................
Ҡолонҡай........................................
Ишкән ҡалас...................................
Тимеркәй........................................
“Әтәс” Әсәт.....................................
Һипкелле.........................................
Күсәтсе Ғиззәт................................
“Күҙ-колаҡ” Барый..........................
Уҙаманлы ун йомаҡ........................
Отҡор малай...................................
Тартай табыр теленән...................
Аҡсарлаҡ............................................
Сиңерткә............................................
Ҡыңғырау...........................................